Фәнүзә Нәҙершина

# РИУӘЙӘТ ҺӘМ ЛЕГЕНДАЛАРҘА – ХАЛЫҠ ТАРИХЫ



Фәнүзә Нәзерщина

# РИУӘЙӘТ ҺӘМ ЛЕГЕНДАЛАРҘА – ХАЛЫҠ ТАРИХЫ

Зәйнәб Биишева исемендәге "КИТАП" нәшриәте

ӨФӨ · 2011

УДК 821.512.141.0
ББК 83.3 (2 Рос=Баш)
Н 94

Издано при финансовой поддержке Федерального агентства по печати и массовым коммуникациям в рамках Федеральной целевой программы «Культура России»

Нәҙершина Ф. А.
Н 94 Риүәйәт һәм легендаларҙа халыҡ тарихы. Тулыландырылған баҫма. — Өфө: Китап, 2011, —360 бит.

ISBN 978-5-295-05201-9

Фольклор прозаһының тарихи йүнәлешле тармағын өйрәнеүгә бағышланған был китапта риүәйәт, легенда, йыр-риүәйәт, хөрәфәти хикәйә һәм хәтирә жанрҙары тикшерелә. Боронғо (архаик) ҡараштар саҡтыһын һаҡлаған миф-легендаларға, халыҡ тормошондағы әһәмиәтле ваҡиғаларҙы сағылдырған тарихи риүәйәттәргә айырыуса ҙур урын бирелде. Көнкүрешкә бәйле ҡайһы бер сюжеттар ҙа иғтибарҙан ситтә ҡалманы. Китаптың «Ҡушымта» бүлегендә мотивтар күрһәткесе бирелде (рус һәм инглиз телдәрендә).

Баҫма башҡорт халыҡ ижады, башҡорт халҡының рухи мәҙәниәте менән ҡыҙыҡһыныусылар өсөн файҙалы ҡулланма буласаҡ.

УДК 821.512.141.0
ТП-148/11 ББК 83.3 (2 Рос=Баш)

ISBN 978-5-295-05201-9
© Нәҙершина Ф. А., 2011

## АВТОР ТУРАҺЫНДА

Фәнүзә Айытбай ҡыҙы Нәҙершина — башҡорт фольклорының көнүҙәк мәсьәләләрен өйрәнеүгә ҙур өлөш индергән ғалимдарҙың береһе, филология фәндәре докторы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре, Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты, Салауат Юлаев ордены кавалеры. 200-ҙән ашыу ғилми хеҙмәт авторы (шул иҫәптән 35 китап: монографиялар, фольклор томдары һәм йыйынтыҡтар). Уның «Халыҡ һүҙе» (1983), «Халыҡ хәтере» (1986), «Халыҡ хәтере: башҡорт халыҡ риүәйәт, легендаларының тарихи ерлеге, жанр үҙенсәлектәре» (2006) исемле монографиялары афористик жанрҙарҙы һәм тарихи прозаны сағыштырма планда өйрәнеү әлкәһендә мөһим аҙым булды. Ул — «Башҡортостан тарихы: боронғо дәүерҙәрҙән XIX быуаттың 60-сы йылдарына тиклемге осор» (1996), «Салауат Юлаев: энциклопедияһы» (2004), «Башҡорт энциклопедияһы» (2005—2010), «Башҡорт халҡының тарихы» (2009) китаптары авторҙарының береһе. «Башҡорт халыҡ ижады» серияһында башҡорт һәм рус телдәрендә донъя күргән «Йомаҡтар» (1979, 1993), «Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр» (1980, 1993, 2006), «Риүәйәттәр, легендалар» (1980, 1987, 1997) томдары — юғары ғилми кимәлдә әҙерләнгән хеҙмәттәр. Фәнүзә Айытбай ҡыҙының «Русса-башҡортса мәғәнәләш мәҡәлдәр һүҙлеге» (2008), «Алтын ҡумта» (1985), «Рухи хазиналар» (1992), «Башҡорт халыҡ көйҙәре, йырлы-бейеүле уйындар» (1996) исемле һ. б. йыйынтыҡтары ла ыңғай баһа алды.

Ғалимә «Халҡым йыры» (1995) (музыкаль өлөшөн әҙерләүсе — Флүрә Килдейәрова), «Башҡорт халыҡ йырҙары, йыр-риүәйәттәре» (1997), «Башҡорт халыҡ риүәйәттәре, легендалары» (2001), «Башҡортса-инглизсә-русса мәғәнәләш мәҡәлдәр һәм әйтемдәр һүҙлеге» (2002, авторҙашы менән), «Урал батыр» (2003, 2005), «Салауат Юлаев — башҡорт фольклорында» (ике томда, 2008), «Башҡорт халыҡ ҡобайыр-иртәктәре» (2010) китаптарын башҡорт, рус, инглиз телдәрендә баҫтырып сығарып, башҡорт фольклоры ғилемендә яңы йүнәлешкә нигеҙ һалды. Фәнүзә Нәҙершина тарафынан әҙерләнгән халыҡ ижады материалдары (риүәйәттәр һәм легендалар, йомаҡтар, мәҡәл һәм әйтемдәр) һәм мәҡәләләре төрөк телендә лә донъя күрҙе.

Ф. А. Нәҙершина фольклор, әҙәбиәт ғилеме әҫәрҙәрен рус теленә тәржемә итеүҙә ҡатнаша. Донъя, элекке Союз күләмендә һәм әле лә уҙғарылған ғилми конгрестарҙа, конференцияларҙа докладтар менән йыш сығыш яһай.

Ғалимә йәмәғәтселеккә 1984—1990 йылдарҙа күрһәтелгән «Йыр тарихы —халыҡ тарихы» исемле телевизион тапшырыуҙарҙың авторы һәм алып барыусыһы булараҡ та таныш. Башҡортостан телевидениеһы төшөргән «Рухи хазиналар әҙенән» (Асылыкүл, Дим буйы башҡорттарының ижады), «Күңелдәре тулы моң унын» (ҡурайсы Кәрим Дияров хаҡында) тигән документаль фильмдар ҙа Фәнүзә Нәҙершина авторлығында ижад ителде.

## ИНЕШ

Һәр халыҡтың ижадында кешелектең тарихи хәтерен мәңгеләштергән һәм шуның менән ифрат ҙур әһәмиәткә эйә булған жанрҙар бар. Риүәйәт, легенда һәм уларға яҡын башҡа хикәйәләр тап ана шундайҙарҙан. Бындай хикәйәләрҙең ижтимағи вазифаһы халыҡтың үҙе тарафынан ғәжәп тапҡыр рәүештә «тарих» тигән тәрән мәғәнәле атама менән әйтеп бирелгән. Фольклористикала уларға ҡарата йыш ҡына «тарихи проза» тигән термин ҡулланыла. Әлбиттә, был тиккә генә түгел: риүәйәт, легендаларҙың жанр тәбиғәте махсус рәүештә күренештәрҙең, хәл-ваҡиғаларҙың килеп сығышын аңлатыуға, мәғлүмәт тапшырыуға, тарих һөйләүгә нигеҙләнгән. «Донъя ҡайһылай яралған? Ҡояш ниңә юғары? Айҙағы таптар нимәнән килә?.. Ата-бабаларыбыҙ, беҙ үҙебеҙ кемдәр? Тәүтөйәгебеҙ ҡайҙа?» — ошондайыраҡ күп һанлы һорауҙарға яуап биреү бурысын үҙ өҫтөнә алған хикмәтле хикәйәләр ул легендалар һәм риүәйәттәр. Шуға ла уларҙы белеү йола талаптары рәтенә индерелгән боронғо ата-бабаларыбыҙ тарафынан. Был хаҡта М. В. Лоссиевский бына ни тип яҙып ҡалдырған: «Элек-электән төплө урынлашҡан йола буйынса, башҡорт бөтәһенән дә элек өс нәмәне яҡшы белергә тейеш. Шуның береһе —үҙ ырыуыңдың шәжәрәһен, тарихын белеү, икенсеһе — йондоҙҙарҙың «серенә» төшөнөү һәм уларға ҡарап эш итә белеү, өсөнсөһө — халыҡ риүәйәттәрен, йырҙарын белеү» (174, 275—276). Ысынлап та, риүәйәт һәм легендаларҙың танып белеү әһәмиәте баһалап бөтөргөһөҙ. Легендаларҙы, риүәйәттәрҙе һәм улар системаһына ингән башҡа төр хикәйәләрҙе бергә туплап, тәртипкә һалып, төркөмләп ҡараһаң, күп планлы һәм бик тәрән йөкмәткеле, киң эпик ҡоласлы әҫәр күҙ алдына баҫа. Уны ғилми яҡтан ентекле өйрәнеү — халыҡ тарихының төрлө дәүерҙәрен байҡау ул. Бындай эш хатта архаик осорҙоң ҡайһы бер һыҙаттарын төҫмөрләргә, халыҡтың тарихи ҡараштарын билдәләргә форсат бирә.

Үҙенсәлекле һүҙ сәнғәте әҫәрҙәре булараҡ, халыҡтың фекерләү кимәлен, эстетик ҡараштарын сағылдырыу йәһәтенән дә риүәйәт, легендалар әһәмиәтле сығанаҡ булып тора. Хәҙерге осорҙа, бер яҡтан, рухи битарафлыҡҡа әйҙәү, икенсе яҡтан, уға ҡаршы тороу рәүешендә халыҡтың үҙ тарихын, үҙ булмышын белеүгә ынтылышы көсәйә

башлаған шарттарҙа, ата-бабаларҙың тарихи хәтеренә, уларҙың мәҙәни мираҫына иғтибарҙы йүнәлтеүҙең мәғәнәһе айырыуса оло. Тик был мираҫҡа ғилми, тарихи күҙлектән ҡарай белеү, объектив баһа биреү шарт.

Фольклор прозаһының үҙенсәлекле бер тармағын өйрәнеүҙең көнүҙәк бурыстар иҫәбенә инеүе шул тармаҡҡа ҡараған жанрҙар тәбиғәтен ғилми-теоретик яҡтан тикшереү ихтыяжынан да килә. Был тәңгәлдә башҡорт фольклористикаһында байтаҡ ҡына эштәр башҡарылған (ул хаҡта артабан һүҙ буласаҡ), әммә тикшереләһе проблемалар ҙа аҙ түгел әле.

Улар иҫәбенә тарихи прозаның жанрҙар составын аныҡлау, риүәйәт, легенда, хөрәфәти хикәйә, хәтирә жанрҙарының тәбиғәтен асып биреү, был жанрҙарҙың үҙ-ара һәм башҡа жанрҙар менән бәйләнеш мәсьәләләрен яҡтыртыу, шул бәйләнештәр нигеҙендә хасил булған жанр төрҙәренең тәбиғәтен һәм боронғо тамырҙарын юллау кеүек мәсьәләләр инә.

Халыҡ хикәйәләрен сюжеттары буйынса төркөмләү, легенда, риүәйәт һәм уларға яҡын башҡа төр хикәйәләрҙең ысынбарлыҡты сағылдырыу рәүешен, йәғни тарихи ерлектәрен өйрәнеү ҙә зарур. Был инде тарихи ҡараш талап иткән ифрат ҡатмарлы мәсьәлә, ул материалды үҙ ерлегендә генә түгел, ә бәлки, башҡа бик күп халыҡтарҙың ижады менән бәйләнештә ҡарап, үҙенсәлекле һәм уртаҡ, дөйөм күренештәрҙе асыҡлауҙы һорай.

В. Я. Пропп, П. Г. Богатырев, К. В. Чистов, Б. Н. Путилов, С. Н. Азбелев, В. М. Гаңак, В. П. Аникин, Е. М. Мелетинский, И. Н. Кравцов кеүек ғалимдарҙың дөйөм теоретик һәм методологик характерҙағы хеҙмәттәре, В. К. Соколова, Э. В. Померанцева, Х. Г. Короглы, С. А. Каскабасовтарҙың фольклор прозаһының айырым тармаҡтарына бағышланған эштәре ҙур әһәмиәткә эйә («Библиография»ны ҡарағыҙ). Тикшеренеүҙә ҡайһы бер алыҫ сит ил ғалимдарының хеҙмәттәренә мөрәжәғәт итеү ҙә кәрәк булды.

Әлбиттә, иң мөһим сығанаҡ хеҙмәтен күп йылдар буйы тупланған фактик материалдар һәм башҡорт фольклор ғилеме өлкәһендәге тикшеренеүҙәр үтәне.

Материалдар төрлө. Уларҙың бер төркөмө саф фольклор яҙмаларынан торһа, икенселәре шәжәрәләр, тарихи-этнографик әҙәбиәт эсендә авторҙарҙың теге йәки был фекерен дәлилләү өсөн ҡулланылған ҡыҫҡа сюжеттарҙан ғибәрәт.

* * *

Башҡорт легендалары һәм хөрәфәти хикәйәләре хаҡындағы тәүге мәғлүмәттәр X быуатҡа ҡайтып ҡала. 922 йылда башҡорттар араһында булып киткән ғәрәп хәлифәлеге илсеһе Әхмәт Ибн-Фаҙлан яҙмаларында башҡорттарҙың мәжүси ышаныуҙары хаҡында ифрат ҡиммәтле мәғлүмәттәр бар. Боронғо башҡорт ҡәбиләләренең ҡоштарға

табыныуын дәлилләү ниәтендә, сәйәхәтсе атаҡлы «Сыңрау торна» легендаһының ҡыҫҡаса йөкмәткеһен килтерә (139, 131[1]).

Риүәйәт һәм легендаларҙың үрнәктәрен урта быуаттарҙың үҙенсәлекле әҙәби тарихи ҡомартҡылары булған шәжәрәләрҙә осратырға мөмкин. Революцияға тиклем башҡорт халҡының тарихы һәм мәҙәниәте менән ҡыҙыҡһынған ҡайһы бер ғалимдар (М. Лоссиевский, П. Назаров, В. Юматов) хатта шәжәрәләрҙең үҙҙәрен «риүәйәт», «хроника», «тарихи яҙма» тип атаған (174, 368—385; 200, 54, 84; 336, 45—48). Башҡорт шәжәрәләрен ентекләп өйрәнгән тарихсы-этнограф Р. Ғ. Кузеев та генеалогия йылъяҙмаларында риүәйәт һәм легендаларҙың йыш осрауын билдәләй һәм уларға таяна (41, 9, 178, 185, 187). Ысынлап та, шәжәрәләрҙәге исемдәр теҙмәһе теге йәки был ырыу башлығы заманында булып үткән тарихи ваҡиғаларҙы, ҡәбиләырыу тормошон ҡушып һөйләү, уларға бәйле рәүештә халыҡ телендә йөрөгән төрлө риүәйәт, легендаларҙы иҫкә алыуҙар менән аралашып киткеләгән. «Башҡорт шәжәрәләре» китабына ингән шәжәрәләрҙең күпселеге нәҡ бына шундай ысулға ҡоролған. XVI быуатта яҙыла башлаған Юрматы ырыуы шәжәрәһе, мәҫәлән, туранан-тура мифологик легенданан башлана: «Борын заманда бу ердә нуғай ирде. Зәй, Шишмә дигән ерләрдә һәр тарафдан күчеп йөрөрләр ирде. Анча нәгаһ ул ердә аждаһа йылан бәйдә булды. Бер ничә көнлек ердән ятар ирде. Мыңар куб йыллар кичде, аның берлән орыш ҡылдылар. Күб хәлайыҡ һәләк булды. Шунан соң ул йылын ғәйеб булды. Хәлайыҡ оманда ҡалды...» Ошо шәжәрәгә ингән әүлиә ҡәбере хаҡындағы хикәйәләү ҙә боронғо дини мифологик легендаларға барып тоташа. Шәжәрәнең юрматылар тарихына ҡағылған төп өлөшө иһә халыҡ телендә йөрөй торған тарихи риүәйәттәргә бик яҡын тора (41, 27—28).

Ҡыпсаҡ ҡәбиләһенең Ҡарағай-Ҡыпсаҡ ырыуы шәжәрәһе «Бабсаҡ менән Күсәк бей» исемле эпик ҡомартҡы йөкмәткеһен риүәйәт формаһында теркәп ҡалдыр ыуы менән иғтибарҙы йәлеп итә (41, 110-111).

Ҡайһы бер шәжәрәләргә, хатта төрки телендә һөйләшеүсе күп кенә халыҡтарға билдәле булған легендаларҙың өҙөктәре, йәғни дөйөм төрки сюжеттар (әйтәйек, төрки халыҡтарының сығышы хаҡындағы риүәйәт һәм легендалар) килеп инә (41, 93).

Ҡыҫҡаһы, шәжәрәләрҙе (бында исемдәр теҙмәһенән генә торған текстар иҫәпкә алынмай) башҡорт халҡының риүәйәт һәм легендаларын өйрәнеүҙә мөһим бер сығанаҡ итеп ҡарарға хаҡлыбыҙ.

Шулай ҙа тарихи-этнографик әҙәбиәт эсендә һаҡланып ҡалған материалдар араһында төп урынды XVIII—XIX бб. ғалимдарының яҙмалары биләй.

[1] Йәйә эсендәге тәүге һан һылтанма яһалған хеҙмәттең был китапта бирелгән «Библиография»лағы рәт һанын, өтөрҙән һуң торғандары уның биттәрен күрһәтә. Нөктәле әтерҙән һуң килгән һандың тәүгеһе — сығанаҡты, икенсеһе бит һанын күрһәтә.

Халыҡ хикәйәләренең танып белеү әһәмиәтен аңлап, уларға мөһим информация сығанағы итеп ҡараған тарихсыларҙан В. Н. Татищев менән П. И. Рычковтың эшмәкәрлеге иғтибарҙы йәлеп итә. Башҡорттарҙың килеп сығышы, уларҙың артабанғы яҙмышы, рус дәүләтенә ҡушылыу кеүек мәсьәләләргә ҡағылғанда, Башҡортостандағы ер-һыу атамаларына бәйле күҙәтеүҙәрендә был ғалимдар, ғилми хеҙмәттәр менән бергә, халыҡ риүәйәттәре һәм легендаларына мөрәжәғәт иткәндәр (281. Т. 4, 66; Т. 7, 402; 252, 372-377, 380-381).

XVIII быуаттың икенсе яртыһында Урал буйлап сәйәхәттә йөрөгән ғалимдарҙың (П. С. Паллас, И. И. Лепехин) юлъяҙмаларында ырыу атамаларына, ер-һыу исемдәренә бәйле риүәйәт һәм легендалар хаҡында мәғлүмәттәр осрай (217, 39; 168, 36 — 64).

XIX быуаттың беренсе яртыһында шағир-декабрист П. М. Кудряшев, атаҡлы лексикограф В. И. Даль, крайҙы өйрәнеүсе В. С. Юматов һ. б. алдынғы ҡарашлы рус ғалимдарының башҡорт халҡының ғөрөф-ғәҙәттәренә, риүәйәт һәм легендаларына бағышланған махсус мәҡәләләре донъя күрә (157, 65 — 82; 103, 97—119; 335, 297—298; 336, 45—48). Ҡыҙғаныска ҡаршы, был мәҡәләләрҙә риүәйәт һәм легендаларҙың тулы текстары, уларҙың ҡайҙа, ҡасан, кемдән яҙылып алыныуы хаҡында тулы мәғлүмәттәр юҡ. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, рус ғалимдарының яҙмалары халыҡтың ул замандағы ижад репертуарында ниндәйерәк характерҙағы риүәйәт һәм легендалар йәшәүен бер ни тиклем күҙ алдына килтерергә мөмкинлек бирә. Китапта был яҙмаларҙың ҡайһы берҙәре варианттар, өҫтәмә материал булараҡ ҡулланылһа, бәғзеләре әлегәсә һаҡланып ҡалған һирәк, хатта уникаль ҡомартҡы сифатында ғилми әйләнешкә индерелде (мәҫәлән, В. И. Даль яҙып алған «Этташ» легендаһы, В. С. Юматов тарафынан ҡағыҙға теркәлгән Нуғай мырҙалары тураһындағы риүәйәт).

XIX быуаттың икенсе яртыһында Рәсәйҙә революцион-демократик йүнәлештәге ижтимағи фекерҙең көсәйеүе һөҙөмтәһендә, фән һәм мәҙәниәт әлкәһендә тыуған активлыҡ Башҡортостан ерлегенә лә йоғонтоһоҙ ҡалманы. Алдынғы ҡарашлы рус ғалимдарын башҡорт халҡының азатлыҡ өсөн алып барған көрәше, данлы тарихы, үҙенсәлекле тормош-көнкүреше, йыры һәм моңо ҡыҙыҡһындырҙы. Ф. Д. Нефедов, М. В. Лоссиевский, Р. Г. Игнатьевтарҙың Салауат темаһына мөрәжәғәт итеүе (206, 83—100; 173, 221; 122, 147—166) осраҡлы хәл түгел. Башҡорт халҡының милли геройына бағышланған мәҡәлә һәм очерктарында был яҙыусылар, тикшеренеүселәр, тарихи документтар менән бергә, ауыҙ-тел ижады әҫәрҙәренә, беренсе нәүбәттә, риүәйәт һәм легендаларға таянып эш иттеләр.

XIX быуаттың аҙағынан башлап башҡорт халыҡ ижады өлгөләрен тулы көйө ҡағыҙға теркәү йәһәтенән уңышлы аҙымдар яһала. Был тәңгәлдә С. Г. Рыбаковтың айырым яҙмаларын (250, 131—132, 138, 165—166, 175—176; 20, оп. 1, № 105, л. 31—40), А. Г. Бессоновтың үҙе үлгәндән һуң рус телендә донъя күргән йыйынтығындағы бер нисә риүәйәтте («Башҡорт тарихы», «Йәноҙаҡ батыр»—39, 335—342) билдәләп китергә мөмкин.

Башҡорттарҙың рухи һәм матди мәҙәниәте менән ҡыҙыҡһыныусы рус ғалимдары араһында атаҡлы этнограф С. И. Руденконың хеҙмәттәре лә ҙур әһәмиәткә эйә. «Башҡорттар» тигән монографияһында ла, айырым мәҡәләләрендә лә С. И. Руденко 1906 — 1907, 1912 йылдарҙа халыҡ теленән яҙып алынған күп кенә хөрәфәти хикәйәләр һәм ырым-ышаныуҙарҙы иҫкә ала (247, 314 — 327; 248, 17—31). Материалдарҙың бер өлөшөн ул «Башҡорттарҙың әкиәт һәм ышаныуҙары» тигән исем менән 1908—1909 йылдарҙа француз телендә баҫтырып сығарған (68, 10).

Октябрь революцияһына тиклемге осорҙа башҡорт риүәйәт-легендаларын, хөрәфәти хикәйәләрен яҙып алыуҙа Б. Юлыев (334, 245—248), А. Әлимғолов (14, 210—213) кеүек халыҡтың үҙ араһынан сыҡҡан һәүәҫкәрҙәрҙең исемдәрен дә телгә алып китергә кәрәк.

Ҡыҫҡаһы, үрҙә телгә алынған дәүерҙәрҙә халыҡ хикәйәләрен яҙып алып, уларҙы ғилми әйләнешкә индереү йүнәлешендә уңышлы ғына аҙымдар яһалған. Әммә риүәйәт, легенда һәм хөрәфәти хикәйәләрҙе планлы, системалы рәүештә йыйыу, өйрәнеү, матбуғатҡа сығарыуҙағы төп эштәр XX б. ғалимдары тарафынан башҡарыла. Уларҙың эшмәкәрлеге Башҡортостан ерлегендә яралған ғилми ойошмалар, ижади союздар, юғары уҡыу йорттары эсендә яйға һалынды. Дөрөҫ, быуаттың тәүге яртыһы һаман да материал туплау осоро булып ҡала. Ләкин әҫәрҙәрҙе ҡағыҙға теркәп, нәшер итеүҙә ул яңы үрҙәр яулаған үҙенсәлекле дәүер булды: был осорҙа легенда, риүәйәт, йыр-риүәйәттәр башҡорт телендә яҙып алынып, үҙ яңғыраштарында донъя күрҙеләр. Йөкмәткеләрендә бай танып белеү мәғлүмәттәре һаҡлаған йыр-риүәйәттәргә яңы тарихи-ижтимағи шарттарҙа иғтибар айырыуса көсәйҙе. Мөхәммәтша Буранғоловтың газета-журналдарҙа сыҡҡан материалдары (75; 73), Әбүбәкер Усмановтың хәрби-патриотик темаға бағышланған йыйынтыҡтары (296; 297) нәҡ шул хаҡта һөйләй.

XX быуаттың 60-сы йылдарында (ә был йылдар донъя фольклористикаһында халыҡ хикәйәләренә иғтибарҙың бик ныҡ күтәрелгән осоро) М. Х. Минһажитдинов, Ә. Н. Киреев (Кирәй Мәргән), Ә. М. Сөләймәнов тәү башлап шул заман талаптарынан сығып, студенттар өсөн уҡыу әсбабы сафында әҙерләнгән «Башҡорт легендалары» (45) исемле йыйынтыҡ баҫтырҙылар. Ҙур күләмле инеш мәҡәләлә (авторҙары — М. Х. Минһажитдинов, Ә. М. Сөләймәнов) әкиәттәр менән көләмәстәр, хөрәфәти хикәйәләр рәтенә инмәгән халыҡ прозаһы «легендалар» тип кенә билдәләнә. Әммә ошо атама менән нарыҡланған халыҡ хикәйәләренең башҡа жанрҙарға мөнәсәбәте, тарихи ерлеге кеүек мәсьәләләр буйынса заманы өсөн яңы фекерҙәр, етди күҙәтеүҙәр бар. Текстар өлөшөндә 131 легенда һәм риүәйәт урынлаштырылған.

Легенда һәм риүәйәттәрҙең айырым тармаҡтарына ҡараған проблемалар буйынса Башҡорт дәүләт университетында кандидатлыҡ диссертациялары яҙылып (272; 25), уларҙың авторҙары Ә. М. Сөләймәнов менән Б. Ғ. Әхмәтшин үҙҙәренең эҙләнеү һөҙөмтәләрен матбуғатта яҡтырттылар (269, 103-126; 270, 90-110; 331, 116-120; 23, 253-268). Башҡорт топонимик риүәйәттәренең жанр үҙенсәлектәренә

бағышланған мәҡәлә художестволылыҡ мәсьәләләрен алға ҡуйыу менән әһәмиәтле.

Университеттың рус әҙәбиәте һәм фольклоры кафедраһында Л. Г. Бараг тарафынан әҙерләнгән йыйынтыҡтарҙа (202; 263) Башҡортостанда йәшәгән төрлө милләттәрҙең ижади бәйләнештәрен өйрәнеү буйынса ҡыҙыҡлы материалдар тупланған. Был йыйынтыҡтарға ингән легенда һәм риүәйәттәрҙең ҙур ғына өлөшө башҡорт ауылдарында башҡорт информанттарынан яҙып алынған.

Беҙгә тиклем булған фактик һәм ғилми-тикшеренеү характерындағы материалдар, нигеҙҙә, ошолар.

Монография авторының халыҡ хикәйәләре менән ҡыҙыҡһыныуы «Башҡорт халыҡ ижады»ның күп томлыҡ серияһына легенда һәм риүәйәттәр томын (55) төҙөү ваҡытында (1970 йылдарҙың аҙағы) башланды. Архив яҙмаларын, баҫылған текстарҙы өйрәнеү, СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы (хәҙерге Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәге) Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ойошторған фольклор экспедицияларында (ағзалары: Мөхтәр Сәғитов, Салауат Галин, Нур Зарипов, Әнүр Вахитов, Ниғмәт Шоңкаров һәм ошо юлдарҙың авторы) риүәйәт, легендаларҙы, хөрәфәти хикәйәләрҙе йыйыуға ныҡ иғтибар бирелеүе һөҙөмтәһендә, ифрат бай материал тупланды. Уның йыйылыу территорияһы Башҡортостан менән генә сикләнмәй, башҡорттар йәшәгән Ырымбур, Силәбе, Свердловск, Пермь, Курган әлкәләрен дә үҙ эсенә ала. Халыҡ прозаһы әҫәрҙәрен, бигерәк тә уның бөтөнләй тиерлек өйрәнелмәгән тармағын— хөрәфәти хикәйәләрҙе йыйыуға беҙҙең тарафтан Башҡорт дәүләт педагогия институты (хәҙер М. Аҡмулла исемендәге университет) студенттары ла ылыҡтырылды. Был материалдарҙың күпселеге аҙағыраҡ төркөмдәргә бүленеп, күләмле инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар менән ғилми йыйынтыҡта донъя күрҙе (212, 100—173). Риүәйәт, легенда һ. б. төр хикәйәләрҙең тарихи ерлеге, жанр үҙенсәлектәре хаҡында мәҡәләләр баҫылды (190, 191—192; 191, 93—101; 192, 18—30). Эҙмә-эҙлекле рәүештә алып барылған эш халыҡ прозаһын монографик планда өйрәнеү, нәшер итеү мөмкинселеген тыуҙырҙы (211).

Һуңғы йылдарҙа башҡорт халҡының риүәйәт, легендаларының русса баҫмалары (40; 42), башҡортса томдың икенсе тулыландырылған баҫмаһын (380 текст) (56), башҡорт, рус һәм инглиз телдәрендә нәшер ителгән «Халҡым йыры» (Өфө, 1995), «Башҡорт халыҡ йырҙары, йыр-риүәйәттәре» (62), «Башҡорт халыҡ риүәйәттәре һәм легендалары» (63), «Салауат башҡорт фольклорында» (2 томда, риүәйәт һәм легендалар томы 261 тексты үҙ эсенә ала) исемле ҙур күләмле йыйынтыҡтарҙы әҙерләү барышында авторға яңы материалдар, яңы ғилми әҙәбиәт менән эш итергә тура килде. Ә был инде, үҙ нәүбәтендә, монографияның да күпмелер дәрәжәлә киңәйеүенә, элек яҡтыртылған ҡайһы бер ҡараштарҙың асыҡланыуына, аспекттары тулыланыуына сәбәпсе булды.

«Халыҡ хәтере»нең (211) тиҙ арала таралып бөтөүе, юғары уҡыу йорттары студенттарының, уҡытыусыларҙың, ғөмүмән, Башҡортостан тарихы менән ҡыҙыҡһыныусыларҙың китапты һорауҙары инде уның

тулыландырылған баҫмаһын әҙерләү кәрәклегенә ышандырҙы. Ғилми даирәләрҙә ҡулланылыу өсөн 100 дана менән генә сығарылған икенсе баҫма ла (212) шунда уҡ таратылып бөттө.

Уҡыусылар иғтибарына тәҡдим ителгән был хеҙмәт өс бүлектән тора. Беренсе бүлек тарихи прозаға ингән жанрҙарҙың тәбиғәтен өйрәнеүгә нигеҙләнде. Халыҡ хикәйәләрендә ысынбарлыҡтың сағылыу проблемаһы икенсе һәм өсөнсө бүлектәрҙә ҡаралды. Риүәйәт, легенда һ. б. хикәйәләрҙең тарихи ерлеген күҙәтеү ике ҙур идея-тематик төркөм эсендә башҡарылды: «Боронғо ышаныуҙарға ҡоролған легендалар һәм хөрәфәти хикәйәләр», «Тарихи, тормош-көнкүреш риүәйәттәре». Бындай төркөмләү, бер яҡтан, ҡараштар тарихын, аң үҫешен сағылдырған сюжет, тема һәм мотивтарҙы бер тирәгә туплаһа, икенсе яҡтан, ижтимағи тормош, социаль-тарихи йөкмәткеле әҫәрҙәрҙе берләштерә. Йыйынтыҡтар өсөн ҡулайлы булған вағыраҡ төркөмдәр бында үҙен бик үк аҡлап бөтмәй, сөнки йыйынтыҡтарҙа материал әҫәрҙәге төп мотив буйынса төркөмләнә. Ә бит күп осраҡтарҙа бер үк риүәйәттә төрлө темаға ҡараған мотивтар һыйышып йәшәй. Тәҡдим ителгән төркөмдә төрлө типтағы сюжеттарҙа осраған оҡшаш, яҡын мотивтарҙы бер бүлеккә туплап, системалы ҡараш тыуҙырыуға ярҙам итә.

Китаптың «Ҡушымта» өлөшөндәге «Мотивтар күрһәткесе» (рус һәм инглиз телдәрендә) авторҙың дөйөмләштереп әйткән фекерҙәрен, күҙәтеүҙәрен таратыбыраҡ күҙаллауға мөмкинлек бирер тип уйлайбыҙ.

*Беренсе бүлек*

# ХАЛЫҠ ХИКӘЙӘЛӘРЕ ҺӘМ УЛАРҘЫҢ ЖАНРҘАРЫ

## Терминдар мәсьәләһе

XX быуаттың 30—60-сы йылдарында әкиәт һәм көләмәстәр рәтенә инмәгән сәсмә әҫәрҙәрҙе беҙҙең фольклористикала «легенда» тигән термин менән билдәләп йөрөттөләр. Әммә легенда исеме менән аталған күпселек әҫәрҙәр, төптәнерәк тикшереп ҡараһаң, йөкмәткеләренең йүнәлеше, хикәйәләү алымдары, стиль үҙенсәлектәре яғынан бер-береһенән нык ҡына айырыла. Әлбиттә, тарихи прозаның бер генә төрҙән тормауын тикшеренеүселәр яҡшы аңлаған, тик был өлкәлә махсус эҙләнеүҙәр алып барылмағанлыҡтан, терминдар ҡулланыуҙа ҡабул ителгән уртаҡ фекер булманы.

Революцияға тиклемге осорҙа башҡорт халыҡ хикәйәләре, нигеҙҙә, тарихи-этнографик яҙмалар эсендә осрай һәм улар рус ғалимдары тарафынан күберәген «башкирское предание», «предания башкир», «башкирская легенда» рәүешендә атап йөрөтөлгән. «Предание» тигәне хәҙер беҙ ҡулланып йөрөгән «риүәйәт» тигән терминға тап килә. Халыҡ хикәйәләренең тармаҡтарын аныҡыраҡ күҙаллау йәһәтенән XVIII б. тарихсыһы П. И. Рычковтың хеҙмәте (252) иғтибарға лайыҡ. Миҫал әсән килтерелгән конкрет текстарға ҡарата ул «предание», «сказание», «рассказ», «поверье», «небылицы» тигән терминдар ҡуллана. Был терминдарға жанр үҙенсәлеге күҙлегенән ниндәйҙер теоретик фекерҙәр әйтелмәһә лә (ундай маҡсат автор алдына ҡуйылмаған),

телдә йөрөгән хикәйәләрҙең төрөн айырыуҙа П. И. Рычковтың үҙ ҡарашы булғанын тоймау мөмкин түгел. Ул, күрәһең, был терминдарҙы әҫәрҙәрҙә сағылған ысынбарлыҡ менән уйҙырманың нисбәтенә таянып ҡуллана. Ул «предания», «сказания», «рассказы» тип килтергән халыҡ әҫәрҙәре, башлыса, ысын тормош күренештәренә арналған риүәйәттәрҙән ғибәрәт булһа, «небылицы», «поверья» тигәндәре халыҡ фантазияһы, мифологияһы менән бәйле легендаларҙы аңлата. Ошонан сығып, башҡорт фольклористикаһында ҡабул ителгән хәҙерге классификацияның нигеҙе, асылда, П. И. Рычков хеҙмәттәренә барып тоташа тип әйтергә мөмкин.

М. В. Лоссиевскийҙың бер мәҡәләһендә башҡорт халыҡ хикәйәләренә ҡарата «предание», «легенда», «хроника» тигән төшөнсәләр ҡулланылған (174, 368—385).

Революцияға тиклемге ғилми әҙәбиәттә «мифологик хикәйә» тигән термин да осрай (14, 210—213). Бында шулай уҡ терминға ниндәйҙер аңлатма биреп тороу юҡ, килтерелгән сюжеттар ендәр һәм сихырсылар хаҡында булып, улар мифологияға нигеҙләнеүҙән бигерәк, хөрәфәткә, ҡара ышаныуҙарға ҡоролған.

Октябрь революцияһынан һуңғы дәүерҙә, 20-се йылдарҙан уҡ, башҡорт халыҡ ижады әҫәрҙәрен йыйыу һәм өйрәнеү ныҡлы йүнәлеш алыу сәбәпле, матбуғатта һәр төрлө «белдереүҙәр», «ҡулланмалар» баҫыла башланы. Башҡортостан халыҡ мәғарифы комиссариатының әҙәбиәт йыйыу бүлексәһе тарафынан баҫтырып сығарылған белдереүҙә, мәҫәлән, халыҡ хикәйәләре «ҡисса», «үәҡает», «риүәйәт», «халыҡ ҡаһармандары хаятынан алынған... һәм төрлө дәүерҙәге тарихи ваҡиғалар тураһындағы хикәйәләр» рәүешендә тәҡдим ителде. Ошо уҡ осорҙа «ҡарһүҙ» (ҡары һүҙ —ҡарый һүҙ, иҫке һүҙ, элгәренән ҡалған һүҙ), «тарих» тигән атамалар ҙа күренә (100, 31).

Күп төрлө атамалар буталсыҡлығынан ҡотолоу ниәтендә, әкиәт һәм көләмәскә ҡарамаған сәсмә әҫәрҙәрҙе 30-сы йылдарҙа «легенда» тип кенә йөрөтә башланылар. Сығышы менән латин теленә ҡараған был атама 70-се йылдарға тиклем, бик һирәк осраҡтарҙы иҫкә алмағанда, халыҡ хикәйәләренә ҡарата ҡулланылған берҙән-бер термин булды.

1969 йылда М. Х. Минһажитдинов менән Ә. Н. Кирәев (Кирәй Мәргән) тарафынан сығарылған йыйынтыҡтың «Башҡорт легендалары» тип аталыуы ла осраҡлы түгел ине. Китапҡа яҙылған инеш мәҡәлә авторҙары М. Х. Минһажитдинов менән Ә. М. Сөләймәнов быны «Башҡорт фольклористикаһында «легенда» төшөнсәһе аҫтында стиль һәм художество үҙенсәлектәре яғынан да, тәғәйенләнеүҙәр е менән дә төрлө-төрлө булған әҫәрҙәр — халыҡтың йәнле телендә йөрөгән төрлө хикәйәләр ҡабул ителә» (45,7),— тип аңлаттылар.

Ләкин күп тә үтмәҫтән, улар үҙҙәре үк башҡорт халыҡ хикәйәләрен бары бер атама менән йөрөтөүҙең бик үк уңайлы булмауын таныныулар. Марат Минһажитдинов, мәҫәлән, рус телендә яҙған мәҡәләләрендә халыҡ хикәйәләренә ҡарата, уларҙың йөкмәткеһенән сығып, легенда терминынан тыш, «легенда-риүәйәт» (легенда-предание) тигән термин ҡулланырға мәжбүр (182, 57—74). Әхмәт Сөләймәнов иһә топонимикаға бәйле фольклор материалдарын өйрәнеүгә бағышланған диссертацияһында халыҡ телендә ер-һыу, урын-атамаларын сағылдырған хикәйәләрҙе жанр яғынан ике төркөмгә: риүәйәт һәм легендаларға айыра (272). Халыҡ прозаһын өйрәнеүсе Б. Ғ. Әхмәтшин менән Л. Г. Бараг хеҙмәттәрендә лә «риүәйәт» (предание), «легенда», «риүәйәт-легенда» (предание-легенд а) терминдары йыш ҡулланыла (202, 17-24; 25; 28, 65-72).

Халыҡ хикәйәләрен өйрәнеү әлкәһендә күренекле рус фольклорсылары К. В. Чистов (316; 317; 318), С. Н. Азбелев (6), В. Е. Гусев (99), В. К. Соколова (265), һәм башҡаларҙың хеҙмәттәрендә күтәрелгән мәсьәләләр дөйөм теоретик әһәмиәткә эйә. Бында шулай уҡ, ғөмүмән, фольклор жанрҙары теорияһына ҡағылған тикшеренеүҙәр ҙә иғтибарҙан ситтә ҡалырға тейеш түгел. Был йәһәттән айырыуса В. ***Я.*** Пропптың «Фольклор жанрҙарын төркөмләү принциптары», «Рус фольклорының жанрҙар составы» (234, 34—45, 46 — 82),
В. П. Аникиндың «Фольклорҙа жанрҙарҙың барлыҡҡа килеүе» (жанр төшөнсәһен һәм уның билгеләрен аңлатыуға ҡарата) (15, 28—42) тигән мәҡәләләре әһәмиәтле. Фольклор жанрҙарын системалы өйрәнеү, айырым жанрҙарҙың үҙенсәлектәрен асыҡлау йүнәлешендә рус фольклористикаһында ла (Н. И. Кравцов, В. М. Гацак, Б. Н. Путилов, Н. А. Кринич-

ная, Н. П. Колпакова), милли республикалар фольклоры буйынса ла (Х. Г. Короглы, Р. Б. Бердибаев, Т. М. Мирзаев, С. С. Каташ, Ә. М. Сөләймәнов, Ф. И. Урманчеев, И. Н. Нәзиров, В. Г. Родионов һ. б.) һуңғы йылдарҙа һөҙөмтәле ғилми тикшеренеү эштәре алып барылды. Жанр теорияһы күҙләгенән ҡарағанда, төрки фольклор ғилеме әлкәһенән айырыуса С. А. Каскабасовтың монографияһы иғтибарҙы йәлеп итә. Унда был мәсьәләгә «Ҡаҙаҡ фольклоры контексында жанрҙар теорияһы» тигән махсус бүлек бирелеп, ентекле анализ нигеҙендә фольклор жанрҙарының үҙенсәлектәре асып бирелгән (128).

Ҡыҫҡаһы, хәҙер инде фольклористикала жанр теорияһы буйынса ҡабул ителгән һәм дөйөм билдәле булған ҡағиҙәләр, үлсәмдәр бар. «Фольклор жанрҙары» тигән терминдың йөкмәткеһен тулыһынса асыу өсөн, халыҡ ауыҙ-тел ижадының телдән һөйләнелеү, индивидуаль ижад менән коллектив ижадтың үрелеше, вариантлылыҡ, традицияға таяныу кеүек һыҙаттарын күҙ уңында тотоу, шул уҡ ваҡытта сығышы яғынан фольклорҙың архаик ҡараштар, йола, ғөрөф-ғәҙәттәр, музыка, бейеүҙәр, ритуаль хәрәкәттәр менән бәйләнеше, йәғни синкретизм күренеше, геройҙың йәки персонаждың тормошон һүрәтләүҙәге үҙенсәлектәрҙе (мәҫәлән, оҙайлы үҫеш юлында циклдарға ойошоу тенденцияһы, был циклдарҙың төрлө формалары); ваҡыт, арауыҡ төшөнсәләрендәге үҙенсәлек, фольклор әҫәрҙәре поэтикаһының традиция ҡалыптарына ныҡ бойондороҡло булыуы, персонаждарҙы һүрәтләүҙәге бер ни тиклем тотороҡлолоҡ кеүек үҙенсәлектәрен иҫтә тотоу кәрәк.

В. Я. Пропп жанрҙы поэтик системаһы, тормош-көнкүреш функцияһы, башҡарылыу рәүеше һәм музыкаль төҙөлөшө яғынан бер төрлө булған әҫәрҙәр йыйылмаһы тип билдәләне, һәм шул уҡ ваҡытта күрһәтелгән аспекттарҙың кимәле һәр жанрҙа бер үк булмаҫҡа мөмкин тип иҫкәртте. Рус фольклорының жанрҙар составын билдәләп, эпик проза тәңгәлендә иһә әкиәт прозаһын һәм әкиәт булмаған проза (несказочная проза) тармағын күрһәтте (234, 46—50). В. П. Аникин менән К. В. Чистов фольклор әҫәрҙәренең тормош-көнкүреш функцияларын аныҡлауға айырыуса ныҡ баҫым яһайҙар. «Теләһә ҡайһы әҫәрҙең поэтик билгеләре,—

тип яҙа, мәҫәлән, В. П. Аникин, — бөтәһенән дә элек уның тормош функцияһы билгеләре» (15, 29).

К. В. Чистовтың әйтеүенсә, «жанр функцияһы тематиканы, идеялар даирәһен һәм шунан һуң геройҙарҙың тибын, сюжет ойоштороу принциптарын һәм художество сараларының берләшеүен билдәләй» (316, 5). Был осраҡта беҙҙе ҡыҙыҡһындырған халыҡ хикәйәләрен жанрҙарға бүлеүҙә К. В. Чистов сюжет нигеҙендә фантастиканың булыу-булмауына ҡарап эш итеүҙе маҡсатҡа ярашлы тип иҫәпләй. С. Н. Азбелев та шундай позицияла тора. «Ғилми нигеҙҙә жанрҙарҙы айырыу принциптарын теге йәки был жанрҙың ысынбарлыҡҡа булған үҙенсәлекле мөнәсәбәте буйынса эҙләргә кәрәк», — ти ул, һәм шуға ҡарап, халыҡ прозаһында «төп йөкмәткеләре ғәҙәти булмаған нәмәләрҙән торған хикәйәләр (әкиәт, легенда)», «төп йөкмәткеләре менән реаль булған йәки реаллеге ихтимал булырҙай фактарҙы һүрәтләгән әҫәрҙәр (риүәйәт, хәтирә, йәки хикәйә-иҫтәлектәр)» барлығын айырып әйтә (6, 12—13, 20).

Әкиәттәр һәм көләмәстәргә инмәгән халыҡ хикәйәләренең жанр төрҙәрен билдәләгәндә, башҡорт фольклорсылары ла әҫәрҙәрҙең ысынбарлыҡҡа мөнәсәбәтен, ундағы реаллек менән уйҙырманың нисбәтенә ҡарап эш итәләр, шул уҡ ваҡытта жанр барлыҡҡа килтереүҙә мөһим роль уйнаған структура ла иғтибарҙан ситтә ҡалмай. Структураны тикшереү тема, сюжет, мотив, образ кеүек ҡанунлашҡан төшөнсәләр аша хәл ителә.

Конкрет материалды жанр теорияһы күҙлегенән байҡап сығыу телдә йөрөгән күп һанлы башҡорт хикәйәләрен, нигеҙҙә, дүрт жанрға бүлеп өйрәнергә мөмкинлек бирә. Ул жанрҙар: риүәйәт, легенда, хөрәфәти хикәйә һәм хәтирә. Әлбиттә, «халыҡ хикәйәһе» тигән төшөнсәне киң мәғәнәһендә алғанда, жанрҙар даирәһе әйтелгәндәр менән генә сикләнмәй. Бында маҡсатҡа ярашлы рәүештә ваҡиғаларҙы ысынбарлыҡҡа бәйләп тасуирлаған төрҙәр күҙ уңында тотола.

Мәғлүм булыуынса, фольклор жанрҙары тарихи үҫеш процесында ҡалыплашҡан билдәле бер системаны тәшкил итә. Был система эсендә үҙ-ара яҡын торған күренештәр менән бер рәттән, бер-береһенән алыҫлашҡан, хатта ҡапма-ҡаршы торғандары ла бар. Тик ошо күренештәрҙе асыҡла-

ған хәлдә генә, айырым фольклор жанрының үҙенсәлеген асыҡларға мөмкин.

Сәсмә жанрҙар тәңгәлендә был уртаҡлыҡ һәм айырымлыҡтар түбәндәгеләргә ҡайтып ҡала.

Легенда һәм хөрәфәти хикәйәләрҙе, риүәйәт, хәтирәләрҙе үҙ-ара яҡын жанрҙар төркөмөнә берләштереүсе төп һыҙат — ысынбарлыҡҡа мөнәсәбәт һәм функциялар берҙәмлеге. Тарих һөйләү, тормошта булған, айырым осраҡтарҙа хатта булмаған хәл-ваҡиғаларҙы ла булған хәл итеп һүрәтләргә ынтылыу —был жанрҙарҙың һәр ҡайһыһы өсөн хас. Әлбиттә, тарихилыҡ төрлө әҫәрҙәрҙә төрлөсә. Халыҡ прозаһының жанрҙары бер-бер еһенән, асылда, шул тарихилыҡтың «миҡдарына», шулай уҡ хикәйәләү объектына һәм ысулдарына, йәғни һүрәтләүҙә фантастика менән ысынбарлыҡтың нисбәтенә ҡарап айырыла.

## Риүәйәт

Тормошто, ваҡиға һәм шәхестәрҙе, төрлө донъяуи күренештәрҙе хәҡиҡәткә тоғролоҡ күҙлегенән яҡтыртыуҙа риүәйәт жанры төп урынды алып тора. «Риүәйәт» һүҙе беҙгә ғәрәпсәнән ингән. Ул «хикәйә, версия» тигәнде аңлата.

Риүәйәттәрҙең күпселеге туранан-тура ниндәй ҙә булһа ижтимағи йәки көнкүреш әһәмиәтле хәл-ваҡиғаның, күренештең, факттың, атаманың, төшөнсәнең тарихын асыҡлауға нигеҙләнгән. Шуға күрә ғилми әҙәбиәттә уларҙы йыш ҡына «аңлатмалы этиологик проза», «тарихи проза», ә халыҡ телендә «тарих», «ҡарһүҙ» тип йөрөтәләр. Риүәйәттәргә ҡарата йәнле һөйләштә (хәҙерге заман уҡымышлылары араһында) тағы «хикәйәт» тигән термин ҡулланылғылай, унын йөкмәткеһенә шулай уҡ күптән булған хәл, тарих тигән төшөнсә һалына. Әммә формаһы яғынан хикәйәттәр — күпмелер дәрәжәлә эпосҡа тартым, әҙәби әҫәрҙәргә яҡын ижад төрө. З. Шәһәр яҙып алған «Һуңғы йыр» (55, 277—287), И. Старков баҫтырып сығарған «Аҫылкүл» (55, 301—304), мәҫәлән, шундайҙарҙан.

Әммә риүәйәт үҙенең төп маҡсаты менән тарихты, факттарҙы аңлатыуға йүнәлдерелгән булһа ла, ул тарихи

документ түгел. Ауыҙ-тел ижады әҫәре булараҡ, риүәйәттәрҙә тарих халыҡ аңындағыса, халыҡ ҡарашынса, халыҡ күңеле аша яҡтыртыла.

Телдән телгә күсеп, оҙайлы йәшәү юлын үткәндә, әҫәрҙәге тарихи йөкмәткенең күп кенә яҡтары юғалырға, хатта бөтөнләй үҙгәрергә мөмкин. Үҙенең нигеҙе менән халыҡсан булған риүәйәттең икенсе социаль төркөм эсендә бөтөнләй башҡа йүнәлеш алып китеүе лә ихтимал. Ҡыҫҡаһы, факттар алмашыныу, анахронизм күренештәре — риүәйәттәрҙә шаҡтай йыш осрай торған хәл. Миҫал өсөн конкрет тарихи ваҡиғаға—1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиән һуғышына бәйле «Пугачев менән Салауат юлы» (55, 213—214) исемле бер риүәйәтте генә алайыҡ. Был әҫәрҙә Салауат Юлаевтың дуҫы Кинйә һәм башҡа яуҙаштары менән Ҡаҙанға табан үтеп барышлай хәҙерге Саҡмағош райондарында туҡтап, ял итеп китеүе хаҡында һүҙ бара. Тарихи документтарҙан билдәле булыуынса, Емельян Пугачевтың Ҡазан походында башҡорт яугирҙәре менән Кинйә Арыҫланов ҡатнаша. Ә Уса крепоссын алғанда яраланған Салауат иһә дауаланыу өсөн үҙ йортонда ҡала. Яралары бер аҙ уңалғас та, ул, яңынан ғәскәр туплап, Бөрө ҡалаһын ала, Елдәк ҡәлғәһендә ныҡына. Ошо осорҙа үҙенең ғәскәрҙәрен тулыландырыу ниәтендә, Салауат, Саҡмағош, Дүртөйлө яҡтарына сапҡындар ебәргән булырға тейеш. Тимәк, риүәйәт тарихи дөрөҫлөккә тап килә: Салауат ораны буйынса бөтә Башҡортостан халҡының яуға күтәр елеүе, башҡорт батырының абруйы, Пугачевтың Ҡаҙанға булған походында башҡорт яугирҙәренең ҡатнашыуы—былар бөтәһе лә тарих фәне аңлатыуына тура килгән реаль факттар. Ә инде халыҡтың Саҡмағош ерҙәрендә Салауат эҙҙәрен күрергә теләүе һәм шул арҡала риүәйәткә поэтик шартлылыҡ, уйҙырма элементтар килеп инеүе аңлашыла торған хәл, һәм ул әҫәрҙең дөйөм йүнәлешенә, идеяһына зыян килтермәй.

Тәү ҡарауға ҡайһы бер риүәйәттәрҙә ҡоро уйҙырма һымаҡ мотивтар ҙа осрай. Ләкин, ентекләберәк тикшереп ҡараһаң, ул мотивтарҙың да ысынбарлыҡтан алынғанлығы, йә уға бик яҡын булғанлығы асыҡлана. «Ҡоломбәт батыр» исемле риүәйәттә (55, 173 — 174) батшаның алтын табағы менән алтын ҡалағын йәшереү (урлау) мотивы —тап ана

шундай. Алтын «урлаған» геройҙың тапҡырлығына һоҡланып, батшаның уға һәм мәжлестәге башҡа бик күп илселәргә берәр алтын табаҡ менән берәр алтын ҡалаҡ бүләк итеп, оло һый-хөрмәт күрһәтеп ҡайтарып ебәреүенә ышаныуы ҡыйын, әлбиттә. Ләкин был бөтөнләй буш ерлектә тыуған мәғәнәһеҙ уйҙырма ла түгел. Баҡһаң, Уралдағы Демидов заводтарында рәсми рәүештә уҙғарыла торған йолалар булған икән. Айырым осраҡтарҙа предприятиеның юбилей хөрмәтенә ҡарт эшселәр **өсөн** табын әҙерләнгән һәм ошо мәжлестә ҡатнашыу иҫтәлегенә эшселәргә үҙҙәре ашаған ҡалаҡты алырға рөхсәт ителгән (253, 250—254). Аңлашылыуынса, телгә алынған риүәйәттә факт тарихи ерлекле, тик уның урыны һәм ваҡыты алмаштырылған: завод хужаһының роле Иван Грозныйға бирелеп, шуға бәрәбәр ябай ҡалаҡ алтынға әүерелдерелә, хатта уға ҡушымта — алтын табаҡ өҫтәлгән (батша һынлы батшала ҡайҙан ябай һауыт булһын инде?), XIX б. ваҡиғалары элегерәк дәүергә күсерелгән. Бындай үҙгәреш — фольклор поэтикаһы сиктәренә һыя торған ғәҙәти күренеш. Яңы сюжеттар тыуҙырғанда билдәле мотивтарҙы ҡулланып ебәреү шулай уҡ телдән һөйләнелеп йөрөй торған әҫәрҙәрҙә йыш осрай. «Ҡоломбәт батыр»ҙағы алтын һауыт йәшереү мотивы халыҡ ижадын һөйөүселәргә «Йософ менән Зөләйха ҡиссаһы» аша таныш. Ә инде нигеҙҙә уйҙырмаға ҡоролған «Ҡоломбәт батыр» сюжетына килһәк, унда туранан-тура әйтеп бирелгән тормош дөрөҫлөгө лә бар —ул башҡорттарҙың Иван Грозныйға илсе ебәреүҙәр е. Ошо рәүешле риүәйәттәрҙә уйҙырма менән тормош дөрөҫлөгө һәр саҡ бергә үрелеп бара, уларҙағы уйҙырма —әллә ниндәй мөғжизәле хыял түгел, ә ысынбарлыҡҡа яҡын торған поэтик уйҙырма. Быны риүәйәт жанрының мөһим бер үҙенсәлеге тип ҡарарға кәрәк.

Тормошта булған һәр күренеште, ваҡиғаны сағылдырыу риүәйәт жанрының маҡсатына инмәй. Үҙенең күңелен йә бөйөклөгө, йә түбәнлеге менән тетрәткән ваҡиға, хәл-әхүәлдәрҙе генә тарих, хикәйәт итеп һөйләй халыҡ. Ниндәйҙер яғы менән иғтибарға лайыҡ булған күренештәр, йә ҡәҙимге күренештә бик ғәҙәти булмаған нәмәләр генә риүәйәтселәрҙең күңелен йәлеп итә. Һөйләүсе тарафынан да, тыңлаусылар яғынан да риүәйәттәргә оло ихтирам, ышаныс бар,

уларға халыҡ тарихы, боронғоларҙан ҡалған һүҙ итеп ҡарау һиҙелә. Йыш ҡына риүәйәтсе үҙе һөйләгән ваҡиғаның, тарихтың дөрөҫлөгөнә, булған хәл икәнлегенә баҫым яһап, шуға ышандырырға тырыша. Бының өсөн ул хатта мөмкин булған осраҡта ваҡиғаның дәүерен, йылдарын күрһәтеп һөйләй, («Кәшмәр тауы, Шаһиттар ҡыраһы», «Ыҫмаил менән Дауыт» һ. 6.-55, 215, 171 — 173), йә «элек ата-бабаларыбыҙ һөйләй торғайны» тигән формала һылтанма яһай. Ваҡиғалар бик боронғо, йә билдәһеҙерәк дәүергә ҡалһа, «борон булған хәл», «борон был тирәлә бер батыр йәшәгән» һәм шул батырҙың исеме күрһәтелә («Алдар-Шымай менән Зөһрә» —55, 173). Ваҡиға, хәл-әхүәл, күренеш булған урынды, уларға бәйле булған кешеләрҙең исемдәрен телгә алыу риүәйәттәрҙә бик йыш осрай. Миҫал әсән «Салауат ауылы» тигән бер ҡыҫҡа ғына риүәйәтте алайыҡ: «Салауат батыр Пугачев менән Троицк яғынан сигенеп килеп, хәҙергә Салауат ауылы тирәһендә туҡтай. Ул урын Ҡырҡты тауының көньяҡ битендә «Ҡанлы бил» тигән ерҙә була. Йылғаһына ла «Ҡанлы бил» тиҙәр.

Был яҡ көн биттәге башҡорт ырыуҙары Тамъян, Түңгәүер, Күбәләк, Тиләү, Ҡатай, Ҡыпсаҡтар төркөм-төркөм яусылар ойоштора. Бер төркөм яусыларҙың башлығы итеп беҙҙең олатайыбыҙ Шәйхем Ҡолаҡаев тәғәйенләнә. Әлеге урында бик ҡаты яу була. Шул ваҡытта Шәйхем үлтерелә. Ҡәберлектәрҙең береһе хәҙер ҙә «Шәйхем зыяраты» тип йөрөтөлә.

Батша ғәскәрҙәре был урында еңелә. Яуҙан ҡалған яралы аттарҙы һуйып, ҙур туй яһайҙар. Салауат ауылының исеме шунан ҡалған» (55, 215).

Күренеүенсә, риүәйәттәрҙәге ышандырып һөйләргә тырышыу тенденцияһы бында бик асыҡ сағылған. Ышандырырға иҫәп тотоп һөйләү ер-һыу атамаларын, рельеф төҙөлөшөн аңлатҡан риүәйәттәрҙә объекттың формаһын, күләмен, төҫөн, урынын күрһәтеү аша еткерелә: «Ағиҙелдең уң яҡ ярында, Муйнаҡташ менән Аҙанташ араһында һандыҡҡа оҡшап торған ҙур бер ҡая таш бар» («Һандыҡташ йәки Исламғол ҡурай тартҡан таш» —55, 117), «Муйнаҡташтан бер саҡрымдай ары киткәндә, Ағиҙелдең уң яҡ ярында бер таш күренер. Уның тупаҡ түбәһен ерән һары

мүк ҡаплағанға күрә, был ташты «һарыбашташ» тип тә, «Ерәнбаш» тип тә йөрөтәләр» (55, 118).

Күпселек осраҡта риүәйәттәр локаль характерҙа булып, теге йәки был урынға, ер-һыу атамаларына бәйле йәшәйҙәр, йә айырым төбәктәрҙә булған хәл-ваҡиғалар, күренештәрҙе сағылдырып, шул төбәктә киң билдәле була. Әйтәйек, «Антонташ», «Антон ҡаяһы», «Иылҡысыҡканкүл» (55, 92, 110—111) кеүек риүәйәттәр Башҡортостандың Бөрйән районында; «Салауат ыҙаны», «Салауат ташы» һымаҡ риүәйәттәр (55, 214) Башҡортостандың Салауат, Ҡыйғы райондарында киң билдәле. Салауат тураһында төрлө райондарҙа риүәйәттәр йәшәй, әммә уның үҙенең тыуған яҡтарында улар күберәк. Теге йәки был ырыу-ҡәбиләләрҙең сығышы тураһындағы халыҡ хикәйәләре шулай уҡ ошо ырыуҙар йәшәгән урында киңерәк билдәле, айырыуса вағыраҡ ырыу тармаҡтары — аймаҡ, ара, түбәләр хаҡындағы риүәйәттәр билдәле бер тирәгә нығыраҡ ереккән. («Бирәсбаштар араһы», «Бирәләр араһы» һ. б.-55, 81—82, 84 — 85.)

Төҙөлөштәре, формалары яғынан риүәйәттәр төрлөсә. Бер төркөмөнөң сюжеты бик ябай. Уларҙа хикәйәләү күберәк тормоштағы ниндәй ҙә булһа бер ваҡиғаны, күренеште тасуирлауға ҡорола, һөйләүсе өсөн боронғоно үҙе ишеткәнсә тыңлаусыға еткереү мөһим, йәғни уны, беренсе нәүбәттә, факт ҡыҙыҡһындыра. Риүәйәт һөйләүсе әҫәрҙең формаһы хаҡында йырсы йәки ҡобайырсылар һымаҡ артыҡ уйлап тормай. Күп осраҡта ул быны һүҙ ыңғайында, яйы килгәндә контекста һөйләй, йәғни борондан ҡалған «тарих»ты иҫкә төшөрә, шул хаҡта мәғлүмәт бирә. Шуға ла риүәйәттәрҙең ныҡ ҡанунлашҡан даими текстары ла булмай. Риүәйәттең төҙөлөшө, формаһы һөйләүсенең оҫталығына бәйләнгән. Уның стиле, асылда, — һөйләүсе телмәренең стиле. Был айырыуса ауыл тарихтарына, ер-һыу, тау-таш исемдәренә ҡараған топонимик риүәйәттәр миҫалында асыҡ күренә. Сюжеты булмаған, йә өҙөк сюжетлы текстар тик информацияға ғына ҡорола. Уларҙың төп маҡсаты мәғлүмәт биреү булғанлыҡтан, художестволылыҡҡа ынтылыу бында һиҙелмәй («Салауат ғаиләһенең һәләкәте», «Салауат күпере», «Йәҙрәле һаҙ» —55, 114, 212, 214). Шуға ла былдай текстарҙы халыҡ-ара терминология практикаһында «хроникаттар»

тип атау ҡабул ителгән. Башҡорт риүәйәттәренең күпселеге — фабулалы, йәғни сюжетлы хикәйәләр, һүрәтләнгән тормош күренештәренең, хәл-ваҡиғаларҙың характерына ҡарап, риүәйәт сюжеттары бер эпизодтан («Салауат менән Ҡараһаҡал», «Абласкин-Яуымбай» — 55, 137, 203) һәм бер нисә эпизодтан торорға мөмкин («Морҙағол», «Ҡәнифә юлы», «Салауат менән Балтас» — 55, 178 — 180, 187 — 188, 203—206). Күпте белгән ауыл ҡарттары, аҡһаҡалдар бер тарихты һөйләгәндә, шуға бәйләп, әллә ни тиклем башҡа мәғлүмәттәр биреп ташлаусан була. «Бөрйәндәр хан замандарында» тигән риүәйәт (55, 155 —156) —шуның типик бер өлгөһө. Башҡорттарҙың Бөрйән һәм Ҡыпсаҡ ҡәбиләләре хаҡында ентекле хикәйәләү, был ҡәбиләләрҙең ерҙәренә яу менән килгән Сыңғыҙхандың мөғжизәле тыуыуы тураһында фантастик хәбәр, монгол ханының урындағы халыҡ һәм түрәләр менән мөнәсәбәте, бейҙәргә тамғалар өләшеүе, башҡорт һәм башҡа ҡайһы бер төрки телле халыҡтарҙың мосолманлыҡҡа күсеүе, топонимик һәм этнонимик аңлатмалар—былар бөтәһе лә бер текст эсендә һыйышып йәшәй, һәм быны риүәйәт жанрының тәбиғәте бик еңел күтәрә.

Риүәйәттең сюжет төҙөлөшө, художестволылығы, бер яҡтан, һөйләүсенең оҫталығы, унын халыҡ традицияларын белеү-белмәүе менән бәйләнгән булһа, икенсе яҡтан, сағылған объект һәм һөйләнелгән хәл-ваҡиғаларҙың мөһимлеге, ҙурлығы менән дә бәйләнгән. Халыҡ күңелендә тәрән эҙ ҡалдырған оло ваҡиғалар, тормоштағы драматик ситуациялар айырым бер тулҡынланыу, эмоциональ көсөргәнешлек менән яҡтыртылалар, уларҙа художестволы хикәйәләү алымдары ярайһы уҡ яҡшы сағыла («Биксура», «Аҡман-тоҡман», «Бошман-Ҡыпсаҡ батыр», «Йөрәктау» — 55, 156 — 160, 120).

Ғилми әҙәбиәттә риүәйәт жанрының төп функцияһы — мәғлүмәт биреү, танып белеү функцияһы, ә эстетик вазифаһы юҡ дәрәжәһендә аҙ тигән фекерҙәр ҙә булғыла745ы (К. В. Чистов). Был фекер башҡорт риүәйәттәренең бик бәләкәй бер өлөшө, информатив характерҙағы сюжетһыҙ йә киҫек сюжетлы үрнәктәре менән генә раҫлана. Фабулалы сюжеттарҙа, айырыуса, дөрөҫлөк менән уйҙырма тығыҙ үрелеп барғандарында иһә, ентекләберәк ҡараһаң, художестволылыҡҡа, экспрессивлыҡҡа иҫәп тотоу тенденцияһы

күренеп тора. Миҫал өсөн тормош-көнкүреш ваҡиғаларына бәйле тыуған «Кинйәбай» исемле бер риүәйәтте генә хәтергә төшөрәйек. Бында ваҡиғалар, нигеҙҙә, ысынбарлыҡтағыса һүрәтләнә, риүәйәтсенең вайымһыҙ булмауы, көсөргәнешле, тыңлаусыны ҡыҙыҡһындырырлыҡ итеп хикәйәләргә тырышҡанлығы бик асыҡ һиҙелә. Сюжет Дим буйында дан тотҡан Ҡунаҡбай, Кинйәбай, Фәхретдин атлы өс батыр булыуы хаҡында хәбәр итеүҙән башлана. Был өс батырҙың Ырымбурға йыйынға саҡырылыуы ла тыныс хәбәр итеү планында. Әммә риүәйәтсенең артабан «йыйын башлана», тип һөйләп алып китеүе тыңлаусыла тулҡынланыу, ҡыҙыҡһыныу уятыуға тәүге бер этәргес бирә, ә инде көрәштең иң ҡыҙған сағында егермеләп һыбайлы ҡаҙаҡтың майҙанды ярып килеп инеүе тыңлаусыны бөтөнләй һағайта, һағайтмаҫлыҡмыни: «Барыһы ла ҡамсынан. Урталарында яланғас тәнле, оҙон буйлы, ағас билбаулы бер ҡаҙаҡ килә, ти. Уны сынйырлап арттан тотоп киләләр икән». Күренеүенсә, көсөргәнешле ситуацияны тыңлаусыға еткереү өсөн риүәйәтсе һүҙгә йомартланып, ҡыйыуланып китә. Ҡаҙаҡ бәһлеүәненең көс-ҡеүәтен һәм уның башҡорт батырҙары әсән ҡурҡыныслы конкурент булыуын күрһәтеү әсән, ул бик сағыу эпитеттар ҡуллана, ғәҙәттән тыш ҡиәфәтен һүрәтләй, хатта уға сынйыр ҙа кейҙереп ҡуя. Артабан көрәш майҙанында ҡаҙаҡ бәһлеүәне әкиәт батырҙары һымаҡ күрһәтелә: «Ҡаҙаҡ батыры ун батырҙы бер ни ише күрмәй атып бәрҙе, ти. Ҡайһылары имгәнеп бөттө, ти...» Бына шул батыр менән көрәшкә башҡорт батыры Кинйәбай сыға. Һөйләүсе уның, асылда, ғәҙәти батыр булыуын күрһәтә: «...буйы ике аршын да ике ҡарыш икән». Ғәҙәттән тыш ҡаҙаҡ батыры менән ғәҙәти башҡорт батырының көрәше сюжеттың иң көсөргәнешле моментын (кульминацияһын) тәшкил итә, һәм ул Кинйәбайҙың еңеүе менән тамамлана. Геройҙар образындағы контраслыҡ (антитеза) риүәйәттең эстетик тәьҫир көсөн билдәләй.

Әҫәрҙең тамамланышы — риүәйәт жанрына хас тамамланыш: «Беренсе батыр булып, Дим буйы башҡорто Кинйәбай ҡалған. Уны ике көн ҡунаҡ итеп ҡайтарып ебәргәндәр.

Был хәл сама менән 1880 йылдарҙа булған» (55, 316).

Шулай итеп, күләме яғынан ҙур булмаған был риүәйәт ғәжәп төҙөк сюжетлы, художестволы. Ваҡиғаны, хәл-әхүәлдәрҙе эҙмә-эҙлекле һәм экспрессив планда һүрәтләү бында ныҡ һиҙелә. Бының сәбәбе, беҙҙеңсә, сағылдырған объекттың риүәйәтселәргә яҡын, аңлайышлы булыуында. Тормошто белгән оҫта риүәйәтсе көнкүреш ваҡиғаһын һөйләүҙә үҙен иркен тоя һәм тыңлаусыны ҡыҙыҡһындырыу өсөн ул хыялын бик сикләп тормай, хатта әкиәт алымдарын ҡуллана.

Башҡорт риүәйәттәренең геройҙары — тарихи шәхестәр (Салауат Юлаев, Емельян Пугачев, Кинйә Арыҫланов, Екатерина И, Перовский, Ҡараһаҡал, Аҡай...), йәки ҡылған эше менән башҡаларҙан айырылған күренекле кешеләр (изгелекле ҡаҫҡындар, түрәләр). Риүәйәттәрҙә шулай уҡ фажиғәле яҙмыш (урланған ҡыҙҙар, йәберһетелгән килендәр), батырлыҡ йәки берәй иҫтә ҡалырлыҡ эш эшләгән йәки ҡылыҡ күрһәткән ир-егеттәр, ҡатын-ҡыҙҙар образы ла сағылыусан. Образдарҙың бирелеү формаһы туранан-тура риүәйәттең йөкмәткеһенә һәм һөйләүсенең шул персонажға булған мөнәсәбәтенә, фольклор традицияларын үҙләштерә алыу кеүәһенә, һүҙ оҫталығына бәйләнгән. Бер осраҡта һөйләүсе персонаждың ҡылығын, характер һыҙаттарын, сығышын ярайһы уҡ ентекләп бирә («Салауат батыр», «Ҡаранай батыр һәм уның ярандары», «Ғилмияза»), икенсе осраҡта персонаждың исемен һәм ҡылған эштәрен әйтеп китеү менән генә сикләнә (Перовский, Екатерина II).

Ғөмүмән, геройҙы эш-хәрәкәттәре аша кәүҙәләндереү — риүәйәттәргә хас бер үҙенсәлек. Портретҡа артыҡ ныҡ туҡталып тороу бында күҙәтелмәй. Геройҙың ҡиәфәтен, ниндәйерәк кеше булыуын һүрәтләгәндә, риүәйәтселәр һүҙгә һаран, улар күберәген әҙер, ҡалыплашҡан тел саралары, һүҙбәйләнештәр менән эш итәләр. Бына, мәҫәлән, бер нисә өлгө:

«Айсыуаҡ бик тә көслө, бик тә батыр була» («Айсыуаҡ мажаралары»); «Һаҡмар буйында мыҡты кәүҙәле, оҫта йырсы, сәсән телле Баязитдин исемле бер батыр йәшәгән, ти» («Баяс»); «Бынан ике йөҙ йыл элек беҙҙең Иҙел башы яҡтарында Камал исемле бик батыр егет булған» («Камал ҡаҫҡын»); «Борон Ирәндек яғында Уҙаман исемле апай йәшәгән. Ул төҫкә һылыу ҡыҙ булған» («Уҙаман апай»);

«Бик уңған, төҫкә сибәр бер ҡатын булған был» («Алтынсәс»); «Бер ауылда буйға зифа ҡамыштай, төҫкә күҙ ҡарап туймаҫлыҡ сибәр ҡыҙ үҫеп етеп килгән, ти» («Уралбай» — 55, 242-243, 255, 262-264, 290-291).

Ҡайһы берҙә генә персонаждың һыны һәм уның рухи һыҙаттары риүәйәттәрҙә традицион алымдарҙа киңерәк һүрәтләнә, көнсығыш романтик поэзия рухында күрһәтелә. Мәҫәлән:

«...Ҡыҙ шундай матур булған, хатта Әй буйына һыуға төшкән сағында, йылға ағыуынан туҡтап, уның һылыулығына хайран ҡалыр булған, ти. Ҡыҙҙың матурлығына бөтә Әй буйы халыҡтары маһайған.

Көнһылыу йырға ла бик шәп булған. Уның тауышын таң ҡалып тыңлар булғандар. Көнһылыу йырлай башлаһа, һандуғастар һайрауынан, елдәр иҫеүенән, януарҙар үкереүенән туҡтағандар. Уны күргән егеттәр торған ерҙәрендә иҫһеҙ булып ҡалғандар, ти» (55, 291—293).

Фольклорға хас гипербола алымында һүрәтләү Көнһылыуҙың үтә матурлығын ғына түгел, рухи донъяһының нәфислеген, илаһи йәнлелеген аңларға ярҙам итә. Шуға ла риүәйәт тыңлаусыны (йәки уҡыусыны) тыныс ҡалдырмай.

Башҡорт риүәйәттәрендә тәбиғәтте һүрәтләү, тәбиғәт байлыҡтары менән һоҡланыу мотивтары йыш осрай. Шуныһы иғтибарға лайыҡ: бында ла, асылда, антитеза алымы ҡулланылып, тәбиғәттең хәҙерге торошонан бигерәк боронғоһо менән һоҡланыу күҙгә ташлана: «Сарман ҡарт был урынға килеп ултырғансы, әле беҙҙең яҡтарға Сыңғыҙ, Батый сиреүҙәре килгәнсе, Ағиҙел тамағы, Ыҡ буйҙары, Мәллә менән Минзәлә йылғалары тәрән һыулы, балыҡлы булған, тирәләре ҡуйы урман менән ҡапланған. Ул ҡошҡорт, йәнлектәрҙең иҫәбе-һаны юҡ» («Биксура»); «Ул заманда йылғаның һыуы мул булған, балығы күп булған, буйы ҡуйы ағаслыҡ менән ҡапланған» («Бәндәбикә менән Ерәнсә сәсән» —55, 163—165). Шулай күпкә идеаллаштырып һүрәтләнгән элеккеге менән сағыштырыу тәбиғәттең хәҙер ярлыланыуын күрһәтеү өсөн генә түгел, билдәле социаль мөнәсәбәттәрҙе тойомларға ярҙам итә.

Риүәйәт —эпик жанр. Уның төп үҙенсәлеге — хикәйәләү. Хикәйәләүҙең характеры жанрҙың тәбиғәте, башҡарған

вазифаһы менән билдәләнә. Айырым риүәйәттәрҙең башланышында әкиәтсәрәк итеп һөйләү элементы («Борон-борон замандарҙа...», «Бик борон...» һ. б.) күренеп ҡалһа ла, әкиәт алымы шул башланыштан ары китмәй. Күптәнге ваҡиға һәм күренештәрҙе «булған хәл» рәүешендә һөйләү, уларҙың сығышын (этиологияһын) «аңлатыу» риүәйәттәрҙең стиленә һиҙелерлек үҙенсәлек бирә. Сюжет, ғәҙәттә, бәйән ҡылыу, раҫлау һәм белешмә биреүгә ҡоролоп, риүәйәтсе шуның ысынлылығына тыңлаусыны ышандырыу ниәтендә һөйләй, хәл-ваҡиғаның урыны, ваҡыты, унда ҡатнашҡан кешеләр һәм башҡа шуның кеүек конкрет төшөнсәләр менән эш итә. Ваҡиғалар реаль йәки реаль булыуы ихтимал булған тормош фонында яҡтыртыла. Уйҙырма мотивтар була икән, улары ла шул реаллекте ҡалҡыуыраҡ итеп күрһәтеү өсөн алына.

## Легенда

Халыҡ хикәйәһенең икенсе бер жанры — легенда ла (латин һүҙе, «уҡылырға тейешле текст» тигәнде аңлата), нигеҙҙә, ысынбарлыҡта булып үткән һәм булыуы ихтимал тип уйланылған хәл йәки ваҡиғаларға таянып ижад ителә. Тик риүәйәттәрҙән айырмалы рәүештә, унда фантастик уйҙырма, хыял, мөғжизә мотивтары төп урынды ала, ҡайһы бер легендалар хатта тотошлайы менән уйҙырмаға, ғәҙәттән тыш хәл һәм ваҡиғаларға ҡорола. Шуға ҡарамаҫтан, уларға ла тарихилыҡ хас. Легендаларҙың тарихилығы уларҙағы поэтик уйҙырмаларҙың билдәле тарихи дәүерҙә барлыҡҡа килеүе менән бәйле. Космогоник, этногенетик һәм этнонимик легендаларҙың тарихи нигеҙен күп осраҡта ана шул поэтик уйҙырмаға ҡарап ҡына төҫмөрләргә мөмкин. Мәҫәлән, айҙағы таптарҙың барлыҡҡа килеүен аңлатыусы легендаларҙа реаллек шул еҫемдәрҙең ысынбарлыҡта бар булыуында, ә ситуациялар (айҙың көйәнтәле ҡыҙҙы үҙенә тартып алыуы һ. б.) — бөтәһе лә мөғжизә, поэтик уйҙырма. Ләкин ул ҡоро фантазия тыуҙырған уйҙырма түгел, ә боронғо кешенең аң кимәленә, уның мифологик ҡараштарына бәйле тыуған уйҙырма. Шул ҡараштарҙы сағылдырыуы менән ул

тарихи. Халыҡ прозаһын өйрәнеүсе ғалимдар хаҡлы рәүештә легендаларҙы «бик боронғо мифологик ҡараштар, төрлө ышаныуҙар нигеҙендә һәм тирә-йүнде үҙләштереүҙең оҙайлы тарихи процесында барлыҡҡа килгән» ижад төрө (269, 105) тигән фекерҙә тора. Был урында шуны ла әйтергә кәрәк: әле беҙ фантастика тип ҡабул иткән мифтар, улар ерлегендә яралған мифологик легендалар тәүтормош кешеләре өсөн фантастика булып күренмәгән.

Сюжет төҙөлөшө, стиле яғынан легендалар ҙа, риүәйәттәр шикелле, күп төрлө. Тотошлайы менән уйҙырмаларҙан торһа ла, айырым сюжеттар хикәйәләнеше менән риүәйәттән бер ни менән дә айырылмай, мөғжизәле, уйҙырма ваҡиға, булған хәл итеп, раҫлау планында һөйләнелә («Ҡош юлы», «Айыу тоҡомо» —55, 39, 83). Был типтағы хикәйәләрҙе исемдәрен есемдәренә тап килтереп, «легендар риүәйәттәр» тип атау дөрөҫөрәк булыр ине, сөнки бындай сюжеттар йөкмәткеһе менән — легенда, формаһы яғынан — риүәйәт. Рус фольклористикаһында ла был күренеш иҫәпкә алына: «легендарные предания», «легендарные повествования» тигән атамалар (легенда термины менән бер рәттән) ғилми әҙәбиәттә хәҙер бик йыш осрай (265, 248—287; 152, 26).

Икенсе бер төркөм хикәйәләр, уйҙырма, ваҡиға һәм күренештәрҙе әкиәткә тартым стилдә һөйләп биреүҙәре менән айырыла («Айҙағы ике януар», «Шайтан себендәре» — 55, 39, 49). Былары — легендалар.

Легендар риүәйәт һәм легендаларҙың геройҙары тәбиғәт, ҡош-ҡорт, йәнлектәр менән бик еңел аралашып, һәр төрлө ғәҙәти булмаған мөнәсәбәткә инә ала. Аҙашҡан ырыуға бүренең йәшәр төйәк табып биреүе, кешенең шайтан менән ғаилә мөнәсәбәтенә инеүе —былар, әлбиттә, мөғжизәгә ҡоролған уйҙырма ваҡиғалар. Легенда һәм легендар риүәйәттәрҙә тәбиғәт күренештәре лә риүәйәттәрҙәге шикелле статик хәлдә һүрәтләнмәй, ә хәрәкәттә, йәнле итеп тасуирлана. Бында йылғалар «һөйләшә», «бәхәсләшә», «ярыша», «көнләшә» («Ике Инйәрҙең бәхәсе», «Ҡалым», «Ағиҙел менән Яйыҡ», «Ағиҙел менән Ҡариҙел» — 55, 95—96), ай йәберһетелгән етем ҡыҙҙың һыҡтауҙарын «ишетә», уны «ҡыҙғана» («Ай менән Зөһрә», «Зөһрә йондоҙ» — 55, 41—43).

Легендар риүәйәт һәм легендаларҙың геройҙары араһында әкиәт персонаждары (дейеү батшаһы, убыр әбей һ. б.), дини мифтарҙан килеп ингән иблис, фәрештәләр, пәйғәмбәрҙәр, хатта Алланың үҙе лә бар: «Туфан ҡалҡыу» (203, оп. 65, д. 7, л. 145—148*), «Етегән йондоҙ —ете ҡыҙ», «Шайтан себендәре», «Толбуйҙар», «Зөһрә йондоҙ» (55, 39, 49, 70).

Башҡорт халыҡ риүәйәт һәм легендалары хаҡында һүҙ барғанда, түбәндәге үҙенсәлек һыҙыҡ еҫтенә алынырға тейеш. Тәбиғәте менән саф риүәйәт йәки саф легенда кәштәһенә индерерлек әҫәрҙәрҙән тыш, ике жанрҙың да һыҙаттарын үҙендә берләштереүсе әҫәрҙәр — риүәйәт-легендалар байтаҡ («Йөрәктау», «Үткән ғүмер» һ. б. — 55, 120, 259—260). Ундай әҫәрҙәрҙең сюжет төҙөлөшө, ғәҙәттә, һүрәтләнгән ваҡиғаларҙың ҡатмарлылығына, ситуацияларҙың көсөргәнешле булыу-булмауына бәйләнгән. Шуға ҡарап, әҫәр бер эпизодлы йәки күп эпизодлы булырға мөмкин. Эпизодтарҙы яҡтыртыуҙа нәфис һүрәтләүгә ынтылыу тенденцияһы ла ныҡ ҡына һиҙелә. Хикәйәләүҙә әкиәт алымдары ҡулланыу осраҡтары, дөйөм фольклор мотивтарына һәм поэтик традицияларына мөрәжәғәт итеү, сюжеттарҙы контаминациялау күренештәре нәҡ бына ошо хаҡта һөйләй. Әлбиттә, бында ла һөйләүсенең импровизаторлыҡ оҫталығы, халыҡ ижады ҡаҙаныштарын белеүе һәм фольклор традицияларын үҙләштереү, бәйән итеү ҡеүәһе хәл иткес әһәмиәткә эйә.

Риүәйәт һәм легендаларҙың бер-бер еһенә яҡынлығы, шул нигеҙҙә хатта ҡатнаш формалар барлыҡҡа килеүе был жанрҙарҙың сиктәрен айырыу мәсьәләләре буйынса ил фольклористикаһында бик күп бәхәс тыуҙырҙы. Халыҡ прозаһының әкиәт һәм көләмәстәр төркөмөнә инмәгән жанрҙары хаҡында күп һанлы сығыштар, мәҡәләләр һәм монография авторы К. В. Чистов, мәҫәлән, һуңғы сиктә түбәндәге фекергә килеп, былай тип яҙа:

«...Легенда һүҙен ниндәйҙер бер жанрға бәйләмәйенсә, кәрәк булған осраҡта әкиәт һәм риүәйәттәргә ҡарата «легендар» тигән һүҙҙе ҡушып әйтеү, моғайын, дөрөҫөрәк булыр ине, сөнки, ҡәтғи әйткәндә, легенда жанрын айырыуы мөмкин түгел» (318, 24). Ошо уҡ сығышында Чистов

* Оп — опись, д. — дело, л. — лист.

***легенда*** терминын, рус фольклористикаһында күптән билдәләнгән традиция буйынса, дини йөкмәткеле сюжеттарға (христианские легенды) ҡарата ғына ҡуллана.

Легенда һәм риүәйәттәрҙе айырып (бүлеп) тормайынса, бер термин менән йөрөтөү осраҡтарын А. Ганаланян, А. Анцелане хеҙмәттәрендә лә (90; 164) күрергә мөмкин. Жанр төрҙәрен айырыуҙағы ҡыйынлыҡтар, нигеҙҙә, объектив сәбәптәр менән аңлатыла: сюжеттарҙың ныҡ ҡына ҡалыплашҡан даими текстары булмауы, шул арҡала бер жанр формаларының һәм мотивтарының икенсеһенә еңел үтеп инеү мөмкинлегенең киңлеге, һөҙөмтәлә ҡатнаш формалар барлыҡҡа килеү; яңы шарттарҙа боронғо фольклор традицияларының бер ни тиклем йомшарыуы һәм халыҡ ижады әҫәрҙәренең ҡайһы бер үҙгәрештәр кисереүе. Әгәр ҙә риүәйәт һәм легендаларҙың һуңғы 30—40 йыл ваҡыт эсендә генә иғтибар үҙәгенә ҡуйылып, ошо дәүерҙә генә ныҡлап йыйыла һәм өйрәнелә башлағанын иҫкә алһаҡ, жанрҙарҙың саф формалары, бигерәк тә легенданың беҙҙең көндәргәсә сағыштырмаса аҙыраҡ килеп еткәнен аңларға мөмкин. Әммә сюжеттарҙың һан яғынан аҙлығына ҡарап, ***легенда*** терминын ҡулланылыштан сығарыу үҙен аҡламай. Ғилми тикшеренеү барышында тәғәйен осраҡҡа ярашлы рәүештә ***легенда, легендар риүәйәт, риүәйәт-легенда*** терминдарын ҡулланыу маҡсатҡа ярашлы. Быны материалдың үҙе, уның бөгөнгө торошо талап итә.

Дөйөмләштер еберәк төркөмләү күҙлегенән ҡарағанда, легендаларҙы мифологик һәм тарихи легендаларға бүлеп тә йөрөтөргә мөмкин, һуңғы төркөмгә тарихта булған йә булыуы ихтимал хәл-ваҡиғаларҙы, нигеҙҙә, уйҙырмаға ҡороп хикәйәләнгән сюжеттар инә («Салауат батыр» —55, 197—199). Быларҙан тыш, беҙҙә әле бөтөнләй өйрәнелмәгән дини легендалар төркөмө ҙур ғына. Киләсәктә уларҙы ентекләп өйрәнеү бурысы тора.

Легендаларҙың йыш ҡына мифологик мотивтар менән һуғарылыуы, уйҙырмаға ҡоролған булыуы уларҙы күпмелер дәрәжәлә әкиәттәргә яҡынлаштыра. Йәнле репертуарҙа ярым әкиәт, ярым легенда рәүешендә йөрөгән сюжеттар байтаҡ ҡына. Ике жанрҙың да һыҙаттарын берләштергән бындай әҫәрҙәр башҡорт фольклоры ғилемендә «әкиәт-

легенда» тигән исем менән нарыҡланды (45, 47—48, 154—162). Саф әкиәттәрҙән айырмалы рәүештә, уларҙа этиологик мотив өҫтөнлөк итә, фантастик уйҙырмаға ҡоролған ваҡиғалар ҙа тормошта булған итеп һүрәтләнә. «Ағиҙел менән Ҡариҙел», «Урал ҡалымы», «Ҡариҙел» исемле әҫәрҙәр, мәҫәлән, шундайҙарҙан. Аныҡлыҡ өсөн «Ағиҙел менән Ҡариҙел»дән бер-ике өҙөк килтерергә мөмкин: «...Иҫәнғол бер тау башына менеп, ҡарап ултырһа, өҫ-башы йыртылып бөткән бер бабайҙың ҡармаҡ тотоп китеп барғанын күреп ҡалған. Иҫәнғол бабайҙан: «Олатай, һин ҡайһы ырыуҙан?» — тип һораған. «Мин Ҡыпсаҡ ырыуынан», — тип яуаплаған теге кеше. «Кемдең ҡатыны ҡыҙ тапһа, шуның ҡатынын да, атаһын да үлтерергә, тигәс, мин ҡатыным менән ҡыҙымды алып ҡасып киттем. Бына ун өс йыл буйы әҙәм күрмәй, ошо тау-таш араларында йәшәйбеҙ», — тигән бабай. Ҡасып киткәс, бабайҙар ун өс йыл буйы һыу тапмай яфаланғандар икән. Бала ерҙә ятҡан, уның бик һыу эскеһе килгән. Ул, сарсағас, түҙә алмай аяҡтарын типкеләп илап ебәргән. Баланың илап типкән еренән ҡап-ҡара һыу килеп сыҡҡан, ти. Шунан был һыуҙы ла, ҡыҙҙы ла Ҡариҙел тип атағандар»... «Егет йәнә бер һарайҙы асһа, бер күк ат, бер тауис ҡош, бер арыҫлан торған. Арыҫландың тәпәйе, аттың башы бәйләнгән, тауистың тәпәйе тышалып ҡуйылған, ти. Егет арыҫландың алдына ит, тауистың алдына бойҙай, аттың алдына бесән һалып, уларҙы бәйҙән ысҡындырып ебәргән. Былар туйғансы ашап, һарайҙан сыҡҡандар. Аттың бер кешнәп, бер тибеп ебәреүе булған, шул урындан ап-аҡ һыу атылып сыҡҡан. Ағиҙел һыуы шунан барлыҡҡа килгән икән» (45, 155-160).

Килтерелгән тәүге өҙөк, әкиәтсә яңғырауына ҡарамаҫтан, тотошлайы менән легендар мотивтарға ҡоролоуы менән иғтибарҙы йәлеп итә. Ун өс йыл буйы һыуға сарсап йөрөгән ғаилә хәле, ерҙә ятҡан баланың аяҡ тибеүенән ҡап-ҡара һыу килеп сығыу мотивы, асылда, Ибраһим пәйғәмбәр йортонан ҡыуылған Хәжәр һәм уның улы Исмәғил менән булған хәлдәр тураһындағы дини легенданың үҙенсәлекле бер варианты ул. Бер үк әҫәрҙән алынған икенсе өҙөктә иһә әкиәткә хас коллизиялар (геройҙың һарайға инеүе, аслыҡтан интегеп торған ҡош һәм хайуандарҙы ҡотҡарыуы) легендаға

хас этиологик мотив менән үрелеп бирелгән, әммә әкиәт жанры һыҙаттары ҡабарынҡыраҡ һүрәтләнгән.

Ғөмүмән, әкиәт менән легендаларҙың бәйләнештәре, үҙ-ара йоғонтоһо төрлө сюжеттарҙа төрлөсә. Бер осраҡта был бәйләнештәрҙең һөҙөмтәһендә әкиәт-легенда формаһы хасил булһа, икенсе осраҡта этиологик мотив, топонимик мәғлүмәт деталь булараҡ ҡына килеп инә. Төрлө типтағы оҡшашлыҡтар, уртаҡ һыҙаттарҙың яралыуына жанрҙарҙың фольклор системаһында борон-борондан йәнәш йәшәүҙәре, ысынбарлыҡҡа үтеп инеү процесында кисергән уртаҡ яҙмыштары ерлек биргән. Жанр-ара бәйләнештәрҙең, атап әйткәндә, әкиәт менән легендалар мөнәсәбәтенең, быуаттар төпкөлөнән килгән күренеш икәнлеген ҡайһы бер яҙма ҡомартҡылар ҙа раҫлай. Был йәһәттән беҙҙең эраға тиклемге V быуатта йәшәгән атаҡлы грек тарихсыһы Геродоттың «Тарих» китабы ифрат әһәмиәтле сығанаҡ булып тора. Хеҙмәтте фольклор әҫәрҙәре күҙлегенән махсус тикшергән Али Вольф Геродот «Тарих»ының «Скиф хикәйәһе» бүлегендә килтерелгән Таргитай һәм уның өс улы, Геракл менән йылан аяҡлы ҡыҙ (змееногая дева) тураһындағы легендаларҙың әкиәт мотивтары менән һуғарылған сюжеттар булыуын күп һанлы сағыштырма материалдар нигеҙендә дәлилләгән (106, 67).

Халыҡ ижадында легендалар, риүәйәт-легендалар менән тығыҙ бәйләнештә булған йәнә бер жанр бар — ул эпос. Легендалар һымаҡ боронғо эпик әҫәрҙәрҙең тамыры ла мифологик ҡараштарға барып тоташа, һәм ошо дөйөм нигеҙ был жанрҙар араһында уртаҡ мотивтар, ҡайһы бер оҡшаш һыҙаттар үтебинеш күренештәре барлыҡҡа килеүенә сәбәпсе булған. Башҡорт халҡының ҡайһы ғына эпик ҡомартҡыһын алып ҡарама, уларҙың һәр ҡайһыһында тиерлек легендар мотивтар осратырға мөмкин. Боронғо ҡараштар нигеҙендә ижад ителгән «Урал батыр» эпосы уларға айырыуса бай. Бында мифологик легендаларҙың һәр төрлөһөн: күк есемдәре барлыҡҡа килеүе тураһындағыларын (мәҫәлән, «Етегән —ете дейеү» мотивы, Етегәнгә яҡын ике йондоҙҙоң һарат менән буҙат «булыуы»), тауҙар, йылғалар хасил булыуын, хайуандар ҡиәфәтенең сәбәбен аңлатҡандарын (үгеҙ ниңә ярыҡ тояҡлы?) — осратырға мөмкин (49, 33, 134).

Эпостың Мөхәммәтша Буранғолов яҙып алған теksынында этиологик мотивтар әҫәрҙең дөйөм тәбиғәтенә ярашлы рәүештә шиғыр (ҡобайыр) формаһында килһә, әкиәтләшкән икенсе вариантында сәсмә телмәр аша әкиәткә тартымыраҡ легенда стилендә бирелгән: «Халыҡ Урал батырҙы бик ҙурлап, хөрмәтләп, ҡалҡыуыраҡ бер ергә күмә, шунан һәр кем уның ҡәбере өҫтөнә бер ус тупраҡ һалып сыға. Уның ҡәберенә услап-услап һала торғас, шул тиклем күп тупраҡ өйөлә, хатта ҡәбер өҫтөндә бик ҙур бер тау барлыҡҡа килә. Ана шул тауға халыҡ Урал тигән исем биргән дә инде» (49, 144). «Урал батыр» сюжеттарындағы легендар һыҙаттар этиологик мотивтар менән генә сикләнмәй, әлбиттә. Терек-лек-үлем тураһындағы ҡараштар, эпик геройҙың Күк батшаһы ҡыҙы Һомай менән осрашыуы, Һомайҙың аҡҡош сүрәтенә лә, ҡыҙ сүрәтенә лә инә алыусы йән эйәһе булыуы кеүек мотивтар легендаларҙа ла, әкиәттәрҙә лә урын алып, был жанрҙарҙың үҙ-ара тығыҙ бәйләнештә үҫкән ижад формалары икәнлеген дәлилләүсе миҫал булып торалар.

Уртаҡ мотивтарҙың һүрәтләнешендә жанрҙарҙың тәбиғәтенән килгән үҙенсәлектәр булыуын да ҡыҫҡаса әйтеп китеү кәрәк. Мәҫәлән, эпоста ҡыҙҙың аҡҡошҡа әүерелеүе, уның артабанғы эштәре эпик геройҙарҙың эпик масштабтағы ҡылыҡтары фонында хәл ителһә, легендала тәфсиләйенерәк, тарыраҡ арауыҡта тормошҡа аша, ваҡыт төшөнсәһе лә бер эпизод эсендә асыла. Аҡкошто атырға йыйынған егет тә -- ғәҙәти һунарсы. Ҡоштоң сибәр ҡыҙ сүрәтенә инеүе, егеттең уға өйләнеүе, ошо ғәҙәти булмаған ҡатын нәҫеленән Юрматы ҡәбиләһе таралыу тураһындағы мәғлүмәт ҡыҫҡа формала һәм һис шикһеҙ булған хәл итеп хәбәр ҡылына (42,117). Һүрәтләнгән хәл-ваҡиғаларҙы тормошсан юҫыҡҡа йүнәлдереү тенденцияһы мифологик ҡараштар менән һуғарылған: «Урал батыр», «Аҡбуҙат», «Заятүләк менән һыуһылыу» кеүек сюжеттарҙа этиологик мотивтарға таяныу нигеҙендә ҡалҡыуландырыла.

Был тенденция сәсәндәрҙең, эпостағы ваҡиғаларҙың әһәмиәтлелегенә баҫым яһап, ҙур күләмле ҡобайырҙарҙы һөйләр-кәйләр алдынан тыңлаусыларға мөрәжәғәт иткән түбәндәге инеш һүҙҙәрендә лә асыҡ сағыла:

Тыңлағыҙ һеҙ, йәмәғәт,
Боронғоларҙан аманат,
Уға итһәгеҙ хыянат —
Һеҙгә булыр яманат.

## Йыр-риүәйәт, йыр-легенда

Башҡорт фольклористикаһында «йыр тарихтары» тип йөрөтөлгән бер төркөм әҫәрҙәр бар. Уларҙың сюжет-композиционтөҙөлөшө риүәйәт, һирәкләберәк легенда һәм йыр тексының органик бәйләнешенә нигеҙләнә. Сюжеттың драматик көсөргәнешле моменты поэтик текст (йыр) аша, ә ваҡиғалар үҫеше, геройҙың шәхесенә, эшмәкәрлегенә ҡағылған деталдәр сәсмә формала бирелеүсән. Бындай әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен тәрәнәйтеүсе, тыңлаусыға тәьҫир итеү ҡеүәһен көсәйтеүсе йәнә бер компонент — көй — шулай уҡ бик ҙур роль уйнай.

Йыр менән риүәйәттәрҙең, ә ҡайһы саҡта йыр менән легендаларҙың органик берекмәһенән торған сюжеттарҙы «йыр-риүәйәттәр», «йыр-легендалар» тип атарға ла булыр ине, сөнки «йыр тарихы» тигән термин бөтә осраҡта ла үҙен аҡлап бөтмәй. Халыҡ араһында йөрөгән сюжеттарҙың байтағы тик йыр тарихы ғына түгел, ә халыҡ тормошонан бер хикәйә, уларҙа йыр тексына ҡарағанда, проза өлөшө өҫтөнлөк итә. («Буранбай», «Бейеш», «Таштуғай», «Ғилмияза», «Бүртә ат» һ. б.) В. С. Юматовтың: «Башҡорт тарихи йырҙары, асылда, поэтик формаға төрөлгән риүәйәттәр ул» (336, 45), — тигән фекере нәҡ ошо типтағы йырҙарға ҡағыла.

Ҡыҫҡаһы, «йыр-риүәйәт» тигән термин (конкрет текстҡа ҡарата «йыр-легенда» ла булырға мөмкин) жанрҙың йөкмәткеһен туранан-тура асып биреүе менән уңайлы. Ҡушма терминдар ҡулланыу фольклористика фәнендә, ғөмүмән, йыш осрай: «әкиәт-легенда», «риүәйәт-легенда», «әкиәт-йомаҡ», «йыр-баллада»; ғилми әйләнештә «йыр-риүәйәт», «йыр-легенда» тигән атамалар ҙа юҡ түгел (126, 12).

Башҡорт йыр-риүәйәттәренең жанр үҙенсәлектәре хаҡындағы ҡараштар һуңғы дәүерҙәрҙә, йәғни революциянан

һуңғы осорҙа, йыйылған материал нигеҙендә тупланды. С. Г. Рыбаковтың XIX быуаттың аҙағында донъя күргән «Урал мосолмандарының музыкаһы һәм йырҙары» (250) исемле, дөйөм алғанда, бик тә әһәмиәтле, китабы иһә жанр тәбиғәтен тулыһынса күҙаллауҙа өҫтәмә сығанаҡ булып ҡына ҡулланыла ала, сөнки унда йыр тарихтары (әҫәрҙең риүәйәт өлөшө) күпселектә ҡыҫҡартылып, бер нисә һөйләм менән генә әйтеп бирелгән. Әммә архивтарҙа һаҡланған һәм баҫылып сыҡҡан фольклор материалдарын сағыштырма планда ентекле өйрәнеү йыр-риүәйәттәрҙең һәм йыр-легендаларҙың бик оҙайлы юл үткән художество күренеше, жанр төрө булыуы хаҡында фекер йөрөтөргә мөмкинселек тыуҙырҙы. Мәсьәләне асыҡлауҙа тарихи-этнографик сығанаҡтарҙың роле лә ифрат ҙур. Айырыуса ҡиммәтле сығанаҡтарҙың береһе —X быуат башына (922 й.) ҡараған Әхмәт Ибн-Фаҙлан яҙмалары, атап әйткәндә, ундағы беҙҙе ҡыҙыҡһындырған «Сыңрау торна» легендаһы хаҡындағы мәғлүмәттәр. Легендала ниндәйҙер бер яу килеүе, шул яу ваҡытында башҡорттарҙың хәле **мөшкөлләнгән** бер мәлдә, әллә ҡайҙан торналар килеп сығып сыңрап ебәреүе, һәм был хәлдән хәүефләнгән дошмандарҙың кире әйләнеп ҡасыуҙары тураһында бәйән ҡылына (139, 131). Ғәрәп сәйәхәтсеһенең яҙмаларында легендаға бәйле көй булыу-булмауы хаҡында бер ни ҙә әйтелмәй. Материалдарына ҡарағанда, Фаҙланды, башлыса, халыҡ араһында йәшәгән төрлө ырым-ышаныуҙар ҡыҙыҡһындырған булырға тейеш. Башҡорттарҙың «Сыңрау торна» легендаһы мәжүсилек һыҙаттарын йөрөткән сюжет булараҡ, Ибн-Фаҙландың иғтибарын йәлеп иткән. Шулай булмаһа, был ҡоштар хаҡындағы хикәйә башҡорттар табынған ун ике Раббы тураһында һөйләнелгән контекста бирелмәҫ ине.

Беҙгә билдәле булған мәғлүмәттәр буйынса, «Сыңрау торна» әҫәренең көйө ике вариантта тәү башлап С. Г. Рыбаков тарафынан яҙып алына һәм, нотаға һалынып, матбуғатта сыға. Көйгә бәйле халыҡ легендалары ла музыка белгесенең иғтибарынан ситтә ҡалмай. Шуныһы ҡыҙыҡ, Рыбаков яҙып алған хикәйәләр — Әхмәт Ибн-Фаҙлан ҡағыҙға теркәгән архаик мотивтар менән ауаздаш. Тауҙарҙа йөрөгән торналарҙың сыңрап бейеүҙәре, уларҙың сыңрауын

ҡурайсы егеттең көйгә һалыуы тураһында һөйләгәндән һуң, С. Г. Рыбаков түбәндәгеләрҙе яҙа: «Был торналарҙы һирәк күрәләр. Әгәр ҙә инде уларҙы берәйһе күрһә, йә тауышын ишетһә, шул кеше йә бик бәхетле була, йә тиҙҙән үлә, тип ышаналар башҡорттар. Халыҡ «Сыңрау торна» көйөн тыңларға яратмай: «Торналар сыңраған ерҙә йә һуғыш, йә аслыҡ була»,— тип һөйләнеләр башҡорттар» (250, 141).

С. Г. Рыбаковтың «Сыңрау торна» көйөнөң өн оҡшатыуға нигеҙләнеүе тураһындағы мәғлүмәте лә бик ҡиммәтле: өн оҡшатыуға ҡоролған көйҙәрҙең архаик күренеш булыуы хаҡындағы ҡараштар фән донъяһында күптән нығынған фараздар даирәһендә йөрөй. Ошоларҙы иҫкә алғанда, «Сыңрау торна» көйөнөң легендаһы ғына түгел, үҙе лә бик боронғо замандарҙа яралған, ырым-ышаныуҙар ерлегендә тамырланған мифологик легендалар менән бергә йәшәгән тип фараз ҡылырға була. «Сыңрау торна» көйө башҡарылған ҡурай ҙа, тикшеренеүселәрҙең әйтеүенә ҡарағанда, борондан килгән музыка ҡоралы (61, 11).

Фольклор традицияларының тотороҡлолоғо һуңғы йылдарҙа яҙып алынған варианттар миҫалында ла асыҡ күренә. Баймаҡ районының атаҡлы ҡурайсыһы Кәрим Дияров репертуарынан килеп ингән яҙмала, мәҫәлән, асылда, шул уҡ боронғо мотив — торналарҙың бәлә әшкәртеүсе ҡош булыуы үҙәк идеяны тәшкил итә. Торналар сыңрауына хәүефләнеп, яуға ныҡлап әҙерләнгән халыҡ илгә ябырылған дошманды еңеп сыға (55, 46, 47).

«Сыңрау торна» легендаһының архаик тамырҙарын юллауҙа Әбйәлил районының Ҡусҡар ауылында йәшәүсе сәсәниә Гөлнур Мәмлиеваның көньяҡ-көнсығыш Башҡортостанда «Сыңрау торна» бейеүе булғанлығы хаҡындағы мәғлүмәте айырыуса ҙур әһәмиәткә эйә. Дөрөҫ, бала сағында күргән бейеү информанттың хәтерендә тулыһынса һаҡланып ҡалмаған, әммә иҫләгән тикләме буйынса ғына тергеҙелгән хәрәкәттәрҙең дә мәғәнәүи ҡиммәте баһалап бөткөһөҙ: бейеүсе ир-егеттәрҙең түңәрәк яһап урынлашыуы, «Сыңрау торна» көйөнә хәрәкәттәр яһауы, һәр бейеүсенең баш бармағы менән һуҡ бармағына ағас ҡабығы бәйләнеп (ҡабыҡтар устарҙа ла булырға мөмкин), шул ҡабыҡтарҙы һуғыуҙан үҙенсәлекле тауыш барлыҡҡа килеүе, ҡурайсының

уртала тороуы кеүек деталдәр, бер яҡтан, бейеүҙең сыңрау торналар уйнауына оҡшатып башҡарылғанлығына (сыңрау торналар уйнағанда башлығы уртала уйнай), икенсе яҡтан, башҡа халыҡтарҙың торналарға бәйле боронғо легендаларын, йолаларын хәтергә төшөрә, башҡорт көй-легендаһының, бейеүҙәренең тамырҙары үтә тәрәндә булып, ҙур киңлектәргә йәйелгәнлеген белгертә. Атап әйткәндә, «Сыңрау торна» бейеүендәге ҡабыҡ һуғыу күренеше Африкала йәшәгән ҡайһы бер ҡәбиләләрҙең боронғо йолалары менән ауаздаш: ул ҡәбиләләр үҙҙәренә зарар килтергән торналарҙы ҡурҡытыу ритуалын башҡарыуҙа шылтыраҡтар һәм маскалар ҡулланған (326, 41—42). Оҡшаш мотивтар Боронғо Греция халыҡтарының мифологик традицияларында ла урын алған (326, 42). Ә инде торналар хаҡындағы мифтарҙың, шул иҫәптән башҡорт легендаһының, башҡа мотивтарын да күҙ уңында тотоп тикшергәндә, был сюжеттарҙың таралыу арауығы бермә-бер киңәйә төшкәнлеге мәғлүм булыр (Кесе Азия, Ҡара диңгеҙ буйы, Кавказ, Һиндостан, Ҡытай). Бәләкәй буйлы кешеләрҙең торналар менән бәрелеше хаҡындағы мифтар Европаның төньяғында — Скандинавияла йәшәүселәр һәм Балтик буйы — фин халыҡтарының ижадында ла күҙәтелә. Былдай мифтарҙы йыйыуға айырыуса күп көс һалған фин этнографы Юрио Тойвонен оҡшаш мотивлы сюжеттарҙың шулай уҡ Төньяҡ Америка индеецтары ижадында булыуын асыҡлай (66 а, 76—78).

Пигмейҙар менән торналар (ҡаҙҙар) һуғышы мотивы — архаик мотив. Уның ни тиклем боронғолоғон күҙаллау өсөн матди мәҙәниәт ҡомартҡыларында һаҡланған һүрәттәр, атап әйткәндә б. э. т. 570 йыл тирәһендә эшләнгән Франсуа вазаһы (Этрурия) хаҡындағы мәғлүмәттәрҙе (66 а, 74) иҫкә төшөрөү генә лә етә.

Йәнә башҡорт материалдарына килгәндә, Гөлнур Мәмлиеваның тағы бер мәғлүмәтен иғтибарға алмау мөмкин түгел, уны ул ағаһының фронттан яҙған хатына таянып белдерҙе: «Сыңрау торна» бейеүен башҡорт яугирҙәре (фронтҡа бергә киткән ауылдаштар, бер төбәк егеттәре) һуғышта йөрөгәндә бейегәндәр. Ихтимал, «Сыңрау торна» дошманды, бәләне «кире ҡағыуға», «өркөтөүгә» йүнәлдерелгән магик функциялы йола бейеүе булараҡ башҡарылғандыр.

Бейеү структураһындағы йола һыҙаты (элементы), торналарға бәйле һәр төрлө ырымдарҙың йәшәүе ошондай фекер уяныуға нигеҙ бирә.

Бынан тыш, архаик һыҙаттарҙы яҡшы һаҡлаған «Кәкүк» бейеүе лә, асылда, тик бейеүҙән генә тормай: уның эсендә шулай уҡ көй (бейеү көйө), кәкүккә мөрәжәғәт рәүешендә яңғыҙ башҡарылған йыр һәм йола бейеүе, ҡорбан килтереү рәүешен сағылдырған магик хәрәкәттәр берләшә (Кәкүк бейеүҙәре хаҡында тулыраҡ мәғлүмәт ҡулъяҙманың 141 — 144-се битендә).

Бейеүҙең, йырҙың килеп сығышы, ҡасан, ниндәй осраҡтарҙа, ни өсөн башҡарылыуы тураһында мәғлүмәт биреү кәрәк булғанда, информант уны хикәйә рәүешендә тыңлаусыға еткерә, йырын йырлап, бейеүен бейеп күрһәтә, йәғни «Кәкүк» сюжеттарында ла, «Сыңрау торна» сюжеттарындағы һымаҡ, бер үк ваҡытта башҡарыла торған ҡатнаш формалар хәрәкәт итә. Уларҙың тамырҙары боронғо сәнғәттәге синкретизм күренешенән һутланған булырға тейеш. Хәҙер ритуаль бейеүҙәр онотола барғанлыҡтан, күберәген көй-легенда, йыр-легенда формаһы, хатта йыр үҙе генә лә йәшәй.

Фольклор — ысын мәғәнәһендә уникаль күренеш: унда бер үк ваҡытта тотороҡлолоҡ та, үҙгәреүсәнлек тә бар, һәм ошо һыҙаттарҙың нисбәте ауыҙ-тел ижады әҫәрҙәренең характерына йоғонто яһай. Боронғо мотивтар менән һуңғы дәүерҙәр ағышында яралған йәки үҙгәргән мотивтарҙың нисбәте һәр текста үҙенсә була. Шуға ла теге йәки был мотивтың яҡынса хронологияһын асыҡлау өсөн әҫәрҙең билдәле булған барлыҡ варианттарын, версияларын, айырым билдәләрен (реалияларын) ентекле өйрәнеү мотлаҡ шарт булып тора. Бер үк ваҡытта дөйөм фольклор мөхите лә күҙ уңында тотолорға тейеш, сөнки фольклор —ул, әйткәнебеҙсә, бөтә жанрҙары ла бәйләнештә йәшәгән тығыҙ бер система.

Система күҙлегенән ҡарағанда, типологик күренештәрҙе, һәр төрлө тарихи-культура бәйләнештәрен иҫәпкә алғанда, йыш ҡына башҡа халыҡтарҙың материалына мөрәжәғәт итеү ихтыяжы ла тыуа. Нәҡ бына шул донъя фольклорына күҙ ташлау һөҙөмтәһендә сыңрау торналар хаҡындағы башҡорт сюжеттарының ҡайһы бер ҡаршылыҡлы күренгән

урындарын асыҡлау, бейеүҙәренең, шулай булғас, көйҙәренең дә, йолаларға бәйле булыуын билдәләү мөмкинлеге тыуҙы. Ә был инде, үҙ нәүбәтендә, көй-легенда, йыр-легенда, йыр-риүәйәт рәүешендәге ҡатнаш жанр формаларының борондан килгән ижад төрө икәнлеге тураһында һығымта яһауға юл асты.

Оҡшаш жанрҙарҙың башҡа халыҡтар (ҡаҙаҡ, дағстан, грузин, фарсы һ. б.) ижадында булыуы (289, 18; 290, 210; 307, 71—88; 97, 12—13) шулай уҡ беҙҙең һығымтаны ҡеүәтләүсе өҫтәмә дәлил булып тора. Был йәһәттән бигерәк тә боронғо грек ғалимы Страбондың яҙмалары иғтибарға лайыҡ. Фарсыларҙың тәрбиә рәүешенә туҡталып, ул түбәндәгеләрҙе билдәләй: «Уларҙың уҡытыусылары бик тә тәжрибәле әңгәмәселәр. Файҙалы реаль әйберҙәр тураһында һөйләгәндә, телмәрҙәренә йыр менән, йә йырһыҙ Аллаларҙың, йә булмаһа иң яҡшы кешеләрҙең эшмәкәрлеге хаҡында мифтар ҡушып ебәрәләр» (326, 17).

Башҡорт йыр-риүәйәттәренең типологик күренеш икәнлеген иҫбатлаусы дәлилдәр һуңғараҡ осорҙарҙа ижад ителгән материалдар менән дә нығытыла. В. К. Соколованың рус халҡының тарихи риүәйәттәренә бағышланған хеҙмәтендә, мәҫәлән, рустарҙың Степан Разин хаҡындағы, словактарҙың Яношик тураһындағы риүәйәттәре телгә алынып, шул риүәйәттәрҙәге йыр текстарының вазифаһына бәйле ифрат ҡыҙыҡлы күрһәтмәләр бар. Тикшеренеүсенең П. И. Мельников-Печёрский китабынан алып килтергән бер өҙөгө айырыуса иғтибарҙы йәлеп итә: «...возница ҡасҡындар, Разин һәм хазиналар хаҡында һөйләй башланы, уның ҡасҡындар тураһындағы хикәйәләре иһә йырҙар менән аралашып барҙы» (265, 241),— тиелә унда. Беҙҙеңсә, рустарҙың ҡасҡындар тураһындағы риүәйәттәре тәбиғәте һәм функцияһы менән башҡорт халҡының йыр-риүәйәттәренә яҡын тора.

Ижтимағи үҫештең һуңғараҡ баҫҡыстарында яралған материалдарға ғына таянып эш итеү жанрҙар генезисы мәсьәләләрен тикшергәндә бер яҡлыраҡ һығымталарға алып килеүе мөмкин. Заманында был хәл башҡорт йыр-риүәйәттәрен өйрәнеү юлында күҙәтелде. Тарихи йырҙарҙың (ә уларҙың күпселеге йыр-риүәйәттәр формаһында) барлыҡ-

ҡа килеүен Ә. Н. Кирәев (Кирәй Мәргән), мәҫәлән, фольклорҙа героик эпос традицияларының һүлпәнләнә башлаған дәүеренә ҡайтарып ҡалдырҙы һәм уларҙы «яңы шарттарҙа эпик форманың үҙенсәлекле дауам ителеше» рәүешендә тыуған ижад төрө тип иҫәпләне (135, 368, 369). Бер төркөм әҫәрҙәргә ҡарата был фекер дөрөҫ булһа ла, дөйәм алғанда, уның менән килешеүе ауыр, сөнки тарҡала барған эпос тарихи йырҙар (йыр-риүәйәттәр) барлыҡҡа килтереүсе берҙән-бер сығанаҡ түгел.

«Жанрҙы өйрәнеү, — тип яҙҙы В. В. Виноградов, — уның тарихын асыҡлауға ғына ҡайтып ҡалмай, ә бәлки уның мөһим үҙенсәлектәрен, художестволы образдарын һәм стиль билдәләрен тарихи үҫештә ҡарауҙы талап итә» (84, 10).

Йыр-риүәйәт һәм йыр-легендаларҙың художестволы «йөҙө» уларҙың синтетик тәбиғәтенә бәйле ярала, йәғни һәр бер конкрет әҫәр ике жанрға —йырға һәм риүәйәт, легендаларға хас сифаттарҙы үҙ эсенә ала. Теге йәки был йырҙың килеп сығышына бәйле ваҡиғалар ысынбарлыҡта булған хәл итеп һүрәтләнә. Борон заманда, элек булған хәлдәрҙе лә, билдәле бер осорҙа, билдәле бер ерҙә булған ваҡиғаларҙы, шәхестәрҙе (мәҫәлән, изгелекле ҡаҫҡындар: Бейеш, Ишмырҙа, Баяс) һүрәтләгәндә лә уларҙың һис шикһеҙ ысынлығына ышандырырға ынтылып хикәйәләү нәҡ традицион риүәйәт стилендә. Урын, ваҡыт төшөнсәләре күп осраҡта конкретлаштырып бирелә. Мәҫәлән: «Беҙҙең Таһир ауылына яҡын ғына Атҡарағай тауы ята. Тауҙың башында яңғыҙ ғына ҡарағай үҫеп ултыра. Ситтән ҡараһаң, ошо ҡарағай атҡа оҡшай. Шуға күрә Атҡарағай тигән исем биргәндәр» («Ғилмияза»—45, 131); «Башҡорттар батша хөкүмәтенә буйһонғас, ҡаҙаҡ ханы Әбелхәйер башҡорттарҙы үҙенә ылыҡтырыу өсөн төрлө саралар күрә башлай»... («Таштуғай» — 55, 273). Былдай башлам — риүәйәт жанры өсөн типик күренеш.

Ғәҙәттә, йыр-риүәйәттең, йыр-легенданың хикәйәләү өлөшө (риүәйәте) йырсы йәки ҡурайсы тарафынан йыр йырланыр алдынан йә аҙағынан һөйләнелә, һирәкләп йыр куплеттары араһында һөйләп алыу осраҡтары ла була. Әҫәрҙең музыкаль-поэтик өлөшө иһә геройҙың психологик хәлен, тойғо-кисерештәрен биреүҙә ҙур роль уйнай. Миҫал өсөн

«Ғилмияза» йыр-риүәйәтенең геройы — Ғилмиязаның йыр-моиологын алырға булыр ине. Бала саҡта уҡ урланып, сит ерҙә көн иткән ҡыҙ бала яҙмышы, уның һағыштары, тыуған илен һағынып, өҙгөләнеүҙәре йырҙа иҫ киткес юғары художестволы кимәлдә һүрәтләнгән:

Һаҡмар һыуы аға ла ҡибла табан,
Урал тауы буйлап та көн битләп.
Тыуған илкәйемә ҡайтыр ҙа инем
Аяҡтарым талһа ла имгәкләп.

Йырҙың көйө —башҡорт оҙон көйҙәренең классик үрнәге. «Мелодик күтәрелештәр һәм түбәнәйтеүҙәргә, мәғәнәле паузалар һәм контраст регистрҙарҙы ҡаршы ҡуйыуға (сопоставление) бай» (166, 4) —был көй йыр тексының йөкмәткеһен иң юғары эмоциональ нөктәгә еткерә.

Йыр-риүәйәттәрҙең музыкаль-поэтик өлөшөндә диалог алымы ярайһы уҡ йыш осрай. Үрнәк рәүешендә «Ҡарасәс» риүәйәтенән бер өҙөк килтерәйек:

«...Ҡарасәс бер нисә йыл тол булып ултыра. Тирә-яҡтан уны һоратып, күп кенә яусылар килеп теңкәһенә тейәләр. Килгән бер ен кире ҡайтарып тора. Шулай ҙа Ҡарасәсте бик яҡшы белгән ир, күҙгә-күҙ ҡарашып һөйләшеү өсөн, уның янына үҙе килә. Ҡарасәсте ул йыр менән әүрәтмәк була. Ир әйтә:

Ҡара сәскәйеңдең толомдарын
Өстән үреп, сулпы таҡҡанһың;
Өс яусым да яулап кире ҡайтты,
Ҡабул итмәй кире ҡаҡҡанһың.

Ҡарасәс яуап бирә:

Яусыларың ҡайтты, һис ҡаҡманым,
Оялдым шул вәғәҙә бирергә.
Яусылатып барыр түгелмен ҡыҙ,
Теләһәм дә һине күрергә.

Ир әйтә:

Урамдарҙан үтә, юлдар түтә,
Семәрле лә сана көн дә үтә.

Һөйгән генә йәрең зирәк булһа,
Ғүмерҙәрең зәүерҙә үтә.

Ҡарасәс әйтә:

Төштәремдә күрҙем килеренде,
Әллә мин дә булдым күрәҙә.
Йондоҙлама һалдым, дөрөҫ төштә,
Инде, бәғ(е)рем, бирәм вәғәҙә.

Тол ир, тол Ҡарасәс менән туй уҙғарып, икенсе бәхеттәрен табып, донъя кәтәп киткәндәр» (55, 310 — 311). Геройҙарҙың ҡара-ҡаршы йырлашыуы хикәйәләүҙең тәьҫир көсән арттыра, уға эмоциональ биҙәктәр өҫтәй, һүрәтләнгән хәл-ваҡиғаларҙы сағыуыраҡ күҙ алдына килтерергә булышлыҡ итә.

Риүәйәт һәм йыр-диалогтарҙы берләштергән сюжеттарҙы театралләштереп, драма әҫәре кеүек сәхнәлә уйнарға мөмкин. Күренекле сәсән һәм драматург Мөхәммәтша Буранғоловтың йыр-риүәйәттәр нигеҙендә әллә күпме драма ижад итеүе, 1920 — 1930 йылдарҙа был әҫәрҙәрҙең («Шәүрә килен», «Ашҡаҙар» һ. б.) Башҡорт драма театры һәм ауыл клубтары сәхнәләрендә, майҙандарҙа уйналыуы осраҡлы түгел. Сағыштырып ҡараһаң, художестволылыҡ йәһәтенән йыр-риүәйәттәр ғәҙәти хикәйәгә ҡоролған сюжеттарҙан айырылыбыраҡ тора. Драматик, лирико-драматик тонға төҙөлгән йыр тексы хикәйәләү өлөшөнөң дә шул тонға яҡынлашыуына күпмелер дәрәжәлә алшарт булып тора.

Конкрет ваҡиғалар эҙе буйынса конкрет тарихи шарттарҙа ижад ителгән әҫәр замандар үтеү менән, телдән телгә күсеп килә торғас, ныҡ ҡына үҙгәрештәргә дусар була: факттар алмашыныу, анахронизм күренештәрен йыр-риүәйәт, йыр-легендаларҙа ла бик йыш осратырға мөмкин. Шуға ҡарамаҫтан, һүрәтләнгән ваҡиғаларҙың тарихи ерлеге йыр-риүәйәттәрҙә, йыр-легендаларҙа ғәҙәттәге риүәйәт һәм легендаларға ҡарағанда нығыраҡ һаҡлана. Быны сәбәбе — әҫәрҙәге йыр тексының сағыштырмаса тотороҡло булыуында. Камиллашҡан шиғри форма (өҫтәүенә, махсус көйө лә булһа), сәсмә телмәргә ҡарағанда, һәр төрлө йоғонтоно аҡрыныраҡ ҡабул итә, аҡрыныраҡ үҙгәрә. Әйтәйек, «Таш-

туғай» һәм «Ғилмияза» кеүек атаҡлы әҫәрҙәрҙең сәсмә формалағы риүәйәт өлөшө төрлөсә вариантлаша. Ләкин тәрән мәғәнәле «Таштуғайҡай, һинең кәкүгең юҡ —үҙ Уралҡайыма ҡайтайым», йәки «Тыуған илкәйемә ҡайтыр ҙа инем, аяҡтарым талһа ла имгәкләп» кеүек юлдар һәр вариант өсөн тиерлек даими. Сюжет ойоштороуҙа, әҫәрҙең тарихын үҙенә «яҡын тотоуҙа» йыр тексының роле ифрат ҙур. Әлбиттә, бынан бик күп йылдар элек ижад ителгән йыр-риүәйәттәр беҙҙең көндәргә төрлө сифатта килеп еткән: иҫ киткес төҙөк сюжетлы, хатта эпик ҡомартҡыларҙы хәтерләткән әҫәрҙәр менән бер рәттән («Икенсе әрме», «Ҡаһым түрә»), йыр тарихы бер-ике һөйләм менән генә еткерелгәндәрен дә осратырға мөмкин. Был инде, бер яҡтан, һүрәтләнгән ваҡиғаларҙың мөһимлегенә, бөгөнгө көн талаптарына рухи йәһәттән яңғырашлы булыуына бәйләнгән булһа, икенсе яҡтан, һөйләүсенең башҡарыу оҫталығына, телмәр ҡеүәһенә, тарихты тоя белеү мөмкинселегенә бәйләнгән. Йыр-риүәйәттәр араһында һирәкләп йырға ярҙамсыл вазифа йөкмәтелгән сюжеттар ҙа юҡ түгел. Бының асыҡ миҫалы — «Кәмилә» риүәйәте. Унда йыр тексы, топонимик мәғлүмәт менән бер рәттән һөйләнелгән ваҡиғаны (ысынлап та, нәҡ риүәйәткә хас алым) раҫлау өсөн индерелеп, әҫәрҙең иң аҙағында килтерелә: «Кәмилә аҙаҡтан юҡ булды. Уны шул таштан сыйҙым өҫтенә һикереп төшөп үлгән тинеләр. Аҙаҡтан халыҡ был ташты «Кәмилә ташы» тип йөрөтә башланы. Күп кешеләргә таныш ошо йыр ҙа Кәмилә тураһында ул:

Кесе Инйәркәй буйы, ай, әрәмә,
Әрәмәһеҙ юҡтыр йәме лә.
Яуыз ҡарсыҡ Базый этлегенән
Әрәм булды бахыр Кәмилә» (55, 312).

Шуны ла әйтергә кәрәк, йыр тексы ҡатыштырып һөйләнелгән һәр бер риүәйәтте йыр-риүәйәт тип атап булмай. (Был термин махсус көй-йырҙары һәм уларға бәйле тарихтары булған сюжеттарға ҡарата ғына яраҡлы.) Мәҫәлән, ҡайһы берҙә йыр тексы сюжетҡа бик үк органик рәүештә инмәй, бәлки традиция буйынса йыр-риүәйәттәргә оҡшата биреп төҙөлгәндәре осрай. «Юлҡай менән Бәшәрғол» тигән

риүәйәт — бының асыҡ миҫалы. Теге йәки был төбәктә, хатта бер ауылда ғына билдәле булған мәрәкә, көлкөлө ваҡиғалар ҙа халыҡ хикәйәһенә ерлек була ала. Һүҙгә оҫта кешеләр бындай хәл-әхүәлдәргә ҡарата сатирик йә юмористик таҡмаҡ та сығарып өлгөрә, һәм ул таҡмаҡ шул ваҡиғаға бәйле рәүештә йөрөй, булған хәлде раҫлау, мәрәкәләү функцияһын башҡара. Бындай сюжеттар, ғәҙәттә, көләмәскә бик тартым була. Уларҙағы йырҙарҙың махсус көйҙәре лә юҡ, популярлығы ла үҙ төбәгенән ары китмәй. Таҡмаҡлы, йырлы булыуҙарына ҡарап, бындай әҫәрҙәрҙе йыр-риүәйәттәр тип әйтеп булмай, әлбиттә. Махсус көйө булмағас, һөйләү өсөн ситуация тыумаһа, был таҡмаҡтар йәки ҡыҫҡа йырҙарҙың барлығы, ғөмүмән, бик иҫәпкә алынмай. Мәрәкә хәлгә ҡарата тыуҙырылған риүәйәттәргә миҫал рәүешендә Әхмәт Сөләймәнов тарафынан яҙып алынған «Таҡыя сусаҡ» исемле сюжетты алырға мөмкин. Ул топонимик риүәйәттәргә хас алым — географик объект —Таҡыя сусаҡты (Бөрйән районында) һүрәтләү менән башланып, шул сусаҡта булған мәрәкә хәлде һөйләүгә ҡоролған. Текстың был өлөшө көләмәс стилендә: ваҡиға көтөлмәгәнсә тамамлана: ҡарттарҙың айыу тип атҡаны ҡара һыйыр булып сыға. Әммә сюжеттың тамамланышы риүәйәтсә: хәлдең булғанлығын раҫлау өсөн Ҡәйүм тигән ҡарттың таҡмаҡ сығарыуы хәбәр ителә һәм уның тексы килтерелә:

Таҡыя сусаҡ башында
Таҙғаҡ яһай өс егет.
Иң олоһо —Садиҡ «батыр»
Ҡылған йәштәргә өгөт.
Ғәлиәкбәр айыуының
Үткер икән мөгөҙө.
Садиҡ «батыр» батыр булғас,
Атып йыҡҡан бер үҙе (203, оп. 65, д. 56, л. 40).

Бындай характерҙағы сюжеттар ҙа халыҡ араһында байтаҡ булырға тейеш. Айыу урынына һыйыр, төлкө урынына, яңылышып, эт, болан атыу мотивтары — традицион мотивтар һәм уларға эйәреп, төрлө таҡмаҡтар, йәиһә юмористик бәйеттәр йөрөй. Саҡмағош районында Ғайса Хөсәйенов

яҙып алған «Айыу ҡыуағы» (310, АЭ 1973) исемле сюжет, мәҫәлән, үрҙә килтерелгән риүәйәткә йөкмәткеһе менән дә, төҙөлөшө яғынан да бик яҡын.

Шулай итеп, күптән булған йәки булыуы ихтимал булған күренештәрҙе, ваҡиғаларҙы һүрәтләп халыҡ төрлө характерҙағы хикәйәләр ижад итә, ошо процеста саф формалар менән бер ҡатарҙан жанрҙарҙың бер-бер еһенә тығыҙ бәйләнеше һәм йоғонтоһо һөҙөмтәһендә төрлө ҡатнаш формалар барлыҡҡа килә.

## Хөрәфәти хикәйә

Халыҡ прозаһының үҙенсәлекле бер төрө — хөрәфәти хикәйә. Жанр тәбиғәте яғынан ул рус фольклористикаһында ҡабул ителгән «быличка», «бывальщина» терминына тура килә. Башҡорт фольклористикаһында бығаса уның дөйөм ҡабул ителгән термины булманы; хөрәфәти хикәйәгә ҡараған материал «мифологик хикәйә», «ышаныуҙар» тигән баш аҫтында һирәкләп матбуғатта күренгеләне (14, 210; 248, 25). 1980 йылда баҫылып сыҡҡан «Башҡорт халыҡ ижады. Риүәйәттәр, легендалар» китабының инеш мәҡәләһендә лә «мифологик хикәйә» тигән термин ҡалдырылды, әммә материалды артабан өйрәнеү барышында был атаманың, шулай уҡ «ышаныуҙар» тигән төшөнсәнең дә, бик үк аныҡ булмағанлығы күренде. Саф мифологик характерҙа «мифологик хикәйәләр» тип аталған бәләкәй прозаик әҫәрҙәр генә түгел, легендалар ҙа булырға мөмкин, ә ышаныуҙар уларға бәйле хикәйәләренән тыш, тик ышаныу рәүешендә генә лә йөрөй ала. Ошо хәл иҫкә алынып, һуңыраҡ «хөрәфәти хикәйә» тигән термин индереү уңайлы табылды (190-192).

Хөрәфәти хикәйәләр тыңлаусыны убырҙар, ен-пәрейҙәр, аждаһалар, йорт-ҡаралты «эйәләре», тәбиғәт «хужалары» донъяһына алып инә. Әле серҙәре асылып бөтмәгән аномаль күренештәр, йә булмаһа уйҙырма ваҡиғалар бында реалистик тонда һис шикһеҙ булған хәл итеп һүрәтләнә. «Аждаһаны мин үҙем әллә нисә ҡабат күргәнем бар» («Аждаһа менән юха» — 248, 25), йәки: «Элек бире менән

шүрәле күп булған». «Беҙҙең Тимер ауылы янында ла күҙгә күренеп йөрөр булғандар. Әсәйем дә күргән» («Бире»—203, оп. 63, д. 65, л. 25) —ошо рәүешле конкретлаштырып, тыңлаусыны ышандырырға тырышып һөйләү — хөрәфәти хикәйәләрҙең бөтәһе өсөн дә хас күренеш. Был һыҙат башҡа халыҡтарҙың хөрәфәти хикәйәләрен өйрәнеүселәр тарафынан да һыҙыҡ өҫтөнә алына. Б. Н. Путилов, мәҫәлән, рус быличкалары һәм бывалыциналарындағы уйҙырма хәл-ваҡиғаларҙы ысынбарлыҡ итеп һөйләү принцибын хаҡлы рәүештә жанрҙың «ойоштороғос эстетик башланғысы» (236, 8) тип атай.

Хөрәфәти хикәйәләр борон замандарҙа уҡ кешенең ысынбарлыҡтағы аңлашылмаған күренеш, хәл-ваҡиғаларҙы аңлатырға тырышыуы һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән, әммә аң кимәленең торошона ярашлы, тәбиғәт күренештәре ниндәйҙер серле көс, мөғжизә рәүешендә ҡабул ителгән.

Ысынбарлыҡты фантастик образдар, тәбиғи булмаған йән эйәләре, мөғжизәле хәл-ваҡиғалар аша һүрәтләү легендалар өсөн дә хас, әммә, шул уҡ ваҡытта, легендаларҙан айырмалы рәүештә, хөрәфәти хикәйәләрҙә мөғжизәле күренеш, тәбиғи булмаған йән эйәләре менән һөйләүсенең (йә уның таныш кешеһенең) «күҙмә-күҙ осрашыуы» һүрәтләнә. Ҡайһы ваҡыт мөғжизәле йән эйәһе һөйләүсенең күҙенә таныш кеше ҡиәфәтендә күренә икән тип әйтелә: «Сәргәй сыуаш беҙгә ҡорт бирмәксе булды. Беҙҙеке (информант үҙенең ирен шулай тип атай. — ***Ф. Н.)*** ике умарта тейәп китте, һуңлаған инде. Һараны тамағында Ғаффар булып ен күренгән. «Ағай, мин — Ғаффар, ултырт мине», — тип ултырған бының санаһына» (310, АЭ 1979, 212).

Айырым осраҡтарҙа һөйләүсенең ен-шайтан менән күҙмә-күҙ осрашыуы түгел, ә шул йән эйәләренең сәйер тауыштарын ишетеү, улар «ҡылған» эштәрҙең һөҙөмтәләрен күреү эпизоды тасуирлана: «Миңә ул нәмәләр (ендәр) өс ерҙә осраны, түлкә үҙҙәре күренмәне. Бер ваҡыт, бер өс-дүрт йыл тирәһе элек, урманға барғайным. Көрәк ҡырҡып торам. Теге яҡҡа юл юҡ (ҡар яуған ине). Шунан бер тауыш сыға башланы. Көлөшәләр, шарҡылдашалар, йырлайҙар. Минең эт бар — өрмәй тик ята бит, әй. Ат китте ҡарпайып, ҡурҡып. Эт өрмәй. Шунан юлға сығып ҡараһам,

бер ниндәй ҙә юл (эҙ) юҡ. Ә, былар икән, тинем дә ҡуйҙым...

Бер заман Оло ҡырҙан ҡайтып киләм. Әсе итеп һыҙғыра бит. Мин әйтәм: «һыҙғырмағыҙ, миңә теймәгеҙ. Минең һеҙгә зыяным юҡ бит, — тием. — Әгәр миңә засада эшләһәгеҙ, Сөләймән батшағыҙға хат яҙырмын», — тим. Ендәрҙең батшаһы Сөләймән бит» (310, АЭ 1979, 219; 212, 146).

Йыйылған материалдарға ҡарағанда, ***ен-пәрейҙәр, шайтандар*** — башҡорт хөрәфәти хикәйәләренең иң популяр персонаждары. Улар, ҡағиҙә булараҡ, кешегә хәүеф тыуҙырыусы, уның йөрәгенә шом-ҡурҡыу һалыусы, һаулығына зарар килтереүсе персонаждар. Кеше күҙенә ен-пәрей берсә өйрәк ҡиәфәтендә, берсә болан, берсә айыу һ. б. рәүешендә «күренә» икән, тип һөйләйҙәр. Бына бер нисә өлгө:

«Бесәндә йөрөйбөҙ. Нәҙербай ағайым, мин. Кис баҫлығып уянып киттем. Уянып китһәм, салтырлатып болан үтеп китеп бара. Башҡаларға күрһәтәм, бер ни ҙә күрмәйҙәр. Аптырағас, юлын барып ҡараныҡ: юлы ла юҡ, эҙе лә юҡ. Шул булған инде» (310, АЭ 1979, 101; 212, 146—147).

«Яҙ еҙнәм менән ат ашатып торабыҙ. Юлдың ней арба, ней сана сағы. Тәгәрмәскә ҡар уҡмашып, ат арыған. Айыу булып ҡарҡылдап бара бит инде, уң яҡлап. Эй бара...» (310, АЭ 1979, 220; 212, 147).

«Хөсәйен ағай Берештамаҡҡа барған булған. Эше бөткәс, кис ҡайтырға сыҡҡан. Юлда китеп барһа, бер өйрәк күреп ҡала. Был өйрәк юл буйлап арт яғы менән атлап китеп бара, ти. Хөсәйен ағай ҡурҡа төшкән. Ауылға ла күп ҡалмаған. Тотҡан да йүгергән был. Ҡайтып етеп, аҙбарға керһә, теге өйрәк ултыра, ти...» («Хөсәйен ағай күргән ен» —203, оп. 73, д. 72, л. 101; 212, 156).

Миҫалдарҙан күренеүенсә, хөрәфәти хикәйәләрҙә ен-пәрейҙәр йәнлек, ҡош-ҡорт ҡиәфәтендә һүрәтләнеп кенә ҡалмай (улай булһа шом, хәүеф ситуацияһы тыуҙырылмаған булыр ине һәм хикәйә, үҙенең «тоҙон» юғалтып, төҫһөҙ бер информацияға әйләнер ине), ә бәлки уларҙың йөрөш-торошоноң ғәҙәти булмауы һыҙыҡ өҫтөнә алына: болан «салтырлап үтеп китеп бара», шул уҡ ваҡытта ул берәүҙең күҙенә күренә, икенсеһенекенә күренмәй, айыу — «ҡарҡылдап», өйрәк «арт яғы менән атлап китеп бара». Ен-пәрей-

ҙәр кеше ҡиәфәтендә күренгән осраҡта ла ғәҙәти булмаған, сәйер төҫтә һүрәтләнә: йә «ул бик оҙон, ҡап-ҡара», йәиһә «буйға ҙур, үҙе ап-аҡ кейем кейгән», «башы ҡаҙаҡ кеүек, буйы нәҙек-оҙон» һ. б. Сәйер персонаждың ҡиәфәтен һүрәтләүҙә «ап-аҡ», ҡап-ҡара» эпитеттары ҡулланыу —иң таралған һүрәтләү алымы. Был кеше ҡиәфәтендәге персонаждарҙы һүрәтләүҙә генә түгел, ә йәнлек-хайуан, ҡош-ҡорт һәм башҡа ғәләмәт күренешле йән эйәләрен тасуирлаған осраҡта ла йыш ҡулланыла:

«...Шәһит ҡото осоп, ағарынып килеп етте лә: «Әйҙәгеҙ, ҡайтайыҡ, ен бар! Хәҙер ашай. Ана анауында, сүплектә (ул сүп өйөмөнә төртөп күрһәтте), аҡ бәрәс ҡосаҡлаған, үҙенең тәнен йән баҫҡан бер нәмә ултыра, үҙе итек баштарын ырғыта»,— тине...» (203, оп. 73, д. 72, л. 79; 212).

«...Уянып китһәм, аптырап киттем, сәңгелдәкте әйләнеп бер ҡара бәрәс йөрөй... Мин ҡурҡыуымдан ҡысҡырып ебәреүемде һиҙмәй ҙә ҡалдым. Минең тауышҡа бөтәһе лә уянып китте. Утты яндырып, әсәйем сәңгелдәк янына барып ҡарағанда, туғаным үлгәйне инде» (203, оп. 73, д. 72, л. 131; 212). Һуңғы миҫалда шомло ҡара бәрәс әжәлде кәүҙәләндереүсе йән эйәһе булараҡ күҙ алдына баҫа, һәм, әйтергә кәрәк, хөрәфәти хикәйәләр араһында бындай сюжеттар байтаҡ.

Кешегә күренмәй эш итә торған, күренһә, төрлө ҡиәфәткә инә алыусы ендәр ҙә бик хәтәр иҫәпләнә. Баймаҡ районының Ниғәмәт ауылында Өмөтбикә Мырҙағәлинанан (1906 йылғы) яҙып алынған «Нуғай биреһе» исемле хөрәфәти хикәйәнең персонажы (бире), мәҫәлән, шундай яуыз һәм зарарлы заттарҙан. Ул күп осраҡтарҙа кеше күҙенә күренмәй генә иҫ киткес яуызлыҡтар эшләй: аттарҙы аҫып китә, әҙәм балаһын утта яндыра... «Ҡай саҡта өйгә инеп, май тәпәнен ауҙарып, майын эткә биреп, өй түбәһендә йә йондоҙ, йә ут булып бейеп йөрөнө ул» (203, оп. 73, д. 72, л. 34; 212, 141—144), тип һөйләй информант.

Шайтан, ен-пәрейҙәр — айырыуса йәш балалар әсән хәүеф, ҡурҡыныс тыуҙырыусы йән эйәләре. Хөрәфәти хикәйәләр һөйләүе буйынса, ҡарауһыҙ ҡалған сабыйҙарҙы шайтан, ен-пәрей алмаштыра. Баланы ен-шайтан алмаштырыу мотивына ҡоролған сюжеттар киң билдәле тиергә мөмкин:

улар революцияға тиклем дә яҙып алынған һәм хәҙер ҙә йыш осрай. Бына, мәҫәлән, С. И. Руденко яҙмаларынан бер үрнәк:

«...Шайтан үҙ балаларын кешенекенә алыштырырға ярата, тиҙәр. Был хәл бигерәк тә яңы тыуған, йә зәғиф тыуған балалар менән йыш була икән. Шайтан ундай балаларҙы үҙенә ала ла, улар урынына үҙ балаларын һалып китә, имеш» (248, 22); «...сәңгелдәккә ен-пәрей килмәһен өсөн яҫтыҡ аҫтына бысаҡ, йә булмаһа берәй тимер һалырға кәрәк. Берәй хайуан тырнағы элеп ҡуйһаң да ярай» (203, оп. 65, д. 5, л. 159).

1981 йылда Башҡортостандың Архангел районы Оҙондар ауылында яҙып алынған сюжет сәйер йән эйәһенең ҡиәфәтен һүрәтләүе менән дә, шайтан «ҡылған» яуызлыҡҡа ҡаршы башҡарыла торған им-том рәүешен сағылдырыуы менән дә ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр бирә:

«Мәхмүт бабайҙың Ғазила исемле ике аҙналыҡ ҡыҙы бар ине. Былар иртән тороуға ҡараһалар, бишектәге ҡыҙҙары урынында шул уҡ төҫтәге, тик һыңар ғына күҙле бер бала ята икән. Былар тиҙ генә мулла килтерә һалып, өшкөртөп, баланың тирә-яғын һепертке менән туҡмағандар ҙа, өйҙә үҙен генә ҡалдырып, тышҡа сығып торғандар. Кереп ҡараһалар, ике күҙе лә урынында үҙ ҡыҙҙары ята икән. Баланы ен килтереп һалған» (203, оп. 73, д. 72, л. 137). Күмертау районында яҙып алынған әкиәткә тартым бер сюжетта егерме дүрт йыл буйы бишектә ятҡан ен балаһының ҡиәфәте тыңлаусыла бөтөнләй сирҡаныс тойғолар уятырлыҡ итеп һүрәтләнгән: «...үҙенең башы ҡаҙандай, ти. Кеше һымаҡ түгел, ти. Маңлайының уртаһында бер күҙе бар, ти. Кешенең ауыҙы һымаҡ түгел, ауыҙы тегенең буй, ти. Шул хәтлем әллә ниндәй бер ҡурҡыныс бала, ти теге». Ошонда уҡ шайтан тарафынан бишектә сағында урланып, оҙаҡ йылдар ендәр араһында йөрөгәнлектән «ендәрсә ҡыланырға өйрәнгән, төрлө ҡиәфәткә керә алыусы» кеше балаһы тураһында ла мәғлүмәттәр бар (203, оп. 63, д. 62).

Шайтандың башҡа ҡылыҡтарын һүрәтләүсе хөрәфәти хикәйәләр ҙә осрай: яңы тәпәй баҫып, йүнләп йүгерергә лә өйрәнмәгән балаларҙы ҡытыҡлауы, шул арҡала һуңғыларының кәйефһеҙләнеүе, кеше менән яҡын мөнәсәбәткә инеп,

уны һарғайтыуы (248, 21—22, 28—29). Шул уҡ ваҡытта кешенең шайтан ҡыҙына өйләнеүенән шайтан нәҫелдәре таралыуы хаҡында һөйләүсе сюжеттар ҙа юҡ түгел. Улары инде хөрәфәти хикәйә менән легендалар араһында торған сюжет типтары («Шайтан ырыуы»—248, 21—22).

Шайтан, пәрей туйҙары, байрамдары хаҡындағы хикәйәләрҙә кеше бер осраҡта хәл-әхүәлде, берәй эпизодты аңғармаҫтан күреүсе буларак ҡына сығыш яһай: ул ниндәйҙер геүләшеү, скрипка, гармун тауыштары ишетә, милли кейем кейгән кешеләр күрә, әммә үҙе зыян күрмәй (203, оп. 73, д. 72, л. 181), икенсе осраҡта ул туйҙа, байрамда ҡатнашып, әллә ниндәй мажаралы хәлдәрҙә ҡала (248,27). Юл буйында туҙан өйрөлтөп, ҡом бураны уйнаһа, ауылдарҙа әле лә ҡарт-ҡоролар: «Ана, ҡотороп, пәрей туйы үтеп бара»,— тиҙәр. Зыяны теймәһен (ен-пәрей ҡағылмаһын) өсөн кешеләр ҡойон аҫтында ҡалмаҫҡа тырышалар. Ғөмүмән, демонологик көстәрҙе зарарһыҙландырыу ниәтенән тыуған һәр төрлө ырымдар, йолалар халыҡ араһында байтаҡ. Яуыз көстәрҙең исемен алмаштырып һөйләү, — мәҫәлән, шундай йолаларҙың береһе. Үрҙә телгә алынған «Нуғай биреһе» исемле хөрәфәти хикәйәне һөйләүселәрҙең әйтеүенә ҡарағанда, бирене «бире» тип түгел, «олатай» тип йөрөткәндәр. Башҡа урындарҙа «теге», «тегеләр» тигән алмаш һүҙҙәр осрай.

Мылтыҡ атыу, сыбыртҡы шартлатыу, алама һүҙ менән әрләү, бисмилла уҡып, иҙеү (элдек) ыскындырыу һ. б. шуның кеүек ырымдар бөтәһе лә ен-пәрей, шайтандарҙы зарарһыҙландырыу ниәтенән башҡарылған ырым-ғөрөфтәр ул.

***Бисура, албаҫтылар*** хаҡындағы хөрәфәти хикәйәләр хәҙергә бик аҙ яҙып алынған. Булған материалға ҡарағанда, бисура менән албаҫты ла шул ен-пәрей затынан, улар кешегә зарар килтереүсе яуыз йән эйәләрен кәүҙәләндереүсе персонаждар: «Бисура бит инде — ендәрҙең иң яманы» (310, 213). «Бисура — яңғыҙ йөрөгән кешеләрҙең эсәген киптереүсе шүрәле», «ҡотһоҙ йән эйәһе» (203, оп. 65, д. 5, л. 169). «Бисуралар ир затынан да, ҡатын затынан да була. Мин уларҙы бер ваҡыт күрҙем. Ул үҙе һары, ә күлдәге ҡыҙыл төҫтә ине. Ир-бисура ҡатын-ҡыҙға ғына теймә, ти, ә ҡатындары ирҙәр менән генә була, ти» (248, 24). «...Бисуралар үткер, шаян, йылғыр, уйынсыл, хәйләкәр булалар. Төрлө

сүрәткә керә ала улар. Бәғзе берәүҙәре йәше етеп килгән егеттәрҙе үҙенә әүрәтеп, арбап, алдаштырып, эйәләтеп, кәләш булған булып, артынан эйәртеп, хыялландырып йөрөтә ала. Шуның өсөн элек хыялланған егеттәрҙе, йә ҡыҙҙарҙы бисура эйәләгән тиҙәр ине» (203, оп. 47, д. 3, л. 424). Баймаҡ районының Темәс ауылында яҙып алынған бер хөрәфәти хикәйәлә бисура эйәләшеү шулай уҡ кешенең аҡылзиһене ҡаҡшау менән аңлатыла. Демонологик персонаждың ҡиәфәтенә ҡағылған мәғлүмәт «ысынбарлыҡҡа яҡыныраҡ» итеп һүрәтләнелә: «...Бисуралар яңғыҙ кешегә эйәләйҙәр. <...> Кешегә бисура бит инде кеше булып эйәләшә. Бисура эйәләшкән кеше уны бисура, тип уйламай, ә ауылдың бер кешеһе, тип уйлай. Шуның исемен әйтеп үҙ алдына һөйләнә» (203, оп. 92, д. 1, л. 43).

Демонологик заттың таныш кеше ҡиәфәтендә күренеүе Ҡариҙел районында яҙып алынған бер текст аша ла билдәле, тик унда һүрәтләнгән хәлдәр яман ытырғаныс тойғолар уятырлыҡ: яңғыҙлыҡтан «өҙгөләнгән, һарғайған» тол ҡатындың эргәһенә мәрхүм ире ҡиәфәтендә «бер нәмә» килеүе, ҡатындың ауырға ҡалып, бала урынына май киҫәге тыуҙырыуы һ. б. (203, оп. 92, д. 7, л. 129).

С. И. Руденконың «бисура йәбешкән кеше бай була, имеш» (248, 24) тигән күрһәтмәһе һәм эйәләшкән кешеһенә бисураның аҙыҡ ташыуы хаҡындағы сюжеттар (203, оп. 92, д. 9, л. 111) башҡа беҙгә билдәле булған текстарҙан бер ни тиклем айырылып, был персонажға күпмелер дәрәжәлә йомшаҡлыҡ һыҙаттар өҫтәгән һымаҡ булһа ла, дөйөм алғанда, хөрәфәти хикәйәләр бисураны яуыз йән эйәһе итеп һүрәтләй. Уларҙан күренеүенсә, бисура эйәләшкән кеше мандымай, йә һарыға һабышып, йә ҡурҡышынан аҡылдан яҙып үлә. «Бисураны ҡыуыу», «өшкөрөү» ярҙам иткән осраҡтарҙа ғына кеше бер аҙ һауығып, күпмелер йәшәй тигән иҫкәрмәләр килтерелә (310, 213). Өшкөрөү, бисура ҡыуыу саралары иһә төрлөсә: бер осраҡта бисуралы өйҙө доға уҡыйуҡый ете ҡабат урап, уның стеналарына ҡором һөртөп сығылһа (203, оп. 92, д. 7, л. 75), икенсе осраҡта бисура сүрәтендә күренгән кешенең исеме ҡағыҙға яҙылып, утҡа ырғытыла (203, оп. 92, д. 1, л. 43—44); **өсөнсө** осраҡта сыбыртҡы, мылтыҡ «эшкә егелә» (310, 212—213). Хәрәкәттәр-

ҙе оҙатҡан һүҙ материалының характеры имсенең уҡымышлылығы, борондан килгән ырымдарҙы белеү кимәле менән билдәләнә. Берәүҙәре ғәрәп, фарсы һүҙҙәре менән сыбарланған дини доғалар менән эш итһә, икенселәре һәр кемгә аңлайышлы ырым һүҙҙәр ярҙамында «бисура ҡыуа»:

Ҡайҙан килдең, шунда кит,
Йыуан имсәктәргә (албаҫтыларға.— Ф. Я.) кит;
Ҡояш байышына кит;
Бында һиңә урын юҡ,
Ҡайҙан килдең, шунда кит! (203, оп. 73, д. 72, л. 251).

Оҫта хикәйәселәр, ғәҙәттә, яуыз заттарҙың ҡиәфәте, ҡылған ҡылыҡтары, улар «ҡатнашлығында» булған хәлдәрҙе тасуирлау менән генә сикләнмәйенсә, яуыз йәндәрҙе зарарһыҙландырыу әмәлдәрен дә ҡушып һейләүсән.

Әгәр бисура ир кеше ҡиәфәтендә лә, ҡатын-ҡыҙ сүрәтендә лә күренеүсе йән эйәһе булһа, албаҫтыһы тик бисә ҡиәфәтендә генә күренә икән, тиелә элегерәк яҙып алынған ышаныу һәм хөрәфәти хикәйәләрҙә. Был персонаждың тышҡы күренешен күҙ алдына баҫтырыуҙа табындар һөйләүенән С. И. Руденко яҙып алған бер ышаныуҙың әһәмиәте ифрат ҙур: «Албаҫты ул бик оҙон имсәкле бисә ҡиәфәтендә йөрөй, тиҙәр. Уның имсәктәре шул тиклем оҙон була, уларҙы ул хатта алмаш-тилмәш иңбаштарына ла һалып ҡуя ала икән. Ысынлап та, төндә һеҙҙе баҫлыҡтырып ыҙалатыусы нәмәкәй ана шул албаҫты инде. Баҫлығып, тын да алмай ятҡанда, ул бер имсәген ауыҙығыҙға килтереп һалған була, ти» (248, 21).

Килтерелгән үрнәк саф хөрәфәти хикәйә түгел (бында һөйләүсенең сәйер йән эйәһе менән осрашыу эпизоды юҡ), ләкин ул хөрәфәти хикәйәләрҙә телгә алынған персонаждың ҡиәфәтен һәм уның кешегә килтерә торған яуызлығын һүрәтләүе менән ҡыҙыҡлы.

Һуңғы йылдарҙа беҙҙең яҡтан ҡағыҙға теркәлгән бер һүрәтләмә лә С. И. Руденко яҙмаһына яҡын, әммә унда өҫтәмә һыҙаттар ҙа юҡ түгел (албаҫты тырнаҡтарының оҙонлоғо, сәстәренең ялбыр булыуы (203, оп. 92, д. 7, л. 110). Материалдар араһында албаҫтыны башҡа демонологик персонаждар

(шүрәле, бисура) менән бутау осраҡтары *ла* күренеп ҡала (203, оп. 92, *д*. 7, *л*. 110—115). Ғөмүмән, башҡорт халыҡ ижадында албаҫты тураһында хикәйәләр бик аҙ һаҡланған. Күрәһең, заманында яҙып алынмау сәбәпле уларҙың күбеһе онотолған. Билдәле булған материалдар ҙа был яуыз йән эйәһен, буталған образдарҙы иҫкә алмағанда, нигеҙҙә, бер планда һүрәтләй. «Албаҫты — бәпесләгән ҡатындың үпкәһен һурып алып китеп, һыуға ташлаусы яуыз йән» мотивы — ә ул төрки, иран фольклоры донъяһында киң билдәле мотив — беҙҙең ҡул аҫтында булған башҡорт хөрәфәти хикәйәләрендә осрамай. Шулай булһа *ла*, был мотив башҡорт фольклоры өсөн бөтөнләй ят күренеш түгел. «Мәскәйҙең үлеме» (51, 223—224) исемле тылсымлы әкиәттә һүрәтләнгән һыуҙа йөҙөп йөрөүсе үпкә мотивы төрки, иран фольклорындағы албаҫтыға бәйле ышаныуҙарҙы хәтергә төшөрә.

***Шүрәле, ярымтыҡ, мәскәй (убыр), аждаһа-юхалар* ҙа** —хөрәфәти хикәйәләрҙең персонаждар системаһында ҙур урын алған йән эйәләре. Улар хаҡындағы хөрәфәти хикәйә стилендә һүрәтләнелгән сюжеттар менән бер рәттән, легенда-риүәйәт рәүешендә һөйләнелгәндәре *лә* байтаҡ.

Ҡиәфәте менән *дә*, «ҡылған» эштәре яғынан *да* шүрәле — халыҡ хикәйәләрендә бик сағыу тасуирланған мифик зат. Бер осраҡта ул, ат арҡаһына йәбешеп, уны хәлдән тайҙырып йөрөүсе килбәтһеҙ бер нәмә рәүешендә күҙ алдына баҫтырыла. Ул һөйләшә, хатта һамаҡлай ҙа белә (55, 51), икенсе ваҡыт кешене ҡытыҡлап интектереүсе ҡомһоҙ йән эйәһе итеп бирелә (203, оп. 32, *д*. 2, *л*. 370, 381). Әйтергә кәрәк, шүрәленең портретын тыуҙырыуҙа халыҡ үҙенең фантазияһын йәлләмәгән. Түбәндәге миҫалдарҙа был хәл бик асыҡ күренә:

«Шүрәле — күлдәкһеҙ, ыштанһыҙ ҡыҙыҡай кеше, <...> уның аяғы артҡа ҡараған була, ә үксәһе алға ҡараған икән, ғәрип кеше кеүек, ... һөйләшә белә» (203, оп. 47, *д*. 3, *л*. 425).

«Шүрәле — оҙон еҙ тырнаҡлы кеше сүрәтендәге йән. Күҙе уйнап, баҙлап, ут сәсеп тора. Маңлай уртаһында бер генә мөгөҙө була» (203, оп. 47, *д*. 3, *л*. 425).

«...Шүрәленең ҡултығы ҡыуыш, бармаҡтары алтын-көмөш, ти. Күҙе икәү, оҙон сәсле» (203, оп. 65, *д*. 7, *л*. 77).

Аяҡтарының рәүешенә ҡарап, халыҡта шүрәлегә ҡарата кинәйә, алмаш исем дә уйлап табылған: «Бәләкәй саҡта беҙҙе, ана ҡыйышаяҡ килә, тип ҡурҡытырҙар ине» (203, оп. 21, д. 9, л. 294).

С. И. Руденконың Күбәләк-Тиләү ырыуы башҡорттарынан яҙып алған бер тексында шүрәле һыңар күҙле (һыңар күҙе маңлайында ғына янып тора), һыңар аяҡлы йән эйәһе рәүешендә күҙаллана (248, 24). Күпселек хикәйәләрҙә был йән эйәһенең кеше (ҡатын-ҡыҙ) затына оҡшаш булыуы һыҙыҡ оҫтенә алына (шүрәле ҡыҙына әйләнеүсе легенда, легендар риүәйәт геройҙарын иҫкә төшөрәйек), тик С. И. Руденко тарафынан яҙып алынған бер текст ҡына был йәһәттән айырылып тора: унда шүрәленең ҡарағас ҡиәфәтендә булыуы хәбәр ителә. «Шүрәлене мин урманда үҙ күҙҙәрем менән күргәнем бар. Мин күргәне ауған ҡарағас ҡиәфәтендә, ҡырын төшәп, хәл йыйып ята ине» (248, 24). Халыҡ, ғәҙәттә, ен-шайтан образын төрлө ҡиәфәттә һүрәтләүсән, был осраҡта һөйләүсенең демонологик образдарҙы бутаған булыуы ла ихтимал.

С. Г. Рыбаков яҙып алған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, башҡорттар шүрәлене урманда йәшәүсе яланғас ҡатын-ҡыҙ ҡиәфәтендә лә, ир төҫөндә лә күҙ алдына килтерәләр. Улар оҙон буйлы, йөҙйәшәр ағастарҙан да бейегерәк. Бик оҙон бармаҡтары менән кешеләрҙе ҡытыҡларға яраталар. Иҫ киткес йәмһеҙ тауыш менән ҡысҡыралар. Урманға килгән кешеләрҙе урап сығып, уларҙың хәтерен юялар ҙа, шуға тегеләре аҙашып йөрөй икән. Ҡайһы ваҡыт бәләкәй баласағаны алып китеп, үҙҙәренең ер аҫтындағы торлаҡтарында тоталар, аҙаҡ шул урланған урынға кире сығарып ҡуялар. Шүрәле балаларының сәңгелдәктәре ағас ботаҡтарында элеүле тора, ти. (20, оп. 1, д. 105, л. 32). Был яҙма —үҙенең күпселек мотивтары буйынса фин-уғыр, көнсығыш славян халыҡтарының хөрәфәти хикәйәләре менән ауаздаш яңғыраған ҡиммәтле яҙмаларҙың береһе. Кешеләрҙең шүрәләләрҙе үҙ файҙаһына эшләтә алыу мөмкинлеген сағылдырған ҡайһы бер хөрәфәти хикәйәләр ҙә (203, оп. 26, д. 10, л. 159; оп. 21, д. 2, л. 11) мәғәнәүи яҡтан рус фольклорындағы леший тураһындағы айырым сюжеттар (221, 39—40) менән бер юҫыҡта тора.

Башҡорт хөрәфәти хикәйәләрендә шүрәле менән ҡатар ҡуйылған йәнә бер образ бар — ул ярымтыҡ. Ярымтыҡ «ярым» йәки «ярты» тигән мәғәнәне бирә. Себер һәм Көнсығыш Европа халыҡтары мифологияһындағы һыңар күҙле, һыңар аяҡлы «половинниктарҙы» хәтерләтә. Хөрәфәти хикәйә һәм легендаларҙа ярымтыҡтар ҙа, шүрәлеләр ҙә бер үк функцияны башҡарыусы образдар булып сығыш яһайҙар (кеше ҡытыҡлау, ат арҡаһына йәбешеп, уны йонсотоу, кешеләрҙең ярымтыҡ йәки шүрәле ҡыҙҙарына әйләнеп нәҫел таралыу мотивтары һ. б.). Оҡшаш мифологик персонаждарға бер үк вазифа йөкләтеү, уларҙың индивидуаль һыҙаттары менән артыҡ иҫәпләшмәү, күрәһең, аң үҫешенең һуңғараҡ дәүерҙәрендә тыуған хәл.

***Убыр әбейе, убырлы ҡарсыҡ, мәскәй*** кеүек йән эйәләре— нигеҙҙә, әкиәттәргә хас традицион персонаждар, әммә улар хаҡында хөрәфәти хикәйәләр ҙә юҡ түгел. Халыҡ хикәйәләренән күренеүенсә, был образдар бер-бер еһенә яҡын, күп осраҡта уларҙы айырып тормайынса, бер рәүешлерәк итеп һөйләү күҙгә ташлана.

Хөрәфәти хикәйәләр буйынса, убыр, мәскәй — ғәҙәттә, үлектәр донъяһы менән бәйле йән эйәләре. Уларҙың барлыҡҡа килеүе күп осраҡта дини ҡараштар күҙлегенән яҡтыртыла: «Мәскәйҙең булыуы мәйетте йыназа уҡымай ҡуйғандан килә (мәскәй бит ҡәберҙән сыға) (203, оп. 47, д. 3, л. 423); «әгәр насар, иманһыҙ кеше үлһә, бигерәк тә уны ясин сыҡмайынса ҡуйһалар, ул әбей сүрәтенә кереп, үҙенең кәфенен сәйнәп ята икән» (203, оп. 47, д. 3, л. 424). Убырҙы насар, гонаһлы кешеләрҙең йәне, тиҙәр. Бәғзе берәүҙәрҙең йәнен үҙҙәре тере сағында уҡ убыр алыштырыуы, убырҙары ҡуҙғалғанда ундай кешеләрҙең бәлә-ҡаза килтереүсе көскә әйләнеүе тураһында ифрат шомло ышаныуҙар йәшәгән. Бындай әҙәмдәрҙең үҙҙәре үлһә лә, убырҙары тороп ҡалып, үлектең туған-тыумасаларының ҡанын һурып йөрөүе хаҡындағы хөрәфәти хикәйә — С. И. Руденко тарафынан ҡағыҙға теркәлеп ҡалған (248, 20) һирәк яҙмаларҙың береһе. Бәғзе мәйеттәрҙең ҡәберҙә тынғыһыҙ булыуҙары, мәскәй рәүешендә ер өҫтөнә сығып, яуызлыҡтар ҡылып йөрөүҙәр е тураһындағы мәғлүмәттәр һуңғы йылдарҙағы яҙмаларҙа ла урын ала (203, оп. 92. д. 1, л. 41).

Фольклор фондтарында тупланған материалдарҙан мәскәйҙең тышҡы йөҙөн асыҡ ҡына күҙ алдына килтереүе ҡыйын. «Мәскәй әбей —йөҙ төрлө сүрәткә инеүсе шүрәле» (203, оп. 65, д. 5, л. 170), ти, мәҫәлән, Курган әлкәһенән бер информант. Йыйылған материалдар араһында мәскәйҙең кешеләргә кәкүк, көсөк, аҡ эт, бохар бесәйе рәүешендә күренеүе хаҡында ғәжәйеп хикәйәләр бар. Бында ла аҡ эт, бесәй һ. б. йәндәр — һөйләүсене мәйет менән осраштырыусы хайуандар. Мәскәйгә әүерелгән кешенең ҡәберен аҡтарып, күмеү йолаһын еренә еткереп мәйетте ҡабат ерләгәндән һуң, бәлә, яуызлыҡтар бөтә, «донъя рәтләнә», имеш, тиелә хөрәфәти хикәйәләрҙә. Ә мәскәйҙең зарары, яуызлыҡтары инде —ысын мәғәнәһендә ҡот осҡос: ул кеше йөрәгенең ҡанын һура, һис юғында үләкһә, емтектәрҙең һөйәк-һаяҡтарын кимерә (203, оп. 47, д. 3, л. 424).

Үҙҙәре ышанған бындай яуыз көстән ҡотолоу әмәлен табырға тырышыу шулай уҡ кешеләрҙең аң кимәле мөмкинлектәренән сығып «хәл ителгән». Мәскәй салғынан ҡурҡа икән тигән ышаныуҙан сығып, бағана башына салғы элер булғандар элек (203, оп. 47, д. 3, л. 427). Бынан тыш ҡыу ат башы ла мәскәйҙән «һаҡлаусы» сара булып иҫәпләнгән: йәнәһе, ат башы был ҡурҡыныс йән эйәһен үҙенә тарта була (203, оп. 92, д. 7, л. 256). Телгә алынған ырымдарҙың тарихи ерлеге, үҙ нәүбәтендә, боронғо ат культына һәм тимергә табыныу йолаларына барып тоташа. Ғөрөф буйынса, тынғыһыҙ үлектең ҡәберенә уҫаҡ ҡаҙығы ҡағыу ҙа ҡаралған: шулай эшләмәһәң, мәскәй сығыу бөтмәй, имеш, тиҙәр (203, оп. 92, д. 7, л. 256). Һуңғы ырым бик күп халыҡтарҙың, айырыуса славяндарҙың, йолаларында киң урын алған (109, 42).

Убыр әбейе, убырлы ҡарсыҡтар — шулай уҡ үтә зарарлы, үтә ҡурҡыныслы персонаждар. Хөрәфәти хикәйәләрҙән күренеүенсә, был йән эйәһенең характерлы һыҙаты — оңҡотлоҡ. «Убыр» һүҙенең килеп сығышын ғалимдар дөйөм төрки тамыр —«ор» формаһына бәйләп, «тотошлай йотоу» мәғәнәһен биреүсе лексик берәмек тип аңлаталар (29, 45). Ғөмүмән, убыр (дөйөм төрки формаһы — «обур») — бик күп халыҡтарҙың демонологик хикәйәләре өсөн уртаҡ персонаж,

рус халыҡ ижадындағы «упырь», «ведьма» образдары менән ауаздаш.

Убыр әбейенең тышҡы ҡиәфәте, йөрөш-торошо хаҡында хөрәфәти хикәйәләр мәғлүмәттәргә һаран. С. И. Руденконың «убырҙың ал яғы булмай, уны йөрәген һурып алғанда ғына еңеп була» (248, 21) тигән күрһәтмәһенән тыш, башҡа сығанаҡ хәҙергә юҡ. Шул уҡ авторҙың ҡатай башҡорттары һөйләүенән яҙып алған «убыр — көндөҙөн бабай сүрәтендә, кисен һуҡыр сысҡанға әйләнеүсе йән эйәһе» (248, 21) тигән мәғлүмәте убыр менән мәскәйҙе бер персонаж итеп ҡарауҙан килә булһа кәрәк.

Халыҡ араһында убыр уты күреүгә бәйле хикәйәләр бик йыш осрай: «Убыр — тере ут була» (203, оп. 32, д. 2, л. 376). «...Төндә ҡыҙым менән китеп барам. Ҡараһам —убыр! Сүмәлә ҙурлығы булып янып ултыра. Башы йомро, осланып барып бөтә» (203, оп. 21, д. 9, л. 293). Шунда уҡ: «Убыр уты ҡойроҡло була, күкле-йәшелле булып төшә. Мин үҙем күрҙем убырҙы. Шулай, бер ваҡыт әүендә ашлыҡ һуғып ятабыҙ. Кинәт кенә беҙҙән йыраҡ түгел ялбырап ут осто ла китте. Ҡойроҡланып осоп бара, ергә төшмәй».

С. Г. Рыбаков яҙмаларынан күренеүенсә, башҡорттар убыр утынан (йәғни ут рәүешендә күҙгә күренгән убыр-мәскәйҙән) һаҡланыу ниәтендә, һәнәк һабын һындырыр, йә өҫтәрендәге күлдәктәрен йыртыр булғандар. Шулай эшләгәндә, йәнәһе, убыр уты тарала була (20, оп. 1, № 105, л. 33). Хәҙер балалар уйынына әйләнгән «Убыр әбей» (варианттары — «Алырым ҡош», «Алырым — бирмәм», «Убыр бесәй») исемле уйындың да боронғо магик функциялары булғанлығы яҡшы төҫмөрләнә:

Убыр әбей килмәҫкә
Тимер ҡапҡа ҡорайым.
Ҡорайым, ҡорайым.
Эләкһен дә йығылһын —
Мәрәкәһен күрәйем,
Күрәйем, күрәйем... (203, оп. 63, д. 58, л. 28).

Хөрәфәти хикәйәләрҙән күренеүенсә, убыр уты —ябай, ғәҙәти ут түгел, ә зыяраттан сыҡҡан ут. Шунлыҡтан уны

күреү кеше күңеленә ҡурҡыу, шом-хәүеф һала. Убыр утының яҡтыһы төшкән кешегә бәлә килә, сир ҡағыла тигән ышаныу йәшәй. Им-том итеүсе әбей-һәбей убыр утынан ҡурҡмаҫҡа ҡуша: «Әгәр ҙә шуны күрһәгеҙ, ҡурҡмағыҙ, иҙеүегеҙҙе өҙә тартығыҙ ҙа ҡуйығыҙ. Шулай итте ниһәң, ул үҙе өҙөлөп-өҙөлөп барып һүнә» (203, оп. 92, д. 1, л. 40).

Халыҡ араһында элек ***аждаһа һәм юхалар*** хаҡында ышаныуҙар, уларға бәйле хөрәфәти хикәйәләр шаҡтай киң таралған булырға тейеш. Революцияға тиклем яҙып алынған материалдар эсендә, атап әйткәндә, Батыргәрәй Юлыев менән Сергей Руденко яҙмаларында, был ышаныуҙар хаҡында ифрат ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр бар. Улар тарафынан килтерелгән материалдың айырым үрнәктәренән шул ышаныуҙарға бәйле тыуған хөрәфәти хикәйәләрҙең жанр тәбиғәтен билдәләй торған сифаттар ҙа табырға мөмкин. Б. Юлыевтың башҡорттарҙан яҙып алған аждаһа-йылан күтәр елеүе хаҡындағы хикәйәһе, мәҫәлән, төҙөк сюжетлы, һәм ул хәүефле ситуацияны ҙур оҫталыҡ менән асып бирә (334, 245—248).

«Йылан йөҙ йәшәһә — аждаһа, мең йәшәһә —юха булыр» тигән ышаныуҙы башҡорттар араһында һирәкләп хәҙер ҙә ишетергә мөмкин. Революцияға тиклем яҙып алынған тексттар ҙа, совет осоронда яҙылғандары ла аждаһа һәм юхаларҙы кешегә хәүеф һалыусы, шомло яуыз көс итеп һүрәтләй:

«Аждаһа күберәк ваҡ малдарҙы, бигерәк тә һарыҡ-кәзә бәрәстәрен ашап, күлдә йәшәй. Юха кешеләргә, бигерәк тә ҡыҙ-ҡырҡынға, йәбешеүсән була» (248, 25).

«Ҡара йылан һыуҙа ҡырҡ йыл ятһа, аждаһа була. Уға тәрән һыу кәрәк. Күтерле, бата торған һыуҙы ярата. Ҡырҡ йыл булғас, кешене ашамаға ҡысҡыра» (203, оп. 26, д. 10, л. 63).

«Аждаһалар хаҡындағы һәм башҡа хөрәфәти хикәйәләрҙә мәжүси ҡараштар менән бер рәттән, ҡайһы ваҡыт Ислам дине йоғонтоһонда тыуған ҡараштар урын ала. Бына, мәҫәлән, Әбйәлил районының Асҡар ауылында Мирхәйҙәров Мөғәлләм Шәйхаттар улынан яҙып алынған бер миҫал: «Аждаһа кешене, малды тыны менән тартып ашай. Йота торған, аҙғындан-аҙғын йылан. Шундайын яуыз, ҡанһыҙ булғаны өсөн Алла уға асыу итә: бер фәрештәһен ебәрә.

Был фәрештә ҡара ҡойон ямғырҙар яуғанда, аждаһаны килеп эләктереп, тимер сынйырҙар менән бәйләп, Ҡаф тауы артына илтеп ташлай» (203, оп. 47, д. 3, л. 424).

Йәнә миҫал: «Бик оҙаҡ йәшәһә, аждаһа йотор өсөн ҡояшҡа ынтыла икән. Ҡояш тотолоу шунан килә. Аллаһы Тәғәлә шуға ла уны ала» (310, 64). Дөйөм алғанда, «Алланы» телгә алмай, нейтраль формала һөйләнелгән текстар өҫтөнлөк итә. 1963 йылда Пермь әлкәһе Уса районының Удик ауылында яҙып алынған бер хөрәфәти хикәйә, мәҫәлән, шундайҙарҙан: «Аждаһа малды йота... Зыян ҡылмаһын тип, болот ала. Мин үҙем күрҙем. Болот алғанда ҡойроғо менән ағастарға уралып ҡарай. Шунан ағастар ҡойолоп-ҡойолоп ҡала... Болот уны Ҡаф тауы артына илтеп ташлай икән. Бәләкәй һеңлем бар ине, ул да күрҙе» (203, оп. 32, д. 2, ч. 2, л. 390).

Хөрәфәти хикәйәләрҙә аждаһаларҙың тышҡы ҡиәфәтен һүрәтләүгә лә урын бирелә:

«...Башы биҙрәләй бар, күҙе сүместәй ҙур. Оҙо-о-н ҡойроғон болғай-болғай <...> күккә күтәрелә» (203, оп. 92, д. 1, л. 53).

«...Башы бесәй башы ҙурлығындай бар, унан да ҙурыраҡ булмаһа әле. Оҙонлоғо ике-өс сажиндай барҙыр. Йөҙөп килгәндә, һыуҙы икегә ярып, һөрөп килгәндәй була ул...» (248,25).

«Аждаһа —ул ҙур ҡойроҡло бер нәмә...» (203, оп. 73, д. 72, л. 2), «...ҡойроғо утыҙ метрлап бар...» (203, оп. 32, д. 2, л. 390).

Ә бына түбәндәге текст аждаһаның ни әсән юхаға әүерелеүен һүрәтләүе менән ҡыҙыҡлы: «Юха йылан —аждаһаның үтә ҡартайып, аҙғынланғаны була. Үҙенең ҡеүәте, көсө бөтә башлағас, ташланырға көсө ҡалмағас, яҡындағы йән эйәһен аллап-һыулап әүрәтеп, ялағайланып, юхаланып яҡынлай ҙа, шуны йота...» (203, оп. 32, д. 2, л. 390). Ошо уҡ информант (ул Әбйәлил районының Асҡар ауылынан) юханың төрлө йыртҡыс сүрәтенә инә алыусы йән эйәһе булыуы хаҡында хәбәр итә. Шулай ҙа хөрәфәти хикәйәләрҙә юха, башлыса, ҡыҙ йәки егет сүрәтендә күренгән мәкерле йән эйәһе булараҡ телгә алына: «...Юха ирҙәргә ҡатын булып күренә, ҡатындарға егет булып күренә» (310, 614).

Әкиәттәрҙә иһә юха күпселек осраҡтарҙа нескә билле сибәр ҡыҙға әүерелгән йылан образында йөрөй. Ҡағиҙә булараҡ, юха-ҡыҙ — яуыз, зарарлы йән эйәһе: ул үҙе әүрәтеп барған егеттең, төнөн йоҡлағанда, ҡанын һура. Ғәҙәттәге ҡатын-ҡыҙҙан юха-ҡыҙҙар кендекһеҙ булыуҙары менән айырыла икән тигән ҡараш йәшәй. («Юханың кендеге булмаҫ» тигән мәҡәл дә бар.)

Йыйып әйткәндә, ен-пәрейҙәр, убыр, албаҫты, бисуралар, аждаһа һәм юхалар — хөрәфәти хикәйәләрҙең актив геройҙары, улар кешегә зыян килтереүсе, уның күңеленә шом һәм хәүеф һалыусы зарарлы заттар. Был хөрәфәти хикәйәләрҙең һәр береһендә ул заттарҙы «күргән» кешенең психологик хәле, ҡылған ҡылыҡтары һүрәтләнә. Күпселек осраҡтарҙа кеше пассив, бик ҙур ауырлыҡтар менән генә бәләнән ҡотола, йәки, ғөмүмән, ҡотола алмай (һарғайып, йә булмаһа йөрәге ярылып үлә).

Хөрәфәти хикәйәләрҙәге образдарҙың икенсе төркөмөн зыянһыҙ, сағыштырмаса зыянһыҙ заттар — ***эйәләр*** (йорт эйәһе, аҙбар эйәһе, мунса эйәһе, һыу эйәһе, тау эйәһе һ. б.) — тәшкил итә.

Йорт, аҙбар, мунса эйәләре зыянһыҙ ғына түгел, хатта кешегә ярҙам да итә торған заттар булып иҫәпләнә:

«Берәй һарығым, йә кәзәм бәрәсләр булһа, мал эйәһе һәр ваҡыт иҫкәртмә яһай,— тип һөйләй Йылайыр районының һолтантимер ауылында йәшәүсе 72 йәшлек бер информант. — Йоҡлап ятҡанда ҡолағыма: «Шәмсениса, сығып бәрәсеңде ал, туңып үлеп ҡуйыр»,— ти. Мин сығып ҡараһам, ысынлап та, малым бәрәсләгән була. Шуға мин хәҙер ҙә мал эйәһе әйтер әле, тим дә, ятам да йоҡлайым» (203, оп. 73, д. 72, л. 187).

Ошо уҡ информант — мунса эйәһенең дә «изгелеген татыған» кеше («Мунса эйәһе иҫкәртмәһә, мин шул кирбес араһында ҡалып үлер инем әле» — 203, оп. 73, д. 72, л. 187).

Хөрәфәти хикәйәләр араһында эйәләрҙең «холоҡ күрһәткән» саҡтарын һүрәтләгән сюжеттар ҙа осрай. Был хәл түбәндә килтерелгән миҫалда, мәҫәлән, бик асыҡ сағыла:

«Беҙ Рауай Сәғитовтарҙан өй һатып алғайныҡ. Бер нисә көн йоҡлай алмай ыҙа сиктек. Тәҙрә төбөндә шаҡ-шоҡ һуға. Йоҡомһорап ятһаң, һикене һелкетә. Бер нисә көн үткәс,

Рауайҙарға барҙым да, бөтәһен дә һөйләп бирҙем. Шул уҡ көндө Сәүйә килен (Рауайҙың ҡатыны) беҙгә килеп: «Әйҙә, хужаҡайым, ҡайтайыҡ», — тип әйтте лә, ишекте асып сығып китте. Ошо көндән алып тыныс йоҡлай башланыҡ (203, оп. 73, д. 72, л. 18).

Ғөмүмән, эйәләр үҙҙәренә ҡарата «ихтирамды ярата». Хөрәфәти хикәйәләрҙән күренеүенсә, кеше уларҙың «күңелен күреп», улар менән «иҫәпләшеп» йәшәргә тейеш. Тәү тапҡыр мунса төшөп сыҡҡанда, тәҙрә төбөнә тәңкә һалып китеү, йә булмаһа ләүкәгә еп бәйләп: «Суҡ һиңә бүләк, суҡ һиңә бүләк» тип әйтеү күренеше (был ғөрөф айырыуса йәш баланы беренсе тапҡыр мунса төшөргәндә ныҡ иҫтә тотола) (203, оп. 65, д. 5, л. 169) эйәһенең «ризалығын алыу» ниәтенән мунса нигеҙенә ҡоймаҡ илтеп күмеү (203, оп. 73, д. 72, л. 188), өй һалғанда нигеҙгә, өрлөк аҫтына тәңкә һалып ҡалдырыу йолаһы (203, оп. 65, д. 5, л. 169), йорт эйәһен асыуландырмаҫ өсөн бала-сағаны артыҡ ҡысҡырып көлөү, шаярыуҙан тыйыу осраҡтары (203, оп. 65, д. 9, л. 345) — былар бөтәһе лә ана шул хаҡта һөйләй. Ышаныуҙарға ҡарағанда, өй эйәһе тураһында кешегә һөйләргә лә ярамай: «һөйләһәң, йә малың уңмай, йә үҙеңә зыян килә» (203, оп. 47, д. 3, л. 225).

Эйәләр һ. б. персонаждар хаҡындағы хөрәфәти хикәйәләрҙе, урынына, ваҡытына ҡарап, тәрбиәүи маҡсаттарҙа ла ҡулланғандар: «Аяғыңды йыуып ятмаҫаң, ҫыу ейәҫе алып китәр үҙеңде», — ти торғайны инәйем. Йә: «Ауыҙыңды ҙур асып, ҡысҡырып көлмә — ауыҙыңа ен керер», — тиер ине»,— тип хәтерләне, мәҫәлән, үҙенең бала сағын Ырымбур әлкәһенең Яйыҡ ауылында тыуып үҫкән бер әңгәмәсем (212а, 63).

Хәҙергә беҙгә билдәле булған материалдар буйынса эйәләрҙең ниндәй ҡиәфәттә булғанын өҙөп кенә әйтеүе ауыр. Бер осраҡта өй-йорт хужаһы, аҙбар эйәләре үҙҙәре күренмәй генә тауыш биреү арҡылы кешегә үҙенең «барлығын» белдертә, икенсе осраҡта берәр таныш кеше, әллә ниндәй бер малай, ҡыҙ ҡиәфәтендә күренә, йә мал, йәнлек рәүешендә күҙаллана (203, оп. 73, д. 72, л. 17, 80, 97, 116—117, 141). Аҙбар эйәһе йыш ҡына аттың ялын үреп ҡуйыусан (хужалары шуға ҡарап, эйә барлығын beләләр, имеш) (л. 141). Өй эйәһенең тауыш биреп кенә аралашыуы — киңерәк таралған тотороҡло ҡараш. 1988 йылғы фольклор

экспедицияһы ваҡытында халыҡта: «Өй эйәһе күренеп йөрөһә, хужабикәгә килешмәй: ен һуға», — тигән ышаныу барлығы беленде» (203, оп. 92, д. 7, л. 115).

***Хазиналар*** тураһындағы сюжеттарҙың бер өлөшө, ***изге урындар, ҡәберлектәр*** хаҡындағы текстар, сирҙәр һәм уларҙы дауалауға ҡараған ышаныуҙар ҙа халыҡ прозаһының хөрәфәти хикәйәләр тармағына инә. Был сюжеттар өсөн шулай уҡ кешенең сәйер зат эйәһе менән осрашыуы һәм уның менән ниндәйҙер мөнәсәбәткә инеүен хикәйәләү хас.

Уҙған быуат башында ҡатай ырыуы башҡорттарынан С. И. Руденко яҙып алған бер хөрәфәти хикәйәлә, мәҫәлән, ауыл малдарына үләт килтереүсе сирҙең һайыҫҡан ҡиәфәтендә күренеүе, мунса ҡыйығында ҡуҙғалмай ултырған был ҡошҡа шомланған хужабикәнең яҡшы мөғәмәлә күрһәтеүе һөҙөмтәһендә малдарға афәт теймәүе тураһында бәйән ҡылына (ул һайыҫҡанға мунса инергә тәҡдим итеп, йылы һыу, миндек әҙерләп бирә, иртәгеһен миндектең икенсе урынға күсерелгәненә, ләүкәгә һыу сәсрәтелгәненә ҡарап, тегенең мунсала «йыуынғанлығына» төшөнә).

Сирҙәрҙән ҡотолоу өсөн башҡа төр ырым-саралар ҙа ҡулланылған. Тапма сиренән арыныу ниәтендә йылға кисеп сығыу кәрәк, сөнки сир һыуҙан аша сыға алмай, тип иҫәпләгәндәр. Сирләгән кеше көнө буйы бер ни ашамаҫҡа тейеш булған. Кисен бутҡа бешереп, уны сүлмәккә һалғандар ҙа, йылға буйына илтеп, сүлмәктең ҡапҡасын асып ҡуйғандар. Йәнәһе, сир шул бутҡаға алданып ҡала. Ауырыу тиҙ генә һыу кисеп, йылғаның икенсе яғынан ҡайтып китә. Был хаҡта С. И. Руденкоға ҡара табын һәм барын табын ырыуы башҡорттары һөйләгән. Гәйнә башҡорттарынан берәү ғалимға тапманы бүрек кейгән кеше сүрәтендә күргәнлеген белдергән (248, 28—29).

Әүлиә ҡәберҙәренең изге урын итеп иҫәпләнеүе, ҡәберҙәр янынан үткәндә хәйер һалыу, уҡыныу, ул урындарҙа ҡысҡырып һөйләшмәү кеүек тормош ҡағиҙәләре әле булһа өлкән быуын кешеләре хәтерендә яҡшы һаҡлана.

Халыҡ ижады материалдары буйынса, ҙур ҡәберлек-убаларҙа ғәҙәттән тыш ҙур кәүҙәле кешеләр — алыптар күмелгән тигән ышаныуҙар булғанлығы күренә. Руденкоға уран ырыуының бер башҡорто һөйләгән хикәйәлә, мәҫәлән, ындай убаларҙың изге урын һаналыуы телгә алына. Шул

уҡ ваҡытта ул ерҙәр кешеләр күңеленә ниндәйҙер шом да һалыр булған. Ошо фекерҙе раҫлау өсөн информанттар ғәҙәттә йә үҙе, йә берәр танышы менән булған хәлде иҫкә төшөрөп, тәғәйен берәй факт килтер еүсән. Руденко яҙмаһынан күренеүенсә, ғәҙәти булмаған урындарҙан ағас ҡырҡыу, унда ярау итеү һ. б. шуның кеүек күренештәр килешмәй: кеше сиргә һабыша, хатта һуҡырая, имеш (248, 28).

Формалары яғынан хөрәфәти хикәйәләр ябай. Сюжет төҙөлөшө, художестволылыҡ кимәле һөйләүсенең импровизаторлыҡ оҫталығына, тыңлаусыларҙың һөйләнелгән хәлваҡиға менән ҡыҙыҡһыныу дәрәжәһенә бәйләнгән.

Төрлө ят көстәр менән осрашыу хаҡындағы сюжеттарҙың бер төркөмө ҡыҫҡа ғына мәғлүмәт рәүешендә бирелә, икенселәре киңерәк ҡоролоп, тамамланған, төҙөк композициялы хикәйәләрҙе тәшкил итә.

Хөрәфәти хикәйә, ҡағиҙә буларак, хәл-ваҡиғаларҙың ҡасан, ҡайҙа, ниндәй ситуацияла булғанын һүрәтләүҙән башлана: «1938 йыл ине. Мин ул ваҡытта етенсе класта уҡый инем» (310, 213)... «Бер ваҡыт, нисәнсе йылдар тирәһе булғандыр, төндә, сәғәт ун икеләр тирәһендә, ферманан күмәкләшеп эштән ҡайтып киләбеҙ... Икенсе тапҡыр, йәй көнө, кискә табан, бесәндән ҡайтып киләбеҙ. Арҡысаға (урман исеме. — ***Ф. Н.)*** етәрәк ерҙә ял итергә ултырҙым...» (203, оп. 73, д. 72, л. 181).

Хикәйәләүҙе ошо рәүештә төбәп, ысынбарлыҡтағы тирәйүнде һүрәтләүҙән башлау тыңлаусыны ваҡиға ситуацияһына инергә әҙерләй, һөйләнеләсәк хәбәрҙе булған хәл итеп ҡабул итеү мөмкинлеген тыуҙыра.

Хөрәфәти хикәйәнең кульминацион мәле —кешенең сәйер йән эйәһе менән осрашыу эпизоды: «Өйҙәрен асып кереүем булды, бер оҙон буйлы ир кеше мейес артына инеп китте» (203, оп. 73, д. 72, л. 17).

Ят көс менән осрашҡандан һуң, хикәйәләү оҙаҡ дауам итмәй, шунда уҡ осрашыу эпизодының ни менән тамамланғаны әйтелә. Алда килтерелгән хикәйәнең дауамы, мәҫәлән, түбәндәгесә: «Артынан барып ҡараным —күренмәне».

Башланышы, кульминацияһы, сиселеше булған кеүек, хикәйәнең йыш ҡына һығымта өлөшө лә бар: ул ғәҙәттә һөйләүсенең булған хәлгә мөнәсәбәте, уны аңлатырға тырышыуы, йә булмаһа һаҡланыу саралары — ырымдар хаҡында

әйтеп китеүҙән ғибәрәт. Аныҡлыҡ өсөн миҫалдарға мөрәжәғәт итәйек. Эйәләр хаҡындағы хикәйәләрен бер информант, мәҫәлән, ошо рәүешле тамамлай: «Ни өсөндөр миңә мунса, мал эйәләре яуызлыҡ та ҡылғандары юҡ, киреһенсә, ҡотҡаралар. Улар тик гонаһһыҙ йәндәргә генә изгелек эшләйҙәр» (203, оп. 73, д. 72, л. 187).

«...Шул көйө әлеге бала мәктәпкә йөрөүен дә ташлаған. Хәҙер уға 60 йәш, Орловка ауылында йәшәй» (203, оп. 73, д. 72, л. 184).

«...һыу инәһе тотмаһын өсөн һыу кергәндә: «Мине тотма, һыуҙы тот!» —тип, һыуға һүренте һалаһың» (203, оп. 92, д. 10, л. 109).

Хөрәфәти хикәйәнең бөтә йүнәлеше —ят көс менән осрашыуҙың психологик көсөргәнешле ситуация булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алыу. Шуға күрә ундағы образдар, һүрәтләнгән урындар һәм кисерелгән тойғолар — береһе лә ғәҙәти түгел, шомло.

Ен-шайтан һ. б. сәйер йән эйәләре менән осрашҡан ер —күп осраҡта йә һаҙлыҡ, йә ҡараңғы урман эсе, йә күл, йырын буйы, зыярат; осрашыу ваҡыты — ғәҙәттә ҡараңғы төшкән саҡ, төн уртаһы, таң алды. Урын, ваҡытты һүрәтләүҙә уртаҡ һүрәтләү алымдары бар. Ен-пәрейле урынға етер алдынан аттың шып туҡтауы йәки мотоциклдың бара алмауы, мәҫәлән, шундайҙарҙан.

Урынды һүрәтләгәндә күпселек осраҡта пейзаж ҡыҫҡа рәүештә генә һыҙатланып ҡала йәки бөтөнләй һүрәтләнмәй. Был хәл, әлбиттә, сюжеттың дөйөм характерына, йөкмәткеһенә бәйле. Аждаһа-йыландар хаҡындағы сюжеттарҙа, мәҫәлән, пейзаж ярайһы уҡ киң һүрәтләнә. Батыргәрәй Юлыев яҙып алған текст (334, 245—248) — бының асыҡ миҫалы булырлыҡ. Аждаһа күтәрелеүгә бәйле сюжеттарҙа көслө елдауыл, болот ҡуйырыу, ғәрәсәт мотивтары алға ҡуйыла. Был йәһәттән Бөрйән районында яҙып алынған бер сюжет бик характерлы:

«...1942 йылдың июль айҙары ине. Көндөҙ еләктән ҡайтып килһәк, болот сыҡты ҡапыл аяҙ көндө. Шунда тупраҡ бураны башланды, бер нәмә күренмәй. Әй ел сыҡты, тауҙа ағастар ауа башланы. Урамда балалар йығылышып ятты хатта. Ҡапыл ҡап-ҡараңғы булып китте. Ямғыр яуҙы микән, юҡ микән аҙағынан —бер ни ҙә иҫләмәйем. Шунан ололар

күлдең аждаһаһы осҡан, тинеләр. Шунан күл ҡороно, әле лә төбөндә үлән үçмәй, ярылып ята, ере кибеп» (310, 216).

Формалары яғынан хөрәфәти хикәйәләр бер төрлө генә түгел. Беренсе зат йәки шаһит исеменән алып барылған хикәйәләр меморат, хәтирә стилендә, һөйләүсенең яҡыны, белгән кешеһе күргән хәлде бәйән ҡылыу — риүәйәт, легенда-риүәйәт стилендә.

Хөрәфәти хикәйәләр араһында легендаға, әкиәткә, көләмәскә тартым сюжеттар бар: «Пәрей туйы» (248, 27), «Мөғәллим һәм шайтандар» (203, оп. 73, д. 72, л. 112—127; 212). Хөрәфәти хикәйәләрҙең айырыуса әкиәттәр менән алыш-биреш итешеүе көслө. Ике жанрҙың һыҙаттарын бер самараҡ йөрөткән текстар менән бер рәттән, хөрәфәти хикәйәләрҙән үçеп сыҡҡан әкиәт сюжеттары күҙгә ташлана. Бындай күренештең типик миçалы — «Мәскәйҙең үлеме» тигән әкиәт. Хикәйәләүҙең характеры, персонаждарҙың ҡылған эштәре, әçәрҙең тамамланышы — бында бөтәһе лә әкиәттәгесә. Ә бына сюжет төҙөлөү принцибы иһә хөрәфәти хикәйәләрҙе хәтерләтә: яуыз зат булған урынға еткәс, ҡаҙҙарҙың йылғаға төшөргә теләмәйенсә, үҙҙәрен һыу буйына алып килгән ҡыҙҙы йөҙәтеүҙәре, демонологик персонаж менән осрашыу эпизоды (һыу өçтөндә йөҙөп йөрөгән үпкәнең мәскәйгә әүерелеүе) —яуыз йәндән ҡотолоу әмәле. Телгә алынған билдәләрҙең эсендә лә үҙенсәлектәр юҡ түгел. Әгәр ҙә хөрәфәти хикәйәләрҙә мәскәй кешене, уның ҡанын һурып, һәләк итеүсе демон булараҡ һүрәтләнһә, миçалға килтерелгән әкиәттә әҙәм затының тиреһен энә менән тунаусы хәтәр йән эйәһе итеп сағылдырылған. Әммә иғтибарҙы иң нығ йәлеп иткән үҙенсәлек — бәләгә тарыған ҡыҙҙы мәскәй тырнағынан тартып алыусы геройҙың образы. Әгәр хөрәфәти хикәйәләрҙә яуыз көстө зарарһыҙландырырға тырышыусы булып имсе-бағымсы (ислам дине йоғонтоһонда тыуған сюжеттарҙа — мулла) торһа, әкиәттә был вазифаны атҡарыусы булып эпик герой —батыр йөрәкле һунарсы егет тора. Әкиәт геройы мәскәйҙе уҡ менән атып үлтерә. Егеттең еңеүенең сере лә ошо тылсымлы уҡта, һәм быны хатта мәскәй үҙе лә белеп тора: «Атҡан уғың ҡомда үçкән ҡоба талдан булмаһа, башағы ер йөҙөн ете әйләнгән сәмреғош суҡышы, ә йәбештергән елеме ете төрлө балыҡ өçтөнән алынған булмаһа, кереше бүре тарамышынан ҡуйылмаһа,

мине үлтерә алмаҫ инең. Мин һеҙҙең икегеҙҙең дә башығыҙҙы ашар инем»,— ти үлер алдынан мәскәй егеткә (51, 223—224). Күренеүенсә, әкиәттә яуыз көскә ҡаршы ҡулланыла торған ырым һүҙҙәр ҙә, йола хәрәкәттәре лә юҡ, әммә уҡ яһауҙа кәрәк булған барлыҡ әйберҙәр хөрәфәти хикәйәләрҙәге ырымсылар «муҡса»һынан алынған. Дероҫ, ер йөҙөн ете әйләнгән сәмреғош — мифик зат, әкиәт персонажы, ҡәҙимге тормошта иһә көслө ҡошто күберәген бөркөт образы символлаштыра, һәр төрлө им-томда бөркөт тырнағы, бөркөт суҡышы ҡулланыла. Фольклорҙағы сәмреғош менән бөркөт образдарының көс символы булыу яғынан яҡынлығын иҫкә алғанда, әкиәттәге сәмреғош суҡышынан яһалған уҡ башағы хөрәфәттәрҙәге бөркөт суҡышына (тырнағына) бәрәбәр магик әйбер икәнлеген аңлау ауыр түгел.

«Мәскәйҙең үлеме» кеүек сюжет типтарын өйрәнеү, бер яҡтан, әкиәт жанрының эволюцияһын күҙалларға мөмкинселек бирһә, икенсе яҡтан, әкиәт жанрының генезисындағы ҡайһы бер тармаҡтарҙы билдәләргә юл аса.

Хөрәфәти хикәйәләрҙең жанр тәбиғәтенән бөтөнләй алыҫлашып, ләкин шулай булһа ла, был жанрҙың образдарын үҙ эсенә алған әкиәт сюжеттары үҙҙәре бер төркөмдө тәшкил итә. Бындай сюжеттарҙы асылда әкиәт прозаһының һәр жанрында осратырға була. Сюжеттың ниндәй жанрға ҡарауынан сығып, геройҙарҙың, шул иҫәптән мифологик персонаждарҙың ҡылған эштәре, үтәгән вазифалары төрлөсә. Тылсымлы, батырҙар тураһындағы әкиәттәрҙә аждаһа, мәскәй һ. б. яуыз заттарҙың индерелеүе геройҙың батырлығын, физик көсөн ҡабартып күрһәтеүгә ярҙам итһә, көнкүреш әкиәттәрендә уның аҡылын, тапҡырлығын күрһәтеүгә булышлыҡ итә. Демонологик персонаждар ҡатнашлығында ҡылынған эш-хәрәкәттәр әкиәт эстетикаһы һәм тәғәйенләнеше күҙлегенән яҡтыртылғанға күрә хөрәфәти хикәйәләргә хас булған шомлолоҡтарын, үтә ҡурҡыныс тойғолар уятыу ҡеүәһен ныҡ ҡына юғалтҡан була. Сатирик йөкмәткеле көнкүреш әкиәттәрендә иһә ен-пәрей, шайтандар, хатта комик эффект тыуҙырыусы персонаж ролендә сығыш яһай («Бер ҡарттың өс улы», «Хәйләкәр һалдат менән ендәр» — 59, 210—213, 215). Саф хөрәфәти хикәйәләрҙән айырмалы рәүештә, бындай әкиәттәрҙе һөйләүсе лә, тыңлаусы ла булған хәл итеп түгел, ә фантастик сюжет, уйҙырма итеп ҡабул

итә. Килтерелгән ҡайһы бер миҫалдар аша ғына ла хөрәфәти хикәйәләр менән әкиәттәр араһында төрлө кимәлдәге, төрлө яҫылыҡтағы бәйләнештәр барлығын күрергә мөмкин. Был кимәлдең самаһы иһә, беҙҙең уйлауыбыҙса, жанрҙар тормошондағы уртаҡлыҡтар һәм эволюцион процестарға бәйле.

Хөрәфәти хикәйә— бөтә халыҡтарҙың ауыҙ-тел ижадында ла урын алған боронғо жанр.

«Быличкалар (хөрәфәти хикәйәләр. — ***Ф. II.),*** — тип яҙа был хаҡта Э. В. Померанцева, — билдәле урын, билдәле кешеләр, билдәле ышаныу — хөрәфәттәр менән бәйле булғанлыҡтан, үҙҙәренең сағыу локаль милли колориты менән айырылып торалар, бер үк ваҡытта улар характерҙары менән әкиәттәргә ҡарағанда ла интернациональ күренеш (221, 26—27).

Хөрәфәти хикәйәләрҙәге яҡынлыҡ, уртаҡ һыҙаттар айырыуса ҡәрҙәш халыҡтар ижадында асыҡ сағыла. Ҡәрҙәш булмаған осраҡта, быуаттар буйы күрше йәшәп, даими аралашыу һөҙөмтәһендә тыуған уртаҡ күренештәрҙең булыуы ла тәбиғи хәл. Башҡорт хөрәфәти хикәйәләр ендәге ен-пәрей, шайтан, албаҫты, аждаһа һ. б. образдар, мәҫәлән, Урта Азия, Ҡаҙағстан, Кавказ һәм Волга буйы халыҡтарының демонологик ҡараштар системаһында төп урын алған персонаждар (264; 37; 274; 280; 186; 29; 89; 131). Сағыштырығыҙ: башҡорт, татар, сыуаш, ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ, ҡуман мифологияһында албаҫты — албаҫты, ҡырғыҙҙа — албарсты, нуғай, ҡумыҡтарҙа — албаслы, төрөкмәндә — албассы; үзбәк, уйғырҙарҙа — алвасса, тажикта — алмасты һ. б. Ҡайһы бер осраҡтарҙа рустар тарафынан ҡулланылған албастый, мариҙарҙағы — алваста, лываста, удмурт телендәге албаҫты, албаслу атамалары иһә күрше төрки телле халыҡтарҙан үҙләштерелгән исемдәр иҫәпләнә (29, 16). Әлбиттә, атамаларҙың бер төрлөлөгө уларға һалынған образдарҙың бер төрлөлөгө түгел әле. Художестволы образдарға ҡағылған осраҡта бары тик уртаҡ һыҙаттар, оҡшашлыҡ хаҡында ғына фекер алып барырға мөмкин, сөнки һәр персонажды, уның менән «осрашыу» мөхитен һәр халыҡ үҙенең ҡараштары нигеҙендә, көнкүреш, географик һ. б. шарттар эсендә һүрәтләй. Ҡайһы ваҡыт бер үк исем менән йөрөгән образдың ҡапма-ҡаршы функция башҡарған осраҡтары ла юҡ түгел. Өй (йорт) эйәһе, мәҫәлән, — шундай персонаждарҙың

береһе. Башҡорт, Ҡазан татарҙары, ҡарасай халыҡтарының хөрәфәти хикәйәләрендә ул, нигеҙҙә, зарарһыҙ йән эйәһе булһа, Көнбайыш Себер татарҙарының һөйләүендә иһә — кешеләргә дошман булған үтә зарарлы демонологик образ (131, 126).

Ҡыҫҡаһы, һәр халыҡтың хөрәфәти хикәйәләре — милли үҙенсәлекле, ифрат ҡыҙыҡлы бер ижад төрө ул. Уның тарихи ерлеген ентекләп өйрәнеү хәҙерге көндә лә үҙенең әһәмиәтен һәм актуаллеген юғалтмай. Төрлө ышаныуҙарға нигеҙләнгән хөрәфәти хикәйәләр боронғо кешенең аң кимәле, фекерләү эволюцияһының торошо, халыҡтарҙың уртаҡ тарихы, үҙ-ара бәйләнештәре хаҡында һөйләүсе үҙенсәлекле, мөһим бер сығанаҡ булып тора.

## Хәтирә

Халыҡ ижадында сағыштырмаса яңыраҡ, хәҙерге заманда булған хәл-ваҡиғалар тураһында ошо ваҡиғаларҙың шаһиты тарафынан һөйләнелеп йөрөгән хикәйә-иҫтәлектәр, йәғни хәтирәләр бар. Рус фольклористикаһында бындай хикәйәләрҙе «устный рассказ», «сказ» (317), татарҙар «сөйләк» (279), ҡаҙаҡтар «әңгиме» (128) тигән термин менән атап йөрөтә.

Башҡорт фольклористикаһында яңыраҡ булып үткән хәл-ваҡиғаларға ҡарата, хатта һөйләүсенең шәхси биографияһына бәйле хикәйә-иҫтәлектәр төрлө терминдар менән аталды: сказ (294), әңгәмә (82, 34—38), иҫтәлек-хикәйә, йәғни хәтирә (55, 18; 211; 190; 273, 201; 58, 15). Хәҙергә был терминдарҙың береһе лә (бигерәк тә тәүге икеһе) ныҡлап ҡына ғилми ҡулланылышҡа инеп киткәне юҡ тиергә мөмкин. Сказ —рустан ингән термин булыуы һәм халыҡсан яңғырамауы менән бик үк уңайлы түгел, әңгәмә —ҡарара-ҡаршы һөйләшеү, «беседа» мәғәнәһен биреүе менән генә сикләнә, йәғни йөкмәткеһе етерлек дәрәжәлә тулы түгел. Ошоларҙы иҫкә алып, «Башҡорт халыҡ ижады» серияһына ингән томдарҙа күптән түгел булып үткән хәл-ваҡиғаларҙы шаһитлыҡ күҙлегенән яҡтыртыуға ҡоролған хикәйәләрҙе «хәтирә» тип алыу кәрәкле табылды. Әлбиттә, бер кешенең иҫтәлектәренә ҡоролған һәр хикәйә халыҡ ижады әҫәрҙәре

репертуарына инеп китә алмай. Бының өсөн һөйләнелгән ваҡиғаның мотлаҡ тарихи-ижтимағи әһәмиәтле, йә булмаһа мажаралы ситуацияның билдәле кимәлдә художестволы дөйөмләштерелеп бирелеүе мөһим, йәғни һөйләнелгән хәл-ваҡиға, күренеш айырым бер осор һәм мөхит өсөн ниндәйҙер дәрәжәлә типик булырға тейеш.

Хәтирәлә хикәйәләү ваҡиғаны күргән-белгән кеше, йәғни шаһит исеменән алып барыла. Хәбәр ҡылыу һөйләүсенең туған-тыумасаһы, күршеһе һ. б. таныштары шаһит булған күренеш һәм хәлдәргә лә нигеҙләнергә мөмкин. Был яғы менән хәтирә хөрәфәти хикәйәне хәтерләтә, әммә һуңғыларынан айырмалы рәүештә, хәтирәләрҙә кешенең еншайтан һ. б. ят көстәр менән «осрашыуы» түгел, ә реаль ваҡиғалар, кешеләр менән бәйләнештәре һүрәтләнә. Башҡа төр хикәйәләрҙәге кеүек, хәтирәгә лә ышандырырға иҫәп тотоп, хәл-ваҡиғаны конкретлаштырып, урынын, ваҡытын күрһәтеп һөйләү хас. Йыш ҡына геройҙарҙың исем-фамилиялары, башҡарған вазифалары, ғөмүмән, кем булыуҙары күрһәтелеүсән. Мәҫәлән:

«Революциянан һуң, Граждандар һуғышы бөткәс, күрше волоста Новокшонов тигән берәү милиционер булып эшләй башланы. Шул йылдарҙа күп кенә актив партизандар юғалды. Өйөндә аталар ҙа китәләр. Кем икәнен дә белмәйҙәр.

Бер ваҡыт Новокшонов Харис партизанға килеп инә. Ерек ауылыныҡы. Бик шәп кеше ине...» («Үс ҡандырыу» — 203, оп. 61, д. 12, л. 106.)

«1911 йылда булды был хәл. Ураҡ ваҡыты ине. Хәҙерге Ғафури районы Яңғыҙҡайын ауылы кешеләрен көсләп тигәндәй сходҡа йыйҙылар»... («Зар илатҡан заманда» —58, 132.)

Хәтирәне оҫта һөйләүселәр ғәҙәттә тыңлаусыны ҡыҙыҡһындырыу маҡсатында күренеште, хәл-ваҡиғаны йәнле, эмоциональ көсөргәнешле итеп һөйләргә ынтылалар. Яҙыусы, күренекле әҙәбиәт белгесе Әнүр Вахитов тарафынан яҙып алынған «Атлас юрған» исемле бер хәтирәлә, мәҫәлән, ауылды талап, обоз менән киткән аҡтарҙы ҡыҙылдарҙың аңдып ятыуы, ҡыҙылдарға юл күрһәтә барыусы ҡарттың асыу-ярһыуы, мәҫәлән, бына ошо рәүешле һүрәтләнгән:

«...Бата-сума сыҡтыҡ урмандағы һаҙлыҡты. Оло юл буйлап ике яҡлап позиция алдыҡ та, көтәбеҙ. Бына бер ваҡыт

алда бер сотня күренде. Унан әллә утыҙлап обоз, таланған әйбер. Ҡарт ярһып китте, менгән атын да ярһыта. Тегене саҡ тыйҙыҡ. Обоз артынан бер взвод килә. Артта пулеметлы тачанка. Их, бер заман бирҙек кәрәктәрен. Түҙ генә. Беҙҙең ҡарт күҫәк күтәреп, геү-ғәләмәт килеп йөрөй» (203, оп. 61, д. 2, л. 97—98).

Әлбиттә, хәтирәнең текст булараҡ сифаты, һөйләүсенең оҫталығына ла, яҙып алыусының тойомона, һөйләтә белеүенә һәм һөйләшкәнде ҡағыҙға теркәй алыу ҡеүәһенә лә нығ бәйләнгән. Алда килтерелгән өҙөктә һөйләүсенең дә, яҙып алыусының да оҫталығын күрмәү мөмкин түгел.

Оҫта информанттар һөйләнелгән ваҡиғаға баһа биреп, берсә үҙенең ремаркаһы рәүешендә, берсә хикәйә геройы исеменән тәрән мәғәнәгә эйә булған халыҡ мәҡәлдәрен индереп ебәрәләр. Бына, мәҫәлән, шул уҡ Әнүр Вахитов яҙып алған «Айғыр атҡан ер» исемле хикәйәнең бер эпизоды. Ул ағалы-энеле Зөбәй менән Ғөбәйҙең диалогынан ғибәрәт:

«...Аҙаҡ партизан булып киткәндә Ғөбәй әйтә икән:

— Айғыр ни табылыр ул. Бына бәхет тигән нәмә табылмаҫ, әгәр шулай үҙ-ара талашһаҡ, дошманды ғына ҡыуандырырбыҙ. Әйҙә, ағай, минең менән.

Зөбәй уйлап-уйлап торған да:

— Һинеке дөрөҫ, Ғөбәй, ике ыласын талашһа, бүҙәнәгә йөн була, ти. Үҙ-ара талашмай бүҙәнәнең үҙен йолҡайыҡ, — тип яуап биргән» (203, оп. 61, д. 2, л. 105).

Беҙгә билдәле булған хәтирәләрҙең күпселеге тамамланған хикәйә рәүешендә ҡағыҙға теркәлгән, уларҙың башланышы, ваҡиғаның үҙен тасуирлаған өлөшө, кульминацияһы һәм бөтөмө бар.

Шәхси иҫтәлектәргә ҡоролған хикәйә-хәтирәләрҙең ваҡыт һынауын үткәндәре, билдәле бер мөхиттә һөйләнелеп йөрөй торғас, шаһитлыҡ һыҙаттарын юғалтып, риүәйәткә әйләнәләр. Был эволюцияны ҡайһы бер текстарҙың үҙҙәренән дә күрергә мөмкин. Ә. М. Сөләйманов яҙып алған «Ҡотой һуғышы» тигән сюжетта, мәҫәлән, шаһит исеменән һөйләнелгән осраҡтар ҙа, **өсөнсө** затта бирелгән урындар ҙа бар (203, оп. 63, д. 56, л. 115).

Риүәйәткә әйләнгән сюжеттарҙа халыҡ ижады традицияларына таяныу нығ һиҙелә: боронғораҡ риүәйәттәрҙән кил-

гән дөйөм мотивтар (әйтәйек, «Мөбәрәк батыр» менән «Бейеш»тәге көрәш мотивы, геройҙың майҙанға төрмәнән килтер ел еүе), сюжет төҙөүҙә традицион алымдар ҡулланыу.

Сағыштырмаса яңы булып үткән ваҡиға, хәл һәм күренештәр хаҡында башта уҡ риүәйәт стилендә сығарылған хикәйәләр ҙә бар. Улар —нигеҙҙә топонимик мәғлүмәт биреүсе сюжеттар.

Башҡортостандың Йылайыр районында яҙып алынған «Ҡотоғосҡан тауы» исемле бер хикәйә, мәҫәлән, традицион риүәйәт стилендә. Иң элек традицион риүәйәттәрҙә йыш осрай торған башланыш — топонимик объекттың ҡайһы урында булыуы хаҡындағы мәғлүмәт — иғтибарҙы йәлеп итә («Тау Исҡужа ауылына яҡын, Йылайыр йылғаһы буйында»); шунан ваҡиғаның ваҡыты күрһәтелә («Граждандар һуғышы осоро. Халыҡтың бик тә интеккән, йонсоған йылдары...»), артабан — герой менән таныштырыу, уның ҡылған эше һәм һәләкәте — былар бөтәһе лә булған хәл итеп, ышандырырлыҡ деталдәр менән өсөнсө заттан тасуирлана. Хикәйәнең тамамланышы ла нәҡ традицион риүәйәттәгесә: «...Ҡотой дошманға терелэй бирелеүҙән үлемде артыҡ күрә: Йылайыр йылғаһына аҫылынып торған тауҙан аты менән ташлана. Шул ваҡыттан алып был тау Ҡотоғосҡан тауы тип атала» (203, оп. 63, д. 56, л. 113).

Әлбиттә, хәтирәләрҙе фольклор әҫәре тип ҡарау бер ни тиклем шартлы, сөнки уларҙа традицион фольклор үрнәктәренә хас булған бөтә һыҙаттар ҙа тупланып бөтмәгән әле, бигерәк тә вариантлылыҡ мәсьәләһе асыҡ ҡала. Шуға ҡарамаҫтан, хәтирәләрҙең риүәйәт формалашыу юлында тәүге баҫҡыс ролен үтәүсе ижад төрө, йәғни күсмә форма икәнлеген дә танымау мөмкин түгел. Ошо хәлде иҫкә алып, совет фольклорсылары, шул иҫәптән башҡорт ғалимдары ла, хәтирәләрҙе туплау һәм баҫтырып сығарыу буйынса тәүге аҙымдарҙы яһанылар. Күптомлыҡ «Башҡорт халыҡ ижады» йыйынтығында баҫылған хәтирәләр һәм хәтирә-риүәйәттәр, улар хаҡындағы күҙәтеүҙәр (58, 14—22, 77—107; 42, 15—16, 434^47) ошо аҙымдарҙың уңышлы бер башланғысы тип баһаланырға хаҡлы.

Шулай итеп, халыҡ прозаһының жанрҙары күп төрлө, уларҙың һәр береһенең үҙ йөҙө, үҙ характеры бар. Шул уҡ

ваҡытта улар бер-бер еһе менән дә, башҡа жанрҙар менән дә тығыҙ бәйләнештә йәшәй. Ауыҙ-тел ижадының үҙенсәлекле тармағын тәшкил иткән хөрәфәти хикәйәләр, риүәйәт һәм легендаларҙың тәбиғәте, үҙ-ара бәйләнештәре конкрет сюжеттарҙың, мотивтарҙың һәм образдарҙың тарихи ерлеген асыҡлағанда тағы ла тулыраҡ күҙ алдына баҫа.

Риүәйәт, легендалар һ. б. хикәйәләрҙең ысынбарлыҡҡа мөнәсәбәтен асыҡлау, йәғни уларҙың тарихи ерлеген күҙәтеү, ике ҙур идея-тематик төркөм эсендә башҡарылды: «Боронғо ышаныуҙарға ҡоролған легендалар һәм хөрәфәти хикәйәләрҙең тарихи ерлеге», «Тарихи, тормош-көнкүреш риүәйәттәре». Бындай төркөмләү, бер яҡтан, ҡараштар тарихын, аң үҫешен сағылдырған сюжет, тема һәм мотивтарҙы бер тирәгә туплаһа, икенсе яҡтан, ижтимағи, социаль-тарихи йөкмәткеле әҫәрҙәрҙе берләштерә. Йыйынтыҡтар өсөн ҡулайлы булған вағыраҡ төркөмдәр бында үҙен бик үк аҡлап бөтмәй, сөнки йыйынтыҡтарҙа материал әҫәрҙәге үҙәк йүнәлеш, төп мотив буйынса төркөмләнә. Ә бит күп осраҡтарҙа бер үк риүәйәттә төрлө темаға ҡараған мотивтар һыйышып йәшәй. Тәҡдим ителгән төркөмдәр төрлө характерҙағы сюжеттарҙа осраған оҡшаш, яҡын мотивтарҙы бер бүлеккә туплап, системалы ҡараш тыуҙырыуға ярҙам итә.

Монография нигеҙҙә традицион хикәйәләрҙе өйрәнеүгә бағышланғанлыҡтан, яңы осорға ҡараған хәтирәләр өсөнсө бүлектә тематик фекер ағышына бәйле рәүештә юлайҡан ғына телгә алынды.

*Икенсе бүлек*

## БОРОНҒО ЫШАНЫУҘАРҒА ҠОРОЛҒАН ЛЕГЕНДАЛАР ҺӘМ ХӨРӘФӘТИ ХИКӘЙӘЛӘР

Төрлө ышаныу, хөрәфәттәр нигеҙендә тыуған ауыҙ-тел ижады әҫәрҙәре —ифрат ҡатмарлы күренеш, уларҙағы ҡайһы бер образдар, идеялар бөгөнгө көнгә бик борондан, быуаттар төпкөлөнән килеп еткән. Башҡорт легендаларында һәм риүәйәттәрендә мәжүсилек осорона ҡараған ышаныуҙар ҙа, ислам дине йоғонтоһонда тыуған ҡараштар ҙа сағылған. Бер үк әҫәрҙә уларҙың йыш ҡына үҙ-ара һыйышып йәшәүен күрергә мөмкин. Ҡул аҫтында булған материалды тарихи-этнографик күҙлектән ҡарап сығыу, башҡа халыҡтарҙың ауыҙ-тел ижады һәм йолалары менән сағыштырыу боронғо ышаныуҙарға ҡоролған халыҡ хикәйәләренең нигеҙендә башлыса мифологик ҡараштар ятҡанлығын күрһәтә. Ә мифологияның тыуыуы һәм формалаша башлауы иһә тәүтормош йәмғиәте ерлегендә үк, боронғо кешеләрҙең фекерләү, аң-белем кимәленең аҙ үҫешкән дәүеренә ҡайтып ҡала.

Тәүге бүлектә әйткәнебеҙсә, легендалар һәм риүәйәттәр күпселектә аңлатмалы хикәйә рәүешендә донъяға килгәндәр. Этиологик мотив — уларҙың нигеҙ ташы. Донъяның, ғөмүмән йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәттең барлыҡҡа килеүе, ниндәйҙер яғы менән ғәҙәти булып тойолмаған күренештәрҙең килеп сығыуы һ. б. шундай хәлдәр тураһында боронғо кеше үҙ заманының аң торошо мөмкинселектәренән сығып, төрлө

мифтар, фантастика менән һуғарылған легендар хикәйәләр ижад иткән.

Мифологик ҡараштар яҡтылығында тыуған легендар сюжеттарҙы нигеҙҙә өс тармаҡҡа айырып өйрәнергә була:

1) хайуандар, ҡош-ҡорт культы, тотемистик ҡараш ҡалдыҡтарын сағылдырыусы легендалар; 2) йәнһеҙ тәбиғәтте йәнле итеп һүрәтләү, йәғни анимизм күренеше урын алған легендалар; 3) демонологик ҡараштарҙы һүрәтләүсе хөрәфәти хикәйәләр һәм легендалар.

## Хайуандар, ҡош-ҡорт культы, тотемистик ҡараш ҡалдыҡтары

Билдәле булыуынса, ҡараштарҙың иң боронғоһо — тотемизм. Ул теге йәки был ырыуҙың, аймаҡтың, араның килеп сығышын ниндәй ҙә булһа бер хайуан, ҡош-ҡорт, үҫемлек менән туғанлыҡ, ҡан-ҡәрҙәшлек мөнәсәбәтенә бәйләп аңлатыу. Тотемизм —донъялағы барлыҡ халыҡтарҙың мифологияһы өсөн хас күренеш. Төрлө географик киңлектәрҙә, төрлө континенттарҙа йәшәүсе халыҡтарҙың фольклоры, йолалары был хаҡта ифрат ҡыҙыҡлы дәлилдәр бирә. Әйтәйек, Калифорния индееҙтарының ахотави ҡәбиләһе кешеләре — койоттар — үҙҙәренең нәҫел ебен башлап ебәреүсе итеп бүрене (койот —туғай бүреһе) күҙ алдына килтерһә (325, 133), Австралияла йәшәүсе ҡәбиләләр кенгуруҙы, ҡырағай этте, страус эмуҙы, йыланды һ. б. йән эйәләрен һанай. Себерҙәге Обь буйы ханттары, Уралдағы мансиҙар, Нарым селькуптары үҙҙәренең айыу, ҡуян, ҡаҙ, кедровка, торна, суртан йә булмаһа тәлмәрйен менән ҡан-ҡәрҙәш булыуҙарына ышанған (266, 5—6, 19). Урта Азияла, Кавказда, Урал-Волга буйында йәшәүсе төрки халыҡтарының фольклор материалы ла тотемистик ҡараштар тураһында ҡиммәтле мәғлүмәттәр туплаған.

Ғалимдар раҫлауынса, кешеләргә нәҫел итеп ҡаралған ҡош-ҡорт, хайуан изге йән рәүешендә аллалаштырылып күҙ алдына килтерелер булған.

Бында шуға иғтибар итергә кәрәк, һәр бер изгеләштерелеп, аллалаштырылып ҡаралған хайуанды, йәнлекте тотем

хайуаны, тотем ҡош-ҡорто итеп ҡабул итеп булмай. Тотемизм хаҡында һөйләгәндә, фәҡәт кешеләр менән йәнлектәр араһындағы ҡан-ҡәрҙәшлеккә ышаныу күренеше төп урында торғанлығын онотторға ярамай. Хайуан, ҡош-ҡорт менән туғанлыҡ мөнәсәбәттәренә бәйләнмәгән, ә икенсе сәбәптәр арҡаһында теге йәки был йәнлеккә табыныу, уны культ дәрәжәһенә күтәреү осраҡтарының булғанлығы ла билдәле. Бынығы инде фәндә тотемизмдан бер аҙ һуңғараҡ тыуған күренеш итеп ҡарала (тотемизм, уның тамырҙары, хайуандар һәм үҫемлектәр культының тарихи ерлеге хаҡында тулы мәғлүмәттәрҙе ҡарағыҙ: 303; 113; 117; 275; 285; 286; 13; 249).

Башҡорт халыҡ ижадында хайуандар культын сағылдырған мотивтарҙы бик күп осратырға мөмкин, һәр жанр быңдай мотивты үҙенең тәбиғәтенә, поэтикаһына ярашлы рәүештә яҡтырта. Беҙҙе ҡыҙыҡһындырған хөрәфәти хикәйәләр, легенда һәм риүәйәт-легендалар иһә уны үҙҙәренең булмышына тура килтереп, «булған хәлдәр» коллизияһы аша һүрәтләй.

Башҡорт халыҡ хикәйәләрендә тотемистик аң ҡалдыҡтары этногенетик һәм этнонимик йөкмәткеле сюжеттарҙа айырата асыҡ сағыла. Беренсе нәүбәттә башҡорт фольклорында шаҡтай популяр булған ***изгеләштерелгән бүре*** образы иғтибарҙы йәлеп итә. Башҡорт легендаларында ул бер осраҡта ырыуҙы башлап ебәреүсе әсә рәүешендә, икенсе осраҡта — кешеләргә йәшәр төйәк табып биреүҙә ярҙам итеүсе, юл башлап барыусы изгелекле хайуан булараҡ һаҡланып ҡалған. Ырыуҙы башлап ебәреүсе бүре-әсә мотивын һүрәтләүе менән 1961 йылда Ырымбур әлкәһенең Гай районы Башбүре ауылында йәшәүсе Сабир Төлкөбаевтан (1898 йылғы) Кирәй Мәргән яҙып алған «Бүреләр тоҡомо» исемле легендар риүәйәт айырыуса әһәмиәтле: кеше менән хайуан араһындағы ҡан-ҡәрҙәшлек мөнәсәбәттәренең булыуына ышаныу, хайуандан ырыу, тоҡом таралыу мотивы, йәғни тотемистик ҡараш, бында үҙенең боронғо һыҙаттарын һаҡлаған килеш, беҙҙең көндәргәсә килеп еткән. Уның тулы тексы шулай: «Беҙ — Бүреләр ырыуы. Элек Үҫәргән булғанбыҙ. Ата-бабалар күсеп-ҡунып йөрөгәндә, уларға бер инә бүре осраған. Бер һунарсы быны атайым тиһә, бүре телгә

килеп әйткән: «Атма мине, ҡойроғомдан тотоп ергә һуҡ!» һуҡһа, теге бик матур бер ҡыҙ булған, һунарсы уны алып ҡайтҡан да тора башлаған. Үҫәргәндәр быға риза булмаған, ҡыуып ебәргәндәр үҙен. Шунан һунарсы ситкә китеп, үҙе бер ғаилә яһап, балалары булып, ҙур бер ил ҡороп ебәргән. Әсәләре бүренән булғас, уларҙы бүреләр тип йөрөткәндәр. Ырыуҙы башлап ебәргән әлеге һунарсыны баш бүре тип атағандар. Бына беҙ шул баш бүре тоҡомонан киләбеҙ инде» (55, 82).

Башҡортостандың Хәйбулла районына ҡараған Һаҡмар Бүреһе (икенсе исеме Һаҡмар-Наҙарғол) ауылы кешеләре лә үҙ нәҫелдәр енең таралыу тарихын ошондай уҡ легендаға бәйләп аңлаталар (123, 225). Күренеүенсә, кеше менән кейектең ҡушылыуынан ырыу башланып китеү мотивы был сюжетта асыҡтан-асыҡ әйтеп бирелгән. Дөрөҫ, бында һунарсы егет «саф» бүре менән ғаилә мөнәсәбәтенә инмәй, ә тылсым ярҙамында ҡыҙға әүерелгән инә бүрегә өйләнә. Ләкин был хәл мәсьәләне юҡҡа сығармай, сөнки «әүерелеү» мотивы тотемистик ҡараштар системаһы осон ят күренеш түгел, бәлки «был ышаныуҙарҙың гносеологик яғы» (156, 218). Шул уҡ ваҡытта ул аңдағы эволюцияны, билдәле бер үҫеште сағылдыра. Дөйөм тамырҙан килгән ҡараштар һүрәтләнгәнлеге текстың үҙенән дә яҡшы аңлашыла: «...әсәләре бүренән булғас, уларҙы бүреләр тип йөрөткәндәр».

Аҙаҡ килеп, бында иғтибарҙы йәлеп иткән йәнә бер деталь бар, ул —кешесә һөйләшә белә торған сәйер бүренең үҙе үк тарафынан әйтеп бирелгән тылсым формаһы. Атырға йыйынған һунарсыға инә бүре: «Атма мине, ҡойроғомдан тотоп ергә һуҡ!» —ти. Беҙҙеңсә, был —ерҙе, тупраҡты изгеләштереү, бөтә тереклектең тупраҡтан яралған булыуына ышаныу, йәғни ер-әсә мотивы, һәм бүрене ерҙән йәшәү көсө, ҡот ала алыусы мөғжизәле йән эйәһе итеп ҡарауҙың үҙенсәлекле бер сағылышы. Ошо фекерҙе икенсе бер легенда һәм ҡайһы бер әкиәт сюжеттары ла ҡеүәтләй. «Бүреле йылғаһы» тигән легендала, мәҫәлән, кешеләргә ҡотло ер, йәшәр төйәк табып биреүсе изгелекле бүре үлгән ырыу башлығына ҡәбер ҡаҙғанда ерҙән килеп сыға һәм «бер исемһеҙ йылға аға башлаған ергә килеп юҡ була. Ошо йылға башланған ергә, урман араһына, башҡорттар нигеҙ ҡороп

йәшәй башлайҙар» (55, 65). Бында инде бүре —ер хужаһы булараҡ, ҡотло урын күрһәтеүсе изгелекле хайуан рәүешендә күҙ алдына баҫтырыла. Ә «Аҡ бүре» исемле әкиәттә иһә, бүрегә әүерелә ала торған урман кешеһе —шул ерҙең, урмандың ҡөҙрәтле хужаһы. Әсәләрен эҙләргә сыҡҡан егеттәргә: «Бында килеп, минең үләнемде тапарға кем ҡушты һеҙгә?» —ти ул. Юлсыларҙың ҡаршылыҡ күрһәтергә теләүен белгәс, ул әпсен-төпсөн уҡып, тегеләрҙе тораташҡа әйләндерә. Юғалған әбейҙең өс улы менән дә һөйләшеү әкиәттә ошо юҫыҡта бара. Әммә өсөнсө улдың урман хужаһына ҡарата итәғәтлек һәм әҙәплелек күрһәтеүе ваҡиғаларҙы ыңғай яҡҡа үҙгәртә. Урман хужаһы, хәҙер инде бүре ҡиәфәтенә ингән килеш, геройҙың төп ярҙамсыһына әйләнә (52, 37). Шул уҡ «Аҡ бүре» исемле татар халыҡ әкиәтендә лә бүре тылсым көсөнә эйә булған урман хужаһы рәүешендә һүрәтләнә (277, 185—202). Башҡорт әкиәтенән айырмалы рәүештә, бында урман хужаһы башта уҡ геройҙар менән бүре образында осраша, кеше ҡиәфәтендә иһә ул һуңғараҡ күренә. Композицион яҡтан, сюжет үҫтерелеү йәһәтенән ҡайһы бер айырмалыҡтар булыуға ҡарамаҫтан, башҡорт һәм татар әкиәттәренең нигеҙе, йөкмәтке асылы бер: бүрене изгеләштереү, уны ер, урман хужаһы итеп күҙ алдына килтереү. Телгә алынған «Бүреле йылғаһы» исемле легендала ҡәберҙән сыҡҡан ҡорттоң (бүренең) кешеләрҙе шулай уҡ «йылға башланған урынға, урман араһына» эйәртеп алып килеп төйәкләндереүе, тимәк, бер ҙә осраҡлы түгел, әлеге ҡарашҡа бәйләнгән. «Бүреләр тоҡомо» легендаһында телгә алынған тылсым рәүеше, шулай итеп, бүре-әсә мотивының тарихи нигеҙен аңлауҙа әһәмиәтле күренеш булып тора.

Шуны ла әйтергә кәрәк, тотемистик аң ҡалдыҡтарын сағылдырыусы бүре тоҡомо мотивы ҡайһы бер әкиәттәрҙә, мәҫәлән, «Бүре улы Сынтимер бәһлеүән» тигән әкиәттә, бүре-ата образында сағыла. «Бүреләр тоҡомо» легендаһындағы һымаҡ, был әкиәттә лә тылсым, әүерелеү мотивтары ҡыҙ менән бүренең ҡушылыуына алшарт булып тора: «...Бүре, күҙ асып йомғансы, ҡыҙҙы бер тау янына еткерҙе, ти. Шул урында бүре бер һелкенгәйне, ҡыҙҙың үҙенән дә матурыраҡ бер егеткә әйләнде, ти (52, 22). Әкиәттә артабан

ҡыҙҙың бүренән булған балаһы тыуыуы, уға Сынтимер тип исем ҡушылыуы, баланың йыл үҫәһен ай үҫеп, бер йәше тулғанда батыр булып китеүе һ. б. мөғжизәле ваҡиғалар һүрәтләнә (52, 22).

Легендар риүәйәттәрҙә бүрегә бәйле сюжеттарҙың икенсе тибы киңерәк таралған. Уларҙа бүре (ҡорт) — кешеләрҙе ҡурғаусы, аҙашҡандарға, илһеҙ ҡалғандарға юл күрһәтеп, төйәк табып биреүсе изгелекле йән эйәһе. Был мотивҡа ҡоролған легендалар төрлө варианттарҙа йөрөй, әммә уларҙың төп йүнәлеше, үҙәк идеяһы бер: башҡорттарҙың боронғо ата-бабалары Уралға, Ағиҙел буйҙарына «төрөк яғынан», «Ғәрәбстан яғынан»... мөғжизәле бүрегә (ҡортҡа) эйәреп килеп сыҡҡан; шул ҡорт баш булып килгәнгә, улар үҙҙәрен «башҡорттар» тип атаған. Былдай әҫәрҙәрҙең этнонимды аңлатыуға ҡоролғанлығын уларҙың исемдәр енән үк күрергә мөмкин. «Башҡорт» һүҙе ҡайҙан килеп сыҡҡан?», «Башҡорт ҡайҙан килеп сыҡҡан?», «Башҡорт исеменең сығышы» (45, 52). Был легендаларҙың һәр береһендә бүренең ер ҡотон тойоусы, башҡорттарҙың ата-бабаларына ҡотло урын табып биреүсе изге кейек булыуы һыҙыҡ өҫтөнә алына. Легенданың 1966 йылда Әбйәлил районының Таҡһыр ауылында яҙып алынған бер вариантында, мәҫәлән, түбәндәге юлдар бар: «Уралға еткәс, бүре өйөрө туҡтаған. Бер көн үткән, ике, өс көн үткән — өйөр һис кенә лә ҡуҙғалмай икән. Шунан кешеләр: «Бүре өйөрө ҡуҙғалмағас, был ерҙә ҡот барҙыр»,— тип уйлағандар. Ошо ерҙә төйәкләнергә булғандар» (45, 52).

1961 йылда һарытау әлкәһенең Перелюб районы Ишембай ауылында яҙып алынған вариантта ла баш бүре табып биргән ер-һыу байлығын һәм уның матурлығы менән һоҡланыу тойғоһо айырыуса бер йылылыҡ менән һөйләнә: «...Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ бүре артынан бара торғас, бик матур туғайлы йылғаларға, урманға, емеш-еләккә бай ергә килеп сыҡҡандар. Бындағы тауҙар, күккә олғашып, күҙ яуын алып торалар икән. Ошо ергә килеп еткәс, баш бүре туҡтаған. Ырыу ҡарттары бергә йыйылып: «Беҙ ошонан да матур ерҙе тапмабыҙ, бындай ер донъяла юҡ, ошонда ғүмер итәйек», — тигәндәр. Ошо матурлыҡҡа, байлыҡҡа тиңе булмаған ерҙә тирмә ҡороп, мал үрсетеп, һунар итеп йәшәй

башлағандар. Шул ваҡыттан бирле ата-бабаларыбыҙ үҙҙәрен баш бүре артынан килгән кешеләр, йәғни «башҡорттар» тип йөрөтөр булғандар. Борон бүрене «ҡорт» тип йөрөткәндәр. «Баш ҡорт артынан килеүсе халыҡ» тип әйтеү — «баш бүре артынан килеүсе» тигәнгә тиң. «Башҡорт» һүҙе бына ошонан килеп сыҡҡан» (55, 63). Әлбиттә, былдай типтағы сюжеттарҙың уйҙырмаға ҡоролғанлығы күренеп тора, әммә, билдәле булыуынса, халыҡ ижадында бер ҡасан да төптө мәғәнәһеҙ уйҙырма булмай: тикшереп ҡараһаң, үтә фантастик образ һәм мотивтарҙың да матди яҡтан йә аң торошон һүрәтләү йәһәтенән реаль ерлеге булғанлығы асыҡлана. Беҙ ҡарап үткән миҫалдар һәм шуларға оҡшаш башҡалары кеше аңының боронғо бер кимәлен сағылдырыуҙары менән тарихи. Уйҙырма ваҡиғалар менән аралашып килгән реаль һыҙаттар тәңгәленә килгәндә иһә, бүре — юл башлаусы мотивына ҡоролған легендаларҙан боронғо ата-бабаларыбыҙҙың күсмә тормош менән көн итеүҙәрен, таралыу арауыҡтарын төҫмөрләй алабыҙ.

Изгеләштерелгән бүре образына бәйле мотивтарҙың боронғолоғо дөйөм төрки материалы юҫығында айырыуса ныҡ тоҫмаллана. Ғилми әҙәбиәттән күренеүенсә, инә бүре имеҙеп үҫтергән малайҙан ырыу таралыу мотивы төрки телле усунь ҡәбиләләре берләшмәһенең (яңы эраға тиклемге 1 мең йыллыҡтың аҙағы — яңы эраның беренсе быуаттары) легендаларында уҡ осрай (2, 157). Һуңғараҡ, VI быуатта, көнсығыш йылъяҙмаларына теркәлгән легенда төрки-тугюҙарҙың ырыу башын шулай уҡ мөғжизәле тыуыу мотивына илтеп бәйләй: төрки-тугюҙарҙың нәҫеле инә бүренән һәм үлемгә дусар ителгән малайҙан яралыуы тураһында әйтелә. Инә бүре башта малайҙы үҙенең һөтөн имеҙеп, тәрбиәләп үҫтерә, аҙаҡ уның менән ғаилә мөнәсәбәтенә инә һәм шуның һөҙөмтәһендә көслө тоҡом барлыҡҡа килә. Ырыу башлығының инә бүренән тыуған ун улы үҫеп еткәс, күрше ырыуҙың ҡыҙҙарын урлап алалар, һәм уларҙан тыуған балалар ҡом бөртөгөләй күбәйеп китә (69, 220).

Тотемистик ҡараш саҡтылары төрки телле Алтай телеуттарының мифтарында ла һаҡланып ҡалған. Г. Н. Потанин тарафынан ҡағыҙға теркәлгән бер легендала бүре менән

ҡыҙҙың яҡынлығынан телеут ырыуының барлыҡҡа килеүе хаҡында бәйән итәлә (223, 17—18).

Боронғо монгол легендаларына ҡарағанда, монголдарҙың нәҫел ебе Күк менән инә маралдың ғаилә мөнәсәбәтенән тыуған күк бүре образы менән бәйле (228, 137).

Күренеүенсә, «Бүреләр тоҡомо» исемле башҡорт легендаһының тамырҙары боронғо дөйөм төрки һәм монголдарҙың фольклор традицияларына барып тоташа.

Бүрегә табыныу төрки, монгол ҡәбиләләрендә, күрәһең, шул тиклем көслө булған, хатта Ашин тигән атаҡлы ырыу башлығы үҙенең инә бүре тоҡомонан икәнлеген белдереү өсөн йәшәгән торлағының ҡапҡаһына бүре башы төшөрөлгән байраҡ элдерткән (69, 221).

Был традиция башҡа төрки ҡағандарының байраҡтарында ла сағылыр булған. Ҡағандарҙың һаҡсыларын «бүреләр» тип йөрөтөү күренеше лә (119, 407) иғтибарға лайыҡ.

Һуңғараҡ оҡшаш мотивтар Сыңғыҙхандың мөғжизәле тыуыуы хаҡындағы монгол хикәйәттәрендә лә урын ала. 1240 йылға ҡараған хроникала, мәҫәлән, Сыңғыҙхан күк бүре — Буртэ-чинонан тыуған изге йән эйәһе итеп телгә алына, ата-бабалары хөрмәтенә монголдарҙың үҙ байраҡтарында алтын бүре башы төшөрөлгән һүрәт йөрөтөүҙәре һөйләнелә (140, 53).

Боронғонан килгән шундай ышаныу һәм традицияларҙың ҡалдыҡтары башҡорт халҡының ғөрөф-ғәҙәттәрендә, ауыҙ-тел ижадында беҙҙең көндәргәсә һаҡланып ҡалған. Тарихсыларҙың тикшеренеүҙәренән күренеүенсә, әле XVIII—XIX быуаттарҙа көньяҡ-көнсығыш Башҡортостандың волость старшиналары административ власть символы булараҡ үҙҙәре менән бүре башы төшөрөлгән билдә йөрөткәндәр (216, 31). 1960 йылдарҙа Әбйәлил районының Асҡар ауылында йәшәүсе Мирхәйҙәров Мөғәлләм Шәйхаттар улының бер ҡатлы һәм ябай ғына итеп: «Башҡорттарҙың байрағында бүре башы булған, шуға күрә уларҙы «башҡорттар» тип атағандар» (203, оп. 63, д. 56), — тип әйтеүендә лә быуаттар төпкөлөнән килгән бер тарихи ауаздың үҙенсәлекле яңғырашы һиҙелә.

Башҡорт легендаларында урын алған икенсе йүнәлеш: бүре — юл башлаусы, ҡурғаусы һәм ҡотло урын табып

береүсе изге йән мотивын йөрөткән сюжеттарҙың тамыры шулай уҡ дөйөм төрки һәм монгол фольклоры традицияларына барып тоташа. Был йәһәттән Оғуз-ҡаған хаҡындағы боронғо сюжеттар айырыуса ҡыҙыҡлы. Уларҙа бүрегә бәйле мотивтарҙың ике тибы ла осрай: күк бүре төрки халыҡтарының легендар атаһы Оғуздың нәҫел ебен, ырыуын башлап ебәреүсе изге йән эйәһе булараҡ та һәм яуҙа ҡыйын хәлдә ҡалған ҡағанды бәләнән ҡотҡарыусы, юл күрһәтеүсе ролендә лә сығыш яһай (141, 38—39; 328, 37, 46; 96, 495). Бүрене Оғуз ҡағандың ырыу башы итеп күрһәтеү —был януарҙы изгеләштереүҙең төрки халыҡтары аңында бик ныҡ тамыр йәйгән булыуын йәнә бер тапҡыр раҫлаусы дәлил. Оғузға бәйле сюжеттарҙың иң боронғоһо тип иҫәпләнгән уйғыр вариантында Оғуз Айҡаған менән үгеҙҙең ғаилә мөнәсәбәтенән яралған (67, 34), тип әйтелә.

Изгеләштерелгән бүре хаҡындағы мотивтарҙың тоторо҇ҡлолоғо һәм киң таралған булыуы Европала йәшәүсе башҡа халыҡтар ижадында ла асыҡ сағыла. Римляндарҙың инә бүре имеҙеп үҫтергән Рем һәм Ромул хаҡындағы легендаларын, гирпин ҡәбиләләренең килеп сығышы, гирпиндарҙың үҙҙәре яулап алған ерҙәргә бүрегә эйәреп килеүе хаҡындағы легендар сюжеттарҙы, славян, герман, роман халыҡтары фольклорында киң таралған әүерелеүсе бүре (оборотень) шуны иҫбатлай (1, 95). Академик В. А. Гордлевский төрки-монгол халыҡтары фольклоры өсөн традицион булған изге бүре тураһындағы хикәйәттәр Европаға күсеп йөрөүсе төрки ҡәбиләләр тарафынан индерелгән булырға тейеш тигән фекерҙә тора (96, 497). Бүре-әсә, бүре-юл күрһәтеүсе һәм ҡурғаусы образының төрки-монгол донъяһында моронлаған булыуын башҡа тикшеренеүселәрҙең хеҙмәттәрендә лә (И. Н. Березин, Г. Н. Потанин, хәҙерге осор ғалимдарынан С. Ю. Неклюдов һ. б.) шаҡтай киң яҡтыртылды.

Башҡорт легендаларындағы бүре образына бәйле мотивтарҙың тамырҙары шулай уҡ бик тәрәндә ята. Атап әйткәндә, бүре-әсә / бүре-ата мотивтарының дөйөм төрки фольклор традициялары ерлегендә яралыуы шик тыуҙырмай.

X быуатҡа ҡараған Ибн-Фаҙлан яҙмаларында башҡорттарҙың бүрегә табыныуҙары хаҡында мәғлүмәттәр булмауына таянып, В. А. Гордлевский башҡорттарға изгеләштер елгән

бүре мотивы әҙәби сығанаҡтарҙан йәки икенсе юл менән һуңғараҡ ингән күренеш (96, 496) тимәксе. Атаҡлы тюркологтың быңдай фекергә килеүенең теп сәбәбе —башҡорт материалының ул ваҡытта әле матбуғатта сағыштырмаса һирәк күренеүе. Тотемистик ҡараштар донъяһынан бер ауаз булып килеп еткән бүре-әсә (йә бүре-ата) мотивтарын йөрөткән ҡимммәтле сюжеттар һуңғы 30—40 йыл эсендә генә табылды. Революцияға тиклемге яҙмаларҙа иһә, нигеҙҙә, бүре-юл башлаусы мотивына ҡоролған легендалар ғына телгә алынды, уларының да ҡайһы берҙәре боронғолоҡ һыҙаттарын юғалтып, ислам динен индереү ваҡиғаларына бәйләп бирелде (199, 57—84). В. А. Гордлевский шундай типтағы бер генә легендаға таянған.

Татар фольклорсыһы Ф. И. Урманчеевтың бер мәҡәләһендә, башҡорт легендаларындағы бүре —юл башлаусы мотивы нигеҙенә таянып (был мотив бүре-әсә мотивынан һуңғараҡ тыуған), башҡорттарҙың бүреләр хаҡындағы ҡараштарының тарихи-хронологик рамкаларын тарайтыуы күҙгә ташлана (293, 22). Быңың сәбәптәре лә юҡ түгел: бүреләр тоҡомо тураһындағы башҡорт легендалары, «Аҡ бүре» исемле башҡорт әкиәте, күп һанлы этнографик материалдар ул ваҡытта архивтарҙа һаҡлана ине.

Әхмәт Ибн-Фаҙлан яҙмаларында бүре культына ҡараған мәғлүмәттәрҙең булмауы иһә төрлө сәбәптәрҙән килеүе мөмкин. Билдәле булыуынса, бүренән ырыу, тоҡом таралыу мотивын йөрөткән легендалар башлыса Үҫәргән, Түңгәүер ҡәбиләләренең ауыҙ-тел ижадында урын алған. Ибн-Фаҙлан осратҡан башҡорттарҙың (ул һөйләшкән кешеләрҙең) был сюжетты белмәүҙәре лә ихтимал. Бынан тыш, борон тотем хайуаны йәки үҫемлегенә ҡарата төрлө тыйыуҙар, шул иҫәптән сит ырыу вәкил енән уның исемен йәшереү кеүек ышаныуҙар йәшәгәнлеге билдәле (85, 25—30). Шуға күрә башҡорттарҙың Әхмәт Ибн-Фаҙланға үҙҙәренең изге тотемы хаҡындағы ышаныуҙарын әйтмәй йәшереп ҡалдырыуҙары ла бар.

Бүреләр хаҡындағы сюжеттарҙың башҡорт халыҡ ижады ерлегенә һуңғараҡ ингән күренеш булыу ихтималлығын фараз иткән хәлдә лә, В. А. Гордлевский башҡорттарҙа бүренең тотем хайуаны итеп иҫәпләнеүен шик аҫтына алмай.

«Башҡорттар, — тип яҙа ул,— башҡорт этник терминын аңлатыуҙа (аңлауҙа) бүрегә тотем булараҡ ҡарайҙар, ҡорт һүҙен әйтмәҫ өсөн уны бүре һүҙе менән алмаштыралар. Тотемға, әлбиттә, табу һалына, йәғни уның исемен әйтеү тыйыла (96, 495). Миҫал рәүешендә Гордлевский элекке башҡорт ғаиләһендәге килен менән ҡайны араһындағы үҙенсәлекле аралашыу формаһын, йәғни исемен әйтергә ярамау сәбәпле (ырыу башлығына) килен кешенең «бүре» тип мөрәжәғәт итеү күренешен иҫкә төшөрөп үтә. Был мәғлүмәтте ул Стамбулдағы тюркология институтының ассистенты, башҡорт Әбделҡадир Инандан (псевдоним, ысын исеме — Фәтхелҡадир Мостафа улы Сөләймәнов) алған.

Бүренең исемен алмаш атамалар аша биреү башҡа халыҡтарҙың ижад традицияларында ла күҙгә ташлана. Мәҫәлән, бүрәт халҡының кинәйәле һөйләшендә бүре —дала эте —«хээрын нохой» (311, 655), монголдарҙа «хээрийн нохой» шулай уҡ дала эте мәғәнәһендә (312, 595) эвфемизм булараҡ йөрөй. Себер, Алтай халыҡтары һөйләштәренән бүренең алмаш исемдәрен күпләп килтерергә мөмкин. Хакастарҙа: бүре —хатығ мойын (ҡаты муйын), чағы ағайы (дала эте); тувалыларҙа: узун кудурук (оҙон ҡойроҡ), кок ҡараҡ (йәшел күҙ) һ. б. Ҡарачай һәм балҡар эпосында бер нарт ырыуының сығышы Схуртук тигән тотемик исемгә бәйләп аңлатыла. У. З. Байрамуковтың фекеренсә, уның этимологияһы «с-хурт-укъ, хурт (бүре) —Со ҡәбиләһенең улы» тигән төшөнсәне бирә (181, 108).

Осетин эпосындағы нарттарҙың ырыу башлығы Уархағтың исеме боронғо осетин телендәге vrka — ka «бүре» атамаһына тап килә. Хәҙерге телдә был һүҙ ундай мәғәнәлә ҡулланылмай: заманында тыйылған һүҙҙәр рәтенә индерелгәнлектән, ситтән кергән бираеғ (сакс т. birgga —«бүре») һүҙе тарафынан ҡыҫырыҡлап сығарылған (1, 90).

Йәнә бер миҫал. Быныһы — академик Б. А. Рыбаковтың күҙәтеүҙәренән. Бүрегә ҡарата славян халыҡтары ырымдарында ҡулланылған «хорт с хортенятами» тигән архаик форманың осрауы һәм был һүҙҙәрҙең мәғәнәһен информанттың белмәүе ғалимдың иғтибарын йәлеп итә. Артабан «хорт» һүҙенең мәғәнәһен Вщиже ауылының (Брянск өлкәһе) башҡа кешеләре лә белмәгәнлеге асыҡлана. Баҡһаң,

хорт (сағыштырығыҙ: ҡорт, ғурд һ. б.) — рус һәм болғар теленең ҡайһы бер һөйләштәрендә — «бүре» төшөнсәһен бирә икән. Ырымда «хорт с хортятами» формаһы «волк с волчатами» тигән һүҙҙәр менән йәнәшәләш ҡулланылған.

Б. А. Рыбаковтың әйтеүенсә, «хорт» — «бүре» төшөнсәһе белорус фольклорында ла осрай. Урман хужаһы шүрәлегә мөрәжәғәт рәүешендәге ырымда, мәҫәлән: «...лясун и лясуниха! Прошу я вас и кланяюсь я вам с великими упросами и низкими уклонами — содержайте своих хортов, замыкайте им губы и зубы!» Ғалим «хорт» — «бүре» һүҙенең онотолған формаһы, архаик һүҙ тип иҫәпләй (249, 134).

Рус һәм белорус телдәренә был һүҙҙең төрки телдәренән ингән булыуы бик ихтимал. Нисек кенә булмаһын, славян халыҡтары ырымдарында бүре образының ғәҙәти образ булмағанлығы күҙгә ташлана. Беҙгә шунығы мөһим.

Шулай итеп, килтерелгән дәлилдәрҙең бөтәһе лә бүрегә бәйле мотивтарҙың тотемизмға, хайуандар культына бәйле ҡараштарға нигеҙләнеп, бик боронғо замандарҙа яралған булыуҙары хаҡында һөйләй. Бүре хаҡындағы башҡорт легендаларында иң боронғо бүре-әсә (бүре-ата) мотивынан башлап бүре-юл башлаусы, бүре-ярҙамсы, ҡурғаусы образдарын осратырға мөмкин. Был мәсьәлә буйынса хәҙер инде шаҡтай аныҡ фекер тупланды. Айырыуса әһәмиәтле мәғлүмәттәр этнограф Р. Ғ. Кузеевтың хеҙмәттәрендә килтерелде. Башҡорттарҙың бүреләр хаҡындағы легендаларын башҡа халыҡтарҙың легендалары менән сағыштырып өйрәнеү йүнәлешендә уның тарафынан ҡыҙыҡлы күҙәтеүҙәр үткәрелеп, боронғо этнокультур бәйләнештәрҙең тамырҙарын төҫмөрләү мөмкинлегенә билдәле дәрәжәлә юл асылды. «Көньяҡ-көнсығыш башҡорттарының ата-бабалары бүре образын, бүре культын үҙҙәренең Азия иленән алып килгән. Мөғжизәле бүре ярҙамында яңы төйәк табыу хаҡындағы башҡорт риүәйәттәренең төҙөлөшө, характерлы деталдәре иһә Төньяҡ Кавказ ерлегенән килә» (160, 156),— тигән һығымта яһалды. «Азия иле» тураһында һүҙ барғанда иһә, башҡорт этносы формалашыуында ҡатнашҡан айырым ырыуҙарҙың күсенеүе (миграцияһы) хаҡында ғына фекер йөрөтөргә мөмкиндер тип уйлайбыҙ, сөнки тарихсыларҙың (Н. Ә. Мәжитов, Ә. Н. Солтанова) һуңғы йылдарҙағы тикшеренеүҙәренә ҡарағанда, башҡорт этносының иң боронғо үҙәге, төп өлөшө

яңы эраға тиклем үк Көньяҡ Урал ерендә барлыҡҡа килгән. Башҡорттарҙың тәүтөйәгенә бәйле ҡараштар фольклорҙа ла легендалар менән генә сикләнмәй. Архаик мотивтарға нигеҙләнгән «Урал батыр» эпосында, мәҫәлән, ҡанбабаларыбыҙҙың тәү төйәге итеп Урал ере, Урал тауҙары һүрәтләнә. Тарихи йырҙарҙағы «Күгәрепкәй ятҡан Урал тауы —Ата-олатайҙарҙың да төйәге» (варианты: ... ете лә ырыу илдең төйәге), — тигән юлдар ҙа ерлекһеҙ яралған һүҙ уйнатыуҙар түгел. «Урал батыр» менән «Аҡбуҙат» эпостарының мифологик образдарын Шүлгәнташ мәмерйәһендәге һүрәттәр менән сағыштырып өйрәнеү һөҙөмтәһендә археолог В. Г. Котов үҙенең «Башкирский эпос «Урал батыр»: историко-мифологические основы» (Уфа, 2006) тигән китабында Шүлгәнташтың боронғо башҡорт ата-бабаларының йолалар башҡара торған үҙәге («культовый центр») булыуы, «Урал батыр» эпосында инициация йолалары сағыл<u>ышы</u> табыуы хаҡында яҙа. Был күренеште ул таш быуат дәүерҙәре менән бәйләй (351-се б.).

Легендаларҙағы бүре образына йәнә ҡайтып, шуны әйтергә кәрәк: аң үҫешенең билдәле бер этабында кеше менән хайуандың ғаилә мөнәсәбәтенә инә алыу, йә булмаһа йәнлек-хайуандарҙың кешегә, йәки кешенең йәнлеккә әүерелә алыуына ышаныу мөмкинлеге ҡалмаған осраҡта, халыҡтар ҡарашында, В. И. Абаев һүҙе менән әйткәндә, «рационализаторлыҡ» күренештәре урын ала. Улар башҡорттарҙың бүреләр хаҡындағы ҡайһы бер легендалары өсөн дә ят түгел. Был йәһәттән 1982 йылда Бөрйән районының Яңы Мөсәт ауылында Р. Уразаева яҙып алған бер легенда иғтибарҙы йәлеп итә. Бына ул: «Имеш бер кеше аҙашып йөрөй торғас, урман төпкөлөндә биш бүрегә тап була. Бүреләр был кешегә теймәйҙәр. Кешенең дә былар эргәһенән киткеһе килмәй: бер ерҙә йән эйәһе юҡ, ҡайҙа барырға белмәй. Шулай йәшәй башлайҙар былар —биш ҡорт һәм бер йән.

Бер аҙҙан һуң теге бүреләр ҡайҙандыр бер ҡатын табып алып ҡайталар, имеш. Ир менән ҡатын ғаилә ҡора. Балалары ишәйеп китеп, үҫкән береһе тарала тора. Иҙрис исемлеһе бер урынға, Ҡолсора — икенсе, башҡалары шулай уҡ үҙҙәренә оҡшаған ерҙәргә урынлашалар. Бөрйән ерендәге ауыл атамалары, йәнәһе, ана шул кешенең балалары-

ның исемдәре икән. Бөрйән ере ана шул «бер йән»дән ҡалған, ә милләттәре «биш ҡорт»тан тора-бара «башҡорт»ҡа әүерелгән» (301, 1).

Күренеүенсә, легендала халыҡ аңындағы ҡараштар эволюцияһы сағыла: бүре ырыу башлап ебәреүҙә туранан-тура ҡатнашмай — сағыштырмаса үҫкән аң кимәле быны үҙенең эстетик ҡанундарына инде һыйҙыра алмай. Әммә боронғо мотив барыбер әҫәрҙең нигеҙендә ҡала: кешеләр ишәйеү, ырыу таралыу кеүек үтә мөһим күренеш изгелекле януар — бүреләр ярҙамында тормошҡа атҡарыла. Легенда этнонимик мотив менән осланһа ла («...милләттәре «биш ҡорт»тан тора-бара «башҡорт»ҡа әүерелгән»), бында инде рационализм — мәсьәләне тормошсанраҡ аңлатырға тырышыу һиҙелеп тора.

Һуңғы йылдарҙа яҙып алынған ҡайһы бер риүәйәттәрҙә мифологик сюжет һәм мотивтар бөтөнләй онотолоп, улар урынына көнкүреш ваҡиғаларына бәйле аңлатыуҙар килгәнлеге күҙгә ташлана («Бүреләр араһы», «Бүреләр») (55, 82-83).

Башҡорттарҙың боронғо замандарҙа бүрегә табынғанлығы археология, этнография, топонимия, антропонимия материалдары менән дә нығытыла. Мәҫәлән, VIII—IX быуаттарға ҡараған Волга һәм Урал буйы археологик ҡомартҡыларында мифологик ҡараштар йоғонтоһонда төшөрөлгән һүрәттәр булғанлығы билдәле. Беҙҙең тема өсөн айырыуса 1964 йылда Башҡортостандың Салауат районы Ишембай (Мусабай) ауылы эргәһендәге ҡәберлектәрҙә Н. А. Мәжитов экспедицияһы тапҡан көмөш тәңкәләр әһәмиәтле. Эйәрҙең ағас өлөшөн биҙәү өсөн файҙаланылған был тәңкәләрҙә төрлө йәнлек һүрәттәре, шуларҙың береһендә ат менән алышыусы бүре рәсеме төшөрөлгән, һүрәттәрҙең тулы булмауы сәбәпле Нияз Мәжитов уларҙың мәғәнәһен аңлатыуҙан тыйылһа ла, ҡомартҡыларҙың мифтарға нигеҙләнеп эшләнеү ихтималлығын белдерә, Башҡортостандағы Ишембай табылдыҡтары менән Алтайҙағы Ҡудыргэ ҡәберлегендә һаҡланған эйәрҙең һүрәттәре (VII б.) араһында сюжет оҡшашлығы барлығын әйтә (187, 144). Татар археологы А. Х. Халиков Ишембай убаларындағы һүрәттәрҙә һәм үҙе тикшергән башҡа археологик табылмаларҙа бүрегә табыныу эҙҙәрен күрә,

был ҡомартҡыларҙың һис шикһеҙ төрки халыҡтарыныҡы булыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала. Был хаҡта ул 1971 йыл «Советская археология» журналында (305, 116) яҙып сыҡты.

Башҡорт ырыу-ҡәбилә системаһында бүре араларының булыуы үрҙә легендалар миҫалында ярайһы уҡ асыҡ күренде булһа кәрәк. Бынан тыш бүренең этноним булып йөрөүе тарихи-этнографик материалдар менән дә нығытыла. «Күк бүре» уйындары, күҙ тейеүҙән һаҡлау өсөн бүре теше йәки тырнағы һалып эшләнгән төрлө бетеүҙәр, ырымдарға бәйле йолалар (бүре тарамышы яндырыу) — быларҙың һәммәһенең тарихи ерлеге шул боронғо аң ҡалдыҡтарына барып тоташа. XX быуаттың икенсе яртыһында тупланған фольклор материалдары бүрегә бәйле ырымдарҙың, һәр төрлө ышаныуҙарҙың онотолоп бөтмәгәнлеген күрһәтә. Шулар араһында бүре тарамышын яндырғанда башҡарыла торған ырым-һүҙ өлгөһө ҡыҙыҡлы. Ул 1967 йылда Башҡортостандың Әлшәй районы Ташлы ауылында Ғилмияза Шоңҡарованан (1890 йылғы) яҙып алынған:

Бүре, бүре, бүрекәй!
Бүре, бүре, бүрекәй!
Бәлә килде башыма,
Үҙең килсе ҡаршыма,
Күҙем тулған йәшемә.
Бүре, бүре, бүрекәй!
Атым уғры ҡулында,
Ҡороп ҡатһын юлында —
Шул ҡарғышым уйымда.
Бүре, бүре, бүрекәй!
Табып бирсе уғрыны!
Харап итмә тоғроно!
Бар теләгем шул ине.
(203, оп. 21, д. 8, ч. 1, л. 261.)

Килтерелгән тексттың боронғо бүре культын сағылдырыуы яғынан әһәмиәте әйтеп бөтөргөһөҙ ҙур, ул хәҙерге көндәргәсә һаҡланып ҡалған һирәк осрай торған уникаль ҡомартҡы. Бүрегә мөрәжәғәттең формаһына ғына иғтибар итегеҙ: «Бүрекәй! Бәлә килде башыма, үҙең килсе ҡаршыма!» Тотем йәнлеге —ырыу башлаусының рухын саҡырыу, уға ялбарыу бер ҙә тиктәҫтән түгел, ә һүҙҙең магик көсөнә ышаныу кеүек архаик тойғо сағыла бында.

Ер-һыу, ауыл исемдәре араһында «ҡорт», «бүре» һүҙе менән ойошҡан атамалар байтаҡ: Ҡортйылға, Ҡортүлгән, Бүребаш, Башбүре, Урта бүре, һаҡмар бүреһе, Бүреле

һ. б. Легендаларҙа бындай атамалар башлыса бүре культына бәйле боронғо ҡараштар, ышаныуҙар менән аңлатыла.

«Бүре» һүҙе һәм уның варианттары (ҡашҡар, һыртлан) нигеҙендә ойошҡан кеше исем-фамилияларының (Бүребай, Бүрехан, Аҡбүре, Ҡашҡарбай, Ҡашҡар, Сыртланов) барлыҡҡа килеүе шулай уҡ тәбиғәт донъяһы менән кеше араһындағы яҡынлыҡ, тығыҙ бәйләнештәрҙең һөҙөмтәһе ул. Йыйып ҡына әйткәндә, башҡорт мифологияһында бүренең изгеләштер елгән йән эйәһе —тотем булыуы күп төрлө материалдар менән раҫлана[2].

Төрки халыҡтарының, шул иҫәптән башҡорттарҙың, легендаларында бүре хаҡындағы сюжеттар менән туранан-тура бәйләнештә торған йәнә бер төр хикәйәләр бар. Ул — ***изгелекле эт*** тураһындағы легендалар. Материалдарҙан күренеүенсә, был ике образдың этиологик мәғәнәһе асылда бер: әсә, йәки ырыу башлаусы; аҙашҡандарға юл күрһәтеп, изге төйәк табып биреүсе.

Эттең бер төркөм кешеләргә төйәк табып биреүе хаҡындағы сюжет ғәҙәттә бүре тураһындағы сюжеттар менән аралашып йөрөй. Уҙған быуаттың аҙағында П. Назаров яҙып алған легендала һәм Р. Ғ. Кузеевтың китабында баҫылған бер вариантта төркмән ханы (Назаров вариантында — ҡаҙаҡ ханы) менән ҡаршылыҡҡа ингән башҡорттарҙы Уралға бер мөғжизәле йәнлек («этме, бүреме») эйәртеп алып килә (200, 168; 160, 131). Мәғәнәләре, хатта сюжет төҙөлөштәре яғынан бындай легендалар, айырым деталдәрҙе иҫкә алмағанда, бүре хаҡындағы легендаларҙан нигеҙҙә бер ни менән айырылмайҙар тиергә мөмкин. Уның ҡарауы, эт-әсә мотивы башҡорт фольклорында бөгөнгө көнгә икенсе, шаҡтай алыҫлашҡан формала килеп еткән. Был хәл Башҡортостандың Учалы районында яҙып алынған «Этимгән» исемле бер топонимик риүәйәттә ярайһы уҡ асыҡ сағыла. Кескәй, ләкин ҙур мәғәнәле риүәйәттең йөкмәткеһе түбәндәгесә: «Элек бер ҡатындың балаһы тормаған. Балаң була ҡалһа, эт

[2] Төрки мифологияһында бүре мотивының тотемизмға бәйле булыуын шик аҫтына алған авторҙар барлығын да әйтеп үтергә кәрәк (Дж. Клосон, Л. Потапов). Уларҙың фекеренсә, аҡ бүре — күктән ебәрелгән изге йән (животный предок). Әммә Л. П. Потаповтың мәҡәләһендә (231) был мәсьәләгә ҡарата ҡаршылыҡлы фекерҙәр ҙә юҡ түгел.

һөтөнән ауыҙландыр, тигәндәр уға. Күпмелер ваҡыт үткәс, бала тыуған был ҡатындан. Бер көсөкләгән этте табып, сабыйын имеҙгән бит теге. Шул бала йәшәп киткән.

Ауылдың исеме шунан ҡалған. Хәҙер уны Әпсәләм ауылы тип йөрөтәләр. Ҡайһы саҡ Бәләкәй ауыл тип тә әйтәләр. Ә ысын исеме төптө Этимгән була» (55, 131).

Сабыйҙы эт һөтөнән ауыҙландырыу кеүек боронғо ышаныуҙар нигеҙендә тыуған үҙенсәлекле ғөрөфтөң булыуы бик мөмкин, әлбиттә, әммә айырым бер кеше менән булған хәлдең ауыл исеме яһалыу сәбәп булыуына ышаныу ҡыйын. Беҙ был осраҡта бары тик «Этимгән» һүҙенең килеп сығышын аңларға һәм аңлатырға тырышыу һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән ялған этимология күренеше менән генә осрашабыҙ, исемдең тамыры иһә һис шикһеҙ боронғо төрки һәм монголдарҙың ырыуын башлап ебәреүсе изгелекле хайуан (бүре, эт, болан) хаҡындағы легендаларҙа. Беҙҙеңсә, Этимгән ауылының тәүге нигеҙ һалыусылары булып Этимгән ырыуы (нәҫеле) кешеләре торған булырға тейеш (Башбүре ауылында йәшәүсе башҡорттарҙың «Бүреләр тоҡомо» исемле легендаһын йәнә хәтерегеҙгә төшөрөгөҙ). Башҡорттарҙың боронғо ата-бабаларының аңында эт менән ҡәрҙәшлек мотивының йәшәгәнлеге тел материалдары һәм ҡайһы бер йолалар аша ла төҫмөрләнә. Мәҫәлән, халыҡ телендә әле лә шаҡтай йыш осраған «эттән тыуған» тигән һүҙҙең тәүге мәғәнәһе ыңғай йүнәлештә булып, ул әүәле нәҫел төшөнсәһен аңлатҡан, тип фараз ҡылырға урын бар. Замандар үтеү менән, боронғо тотемистик ҡараштарҙың онотолоуы сәбәпле, «эттән тыуған» тигән идиома күсмә мәғәнә алып, әрләү һүҙе булып киткән. Хатта «Улар бит нәҫелдәре менән эттән тыуған» тигән контекста ла һүҙ бәйләнешенең күсмә мәғәнәһен (уҫал, яуыз тигәнде) аңлайбыҙ хәҙер.

Борон эттең изгелекле йән эйәһе итеп иҫәпләнеүен дәлилләүсе башҡа йолалар ҙа юҡ түгел. Башҡорт һәм башҡа төрки халыҡтарында әле лә осраштырған эт (көсөк) күлдәге кейҙереү йолаһы, мәҫәлән, шундайҙарҙан. Әйткәндәй, был йола ла, эт имеҙеү шикелле, бала тыуыу, нәҫел үрсеү мотивы менән бәйле. Этнографик материалдарҙан күренеүенсә, сабыйға кейҙерелә торған тәүге аҡ күлдәк «эт» («Көсөк күлдәге») тип аталып, балаға һыймай башлағас, көсөккә

кейҙерелә: «Балабыҙ эт йәнле, әрһеҙ булып үҫһен» тигән теләк әйтелә (203, оп. 73, д. 72, л. 251).

Бала тормаған саҡта, киләһе яңы тыуған баланы эт янына, йә булмаһа эт ашаған һауытҡа һалып алыу, аҙаҡ шул балаға эт исеме ҡушыу (Эткөсөк, Этҡол, Эталмаҫ һ. б.) йолалары (125, 362) —һис шикһеҙ эт күлдәге кейҙереү йолаһы менән бер ерлектәге күренештәр. Уларҙың төбөндә кеше менән изгеләштерелгән хайуан (эт) араһындағы «ҡәрҙәшлек»кә ишара ята. Бөрйән ҡәбиләһенә ҡараған ырыу атамалары системаһында «бараҡ аралары»ның булыуы ла [бараҡ—оҙон йөнлө һунар эте] осраҡлы түгелдер, моғайын. Бараҡ араһы «Бөрйәндәр хан замандарында» тигән риүәйәттә тау бөрйәндәренә ҡараған нәҫел тармағы булараҡ телгә алына (55, 155—156).

Бер үк ваҡытта эт бәлә-ҡазанан һаҡлай ала торған изге йән эйәһе итеп тә иҫәпләнгән. Был хәл шулай уҡ легенда, риүәйәттәрҙә һаҡланып ҡалған мәғлүмәттәр миҫалында асыҡ күренә. «Ҡарагөсөк тауы» исемле риүәйәттә, мәҫәлән, балаһы тормаған атаның яңы тыуған балаға, йолаға таянып, эт исеме ҡушыуы хаҡында хәбәр итеү менән генә сикләнмәй, бәлки был йоланың сәбәбе лә аңлатыла: «Ен-пәрей ҡағылмаһын тип, бай уға «Ҡарагөсөк» тигән исем ҡуштырған» (55, 97).

Эт (көсөк) күлдәге кейҙереү, эт исеме ҡушыу һәм шуға оҡшаш башҡа йолалар төрки телле халыҡтарҙың күпселегендә бар (280, 353; 110, 39; 64, 20; 304, 227; 315, 98). Был осраҡлы түгел: уларҙа ла эт, бүре кеүек үк, борон тотем йәнлеге булып иҫәпләнгән. Байкал буйында (палеотюрк субстраты формалашҡан иң боронғо регион), Үрге Вилюйҙа асылған неолит дәүере ҡаҙылмалары араһында ҡәберлектәрҙә ритуал буйынса күмелгән эт һөлдәләре табылыу (148, 126; 299, 138), эт исеменең ырыу, ҡәбилә атамалары системаһына инеп китеүе (урта быуатта печенегтарҙың «итбежене» тигән исем йөрөтөүе, татар-мишәрҙәрҙәге «көчек халыгы», төрөкмәндәрҙең этнонимия системаһында 20-гә яҡын атаманың эт образы менән бәйле булыуы (162, 130; 280, 223; 286, 15) эт образына ҡағылған ҡараштарҙың орнаментта сағылыуы (304, 228; 280, 352), халыҡтарҙың ауыҙ-тел ижады әҫәрҙәрендә урын алыу —был күренештәрҙең бөтәһе

лә фәнни әҙәбиәттә аңдағы тотемистик фекерләү ҡалдыҡтары итеп баһалана.

Фольклор әҫәрҙәре хаҡында һүҙ барғанда, ырыу башлаусы эт-ата менән Одун ағасы-әсә тураһындағы монгол легендаларын (223, 161), Тибет туфандарының нәҫел ебен таратыусы эт-әсә хаҡындағы хикәйәләрен (3, 289), яҡут (214, 360—361), ҡырғыҙ, төрөкмән (286, 12—15) халыҡтарының күп төрлө ышаныу һәм легендаларын иҫкә төшөрөү генә лә етер ине. Ҡырғыҙ халҡында 40 ҡыҙ һәм ҡыҙыл эттән таралған ҡырғыҙ ырыуы хаҡындағы легендалар менән бер рәттән башҡорт риүәйәттәренә ауаздаш «Итэмген» хикәйәһенең булыуы иғтибарҙы айырыуса йәлеп итә: «Меркет ырыуының ата-бабаһы Мадаминдың тыуған бер балаһы үлә торған. Яңынан бер малайы тыуғас, йола буйынса, эт имсәге имеҙеп, Итэмген тигән исем ҡушҡандар» (3, 287),— тиелә ҡырғыҙ легендаһында. Г. Н. Потаниндың яҙмаларында «Итэмген» — Ҡырғыҙ ырыуының Кирәй тармағында этноним булараҡ теркәлеп ҡалған (223, 3).

Итэмген хаҡындағы легенда-риүәйәтте төрки-монгол мифологияһында киң билдәле бүре-әсә йәки бүре-ата тураһындағы легендалар рәтендә ҡарағандан һуң, С. М. Абрамзон хаҡлы рәүештә уларҙың бер тамырҙан килгән күренеш булыуҙарын билдәләй, дәлил рәүешендә, фольклор материалдарынан тыш, ҡырғыҙ теле лексикаһындағы «ит-ҡуш» формаһын килтереп, уның «бүре» мәғәнәһен биреүе хаҡында яҙа (3, 287). Был фекер башҡорт материалдары менән дә ҡеүәтләнә. Үрҙә тикшерелгән легендалар яҡынлығынан тыш, тел берәмектәрендәге уртаҡлыҡты ла күрмәү мөмкин түгел. Башҡорт телендә «эт-ҡош» шулай уҡ бүре мәғәнәһендә йөрөй. «Мал эт-ҡошҡа осрамаһын» тигәндә, мәҫәлән, берәү ҙә эт менән ҡошто күҙ уңында тотмай — һүҙҙең бүре хаҡында барғанлығы һәр кемгә билдәле.

Бик боронғо дәүерҙә эт менән бүре төшөнсәһенең яҡын, хатта бер мәғәнәлә йөрөүе икенсе тел системаһына ҡараған халыҡтарҙың материалы миҫалында ла асыҡ сағыла. Был йәһәттән рус халҡының изге Юрий-Егорий тураһындағы дини шиғырҙарын, Скандинавия һәм герман халыҡтарының Один (германдарҙа Водан, Вотан) Хоҙайға бәйле мифтарын хәтергә төшөрөү ҙә етер ине. Миф һәм легендаларҙан тыш,

бүре-эт образы тел берәмектәрендә, археологик ҡомартҡыларҙа һаҡланып ҡалған. Ошо материалдарҙы ентекләп байҡап сыҡҡандан һуң, В. В. Иванов түбәндәгеләрҙе яҙа: «Бүре менән этте телдә айырып атау барлыҡҡа килгәс тә әле, мифологияла һәм һүрәттәрҙә ул йәнлектәрҙең икеһенә лә уртаҡ бер символ һаҡланған» (119, 400). Һуңғы, иң яңы тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә урынлашҡан ҡараш буйынса, Һинд-Европа телдәрендә бүре һәм эт һүҙҙәренең ике төшөнсә бирә башлаған осоро сама менән яңы эраға тиклем 7000 йыл элек булған (119, 399). Ошо күрһәтмәне иҫкә алғанда, бүре-эт төшөнсәһенең ни тиклем архаик күренеш булыуын төҫмөрләмәү мөмкин түгел. Шул уҡ мәғлүмәт яҡтылығынан сығып ҡарағанда, Евразия халыҡтары мифологияһында, айырым алғанда башҡорт легендаларында, сағылған бүре/эт имеҙеп үҫтергән баланан ырыу таралыу мотивының боронғолоғо ла, уртаҡлығы ла шик тыуҙырмай.

Башҡорт халыҡ легенда һәм риүәйәттәрендә эт образы сағыла биреп ҡалған тағы бер нисә сюжет бар. Шуларҙың береһе, Курган өлкәһенең Әлмән районы Бүргошкән (Әмин) ауылында Ғайсина Бәширә Фәрхетдин ҡыҙынан (1897 йылғы) яҙып алынғаны был образды этногенетик мотив аша һүрәтләй. Жанры яғынан әкиәт-легендаға ҡараған был сюжетта эт менән кешенең яҡын мөнәсәбәтенән ырыу таралыу мотивы әкиәт поэтикаһы закондары сигендә барһа ла, әҫәрҙең аҙағы реаль йүнәлештә, легенда һәм риүәйәттәр поэтикаһы стилендә хәл ителә: «Бына шунда самаид [самоед] тигән халыҡ бар. Шулар Нухтың эт ҡыҙынан яралған икән. Улар эт ашай» (203, оп. 65, д. 5, л. 15—16). Башҡорт ауылында өлкән йәштәге башҡорт әбейенең хәтерендә әллә ҡайҙағы «самаид» халҡының килеп сығышына бәйле легендар мәғлүмәттең һаҡланыуы тәү ҡарағанда сәйер ерәк тә төҫлө, сөнки самөдий (самөед) телендә һөйләшеүсе ненец, энц, нганасан һәм селькуп халыҡтарының күпселеге хәҙерге ваҡытта алыҫ Төньяҡта йәшәй. Улар менән башҡорттар араһында контакттар булғанмы, әгәр булһа, был бәйләнештәрҙең хронологик сиктәре киңме, тармы тигән һорау тыуа. Ошо һорау менән тарихи-этнографик сығанаҡтарға мөрәжәғәт итеү түбәндәгеләрҙе күрһәтә.

Күпселек ғалимдарҙың фекеренсә, самодий халыҡтарының боронғо ата-бабалары Көньяҡ Себерҙә йәшәгән. Ошо төбәктән улар яңы эраның 1-се мең йыллығында — 2-се мең йыллыҡтың башында бер нисә этник тулҡын булып, төньяҡҡа таралғандар. Самоед халыҡтарының ҡайһы бер тармаҡтары иһә (камасиндар, ҡарағас һ. б.) әле XVII — XVIII быуаттарҙа ла Көньяҡ Себерҙә, Саян тауҙары алдында йәшәп, төрки халыҡтары менән ныҡ аралашыу һөҙөмтәһендә бөтөнләй үҙ телдәрен юғалтып, тува, хакас һ. б. халыҡтар составына инеп киткәндәр (79, 535). Ошоларҙы иҫкә алғанда, Себерҙә йәшәүсе Курган әлкәһе башҡорттарының ауыҙ-тел ижадында самодий мотивының булыуы бер ҙә осраҡлы хәл түгел. Ләкин тарихи-этнографик материал бының менән генә сикләнмәй. Ҡайһы бер ғалимдарҙың (В. Ф. Генинг, В. И. Васильев) фекеренсә, самодийҙарҙың ҡайһы бер этник төркөмдәре элек Урал буйы ерҙәрендә йәшәгән. В. И. Васильев был осорҙо VI — IX быуаттың беренсе яртыһына ҡайтарып ҡалдыра (78, 60—61).

Легендаларҙа эт образына бәйле боронғо ҡараштар хаҡында һөйләгәндә, тағы бер архаик мотивҡа иғтибар итмәү мөмкин түгел. Ул — эттең ҡасандыр ҡорбан хайуаны булыуы. Шуныһы, легендаларҙағы мәғлүмәттәр буйынса, эт — ҡорбан булырға тейеш кешене алмаштырыусы йән эйәһе. Күрәһең, бик боронғо замандарҙа эт —кеше затынан тигән ышаныуға нигеҙләнеп тыуған ҡараш был. Әгәр ҙә кеше урынына ҡорбан ителгән эт мотивы бер башҡорт легендаларында ғына сағылған булһа, бәлки уның тамырҙарын артыҡ тәрәндән эҙләү ышандырып та бөтмәгән булыр ине, сөнки башҡорт легендаһында боронғо ҡараштарҙың бик ныҡ үҙгәргән хәлдә килеп еткәнлеге күҙгә ташлана. Асыҡлыҡ өсөн «Бүреле йылғаһы» исемле легенданан бер өҙөк килтерәйек:

«Башҡорттарҙа бер ырыу башлығы үлер алдынан ҡапҡа төбөнә бағауыл ҡуя. Әмер бирә: ҡапҡа янына килгән йән эйәһен тотоп үлтерергә лә, шул ерҙә күмергә.

Бағауыл ҡапҡа янына сығып әҙерәк торғас, ырыу башлығының ейәне килеп сыға. Бала ҡапҡа янында уранғылай ҙа, китеп бара. Бағауыл уны йәлләй, теймәй ҡала. Бала киткәс, бер эт килә. Әлеге бағауыл этте үлтереп, ҡапҡа төбөнә

күмә. Был хәлде үҙе ырыу башлығына еткерә. Шунан ырыу башлығы аҡтыҡ көсөн туплап әйтә: «Әгәр баланы үлтереп күмһәң, был урында мин үлгәндән һуң да бер нәмә ҡалған булыр ине. Хәҙер ҡапҡа төбөндә эт ята. Шулай булғас, мин үлһәм, был урындан күсергә тура килер» (55, 65).

Күренеүенсә, эткә изге хайуан итеп ҡарау мотивы легенданың фактты (ваҡиғаны) баһалау өлөшөндә бөтөнләй һиҙелмәй.

Кеше урынына этте ҡорбан итеү күренеше татар һәм башҡорттар араһында таралған Ҡазан ҡалаһын һалыу тураһындағы легендаларҙа ла сағыла. «Яңы һалынасаҡ ҡала үҙ урынында ныҡ торһон өсөн» төҙөү эштәре башланғас, хан тарафынан ергә кеше ҡорбаны килтерергә әмер бирелә. Артабан ваҡиғалар «Бүреле йылғаһы» легендаһындағыса тиерлек: йәрәбә буйынса ҡорбан булыу яҙмышы хандың үҙ улына тейә, хан малайы урынына нигеҙгә тере көйө эт күмелә.

Эткә мөнәсәбәт шулай уҡ һуңғы дәүерҙәргә хас булған ҡараштар яҡтылығында: легенданың бер вариантында мосолман дине йоғонтоһо күренеп торһа, икенсе вариантында XVI быуатҡа ҡараған тарихи-соҡиаль күренештәр йоғонтоһо һиҙелә (81, 171—173). Телгә алынған легендаларҙа ниндәй генә үҙгәртелгән ҡараштар сағылмаһын, был сюжеттарҙың нигеҙендә эт кеше затынан тигән бик боронғо ышаныу ятҡанлығын төҫмөрләмәү мөмкин түгел. Башҡа халыҡтарҙың ышаныуҙары шулай уҡ әйткәндәргә дәлил була ала. Был йәһәттән айырыуса ҡырғыҙ материалдары бик сағыу. Боронғо ышаныу буйынса, әгәр ете кеше ҡорбан ителергә тейеш булған булып, шуның береһе урынында булмаһа, уға алмашҡа этте ҡорбан итергә мөмкин булған (64, 19).

Күп халыҡтарҙың йола һәм ышаныуҙары буйынса, эт киләсәк бәлә-ҡазаны алдан тоя белеүсе йән эйәһе итеп иҫәпләнә. Был ышаныу башҡорт халыҡ ижады әҫәрҙәрендә лә сағылып, үҙенең тарихи ерлеге менән кеше урынына эт ҡорбан итеү мотивына барып тоташа.

Эт олоуы йорт хужаһының үлеменә тигән ышаныу, мәҫәлән, әле лә башҡорттарҙың өлкән быуын кешеләре араһында осрай. Эт олоған осраҡта (бигерәк тә ул өс көн буйы олой икән) бәләнән ҡотолоу ниәтендә кисекмәҫтән сара күрелә: олоған эттең үҙе үлтерелеп, өй ихатаһына күмелә.

«Эт олоһа үҙ башына була» тигән мәҡәлдең тәү мәғәнәһе нәҡ бына ошо йолаға бәйле. Ҡыҫҡаһы, был осраҡта ла «үләһе» кеше урынына эт ҡорбан ителә. Тимәк, йоланың нигеҙендә кеше менән эттең яҡынлығы, уларҙың береһен-береһе алмаштыра алырлыҡ йән эйәләре итеп иҫәпләнеүе ята.

Эттә кеше сифаттарын күреү төрлө ышаныу, ырым-юрауҙар миҫалында ла сағылып ҡала: «Эткә тибергә ярамай — ҡарғай», «Күсенеп киткәндә лә, эт менән бесәйҙе ҡалдырырға ярамай — бәхетһеҙлек була, ҡарғайҙар». Был ҡараштар, әлбиттә, бик боронғо, уларҙың тәүге бәрәләр е төрки һәм монгол халыҡтарының мифологик донъяһында яралған. Эт ҡиәфәтле «кеше», йә булмаһа ярым-кеше, ярым-эт һүрәтендәге йән эйәләре, ир-эт һәм сибәр ҡатындарҙан таралған тоҡом һәм улар йәшәгән мөғжизәле «эттәр иле» хаҡындағы монгол, бүрәт, алтай, ҡырғыҙ, ҡаҙаҡ легендалары (242, 23; 69, 53-52; 266, 113; 207, 245; 3, 360-361; 304, 58) шул хаҡта һөйләй.

Ҡайһы бер йола һәм хөрәфәти хикәйәләрҙән күренеүенсә, кеше үлгәс, уның йәне эткә әйләнә икән тигән ышаныуҙар йәшәгән. Сыуаштар, мәҫәлән, ошо ышаныуҙан сығып, үлекте иҫкә алыу табынындағы мәрхүмгә тип ҡуйылған ашты эткә ашатыр булғандар (300, 19). Шундай уҡ ышаныуҙарға таянып, боронғо фарсылар (иранлылар) мәйетте ергә күммәйенсә, эттәр өйөрөнә аҙыҡҡа биргәндәр (266,6). Оҡшаш миҫалдарҙы тағы ла килтерергә мөмкин булыр ине, әммә бының кәрәге юҡ, этте изгеләштер еү мотивы телгә алынған ышаныуҙарҙың һәр ҡайныһында ярайһы уҡ асыҡ күренә.

Башҡорт халыҡ хикәйәләре араһында этташтар тураһында бер нисә сюжет булып, шуларҙың В. И. Даль һәм М. В. Лоссиевский хеҙмәттәрендә телгә алынған береһе (103, 99; 172) боронғо ҡараш ҡалдыҡтарын сағылдырыуы менән иғтибарға лайыҡ. Төрлө заман ҡараштарын туплаған бәләкәй генә был хөрәфәти хикәйәнән күренеүенсә, эт һынына оҡшаш был таш (хәҙерге Бөрйән районының Шүлгән мәмерйәһендә) ҡасандыр ямғыр теләү йолаһын башҡарыу объекты булып хеҙмәт иткән булырға тейеш, һөйләүселәр ҙә, яҙып алыусылар ҙа ул хаҡта иҫкәртмәй, әммә хикәйәнең

тексынан йолаға бәйлелек ярайһы уҡ яҡшы аңлашыла: «Шуныһы ҡыҙыҡлы, был Этташ ҡамсынан ҡурҡа, әммә болоттар уға буйһона. Йөҙ мәртәбә ҡамсы менән һуҡһаң, Этташ әкрен генә тауыш сығарып олой башлай, һәм, тирә-яҡты мул итеп һибәләп, ямғыр яуырға тотона» (103, 99).

Был Этташты эт сүрәтендә ҡатып ҡалған дейеү тип аңлатыу ҙа бар. Уныһы— йә факттарҙы бутау һөҙөмтәһендә, йә һуңғыраҡ ҡараштар нигеҙендә тыуған күренеш булыуы ихтимал, сөнки халыҡ ижадында дейеү ғәҙәттә кешеләргә яуызлыҡ ҡылыусы кире персонаж булараҡ һүрәтләнә. Килтерелгән **өҙөктә** иһә Этташ изгелек килтереүсе (ямғыр яуҙырыусы) ыңғай образ сифатында телгә алына. Этте изгеләштереү мотивы башҡорттарҙың боронғо ышаныуҙары нигеҙендә тыуған ҡайһы бер йолалар миҫалында ла күренә. Халыҡ медицинаһында, мәҫәлән, сөйәлде бөтөрөү өсөн, май, ҡатыҡ һөртөп, сөйәл сыҡҡан урынды эттән ялаталар. Кешенең тамағына һөйәк тығылһа ла эттән еҫкәтәләр: эт тыны тартыуҙан һөйәк сыға, имеш, тиҙәр. «Ен-пәрей ҡағылған ауырыу балаларҙы эт йөнөн яндырып ыҫлаһаң, улар һауығып китә; ойоҡбаш, бейәләй бәйләп кейҙереү ҙә файҙалы: эт йөнөнә ен эйәләшмәй», — тип һөйләне беҙгә 1986 йыл Әбйәлил районының Ҡужан ауылынан Таңсулпан һиҙиәтова. Шул уҡ информанттың йәнә бер мәғлүмәте иғтибарға лайыҡ: «Кешене ҡоторған эт тешләһә, йә ҡоторған һыйыр һөҙһә, эт тешләмәйенсә былай ғына ҡоторop китһә лә, эт һөтөнән ҡамыр баҫып, ваҡ-ваҡ итеп киҫеп, табала ҡатырып алалар. Шунан өйҙән өйгә йөрөп (40 өйгә) шул аҙыҡты 40 ҡаҙандың ҡолағына һалып, теге ҡоторған кешегә ашаталар. Сирле һауыға, ти торғайнылар» (329а, 19).

Төрки халыҡтарының мифологик легендаларында нәҫел ебе таратыусы йә булмаһа юл башлап, кешеләргә изге төйәк табып биреүсе йән эйәһе булараҡ кәүҙәләнгән бүре, эт, үгеҙ образдарынан тыш, ***изгелекле болан*** образы киң билдәле. Юл башлап, төйәк күрһәтеп биреүсе кейек булараҡ, болан боронғо авторҙарҙың хеҙмәттәрендә (Приске, Иордан һ. б.) төрки телле һун ҡәбиләләренең легендаларында уҡ урын ала. Иордандың «О происхождении и деянии гетов» тигән хеҙмәтендә килтерелгән изгелекле болан хаҡындағы легенда (73, 56), мәҫәлән, үҙенең сюжет төҙөлөшө менән

аҙашҡандарға юл күрһәтеп, төйәкләнер ер табып биреүсе изгелекле бүре хаҡындағы сюжеттар менән бер типта. Бүре культының бик ныҡ тамырланған булыуынанмылыр, хәҙерге башҡорт легендалары араһында изгеләштер елгән болан образына бәйле сюжеттар үҙҙәренең характерлы структураһын һаҡлаған килеш (көтмәгәндә сәйер боландың килеп сығыуы һәм, ярайһы урын табылғас, юҡ булыуы) осрамай. Әммә изге болан хаҡындағы боронғо төрки һәм монгол халыҡтарының ауыҙ-тел ижадындағы традицион мотивтар башҡорт фольклорында бөтөнләй сағылмайынса ҡалмаған. «Гәйнә ырыуы», «Толбуйҙар», «Әйнә менән Гәйнә» исемле легендаларҙа Гәйнә ырыуын башлап ебәреүсе Гәйнә (икенсе осраҡта ағалы-энеле Гәйнә менән Әйнә) хәҙерге Пермь әлкәһенә ҡараған Тол йылғаһы буйына боланға ултырып килеп сыға, шул ерҙәрҙә төйәкләнеп, ырыу тарата.

Тәптәнерәк уйлап ҡараһаң, легендаларҙың нигеҙендә икенсе сюжет коллизияһы шарттарында хәл ителгән шул уҡ боронғо мотив ятҡанлығы күренә: буласаҡ ырыу башлаусыны яңы ерҙәге барлыҡ тереклектең сығанағы — ҡояшты табыусы, уны аждаһа (убырлы ҡарсыҡ) ҡулынан ҡотҡарыуҙа ҡатнашҡан изге йән эйәһе булараҡ күҙ алдына баҫтырыла:

«Элек ҡояш Тол аръяғында булған. Уны бер убырлы ҡарсыҡ (икенсе вариантта — аждаһа. — Ф. ***Н.)*** урлаған булған. Урлап... бер мәмерйәгә йәшергән дә донъяға сығармай тик тота икән.

Шул саҡ боланға ултырып, Әйнә менән Гәйнә килеп сыҡҡан... Килә торғас, быларҙың боланы тыпырсына башлаған. Төшөп, абайлабыраҡ ҡараһалар, аяҡ аҫты шундай ҡыҙған, баҫып тормалы түгел, ти. Болан тибенә башлай. Ул тибенгән ерҙән генә ер ярыла, ут сығып китә. Был мәмерйә тишеге икән. Теге ҡарсыҡ оло таш менән ҡаплап ҡуйған икән ул мәмерйәне. Әйнә менән Гәйнә ҡояптты ҙур болан тиреһенән эшләнгән ҡуржынға һалалар ҙа Тол буйына алып китәләр. Был саҡ убыр өйҙә булмай ҡала. Йылға буйына килеп етеүгә, арттарынан убыр ҡарсыҡ ажғырып килә. Былар тиҙ генә ҡуржынды болан мөгөҙөнә эләләр ҙә йөҙөп Толдың был яғына сығалар <...> Толдың был яғына сыҡҡас, былар иркенләп алып, ҡуржынды сисеп ебәрәләр. Ҡояш донъяға сығып китә» (55, 71).

Боландың ғәҙәти хайуан булмауы легендаларҙағы художество саралары аша ла һыҙыҡ өҫтенә алынған: Әйнә менән Гәйнә ултырып килгән боландар аҡ төҫтә. Билдәле булыуынса, төрки, монгол халыҡтарының мифологияһында аҡ, күк, зәңгәр төҫ —изгелек символын йөрөтөүсе төҫтәр. «Ер йөҙөнөң ул саҡта әле бик һалҡын» булыуы, легенда геройҙары килгән ерҙә «бер заттың да булмауы» хаҡындағы мәғлүмәттәр, кешеләрҙән йәшереп ҡояшты үҙ ҡулында тотоусы демонологик персонаждарҙың көсөн һәм яуызлығын һүрәтләү—быларҙың бөтәһе лә Гәйнә ырыуы тураһындағы сюжеттарҙың бик боронғо мотивтар менән һуғарылғанлығы хаҡында һөйләй. «Толбуйҙар» легендаһында геройҙарҙың «егелгән боландарға» ултыртылыуы иһә, хәҙерге көн кешеһенең ҡараштарына, уның фантазияһына бәйләнгән күренеш булһа кәрәк.

Ғөмүмән, Гәйнә ырыуы хаҡындағы башҡорт легендалары ғәйәт ҡатмарлы, күп ҡатламлы сюжеттар иҫәбенә инә. Уларҙа бик боронғо этногенетик мотивтар менән бер рәттән шулай уҡ боронғо космогоник мотивтар органик рәүештә бергә үрелеп килә (һуңғылары хаҡында алда һүҙ буласаҡ әле). Инде болан образына ҡағылған мотивтарҙың яңғырашына килһәк, уларҙың диапазоны шул тиклем киң, был мотивтарҙы ниндәйҙер этник рамкалар менән сикләү, асылда, мөмкин дә түгел. Төрки-монгол мифологик легендаларында сағылған юл башлап килеүсе изгелекле болан образы ла, гиляк мифтарындағы болан мөгөҙлө ҡатын һәм уның ҡыҙы хаҡындағы сюжеттарҙа урын алған ҡараштарҙың (ярым-ҡатын, ярым-боландың мөгөҙөнә эленгән ҡояш һәм айҙар хаҡындағы мәғлүмәттәрҙең — 17, 28 — 29) алыҫтағы шаңдауы ла бар Гәйнә ырыуы хаҡындағы башҡорт легендаларында. Яҙыусы Йыһат Солтановтың мәҡәләһенән (267, 112) күренеүенсә, Гәйнә ырыуы хаҡындағы башҡорт легендалары менән маринд-анимдарҙың мифтары араһында яҡынлыҡ ифрат ҙур. Бынан тыш славян, фин-уғыр, самодий ҡәбиләләре мифологияһындағы күк боландары (күк мышылары) һәм ҡояш тураһында ла сюжеттар менән дә ауаздашлыҡ һиҙелә.

Билдәле булыуынса, күк боландары (йә күк мышылары) хаҡындағы ҡараштар һунарсылыҡ менән көн күргән күпселек халыҡтар өсөн хас (Был турала тулыраҡ мәғлүмәттәрҙе

ҡарағыҙ: 215, 52—60; 17; 249, 54—95). Төрлө этник һәм географик киңлектәрҙәге халыҡтарҙың ауыҙ-тел ижадын, археологик һәм этнографик материалдарын ентекләп өйрәнеү һөҙөмтәһендә борон күктең, ҡояш һәм йондоҙҙарҙың тәүтормош кешеләр ҡарашында мышы рәүешендә күҙаллан-ғанлығы мәғлүм булды. Был хаҡта А. П. Окладников, мәҫәлән, түбәндәгеләрҙе яҙа: «Тәүтормош философтары үҙҙәрен ураткан донъяның серенә төшөнөргә, уны аңларға тырышҡандар, ... өҫкө донъяны, күк стихияһын: күктең үҙен, ҡояш һәм йондоҙҙарҙы мышы сүрәтендә күҙ алдына килтерер булғандар.

Тайга һунарсылары ҡояшты бер көн эсендә күк йөҙөн йүгереп үтеп, төнөн йәһәннәмгә, икһеҙ-сикһеҙ ер аҫты диңгеҙенә сумыусы тере зат —ғәйәт ҙур мышы төҫөндә поэтик образлы итеп күҙ алдына килтергәндәр. Шундай ҡояш йәнлек—гигант мышы хаҡында, мәҫәлән, бер долган әкиәтендә һөйләнелә. Ул әкиәт, нигеҙҙә, һис шикһеҙ таш быуат заманында уҡ яралған һәм тундра кешеләрендә беҙҙең көндәргәсә килеп еткән» (215, 52—60).

Академик Б. А. Рыбаковтың әйтеүенсә, мифтарҙа мышы менән болан бер-береһен алмаштырып килә (249, 61).

Ошо ҡараштар яҡтылығынан башҡорт легендаларына мөрәжәғәт итһәк, түбәндәге күренешкә тап булабыҙ. «Гәйнә ырыуы» исемле легендала Гәйнә батыр аждаһаны тураҡлап, ҡояшты ер аҫтынан сығарғас, уны болан мөгөҙөнә элеп, Тол йылғаһы аша алып сыға. Артабан болан тураһында бер һүҙ ҙә әйтелмәй. Хәҙер легенданың дауамына иғтибар итәйек: «...Ҡояш киткән күтәрелеп. Гәйнәгә әйткән: «Көн дә мине ошо ваҡытта көт», — тигән. Гәйнә ҡояшты көткән. Ҡояш һәр көн бер ваҡытта килә икән был ергә. Шулай һәр көн ҡояшты көтөп торғас, Гәйнә ошо ергә эйәләшеп киткән. Уны ташламаҫ булған. Шунан Гәйнә ырыуы таралған. Гәйнәләр башҡорттоң иң төбө була» (55, 70).

Бында ике мәсьәлә алға баҫа. Беренсеһе —мифологияла ҡояштың болан-ҡатын образында һүрәтләнеүе. Башҡорт легендаһында, алда күргәнебеҙсә, боландың ерҙә ҡалыуы хаҡында ла, ҡояш менән бергә күккә күтәр елеүе тураһында ла асыҡ ҡына әйтелмәне, әммә дөйөм фольклор традицияларына күҙ һалһаҡ, ҡояш менән боланды бер-бер еһенән

айырмайынса, бер бөтөн образ итеп ҡарарға нигеҙ булғанлығы логик яҡтан аҡлана. Ошо логикаға ышанғанда, башҡорт легендаһында шаҡтай алыҫлашҡан формала булһа ла архаик мотив — болан-ҡояш-әсә мотивының сағылғанлығын танырға тейеш булабыҙ. Болан-әсә образының башҡа төрки телле халыҡтарҙың (ҡырғыҙ, алтай һ. б.) ижадында урын алғанлығын да (64, 139; 227, 139) иҫкә алһаҡ, фараздың ерлеге тағы ла нығый төшә.

Ниһайәт, Гәйнә ырыуының барлыҡҡа килеү серен икенсе йүнәлештә — ҡыҙ баланың ҡояш йәки ай нурҙарынан ғоманлы булыуы мотивы аша аңлатырға мөмкин. Был —шулай уҡ төрки һәм монгол халыҡтары легендаларында киң билдәле булған мотив. Тик был юлдан киткәндә, легенда геройы Гәйнә ҡыҙ-батыр булырға тейеш була. Факттарҙы бутау, анахронизмдар — легендаларҙа була торған хәл. Ошонан сығып, аңлатыуҙағы икенсе версияны ла аҡларға булыр ине, әлбиттә. Тик Гәйнә ырыуы хаҡында ос сюжеттың икеһендә Гәйнәнең ир заты итеп телгә алыныуы осраҡлымы икән һуң? («Әйнә менән Гәйнә» легендаһында геройҙарының заты ғөмүмән телгә алынмай.) «Толбуйҙар» легендаһында Гәйнә менән Әйнәнең ир затынан булыуы хәбәр ителеп кенә ҡалмай, Гәйнәнең ҡыҙға әүерелгән «ер хужаһы» йөнтәҫ әбейгә өйләнеүе хаҡында, шуның һөҙөмтәһендә нәҫел таралыуы тураһында мәғлүмәт тә бирелә. Тимәк, бында этногенетик мотивты аңлатыу күренеше урын ала. Ләкин «Толбуйҙар» легендаһындағы этногенетик мотивты ҡалған ике сюжетҡа механик рәүештә күсереп булмай: «Гәйнә ырыуы», «Әйнә менән Гәйнә» легендаларына был мотив йәбешмәй. «Толбуйҙар» легендаһы сюжет структураһы яғынан да, демонологик персонаждың характеры менән дә шүрәле йәки ярымтыҡҡа өйләнгән герой хаҡындағы әҫәрҙәргә яҡын тора.

Ошоларҙың бөтәһен дә иҫкә алғанда, «Әйнә менән Гәйнә», «Гәйнә ырыуы» исемле башҡорт легендаларында күктәге (ҡояштағы) болан-әсә мотивының үҙенсәлекле сағылышын күрмәү мөмкин түгел. Ҡыҫҡаһы, Гәйнә ырыуы хаҡындағы легендаларҙың мифологик нигеҙе, уларҙа һүрәтләнгән болан образының культ дәрәжәһенә күтәрелгән изге образ булыуы шик тыуҙырмай.

Болан (мышы) образының башҡорттарҙың этнонимияһы системаһында сағылыуы (158, 64), биҙәү сәнғәтендә һынланыуы (5, 240), күрәһең, шулай уҡ осраҡлы хәл түгел. Был да әле әйтелгән һығымтаны нығыта. Фекерҙе ҡеүәтләү йәһәтенән йола, ырым-ышаныуҙар материалы ғәйәт ҙур әһәмиәткә эйә. Болан мөгөҙөнөң «ҡөҙрәте» хаҡындағы ышаныуҙар, мәҫәлән, шундайҙарҙан. Билдәле булыуынса, ауыл өйҙәрендә элек-электән ишек башына болан мөгөҙө элеп ҡуйыу ғәҙәте бар. Уның мәғәнәһе хаҡында Башҡортостандың Мәсетле районы Йонос ауылында йәшәүсе шағир Рәшит Әхтәри беҙгә былай тип яҙып ебәргәйне: «Ишек башында һаҡланған саҡта, мөгөҙҙөң тылсым көсө төрлө яҡҡа тарбай тарала. Мөгөҙҙө тирмәнең түбә тишегенә, йәиһә өйҡыуыш түбәһенең (түшәмдең, сарҙаҡтың) уп-уртаһында тотһаң, ул ике иң ҙур көскә эйә була: йортҡа, ырыуға, илгә Тәңре тыныслығы килтерә, көтөлмәгән яу бәләләренән, афәтмырҙан, йәшен-уттан, һыу-боҙҙан, ел-дауылдан һаҡлай; иңенселәй, һунар ырыҫы теләп тора.

Ишек башында мөгөҙ торһа, яуыз уйлы дошман өйгә керһә, уның беләгенән көсө алына, аяғы тәнтерәкләй, ҡылысы һына, хәнйәре үтмәҫләнә, ҡулы ҡалтырай; алаҡан уйлы йәндәр: бисура, шайтан, ен-пәрей үтә алмай кире борола, уҫал сихырсының көсө тышта тороп ҡала.

Болан мөгөҙө аяҡҡа болан көсө, болан етеҙлеге бирә. Юлға сыҡһаң, һунарға йүнәлһәң, ишек башындағы мөгөҙгә ике ҡул менән ҡағылып, ике аяҡ, ботто шул ҡулдар менән һыйпап сығырға кәрәк. Һунарға уҡ башаҡтарын болан, бигерәк тә мышы мөгөҙөнән ышҡытып сығыу арыу.

Ҡайнатып таҙартылған аҡ сепрәк менән болан мөгөҙөн һөртөп, шул сепрәкте сайған һыуҙы эсһәң, улы юҡтың улы тыуа» (ҡулъяҙма үҙемдең шәхси архивымда һаҡлана. — Ф. #.).

Гәйнә ырыуы хаҡындағы сюжеттарҙың бөтә ҡатламдарын да иҫкә алмайынса, ундағы үҙәк мотивтың хәл ителеүен иғтибарҙан ситтә ҡалдырып, тик текстарҙағы айырым деталдәр (геройҙарҙың боланға ултырып килеүҙәре, болан тиреһенән эшләнгән ҡуржын, убырлы ҡарсыҡтың исеме) буйынса, болан мотивын башҡорттарға ситтән — фин-уғыр, самодий халыҡтарынан — ингән мотив итеп ҡарау (45, 163—

164; 80, 29—30) мөмкин булған хәлдә лә, был фекерҙе өҫтәмә материалдар, анығланған аргументтар менән дәлилләү кәрәк ине. Ләкин, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ҡайһы ваҡыт тикшереүселәр алдан алынған идея менән артыҡ мауығып, легенда текстарына булмаған өҫтәмә деталдәр индереп, йә булмаһа бер сюжеттағы мотивты икенсеһенә өҫтәп, бер логик фекер формалаштырыу юлы менән дәлил төҙөйҙәр. Аҙаҡ был эшкә башҡорт легендаларын оригиналда уҡыу мөмкинселеге булмаған икенселәре таяна —шул рәүешле тора-бара гипотеза тыуа. Гәйнә ырыуы хаҡындағы легендалар менән тап шундай хәл булды. Гәйнә ырыуы килеп сығышына бәйле легендаларҙың береһендә лә, мәҫәлән, Гәйнә менән Әйнәнең «ҡарлы илдәрҙән» килеүе тураһында һүҙ юҡ. «Әйнә менән Гәйнә» тексында угор компонентына ишара яһаусы «Тулуа» исеме лә телгә алынмай һәм ырыу таратыуҙа убырлы ҡарсыҡтың (исемлеме ул, исемһеҙме) бер ниндәй ҙә роле юҡ. Әммә икенсе сюжет тибына, үҙенсәлекле икенсе мотивҡа ҡоролған «Толбуйҙар»^ легендаһындағы[3] персонажды яңы ерлеккә күсереү һөҙөмтәһендә шаҡтай ышандырырлыҡ схема төҙөлөп (134, 60), аҙаҡ шул схемаға таянып, этногенетик пландағы һығымталар яһалды (78, 61). Әйтелгәндәрҙән был юлдарҙың авторы башҡорт этносында самодий компоненты булыуын шик аҫтына ала икән тип уйларға ярамай, әлбиттә, һүҙ Гәйнә ырыуы хаҡындағы легендаларға бәйләнешле мәсьәлә тураһында ғына бара. Беҙгә ҡалһа, күп ҡатлаулы архаик сюжеттарҙы бер самодийҙар ерлегенә генә ҡайтарып ҡалдырыу — ғәжәп бай йөкмәткеле материалды күпмелер ярлыландырыу, мәсьәләне тарайтыу ғына ул.

Тарихи-этнографик әҙәбиәттән күренеүенсә, нигеҙҙә малсылыҡ менән көн күргән башҡорт халҡының тормошонда

[3]«Толбуйҙар» легендаһы иһә алда телгә алынған «Бүреләр тоҡомо» исемле легенда менән ауаздаш. Ер хужаһы — ҡот осҡос йәмһеҙ йән эйәһе йөнтәҫ әбей Тулуа, Гәйнәнең ҡамсыһы тейгәс, сибәр ҡыҙға әүерелеп, уның ҡатыны булып китә, йәғни нәҫел ебен таратыуҙа, ырыу башлап ебәреүҙә был мифик образдың туранан-тура ҡатнашлығы бар. Легендала уның ар затынан булыуы ла телгә алына. Ғилми әҙәбиәттән күренеүенсә, ар —әүәл фин-уғыр сығышлы халыҡтарға ҡарата әйтелгән һүҙ (45, 164). Тимәк, Гәйнә менән Тулуанан ырыу таралыу мотивы аша легендала боронғо башҡорттарҙың фин-уғыр тамырлы халыҡтар менән этник бәйләнештәре хаҡында үҙенсәлекле мәғлүмәт бирелгән.

һунарсылыҡ һәнәре лә һуңғы урында тормаған. И. И. Лепехин яҙмалары буйынса, әле XVIII быуаттың аҙағы — XIX быуаттың башында башҡорттарҙың болан, мышы кеүек йәнлектәргә күмәк һунарға йөрөгәнлектәре билдәле (168, 4 — 5). XIX быуаттың беренсе яртыһында ҡатай башҡорттарының күмәкләшеп болан аулауҙары хаҡында мәғлүмәттәр бар (158, 81). Ошо күрһәтмәләрҙе иҫкә алғанда, болан тиреһенән тегелгән ҡуржындың башҡорт легендаһына ситтән ингән мотив булмауы ла ихтимал тигән фекер тыуа. Башҡорттарҙың болан тиреһенән эшләнгән әйберҙәрҙе ҡулланыуы, әйткәндәй, эпик ҡомартҡыларҙа ла урын ала. Бына, мәҫәлән, «Аҡбуҙат» эпосынан бер өҙөк:

Алтын-көмөш эйәрле,
Болғар тартҡы, айыллы,
Туҡымдары ынйылы,
Тибенгеһе сәмсәле,
Болан тире таралғы
Өҙәңгеһе көмөштән... (49, 174).

Болан образының башҡорт халыҡ йырҙары символикаһында, фразеологияла ныҡлы урын алыуы, ер-һыу исемдәре эсендә осрауы —шуның кеүек факттарҙың бөтәһе лә был образдың сығанағын беренсе нәүбәттә башҡорттоң үҙ ерлегендә, дөрөҫөрәге, төрки мифологик ҡараштар системаһы эсендә эҙләргә кәрәклеге тураһында һөйләй.

Дөйөм алғанда иһә изгеләштергән болан образы-—бик күп халыҡтарҙың ижадына хас күренеш. Быны айырыуса «йәнлек стиле»ндә биҙәлгән ҡаҙылма ҡомартҡылар асыҡ дәлилләй. Шулар араһында 1980 й. археолог Р. Б. Исмәғилев тарафынан табылған таш һәйкәл, һаҙаҡ һәм бронза уҡ башаҡтарын биҙәгән алтын боландарҙың Ырымбур өлкәһенең Ҡыуандыҡ районына ҡараған Иҫке Ғүмәр ауылы убаларында табылыуы һәм иң мөһиме — уларҙың бик боронғо дәүергә (б. э. т. VIII—VII б. б.) ҡарағайлығы иғтибарҙы йәлеп итә. Уҙған быуаттың һуңғы йылдарынан башлап даны бөтә донъяға таралған Филипп убаларының (улар Урал йылғаһының һул яғында Ырымбур ҡалаһынан көнбайышҡа табан йөҙ саҡрым алыҫлыҡта урынлашҡан) алтын боландарын археологтар боронғо күсмә ҡәбиләләрҙең мираҫы тип на-

рыҡлай. Кем белә, был ҡиммәтле ҡомартҡыларҙы тыуҙырыуҙа, бәлки, беҙҙең боронғо ата-бабаларыбыҙҙың да әҙмекүпме ҡатнашлығы булғандыр. Б.э.т. IV быуатҡа ҡараған ошо ҡаҙылма әйберҙәрен асҡан күренекле ғалим А. Х. Пшеничнюк үҙенең «Ватандаш» журналында (2002, 8-се һан) сыҡҡан бер мәҡәләһендә борон Көньяҡ Уралда (ихтимал, бөтә Евразия далаларында) йәшәгән күскенселәр («ранние кочевники») боланға табынған, уны хатта тотем хайуаны (ырыу башлаусы) тип иҫәпләүҙәр е лә мөмкин тигән фекер әйтә.

Күпселек халыҡтарҙың, шул иҫәптән башҡорттарҙың, мифологик легендалары, әкиәттәре һәм йолалары буйынса, һунар кейеге ***айыу*** ҙа изгеләштер елгән йәнлектәр иҫәбенә инә. Айыуҙы белгән һәр халыҡтың аңында был образдың тылсымлы мәғәнә йөрөтөүе Дж. Фрэзер һәм Л. Я. Штернберг тарафынан билдәләп үтелгән (302, 36—49; 327, 430). Был фекерҙең хаҡлығы артабан бик күп ғалимдарҙың тикшеренеүҙәре менән раҫланды. Төрлө континенттарҙа йәшәүсе халыҡтарҙың материалын Дөйөм байҡап сығыу һәм ғилми өйрәнеү нигеҙендә айыуға бәйле ҡараштарҙың бик боронғо һәм күп яҡлы булғанлығы асыҡланды. Йыйып ҡына әйткәндә, донъя мифологияһында сағылған был образдың һыны, «ҡиәфәте» һәм роле ошо рәүешле күҙаллана: айыу— илаһи йән (божество); кешеләргә файҙа килтереүсе изгелекле культур герой (мәҫәлән, Обь угорҙары, ненецтар айыуҙы үҙҙәренә ут алып килеүсе изге януар тип иҫәпләй); теге йәки был традицияны башлап ебәреүсе; нәҫел ебен таратыусы тотем; ер аҫты донъяһының хужаһы; изге ҡорбан хайуаны; айыу ҡиәфәтендәге кеше; шаман ярҙамсыһы һ. б. (120, 128.)

Башҡорт халыҡ ижады материалдарына ҡарағанда, боронғо башҡорттарҙың аңында айыу кеше менән ғаилә мөнәсәбәтенә инә алыусы йән эйәһе булараҡ кәүҙәләнгән. Ошо юлдарҙың авторына, мәҫәлән, 1984 йылда Баймаҡ районының Темәс ауылындағы уҡытыусы һәҙиә Азаматова һөйләүе буйынса, урманда айыу «тәрбиәләп» үҫтергән ҡыҙ хаҡындағы хикәйәне ишетергә тура килгәйне. Айыу ҡыҙ балаларҙы урлаһа, ашамайынса, ҡатын итеп тота тигән ҡараш урманлы райондарҙа элек киң таралған булған. Кеше

менән кейек яҡынлығынан айыу ҡиәфәтендәге бала тыуыуы, ҡатындың баланы алып үҙ торлағына ҡасыуы, туғандарының «айыу балаһы»н үлтер еүе кеүек мотивтарға ҡоролған хикәйәләр әле лә осрай (203, оп. 92, д. 1, л. 28). Бәпестең берәй ағзаһы айыуҙыҡына оҡшап тыуған сабый тураһында ла һөйләйҙәр. Был мотив бигерәк тә әкиәттәрҙә яҡшы сағылған. Ундай типтағы әкиәттәрҙе («Айыуғолаҡ», «Батимаҡай») тикшереүсе ғалимдар (Ә. И. Харисов, М. Х. Минһажитдинов) уларҙың тамырын хаҡлы рәүештә боронғо тотемистик ҡараштар ерлегенә алып барып тоташтырҙы (48, 9; 182, 59).

Айыуҙың тотем хайуаны булыуы башҡорт этногенетик легендалары миҫалында ла сағылып ҡала, бында генеалогик мотив айыу —кеше затынан тигән ҡараш яҡтылығынан сығып хәл ителгән. Асыҡлыҡ өсөн «Айыу араһы» тигән легенданы тулы көйө килтереү кәрәк: «Беҙҙә айыу араһы күптән килә. Ул шулай килеп сыҡҡан: бер һунарсы айыу балаһы алып ҡайтҡан. Ҡайтһа, был айыу балаһы әҙәмсә һөйләшә, ти. Ғәжәпһенә был, һораша. Баҡтиһәң, теге төптө айыу балаһы түгел, әҙәм тарпаны икән. Үҫкән һайын был әҙәм затына оҡшай, ти. Үҙе бик ғәйрәтле, көслө булып киткән, ти. Кәләш әйттергәндә, уға тиң таба алмағандар. Сыҙатмай үлтереп тик тора икән. Туҡ буйында бер ҡыҙ булған. Ике тирмән ташын ике ҡултығына ҡыҫтырып йөрөр булған. Айыу батыр менән былар көс һынашып ҡарағандар. Икеһененең дә көсө бер булып сыҡҡан. Былар ир менән ҡатын булып тороп киткәндәр. Айыу араһы шунан таралған. Ул беҙҙең Бөрйәндә генә түгел, Үҫәргәндә лә бар. Бик таралған тоҡом ул (55, 83). (Айыу аралары, ысынлап та, Үҫәргән, Ҡыпсаҡ, Ҡатай ырыуҙары эсендә лә бар (158, 48—54).

Кеше менән айыуҙың бер-бер еһенә оҡшаш һәм яҡын булыуы «Айыу тоҡомо» исемле этиологик легендала ла урын ала. Әҫәрҙең нигеҙенә шул уҡ айыу —кеше затынан тигән идея һалынған, тик был идея дини ҡараш күҙлеге аша яҡтыртылған: кешенең айыуға әүер ел еүе мәлендә өшкөрөү мотивы төп ролде уйнай. Бынығы инде, һис шикһеҙ, — аң үҫешенең һуңғыраҡ баҫҡысын сағылдырыусы күренеш. Легенданы яҙҙырған ҡарт һунарсы Зәһиҙулла Ғәтиәтуллиндың (1883 йылғы) «айыуҙың кеше затынан булғанлығын», уның «ғәжәп аҡыллы йән эйәһе» икәнлеген ышандырырға

тырышып, үҙенең һунарсылыҡ тәжрибәһенән бик ҡыҙыҡлы мәлдәр тураһында һөйләгәне лә (203, оп. 63, д. 56, л. 10) иғтибарға лайыҡ.

Башҡорт легендаларында донъя фольклорына хас булған йәнә бер мотив тоҫмаллана, ул —айыуҙың ер аҫты хужаһы булыуы («Батыр менән айыу таштары»). «Минең беләктәрҙә бөйөк ғәйрәт бар, шуға мин үҙем теләгән бөтә нәмәне лә эшләй алам», тип маҡтанған батыр егеткә көрәш менән ҡаршы сыҡҡан айыу тау эйәһенең (ер хужаһының) ҡөҙрәтле көсө рәүешендә һүрәтләнә легендала (55, 92). Әҫәрҙә айыуҙың ер хужаһы булыуы хаҡында туранан-тура әйтелмәгән, айыу маҡтансыҡ батырға яза биреү маҡсатында тау эйәһе тарафынан ебәрелгән персонаж һымағыраҡ ҡабул ителә. Был персонаждың фәҡәт айыу булыуы ла осраҡлы хәл түгел булһа кәрәк. Башҡа халыҡтарҙың фольклор традицияларында билдәле булған айыу —ер хужаһы мотивының алыҫлашҡан, үҙенсәлекле бер яңғырашы, ахырыһы, был.

Учалы тарафтарында яҙып алынған бер әкиәт-легенда буйынса, кешеләрҙең иген игеүенә, икмәк бешерергә өйрәнеп китеүенә айыу сәбәпсе була. Һунарсы ҡарттың януарға «урман хужаһы» тип мөрәжәғәт итеүе лә текстҡа осраҡлы килеп ингән һүҙбәйләнеш түгел.

Ҡыҫҡаһы, телгә алынған сюжеттарҙың бөтәһендә лә айыуға бәйле ҡараштарҙың сакраль мәғәнә йөрөткәнлеге күренә.

Башҡорттарҙа айыуҙың культ йәнлеге булыуын дәлилләүсе йолалар ҙа бар. Кирәй Мәргәндең тикшереүҙәренән күренеүенсә, Пермь, Свердловск әлкәләрендә, Урал артында йәшәүсе башҡорттарҙың йолалары араһында таралған айыутуй байрамы шулай уҡ боронғо тотемистик ҡараштарҙың сағылышы булып тора. Ул шунан ғибәрәт:

Һунарға сығыр алдынан йәки уңышлы һунарҙан һуң айыу —(Кирәй Мәргән әйтеүенсә) «һунар Аллаһы» — хөрмәтенә ниндәй ҙә булһа тантана ойошторола. Ошо тантанала ырыу ағзаларының берәүһе айыу тиреһе ябынып бейергә тейеш. Ҡайһы бер осраҡта айыу тиреһен нәүбәтләп ябыналар. Бейеү үҙенә махсус йәтешле һүҙ материалы менән оҙатыла. «Айыу тиреһен ябыныу детале, ғөмүмән, ырыу вәкиленең үҙ тотемы менән тығыҙ мөнәсәбәткә инергә тырышыуын сағылдыра. Айыу тиреһе ябынған шәхес, — тип яҙа

Кирәй Мәргән,— үҙ тотемының ҡеүәте менән һуғарылыуына, был осраҡта, үҙенә айыу көсө күскәненә ышанып эш итә» (136, 45).

Ғалимдың был фекеренә өҫтәп шуны ла әйтергә кәрәк. Һунарға сығыр алдынан йә һунарҙан һуң башҡарылған бейеү ритуалының мәғәнәһе, тәғәйенләнеше, тәбиғи, бер үк була алмай, һунар алдынан ойошторолған бейеүҙәр кейекте арбау ниәтендә башҡарылһа, һунарҙан һуң, йәғни айыуҙы үлтергәндән һуң, ойошторолғандары изгеләштер елгән януарҙың рухынан «ғәфү үтенеү» магияһын үтәгән булырға тейеш. Айыу тиреһе ябынып бейеүсе кешеләрҙең һаны ла һунарҙың башындағы һәм аҙағындағы церемонияла берҙәй булмауы мөмкин. Арбау ниәтендә башҡарылған йолала ҡатнашыусыларҙың һаны берәү генә булғандыр, тип уйлауы ауыр (үтә ябай ҡоралдар менән ҡоралланған боронғо кешеләр һунарға яңғыҙ ғына йөрөй алмаған, ауға күмәкләп сыҡҡандыр), ә инде һунарҙан һуң ойошторолған уйында бер генә кешенең — кейекте үлтергән топ һунарсының — айыу тиреһе ябынып бейегән булыуы бик тә ихтимал.

XX быуаттың 60-сы йылдарында яҙып алынған боронғо айыутуй байрамының тулы картинаһын күҙ алдына килтереү ҡыйын. Был йоланың бөтә мәғәнәһен, функцияларын белгән кешеләр ҙә, күрәһең, инде булмаған. Кирәй Мәргән ул хаҡта асыҡ ҡына мәғлүмәттәр бирмәй. Әммә оҡшаш йолалары булған һәм ул йолалар яҡшы һаҡланған, шунлыҡтан уларҙың мәғәнәләрен аңлатыусы кешеләре булған, халыҡтарҙың материалы менән беҙҙең материалды сағыштырып өйрәнеү һуңғыларының тарихи ерлеген асыҡларға бик ныҡ ярҙам итә. Төньяҡ халыҡтарының ғөрөфтәренә күҙ һалайыҡ. Коряктар, мәҫәлән, бүрене йәки айыуҙы үлтергәс, уның тиреһен тунап алып, һунарсыға кейҙергәндәр ҙә, үҙҙәре уның тирәләй әйләнеп бейегәндәр. Бейегәндә, кейеккә мөрәжәғәт итеп: «һине үлтереүсе беҙ түгел, башҡалар», — тип һамаҡлап йөрөр булғандар. Чукоттарҙың бүре байрамдарында бүре бейеүен байрамдың хужаһы — януарҙы үлтергән һунарсы — башҡарған. Ул бүре битлеге (маскаһы) кейеп, йә бүре тиреһен башын башҡа тура килтереп кейгән килеш бейер булған (266, 58).

Кирәй Мәргән айыутуй байрамында: «Бейеү махсус йәтешле шиғри һүҙ менән оҙатыла», — ти, ләкин был материалды килтермәй, уның онотолған булыуын билдәләй. Ҡасандыр бындай шиғри юлдарҙың булғанлығы шик тыуҙырмай, сөнки оҡшаш күренеш— башҡа һунар йәнлектәренә, ҡоштарға төбәп әйтелгән арбау һүҙҙәр («Төлкө теле», «Ҡош теле» һ. б.) әлегәсә һаҡланып ҡалған. «Башҡорт халыҡ ижады»ның йола фольклорына бағышланған томында (Өфө, 1995) баҫылған текстарҙа ла айыу туйында йыр-бейеүҙәр булыуы тураһында мәғлүмәт бирелә. Йоланың сакраль мәғәнәһе хаҡында туранан-тура әйтелмәһә лә, яҙмаларҙа боронғо ҡараштарҙың алыҫтағы шаңдауын ишетмәү мөмкин түгел, һөйләүсенең «айыу һунарына әҙерлек шау-шыуһыҙ барған» тигәнендә, кейектең кешеләрҙең уйын, әйткәндәрен яҡшы аңлаусы йән эйәһе икәнлегенә ышаныу ята. Күмәкләп һунар ҡылыу, айыуҙы туҡмап алыу, уны үҙенсәлекле һуйыу ысулына ҡағылышлы ифрат ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр бар уларҙа, һуңғыһы хаҡында, мәҫәлән, түбәндәгеләрҙе уҡырға була: «Һунарҙан ҡайтҡас, айыуҙы толоптай һуйғандар, йәғни ике артҡы ботонан аҫып, тиреһен ярмайынса ғына, һыҙырғандар, һыҙырғанда, тырнаҡтары ла, башы ла, ҡойроғо ла бөтөн көйөнсә ҡалған. Айыу алған ерҙә майҙан яһағандар, уйнап-көлгәндәр, көрәшкәндәр». Артабан информант айыу байрамдарының хәҙерге Әбйәлил районы ерҙәрендә, Өсимән тигән урында үткәрелеүен иҫкәрткәс, януарҙы һуйыу рәүешенә йәнә ҡайтып, былай тигән: «Бер юлы өс-дүрт айыу һуҡҡандар. Айыуҙы толоптай итеп һуйғандар, баҫтырып ҡуйғандар, Өсимәндәге майҙан ун биш көн буйы барған». Ат сабыштырыу, көрәш, йыр-бейеү ярыштары үткәрелгән <...>

Был айыутуйҙа ун биш көн буйы ошо дүрт айыу һыны баҫып торған, һунарсылар йырҙар йырлап, улар тирәһендә бейешкән.

Әйтелгәндәр әллә ни аңлатма талап итмәй: айыуҙы ололау, уға бағышланған ритуаль йыр-бейеүҙәр күренеше бында ярайһы уҡ асыҡ тоҫмаллана.

Изгеләштер елгән тотем хайуанына һунар итеү, уның итен ашау, дөйөм алғанда, яҙыҡ һаналған. Ә инде килеп тыуған ҡыйын хәлдәр (аслыҡ, көслө кейектең малды күпләп тәләфләүе...) арҡаһында һунарға сығыу ихтыяжы тыуғанда, төрлө магик мәғәнәле уйындар, ритуаль бейеүҙәр, ырымдар

тотем йәнлегенең «күңелен йомшартыу» саралары күрелгән. Күптән түгел матбуғатта сыҡҡан («Ватандаш», 2002, 6-сы һан) бер материал үҙенең информатив ҡеүәте менән айырыуса ҡыҙыҡлы. «Айыу олатай» тип исемләнгән был тексты Учалы районының Миндәк ҡасабаһынан Ғиззәтуллина Мәрхәбә Сәғит ҡыҙы яҙып ебәргән. Башҡа яҙмаларҙан айырмалы рәүештә, бында айыуға мөрәжәғәт өлгөһө, фольклор әлкәһенә ҡараған һүҙ материалы бар. Айыу — ырыу башлаусы, ҡот биреүсе, ҡурғаусы изге йән эйәһе булараҡ һүрәтләнә. Ифрат әһәмиәтле был яҙманы тулы, ерле һөйләш үҙенсәлектәрен сағылдырған килеш һаҡлау хәйерле. Бына ул:

«Боронғо замандарҙа, имеш, ерҙә тик кеше генә йәшәгән. Аҙаҡ һыуыҡ булғас, ҡыш килгәс, кешеләр үҙҙәренә кейем йүнәткән. Шунан хайуан килеп сыҡҡан, ти. Әле лә, имеш, хайуандар өңдәрендә тиреһен сисәләр һәм кеше булып китәләр икән. Ул хайуандар кешегә лә һәм ысын януарға түрә, тейҙәр. Алар ҡурсалайҙар төрҙө [төрлө] бәләҡазаларҙан. Ҡайһы бер ырыу-аймаҡ атамалар шунан килә. Әгәр кеше айыу тигән аймаҡтан икән, ул айыуға һунар итергә, аның итен ашарға тейеш түгел.

Элек байрамдар ҡорғандар. Байрамдан алда айыу олатайҙан рөхсәт һорап, ошо һамаҡты әйткәндәр: «Айыу олатай, балдарым ас интегә, бер ғәйебе булмаған, йола тотмаған, зат-ырыуҙы аларға тәмдәргә рөхсәт ит». Шунан ирҙәр урманға киткән айыуға һунарға. Ул айыуҙы алып ҡайтып, йортҡа [ихатаға] индереп һуйғандар; һуйғас, башын айырым алып, өҫтөнә ҡош йөнө һипкәндәр. Баш һөйәген йыуып, бер бағанаға элеп ҡуйғандар. Элекке баш һөйәген (былтырғы) һәм башҡа һөйәктәрҙе урман, тауға илткәндәр. Бер яҡшы кеше айыу тиреһен кейеп, өс көн бейеп йөрөгән, ошолай йырлап: «Айыу олатай, ҡот бир, һинең һымаҡ булһын балам ир-ир!» Әле был йола онотолған. Ҡарағужа ауылында айыу аймағы тороп ҡалған».

Ҡыҙғаныска ҡаршы, һуйылған айыу башына ҡош йөнө һибеү мотивы аңлатылмаған, уны беҙгә киләсәктә асыҡлайһы бар. Бәлки, кеше затынан тип иҫәпләнгән януарҙың йәне ҡош булып илаһи күккә осһон, тиеп атҡарылған ырымдыр был.

Күрәһең, айыу байрамдары әүәле киң билдәле йолаларҙың береһе булған. Бөрйән, Әбйәлил, Баймаҡ районы башҡорттарының туй йолаһында айыу туны ябынып бейеү эпизодының булыуы (188, 79) ошо хаҡта һөйләй. Туйҙа айыу туны ябынып бейеүҙең айыутуй байрамдарындағы бейеү менән функциональ уртаҡлығы, моғайын, юҡтыр, сөнки һәр ритуалдың үҙ маҡсатына ярашлы рәүештә йолаға үҙенсәлекле мәғәнә һалына. Туй ваҡытындағы ритуалдың характерына ҡарағанда (тундарының эсен тышҡа әйләндереп кейгән кешеләрҙең ҡамсы менән ағас предметтарға, өй мөйөштәренә һуғыуы), ул айыу шикелле көслө хайуандың рухы менән йәш ғаиләне бәлә-ҡаза килтереүсе яуыз көстәрҙән, ен-пәрейҙән һаҡлау маҡсатында үткәрелгән йола булырға тейеш.

С. И. Руденко яҙып алған материалдарҙан күренеүенсә, башҡорттар араһында элек шундай йолалар ҙа булған. Мәҫәлән, сирҙәрҙе ҡурҡытыу өсөн сырхау кешеләрҙең, йәш балаларҙың муйынына айыу тырнағы, йә айыу теше һалып тегелгән бетеү тағылған. Былай эшләгәндә, йәнәһе, сир айыуҙан ҡурҡҡан кеүек ҡурҡа, йәш балаға ен эйәләшмәй (247, 320—323). Ошоларҙы иҫәпкә алғанда, башҡорт туйында айыу туны кейеп бейеүҙең тылсымлы мәғәнәгә эйә булыуы шик тыуҙырмай. Ҡараштарҙың ни тиклем боронғо һәм йолаларҙың ҡасандыр традицияға бик ныҡ ингән булыуын Л. И. Нагаеваның: «Эсен тышҡа әйләндер еп кейелгән тун, тиреһенең нindәй булыуына ҡарамаҫтан (төлкө тиреһенәнме ул, һарыҡ тиреһенәнме), башҡорттарҙа айыутун тип аталған» (188, 79),— тигән мәғлүмәте лә күрһәтеп тора.

Һунарға йыйынғанда айыуҙың исемен әйтмәү (әйтһәң, һунар уңышһыҙ була, сөнки айыуҙар кешенең уйын белеп, ҡасып бөтә икән тигән ышаныу), уй йәшереү ниәтендә «айыу» һүҙе урынына алмаш исемдәр («солоҡ эйәһе», «тайыш табан», «урман хужаһы», «бабай») (54, 7) ҡулланыу күренештәре шулай уҡ боронғо айыу культына бәйле ҡараштарҙың саҡҡылары ул.

Башҡорт халыҡ хикәйәләрендә һәм һәр төрлө тормош-көнкүреш йолаларында сағылған тотемизм һәм айыу культы ҡалдыҡтары башҡа бик күп халыҡтарҙың ауыҙ-тел ижады материалдары һәм ғөрөф-ғәҙәттәре менән оҡшаш.

Ғилми әҙәбиәттән күренеүенсә, айыу культына бәйле тотемистик ҡараштар һунарсылыҡ менән кон күргән себер халыҡтарында айырыуса ныҡ таралған. Мәҫәлән, алтай, хакас, шор, тува, яҡут халыҡтарында айыу тотем, культ хайуаны булып иҫәпләнгән (13, 112—125). Төньяҡ алтайлы-тывалар үҙҙәре хаҡында: «Бер айыуҙан таралғанбыҙ» (226, 17),— тиҙәр; яҡуттар айыуҙы эһэ (бабай), тыатааҕы (тайганыҡы), ҡырдьағас (ҡартлас) (13, 116); алтайлы-теленгиттар: абаай (ҡайнаға, ырыуҙаш); ҡарындаш, таай (әсәй яғынан булған ағай); хакас-качиндар: ҡарт, бабай йәки атай (13, 116—119), тип йөрөткәндәр. Айыуҙы туғанлыҡ термины менән атау килтерелгән миҫалдар менән генә сикләнмәй, был күренеш асылда айыу культы булған һәр ерҙә тиерлек күҙәтелеп, һунарсыларҙың айыу менән үҙҙәре араһындағы ҡәрҙәшлеккә ышаныуҙары хаҡында һөйләй. Бынан тыш, төрлө халыҡтар араһында осраған айыу байрамдары, ритуал бейеүҙәрҙең тарихи нигеҙе башҡорт йолаларының ерлеге менән бер үк төрлө йәки оҡшаш булғанлығын күрмәү мөмкин түгел. Шуныһы, оҡшашлыҡ төрки халыҡтары материалы менән генә сикләнмәй: типологик күренештәр төрлө географик киңлектәрҙә, төрлө тел системаһына ҡараған халыҡтарҙың ижадында һәм йолаларында сағыла. Белорустарҙың уянған айыу хөрмәтенә үткәргән яҙғы «комоедиңы» байрамдары (айыу туны кейеп бейеү йолаһы), боронғо гректарҙың «комедиен» («комос» айыу тигәнде аңлата) уйындары (249, 40, 106) шуны раҫлай. Хәҙер һәр кемгә билдәле «комедия» һүҙенең башланғысы гректарҙың ана шул боронғо айыу байрамдары — «комедиеи»ҙан килә (249, 40). Айыу, бүре тиреһе ябынып бейеү ритуалдары Төньяҡ Америка индейҙарының, шулай уҡ ирокездарҙың йолалары өсөн хас (266, 38).

Айыу культының бик боронғо дәүерҙә барлыҡҡа килеүен һәм уның был хайуанды белгән барлыҡ халыҡтар өсөн дә уртаҡлығын раҫлаусы йәнә бер мөһим күрһәткес бар — ул археологик ҡомартҡылар. Франция мәмерйәләрендәге айыу һүрәттәре, Германия мәмерйәләрендә күпләп тупланған һәм билдәле бер тәртиптә урынлаштырылған айыу һөйәктәре, Скандинавия, Урал, Көнсығыш Себер петроглифтары — бөтәһе лә фәндә тәүтормош кешеләре

аңындағы тотемизм күренешен раҫлаусы факттар итеп баһалана (255, 118-164; 260, 414-427; 120, 128).

Дөйөм алғанда, айыу культы буйынса төрлө халыҡтарҙың материалдарын комплекслы тикшереү өсөн мөмкинселектәр хәҙер шаҡтай ҙур, әммә легенда һәм легендар риүәйәттәрҙең үҙҙәренә генә килһәк, сағыштырма өйрәнеү мөмкинселеге ныҡ ҡына ауырлаша. Бигерәк тә, легендаларҙы сюжет төҙөлөшө, текстуаль оҡшашлыҡтар күҙлегенән тикшереү мәсьәләһе ҡатмарлы, сөнки күпселек халыҡ хикәйәләренең йөкмәткеһе менән теге йәки был авторҙың һөйләп сығыуы йәки әйтеп китеүе аша этнографик хеҙмәттәр арҡылы ғына танышырға тура килә. Шунлыҡтан хәҙергә төрлө халыҡтарҙың риүәйәт һәм легендаларын уларҙағы төп мотивтар буйынса ғына сағыштырып өйрәнергә мөмкин. Әлбиттә, төп мотив —бик мөһим күрһәткес, шулай ҙа уның буйынса тикшеренеүсе үҙенең алдына ҡуйған һорауҙарҙың бөтәһенә лә тулы яуап алып бөтә алмай. Айырыуса, халыҡтар араһындағы бәйләнештәрҙең тибын билдәләү ауырлаша. Мәҫәлән, айыу затының кешенән килеп сығыуы хаҡындағы мотив һәр ерҙә тиерлек билдәле. Мотив уртаҡлығы яғынан үрҙә килтерелгән «Айыу тоҡомо» исемле легендар риүәйәтте ошо мотивты йөрөткән һәр халыҡтың ауыҙ-тел ижады әҫәрҙәре менән сағыштырып сығырға, шул нигеҙҙә иң яҡын параллелдәрҙе күрһәтергә мөмкин булыр ине. Ләкин легенда текстарының төрлө кимәлдә булыуы был мәсьәләне аҙағына тиклем хәл итергә мөмкинлек бирмәй. Материалдарҙың хәҙерге торошонда башҡорт легендаһын сағыштырма өйрәнеү был текстың фин-уғыр телле Васюган буйы остяктары легендаларына яҡын торғанлығын күрһәтте, шул уҡ ваҡытта ҡайһы бер рус, коми легендаларында осраған мотивтар менән дә ауаздашлыҡ булғанлығы беленде (337, 109[4]; 178, 19-20; 266[5], 104-105).

Башҡорт һәм остяк легендаларында, уртаҡ төп мотивтан тыш, оҡшашлыҡ түбәндәге деталдәрҙән күренә:

1)Ике халыҡтың легендаһында ла урманда йөрөргә яратҡан сәйер бер батыр хаҡында бәйән ҡылына.

2) Остяк легендаларында, бер ҙур түмәрҙе аша сыға алмағанлыҡтан, герой бөтә кейемдәрен сисеп ташлап, яланғас үтергә мәжбүр (кейемен һалғас, тегенең тәне йөн менән

ҡаплана). Башҡорт легендаһында был эпизод икенсе төрлө хәл ителгән: егет гел билендә йөрөткән хәнйәрен өшкөрөп, ергә ҡаҙаһа, айыуға әйләнә.

3) Остяк легендаларында — егеттең кейемдәре, башҡорт легендаһында хәнйәр урлана. Шул сәбәпле кеше айыу ҡиәфәтендә тороп ҡала.

Күренеүенсә, ҡайһы бер деталдәрҙә айырма булһа ла, этиологик мотив — нигеҙҙә бер йүнәлештә. Былдай яҡынлыҡты ниндәйҙер осраҡлы күренеш тип уйлауы ауыр, шулай уҡ типологияға ғына ҡайтарып ҡалдырыу ҙа бик үк дөрөҫ булмаҫ, сөнки оҡшашлыҡ төп мөтивта ғына түгел, ә сюжет төҙөлөшөндә лә. Тарихи үҫештең ниндәйҙер бер этабында башҡорт һәм Васюган остяктарының ата-бабалары аралашып йәшәгән булырға тейеш — легендалар шуға ишара яһай.

Быуаттар буйына малсылыҡ менән ғүмер иткән башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижадында, шул иҫәптән легенда һәм риүәйәттәрҙә, ***изгеләштерелгән ат*** образы күренекле урын биләй. Дөйөмләштереп әйткәндә, атҡа бәйле легендар сюжеттарҙың бер нисә тибы бар: 1) ат —ырыу башлаусы изге йән, тотем; 2) ат — юл башлап, изге төйәк, ҡотло урын табып биреүсе; 3)һыу аҫтынан сыҡҡан мал ҡотон йөрөтөүсе хайуан; 4) тәбиғәт объекттарын барлыҡҡа килтереүсе; 5) күҙ тейеүҙән һәләк булыусы мифик ат — толпар; 6) бәйгеләрҙә ал бирмәҫ данлыҡлы аттар.

[4] Н. Ядринцевтың мәҡәләһенә өҫтәмә рәүешендә аҙаҡтан Г. И. Куликовскийҙың айыуға бәйле рус йолалары һәм риүәйәттәре хаҡындағы иҫкәрмәләре бирелгән. Шул иҫкәрмәләрҙән беҙҙең иғтибарҙы түбәндәге юлдар йәлеп итте: «...Рәсәйҙең төньяғында, Олонец губернияһында, мәҫәлән, айыу —кеше затынан, ул ниндәйҙер тылсым ярҙамында кейеккә әйләнгән, тигән ышаныу йәшәй».

[5] З. П. Соколова китабында килтерелгән коми легендаһы күпмелер дәрәжәлә башҡорт легендаһы менән ауаздаш: бер килен, ҡайныһының ваҡыты-ваҡыты менән ҡайҙалыр юғалып тороуын иҫләп, уны күҙәтә башлай һәм ҡайны кешенең, урманға инеп, тылсым ярҙамында (ергә эйелеп ҡайын олоно аша тәкмәсләп) айыуға әүерелеүен күрә. Килен ҡайныһының хәрәкәтен ҡабатлай, әммә яңылыштан бер аяғы менән ҡайын олонона ҡағыла. Шунлыҡтан килен инә айыуға әүерелһә лә, бер аяғы кешенеке булып ҡала. Ошо хата арҡаһында ҡайны ла, килен дә ҡабат кеше сүрәтенә инә алмай, айыу булып ҡалалар.

Сюжеттарҙың тәүге ике тибы — асылда бүре тураһындағы башҡорт легендаларының яңы версиялары ул. Атты һ. б. хайуандарҙы ҡулға эйәләштереү һөҙөмтәһендә малсылыҡ хеҙмәтенең тамыр йәйеүе, шул арҡала һунарсылыҡ кәсебенең күпмелер һүрәнәйә төшөүе һунарсылыҡҡа бәйле тыуған ҡайһы бер ҡараштарҙың трансформацияланышыуына килтергәндер, күрәһең. Изгелекле бүре мотивының нәҫел ебен таратыусы, ҡотло урын табып биреүсе ат образы менән алмашыуы йәки йәнәш йөрөүе шул хаҡта һөйләй. Миҫалдарға мөрәжәғәт итәйек. Ырымбур өлкәһенең Александр районы Ҡайыпҡол ауылында йәшәүсе Усман Сәйетовтан Кирәй Мәргән яҙып алған «Әҙәм тарпаны» исемле бер легендар риүәйәт, мәҫәлән, бүре тураһындағы сюжеттарҙың ике тибына ла (бүре-әсә, бүре-юл башлаусы) хас булған һыҙаттарҙы үҙ эсенә ала: «Элек бында әҙәм заты булмаған. Көтөү-көтөү тарпан мал йөрөгән, өйөр-өйөр ҡырағай кейек, йәнлек йөрөгән.

Бер әҙәм килеп сыҡҡан да тарпан малды тоторға уҡталған. Мал быға баш бирмәгән, ошо яҡҡа тартҡан. Теге әҙәм мал артынан эйәреп, Туҡ буйына килеп сыҡҡан. Бәрәстауға килеп еткәс, малды юғалтҡан. Аптырашта ҡалған был. Ҡайҙа барырға белмәй йөрөп ятһа, күрә: бер тай йөрөп ята. Тота был тайҙы, менеп атлана ла, ҡамсыһы менән һуға. Шул саҡ тай бер һылыу ҡыҙға әйләнә, «һуҡма миңә, ағай, мин —һинең яҙмышың»,— ти был. Был тай — әҙәм тарпаны икән. Шунан былар Туҡ буйында ҡыуыш ҡороп тора башлағандар. Баштай ырыуы бына шунан таралып киткән» (55, 84). Күренеүенсә, был әҫәрҙәге төп коллизия шул уҡ Ырымбур өлкәһендә яҙып алынған «Бүреләр тоҡомо» исемле легендалағы мотивтарҙы икенсе версияла ҡабатлауҙан тора, айырма ҡайһы бер деталдәрҙә генә.

Ат, йылҡы өйөрө артынан килеп, төйәк табыу мотивына ҡоролған сюжеттар шулай уҡ традицион характерҙа. Легендаларҙың йөкмәткеһенә ҡарағанда, бындай сюжеттарҙың юл башлаусы бүре (эт, болан, мышы) хаҡындағы әҫәрҙәрҙән һуңғараҡ яралғанлығы күренә. Ил, йәшәр төйәк эҙләп китеп барған кешеләргә көтмәгән ерҙә әллә ҡайҙан килеп сыҡҡан бүре уның артынан эйәреп барып, ҡотло урын табыу тураһындағы сюжеттарҙан айырмалы рәүештә, атҡа, йылҡы

өйөрөнә (варианттары: Һарыҡ көтөүе, Ҡуңыр буға) бәйле легендаларҙа ваҡиға теге йәки был кешенең, ауылдың аты, йылҡы өйөрө (тимәк, ҡулға эйәләштерелгән малдың) юғалыу эпизодын һөйләүҙән башлана. Бер йыл, йәки бер нисә ай үткәс, юғалған малдарҙы табыу, улар үҙ иткән ерҙе изге күреп, кешеләрҙең шунда килеп ултырыуы артабан легендаларҙың үҙәк мотивына әйләнә. Яңы урынға күсеүҙең сәбәбен аңлатыу традицион стилдә:

«...Йылҡы өйөрөн икенсе йылы ошо яҡтағы бер тауҙа табалар. Йылҡылар кәмеү түгел, ҡолонлап, ишәйеп торған була. Өйөрҙө табыусылар ҡайтып һөйләйҙәр. Ауыл ҡарттары был тауҙы: «Һаҡлы тау икән, бик хәйерле тау икән»,— тип килеп ҡарағандар. Урын оҡшаған. Күңелдәренә ятышлы был тау битләсенә күсеп ултырғандар...» («Һаҡтау ауылы»—55, 130.)

Аттарын табып ҡайтҡан улына атаһы: «Улым, инде һинең йәшең еткән, өйлән дә, шул аттар ҡышлаған йылға буйына күсеп ултыр, һинең бәхетең шул ҡотло йылға буйында булырға тейеш» («Ямаш менән Йомаш ауылдары»—55, 129). Килтерелгән ошо миҫалдарҙан ғына ла, атты, йылҡы малын изгеләштереү мотивын бик асыҡ тойорға мөмкин: тәүге осраҡта ат (тай) ырыу башлап ебәреүсе булараҡ сығыш яһаһа, икенсе осраҡтарҙа ер ҡотон тоя белеүсе изге мал булып күҙ алдына баҫа. Вәлиулла Ҡоломбәтов яҙып алған бер легендар риүәйәттә Тырнаҡлы ырыуы башҡорттары Уралға Сыр даръя яғынан юғалған буҙаттарын эҙләп килеп сығып, аттары туҡтаған урында төйәк табалар (203, оп. 11, д. 6, л. 3—21). Аттың ғәҙәти булмауы бында төҫ символы менән дә һыҙыҡ өҫтөнә алынған. Билдәле булыуынса, аҡ, буҙ (күк) аттар төрки халыҡтарының мифологияһында кешеләргә ырыҫ килтереүсе, изгелекле йән эйәләре сифатында сағылыш тапҡан. Фольклор әҫәрҙәре һәм ҡайһы бер яҙма сығанаҡтарҙа һаҡланған күп һанлы мәғлүмәттәргә ҡарағанда, борон күк, аҡбуҙ төҫтәге аттарға ырыу башлаусы ата-бабалар, әүлиәләр, аҙаҡ батырҙар атланып йөрөр булған. Орхон-Енисей яҙмаларынан күренеүенсә, Көлтиген менеп йөрөгән аттарҙың икеһе аҡ төҫтә, өсөнсөһө күк төҫтә булған (176, 33). Шул уҡ боронғо яҙмалар һөйләүе буйынса, юл Аллаһы менеп йөрөгән аттың төҫө лә —буҙ

төҫ (176, 33). Башҡорт эпосының геройы Урал батырҙың менгән толпары — Аҡбуҙат. Ул ябай ат түгел «Күктә тыуып, күктә үҫкән» (49, 85), сәсән теле менән әйткәндә:

Болотҡа еткән тауҙарҙы
Һикереп ашҡан Аҡбуҙат;
Тояғы тейгән урындан
Күл сығарған Аҡбуҙат;
Елеп үткән еренән
Тау сығарған Аҡбуҙат... (46, 82).

Башҡорт легендалары менән һәр яҡлап ауаздаш был юлдар. Йылҡы малы, буҙат — аллалаштырылған изге йән (уның күктә тыуып, күктә үҫеүе), шул уҡ ваҡытта ер-һыу, ғөмүмән, тәбиғәттең үҙен яралдырыуҙа ла уның ҡатнашы бар: эпостан килтерелгән өҙөктә был бик асыҡ сағыла. Уны легенда юлдары менән сағыштырығыҙ: «Айғырҙың тояҡ көсөнә тау ишелеп киткән дә, атылып шишмә килеп сыҡҡан. Айғыр урмандар, тауҙар аша әле бер яҡҡа, әле икенсе яҡҡа борола-борола саба икән. Шунан ҡара айғыр сабып, Ағиҙел буйҙарына барып сыҡҡан да күҙҙән юғалған. Уның тураһында башҡа ишетеүсе лә, күреүсе лә булмаған, ә һыу Ағиҙелгә барып ҡушылған да ағып киткән.

Бына шулай барлыҡҡа килгән, ти, Ҡариҙел йылғаһы» («Ҡариҙел» — 55, 94 — 95).

Аттың һыу аҫтынан сыҡҡан мал ҡотон йөрөтөүсе хайуан булыуы хаҡындағы сюжеттарҙа шулай уҡ атты изгеләштереү мотивы үҙәк урында тора. «Йылҡысыҡҡанкүл» исемле легендала, мәҫәлән, был йәһәттән иғтибарҙы йәлеп иткән бер әһәмиәтле деталь бар: ул «Йылҡысыҡҡанкүл» д ең ҡотло урын булыуын иҫкәртеү (күлдән сыҡҡан малдың бик үрсемле булыуы, бай улы нәҫелдәре таралыу һ. б.). Урынды изгеләштереү йылҡы малын изгеләштереүгә, уны культ дәрәжәһенә күтәреү традицияһына бәйләнгән. Боронғо башҡорттарҙағы ат культын «Турат сағылы», «Кейәүташ», «Үткән ғүмер» исемле легендалар (55, 97 — 99, 259—260) миҫалында ла күрергә мөмкин.

Күҙ тейеүҙән һәләк булған туры толпарын ерләгәс, легенда геройының (кейәү егетенең) ғаилә ҡороуҙан баш

тартып, үҙ иленә ҡайтып китеүе («Кейәүташ») — йылҡы малына ҡарата изгеләштерелгән мөнәсәбәтте сағылдырыусы образлы деталь булып тора.

«Турат сағылы» исемле легендала шулай уҡ күҙ тейеүҙән һәләк булған ҡанатлы толпар образы һүрәтләнеп, толпарҙы ҡәҙерләп күмеү; уның зыяратын таш менән уратыу һәм аҙаҡ был ҡәберҙе изге ҡәбер тип иҫәпләү хаҡындағы иҫкәрмәләр ҙә һис шикһеҙ алда әйтелгән фекерҙе ҡеүәтләүсе мәғлүмәттәр булып ҡабул ителә. Шуны ла әйтергә кәрәк, Көньяҡ Башҡортостан ҡурайсылары араһында «Турат сағылы» исемле инструменталь көй ҙә бик яратып уйналған (203, оп. 12, д. 294, л. 68). Уны уйнаусылар әле лә юҡ түгел.

Бәйгеләрҙә ал бирмәҫ данлыҡлы аттар тураһындағы сюжеттар («Аласабыр», «Саптар юрға» — 203, оп. 12, д. 294, л. 316—320) ижтимағи үҫештең һуңғараҡ этаптарында тыуған ҡараштарҙы сағылдыра, әммә боронғонан килгән йылҡы малын изгеләштер еү мотивы уларҙа ла ҡайһы бер деталдәр арҡылы тоҫмалланып ҡала. Мәҫәлән, аласабырҙың ҡанатлы толпар нәҫеленән булған йылҡы ҡотон йөрөтөүсе ат икәнлеге тураһындағы мәғлүмәт — элекке мифологик ҡараштарҙың бер саҡкыһы ул. Ҡанатлы толпар мотивының төрлө халыҡтарҙың ауыҙ-тел ижадында, һынлы сәнғәтендә (мәҫәлән, боронғо Греция, Алғы, Урта һәм Көньяҡ-Көнсығыш Азия архитектура ҡомартҡыларындағы (185, 77) ҡанатлы толпарҙар һәм башҡа мифик хайуандарҙың һүрәте) сағылыу факты үҙе генә лә был мотивтың боронғолоғо тураһында һөйләй. Туранан-тура әйтелмәһә лә, «Аласабыр» әҫәрендә аласабырҙың күлдән сыҡҡан изге мал булыуына ла ишара бар. Батшаның ғәжәп аттарҙы көн һайын күл буйында осратыуы риүәйәт-легендаға осраҡлы ғына килеп ингән эпизод түгел. Хатта йылҡыларҙың ҡиәфәтен һүрәтләүҙә лә архаик мотивтар менән һуғарылған «Йылҡысыҡҡанкүл» легендаһы менән ауаздашлыҡ күҙәтелә.

«Аласабыр»ҙа:

«...Йылҡылар бик матурҙар икән: барыһының да төҫө ала. Яра ҡашҡа, аҡ бәкәл, барыһы ла бер тигеҙ, ваҡ нәҫел...» (55, 318).

«Йылҡысыҡҡанкүл»дә:

«...Күлдән сыҡҡан был йылҡы үҙе сысҡан буй һыртлы ала төҫтәге тоҡом икән. Ала төҫ йылҡы тоҡомо ана шунан ҡалған» (55, 93).

Һүҙ ыңғайында шуны ла әйтеп үтергә кәрәк, данлыҡлы аттар тураһындағы башҡорт риүәйәт-легендалары шул уҡ хаҡтағы ҡаҙаҡ риүәйәттәре менән ауаздаш (сағыштырығыҙ: «Тулпар туралы аңыз», «Боз айғыр», «Коңыр ала» —304, 61 —63). Һыу, күл төбөнән йылҡы сығыу мотивы ла төрки-монгол халыҡтары өсөн ят мотив түгел: ул төрөк, үзбәк, ҡаҙаҡ, яҡут, ҡалмыҡ, монгол һ. б. халыҡтарҙың легенда һәм әкиәттәрендә йыш осрай (289, 43-44).

Башҡорттарҙың атты изгеләштереп ҡарағайлығы төрлө йола һәм ышаныуҙар миҫалында ла күрергә мөмкин. «Даға тапһаң — бәхеткә» тигән юрау, мәҫәлән, шул боронғо ҡараштарҙың алыҫтағы бер шаңдауы ул. Боронғо кешеләр ат, изге мал булараҡ, үҙенең тояҡтары менән уҫал рухтарҙы, ен-пәрейҙәрҙе ҡурҡытып, ҡыуып ебәрә икән, тип уйлаған. Ауылдарҙа ҡапҡа баштарына, умарталыҡтарҙа ҡыу ат башы элеү, йә тупһаға, бағанаға даға ҡағыу йолаһы һуңғы ваҡыттарғаса осрай. Халыҡта был күренеш түбәндәгесә аңлатыла:

«...Ҡыу ат башынан убырлы ҡарсыҡ, мәскәйҙәр ҡурҡа икән...» (203, оп. 47, д. 3, л. 425).

Ҡыу ат башын ҡапҡа башына йорт хужаһы ҡот күрһен өсөн элеп ҡуйыр булғандар» (203, оп. 32, д. 34, л. 121).

«...Күп ямғыр яумаһа, ҡыу башты, йылҡы башын, ҡапҡа баптьтна элеп ҡуяһың» (203, оп. 21, д. 8, л. 263).

...Ир-егеткә ҡыйнаш (һуғыш, туҡмалыш) килмәҫ, ҡыҙ-ҡырҡынға уйнаш килмәҫ, мал-тыуарға үләт килмәҫ, тигән ышаныуҙы беҙгә шағир Рәшит Әхтәровтан яҙып алырға тура килгәйне.

Ҡыу ат йә бүре башын тупһа аҫтына ла күмәләр. Өлкән йәштәге информанттың әйтеүе буйынса, был ырым бик борондан килеп, ғаилә, йорт ҡотон һаҡлау өсөн башҡарылыр булған (203, оп. 65, д. 7, л. 349).

Сирҙәрҙән арыныу ниәтендә лә халыҡ ҡыу ат башының ҡөҙрәтенә ышанып, төрлө им-том итеү менән шөғөлләнгән: «Элек танау ҡанаһа, ҡаҡ баш, йылҡы башына, тип ҡанатырҙар ине» (203, оп. 21, д. 8, л. 263),— тип һөйләгән, мәҫәлән, Силәбе әлкәһе Арғаяш районының Таш (Ҡурамша)

ауылында йәшәүсе 70 йәшлек Шәйәхмәтов Ғәлмәҙи Шәйәхмәт улы.

«Ерҙән тейенгән тип иҫәпләнгән ауырыуҙарҙы дауалағанда, һауытҡа ат дағаһының ҡаҙағын, көл, тағы ниндәйҙер әйберҙәр, һыу һалып, ауыртҡан ер тирәһенән әйләндереп алалар ҙа, доға уҡып, шуны кеше йөрөмәгән ергә илтеп түгәләр» (203, оп. 72, д. 25, л. 249).

Аттың күбеге менән тире ен ҡағылыуҙан, күҙ тейеүҙән һаҡлай икән тигән ышаныу йәшәгән борон. Ат тире йәки күбеге менән һуғарылған сыбыртҡы менән һуҡһаң, хатта әллә ниндәй ҙур йыландар ҙа түҙмәй, үлә тип уйлағандар. Был ҡараш легендаларҙа ла сағылып ҡалған. И. И. Лепехин тарафынан яҙып алынған легендала, мәҫәлән, Йылантауҙа бер башҡорттоң ырым ярҙамында (ҡамсыһын ат тире менән һуғарып) дәү бер йыланды үлтер еүе хаҡында һөйләнелә (168, 57, 58). Ат тиренең мөғжизәле көсөнә ышаныуға нигеҙләнгән ҡыҙыҡлы бер йола хаҡында Марат Минһажитдинов килтергән мәғлүмәттәр шулай уҡ бик әһәмиәтле. Урал арты ауылдары ҡарттарының таныш булмаған урман йәки аҡланда ҡуна ҡалғанда, ен-зәхмәттән, йыландарҙан һаҡланыу ниәтендә йоҡлар алдынан ятыр урынды ат тиренең еҫе сыҡҡан бөтә нәмә: дилбегә, ҡамыт, ыңғырсаҡ, йүгәндәр менән уратыу осраҡтарын авторға үҙ күҙҙәре менән күрергә тура килгән (183, 301).

Фольклор материалдарына ҡарағанда, ат күбеге халыҡ медицинаһында ла ҡулланылған булырға тейеш. Был йәһәттән, мәҫәлән, «Аҡбуҙат» эпосының геройы һәүбәндең яралы ҡошҡа Аҡбуҙат ауыҙындағы күбекте һөртөүе, шул арҡала ҡоштоң ҡанаттары төҙәлеүе хаҡындағы эпизод (49, 183) иғтибарға лайыҡ.

Яңы һуйылған йылҡы майының шифаһына ышаныу һөҙөмтәһендә тыуған ырымдарҙың булғанлығы билдәле (183, 301-302).

Шәжәрәләрҙә теркәлеп ҡалған ҡайһы бер хөрәфәти хикәйәләр буйынса, бала тормаған осраҡта яңы тыуған баланы ат ҡуйынына һалып алып, уға ат исеме ҡушыу йолаһының серле мәғәнәгә эйә булыуын аңлауы ауыр түгел. Бына, мәҫәлән, Юрматы ырыуы башҡорттарының шәжәрәһенән бер өҙөк: «...Әммә Бурнаҡ дип аны шуның өчен атадылар һәмче

уғлы-ҡызы юҡ сәбәбдин, борно аҡ атның ҡуйынына салып, ат исемен бирделәр» (41, 28).

Башҡорт этнонимияһы эсендә атҡа бәйле атамаларҙың һаҡланыуы ла (баштай, ҡаратай аралары) боронғо ат культының бер сағылышы булараҡ ҡабул ителә.

Ат образының биҙәү сәнғәтендә (башҡорт һарауыстарын хәтерләйек — 5, 91, 100), археологик ҡомартҡыларҙа һаҡланыуы, ҡәберлектәрҙә кеше менән бергә күмелгән ат һөлдәләренең табылыуы — быларҙың бөтәһе лә ғалимдар тарафынан хаҡлы рәүештә кеше аңының мәжүсилек осорона хас булған ҡараштар рәүешендә баһаланды (66, 185).

Аттың кешеләрҙең тормошонда тотҡан урыны ифрат ҙур булған, шуға ла был образды күп халыҡтар культ дәрәжәһенә күтәргән. Атты изгеләштереү хаҡында һөйләүсе мифологик легендалар, һәр төрлө йола, ғөрөф-ғәҙәттәр ғилми әҙәбиәттә киң яҡтыртылған (304, 9—20; 292, 21; 329, 50, 123, 144, 242; 220, 239-245).

*  **

Легендалар буйынса элек башҡорттар араһында ***ҡоштар культының*** шаҡтай ныҡ таралған булыуы күренә. Башҡорттарҙың төрлө йәнлек, ҡош-ҡорттарға табыныуы тураһындағы мәғлүмәттәр, билдәле булыуынса, X быуат башына ҡараған Әхмәт Ибн-Фаҙлан яҙмаларында теркәлеп ҡалған. Был урында беҙҙе ғәрәп сәйәхәтсеһенең торналар хаҡындағы башҡорт легендаһына бәйле фекерҙәре һәм бигерәк тә уның һөйләп сығыуы аша килтерелгән легенданың үҙе ҡыҙыҡһындыра. Легендала ниндәйҙер бер яу килеүе, шул яу ваҡытында башҡорттарҙың хәле мөшкөлләнгән бер мәлдә, әллә ҡайҙан торналарҙың килеп сығып дошмандарға ябырылыуы, һәм был хәлдән ҡото осҡан баҫҡынсыларҙың кире әйләнеп ҡасыуҙары хаҡында бәйән ҡылына (139, 131). Ошонан һуң, торналар башҡорттарҙың тоҡомон ҡурғаусы изгелекле, аллалаштырылған ҡош итеп күҙ алдына баҫтырыла башлай, имеш. Был Ибн-Фаҙлан яҙмаларының түбәндәге юлдарынан айырыуса яҡшы аңлашыла: «Торналар — беҙҙең Раббыбыҙ, улар беҙҙең дошмандарыбыҙҙы ҡасырға мәжбүр

итте, — тиҙәр башҡорттар. — Шуға ла улар торналарға табына» (139, 131).

Заманында Ибн-Фаҙлан яҙмаларын С. И. Руденко тотемистик ҡараштарҙың ҡалдыҡ формаһы тип баһаланы (247, 315), сөнки легендала кеше менән торна араһындағы ҡәрҙәшлеккә туранан-тура ишаралаусы мотив юҡ. Әммә, ғилми әҙәбиәттән күренеүенсә, хайуан йәки ҡош-ҡурғаусы мотивы үҙенең тамырҙары менән шулай уҡ тотемизм күренешенә барып тоташа. Австралияла, мәҫәлән, ҡайһы бер ҡәбиләләр тотем йәнлегенең әшкәртеү көсөнә ышаналар. Ул ҡәбиләләр араһында теге йәки был ырыуға (ырыу вәкиленә) зыян килтереү ниәте булғанда, уның тотемын үлтереү ҙә етә тигән ышаныу йәшәгән (285, 49).

Ғәрәп сәйәхәтсеһенең яҙмаларында иғтибарҙы тартҡан йәнә бер мәғлүмәт бар: ул —әллә ҡайҙан килеп сыҡҡан торналарҙың ябырылыуынан ҡурҡып, яу менән килгән дошмандарҙың кире әйләнеп сабыуы. Ни өсөн торналар сит баҫҡынсылар өсөн ҡурҡыныс йән эйәһе? Ғилми әҙәбиәткә мөрәжәғәт итеү был һорауға күпмелер яуап алырға мөмкинлек бирә. Әлбиттә, беренсе нәүбәттә боронғо антик авторҙарҙың (Гомер, Павсаний, Овидий, Ювенал) яҙмаларында теркәлеп ҡалған мәғлүмәттәр, атап әйткәндә, бәләкәй буйлы кешеләр менән торналар (варианты — Стимфала ҡоштары — стимфалидтар) араһындағы һуғыш мотивы (326, 54—65) иғтибарҙы йәлеп итә. Мифтарға ҡарағанда, торналар — сәсеүлектәргә зыян килтереүсе ҡоштар, стимфалидтар иһә — хатта кешеләрҙе ашай торған яуыз йән эйәләре (326, 56, 63)[6]. Шулай ҙа ғалимдар боронғо мифтарҙағы торналар образын, уларҙың «ҡылған» эштәрен ысынбарлыҡҡа бәйләмәй, ә бәлки уйҙырма ҡараштар яҡтылығында аңлата. И. В. Шталь фекеренсә, мәҫәлән, торналар —ҡош сүрәтенә ингән үлектәр, дөрөҫөрәге, уларҙың йәндәре (326, 57), шуға ла торналарҙың күренеүе кешеләр күңеленә ҡурҡыу, шом

[6] Сәсеүлектәргә зыян килтереүсе торна мотивы башҡорт халыҡ ижады ерлегендә лә күренеп ҡала, әммә был мотив әҫәрҙең аҙағына тиклем дауам итмәй. Торна үҙенә рәхимлек күрһәткән әкиәт геройына ярҙам итеүсе, бүләктәр биреүсе, кеше телендә һөйләшә белгән йән эйәһе булараҡ һүрәтләнеш ала (43, 50).

һала. Ошоларҙы иҫәпкә алһаҡ, Ибн-Фаҙлан яҙмаларындағы легендала, бер яҡтан, төрлө ерлектә, төрлө ваҡытта яралған ҡараштарҙың береккән булыуын тоҫмалларға мөмкин булһа, икенсе яҡтан, бер үк архаик мотивтың заманалар үтеү менән төрлө йүнәлеш алып китеү ихтималлығын фараз ҡылырға була.

XX быуаттың 20-се йылдарында яҙып алынған «Сыңрау торна» исемле башҡорт легендаһында ла асылда ике йүнәлеш — ҡурғау һәм шом мотивтарының йәнәш килгәнлеге күренә.

Ифрат төҙөк сюжетлы, экспрессив йөкмәткеле был легенда үҙенең тәғәйенләнеше менән «Сыңрау торна» көйөнөң килеп сығыуын аңлатыуға ҡоролған. Ошо маҡсаттан сығып, әҫәрҙең тәүге, шаҡтай ҙур өлөшө легендар риүәйәт геройының тормошонда булған бер иҫтәлекле мәлде —уның сыңрау торналар менән осрашыу эпизодын — һүрәтләүгә бағышланған. Үҙен әсир иткән ғәжәп күренеш (торналарҙың сыңрауы һәм бейеүе) егеттең күңелендә тетрәткес бер тойғо уята, шуға ла ул, сыңрау тауышын отоп алып, уны ҡурай моңона һалырға ашыға. Әммә геройҙың күңелен тетрәткән был ғәжәп хәл тиккә генә булмаған икән: ил ҡарттары торналарҙың килеүен хәүеф әшкәртеү итеп ҡабул итә. Заманында атаҡлы батыр булып, күп яуҙар күргән егеттең атаһы ла ил аҡһаҡалдарының һүҙен ҡеүәтләй:

— Дөрөҫ, улым, сыңрау торна уйнаған ерҙә яу булыр, илгә бөлгөнлөк килер, тигән боронғолар <...> Хәҙер мин ҡартайҙым, көсөм дә ҡайтты, ҡоралдарымды һиңә тапшырам. Батыр бул, тоҡомға тап төшөрмә. Илгә килгән дошманды аяуһыҙ ҡыр, иленә, ырыуыңа тоғро бул, шунда ғына бәхетле булырһың. Васыят был. Хәҙер үк иң ышаныслы кешеләрҙән ғәскәр тупла... (55, 47.)

Артабан легенда шул һүҙҙе раҫлай: күп тә үтмәй, илде яу баҫа; бәлә килерен алдан белеп, ныҡлы әҙерләнгән халыҡ еңеп сыға.

Легенданың 1938 йылда яҙып алынған тағы бер вариантты билдәле. Уның сюжеты сағыштырмаса ябай, ваҡиғаларҙы эҙмә-эҙлекле хикәйәләүҙән бигерәк, аңлатмалар өҫтөнлөк ала. Төп мотивы тәүге варианттағыса. Тик сыңрау торналар тауышын ҡурай моңона һалған кеше —кәләш алырға

барған кейәү егете түгел, ә бер атаҡлы һунарсы. Торна — шомло ҡош мотивы был вариантта түбәндәге юлдарҙа сағылған: «Башҡорт ҡурайсылары араһында «Сыңрау торна» көйөн күп уйнарға ярамай тигән фекер йөрөй. «Яҡшыға булмаç», — тиҙәр» (55, 338). Ҡурғау идеяһы бында телгә алынмаған.

Ниһайәт, торналар хаҡындағы легендалар араһында йәнә бер әһәмиәтле текст бар, ул —«Ҡош юлы». «Булған» хәлде бик боронғо замандарға («Ул саҡта әле йондоҙҙар ҙа, Ҡош юлы ла булмаған») ҡайтарып ҡалдырған был мифологик легендала торналар тәбиғәт күренешен —Ҡош юлын —барлыҡҡа килтереүсе заттар булараҡ сығыш яһай. Бер йылды, улар йылы яҡҡа осҡан мәлдә, ел-дауыл ҡубыуы, шул арҡала бала торналарҙың аҙаша башлауы, оло торналарҙың балаларын ҡотҡарыу ниәтенән ҡауырһындарын сәсә барыуҙары, ҡауырһындарҙың йондоҙҙарға әйләнеүе, тороп ҡалған торналарҙың ошо йондоҙҙарға ҡарап ҡайтыуы, шул эҙҙән Ҡош юлы[7] хасил булыуы хаҡында һүҙ бара легендала (55, 39). Ел-дауыл, һауалағы ғәрәсәт, шул фонда осҡан торналар мотивы, ирекһеҙҙән, боронғо яҙмаларҙа теркәлгән мотивты — ярым ҡараңғылыҡта һәм томан эсендә осҡан, ҡыштан ҡасып барыусы ҡоштар мотивын, шул иçәптән, Геродоттың скиф еренән көньяҡҡа осоусы торналар тураһындағы мәғлүмәттәрен (326, 242) хәтергә төшөрә. Ҡыçҡаһы, легендаларҙың үҙҙәрендә һаҡланған мотивтар буйынса, төрлө халыҡтарҙың фольклор ерлегендә бөрөләнеп, антик яҙма сығанаҡтарға инеп киткән мәғлүмәттәр нигеҙендә торна сюжеттарының бик боронғо мифологик ҡараштар ерлегендә яралғанлығы билдәләнелә. Ошо ҡараштарҙан сығып барлыҡҡа килгән һәр төрлө ырым-ышаныуҙарҙың ярсыҡтары әлегәсә йәшәүен

[7] Был атаманың телдә «Ҡаҙ юлы» тигән варианты ла осрай, әммә беҙгә билдәле булған сығанаҡтарҙа уға бәйле легенда күренмәй. Бер үк легенданың ике төрлө ҡошҡа бәйләп һөйләнелгән булыуы ла ихтимал. Ғилми әҙәбиәттән билдәле булыуынса, Күк йөҙөндәге аҡ юлыҡ булып күренгән алыç йондоҙҙар төркөмөн «Ҡош юлы», «Ҡаҙ юлы» тип йөрөтөү төрки һәм фин-уғыр халыҡтары өсөн хас булып, уның таралыу ареалы Балтик буйҙарынан Тянь-Шань тауҙарына тиклем һуҙыла. Урта диңгеҙ ареалы халыҡтарында (ғәрәптәр, иранлылар, әрмәндәр, Балҡан славяндары, көньяҡ төркиҙәрендә) ул —«һалам юлы», Обь-Амур йылғалары араларында йәшәгән тунгус-маньчжурҙарҙа — теге йәки был ми-



дауам итә. Башҡорттар араһында киң билдәле булған «Торнаны үлтерергә ярамай» тигән ышаныу (203, оп. 32, д. 2, л. 50) — шундайҙарҙың береһе. Дөрөҫ, хәҙерге заман информанттарының күбеһе быңдай тыйыуҙың сәбәбен асыҡ итеп әйтеп бирә алмай. Йыш ҡына: «Тәбиғәт ҡошона теймәйҙәр», «Торнаны үлтереү—гонаһ, ти торғайнылар олатайҙар»,—рәүешендәге яуаптар менән сикләнә. Әммә элегерәк ҡағыҙға теркәлгән яҙмаларҙы, ҡайһы бер йолаларҙы тикшереү торнаға бәйле тыйыуҙарҙың ерлеген бер ни тиклем күҙалларға мөмкинселек аса. Р. Ғ. Кузеевтың «Үҫәргән ҡәбиләһенең бөтә дүрт ырыуы ла торнаны үҙенең ырыу ҡошо итеп иҫәпләп, уны үлтереүҙе ҡәтғи рәүештә тыя», тигән мәғлүмәте (158, 79—80) был йәһәттән айырыуса әһәмиәтле. Уның буйынса торнаның ҡәҙимге ҡош ҡына түгел, ә ырыу башлаусы, йәғни тотем ҡошо булып һаналыуы аңлашыла. Беҙҙеңсә, алда телгә алынған тыйыуҙың төп сәбәбе нәҡ шунда ла инде (тотем йәнлеген үлтереү тоҡомдо, ырыуҙы ҡоротоу тигән һүҙ бит).

фологик геройҙың «Саңғы эҙе», монголдарҙа һәм уларға күршеләш ҡайһы бер төркиҙәрҙә — «Күк еге», Азияның көнсығыш ярында йәшәүсе халыҡтарҙа (чукчаларҙан алып вьетнамлыларғаса) — «Йылға» («Күк йылғаһы», «Көмөш йылға», «Ҡомло йылға»...) тип атала. Ошо ғәжәйеп киң ерҙәрҙе эсенә алған космогоник «карта»ла фин-уғыр һәм төрки атамаларының бер ареал тәшкил итеүенә иғтибарын йүнәлтеп, В. А. Никонов хаҡлы рәүештә был күренештең фин-уғыр һәм төрки телдәре тарихындағы боронғо уртаҡлыҡтарҙы асыҡлауҙа мөһим бер факт булыу мөмкинлеген һыҙыҡ өҫтөнә ала (208, 148 — 149).

Тиләү ырыуы башҡорттарының мәжлестәрҙә, туй ваҡытында «торна» сығарыуы шулай уҡ сакраль мәғәнәгә эйә: торна ҡиәфәтендә[8] сыҡҡан кешенең бейеүе өйләнешкән йәштәргә түл, ырыҫ теләү ниәтенән башҡарылған.

Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты тарафынан ойошторолған фольклор экспедицияһы материалдарына (2005) ҡарағанда, туйҙа торна сығарыу йолаһы Ырғыҙ-Кәмәлек буйы башҡорттары араһында хәҙерге ваҡытҡаса килеп еткән. «Торна»ның ҡиәфәте кейем яғынан Учалы тиләүҙәр енекенән әллә ни айырылмай (эсен тышҡа әйләндер еп кейелгән тун). Әммә махсус рәүештә бөтә шартына килтереп әҙерләнә торған ритуаль предмет — «торна башы» күп осраҡта һәр кемдең өйөндә була торған ябай көнкүреш әйбере — тәртешкә, йә ҡыҫҡыс (йәмкә) менән алмаштырыла икән. Йоланың үтәлеү маҡсаты тәңгәлендәге өҫтәмә мәғлүмәттәр шулай уҡ ҡыҙыҡлы. Ҡунаҡтарҙы, ҡоҙағыйҙарҙы оҙатыр алдынан өйгә торна керетеүҙең башҡарылыу рәүеше түбәндәгесә (уны Һамар әлкәһе Оло Черниговка районының Күстән ауылында Н. Сафиуллиндан Розалиә Солтангәрәева яҙып алған):

[8] Ҡоштоң тышҡы күренеше иһә, беренсе нәүбәттә, ағастан эшләнгән торна башы иҫәбенә хасил була. 1 м самаһындағы оҙон таяҡҡа («муйынға») «суҡыштары» ҡыймылдап торған «баш» беркетелә (оҙонлоғо — 20 см, «күҙҙәр» түңәрәге диагональ буйынса 2 см). Аҫҡы суҡыштың уртаһынан оҙон еп бэйләнелеп, шул еп өҫкә «суҡыш»та эшләнгән тишек аша үткәрелә. Еп, урынынан тайпылып, бейеүсенең суҡыш шаҡылдауын хәтерләткән хәрәкәттәрен боҙмаһын өсөн, «баш»тың өҫке яғынан нәҙек ярыҡ һымаҡ юл юнып ҡуйыла (тәрәнлеге — 0,5 см). Шул һыҙыҡ юл аша еп «муйын» буйлап аҫҡа төшөрөлә. «Муйын»дың өҫкө өлөшөндә, түбәнән 10 см аҫтараҡ, урынлашҡан тимер ҡоршау ептең сығырҙан сыҡмауын нығыта. Аҡ йәки күкһел тундың эсен тышҡа әйләндер еп кейгән бейеүсе уның еңе аша бер ҡулы менән «торна башы»н тота, икенсеһе менән епте тартҡылай. Үҙе биленә тиклем бөгөлгән килеш торна хәрәкәттәренә оҡшатып йөрөй, бейей. Хәҙер быйдай бейеүҙәр онотолған. Башҡортостандың Учалы районы Сораман ауылынан Шәрәфетдинов Фәнис Фәйзулла улы тарафынан ошо юлдарҙың авторына 1993 йылда тапшырылған «торна башы» (маска) — уникаль ҡомартҡыларҙың береһе. Ул быға тиклем Шәрәфетдиновтарҙың ғаиләһендә һаҡланған. Информанттарҙың әйтеүенә ҡарағанда, торна маскаһы XIX быуаттың аҙағында эшләнгән булырға тейеш. Фәнистең күптән вафат булған олатаһының атаһы Шәрәфетдин Мотаһар улы ошо масканы тотоп бейегән (масканың һүрәтен 125-се биттә ҡарағыҙ). Маска Археология һәм этнография музейында (Өфө) һаҡлана.

«Оҙатыуға торна булып кейенеп керәләр. Тире тундың киреһен кейеп, оҙон ағастан суҡыш эшләп, ең аша сығаралар. Оҙон суҡышлы торна була, артҡа суҡлы шәл бәйләп ҡуялар — ҡойроҡ була, аҫтына мендәр бәйләйҙәр. Торна инде! Ҡоҙаларҙы суҡыйҙар. Береһе торнаны етәкләп йөрөй, ҡоҙаларға алып барып суҡыта. «Торна керҙе», тип аяҡ-ҡулдарын бөтәһе йыйнап ултыра.

Ошо ваҡыт бөтөн ашты ашап бөтөрөргә тейештәр, шуның өсөн итте услап алып һоғондоралар. Ашай алмаған берәйһе «ашаусы» яллай! Аҡса бирә, үҙе өсөн кеше яллай — ит ашаһын өсөн! Йәштәрҙе саҡыра ашатырға.

Торна кереү иң һуңғы —оҙатыу ашы. Хуш ашын өйҙәрендә атҡарыу өсөн бер йола ул. Теге торна: «Ҡу-ҡу! Ҡыу-ҡыу! — тип ҡыуып ебәрә ҡоҙаларҙы, ҡанаттарын ҡағып, суҡыштары менән суҡып йөрөй. Моронға тип (торнаның) кеҫәү, йә суҡыш тип таяҡ йә ҡыҫҡыс (йәмкә тибеҙ) ҡуялар» (312 а, 82).

«Торнаның» ҡоҙаларҙы ҡыуыу мотивын яҙып алыусы тотем ҡошоноң ҡурғаусылыҡ вазифаһы менән аңлата: «Журавль, на наш взгляд, действует как мифологический хозяин пространства, тотем-покровитель, которому по силе «прогнать» со своих земель чужаков» (273 а, 238). Былай тигәндә, автор мифологик ҡараштар көслө булған боронғо дәүерҙәрҙе күҙ уңында тота булыр.

Хәҙерге заман кешеләре йола атҡарғанда, уның тәрәндәге тамырҙарын уйлап, торнаға билдәле бер арауыҡтың (биләмәнең) мифик хужаһы итеп ҡарауҙары икеле, әлбиттә. Борон йола шундай ышаныуҙарға нигеҙләнеп башҡарылғандыр, әммә әлеге ваҡытта ҡайһы бер йолалар (ырым, имтом менән туранан-тура бәйләнеше булмағандары) ғәҙәт буйынса «ата-баба йолаһы» тип башҡарыла. Бынан тыш, бейеүгә, ритуаль хәрәкәттәргә, ҡиәфәт үҙгәртеүгә ҡоролған йолаларҙың тотороҡлолоғо уларҙың үҙенсәлекле бер тамаша, уйын күренеше булыуҙарына ла бәйле. (Был хәл әле һүҙ алып барған йоланың исемдәр енән үк күренеп тора: торна кереү/кертеү, торна сығарыу». Сағыштырығыҙ: «сәхнәгә сығыу».)

Сафиуллин һөйләүенән ҡағыҙға теркәлгән «текста» һорау тыуҙырған мәғлүмәттәр ҙә юҡ түгел: мәҫәлән, «оҙон

ағастан суҡыш эшләп, ең аша сығаралар». (Тимәк, тәртешкә, ҡыҫҡыстарҙан тыш, махсус эшләнгән ритуаль предметтар ҙа булған?) Яҙмала ваҡыт төшөнсәһенә ҡарата ла дөйөм рәүештә генә мәғлүмәт бирелгән («оҙатыу, хуш ашы»). Логик фекер йөрөткәндә, ҡоҙаларҙың көндөҙ билдәле бер ваҡытынан һуңламай юлға сығыуы фарыз (сакраль ваҡыт), юғиһә аштарын ашап өлгөрмәгәндәр, аҡса түләп* ашаусы яллар ҙар инеме? «Торнанан суҡылмаҫҡа тырышыуҙың берәй үҙенсәлекле мәғәнәһе юҡмы икән?

Ҡыҫҡаһы, беҙҙең халыҡтың ҡараштарында торна образы ифрат тоторо ҡло урын биләй. Торна булып ҡыланыу, уның өсөн бер иш әйберҙәр (тун, тәртешкә) ҡулланыу күренеше хатта балаларҙың уйын фольклорына инеп киткән. Курган әлкәһенең Сафакүл районында 2010 йылда фольклорсы Гөлнур Хөсәйенова яҙып алған «Торна» уйыны киң билдәле, «һуҡыр тәкә» уйыны һымаҡ, тик һуҡыр «торна»ның күҙҙәре яулыҡ йә шарф менән бәйләнмәй, ә тиҫкәре яғын өйләндереп, алдын артҡа ҡуйып кейелгән һарыҡ туны ярҙамында ҡаплана. Ең эсенә тығылған һул ҡул тунды баш аша алға төшөрә биргәс, тәртешкә тотҡан уң ҡул менән «һуҡыр ҡош» уйнаусыларҙы суҡырға йыйына. Суҡышҡа эләкмәҫкә тырышып тайшаныусыларҙың берәйһенә «торна» ҡағылһа, кейем шуға кейҙерелә — уйын йәнә дауам итә. Мәғлүмәт биреүсе Шәрәфетдинова Ғәлимә Фәхретдин ҡыҙының әйтеүенсә, был уйын тик ҡыҙҙар тарафынан уйналған.

Оҡшаш йолалар, хатта маскалар яһауҙағы ҡайһы бер уртаҡлыҡ (ағастан эшләнгән торна башы), көнсығыш славян халыҡтарының, атап әйткәндә, белорус һәм украиндарҙың, ижадында ла осрай. Торна уйындары был халыҡтарҙа Яңы йыл (рождественские святки) байрамдарында, туй, мәйет күмеү йолалары эсендә атҡарылған. Славян фольклорын өй-

* Әбйәлил районының Ҡужан ауылында туй бөткәнен аңлатып, сыбыртҡы һелтәйҙәр (сыбыртҡы менән ҡыуыу). Ҡыуған кешенең сыбыртҡы осона аҡса бәйләйҙәр. Аҡса түләп, хуш, «барынса һыйланыҡ, мәжлесте ябайыҡ» тигән мәғәнәлә былай тиҙәр: «Иҙел һыуы бал булһа ла, илгә етмәҫ; /Барын тапҡан оялмаҫ, /Юғын ҡунаҡ һорамаҫ (329а, 46). Күбәләк ырыуы башҡорттарының туй тамамланыуҙы белдергән ғәҙәте түбәндәгесә: «...Хуш итер алдынан ике-өс йәш кеше сығып, бер йыуан утын индерәләр. Көрәгәне ҡыйшайтып, утынды гөбө аҫтына һалалар. Был хөрмәт бөткәнде аңлата (Байым, Балапан ауылдарында). Беҙҙә (Ҡужанда) — хуш аяғы (шунда уҡ)».

рәнеүселәрҙең фекеренсә, борондан килгән бындай йолаларҙың нигеҙендә торнаның ырыу үҫтереү ҡөҙрәтенә (бәпесләүсе ҡатындар культы менән бәйләнешенә) ышаныу ята. Шул уҡ ваҡытта ғалимдар был ҡоштоң тереләр менән үлеләр донъяһы араһында йөрөүсе мифик йән эйәһе булып иҫәпләнеүен дә билдәләй (87, 75 — 76).

Көнсығыш славяндар менән башҡорттар ижадындағы оҡшашлыҡтың сәбәбе — халыҡтар араһындағы тарихи-мәҙәни бәйләнештәр менән аңлатыла. Көньяҡ Урал менән Ырғыҙ-Кәмәлек буйҙарында, Себерҙә йәшәгән башҡорттарҙан яңыраҡ яҙып алынған материалдарҙың мифологик нигеҙҙәре дөйәм алғанда, ярайһы уҡ асыҡ тоҫмалланһа ла, айырым мәсьәләләре артабан эҙләнеүҙәр талап итә.

Башҡорт легендалары һәм риүәйәттәре араһында ***аҡкош*** образына бәйле бер нисә хикәйә бар. Шуларҙың береһе этногенетик характерҙа булып, Юрматы ҡәбиләһенең килеп сығыуы хаҡында (42, 117).

Легенданың мотивы — традицион: сибәр ҡыҙға әйләнгән ҡошҡа һунарсы егеттең өйләнеүе һөҙөмтәһендә нәҫел таралыу, тик ырыу исеме аҡкош-ҡыҙ яғынан түгел, ә уға өйләнгән егет яғынан алынған: «Бер ваҡыт һунарҙа йөрөгәндә, Юрмый хандың берҙән-бер улы аҡкош атып алайым тип, уғын тоҫҡаған икән, теге аҡкош бик сибәр ҡыҙға әйләнгән дә ҡуйған. Егет быға өйләнгән. Уларҙан үрсегән нәҫел Юрматы ҡәбиләһе булып ҙурайып киткән» (160, 120; 42, 117). Әүерелеү мотивын «Бүреләр тоҡомо», «Әҙәм тарпаны» исеме легендар риүәйәттәр миҫалында күргәйнек инде. «Юрматы ҡәбиләһе» — шулар менән бер типта.

Әгәр халыҡ аңында торна кешеләргә һуғыш, яу хәүефен әшкәртеүсе ҡош булараҡ һеңеп ҡалған булһа, аҡкош аслыҡ, йотлоҡ килерен әшкәртеүсе йән эйәһе булараҡ билдәле. Был ҡараш «Ауыл арҡыры аҡкош уҙып китһә, аслыҡ булыр» (57, 433) тигән юрау мәҡәлендә сағылған. Аҡкоштоң ырыу башлап ебәр еүе, хәүеф иҫкәртә алыу һәләте хаҡындағы мәғлүмәттәр башҡорттарҙа был ҡошҡа ҡарата борон изгеләштерелгән мөнәсәбәт булғанлығын күрһәтә. Ошо мөнәсәбәткә ярашлы рәүештә, аҡкошто атыу башҡорт халҡында ҙур гонаһ итеп һаналған. Ул ҡараш әле лә тотороҡло йәшәй. Йылайыр районының Ҡаҙырша ауылы кешеһе

Игебаева Фәриҙә Хөснөлхаҡ ҡыҙынан 1982 йылда ошо юлдар авторы тарафынан яҙып алынған «Аҡҡошатҡантау» тигән риүәйәттә, мәҫәлән, Йыһангир исемле бер һунарсының аҡҡошҡа атыуы, үлгән ҡошто ҡулына алған көйө үҙенең телһеҙ ҡалыуы тураһында һөйләнелә. Бәлә бының менән генә сикләнмәй: күп тә үтмәй, ҡапыл ғына сирләп, Йыһангирҙең ҡатыны, бер аҙҙан һуң балалары үлеп китә. Йыһангир үҙе лә мандый алмай, торор торлағын ташлап, ил өҫтөндә йөрөй[9].

Башҡорттарҙың борон аҡҡошто изгеләштер еп ҡарағайлығы эпик ҡомартҡыларҙа ла бик асыҡ сағыла. Аллалаштырылған күк батшаһы Самрауҙың Ҡояш ҡатынынан тыуған һомай исемле ҡыҙы Урал батырға бер аҡҡош, бер сибәр ҡыҙ сүрәтендә осрап, уның изге эштәрендә ярҙамсыһы һәм теләктәшенә әйләнә. Урал үлгәс, һомай кеше ҡиәфәтенә инергә теләмәй:

Аҡҡош булып, түл йәйеп,
Аҡҡош тыуын үрсеткән.
Быны бары белгән, ти,
Һомай тоҡомо ҡоштар, тип,
Бер туғандай күрешеп,
Ау аулауҙан тыйышып,
Аҡҡош тотоп еймәҫкә, тип,
Үҙ-ара һүҙ ҡуйышып, —
Аҡҡош үрсеп киткән, ти (49, 130)[10].

Шуны ла әйтергә кәрәк, аҡкош тураһындағы башҡорт легендалары һәм хөрәфәттәр ендәге мотивтар төрки-монгол

[9] Информанттың әйтеүенә ҡарағанда, был ваҡиға беҙҙең заманда булған. Йыһангир һау сағында ауыл советы председателе, секретарымы булып эшләгән. Хәҙер инде вафат. Әлбиттә, былдай хәл була ҡалған булһа, Йыһангирҙың телдән яҙыуы үҙенең ҡылған эшенән тетрәүе һәм бик нык ҡурҡыуы һөҙөмтәһендә булыуы мөмкин, һунарсы булараҡ, ул аҡҡошто атырға ярамағанлығын, әлбиттә, белгән булырға тейеш. Шуны ла иҫкә алырға кәрәк, теге йәки был тыйыуҙың төп сәбәбе онотолған осраҡта, кешеләр йыш ҡына уны үҙҙәренсә, яңысараҡ итеп тә аңлатырға тырышалар. Хәҙерге ышаныуҙар буйынса, мәҫәлән, аҡҡошто атҡан кеше үҙе шәхси бәләгә тарый. Йыһангирҙең хәле насарайыуы бына ошо үҙенә бәлә килеү ихтималлығынан үтә нык ҡурҡыу ғәләмәте менән бәйле булыуы мөмкин. Риүәйәттең контексынан күренеүенсә, Йыһангир аҡҡош атырға тип сыҡмаған. Ул аҡҡоштарға осраҡлы рәүештә тап була, «<...> ҡарап тора ла, матурлығына ҡыҙығып, аҡҡоштоң береһенә атып ебәрә...» (203, оп. 73, д. 72, л. 251).

халыҡтарының легенда һәм ышаныуҙары менән бер типта. Мәҫәлән, бүрәттәрҙең хорин һәм хангин ырыуҙары аҡҡошто үҙҙәренең ырыу башы итеп иҫәпләй. Был хаҡтағы легендалар хатта йөкмәткеләре менән дә — һунарсының аҡҡошҡа өйләнеүенән тоҡом таралыу мотивы яғынан (292, 15)— башҡорт легендалары менән бер иш.

Монгол телле дербюттарҙың ышаныуы буйынса, аҡҡошто үлтереү оло гонаһ булып иҫәпләнгән. Уларҙа аҡҡошто үлтергән кеше үҙе үлә икән тигән фекер йөрөгән (223, 132). Аҡҡош яҡуттарҙа, себер татарҙарында ла изге ҡош һаналып, уны үлтереү ҡәтғи тыйылған булған (98, 130; 171, 23).

Аҡҡошто үлтергән кешенең үҙенә һәм ғаиләһенә бәлә килә тигән ышаныу шулай уҡ ҡырғыҙ халҡында бар (133, 117). Сыуаштарҙа аҡҡошто үлтереү әсәне үлтереүгә бәрәбәр һаналған (244, 19). Ошо миҫалдарҙан ғына ла, аҡҡош хаҡындағы ышаныуҙарҙың боронғо ерлеген, улар нигеҙендә барлыҡҡа килгән легендаларҙың уртаҡ тамырын күрмәү мөмкин түгел.

Легендалар, йола, ырым-юрауҙар борон башҡорттарҙа ***ҡарға, кәкүк культының*** булыуы хаҡында ла фекер йөрөтөргә мөмкинлек бирә. Ҡарғаға бәйле боронғо ҡараштар айырыуса Түңгәүер башҡорттары араһында киң таралған «Балаҡарға» көйөнөң легендаһы миҫалында асыҡ күренә. Был үҙенсәлекле легенданың ҡыҫҡаса йөкмәткеһе түбәндәгесә:

Имеш, бер ырыу менән икенсе ырыу һуғышҡан саҡта, бер башҡорт яуға ҡатыны менән китә. Юлда саҡта ҡатыны ул таба, әммә баланы үҙҙәре менән алып китергә мөмкин-

[10] Килтерелгән өҙөктә ике мөһим мәғлүмәт иғтибарҙы йәлеп итә: береһе — аҡҡоштоң тотем ҡошона бәрәбәр булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алыу («... Бер туғандай күрешеп, ау аулауҙан тыйышып»), икенсеһе — төрки-монгол, иран халыҡтарының мифологияһында юғары урын алған һомай (Умай, Убай, Ҡумай, Хумай, Ымай, Май) исемле Тәңренең башҡорт халыҡ ижады ерлегендә яңғырашы. Ғилми әҙәбиәттән күренеүенсә, һомай образы, уның ҡурғаусылыҡ вазифаһы төрлө халыҡтарҙа төрлөсә сағылған. Иранлыларҙа Хумай бәхет ҡошо, ул ҡоштоң күләгәһе тейгән кеше бәхеткә юлыға тигән ышаныу йәшәй (был мотив «һомайғош» исемле башҡорт әкиәтендә лә урын ала); үзбәк, ҡырғыҙ, хакас, шор халыҡтарының мифологияһында — бала-сағаны һаҡлаусы изге йән. Орхон төркиҙәрендә һомай кешеләрҙең үрсеүенә булышлыҡ иткән Әсә — Тәңре сифатында сығыш яһай (240, 52-97; 248, 182—186, 262—265).

лек булмағанлыҡтан, уны ҡарға ояһына һалып ҡалдыралар. Яуҙан ҡайтышлай балаларының һөйәген булһа ла ерләргә тип, ҡарға ояһы эргәһенә туҡтаһалар, ни күҙҙәре менән күрһендәр: оя ҡаҙандай итеп ҙурайтылған, ағас тирәһендә йөҙәрләгән ҡарға осоп йөрөй, ә бала, оянан аяғын һалындырып, ниндәйҙер көй көйләп ултыра. Атаһы улының көйөн ҡурайға һалып, уны «Балаҡарға» тип атаған, ти (203, оп. 63, д. 57, л. 15—16). Күренеүенсә, легендала ҡарғалар кеше тоҡомон ҡурғаусы, сабыйҙың ата-әсәһен алмаштырыусы мөғжизәле «тәрбиәсе» булараҡ һүрәтләнә.

Легенданың икенсе вариантында бала менән ҡарға араһындағы яҡынлыҡ айырата эмоциональ һүрәтләнә: ата менән әсә «сабыйҙарын ҡалдырған урынға килһәләр <...>,— балалары ағас ботағына тотоноп, баш осонда йөрөгән ҡарғаларға ҡарап, талпынып ултыра, ти.

Ҡарғалар баланы ата-әсәһенә бирмәй маташҡандар. Нисек етте шулай сабыйҙы ҡулға алып, юлға сыҡҡас та, ҡарғалар уны ҡурсып, ҡарҡылдашып, хәтһеҙ ер оҙатып киләләр. Бала ла ҡарғаларға ҡарап, ҡысҡырып илап барған, ти (55, 48).

Өсөнсө бер вариантта, ауыҙына ем ҡабып, ояһына табан осоп килгән ҡарғаны күргәс, илап ятҡан баланың тынысланыуы; әсәнең балаға үрелгәнен тойоп, ҡоштоң оя тирәләй хәүефле оса башлауы (268, 20—21) кеүек деталдәр — шулай уҡ тәрән тойғо уятмалы. Боронғолоғо яғынан улар бүре, эт имеҙеп үҫтергән сабый тураһындағы легендалар менән бәрәбәр. Хәйер, яланда ятып ҡалған баланы ҡарға ашатып, үлемдән ҡотҡарыу мотивы үҙе лә бит Урал регионы менән сикләнмәй. Ғилми әҙәбиәттән күренеүенсә, был архаик мотив, мәҫәлән, ҡытай легендаларында һаҡланып ҡалған. Усундәр (ҡытайса яңғырашында — вусунь) менән һундар бәрелеше ваҡытында үлтерелгән усунь батшаһының улына һундарҙың башлығы «мәрхәмәтлек» күрһәтә: үлтермәй, ләкин сабыйҙы далала ташлап ҡалдырырға бойора. Баланы тәүҙә ҡарға (ул суҡышы менән ит ташып, сабыйҙы ашата), унан инә бүре үҙенең һөтөн имеҙеп, һәләкәттән ҡотҡара.

Бындай мотив иран мифологияһында ла билдәле. Эпос геройы Рөстәмдең сәмреғош (симург) тарафынан үлемдән ҡотҡарылыуы алда телгә алынған легендалар менән ауаздаш. Х. Г. Ҡороғло, мифологик легендаларҙы сағыштырып, уларҙы боронғо иран һәм төрки мәҙәниәт бәйләнештәренең

сағылышы тигән фекерҙә тора. Ул ташланған сабыйҙы тәрбиәләп үҫтереүсе ҡош мотивы — ирандарҙан, бүре мотивы төркиҙәрҙән килә, тип иҫәпләй (143, 87—88).

Юллай китһәң, бәйләнештәр даирәһенең тағы ла киңерәк икәнлеге асыҡлана. Был йәһәттән, беренсе нәүбәттә, боронғо римляндарҙың Рем менән Ромул хаҡындағы легендалары хәтергә төшә: уларҙың бер вариантында ла бит йәш балаларҙы туйындырыуҙа бүренән тыш тумыртҡа ҡатнаша (121, 349).

«Балаҡарға» исемле башҡорт легендаһындағы архаика «ҡош-әсә» мотивы менән генә сикләнмәй. Боронғо кешенең үҙе менән тәбиғәт, ҡош-ҡорт араһындағы айырманы артыҡ күрмәүе легенданың үҙгәрештәргә ауырыраҡ бирелә торған шиғри юлдарында бигерәк тә яҡшы һаҡланған. Уларҙа тотемистик ҡараштар әсән генә хас булған кешенең йәнлеккә, йәнлектең кешегә әүерелә алыу мотивы ла сағылып ҡалған:

...һай...
Ҡара-ҡара, атаһы ла,
Тере булды балабыҙ,
Балабыҙ, балабыҙ.
Үлмәйенсә беҙҙе көтөп,
Ҡарға булған балабыҙ,
Балабыҙ, балабыҙ,
һай, күҙ нурым,
Ниҙәр күрҙең һин, балам,
һин, балам, һин, балам?.. (268, 21).

Кәрим Дияров яҙып алған вариантта:

Балаҡайым, ғәзизкәйем,
Булғанһың бит Балаҡарға, Балаҡарға,
Ата-әсәң ҡулындаһың,
Әйләнеп беҙгә ҡара, беҙгә ҡара.
Эй, тәрирә-тирә-тирәрәм дә,
Тәрирә-тирә-тирәрәм (55, 49).

Бына ул легенданың сере ҡайҙа! Яңы тыуған сабыйҙың оҙаҡ ваҡыт (бер вариантта ике ай буйы—203, оп. 12, д. 294, л. 67) ҡарға ояһында йәшәй алыуының сәбәбе уның ҡошҡа әүерелә алыу һәләтендә икән. Бынан тыш, сабыйҙы ағас башындағы ҡош ояһына урынлаштырыу үҙе лә бик боронғо

мотив, ул төрлө халыҡтарҙың мифологик легендаларында осрай. Бер яҡут мифында, мәҫәлән, ҡояшлы, йәм-йәшел аҡланда үҫеп ултырған ос ағаска (ҡыҙыл ҡарағай, граб, бук) инә бөркөттөң йомортҡа һалып китеүе, күпмелер ваҡыттан һуң шул йомортҡанан кеше балаһы (буласаҡ шаман) сығыуы, сабыйҙың түбәндәрәк ботаҡта эленеп торған бишеккә төшөп, шунда үҫеүе кеүек мөғжизәле хәлдәр тураһында һөйләнелә (143, 94). Баланың оянан бишеккә төшөрөлөүе, күрәһең, һуңғараҡ мотив, асылда иһә оя менән бишек мифтарҙа бер тигеҙ мәғәнәүи йөкмәтке йөрөткән образдар.

Баштарында изгелекле ҡош оялатҡан ағастар ҙа боронғо кешеләр аңында ҡәҙимге ағастар рәүешендә генә түгел, ә йән эйәләренең яралыу мөхите (яткылығы), изге терәге булараҡ (йәғни ағас-әсә мотивы) урын алған. Был күренеш бик күп халыҡтарҙың мифтарында, шул иҫәптән башҡорт легенда-риүәйәттәрендә, шәжәрәләрҙә сағыла. Мәҫәлән, Инйәр йылғаһы буйында урынлашҡан туғыҙ ауылда (Абҙан, Әйтмәмбәт, Аҙау, Ҡыҙғы, Тәүәкәс, Тимербай, Тирәкле, Оҙондар, Ҡыҙылъяр) йәшәгән башҡорттарҙы әле лә «ҡумырыҡ башҡорттары», «ҡумырыҡтар» тип йөрөтәләр: риүәйәт-легенда буйынса, улар ҡумырыҡ ағасы аҫтында табылған дүрт игеҙәктән таралған нәҫелдәр (42, 139). Ҡыпсаҡ ырыуы атамаһының барлыҡҡа килеүе тураһындағы риүәйәт-легендала шулай уҡ боронғо ҡараштар сатҡыһы күҙәтелә: нәҫел ебен башлаусы ир бала ағас ҡыуышында донъяға килә. «Ҡыпчаҡ юлда агач ҡыуышында туғанлығы өчен, аңа үзләренең ғадәтенчә «Ҡыпчаҡ» дәйү ат вирмешләрдер. Ҡәдим төрек телендә эче ҡыуыш ағачны ҡыпчаҡ димешләр» (41, 93).

Яу ғәрәсәте килгәндә ағас ҡыуышында сабый ҡалдырылыуы, уны ҡош-йәнлек ҡурғау мотивы Алтай халыҡтарының легендалары буйынса ла билдәле. (Е. М. Ямаева.)

«Балаҡарға» легендаһының боронғо ҡараштар юҫығында яралғанлығын иҫбатлаусы дәлилдәр эҙләгәндә, йола фольклоры үрнәктәрен, атап әйткәндә, ҡарғатуй йәки ҡарға бутҡаһы байрамдарынситләп үтеп булмай.

«Ҡарғатуй» — башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының борондан килгән йола байрамы. Был байрам, ғәҙәттә, яҙ көнө, ҡарғалар килгәс, ер ҡарҙан әрселеп, үләндәр йәшәргән ваҡытта үткәрелер булған[11]. Байрамса кейенгән ҡыҙ-ҡырҡын, бала-

сağа яланға, күл-йылға буйҙарына сығып, үҙҙәре нзгеләштереп ҡараған ҡарғалар хөрмәтенә бутҡа бешереп, уйын-көлкө, һый-хөрмәт ойоштorған. Байрамдың үткәрелеү рәүешенә тулыһынса туҡталып тормаҫтан, иғтибарҙы бер генә нәмәгә йүнәлтке килә. Уйын-көлкө тамамланып, ҡайтырға йыйналғас, халыҡ:

Ҡарҡылдашып килегеҙ:
һеҙгә бутҡа бирәбеҙ.
Йомошобоҙ күп түгел:
Йылға уңыш теләгеҙ.

Ҡарғалар!
Баҡсаларҙа алмағас
Ҡороно, ямғыр яумағас.
Баҡсаларҙа һис йәм юҡ,
Ямғыр яуып тормағас.
Ямғыр, яу, яу, яу!
Ҡарғалар!
һеҙ ҙә беҙҙең кеүек
Йыйылып һыйланығыҙ,
Ямғыр яуһын тип теләгеҙ (203, оп. 73, д. 25, л. 240), —

тигән һүҙҙәр менән ҡарғаларға мөрәжәғәт итеп, артып ҡалған бутҡаны ағас олондарына, таш өҫтәренә һылап китер булған. Ҡайһы бер әңгәмәселәрҙең әйтеүенсә, ризыҡты башта ҡарғаларға ауыҙ иттергәндәр:

һиңә түгел, ҡарғаға!
Ала ҡарға ашаһын,
Ала ҡарға ашамаһа,
Ҡара ҡарға ашаһын! —

11 Баймаҡ районының Түбә ҡасабаһында ҡурайсы Нурислам Шәйхетдиновтан Ғата Сөләймәнов яҙып алған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, «Ҡарға бутҡаһы» яҙғы сәсеүҙән һуң бер нисә көн үткәс уҙғарылған. Ашлыҡ сәскән көн һабандан ҡайтыусыларҙы ауылда ҡалған ҡыҙҙар, йәш килендәр һабан һыуына ҡойондорғандар (203, ф. 3, оп. 12, д. 269).

тип бер-бер еһенең ҡалаҡтарын һуғып төшөрә торғайнылар»,—тип һөйләгәйне беҙгә, мәҫәлән, 1987 йылда Әбйәлил районының Таҡһыр ауылында 83 йәшлек Мәҙинә Намаҙбаева (203, оп. 92, д. 13). Әлбиттә, ҡарғаларға бутҡа биреү — һуңғараҡ, кешеләрҙең тормошона игенселек хеҙмәте ингәс, барлыҡҡа килгән мотив. Уға тиклем был «мөғжизәле» ҡоштарҙың «күңеле», фольклор материалдарына ҡарағанда, икенсе төрлө ысул менән күрелгән булырға тейеш. Килтерелгән теләк һүҙҙәренән күренеүенсә, ҡарғаларға мөрәжәғәт йылға уңыш теләүгә ҡайтып ҡала, ә һуңғыһы — туранан-тура ямғыр саҡырыу теләге. Халыҡ аңындағы үҫеш һәм үҙгәрештәр нәҡ ана шул ямғыр саҡырғанда әйтелә торған теләк һүҙҙәрҙә сағылған да инде. Сағыштырығыҙ:

Ямғыр, яу, яу, яу!
Һимеҙ тәкә һуйырмын,
Итен үҙем ашармын,
Майын һиңә бирермен,
Һөйәген эткә ташлармын.
Ямғыр, яу, яу, яу!
Ямғыр, яу, яу, яу!
Майлы бутҡа бирермен,
Көмөш ҡашыҡ ҡуйырмын... (203, оп. 73, д. 25, л. 241).

Күренеүенсә, был теләк туранан-тура ямғырҙың үҙенә мөрәжәғәт итеү рәүешендә әйтелә. Әгәр ошоно Саян-Алтай халыҡтарының йолаһы менән сағыштырһаҡ,уларҙың функциялары яғынан ғына түгел, мәғәнәүуртаҡлығы лаяҡшы күренә. Шул уҡ ваҡытта үҙенсәлек тә юҡ түгел: беҙҙең халыҡтың теләк һүҙе туранан-тура ямғырға өндәшеү рәүешендә булһа, саян-алтайҙарҙыҡы — изгеләштерелгән Күккә мөрәжәғәт. «Туғыҙ япраҡлы ҡайын» тигәне «күк туғыҙ ҡатлы» тигән ышаныуға бәйле (төркиҙәрҙең ҡайһы бер ырыуҙары күкте 9 ҡатлы тип иҫәпләһә, икенселәре «Күк ете ҡатлы» тигән ҡарашта). Сағыштырығыҙ:

Качин телендә:

Тогус пурлуг бай казын, Тэрь!
Тогус кураган соктыбис, Тэрь!

Нангмыр сурлепчабис, Тэрь!
Урожай килепчабис, Тэрь!
Мал казык турзук, Тэрь! (229, 57).

Башҡортсаға тәржемәлә:

Туғыҙ япраҡлы изге ҡайын, Күк!
Беҙ туғыҙ бәрәс һуйҙыҡ, Күк!
Ямғыр һорайбыҙ, Күк!
Уңыш үтенәбеҙ, Күк!
Мал-тыуарыбыҙ имен булһын, Күк!

Тарихи әҙәбиәттән билдәле булыуынса, башҡорттарҙың тормошона игенселек хеҙмәте малсылыҡҡа ҡарағанда һуңыраҡ ингән. Шулай булғас, теләк һүҙҙәрендә сағылған ҡорбан мал мотивы боронғораҡ булып сыға. Хәйер, быны башҡорттарҙа «Теләккә салыу» (яланда ат һуйып, ямғыр теләү) йолаһы уҡ (203, оп. 73, д. 25, л. 241) аңғарта.

«Ҡарға буткаһы» байрамында башҡарылған ритуаль бейеүҙәрҙе, әүһәләй уйындарын, ата-бабаларыбыҙҙы иҫкә алып, доға ҡылыуҙарҙы ла күҙ уңында тотҡанда, «Ҡарғатуй» йолаһының сакраль мәғәнәһе йыл башын, уянған тәбиғәтте хөрмәтләп ҡаршы алыуға, ямғыр теләүгә генә ҡайтып ҡалмай, ә бәлки ата-бабалар рухын иҫкә алыуға ла бәйле булғанлығы тоҫмаллана (боронғо кешеләр уйлауынса, тәбиғәт уянғанда ата-бабалар рухы ла уяна, ә ҡоштар иһә ата-бабалар рухын, йәнен йөрөтөүсе заттар).

Башҡорт халҡының ырыу, ара, аймаҡ атамаларында ҡарға этнонимдарының осрауы (158, 53, 57) шулай уҡ ҡарға культынан килгән күренеш.

Ҡайһы бер яҙмалар буйынса, ҡарғаның борон тотем ҡошо булып иҫәпләнгәнлеге яҡшы аңлашыла: «Ҡаҙаҡкол [Учалы районы. — Ф. ***Н.]*** һәм башҡа ауылдарҙа ҡарға аймағы бар. Кеше уларҙы ***ҡара*** (черный) тигән һүҙ менән бәйҙәй [бәйләй]. Әммә был исем-атама ҡош исеменән сыҡҡан. Ҡарға ҡошона бәйҙе алар. Ата-бабалары, имеш, ҡарға булған аларҙың. Ҡарға-ата Умай ҡоштоң игеҙәге булған, тиҙәр» («Ватандаш», 2002, 6-сы һан, 165-се бит. Мәрхәбә Сәғит ҡыҙы Ғиззәтуллина яҙып ебәргән материалдарҙан). «Ҡарға — ырыу башлаусы» мотивы башҡа халыҡтарҙың ижадында ла асыҡ сағыла. Был йәһәттән шор, яҡут, тыва, Иртыш

буйы татарҙары һ. б. төрки-монгол халыҡтарының этнонимияһында ҡарға, ҡоҙғон атамаларының булыуы иғтибарҙы йәлеп итә (289, 53—54; 223, 218). Ҡарғаға бәйле легенда, әкиәттәр һәм археологик ҡомартҡыларҙы тикшереүсе ғалимдар был ҡоштоң боронғо төрки-монгол халыҡтарының тотем ҡошо булыуы хаҡында фараз итәләр (289, 53—54).

Әлбиттә, быуаттар төпкөлөнән төрлө кимәлдә килеп еткән мифологик ҡараш саҡтылары замандар үтеү менән үҙҙәренең ышандырыу көсөн юғалта баралар. «Ҡарғатуй» байрамының хәҙер йә бөтөнләй үткәр ел мәүе, үткәрелгән осраҡтарҙа ла йоланың магик функцияларына артыҡ иғтибар бирелмәүе нәҡ ана шул хаҡта һөйләй. «Балаҡарға» легендаһы ла, нигеҙҙә, әкиәт һымағыраҡ ҡабул ителә. Йырҙың булған хәлгә таянып ижад ителгәнлегенә ышандырыу өсөн хикәйәгә яңы образ индерелә, ул —ҡарға ояһында ҡалдырылған баланы үлемдән ҡотҡарыусы Юлтый ҡараҡ образы (күренекле ҡурайсы һәм йырсы Ишмулла Дилмөхәмәтовтың ошо юлдарҙың авторына һөйләгән варианты).

Әммә был урында шуны ла билдәләү фарыз: халыҡ хәтере тигән төшөнсә —ысын мәғәнәһендә бөйөк төшөнсә, феноменаль күренеш. Ул бер ерҙә юйыла, төҫһөҙләнә төшһә, икенсе ерҙә сағыуланып, үҙенең яңы һыҙаттарын асып, ялғанып китә («Халыҡ хәтере иҫкермәй», тип боронғолар юҡҡа ғына әйтмәгән бит). Мәрхәбә Ғиззәтуллинаның Күбәләк-Тиләү, Тамъян ырыуы башҡорттарынан яҙып алған материалдары ғына ла уҡыусыны ҡарға образына бәйле әллә күпме ырым-ышаныуҙар, миф ярсыҡтары менән таныштыра. Ҡарға аймаҡтарының килеп сығышы хаҡында һөйләгәндән һуң, информант түбәндәге мәғлүмәттәрҙе килтерә:

«Ҡарға кешене кеше иткән, тиҙәр: <u>телгә өйрәткән, үт табып биргән ҡояштан</u> (аҫһыҙыҡ беҙҙеке. — ***Ф. Н.).*** Шуңа ла, имеш, ҡояш нурҙарында көйөп, ҡап-ҡара булған. Ул яуыз ниәттәрҙән һаҡсы ҡош. Аның ҡанатҡайҙары өйҙө, кешене, малды ҡурсалап тора. Аның ҡанатҡайҙары баш ауырыуҙарынан, күҙ тейеүҙән, ҡарғыштан ышыҡлай. Тәнде ҡарға ҡанаты менән һыйпау, күренмәгән ергә-кейемгә тегеп ҡуйыу, һүрәтен әйбергә төшөрөү, итен ашап та ауырыу-сырхауҙан ҡотолғандар <...> Әгәр кешене кемдер рәнйеткән

булһа, ул ҡарға ҡарҡылдағанда алғыш[12] әйтһә, теге әҙәмбәндәләргә ҡарғыш төшә. Ҡарға берәүгә күренһә, аш бирәләр, теләк әйтеп: «Баҫыуҙа күберәк иген уңһын!» —тип. Ҡарғалар күбәйеп китһә, ҡыҫҡырып әйтәләр: «Ана килә бабай-ел, һин, ҡарға, саманды бел!»

Әле әйтәләр: «Ҡарға күҙен ҡарға соҡомай», — тип («түрә түрәгә теймәй» — мәғәнәһе). Әгәр быны әйткәнде ҡарға ишетһә, йәки шул ваҡытта ҡарҡылдаһа, был түрәнең тормошо ормошҡа әйләнә. Үлем ғазабында ҡарға тегенең күҙен соҡой. Шуға гонаһтарҙы ҡаптар [ҡаплар] өсөн, күҙҙең сырағы ялтырап ятмаһын өсөн, күҙгә биш тин аҡса һалыу йолалары бар».

Мәғлүмәт биреү ҡеүәһе яғынан килтерелгән өҙөктөң ҡиммәте баһалап бөткөһөҙ. Сағылған архаик ҡараштар даирәһе бында ифрат киң: ҡарға — ырыу башлаусы, демиург, мәҙәни (культур) герой һыҙаттарын йөрөтөүсе изге йән эйәһе, ҡурғаусы; кешеләрҙең яҡшы һәм яман ҡылыҡтарын күреп тороусы ҡош. («Ватандаш»та баҫылған был материалға тағы һуңғараҡ бер туҡталырбыҙ әле.)

Моңло саҡырыуы, йомортҡа баҫып бала сығармауы арҡаһында башҡа ҡоштарҙан ныҡ айырылып тороусы ***кәкүк*** шулай уҡ элек-электән кешеләрҙең иғтибарын үҙенә тартып, төрлө легендалар, ышаныу һәм юрауҙар барлыҡҡа килеүгә сәбәпсе булған. Кәкүк —кеше затынан тигән ҡараш бик күп халыҡтарҙың легендаларында урын алған (304, 40; 164, 85). Башҡорт легендаларынан күренеүенсә, кәкүк — кеше, ҡатынҡыҙ затынан яралған йән эйәһе, һөйгәне Кәкүктән айырылған ҡыҙҙың сикһеҙ зарығып теләк теләүе («Эй, ҡош булып осоп ҡына барһам ине яндарыңа!»), шул теләктең ҡабул булыуы арҡаһында тыуған драматик күренештәр легендаларҙа ғәжәп тәрән психологик көсөргәнеш менән һүрәтләнә:

«...Ҡыҙҙың теләге ҡабул булған: бер саҡ күҙ алдында бәләкәсәйә барған был. Ҡулдары урынына ҡанат үҫеп сыҡҡан. Ҡошҡа әйләнеп, тимер рәшәткәле зиндан тәҙрәһенән

[12] «Алғыш» тип, ғәҙәттә, изге теләккә ҡарата әйтелә. Информант бында терминға иғтибарһыҙлыҡ күрһәтәме, әллә теләк һүҙен синоним рәүешендә ҡулланамы — әйтеүе ҡыйын. Яман теләк иһә «ҡарғыш» исеме менән йөрөй.

иреккә осоп киткән. Ағастан ағасҡа, сусаҡтан сусаҡҡа осоп ҡунып, «кәк-күк», «кәк-күк» тип һөйгәнен саҡыра икән был. <...> Йоморҭҡа һалһа ла, уны баҫып сығарырға һис түҙемлеге етмәй, һәр саҡ һөйгәнен эҙләй, ти, ул. Сәскә атҡан мәлдә ул һаман моңайып, һөйгәнен саҡыра, сәскәләр һулығас, теленән дә яҙа хатта <...> Ана шулай гел генә «кәккүк» тип саҡырып йөрөгән ҡошто халыҡ «кәкүк ҡошо», ә теге ҡыҙыл сәскәләрҙе «кәкүк сәскәһе» <...> тип атап алып киткән» (55, 45). Легенда буйынса, ҡан төҫөндәге сәскәләр ҡыҙға һөйгәненең үлемен әшкәрткән.

Легенданың икенсе вариантында шул уҡ теләктең ҡабул булыуы (һүҙҙең магик көсөнә ышаныу һөҙөмтәһендә тыуған бик архаик мотив) үҙәк урында тора. Был вариантта кәкүктең килеп сығыуы тураһындағы хикәйәләүҙән тыш, тағы бер этиологик мотив — кәкүктең бер яҡ ҡанатының ни өсөн һалпы булыуын аңлатыу моменты бар: һалпы ҡанат— теләк теләгән ҡыҙҙың үрелмәй ҡалған сәс толомо икән (55, 46).

Шулай итеп, легендаларҙан күренеүенсә, кәкүктең барлыҡҡа килеүе бәлә-ҡаза, үлем фажиғәһенә бәйле ваҡиғалар яҡтылығында һүрәтләнә. Халыҡ аңында кәкүк моңло, бәхетһеҙ ҡош булып иҫәпләнеп, уның саҡырыуы айырым осраҡтарҙа (торлаҡ тирәһендә, йә теге йәки был кешенең баш осонан үтеп китһә), үлем әшкәртеү билдәһе булып ҡабул ителә. «Ике кәкүк күрше ҡысҡырһа, ҡаза килер», «Кәкүк өй башына ҡунып ҡысҡырһа, өй хужаһы үлә» (57, 434) тигән ышаныуҙарҙы әле лә ҡарттар ауыҙынан ишетергә мөмкин. Йорт тирәһендәге ағасҡа, ҡаралтыға кәкүк ултырып ҡысҡыра икән, был инде йорт хужаһына ҙур хәүеф килерен хәбәр итеү, тип аңлатыла. Ҡайғы, бәлә-ҡазанан һаҡланыу йөҙөнән кәкүк ултырған ағасҡа, бағанаға һөт йә булмаһа ҡатыҡ ҡойоу йолаһы бар. Был, һис шикһеҙ, бик боронғо йола булырға тейеш, уның нигеҙендә кәкүккә табыныу, уға саҙаҡа, ҡорбан килтереү кеүек ҡараш-хөрәфәттәр сағыла. Йорт тирәһенә килгән кәкүкте хатта төштә күреү ҙә кеше күңеленә ҙур хафа һалған: «Төштә кәкүк саҡырыуын һәм өй башынан үтеп китеүен күрһәң — мәйет күрәһең», — тип һөйләй, мәҫәлән, Бөрйән районында йәшәүсе Уразаева Мәсхүҙә Ғәйнислам ҡыҙы (301, 143).

Кәкүк тауышы шом тойғоһо уятҡанлыҡтан, бәлә-ҡазанан, хәүефле хәлдәрҙән ҡотолоу маҡсатында, кешеләр торло ырымдар, теләктәр ярҙамында бәләне кире ҡайтарырға, булдырмаҫҡа тырышҡан. «Башҡорт халыҡ ижады» баҫмаһының йола фольклоры томында донъя күргән материалдар быны асыҡ күрһәтә:

«Кәкүк тауышын ишеткәс тә, тауыш килгән яҡҡа ҡарап, өс тапҡыр тәгәрәргә кәрәк, һәр осраҡта ла шулай итһәң, килешә». Кәкүк тауышын ишеткәндә:

Тәнемдең һаулығын бир,
Йәнемдең һаулығын бир,
Тәнемдең зәкәтен бир;
Илдең именлеген бир!
Күпте күрҙем. Алда ла
Тағы күпте күрергә
Насип булһын! —

тип, ҡайҙа торһаң —шул яҡҡа ҡолап, тәгәрәп китеп, услап тупраҡ алырға. Шул тупраҡ бөтә рәнйеүҙәрҙән дә килешә. Уны тупһа аҫтына һалһаң, төрлө бәлә-казанан һаҡлай» (Ырымбур әлкәһенең Ҡыуандыҡ районы Рысай ауылы кешеһе Исламғолова Йомабикә Дәүләткол ҡыҙының (1915 йылғы) фольклор белгесе Әхмәт Сөләймәновҡа һөйләгәне).

Көньяҡ-көнсығыш башҡорттары араһында әле булһа кәкүккә арналған ритуаль бейеүҙәр йәшәй. Хәйбулла районында ҡағыҙға теркәлгән яҙмаларҙан күренеүенсә, был ритуалдың башҡарылыу рәүеше түбәндәгесә: «Кәкүк» тигән башҡорт халыҡ көйөнә бер төркөм бейеүсе, кәкүк хәрәкәттәре яһап, бейергә төшә. Бер аҙҙан һуң бейеүселәрҙең береһе, кәкүккә «мөрәжәғәт итеп», оҙон йыр башлай:

Саҡырма ла, кәкүк, ай, ҡашымда,
Саҡырһана ағас башында.
Уңлы ла ғына һуллы ҡаптым тарта —
Ни булыр ҙа ғәзиз башыма?
Минең башҡайыма ник ултырҙың,
Бер-бер нәмә булыр микән ни?
Юраусылар юрап әйткәненсә,
Ғүмерем зая үтер микән ни?

Ике кәкүктең тиң саҡырыуы кеше күңеленә айырыуса ҙур шом һала, һәм бейеүсе, хәүефләнеп, былай тип йырлай:

Ике лә генә кәкүк тиң саҡыра,
Ҡыу ҡарағай башын шаңғыратып.
Азаматтар яуҙан ҡайтыр микән,
Киткән юлҡайҙарын яңғыратып?

Йырҙан һуң тағы ла бейеү башлана, тик бында бейеүсе үҙен үҙе «үлтереп», тән ағзаларын шунда ҡатнашҡан кешеләргә («кәкүктәргә»!) өләшеү хәрәкәттәре яһай: «Мә, һиңә аяғым, һиңә ҡулым, һиңә күкрәгем... аша!» (203, оп. 73, д. 72, л. 254).

Ошо рәүешле ырым, ритуаль бейеү менән кеше үҙ үлеменә «кәртә ҡуйған», яман хәбәр килтереүсе ҡошто «алдап», үҙенең күңелен тынысландырған.

1990 йылда Ейәнсура районының Иҫәнғол ауылында ҡурайсы Нәжметдин Танһыҡхужа улы Хәсәновтан яҙып алынған мәғлүмәттәр кәкүк бейеүҙәренең башҡарылыу рәүешен һүрәтләүе менән әһәмиәтле: «Бейеүсе, ҡош һымаҡ, ҡулдарын йәйеп бейей. Көйҙөң «Кәк-күк! Кәк-күк!» тигән өлөшөндә кәзәкейенең сабыуын тота ла, ҡулдарын артҡа ҡайырып, янбашына һала. Сабыу осон тотоп, бер-береһенә тейеп торған ҡулдар кәкүктең ҡойроҡ осон хәтерләтә. Ҡулдарын ошо хәлдә тотҡан килеш бейеүсе кой ыңғайына алға иңкәйә, аҙаҡ, артҡа ҡайҡая биреп: «Кәк-күк!» тип ҡысҡырып, хәрәкәтте өс мәртәбә ҡабатлай. Ҡатын-ҡыҙҙар иһә яурын баштарына уртаға бөкләнгән шәл һалып бейей. «Кәкүк ҡойроғо»н күрһәтергә кәрәк булғанда, шәл остарын услап, ҡулдарын артҡа һала».

Сирғол ауылынан ҡурайсы Искәндәров Батырйән Сәхиулла улы күрһәткән бейеү хәрәкәттәре лә Нәжметдин Хәсәнов күрһәткән бейеү хәрәкәттәре менән тап килә. «Кәкүк бейеүҙәре 50-се йылдарҙа бар ине әле», — тине ул. — Шәмсетдин Исхаҡ улы Иҙрисов тәүҙә «Саҡырмаҫы, кәкүк» көйөн йырлап торор ҙа шунан үҙе үк «Кәкүк бейеүе»н бейеп китер ине. Был 1938—1940 йылдар тирәһендә булды»,—тип ауылдашының һүҙен ҡеүәтләне ҡурайсы Уйылдан Арыҫлан улы Абызов (1911 йылғы).

Ейәнсура ҡурайсылары һөйләгән бейеүҙәр менән Хәйбулла тарафтарында башҡарылған ритуаль йыр-бейеүҙәрҙең бер юҫыҡтағы күренеш булғанлығы шик тыуҙырмай.

«Саҡырмаҫы, кәкүк» **көйөнөң** йырҙары ла төрлө вариантта йөрөй. Йола атҡарғанда һәр йырсы ул йырҙарҙың үҙ хәленә, үҙ кәйефенә тура килгәнен башҡарған, күрәһең. Быны түбәндәге юлдарҙан аңларға була:

Ҡысҡырмасы, кәкүк, ай, ҡаршымда,
Ҡысҡырһаңсы ағас башында.
Ҡарсығаҡай кеүек моңһоҙ инем,
Ҡайғы-хәсрәт төштө башыма.

Шул уҡ көньяҡ-көнсығыш башҡорттары араһында «Кәкүк сәйе» тигән ҡатын-ҡыҙҙар байрамы ла бар. «Ҡарға бутҡаһы»ндағы кеүек, кәкүк сәйендә лә ҡатын-ҡыҙҙар, баласаға кәкүк килгәс, ҡырға сығып, сәй эсеп, йомортҡа ашап, бейеп ҡайтҡандар. («Талпына-талпына кәкүккә оҡшатып бейей торғайнылар».)

Әбейҙәр кәкүк саҡырған ағасҡа һөт-ҡатыҡ ҡойған, илгә именлек, үҙҙәренә һаулыҡ, ғүмер теләгән. Ир балалар ағас төбөнә йомортҡа тәгәрәткән. (Ышаныуҙарға ҡарағанда, кәкүктең үҙенең йомортҡаһына («кәкүк күкәйенә») тейергә ярамаған: рәнйеше көслө була.)

«Кәкүк сәйе»нең үткәрелеү рәүешенә ҡағылған яҙмалар араһында фольклорсы Гөлнур Хөсәйенованың Бөрйән районынан алынған бер мәғлүмәте үҙенсәлекле. Ғәҙәт буйынса, бында «Кәкүк сәйе»нә тик ирҙәре һуғышта үлгән ҡатындар ғына йыйылған. Ирҙәре аҫылынып үлгән, айырылған ҡатындар ҡатнаштырылмаған. Сәй эсеү, кәкүк бейеүҙәрен башҡарыу мотлаҡ тау башында атҡарылған. Тәбиғәткә сығыу ваҡыты —май аҙағы.

Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, информанттың һөйләгәнендә йоланың этимологияһына ҡағылышлы мәғлүмәттәр юҡ. Тол ҡатындарҙың тау башында «Кәкүк сәйе» уҙғарыуы (тау боронғолар аңында күккә «яҡын» урын булып иҫәпләнгән), бәлки, ирҙәренең инде «күккә осҡан» йәндәре менән үҙенсәлекле «аралашыу», әруахтарҙы иҫкә алыу ниәтенән эшләнгән бер сара булғандыр. «Кәк-күк! Кәк-күк!» — тип

саҡырып, талпына-талпына бейеүҙәре аша яңғыҙлыҡ ғазаптарынан яфаланған ҡатындар үҙҙәренең һағыштарын белдерткәндәрҙер, ҡайғыларын таратырға тырышҡандарҙыр. 1984 йыл Баймаҡ ҡурайсыһы Кәрим Дияров менән кәкүк көйҙәре хаҡында фекер алышып ултырғанда, уның: «һалдатҡалар сәстәрен туҙҙырып, «кәк-күк, кәк-күк», тип ҡысҡыра-ҡысҡыра бейегәндәр, ергә ятып, аунап-тәгәрәп илағандар», — тигәне хәтеремдә ҡалған. Уйлап ҡараһаң, был мәғлүмәттәрҙең үрҙә телгә алынған легенда мотивтары менән дә ауаздашлығын аңламау мөмкин түгел. Әлбиттә, был йолаларҙың боронғо мәғәнәһен белеүселәр хәҙер бик аҙ. Йолаларҙың башҡарылыу рәүешендә лә, ихтимал, бик ҙур үҙгәрештәр барҙыр. Ләкин нисек кенә булмаһын, уларҙың тамырҙары бик боронға, мәжүсилек ҡараштар системаһына барып тоташа, бигерәк тә бейеү ритуалдары боронғо. Ғилми әҙәбиәттән билдәле булыуынса, йәнлек бейеүҙәре борон бөтә ерҙә лә киң таралған булған (266, 38).

Аҙаҡ килеп, боронғо башҡорттарҙың кәкүкте алдан һиҙә белеүе, аҡыллы йән эйәһе итеп ҡарауы тағы бер деталдә бик асыҡ сағылған. Ҡалған ғүмерҙең күпмелеген белер өсөн халыҡта: «Кәкүк, кәкүк, минең ғүмерем нисә йыл?» —тип, кәкүккә мөрәжәғәт итеү бар. Ошолай тигәндән һуң, кәкүк нисә ҡабат ҡысҡырһа, кеше шул тиклем йәшәй була, йәнәһе.

Хәйер, бындай ышаныуға нигеҙләнгән «Кәкүк» исемле легенда ла бар. 1930 йылда Баймаҡ районының Беренсе Төрөкмән ауылында Фәттәх Ҡыуандыҡовтан Ғата Сөләймәнов яҙып алған был сюжетта эргәһендә кәкүк саҡырған егеттең һыуға батып һәләк булыуы, һөйгән ҡыҙының иҫтәлек итеп «Кәкүк» тигән көй сығарыуы хаҡында һөйләнелә (203, оп. 12, д. 269, л. 13-17).

Легендалар һәм хөрәфәти материалдар күрһәтеүенсә, тотош ил-ырыуға килгән үлемесле яуҙы әшкәртеүсе сыңрау торна образынан айырмалы рәүештә, кәкүк күберәген шәхси бәхетһеҙлек, шәхси фажиғәне иҫкәртеүсе ҡош булараҡ сығыш яһай. Йырҙарға ҡарағанда, ике кәкүктең ҡуш саҡырыуы яу фажиғәһенә ишара рәүешендә ҡабул ителгән.

***Бөркөт*** образы —халыҡ аңында ир-егетлек, батырлыҡ символы. Был ҡошто изгеләштереп, уға табынып ҡарау шулай уҡ бик борондан килә. «Бөркөт тырнағын йөрөтһәң,

зәхмәт ҡағылмаҫ» тигән ырым —ана шул ҡараштың ябай ғына бер сағылышы.

«Аҡ яурын сал бөркөт» көйәнең легендаларында боронғо ҡараштар бик үк күҙгә бәрелеп бармай барыуын. Шулай булһа ла, уларҙы тик һунарсылыҡ һәнәренә бәйле тыуған ябай тормош-көнкүреш әҫәре тип кенә иҫәпләү дөрөҫ булмаҫ ине. Бөркөт балаһын ояһынан алып, йыйынға килгән һунарсының инә бөркөт тырнағынан үлеме (203, оп. 73, д. 72, л. 167—168) легенданың боронғо ерлегенә ишара яһауы мөһим бер күрһәткес булып тора. Боронғо ҡараштар буйынса, изге һаналған йәнлеккә, ҡош-ҡорттарға тейеү ҡәтғи тыйылыр булған, тотем ҡошон үлтереү кешенең үҙенә фажиғә килтерә тигән ышаныу йәшәгән. (Был хәл аҡҡош тураһындағы легендаларҙа һәм уларға бәйле этнографик материал миҫалында асыҡ күренгәйне инде.)

Бөркөттөң тотем ҡошо икәнлеген дәлилләй алырлыҡ мәғлүмәттәрҙе ҡайһы бер ырыу атамалары — этнонимдар аша алырға мөмкин. Был йәһәттән башҡорттарҙың Мең ырыуы эсендәге Меркет меңе тармағы иғтибарға лайыҡ. Хәҙерге заман әңгәмәселәренә (информанттарына) бик үк билдәле булмаған «меркет» төшөнсәһе төрки телле башҡа халыҡтарҙың ауыҙ-тел ижады буйынса асыҡлана. Алтай телеуттарының легендаларынан күренеүенсә, меркет —һул ҡанаты менән айҙы, уң ҡанаты менән ҡояшты ҡаплай алырлыҡ изге күк ҡошо. Телеуттар уға табынған. Был халыҡтың бер ырыуы меркет (бөркөт) исемен йөрөтә (143, 95). Ошоларҙы күҙ уңында тотҡанда, «меркет» атамаһының да, шул исемде йөрөткән ырыу тармаҡтарының да бик борондан килгәнлеге аңлашыла. Меркет этнонимының монгол, көньяҡ алтайҙар, ҡырғыҙ, үзбәк, нуғай, төрөкмән-салорҙарҙың (салор —бөркөт) ырыу-ҡәбилә эсендә осрауы ла (160, 311) был фекерҙе ҡеүәтләй.

Төрки-монгол халыҡтарының мифологик легендаларынан күренеүенсә, бөркөт — ҡатындар менән ғаилә мөнәсәбәтенә инә алыусы, ырыу башлаусы ҡош. Бөркөт-ир мотивы легендаларҙа төрлөсә яҡтыртыла: бер осраҡта бөркөттөң ҡатын кешенең төшөнә инеүе (йоҡо урыны тирәләй осоуы) һөҙөмтәһендә ҡатындың ауырға ҡалыуы бәйән ҡылынһа (ҡырғыҙ легендалары), икенсе осраҡта бөркөт йомортҡа-

һынан киләсәктә шаман булыр балалар яралыуы тураһында һөйләнелә (яҡут мифтары). Бүрәт легендалары буйынса, бөркөт кешеләрҙе яуыз көстәрҙән һаҡлау өсөн Тәңре тарафынан ергә ебәрелгән изге ҡош, уның шамандарҙы үҙ теленә өйрәтә алыу ҡөҙрәте бар. Улай ғына ла түгел, «ҡатын кеше менән ғаилә мөнәсәбәтенә инеп, нәҫел тарата алырға һәләтле» (143, 96—97).

Оҡшаш мотивтар фин-уғыр, атап әйткәндә, боронғо мадьяр (венгр) мифтарында ла урын ала. Һуңғыларының бер вариантында мадьярҙарҙың хазарҙар менән бәйләнештәрен сағылдырған деталдәр булыуы ҡыҙыҡлы (143, 97).

Бөркөт менән кеше араһындағы ғаилә мөнәсәбәтенән нәҫел таралыу мотивын йөрөткән боронғо мифологик легендалар беҙгә билдәле булған башҡорт материалдары араһында осрамай, әммә ҡайһы бер әкиәт сюжеттарында уның саҡтылары ярайһы уҡ асыҡ күренә (51, 293—303). Шуныһы мөһим, фольклор һәм этнографик сығанаҡтарҙың булған тиклеме лә (ырымдар, «Аҡ яурын сал бөркөт» риүәйәттәре, әкиәттәр, этнонимдар) бөркөт мотивына ҡағылған ҡараштарҙың сакраль мәғәнәгә эйә булғанлыҡтарына шөбһә ҡалдырмай.

* **

Ибн-Фаҙлан мәғлүмәттәренә (139, 131), шулай уҡ күп һанлы фольклор материалдарына ҡарағанда, боронғо башҡорттарҙың ***йыландарға*** табынғанлығы асыҡлана. Бигерәк тә йыландарҙың батшаһы булып иҫәпләнгән аҡ йылан хаҡындағы төрлө юрауҙар, хөрәфәти хикәйәләр иғтибарҙы тарта. Халыҡ араһында киң таралған бындай хикәйәләрҙең асылы шунан ғибәрәт. Имештер, аҡ йылан үтә һирәк осрай торған йыландарҙың береһе икән: ул тик бәхетле кешеләргә генә тап була. Уны осраҡҡан кеше арбау һүҙҙәре әйтеп, йылан алдына мотлаҡ аҡ яулыҡ йәйергә тейеш. Шулай эшләгәндә, аҡ йылан үҙенең алтын мөгөҙөн аҡ яулыҡ өҫтөнә һала ла, һөҙөмтәлә кешегә мәңгелек ырыҫ килә, ти (24, 46). Йыландар батшаһының үҙенә ҡул тейгеҙеү кешене ҡотолғоһоҙ фажиғәгә юлыҡтыра тигән ышаныу Дим буйы башҡорттары араһында әлегәсә бар. 1989 йылда Дәүләкән

районына ойошторолған фольклор экспедицияһы материалдары нәҡ шул хаҡта һөйләй. Бына уларҙан бер үрнәк: «Элгәре бер ҡыҙ аҡ йыланды үлтергән, ти. Аҡ йылан — йыландар батшаһы бит. Ҡыҙ аҡ йыланды үлтергәс, йыландар уны эҙәрлекләй башлағандар. Ҡыҙҙың ата-әсәһе уны аҡ кейеҙгә лә урап ҡараған. Йыландар барыбер сыҙатмағандар, ҡыҙҙы сағып үлтергәндәр» (203, оп. 92, д. 9, л. 223).

Аҡ йылан халыҡ аңында ер аҫты байлыҡтарын һаҡлаусы һәм уңдырыш символы булараҡ һеңеп ҡалған булһа кәрәк. Башаҡ йыйырға сыҡҡан әбейҙәрҙең аҡ йылан осрай ҡалһа тигән уй менән, баштарына аҡ яулыҡ ябынып, йә кеçәләренә аҡ ҡулъяулыҡ һалып иген яланына килеүҙәре, башаҡ йыйғанда ҡарабыраҡ, иçләберәк йөрөүҙәр е осраҡлы хәл түгел, әлбиттә. Уның нигеҙендә, һис шикһеҙ, «Йылан мөгөҙөн күргән бәхетле булыр» (57, 434) тигән бик боронғо ҡараш ята.

Яҙмаларҙан күренеүенсә, йылан мөгөҙөнә бәйле ышаныуҙар дөйөмләштерелгән рәүештә лә аңға һеңдерелгән, ундайҙарында йыландың төçөнә баçым яһалмай, аҡлыҡ символикаһы әйберҙәр төçө аша бирелә. Ҡарағыҙ: «Йылан күрһәң, алдына сығып ап-аҡ яулыҡ йә ашъяулыҡ ябырға, ти. Бәхетле кешегә йылан мөгөҙөн һалып китә була. Шул мөгөҙҙө аҡ сепрәккә төрөп, өй йәки ҡура егенә ҡыçтырып ҡуйһаң, бермә-бер ырыç арта, ти.

Табында һый өçтө-өçтөнә өçтәлеп торһа, ҡунаҡтар: «Хужаның мөлкәтенә йылан мөгөҙө ингәндер был!» —тип мәрәкәләй» (59 а, 137).

Икенсе бер яҙма буйынса, башҡорттарҙа йылан мөгөҙөнөң «күҙ бәйләү» көсөнә ышаныуҙар булған: «Йылан мөгөҙөн тапһаң, һине бер кеше күрмәй. Ҡапҡанан малын сығарып ебәрһәң, эйәһе малын күрә, һине бар тип тә белмәй. (Шунда уҡ.)

Йылан мөгөҙөнөң изгелегенә ышаныу башҡа халыҡтарҙың ижадында ла сағыла. Мәçәлән, сыуаштарҙың «Волга ҡайҙан башлана?» тигән әкиәт-легендаһында, татарҙарҙың ҡайһы бер хөрәфәти хикәйәләрендә йылан мөгөҙөнә эйә була алған кешенең ҙур шатлыҡ, бәхет тойғоһо кисер еүе тасуирлана (319, 354; 280, 354). Тикшеренеүселәрҙең

күрһәтеүенсә, боронғо төрки халыҡтарында мөгөҙ, ғөмүмән, илаһи көс символы булып иҫәпләнгән. Таш ҡаяларҙа һаҡланған мөгөҙлө Аллалар, шаман һүрәттәре шул хаҡта һөйләй J289, 56).

Йыланды ырыҫ килтереүсе йән эйәһе итеп ҡарау йылан ҡабығының /тиреһенең/ магик тәьҫиренә ышаныу күренешендә асыҡ сағыла: «Йылан ҡабығын һала. Йылан ҡабығын тапһаң, бәхетле булаһың» (309, 125). Ышаныуҙар буйынса, йылан тиреһе сирҙәрҙе дауалауҙа ыңғай һөҙөмтә бирә торған сара: «Йылан тиреһен өшкөрөп һалһаң, күҙ ауыртыуы бөтә». (Шунда уҡ.)

Хөрәфәти хикәйәләр, юрауҙарға ҡарағанда, туҙбаш йыланды, йорт тирәһенә килгән йыланды үлтереү ҡәтғи тыйыла. «Туҙбаш йыланды үлтерһәң, йортҡа ҡаза килә» (57, 434) тигән юрау, мәҫәлән, һәр ерҙә тиерлек билдәле. Бындай ышаныуҙар башҡа халыҡтарҙа ла бар (280, 354; 102, 58; 116, 185-187; 276, 15).

Юлайҡан туҙбаш йыланға ҡағылған бер мәғлүмәтте иҫкә төшөрөп китәйек. Ул беҙгә биология уҡытыусыһы Хәнә Ғәйфуллинаның 2004 йылда «Башҡортостан» газетаһында баҫылған (18 ноябрь һаны) «Йыландар төйәгендә» тигән мәҡәләһе аша билдәле булды: «...8—10 йәшкә тиклем туҙбаш йылан саҡмай, хатта түш кеҫәһендә, ҡуйында йөрөтөргә мөмкин, ә инде 10 йәште үткәс, туҙбаш кешене үлтергәнсе саға. Шуның өсөн дә боронғонан ҡалған мәҡәл бар: «Ҡара йылан саҡһа, ҡатыҡ һөрт, туҙбаш саҡһа, ләхет көт» —тимәк, үлем көт. (Яуыз уйлы теге йәки был кешегә ҡарата «ҡуйынында йылан йөрөтә» тип әйтеүҙең ерлеге бына ҡайҙа икән!) Туҙбаш йыланға ғәҙәти булмаған, йәғни сакраль, ҡараштың бөрөләнеүенең сәбәбе лә уның хәтәр көскә эйә була алыуын белеүҙә лә булған, күрәһең. Ышаныуҙар буйынса, йыландарҙы үлтереү, ғөмүмән, бик хупланмай. Был хаҡта миңә 1986 йылда Әбйәлил районының Салауат ауылында Мансурова Нәзифә Имәнғол ҡыҙынан (1898 йылғы) ишетергә тура килгәйне. Ул бер саҡ йорт тирәһенә килгән һорораҡ йыланды эҫе күмер, ҡайнар һыу менән үлтер еүенә әле булһа үкенеүе тураһында бәйән ҡылды. Ни өсөн тигәндә, шул (1930) йылда уның улы вафат була. Ошо уҡ информанттың «аҡ йылан һелкенһә, кеше ҡиәфәтенә инеп,

оҡшатҡан кешеһенә яҡшылыҡ, оҡшатмағанына (яуызға) насарлыҡ ҡыла» тигәне лә боронғо мифологик ҡараштарҙы сағылдырыусы әһәмиәтле мәғлүмәт (329а, 64).

Әйтеп үтелгәнсә, халыҡ хикәйәләре, нигеҙҙә, теге йәки был күренештең барлыҡҡа килеүен аңлатыуға ҡоролған була. Ни өсөн йорт тирәһендәге йыланды үлтерергә ярамауын Йылайыр районынан Фәриҙә Игебаева һөйләгән бер хөрәфәти хикәйә түбәндәгесә аңлата:

«Элегерәк бер кешенең ике ҡатыны булған. Ҡатындарының береһе ауырыу арҡаһында һуҡырайып ҡала. Бер саҡ хужаны күрше ауылға ҡунаҡҡа саҡыралар. Киткән саҡта көндәше һуҡыр ҡатынға һин дә ит бешереп аша, тип, бер ҙур ҡара йыланды үлтереп, ҡаҙанға һала ла, усаҡ аҫтына ут яғып китә. Һуҡыр ҡатын аш турталанмаһын тип, ҡаҙандағы «итте» һапырып-һапырып ҡайната икән. Ҡайнаған боҫҡа ҡарай торғас, бының күҙе яйлап-яйлап асыла, күрә башлай. Ҡараһа, ҡап-ҡара йылан бөртеп китеп бешеп ята икән...

Ире менән көндәше ҡайтыуға, теге ҡатындың күҙе тамам һауығып тора.

Шул ваҡыттан алып, кешеләр йорт тирәһенә килгән йә өй эсенә ингән йыланды үлтермәйҙәр, өҫтөнә һөт йәки ҡатыҡ һалһалар, үҙе сығып китә» (203, оп. 73, д. 72, л. 252).

Әлбиттә, һөйләнелгән хәлдең ысынлығына ышаныу ауыр. Әммә халыҡ медицинаһында, аҙаҡ фәнни медицинала йылан ағыуын билдәле миҡдарҙа дауа итеп файҙаланыу — шик тыуҙырмай торған факт. Кешеләр йылан ағыуының дауалау ҡөҙрәтен, күрәһең, бик күптән һиҙенгән һәм үҙҙәренең ошо белем емешен үҙенсәлекле хикәйә формаһында ҡалыплаштырған.

Борон башҡорттарҙа «Йылан ите ашаған кеше ат телен белә» тигән ышаныу ҙа йәшәгән. Был йәһәттән ошо юлдарҙың авторына фольклорсы Ниғмәт Шоңҡаров һөйләгән бер легенда ҡыҙыҡлы. Хикәйәне ул олатаһы Батталов Самат Баттал улынан (1870 йылғы) ишеткән: «Борон заманда Яйыҡһыбы ырыуының бер егетен сиғандар урлап алып китә. Бик йыраҡ юл үткәс, туҡталыш яһайҙар. Сиғандар ҡаҙанға ит бешерергә һалалар ҙа үҙҙәре ғыр-шар йоҡлап та китәләр.

Егет тора. Шундағы бер атты менеп, ҡасып китергә уйлай. Ат янына барһа —юҡ, ат яҡын да ебәрмәй. Шунан

егет бейеп янған ялҡынға ҡарап, уйға ҡала, ут-ялҡындан ярҙам-кәңәш һорай. Ялҡын: «Ҡаҙандағы итте тәмләп ҡара»,—тип кәңәш бирә. Егет ҡаҙандағы итте ашап ҡарайым тип алһа, ни күҙе менән күрһен, унда йылан-һайан бешерергә һалғандар икән. Егет бер киҫәген ашап ҡарай. Шунда уҡ егеттең тыңламаған аты эргәһенә килеп етә. Улар тиҙ генә һөйләшәләр ҙә, егет шул атҡа менеп, сиғандар арлы-бирле уянғансы, ҡасып китә» (203, оп. 73, д. 72, л. 255).

«Йылан ите ашау» мотивы «Йәне теләгән йылан ите ашаған» тигән мәҡәлдә лә һаҡланып ҡалған, дөрөҫ, бында ул жанрҙың тәбиғәтенә ярашлы рәүештә кинәйә мәғәнәлә ҡулланылған.

Башҡа күп халыҡтарҙың ижадындағы кеүек үк, башҡорт фольклорында ла йылан бер яҡлы ғына һүрәтләнгән образ түгел.

Йыландың хәтәр көскә эйә булыусы йән эйәһе икәнлеге—күп йыллыҡ тормош тәжрибәһе аша асыҡланған хәҡиҡәт. Шуға күрә кешегә зыян, бәлә килтереүсе йыландар хаҡында ла хикәйәләр байтаҡ. Уларҙың күбеһе хәҙер әкиәт характерын алып киткән. Сибәр ҡатын сүрәтенә инеп, төндә иренең үксәһенән ҡанын һурып, уны һарғайтыусы, сиргә һабыштырыусы юха йылан хаҡындағы әкиәт (51, 90) —бындай сюжеттарҙың типик өлгөһө.

Йылан арбау һүҙҙәре, төрлө им-том, ырымдар — күбеһе ҡасандыр шулай уҡ хөрәфәти хикәйәләр менән тығыҙ бәйләнештә йәшәгән булырға тейеш. Хәҙер уларҙың айырым ярсыҡтары, нигеҙҙә, шиғри ҡалыпҡа һалынған өлөштәре генә һаҡланып ҡалған. Улар, һис шикһеҙ, халыҡ ижадының архаик ҡатламын тәшкил итәләр. Хөрәфәти хикәйәләрҙә «йылан телен белеүсе» кешеләрҙең хатта яңыраҡ дәүерҙә лә осраштырғанлығы тураһында әйтелә (248, 25; 203, оп. 72, д. 73, л. 37). Был йәһәттән «Башҡорт халыҡ ижады»ның йола фольклоры томында баҫылып сыҡҡан бер хәбәрләмә, информант тарафынан мәғлүмәттең ысынлығына баҫым яһап һөйләнел еүе менән, иғтибарҙы айырыуса йәлеп итә: «Күҙәмәт ауылында бер ҡарт йәшәй торғайны. Шул кеше йыландар менән һөйләшә белә торғайны. Урманға барыр, йылан ояһын табыр, йыландарҙы саҡырып сығарыр ҙа улар менән һөйләшеп ултырыр ине. Өйөндә ултырған ерҙән са-

ҡырһа ла, йыландар килеп, һөйләшеп киткәндәрен күргәндәр». Шиғри формала йыланға мөрәжәғәт итеү («Йылан теле») өлгөһө:

Сәңке, сәңке, сәңке йылан,
Сәңке башлы ҡара йылан,
Атҡан уҡтан үткер йылан,
Аҡҡан һыуҙан рауан йылан,
Сағыр булһаң, саҡ, йылан,
Саҡмаҫ булһаң, ят, йылан,
Ятҡан ерҙән ҡат, йылан! (203, оп. 73, д. 25, л. 243).

Йыланды тынысландырыу, унан һаҡланыу ниәтендә, борон уның исемен алмаштырыу (эвфемизм) осраҡтары архаик ҡараштарҙы сағылдырыу йәһәтенән иғтибарға лайыҡ. «Йылан» тиһәң —илата, «ҡамсы» тиһәң —тик ята» (210, 124) тигән ырым —шуға бер миҫал.

Салауат районының Ҡалмаҡлар ауылында йәшәүсе 84 йәшлек Ситдиҡова Бибисара әбей яҙҙырған им-том рәүеше менән ҡөҙрәтле аҡ йылан, йорт именлеген ҡурғаусы туҙбаш йылан хаҡындағы легендалар араһында туранан-тура яңғырашлыҡ юҡ юҡлығын. Шулай ҙа йылан саҡҡан осраҡта башҡарыла торған ул им-томда йыландарға табыныуҙың, уларҙы кеше телен аңлай алыусы йән эйәһе итеп ҡарауҙың бер саҡҡыһын күрергә мөмкин. Йыландың тешен алып, йә һыҙырылған йүкә ағасы менән сағылған урынға тейҙерә-тейҙерә һамаҡлау ошондай һүҙҙәр аша атҡарыла:

Аҡ йылан,
Туҙбаш йылан,
Баҡыр йылан,
Саҡмар йылан,
Һыу кеүек ағыҙайым,
Көл кеүек туҙҙырайым (203, оп. 73, д. 25, л. 243).

Йыланды ҡөҙрәтле зат итеп ҡарағанға күрә, әүәлге замандарҙа йорт-ҡаралтыны, аҙбар-ҡураларҙы бәлә-ҡазанан һаҡлау ниәте менән, кәртәгә йылан ҡабығы йә йылан теше ҡыҫтырып ҡуйыр булғандар. Юл йөрөгәндә, ҡырға сыҡҡан осраҡтарҙа ла йыландан һаҡланыу саралары күрелгән: «Йылан

юлды ҡыйып үтһә йәки эргәнән генә үтеп китһә, әгәр уның үҙенең юлын ҡыйыу мөмкин булмаһа, ул киткән яҡҡа үлән йә ботаҡ өҙөп ташлайһың. Ташлағанда, уҡынырға кәрәк.

Йылан йылҡы малынан ҡурҡа. Уның тиреһе йылан өсөн ҡурҡыныс. Шуның өсөн дә ҡырҙа ятырға тура килһә, үңлек түшәп ятырға. Ятҡан ерҙе түңәрәкләтеп, дилбегә, эйәр, йүгән, ҡамыт һалһаң да, йылан килмәй, йыланды таяҡ менән түгел, сыбыртҡы менән үлтерәләр» (59а, 97).

Ниндәй генә материалды алып ҡарама, практик тормошта йыланға мөнәсәбәт, боронғо ышаныуҙарға таянып, ҡапма-ҡаршы ике төрлө ҡараш нигеҙендә формалашҡан: йылан — бер яҡтан ырыҫ, икенсе яҡтан бәлә-ҡаза, фажиғә килтереүсе йән эйәһе. Башҡорт этнонимия системаһында йылан ырыуы һәм араларының (Ҡыр йылан, Иҙел йылан, Эске йылан) булыуы (158, 56) был образды культ, тотем дәрәжәһенә күтәреп ҡарауҙың бер күрһәткесе (был күренеш легендаларҙағы боронғо ыңғай йүнәлештәге мотивтар менән ауаздаш) булһа, икенсеһе — йыланға кире мөнәсәбәт — йыланды яуыз көс булараҡ сығыш яһаусы йән эйәһе итеп ҡабул итеү әкиәт һәм ҡайһы бер хөрәфәти хикәйәләрҙә урын алған күренеш.

## «Йәнле» донъя: анимизм эҙҙәре. Тәбиғәт культы

Кеше аңындағы анимистик ҡараштарҙы сағылдырған легендалар халыҡ прозаһының ифрат ҡыҙыҡлы тармағын тәшкил итә. Был ҡараштар айырыуса күк есемдәре, тәбиғәт күренештәренең барлыҡҡа килеүе тураһындағы хикәйәләрҙә асыҡ күренә. Ундай легендаларҙың һәр береһендә борон кешенең ысынбарлыҡты серле көс, мөғжизә рәүешендә күҙаллауы сағыла. Шул уҡ ваҡытта был легендаларҙа боронғо кешенең донъяға монистик ҡарашы ла сағыла. Йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәттең берлеге, ер тормошоноң күккә, йыһанға күсерелеүе йәки, киреһенсә, Йыһан есемдәрен ергә төшөрөү—халыҡ хикәйәләре өсөн ғәҙәти күренеш. «Айҙағы ике януар» исемле легендала, мәҫәлән, айҙағы таптар ғүмер буйы бер-бер еһен ҡыуып йөрөүсе ике йәнлек рәүешендә

образлаштырылған. Легендаға ул йәнлектәр осраҡлы алынмағандар. Күп сюжеттарҙа тылсымлы зат итеп йөрөтөлгән бүре бында үҙенең тәбиғи яуызлығында алынып, бер-береһенә ҡушарлап бәйләнгән ҡоралайҙар образы алғы планға сығарыла. Ҡоралайҙың культ кейеге булыуы башҡа халыҡтарҙың ауыҙ-тел ижады әҫәрҙәре һәм биҙәү сәнғәте, археологик ҡомартҡылар миҫалында етерлек дәрәжәлә асыҡ сағылған. С. М. Абрамзондың тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, мәҫәлән, төрки халыҡтары фольклорында ул ырыу башлауысы изге йән-әсә булараҡ билдәле (2, 157). Башҡорт легендаһындағы ҡоралай образы ла, беҙҙең уйыбыҙса, ошо дөйөм ҡараштар системаһына инә.

Ә инде ҡоралайҙарҙың ғәҙәти булмаған торошта (бер-бер еһен һырттарына теркәп бәйләп «һигеҙ аяҡлы» мал рәүешендә) һүрәтләнеүе — этиологик мотивты (айҙағы таптарҙың күсеп тороуын, йәғни ундағы хәрәкәтте) аңлатыу, аҡлау өсөн алынған поэтик уйҙырма. Легендала ул бына нисек бирелгән: «...Йүгереп килгән ҡоралай, тауға һикерәм тип, айға һикерә лә ҡуя. Улар артынан килгән бүре лә ай битенә барып төшә.

Бына шунан ҡалған, ти, ул ай битендәге ике януар. Улар мәңге бер-береһен ҡыуышыр, ти. Тик ҡыуып барғаны һис тә етә алмай, ти. Ни өсөн тиһәң, алдағыһының аяғы һигеҙ; дүртеһе сапҡанда, дүртеһе һыртында ял итә. Арый башланы иһә, һыртына әйләнә лә тағы саба...» (55, 40).

Башҡорт легендаһы менән ауаздаш мотивтар һунарсылыҡ менән көн күргән Себер һәм Европаның төньяғында йәшәүсе халыҡтарҙың легендаларында киң урын ала. Бындай сюжеттарға заманында Г. Н. Потанин иғтибар иткән (225, 97). Реалиялар, деталдәрҙә айырма булһа ла (әйтәйек, ҡасып барыусы хайуан —болан йәки мышы, уны ҡыуыусы—бүре түгел, һунарсы), күк есемдәрендәге хәрәкәтте күрһәтеү мотивы — хайуанды ҡыуып барыу — һәр тарафта бер төрлө тиергә мөмкин.

Ай тураһындағы легендаларҙың икенсе бер төркөмөндә айҙағы таптарҙы көйәнтәле ҡыҙ образында күҙ алдына килтереү урын ала. Был сюжеттар өсөн айҙы кешеләштереп, йәнләндереп һүрәтләү (антропоморфизм күренеше) хас.

Легенданың элекке Минзәлә өйәҙе башҡорттарынан М. В. Лоссиевский тарафынан яҙып алынып, 1876 йыл «Оренбургский листок» газетаһында (24-се һан) баҫылған вариантты романтик йүнәлешле: бер сибәр башҡорт ҡыҙының айҙың матурлығына һоҡлана-һоҡлана һыуға барыуы, уның батырҙар тураһындағы хикәйәттәрҙе, әсәһенең бишек йырын иҫкә төшөрөп, татлы хыялдарға сумыуы күтәренке интонацияла һөйләп бирелә. Ҡыҙҙың айға күтәрелеү мотивы был вариантта түбәндәгесә: «...Күнәктәрен тултырып һыу алғас, ҡыҙ яр буйында тулҡындар сығарып ташлаған ҙур бер һөйәкте күреп ҡала. «Был, моғайын, бер батырҙың һөйәгелер инде. Ҡайһылай ҙур булған ул!» —тип уйлай. Үҙе шул ваҡыт, ирекһеҙҙән, айға ҡарап: «Әгәр минең ай кеүек ирем булһа, мин уға ошо батыр кеүек ул табып бирер инем»,— ти. Айға был һүҙҙәр бик оҡшай ҙа, ул ҡыҙҙы үҙенә тартып ала». Ихтимал, легенданың М. В. Лоссиевский яҙып алған вариантынан сығып, С. И. Руденко: «...башҡорттар айҙы ир заты образында күҙаллағандар» (247, 315),— тигән фекергә килгәндер.

Совет осоронда ҡағыҙға теркәлгән варианттар өсөн космогоник мотивты тормош-көнкүреш социаль йөкмәткегә төрөп тасуирлау хас. «Ай менән Зөһрә» исемле легендала, мәҫәлән, ай йәберһетелгән үгәй ҡыҙҙың һыҡтауҙарын «ишетеп», ергә нурҙарын ебәрә, Зөһрә ҡыҙҙы үҙенә алып, уны ауыр, яфалы тормоштан ҡотҡара (55, 42). Әле лә һәр төбәктә осраған был варианттың яҙмалары йөкмәткеләре менән, нигеҙҙә, бер рәүешле, әммә беҙҙең тарафтан 1990 йылда Әлшәй районының Ҡыпсаҡ-Асҡар ауылында 88 йәшлек Йәнгирова Фатима Муса ҡыҙынан яҙып алынған текст бер мөһим үҙенсәлеге менән айырылып тора. Был үҙенсәлек — Айҙың ҡатын-ҡыҙ образында һүрәтләнеүендә, етем баланың күк есеменә мөрәжәғәтенең ябай ғына көй менән һамаҡлап әйтелеүендә. Ай — ҡатын-ҡыҙ мотивы нәҡ ошо һамаҡ өлөшөндә сағыла ла:

Ай, инәкәйем, ал мине,
Ай, инәкәйем, ал мине!

«Инәкәйем» Дим һөйләшендә «әсәкәйем» тигәнде аңлата. Үгәй ҡыҙ мотивы — әлбиттә, һуңғараҡ, йәмғиәттә кәмһетелгәндәр, йәберһетелгәндәр барлыҡҡа килгәс, тыуған мотив, ләкин шулай булыуға ҡарамаҫтан, әҫәр үҙенең нигеҙе, топ мотивы (айҙы йәнләндереп һүрәтләүе менән) бик боронғо. Оҡшаш мотивтарҙың бөтә донъя фольклорында билдәле булыуы —үҙе генә лә теге йәки был әҫәрҙең боронғолоғон иҫбатлаусы күрһәткес. Айға күтәрелгән ҡыҙ йәки ҡатын, айырым осраҡтарҙа һыуға барған малай образы төрлө географик киңлектәрҙә йәшәгән халыҡтарҙың ижадында осрай (164, 16—17; 132, 350; 178, 16). Ай тураһындағы башҡорт легендаларын башҡа халыҡтарҙың легендалары менән сағыштырһаң, иң ҙур яҡынлыҡ, тәбиғи, төрки телле халыҡтарҙың легендалары эсендә күҙәтелә. Мәҫәлән, башҡорт, сыуаш, яҡут хикәйәләрендә көйәнтәле ҡыҙ образынан тыш, үгәйҙе йәберһеткән яуыз көстәр бер типта: яҡут хикәйәһендә—таш кешеләр (329, 138), сыуаштарҙа — сихырсылар (320, 18), башҡортта — пәрейҙәр (55, 42), йәғни тәбиғи булмаған йән эйәләре.

Айҙағы таптарҙың барлыҡҡа килеүен аңлатҡан бик боронғо этиологик мифтарҙың алыҫтағы шаңдауын «Урал батыр» ҡобайырында ишетергә мөмкин. Күк батшаһы Самрауҙың Ай ҡатынынан тыуған Айһылыу исемле ҡыҙы яуыз Шүлгәнгә кейәүгә сыҡҡас, Ай-әсәнең йөҙө үҙгәрә, йәғни йыһан үҙгәрештәр кисерә (!). Был турала Айһылыу үҙенең улына бына нимә ти:

Ҡараңғы төн яҡтыртҡан
Айҙан тыуған бала инем,
Әсәм һөйгән дана инем;
Шүлгәнде кейәү иткәнгә
Әсәм бер йөҙ ҡапланы:
Ҡайғы баҫты йөҙөнө,
Миңдәр баҫты битене.
Көндә йөҙө үҙгәрә,
Нуры кәмеп, хурлана;
Элек көндәш булһа ла,
Ҡояштан ул нурлана (49, 114).

(Ҡобайырҙа Ҡояш та — антропоморф образ, Самрауҙың ҡатыны. Ҡыҙҙары — һомай.)

Айға бәйле башҡорт хикәйәләре араһында һирәк осраған һәм шуға ла иғтибарҙы айырыуса йәлеп иткән бер сюжет бар: ул —Айҙың үҙенең нисек барлыҡҡа килеүе хаҡындағы мифологик легенда (42, 31). Уның нигеҙендә күк йөҙөндәге бер нисә Ҡояш тураһындағы архаик мотив ята. Ике ҡояштың өҙлөкһөҙ яҡтыртыуынан ыҙа сиккән кешеләрҙең хәлен еңеләйтереү ниәтендә, Урал исемле батырҙың күк йөҙөндәге ике ҡояштың береһенә уҡ атып, уны уртаға ярыуы, шул ярсыҡтың береһенең айға, икенсеһенең — ергә килеп төшкәненең — тауға әйләнеүе; бер ҡояш ҡалғас, кешеләрҙә төнөн йоҡлау, көнөн эшләү ғәҙәте барлыҡҡа килеүе — хикәйәнең төп йөкмәткеһе шуларҙан ғибәрәт. Башҡорт мифындағы һуңғы дәүерҙәргә ҡараған ҡайһы бер деталдәр (бай, уның мәргән уҡсыларҙы майҙанға саҡырыуы) хикәйәнең архаик мотивтарын томалай алмай: «Йыһандағы буталсыҡлыҡ (хаос), уны тәртипкә килтерергә көсө еткән культур герой тураһындағы ҡараштар унда ярайһы уҡ асыҡ сағылған. Дөрөҫ, легендала ҡояш һынлы ҡояшты атып төшәрөрлөк батырҙың образына артыҡ баҫым яһау юҡ: башта ул хатта майҙанға мәргәнлеген һынарға килгән ҡәҙимге батырҙарҙың береһе һымағыраҡ ҡына телгә алына. Әммә уның көсөнөң, мәргәнлегенең һөҙөмтәһенә ҡарап (осоп барған уғы тауышына тирә-яҡтың зыңлап, шаулап китеүе, тауҙарҙың емерелеүе, йылғаларҙың ағышынан туҡтауы), культур герой һыҙаттарын, алыптарға хас булған эштәрҙе күрмәү мөмкин түгел. (Дини яҙмаларҙа бер нисә ҡояш мотивы ахырызаманға алып килеүсе йыһан янғыны итеп аңлатыла.)

Артыҡ ҡояштарҙың мәргән уҡсы тарафынан атып төшөрөлөүе тураһындағы миф миләдигә тиклем үк яҙылған боронғо ҡытай сығанаҡтарында теркәлеп ҡалған (332, 139—144, 309). Хәҙерге заман тикшеренеүселәренең хеҙмәттәренә ҡарағанда (243, 404), был сюжет айырыуса Көнсығыш, Үҙәк, Көньяҡ-Көнсығыш, Көньяҡ Азия халыҡтарының ижадында тотороҡло урын алған, шул уҡ ваҡытта уның таралыу арауығы Азия менән генә сикләнмәгәнлеге лә күренә. Төньяҡ Америкала йәшәгән индеец ҡәбиләләре араһында артыҡ ҡояштарҙы һәм айҙарҙы юҡ итеүсе Койот тураһында

мифологик легендалар бар. Шул уҡ ҡитғалағы ҡайһы бер ҡояш мифтары (атап әйткәндә, бильпулалар хикәйәләре) боронғо гректарҙың Фаэтон хаҡындағы мифтары менән ауаздаш (108, 21).

Ҡояш һәм ай тураһындағы мифологик легендалар төрлө версия, төрлө варианттарҙа йөрөһәләр ҙә, нигеҙҙәрендә бик боронғо уртаҡ ҡараштар ятҡанлыҡтан, төп идеяһы, йүнәлештәре яғынан бер-береһенә ифрат яҡын торалар. Урал батырҙың артыҡ ҡояшты атып төшөрөүе, ҡояш ярсығынан ай яралыуы хаҡындағы мифологик легенда ла үҙенең үҙәк мотивы менән башҡа халыҡтарҙың мифтары юҫығында булып, архаик ҡараштарҙы һаҡлаған ғәйәт әһәмиәтле сюжеттарҙың береһе. Оҡшаш йәки ауаздаш мотивлы легендаларҙың барыһына ла туҡталып тормаҫтан, асыҡлыҡ әсән бер-ике генә миҫал әйтеп үтәйек. Ул —Амур буйында йәшәгән нанайҙарҙың өс ҡояштың икеһен атып һүндергән Хадо, Тайвань цоуҙарының ике ҡояштың береһен юҡ иткән Оадзымы исемле мәргән уҡсылары тураһындағы мифтар (332, 406; 108, 20—21). Ҡояштарҙың һаны, яраланған ҡояштан ай хасил булыуын хәбәрләүҙәре менән был сюжеттар башҡорт материалына яҡын (ҡытай, монгол мифтарында ҡояштарҙың һаны —ун, ун ике. Ҡытай тексында яраланған ҡояштан ай барлыҡҡа килеү мотивы иһә бөтөнләй күҙәтелмәй) (243, 405—406). Үҙенсәлек персонаждарҙың ҡиәфәтендә лә сағыла: Оадзымы, мәргән уҡсы И ҡош һыҙатын йөрөтөүсе, ҡоштар донъяһы менән бәйле образдар. Легендалағы Урал батырҙа былдай бәйләнеш юҡ, әммә эпоста алыҫлашҡан яңғырашта булһа ла, ул бар: Урал батырҙың һөйөклө ҡатыны Һомай —аҡҡош сүрәтендә лә, сибәр ҡыҙ ҡиәфәтендә лә күренә торған мөғжизәле образ. Ике әҫәр геройы булараҡ сығыш яһаһалар ҙа, ҡобайыр һәм легенда геройҙарының (Урал исемле батырҙың) эшмәкәрлеге бер типта — ҡоролоҡтан, эҫенән яфаланған кешеләрҙе афәттән ҡотҡарыу, тәбиғәтте үлемһеҙ итеү.

Артыҡ ҡояштар һәм уларҙы атып төшөрөү, яраланған ҡояштың айға әйләнеүе тураһындағы архаик сюжеттарҙың тәү башлап барлыҡҡа килеү урынын күрһәтеү, ул хаҡта ҡәтғи фекер йөрөтөү еңел түгел. Шулай ҙа был тәңгәлдә иғтибарға лайыҡ фараздар бар. Ҡытай ғалимдарының уйлауынса, бер нисә ҡояш тураһындағы миф Тымыҡ океандағы

Шаньдунь ярымутрауында йәшәгән көнсығыш И ҡәбиләһе араһында яралған булырға тейеш (243, 407) (ҡытай легендаларында И —артыҡ ҡояштарҙы юҡ итеүсе мәргән уҡсы). Ҡытай мифологияһын өйрәнгән Б. Л. Рифтин мифтың тамырын шулай уҡ Тымыҡ океан буйы ҡәбиләләренә бәйләү яғында булып, аҙағыраҡ топ мотивтың, мифологеманың төньяҡҡа (Амур буйҙарына) һәм көньяҡҡа (Тайвань утрауына) таралыуын фараз ҡыла (243, 407). Башҡорт мифологияһындағы артыҡ ҡояштарҙы атып төшөрөүсе батыр мотивының ептәре лә, беҙҙеңсә, Үҙәк Азияға, шул иҫәптән Төньяҡ-Көнбайыш Ҡытай (төркиҙәрҙең ҡытайҙар менән нығ аралашҡан зонаһы) тарафтарына барып тоташа. Артабанғы тикшеренеүҙәр, бәлки, генетик, типологик оҡшашлыҡтар тураһында фекер йөрөтөргә мөмкинселек бирер, әммә уның өсөн артыҡ ҡояштар һәм айҙар хаҡындағы мифты белгән һәр халыҡтың материалы бергә тупланыуы, тулы текстарҙың, варианттарҙың булыуы фарыз[13].

Йондоҙҙарҙың барлыҡҡа килеүен, йыһандағы хәрәкәтте төҫмөрләгән мифологик легендаларҙа шулай уҡ тәбиғәт менән кеше, Йыһан менән Ер тормошо араһындағы мөнәсәбәт үҙенсәлекле сағылыш таба. Айҙың ергә төшөүе, ер ҡыҙының күккә күтәрелеп, шунда йондоҙ булып ҡалыуы («Зөһрә йондоҙ») тәбиғәт кешеләштер елгән, ә йәмғиәт тәбиғәтләштерелгән (325, 33) дәүерҙәрҙең алыҫтағы бер яңғырашы булып ҡабул ителә. Йыһан менән ер, космик есемдәр менән кеше бәйләнеше 1968 йылда Башҡортостандың Ишембай районының Этҡол ауылында 83 йәшлек Сәлимә Абдул-

[13] Артыҡ ҡояштарҙы атып төшөрөүсе мәргән уҡсылар хаҡындағы легенда рус фольклоры материалдары араһында күренмәй. Әммә славян донъяһына был архаик миф мотивтары ғилми яҙмалар (Г. Н. Потанин, В. П. Маргаритов), шағирҙар (Велимир Хлебников, Владимир Маяковский...) ижады аша килеп инә. 1913 йылда «Победа над солнцем» тигән опера ла яҙыла (А. Крученых).

Шуны ла әйтергә кәрәк. Ҡайһы бер халыҡтарҙың ижадында бер нисә ҡояш һәм айҙың барлыҡҡа килеүе хаҡында ла мифтар һаҡланған. Грузин мифтары буйынса, мәҫәлән, туғыҙ ҡояш менән туғыҙ айҙы кешеләрҙе дейеүҙәрҙән ҡотҡарыу ниәтендә Алла яралтҡан, һөҙөмтәлә — көндөҙгө эҫегә, төндәге һалҡынға түҙә алмайынса, әҙәм ашаусы дейеүҙәр ҡырылып бөтә яҙған, кешеләр күбәйеп киткән, йәнәһе. (Грузинские народные предания и легенды / Сост. Е. Б. Вирсаладзе. М.: Наука, 1973. С. 47-48.)

линанан яҙып алынған шиғри юлдарҙа тотош бер система рәүешендә сағыла:

Етегәндә — ете ҡыҙ,
Ай янында - Зөһрә ҡыҙ,
Таң янында — Сулпан ҡыҙ,
Ун ике йондоҙ —ун ике ҡыҙ,
Тимерғаҙыҡ — бер яңғыҙ
(203, оп. 65, д. 4, ч. 2, л. 370).

Етегәндең күк көмбәҙендә сүмескә оҡшабыраҡ урынлашып, башҡа йондоҙҙарҙан айырылып тороуы тәбиғәтте нисек тә булһа аңларға тырышҡан боронғо кешенең иғтибарын тартып, уның барлыҡҡа килеү сәбәбен аңлатыу ихтыяжын тыуҙырған. Етегән йондоҙ —Алып сүмесе, Етегән —ете бүре, Етегән йондоҙ —ете ҡыҙ —башҡорт легендаларындағы ошо төп мотивтар һәм образдар буйынса уларҙың тарихи ерлеге, боронғолоғо ярайһы уҡ яҡшы тоҫмаллана. Һуңғы ике мотивты яҡтыртыуҙа йыһандағы хәрәкәтте символлаштырыусы поэтик деталдең тап «Айҙағы ике януар» легендаһындағыса һүрәтләнеүе иғтибарҙы тарта: Етегән —ете бүре Тимерғаҙыҡҡа бәйләнгән һарат менән Буҙатты, ете ҡыҙҙы дейеү баҫтыра —тота алмайҙар. Тимерғаҙыҡҡа бәйләнгән ат образы һәм «Етегән йондоҙ — ете ҡыҙ» мотивы башҡа төрки халыҡтарҙың (төрөкмән, ҡаҙаҡ, үзбәк, ҡарағалпаҡ һ. б.) космогоник легендаларында ла урын ала (31, 40-41; 304, 10; 101, 48; 329, 135).

«Етегән йондоҙ —Алып сүмесе» мотивы («Етегән йондоҙ») боронғо космогоник ҡараштарҙы үҙенсәлекле сағылдырыуы менән тегеләр енән айырыла. Борон, «ер ҡалаҡтай ғына, күк табаҡтай ғына» булып, «бөтә халыҡ бер ҡаҙандан ашаған» заманда, бер алп (ғәҙәттән тыш дәү батыр) тегеләрҙең сүмесен ҡулына алһа, бик еңел тойолғанға, һауаға сорғотҡан: сүмес «әйләнеп-әйләнеп осҡан да» күктә «йондоҙҙар араһына инеп боҫҡан...». Ныҡлабыраҡ уйлаһаң, бында мифик дәүер, архаик «ваҡиғалар» — донъя яралыу мотивы сағыла, уның Орхон яҙмаларындағы (VI—VIII б. б.) легендар мотивтар менән уртаҡлығы асыҡлана. Ул яҙмаларҙа: «Күктә Тәңре, түбәндә ҡара ер яралған саҡта, икеһенең

уртаһында кеше балаһы яралды», — тиелә (137, 120; 176, 28, 36). «Етегән йондоҙ» исемле башҡорт легендаһында ла асылда шул уҡ картина —күк, ер, кешеләр[14].

Тимерғаҙыҡ йондоҙо башҡорттарҙа күк көмбәҙенең үҙәге тип иҫәпләнеп, элек-электән ориентир хеҙмәтен үтәгән. Мәҫәлән, ҡаҙаҡ әсирлегенән ҡасып, тыуған иленә ҡайтып барған башҡорт кешеһенең аҙашмаҫ өсөн әленән-әле Тимерғаҙыҡҡа ҡарап барыуы халыҡ хикәйәләрендә йыш телгә алына («Ғәйшә» һ. б. — 55, 267).

Боронғо башҡорттар йондоҙҙарҙың һәр саҡ һауала тороуының сәбәбен дә аңлатырға тырышҡандар. Уларҙың ышаныуҙары буйынса, йондоҙҙар күк көмбәҙенә йыуан сылбырҙар менән нығытылып ҡуйылған, имеш (157, 79).

Легенда һәм риүәйәттәрҙән күренеүенсә, элек һәр кешенең үҙ йондоҙо, бәхет йондоҙо була тигән ҡараш йәшәгән. «Ҡаҙаҡтар араһы» исемле риүәйәттә һүрәтләнгән эпизод — бының асыҡ миҫалы. Әсирлектән ҡасырға уйлаған башҡорт егете күрәҙәсе әбейгә килеп, түбәндәгесә мөрәжәғәт итә:

— Инәй, иң тәүҙә һин миңә шуны әйт: Яйыҡ йылғаһы ҡайһы яҡта? Уға юлды нисек табырға? Унан һуң шуны әйт: минең бәхет йондоҙом асылғанмы, юҡмы? Асылмаһа, ҡасан асыла?

— Һинең бәхет йондоҙоң ҙур байрам көндә асыла. Шул көндә тәүәккәлләмәһәң, һуң булыр, —ти күрәҙәсе әбей (55, 86).

Легендаларҙа сағылған боронғо ышаныу халыҡ ижадының башҡа жанрҙарында ла күренә. Асыҡлыҡ өсөн бер ге-

[14] Башҡорт легендаһына ауаздашлыҡ йәһәтенән Кавказда йәшәгән лактарҙың «Нарттар сүмесе» тигән хикәйәһе иғтибарҙы йәлеп итә. Табынға йыйылған баһадирҙарҙьщ бер ҙур сүместән әсеүҙәре, шул саҡ ҡайһы берҙәренең тәртипһеҙ ҡыланыуы, Аллаһы Тәғәләгә тел тейҙер еүҙәре арҡаһында сүмесһеҙ ҡалыуҙары һүрәтләнә унда (Халидова М. Р. Формы космогонических представлений и верований в повествовательном фольклоре народов Дагестана // Проблемы мифологии и верований народов Дагестана. Махачкала, 1988. С. 33). Тәү ҡарауға сюжеттар ни тиклем генә үҙенсәлекле күренмәһен, ике халыҡтың легендаһы үҙҙәренең топ мотивтары буйынса, (ә улар бик боронғо) бер-береһенә яҡын. Ул мотивтар: Етегән —алып, нарттар (дәү баһадирҙар) сүмесе, күмәк кешеләр ғәләмәт ҙур бер һауыттан файҙалана. Шуны ла әйтергә кәрәк: башҡорт легендаһында стадиаль яҡтан һуңыраҡ күренеш булған дини мотивтар күҙәтелмәй, хикәйә тотошлайы менән архаик мифтарға нигеҙләнгән.

нә куплет йыр өлгөһө килтерәйек. Уны Бәләбәй (хәҙерге Бишбүләк) районының Аҙнай ауылында Мөҙәрисөванан Мөхтәр Сәғитов яҙып алған:

Быйыл мин үлермен инде,
Үлһәм, күмерҙәр инде.
Үҙем үлһәм, артымдан уҡ
Йондоҙом һүнер инде (203, оп. 47, д. 1, л. 116).

Кешенең үҙ йондоҙо хаҡында йырҙар аҙ түгел, әммә килтерелгән өҙөк ышаныуҙы боронғо аныҡлығында, йәғни йондоҙҙар — ул кешеләрҙең йәне тигән боронғо ышаныуҙы, сағылдырыуы менән әһәмиәтле.

Ҡояштың барлыҡҡа килеүе тураһында легендалар һаҡланмаған, дөрөҫөрәге, беҙҙең ҡул аҫтындағы материалдар араһында күренмәй (бер нисә ҡояш тураһындағы сюжетта ҡояш этиологияһына ҡағылышлы мәғлүмәт юҡ), әммә заманында бындай хикәйәләрҙең халыҡ телендә йөрөгәнлеге шик тыуҙырмай, сөнки ҡояшҡа бәйле фрагментар мотивтар легенда-риүәйәттәр эсендә әле лә осрай. Мәҫәлән, Гәйнә ырыуы хаҡындағы легендаларҙа этногенетик мотив менән космогоник мотивтарҙың үрелеп барғанлығын күреп үттек. Ҡояштың ер аҫтындағы аждаһа ҡулында булыуы, Әйнә менән Гәйнәнең изгелекле болан ярҙамында уны яуыз көстән ҡотҡарып, күк көмбәҙенә сығарыуы — ҡояш хәрәкәтен, сығыуын-байыуын символлаштырыусы этиологик мотивтың сағылышы ул. Был мотив бик күп халыҡтарҙың мифтары өсөн хас.

Ҡояш нурҙарынан ғоманлы булған ҡыҙ мотивы «Түңгәүер ҡәбиләһе» тигән риүәйәт (42, 122) һәм Сыңғыҙхан исеменә бәйле башҡорт риүәйәте («Бөрйәндәр хан замандарында»—55, 155—156) буйынса билдәле. Ул шулай уҡ төрки һәм монгол халыҡтары өсөн уртаҡ күренеш (224, 47—49). Башҡорт фольклоры өсөн уның ят бауыр булмауы әкиәттәр миҫалында һәм ҡатып ҡалған фразеологик берәмектәр, әйтемдәр менән дә раҫлана: «елгә еленләү, көнгә ҡолонлау», «боҙға быҙаулау» һ. б. Әлбиттә, хәҙер был идиоматик әйтемдәр күсмә мәғәнә алып китеп, кемгәлер кире мөнәсәбәт белдереү өсөн ҡулланыла, ә уларҙың тамырҙары,

сығанаҡтары боронғо ҡараштар ерлегенә барып тоташа. Оғуз ҡаған хаҡындағы легендалар шуны күрһәтә (67, 33 —43).

Нигеҙҙә, эпик ҡомартҡыларға таянып булһа кәрәк, ҡайһы бер яҙмаларҙа һыу ҡыҙы —Ҡояшты һынландырыусы образ тигән фекер үткәрелә (174, 368—385; 247, 315). Легендаларҙа һәм әкиәттәрҙә Ҡояш бер осраҡта ҡатын-ҡыҙ башланғысын һынландырһа (был хәл йола фольклорына ҡараған теләк һүҙҙәрендә сағыу күренә: «Ҡояш апай, кил, кил, һалҡын ағай, кит, кит!»), икенсе осраҡта ир-ат башланғысын сағылдыра (ҡояш нурҙарынан ғоманлы булыу мотивы шул хаҡта һөйләй). «Урал батыр» эпосында Ай менән Ҡояш —Күк батшаһы Самрауҙың ҡатындары. Бынан тыш, эпик ҡомартҡылар һәм әкиәттәрҙә Ҡояш — Аҡбуҙ толпар һ. б. образдар аша ла тоçмаллана.

«Урал батыр» эпосында ҡояш тотолоуының сәбәбен аңлатҡан боронғо миф мотивы Әсә хәсрәте, Әсә хафаланыуы һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән күренеш булараҡ һүрәтләнә:

Зәрҡум <...>
Ҙур бер балыҡ булған да,
Янына барған һомайҙы
Шул урында ҡарпыған.

Зәрҡум ҡыҙын ҡарпығас,
Күктә Ҡояш тотолған...
(49, 105).

Күктең, Ҡояштың ни өсөн юғары булыуын да боронғолар үҙҙәренсә аңлатырға тырышҡан. Дәүләкән районының Көрмәнкәй ауылында Сөләймәнова Мөһөрбаныу Суфиян ҡыҙынан 1989 йылда беҙҙең тарафтан яҙып алынған бер ҡарыһүҙҙә күктең ерҙән алыçлашыуы түбәндәгесә аңлатыла: «Элек күк тә, ҡояш та түбәнерәк булған. Бер ҡатын балаһының бысрағын йыраҡҡа илтеп түгергә иренеп, ситәнгә ҡыçтырған. Күк менән Ҡояш ғәрләнеп, [нәҡ кешеләрсә! — Ф. Я.], юғарыға менеп киткәндәр». Бындай типтағы мифологик легендалар башҡа халыҡтарҙың ижадында ла осрай. Е. Б. Вирсаладзе, М. Р. Хәлидованың яҙмаларынан күренеүенсә, Кавказ халыҡтарының (грузин, авар, ҡумыҡ...) легендаларында күктең юғарыға күтәр ел еүенең сәбәбе шулай уҡ бер ҡатындың килешмәгән эше һөҙөмтәһендә тыуған хәл-күренеш рәүешендә аңлатыла. Балаһының бысрағын, ҡул аçтында сепрәк булмағанлыҡтан, чурек, лаваш (йәймә) менән һөрткәне өсөн Аллалар асыуланып, күкте юғарыға кү-

тәрә (грузин, авар фольклорында), ҡумыҡ мифында күк үҙе «асыуланып» ерҙән, кешеләрҙән алыҫлаша.

Тәбиғәтте, айырыуса күк йөҙөн, даими күҙәтеү нигеҙендә боронғо кеше күк көмбәҙендә һирәгерәк була торған күренештәрҙе лә (йондоҙ атылыу, «күк ҡабағы асылыу», ҡойроҡло йондоҙ) иғтибарһыҙ ҡалдырмаған. Был күренештәрҙең «ғәҙәти булмауы» тәүтормош кешеһенең күңеленә шом, хәүеф һалған. «Ҡойроҡло йондоҙ — афәткә», «Йондоҙ атылғанды күрһәң — кешегә өндәшмә» (57, 14) тигән ышаныу, тыйыуҙар, мәҫәлән, шуның асыҡ дәлиле. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, йондоҙ атылыуҙың сәбәбен, ҡойроҡло йондоҙҙоң барлыҡҡа килеүен аңлатҡан мифтар һаҡланмаған тиерлек. Шулай ҙа уларҙың эҙҙәрен фольклорҙың башҡа жанрҙары эсендә осратырға мөмкин. «Урал батыр» эпосында, мәҫәлән, йондоҙ атылыу күренешенең килеп сығышы боронғолар тарафынан тәүбабаларҙың үлеменә бәйләп аңлатылғанлығы күренә:

Урал батыр үлгән, ти.
Халыҡ ултырып барыһы
Башын түбән эйгән, ти;
Күктән йондоҙ атылып,
Һомайға оран биргән, ти.
Һомай ҡош тунын кейеп,
Шундуҡ осоп килгән, ти...
(49, 120).

Әйткәндәй, әле лә йондоҙ атылғанын күргәндә, ҡайһы бер оло кешеләр: «Ана, донъяла бер кеше үлде», — тиҙәр. Оҡшаш ышаныуҙар башҡа халыҡтарҙың борондан килгән ҡараштарында ла сағыла. Дағстанда йәшәгән халыҡтарҙың береһе —рутуалдәр, мәҫәлән, йондоҙ атылғанда «кемдер үлер» тиҙәр икән (М. Р. Хәлидова), йәғни бында йондоҙ хәрәкәте үлем әшкәртеү рәүешендә ҡабул ителгән. Күк ҡабағы асылыуҙың рәүеше, ваҡыты хаҡында хикәйәләр халыҡ араһында әле лә осрай. Күк ҡабағы асылыуҙың (полярное сияние) «ҡәҙер төнө» (кисе) тип тә йөрөтәләр. Пермь әлкәһенең Уса районы Төнгүк ауылы Кәримә Муҡаева һөйләүенсә, күк ҡабағының асылыу рәүеше түбәндәгесә хикәйәләнә: «Шулай утын киҫеп ятабыҙ. Төнөн яҡтырып китте, хатта энә лә күренер. Ҡибла яҡтан сатырҙап асылды ла, шунан ябылды» (203, оп. 32, д. 2, л. 377).

Йәки:

«...Ҡәҙер төнө асылған ваҡытта һауа ярылып асылып бара, артынан ябылып бара» (301, 134).

Күк ҡабағының асылыу ваҡытын аңлатыуға ҡоролған хикәйәләр, нигеҙҙә, дини характерҙа: «Элек ҡәҙер төнөн ураҙа (рамаҙан) айының 24-нән 30-ына тиклем һаҡлағандар. <...> Шунан һуң был ҡәҙер төнө ураҙа бөткәс, мөхәррәм айының 15-дә асылырға тейеш булған. <...> Уны күргән ваҡытта кеше изге теләктәр теләһә, шул ҡабул була икән, тиҙәр ине. Ләкин ул һәр кемгә лә күренмәҫкә мөмкин» (301, 134). Дөйөм алғанда, күк ҡабағы асылыу дини ғөрөфкә бәйләп аңлатылһа ла, теләк теләү мотивы боронғораҡ, күкте изгеләштер еү ерлегендә тыуған мотив булыуы ихтимал.

Башҡорт халҡының күк ҡабағы асылыуы тураһындағы хөрәфәти хикәйәләре башҡа халыҡтарҙың (мәҫәлән, яҡут, ҡаҙаҡ) ышаныуҙары (329, 136; 224, 114) менән ауаздаш, ҡаҙаҡ хикәйәте хатта тексы менән дә Р. Ә. Уразаева яҙып алған вариантҡа (301, 134) тап килә тиерлек.

Дәүләкән районының Сапай ауылында яҙып алынған бер этногенетик риүәйәттә күкте изгеләштер еүҙең ҡайһы бер саҡтылары күренә. Сапай ауылы халҡының этник составы хаҡында һөйләгәндә, риүәйәтсе ул ауылда йәшәгән Табын һәм Ҡаңны ырыуҙарының ағасы, ҡошо, ораны тураһында әйтә: «Килгән табындарҙың ырыу ағасы — ҡарағас, ҡошо — ҡарағош, ораны Тәңре булған. Ә ерле халыҡ ҡаңныларҙың ағасы —ерек, ҡошо--ҡарға, ораны —Тәңре» (203, оп. 47, д. 1, л. 267). Ике ырыу осон дә уртаҡ булған оран исеме бында, әлбиттә, мосолман Аллаһы төшөнсәһен түгел, ә изгеләштерелгән Күк —Тәңре мәғәнәһен бирә.

Нигеҙҙә, этиөлөгик мөтивҡа ҡоролоп, уны аңлатыу һәм дәлилләүҙе маҡсат итеп ҡуйғанлыҡтан, легенда һәм риүәйәттәрҙәге айырым образдар һәм мотивтарҙың тылсымлы мәғәнәһе тәү ҡарауҙа уҡ күҙгә ташланып бармай. Халыҡ ижадының башҡа жанрҙарына, тарихи-этнографик әҙәбиәткә мөрәжәғәт итеү, ҡәрҙәш халыҡтарҙың фольклор әҫәрҙәре һәм йолалары менән сағыштырып өйрәнеү һөҙөмтәһендә генә халыҡ хикәйәләренең тарихи ерлеген күпмелер асыҡларға мөмкин. Үрҙә бер үк образ, мотивтарҙың төрлө характерҙағы легендаларҙа асылыуына ҡарап, ул образдарҙың һүрәтләнеү рәүешенә таянып һәм башҡа халыҡтарҙың ауыҙ-

тел ижады менән сағыштырыуҙар үткәреү юлы менән күк есемдәре хаҡындағы башҡорт легендаларында тотемизм һәм анимизм ерлегендә тыуған ҡараштар булғанлығы билдәләнелде. Боронғо ритуаль мәғәнәһен тел төбөндә йәшергән легенда һәм риүәйәттәрҙән айырмалы рәүештә, йола фольклорына ҡараған арбау һүҙҙәр, торло им-томдар боронғо мифологик ҡараштарҙы, ышаныуҙарҙы туранан-тура, асыҡтан-асыҡ һүрәтләйҙәр һәм шуның менән легендаларға ҡарата әйтелгән фекерҙәрҙе ҡеүәтләүсе мөһим өҫтәмә материал хеҙмәтен үтәйҙәр. Ҡорбан салып, ямғыр яуыуын, ҡояш сығыуын теләп күккә мөрәжәғәт иткәндә әйтелә торған изге теләк һүҙҙәре — алғыштар ғына ла, күреп үткәнебеҙсә, күпме тарих һөйләй. Яңы тыуған айҙы тәү тапҡыр күргәндә әйтелә торған теләк һүҙҙәрҙең нигеҙендә мәжүсилек дәүеренән ҡалған ышаныуҙар менән ислам дине йоғонтоһонда барлыҡҡа килгән ҡараштарҙың ҡушылмаһы ята:

Ай күрҙем аман менән, Кәртәм тулы мал менән.
Ауыҙым тулы иман менән, Ошо айҙа үлеп китһәм,
Ҡуйыным тулы Ҡөрьән Үткәр, Хоҙай, иман менән!
менән, (203, оп. 92, д. 9, л. 137).

Айҙың мөғжизәле көсөнә, ҡөҙрәтенә ышаныу халыҡ медицинаһына бәйле им-томдар миҫалында ла асыҡ сағыла, «һөйәл сыҡһа, ҡайтып барған айға күрһәтеп: «Ай, минең тәсәйем бар, һинең тәсәйең бармы? — тиҙәр ине. Шунан бөткән була торғайны», — ти, мәҫәлән, Силәбе әлкәһенең Ҡоншаҡ районы Сабаҡлы ауылынан 70 йәшлек Бәҙерниса Даянова (203, оп. 21, д. 8, л. 261).

Арпа, тиф һ. б. сирҙәрҙе бөтөрөү ниәтендә им-том ҡылғанда, айҙың фазаһы иҫтә тотолған:

Ай ҙа ҡайтты, көн дә ҡайтты,
Яман ҡаҫта, һин дә ҡайт!
Һинең килеүең яңы,
Минең күреүем яңы (301, 139).

Йондоҙҙарға ҡарата шулай уҡ төрлө ырым-юрауҙар йәшәгәнлеге билдәле. «Етегән йондоҙҙо ете ҡабат һанаһаң, сауап була» (57, 14) —әлегәсә ошо юрауҙы бер тында әйтеп,

ете ҡабат һанап сығыу йолаһын йондоҙҙарға табыныуҙан ҡалған бер күренеш итеп ҡабул итергә мөмкин. Баҡһаң, ошондай уҡ ғөрөф-ғәҙәт ҡәрҙәш халыҡ — төрөкмәндәрҙә лә бар икән:

Едигеним —еди йылдыз,
Еди гонар, еди гөчер,
Санасам — согап болар (31, 44).

Йәшен йәшнәү, күк күкрәү, ғәрәсәтле дауыл һ. б. айырым осраҡтарҙа бәлә-ҡаза килтерә. Шуға күрә боронғо кеше аңында бындай күренештәр яуыз йән эйәләре тарафынан башҡарыла, тип ҡаралған, аждаһа-йыландар, ен-пәрейҙәр образы барлыҡҡа килгән. Легендаларҙағы, хөрәфәти хикәйәләрҙәге этиологик мотив йыш ҡына шул яуыз заттарҙың «эшмәкәрлеге» итеп аңлатыла. Тамъян-Түңгәүерҙәр һөйләүенән С. И. Руденко яҙып алған түбәндәге хөрәфәти хикәйә, мәҫәлән, шуға бер миҫал:

«Елдең хужаһы пәрей икән ул. Пәрей үҙе күп ваҡытын тау-таш араһында, мәмерйәләр эсендә үткәрә. Ә ул тау-таш араһынан сығып, ел ҡыуып китһә, дауыл ҡуптарып, күк күкрәтеп йөрөй. Ҡойон —уның туйы ғына. Шунда ла, ҡойон ҡупһа, шайтан ҡыҙын күсерә, тиҙәр» (248, 26).

Йәшен йәшнәү хаҡындағы хикәйәләр һуңғараҡ осорҙарға ҡараған дини мотивтар күҙлегенән яҡтыртыла: «Йәшен йәшнәүе —ул күктәге фәрештәнең сыбыртҡы шартлатып, шайтанды ҡамсылауынан сыға, ти...» (248, 26).

Шом-хәүеф тойғоһо төрлө «һаҡланыу» ысулдарын уйлап сығарыуға килтергән:

«...Йәшендән ут ҡапҡан өйҙө тик эркет-ҡатыҡ менән генә һүндереп була...» (248, 26).

«Йәшен йәшнәгәндә, «бисмилла» итеп, ҡултыҡ аҫтын ҡыҫып ултырырға кәрәк, юғиһә унда шайтандың инеп йәшеренеүе ихтимал. Шайтанды атам тип, йәшен һине ата...

Йәшен ваҡытында өйҙәге ялтыр нәмәләрҙе: самауыр, көҙгә һымаҡтарҙы — ябырға кәрәк» (301, 1982, 142).

Әлбиттә, йәшен йәшнәп, күк күкрәгәндә башҡарыла торған ырым-йолалар килтерелгән миҫалдар менән генә сикләнмәй. Халыҡ араһында улар байтаҡ. Тик был ғөрөф-ғәҙәт-

тәрҙең конкрет мәғәнәһе хәҙер инде онотолған. «Беренсе булып күк күкрәгәндә ергә ятһаң, бил һыҙламаҫ», «Урманға еләккә китеп барғанда күк күкрәһә, күнәк тәгәрәтәләр» (203, оп. 65, д. 9, л. 342) ише ышаныуҙар үҙҙәренең сығышы менән, күрәһең, бик боронғо. Ихтимал, улар күккә табыныу ритуалының ниндәйҙер бер ярсығы ғыналыр ҙа. Йола фольклоры беҙҙә әле өйрәнелеү юлында. Эҙләгәндә, тәбиғәт культына бәйле йолаларҙың тулыраҡ варианттары ла осрар ине. Саян-Алтай регионындағы төрки халыҡтарының күккә табыныу йолалары үҙҙәре генә лә —хайран ҡалдырырлыҡ бер тамаша (229, 50 — 64).

Башҡорттарҙа Ер планетаһы тураһында ла мифологик легендалар бар. Ерҙең нисек барлыҡҡа килеүен һәм нисек тороуын аңлатыуға ҡоролған был хикәйәләр — донъялағы бик күп халыҡтарҙың фольклорында урын алған мотивтар менән ауаздаш, һыу төбөнән ҡоштар сығарған ләм, ҡом, балсыҡтан ер яһалыу мотивы, мәҫәлән, төрки-монгол, Скандинавия, фин-уғыр халыҡтарының мифологияһында, көнсығыш славяндарҙың апөкрифтарында, шулай уҡ Төньяҡ Америка индеецтары, полинезий, һинд фольклорында осрай (323, 23-27; 9, 20; 180, 207).

Ғайса Хөсәйенов тарафынан яҙып алынған «Утрау яһаған ике өйрәк» исемле башҡорт легендаһында бик борон бөтә донъяның һыу менән ҡапланған булыуы, йомортҡаларын ҡайҙа һалырға белмәй интегеп йөрөгән ике өйрәктең һыу төбөнән ләм сығарып, шул ләмдән «бер ҡаты нәмә» ойоштороуҙары, оя ҡороп, бала баҫып сығарыуҙары, аҙаҡ күмәкләшеп ләм ташыуҙан ер йөҙө барлыҡҡа килеү хаҡында һөйләнелә (42, 30).

Ер һынлы ерҙең үҙен «яралдырған» өйрәк (ҡош-демиург) халыҡ аңына изге йән эйәһе рәүешендә һеңеп ҡалған. Төрлө халыҡтарҙың, шул иҫәптән башҡорттарҙың, биҙәү сәнғәтенә (һырлап эшләнгән ижауҙар—201, 12, 29) был образдың килеп инеүе осраҡлы түгел.

Булғарҙарҙың биҙәнеү әйберҙәрендә ауыҙына дүңгәләктәр ҡапҡан өйрәк һүрәтенә ҡарап, археолог А. Х. Халиҡов боронғо булғарҙарҙа өйрәк —донъя яралдырыусы мотивына ҡоролған космогоник легендалар йәшәгән тигән фаразға килә. «Булғарҙарҙың космогоник ҡараштарында, — ти ул, —

ике төрлө мифтар берләшкән төҫлө: төньяҡ урман һәм урман-дала ҡәбиләләренең (А. М. Золотаревса, монголоидтарҙың) диңгеҙ төбөнән ер сығарыусы өйрәктәр хаҡындағы мифтары һәм һинд-иран ҡәбиләләренең йәшәү символын — уның өс атрибуты: күк, ер һәм һыу менән кәүҙәләндереүсе мифтары (306, 7).

«Ватандаш» журналында (2002, 6-сы һан, 165-се бит) баҫылып сыҡҡан бер ҡарыһүҙ буйынса, Күбәләк ырыуы башҡорттары тарафынан ерҙең барлыҡҡа килеүе борон ҡарға «эшмәкәрлеге»нә бәйләп аңлатылған. Быға са башҡорт фольклорына ҡараған ғилми яҙмаларҙа, йыйынтыҡтарҙа осрамаған был мифтың йөкмәткеһе түбәндәгесә: «Элек Ут эйәһе менән һыу эйәһе тик һуғышып йәшәгән. Ҡарға алар-ҙы яраштырып ҡараған, әммә сыҡмаған был эше. Йәне көйөп, ҡарға аларҙың өҫтәренә с...н, ти. Шунан беҙҙең ер-тупраҡ килеп сыҡҡан». Бәләкәй генә күләмле был мифологик хикәйә боронғоларҙың ғаләм тураһындағы уйланыуҙарын, аңлатмаларын, атап әйткәндә, донъя яралыу дәүерендәге тәү стихияһын, ҡош-демиург образын сағылдырыуы менән ҡиммәтле. Был урында шуны ла хәтерҙә тотоу кәрәк: бик күп халыҡтарҙың мифопоэтик традицияларынан, шул иҫәптән башҡорт фольклоры әҫәрҙәренән, этнографик материалдарҙан күренеүенсә, ҡоштар —өҫкө донъяны символлаштырыусы йән эйәләре лә (Донъя тауын, Донъя ағасын һынландырған рәсемдәрҙә ағас башындағы ҡош, ҡоштар һүрәте һ. б.).

Ерҙең өс ҙур балыҡ өҫтөндә тороуы, балыҡтарҙың береһе үлгәнлектән, ахырызаман яҡынлашып килеүе хаҡындағы башҡорт мифы (157, 79) шулай уҡ боронғо, һуңғы йылдарҙа Башҡортостандың төрлө райондарында ошо юлдарҙың авторы яҙып алған мифологик легендаларҙа әйтелгәнсә, ер үгеҙ менән суртан (йә балыҡ) өҫтөндә тора (203, оп. 92, д. 9, л. 105). Ерҙең балыҡ менән үгеҙ өҫтөндә тороуы тураһында башҡа халыҡтарҙа ла мифтар бар (325, 179). Ҡаҙаҡ-ҡырғыҙҙарҙың хикәйәләрендә, мәҫәлән, балыҡ образынан тыш, төрки халыҡтарының тотем хайуаны иҫәпләнгән үгеҙ образы һүрәтләнә. Ул бер осраҡта мөгөҙө менән күкте күтәреп тороусы йән эйәһе булараҡ тасуирланһа (321, 242), икенсе осраҡта балыҡ менән бергә ерҙе күтәреп тороусы «персонаж» булараҡ сағылдырыла (224, 114). Монголдар

борон ерҙе ҙур (гигант) үгеҙ ҡиәфәтендә күҙ алдына килтергән (325, 160).

Ер, йыһан тураһында һөйләгәндә, информанттар ете ҡат күк, ете ҡат ер аҫты тигән төшөнсәләрҙе ҡәҙимге, һәр кемгә билдәле нәмәләр һымаҡ ҡына әйтеп үтеүсән. Был йәһәттән айырыуса халыҡ ижадының афористик төрҙәре: йомаҡтар, мәҡәл һәм әйтемдәр ҡыҙыҡлы. Бына уларҙың ҡайһы берҙәре: «Күсәбәйҙең күк тирмәһе ҡатланған да ҡапланған». Был —күк көмбәҙе тураһындағы йомаҡ (54, 50). Йәйғорҙо һүрәтләгән йомаҡта күк ҡатламдарының һаны легендаларҙағыса конкретлаштырып бирелгән:

> һыр-һыр, һыры бар,
> Ете төрлө нуры бар,
> Ете ҡат күккә юлы бар (54, 48).

һиҙгер, алдан күрә белеү һәләтенә эйә булған зирәк кешеләргә ҡарата беҙҙең халыҡта «ул ете ҡат ер аҫтында йылан көйшәгәнен дә белә», тиҙәр. «Ерҙең ҡуйыны ете ҡат» тигән мәҡәл дә бар. Күренеүенсә, «ете ҡатлы ер» боронғоларҙың аңында үҙе лә —тере йән: «ер ҡуйыны» тигән һүҙбәйләнеш — шуға ишара (өҫтәп «ер һулышы», «ер тыны»; «ер аяғы — ер башы ер», «ер кендеге» кеүек фразеологик берәмектәрҙе хәтерегеҙгә төшөрөгөҙ).

Ғөмүмән, йыһандың бер нисә ҡатламдан тороуы тураһындағы мотив — универсаль, ул төрлө ҡитғаларҙа йәшәгән халыҡтарҙың ижадында, шул иҫәптән миф һәм легендаларында, урын алған, дини яҙмаларҙа ла (Тәүрат, Ҡөрьән Кәрим...) ситләп үтмәгән (108, 109—143).

Легендаларға йыш ҡына героик эпос мотивтары, донъя яралыу хаҡындағы мифтарҙың айырым элементтары килеп инә. Мәҫәлән, ҡайһы бер тауҙарҙың, ғәҙәттәгенән ҙур булған уба-ҡәберлектәрҙең барлыҡҡа килеүен аңлатыу ниәтендә, кешеләр әле боронғо аңда уҡ тыуған алпамышалар (алптар) образына мөрәжәғәт иткәндәр. Алпамышалар — борон-борон заманда йәшәгән бик эре халыҡ, уларға урманды үлән урынына ғына тапап йөрөү ҙә, ағастарҙы тамыры менән ҡуптарып, йолҡоп ташлау ҙа бер ни тормаған «Мүсектау», «Алпа ҡомо айырытау» тигән урындар, мәҫәлән,

ана шул алпамышаларҙың итек үксәһенән ҡубып ҡалған балсыҡтан («Мүсектау»), йә ҡынйырағынан ҡойолған ҡомдан барлыҡҡа килгәндәр икән (55, 91—92). Ғөмүмән, ғәҙәттән дәү кәүҙәле кешеләр (алптар) хаҡында легендалар башҡорт халыҡ ижадында шаҡтай киң таралған. «Алпамыша зыяраты», «Алпамыша ҡәбере», «Алпамыша ташы» тибындағы топонимик легендаларҙы Башҡортостандың төрлө райондарында, шулай уҡ Силәбе яҡтарында осратырға мөмкин. Яҙмаларҙан күренеүенсә, халыҡ алпамышаларға бәйле урындарҙы, ҡағиҙә булараҡ, изгеләштер еп ҡараған. Башҡортостандың Архангел районы Ҡыҙылъяр ауылында 78 йәшлек Исмәғил Әлимғужиндан Әхмәт Сөләймәнов яҙып алған «Алпамыша ҡәбере» тигән бер легендала, мәҫәлән, шундай юлдар бар: «Алпамыша изге кеше, әүлиә булған. Ул үлгәс, ат еткән ерҙән тупраҡ ташып күмгәндәр. Шулай яһалған ул тау кеүек ятҡан түң» (203, оп.63, д. 56, л.18). Алпамышаларҙы изгеләштер еп ҡарау мотивы 1906 — 1907 йылдарҙа С. И. Руденко яҙып алған текстарҙа ла асыҡ сағыла (248, 30). «Әүлиәлек» һыҙаты боронғо легендаларға, күрәһең, ислам дине йоғонтоһонда килеп ингән һуңғараҡ күренеш.

Алпамышалар мотивы топонимик мәғлүмәт бирёү ниәтенән төҙөлгән сюжеттар менән генә сикләнмәй. Ундай сюжеттарға үрелеп, икенсе, шулай уҡ бик әһәмиәтле мотивтар ҙа ҡушылып китә. Был йәһәттән Ғ. Б. Хөсәйенов яҙып алған бер легенда айырыуса ҙур ҡыҙыҡһыныу уята: Алпамышаның ете аҙымынан башҡорттарҙың ете ырыуы йәйләр ете йәйләү барлыҡҡа килеү мотивына, халҡыбыҙҙың боронғо ырыу башын Алып батырҙар тоҡомона илтеп ялғау (этногенетик мотив) кеүек күренештәр (42, 103) урын ала. Дөйөм алғанда, башҡорт фольклорындағы алпамышалар образы, легендаларҙағы топонимик мотивтар башҡа бик күп халыҡтарҙың легендаларындағы мотивтарға яҡын, айырым осраҡтарҙа улар хатта бер-бер еһенә тап килә тиерлек. Әйтәйек, «Великан ҡыҙҙары һәм һабансы» тигән латыш легендаһының сюжеты (164, 104) менән «Мүсектау» мотивтары араһында әллә ни айырма юҡ тиерлек. Уларға мордва, мари легендалары ла (167, 43—44; 11, 7) бик яҡын. Дәү

баһадирҙарҙың тоҡом, ырыу башлаусы булыу мотивы шулай уҡ мари, удмурт, эстон легендаларында урын ала (10, 4—5).

Алптарҙың ҡынйырағынан (итегенән) ҡойолған ҡом, ҡупҡан балсыҡтан тауҙар барлыҡҡа килеү мотивының таралыу ареалы айырыуса киң: ул Балтик диңгеҙе буйҙарынан Кавказ тауҙарына тиклем, артабан көнсығышҡаса дауам итә (33, 29—40). Был мотив Көнбайыш Европа илдәренең фольклорында ла бар (165, 606).

Урал алды, Волга буйы төркиҙәренең ижадында алпамышалар мотивының булыуы Ибн-Фаҙлан (Хб.) яҙмалары буйынса ла билдәле (139, 138).

Алпамышалар хаҡындағы легендаларҙың боронғолоғо төрки халыҡтарында шулай уҡ киң таралған «Алпамыша менән Барсынһылыу» эпосы менән нығытыла. Ғалимдарҙың тикшеренеүҙәренән күренеүенсә, был эпик ҡомартҡының айырым эпизодтарында матриархат дәүеренә ҡайтып ҡалған ҡараштар сағыла (135, 201, 218—219).

Кешеләр аңында баһадирҙар образының тыуыуын мари ғалимы В. А. Акңорин боҙ ҡатламы эрегәндән һуң (послеледниковый период), ер йөҙөндә карлик ағастар булған дәүергә ҡайтарып ҡалдыра. Бынан тыш, баһадирҙар образының фин-уғыр телле халыҡтар ижадында бөрөләнеп, Волга буйы төркиҙәре —сыуаш һәм татарҙарға — күскән, ә литва һәм латыштарға һуңғыларының төрлө прибалтика-фин халыҡтары менән генетик бәйләнештәре һөҙөмтәһендә ингән тигән фекер әйтә (10, 5). Дөйөм алғанда, ҡыҙыҡлы фекер, әммә ул әле артабан эҙләнеүҙәрҙе талап итә: баһадирҙар мотивы Волга-Прибалтика йүнәлешендә генә таралған мотив түгел, ул асылда донъя фольклорына билдәле мотив (хазарҙар культураһына ҡараған археологик ҡомартҡылар, уларҙағы Алпамыша сюжетын хәтерләткән һүрәттәр, Африка халыҡтарының әкиәттәре...), һәм уны ниндәйҙер бер конкрет этник ерлеккә бәйләү мөмкинлеге бик шартлы.

Тәбиғәт көстәренең (ел, ямғыр һ. б.) даими йоғонтоһо һөҙөмтәһендә ҡайһы бер ер-һыу объекттарының ғәҙәти булмаған формалар алып китеүе (төрлө йәнлек-хайуан, кеше һүрәтендәге таштар, ҡаялар барлыҡҡа килеү) элек-электән кешеләрҙең иғтибарын йәлеп итеп, уларҙа ижад фантазияһы уятҡан. «Этташ», «Тораташ», «Бейташ», «Киленташ» ише

ер-һыу атамаларының тарихы хаҡында халыҡ араһында байтаҡ ҡына легендалар йәшәүе —шуға миҫал. Айырыуса, таш булып ҡатҡан килендәр тураһындағы легендар сюжеттар популяр. Башҡортостандың Балаҡатай районы Красный Пахарь ауылында яҙып алынған бер легенда, мәҫәлән, һыуға киткән килендең оҙаҡ йөрөүе, көтөп арыған ҡәйнәнең әсенеп ҡарғауы («Шул тау башында ғына таш булып ҡат инде, исмаһам!»), ҡарғыш төшәп, килендең Тораташ булып ҡатыуы һүрәтләнелә (55, 118).

Йәмғиәттәге синфи бүленеш, социаль тигеҙһеҙлекте сағылдырған мәғлүмәттәр (ҡыҙҙың бай урындан ярлы ғаиләгә килен булып төшөүе) фонында яҡтыртылған төп мотив — һүҙҙең магик көсөнә ышаныу мотивы —ифрат боронғо. Ул мәжүси ҡараштар системаһында иң архаик мотивтарҙың береһе булып иҫәпләнә.

Башҡорт халыҡ хикәйәләре араһында таш булып ҡатыу сәбәбен ислам дине позицияһынан сығып аңлатҡан сюжеттар ҙа юҡ түгел. XIX быуаттың аҙағында «Екатеринбург аҙналығы»нда (65, 624) баҫылған бер башҡорт легендаһында, мәҫәлән, килен менән ҡәйнәнең таш һынға әйләнеүҙәре Хоҙай язаһы рәүешендә күрһәтелә. Аллаһы Тәғәләнең «асыуы» бында ҡатын-ҡыҙ ыҙғышын ғәйепләү маҡсатында килеп тыуған хәл итеп аңлатылған. Ошоноң менән легенда өгөт-нәсихәт мотивын үҙәк урынға ҡуя. Әммә һуңғараҡ дәүерҙәргә ҡараған ниндәй генә деталдәр юҫығында бирелмәһен, легендалағы боронғо мотивтар үҙҙәренең төп асылын юғалтмағандар.

Легендаларҙа таш һындарҙың, ҡағиҙә буларак, ҡатын-ҡыҙ образында һүрәтләнеүе — үҙе үк серле күренеш. Ниңә шулай? Бәлки, был төрки-монгол һ. б. халыҡтарҙың мифологияһында урын алған ҡатын-ҡыҙ балбалдарынан (каменные бабы), идолдарҙы тыуҙырған ышаныуҙарҙан киләлер.

Ҡатын-ҡыҙ сүрәтендәге һынташтар тураһында һөйләгәндә, йәнә бер ҡыҙыҡлы, ләкин, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, фрагментар характерҙа яҙып алынған бер топонимик риүәйәткә туҡталмай булмай. Унда Силәбе өлкәһендәге Ҡалды күле эргәһендә бер һынташ булыуы хаҡында хәбәр ителә һәм был таштың ғәҙәти булмаған үҙенсәлеге — даими рәүештә һөт һарҡытып тороуы —телгә алына (203, оп. 26, д. 10,

л. 158). Һынташтың «һөт» һарҡытып тороуы — оригиналь һәм, һис шикһеҙ, архаик мотив, ул изгеләштерелгән ҡатын-ҡыҙ—әсә символы булараҡ ҡабул ителә.

Легендаларҙа һаҡланып ҡалған айырым мәғлүмәттәр буйынса, борон һынташтарҙың изгеләштерелгән объект булғанлығы аңлашыла, ер өҫтөндә яралған тәбиғи һындарҙан тыш, кешеләр тарафынан эшләнгән идолдар булғанлығы тоҫмаллана. Бер генә миҫал.

«Беҙҙең Ишмөхәмәт ауылының икенсе исеме — һынташ. Борон замандарҙа ошо ауыл урынында бер дәү һынташ булған, тиҙәр. Уның һыны кешегә оҡшашыраҡ булған: башы, ҡулдары, биле беленеп торған. Күрәһең, уны шулай итеп юнғандар. Ташында тамғаларға оҡшаған ниндәйҙер яҙыуҙар ҙа бар ине, тиҙәр.

Ул бер арҙаҡлы, изге әҙәмдең ҡәберенә ҡуйылған, һынташ төнөн яҡтырып торор булған, тиҙәр. Кешеләр уны шуға изге таш тип иҫәпләгән. Ул таш бынан йөҙ-йөҙ илле йылдар элек кенә имен ине әле, тиҙәр ҡарттар. Бер саҡ ул нисектер ярылыпмылыр төшкән. Шунан һуң уның төнөн баҙлап торор ҡөҙрәте лә бөткән, ти. Үҙе лә әллә ҡайҙа юҡ булған.

Бына шул таштан ҡалған беҙҙең ауылдың исеме» (55, 130 — 131). Башҡортостан топонимикаһында һынташ атамаларының күп булыуы ла (314, 116), моғайын, ана шундай элекке идолдарҙан киләлер. Был фаразды башҡорттар йәшәгән Ырымбур өлкәһе ерендә ҡаҙылма һынташ (балбалы) табылыу факты ҡеүәтләй.

Легендаларға һынташ юҡтан ғына килеп инмәгән, әлбиттә. Ул күп осраҡта билдәле бер тылсым, магик һүҙ һөҙөмтәһе булып күрһәтелә. Ҡарғау мотивына ҡоролған Киленташ хаҡындағы сюжеттар, мәҫәлән, Балтик буйы, Кавказ халыҡтарының ауыҙ-тел ижадында киң билдәле (130, 10; 90, 36). Патриархаль мөнәсәбәттәр яҫылығында сағылдырылған килен образының риүәйәт-легендаларға аҙағыраҡ ингән булыуы ихтимал. Ҡарғау, кешенең ташҡа әүерелеү «мөмкинлеге» типологик мотив булһа, килен мотивы ниндәйҙер аралашыуҙар һөҙөмтәһендә бер халыҡтан икенсе халыҡҡа күскән мотив булырға мөмкин. Ҡыҫҡаһы, ташҡа бәйле легендар мотивтарҙың боронғолоғо шик тыуҙырмай.

Мифологияла хатта донъя яралыу «рәүешен» аңлатҡан легендалар эсендә таш кешеләр (ҡатҡан һындар ғына түгел!) хаҡында мәғлүмәттәр бар. Мәҫәлән, яҡут легендаларында улар бик борон, әле ай ҙа булмаған заманда йәшәүсе тәүге кешеләр итеп һүрәтләнә. Әммә үҙҙәре таш булһалар ҙа, был кешеләрҙең ҡылған ҡылыҡтары ҡәҙимге кешеләрҙекесә: улар бер етем ҡыҙҙы тон йөҙөндә уятып, мәкенән һыу алырға ебәрәләр. Яҙмышына рәнйеп, күккә мөрәжәғәт иткән ҡыҙ, һуңғыһы тарафынан юғарыға күтәрелеп, айға әйләндерелә (329, 130). Әйткәндәй, башҡорттарҙың «Алп батыр» әкиәтендә геройҙың, ҡая ярылып, таш эсенән килеп сығыуы (тыуыуы) ла шуны аңлата түгелме һуң? Һәр хәлдә, кешенең ташҡа, таштың кешегә әйләнә алыуы (был урында йәнә «Аҡ бүре» әкиәтен иҫкә алығыҙ) —бер ҙә буш уйҙырма түгел. Уның тамырҙары тәүге таш кешеләр, йәғни ата-бабалар рухын изгеләштереүгә ҡоролған ҡараштар системаһына барып тоташа.

Таштар хаҡында һөйләгәндә, йәнә бер сюжетты иҫкә алмау мөмкин түгел: ул «Киленташ» легендаһының икенсе версияһы: бында әүерелеү мотивы ла, ҡатын кеше һынына оҡшаш таш һын образы ла телгә алынмай.

Хикәйә тормошта була торған йә булыуы ихтимал күренгән фажиғәле хәлдәрҙең береһе хаҡында хәбәр ҡылыуҙан ғибәрәт: имеш, бик уңған бер йәш килен Олотау буйында (Башҡортостандың Әлшәй районы Ташлы ауылы эргәһендә) бейә һауып ултырған ваҡытта көслө дауыл, ғәрәсәт ҡуба ла тауҙан таштар тәгәрәй башлай, шул таштарҙың береһе киленде бейәһе-ние менән баҫып үлтерә. Өскөл формалағы был ҙур ташты «Киленташ» тип шуға атағандар. Күренеүенсә, хикәйә йөкмәткеһендә боронғолоҡҡа туранан-тура ишара яһаған бер генә билдә лә юҡ. Әммә шуныһы хәйерле, риүәйәттең төп сюжет һыҙығын һөйләп, атаманың килеп сығышын төшөндөргәндән һуң, информанттар тыңлаусының иғтибарын «Киленташ»тың мөхитенә йүнәлтеүсән: яҡындағы ер-һыу исемдәренә бәйле легендаларҙы иҫтәренә төшөрөп, шул мөхиткә айырылмаҫлыҡ булып ереккән «Киленташ»тың серен асыуға юл һалалар.

Алда әйтелгәндәрҙән аңлашылыуынса, таш Олотау итәгендә ята. Тауҙың бите, итәге тәгәрәп төшкән төрлө ҙур-

лыҡтағы таштар менән сыбарланған. Өлкән быуын кешеләренең һөйләүенә ҡарағанда, таштарҙың тәгәрәүе уларҙың кешеләргә табан ынтылыуынан килә, имеш. Боронғолар, Олотауға менгәндә түбәнгә таш тәгәрәтергә кәрәк —шулай эшләгәндә сауап була, тип уйлағандар. Тимәк, Олотау — халыҡ аңында ҡәҙимге тау булараҡ ҡына түгел, ә күкрәгендә «тере таштар» һаҡлаған мөғжизәле тау. «Килен-таш» —шундағы таштарҙың береһе. Эргәһенән үткәндә, туҡталып теләк теләү йолаһы —был таштың ҡөҙрәтле көсөнә ышаныуҙың бер сағылышы ул («Киленташ»ҡа ҡарап теләгән теләк ҡабул була, ҡайғылы кешенең ҡайғыһы тарала, тип уйлағандар боронғолар—203, оп. 92, д. 11, л. 40).

«Киленташ»тан саҡ ҡына өҫтәрәк, Олотауҙың битендә, ятҡан «Өҫҡайын шишмәһе» (элек унда ос ҡайын үҫкән, әле уларҙың төптәре генә күренеп ултыра) шулай уҡ изге урындарҙан һаналып, ошо төбәк башҡорттарының йолалар атҡарыу ере булып торған. Ауылға яңы төшкән киленде һыу башлатырға ошонда алып килеп, һыу алғандан һуң «Киленташ» янына алып барып, теләк теләткәндәр. Килен кеше таш өҫтөндәге бәләкәй генә соҡорға һыу һалырға тейеш булған. Ауылдан башҡа ергә кейәүгә сыҡҡан ҡыҙҙар ҙа кейәү йортона күсер алдынан «Киленташ» янына килеп ырым иткәндәр: таштың эргәһенә тәңкә ташлап, йә уның һыртына үҙҙәренең өс бөртөк сәстәрен ҡуйып, «Өҫҡайын шишмәһе»нән алынған һыуҙы һалып (бөркөп), бала, әсәлек бәхете теләгәндәр.

Ырым-ышаныуҙарҙың символикаһына иғтибар итһәк, «Киленташ»тың борон-борондан ҡатын-ҡыҙҙың табыныу урыны булғанлығы, исеменең килеп сығышы ошо йолаларға бәйле икәнлеге аңлашылыр. (Киленде таш баҫып үлтереү мотивы иһә һуңғараҡ дәүерҙәрҙә тыуған булыуы ихтимал.) Был фекерҙе раҫлау өсөн айырыуса һыу менән сәс ярҙамында атҡарылған ырымдарҙың әһәмиәте ҙур. Билдәле булыуынса, донъя халыҡтарының мифологияһында һыу —үрсем тереклеккә йән биреү урыны, хатта үлектәрҙе тергеҙеү ҡөҙрәтенә эйә булған көс. Үрсем символы булараҡ, һыу үҙендә ҡатын-ҡыҙ башланғысын да, ир-ат башланғысын да йөрөтә (4, 240).

«Киленташ»ҡа сәс бөртөктәре һалыуҙың мәғәнәһе лә сәстең магик ҡөҙрәтенә ышаныуҙан килә. Сәсте кеше

тәненең мөһим өлөшө тип ҡарау (боронғолар уйлауынса, сәс —кешенең йәне, магик көстәр урынлашҡан урын) һәм ошо өлөштөң бөтөндө, йәғни кешенең үҙен алмаштыра алыу мөмкинлегенә ышаныу бик күп халыҡтарҙың мифологик ҡараштарында сағыла (233, 41). Боронғоларҙың сәстең үрсем, тергеҙеү ҡеүәһенә ышанғанлығы тураһында ла ғилми әҙәбиәттә мәғлүмәттәр бар (255, 133). Ошоларҙы иҫкә алғанда, «Киленташ» эргәһендә им-том итеүҙең, йәғни һыу менән сәсте ҡушып теләк теләүҙең айышын тоҫмаллау ауыр түгел.

Олотауҙағы «Киленташ»ҡа бәйле ырым-ышаныуҙарҙы тикшергәндә, ирекһеҙҙән, «Ҡыҙҡалатау»ҙар, «Ҡыҙҙар тауы» исемен йөрөткән урындар, улар тураһындағы төрлө риүәйәт-легендалар хәтергә килә. Фәнни хеҙмәттәрҙән күренеүенсә, бындай урындар ер йөҙөндә байтаҡ. Танылған төрөк тарихсыһы Тунжер Байҡара, мәҫәлән, үҙенең «Төрки мәҙәниәте ысынбарлығы: Ҡыҙ башняһы» тигән мәҡәләһендә «Ҡыҙ башняһы», «Ҡыҙ ҡалаһы», «Ҡыҙҙар тауы» кеүек топонимдарҙы тикшереп, бындай исемдәрҙе йөрөткән урындарҙы өс төп төркөмгә бүлә: 1) диңгеҙ, күл һәм йылға утрауҙарындағылар; 2) ҡәлғәне ураҡан стеналағылар; 3) уба һәм ҡая өҫтөндәгеләр. Төп төркөмдәрҙән тыш, автор дүртенсе бүлек итеп, оҡшаш исемле топонимдарҙы теркәй («Ҡыҙ ҡаяһы», «Ҡыҙ ташы», «Ҡыҙ убаһы», «Килен ҡаяһы»...). Яҙмаларҙан күренеүенсә, топонимдар араһында айырыуса йыш осрағаны — «Ҡыҙҙар ҡалаһы» — «Kiz kalasi» (30 урында), «Ҡыҙҙар башняһы» — «Kiz Kulesi» (15 урында).

Төркиәлә бындай типтағы исем йөрөткән урындарҙың күплеген билдәләгәндән һуң, Т. Байҡара башҡа ареалдарҙағы ҡайһы бер топонимдарҙы ла атап китә: Согдияла — «Ҡыҙҙар түбәһе», Ҡарағалпаҡстанда — «Ҡыҙ тауы», Урта Азияла — «Ҡатын тауы». «Ҡыҙ» компонентын йөрөткән бөтә топонимдарҙы төркөмләп сыҡҡас, ғалим был исемдәр күпселектә төркиҙәр йәшәгән урындарҙа осрай тигән һығымтаға килә. Байҡараның икенсе фекере лә иғтибарға лайыҡ: уның буйынса, бындай топонимдар баҫып алыу, ғөмүмән, барыу өсөн ауыр булған ер-һыуҙарға бирелгән (30, 967).

Мәҡәләнең аҙағында Т. Байҡара Ҡытай сығанаҡтарында теркәлгән боронғо һун легендаһын килтерә:

«Һун шаньюйының (батшаһының) бик матур ике ҡыҙы донъяға килгән. Шул тиклем һылыу булғандар ти, хатта күреүселәр уларҙы алиһә тип ҡабул иткән. Шанью: «Бындай һылыу ҡыҙҙарым кешеләргә кейәүгә сыҡмаясаҡ, улар күктәге тәңреләр менән ҡауышасаҡ», — тигән. Шуның өсөн ул алыҫ бер урында бейек башня эшләткән. Ҡыҙҙарын шунда ябып ҡуйған һәм тәңреләрҙән килеп алыуҙарын һорап ялбарған. Өс йыл үткән. Шаньюҙың ҡатыны ҡыҙҙарын унан кире алдырырға теләй. Ләкин Шаньюуның үтенесен ҡабул итмәй. Тағы бер йыл үткән. Был арала башняның янына бер оло бүре оялай. Уға ҡәрҙәштәрҙең кесеһе иғтибар иткән. Аталарының тәңреләргә кейәүгә бирәм тип әйткәнен, оҙаҡ йылдар үтеүенә ҡарамаҫтан, килеп китеүсенең булмауын, бәлки, был бүре —көткән тәңрелер тип, апаһына һөйләгән. Ваҡиға һуңыраҡ асыҡлана. Уларҙың балалары Као-челарҙың (төркиҙәрҙең) ата-бабалары була».

Шулай итеп, Тунжер Байҡара «Ҡыҙ башняһы», «Ҡыҙ ҡалаһы» кеүек топонимдарҙың барлыҡҡа килеүен быуаттар төпкөлөндә тыуған легендаға бәйләй.

Европалағы ҡайһы бер Ҡыҙтауҙарының, ҡаласыҡтарының тарихи ерлеген өйрәнгән акад. Б. А. Рыбаков был тау, ҡаласыҡтарҙың борон ҡатын-кыҙҙарҙың үҙ раббыларына (женским божествам) табыныу урыны булыуын билдәләй. Ундай изге ерҙәрҙә раббылар хөрмәтенә төрлө мәжүси йолалар ҡылынған, ә аҙаҡ, боронғо ҡараштар онотолғас, «Ҡыҙҙар тауҙары»нда, ҡаласыҡтар янында һәр төрлө күңел асыу уйындары, байрамдар үткәрелер булған тип иҫәпләй (249, 285-286).

Башҡортостандың һәр бер төйәгендә осраған «Ҡыҙҙар тауҙары», «Ҡыҙҙар таштары» ла хәҙерге заман кешеләренә уйындар, йыйын-байрамдар үткәрә торған урындар булараҡ билдәле. «Ни өсөн Ҡыҙҙар тауы тип атала ул тау?» тигән һорауға: «Элек унда тик ҡыҙҙар ғына йыйылып уйнаған»,— тип яуаплайҙар информанттар. Боронғо уйындарҙың ниндәй характерҙа булыуы улар өсөн инде асыҡ түгел (ихтимал, ул тауҙарҙың ҡайһыларында ҡасандыр йола уйындары ла уйналғандыр).

Башҡортостандың Краснокама районы Иҫке Мөйөштө ауылы эргәһендәге «Ҡыҙҡалатау» атамаһының барлыҡҡа

килеүе тураһындағы мәғлүмәт тә риүәйәттә һуңғы осор ваҡиғаларына бәйләп аңлатыла, етмәһә, этимологияла мәғәнәүи ҡаршылыҡ булғанлығы күҙгә ташлана: «...Әбей батша (Екатерина II) тороп һуғышҡан тауҙы «Ҡыҙҡалатау» тип, Петр батша (Е. Пугачев) ғәскәре тороп һуғышҡан тауҙы «Петр батша тауы» тип атағандар» (55, 193). Логика буйынса, Әбей батша тороп һуғышҡан тау «Ҡыҙҡалатау» тип түгел, ә «Әбей батша тауы» тип аталырға тейеш.

Иҫке Мөйөштө «Ҡыҙҡалатау»ы археологтар тарафынан иҫәпкә алынһа ла, әле яҡшылап өйрәнелгән ҡомартҡылар иҫәбенә инмәй. Бындай атаманың тыуыуына ниндәй ваҡиғалар сәбәпсе булғандыр, хәҙергә әйтеүе ҡыйын, әммә халыҡтар мәҙәниәтендә универсаль күренештәр булғанлығын иҫтә тотһаҡ, Башҡортостан Ҡыҙҡалатауҙарының исемен дә борондан килгән хәтер яҡтылығының бер сатҡыһы тип уйларға, фараз ҡылырға мөмкинселек асыла. Төрлө төбәктәрҙә таралған бындай Ҡалатауҙарҙың бәғзеләрендә, бәлки, борон ҡатын-ҡыҙ заттары ритуаль йолалар атҡарыу өсөн йыйналғандарҙыр (Көнбайыш Европалағы Ҡыҙҙар тауҙары, ҡалатауҙарҙың табыныу урыны булғанлығы археологик ҡаҙылмалар нигеҙендә асыҡланған бит). Изге урындарҙы тауҙар, таштар тирәһендә күрергә теләүҙең сәбәбе шулай уҡ боронғо мифологик ҡараштар ерлегенә барып тоташа.

Теге йәки был йылғаның ниндәй урындан һәм ҡайһылай (тынысмы, ярһыпмы) ағыуы, һыуының төҫө, ярҙарында ниндәй ағастар үҫеүе һ. б. шуның кеүек үҙенсәлектәрен аңлатыуҙа ла боронғо ата-бабаларыбыҙ үҙҙәренең ҡараш мөмкинселектәренән сығып эш иткән: улар өсөн йылғалар ҙа, күлдәр ҙә йәнле. Был йылғалар «һөйләшә», «асыуланыша», «көнләшә», «рәнйей» ала. «Ағиҙел менән Яйыҡ», «Ағиҙел менән Ҡариҙел», «Ҡалым», «Ике Инйәрҙең бәхәсе» (55, 95 — 97) кеүек сюжеттар — бының асыҡ миҫалы. Телгә алынған легендаларҙа элекке анимистик ҡараштарҙың яңғырашы ишетелеү менән бергә, кеше һәм тәбиғәт араһындағы бәйләнештәрҙең яңы нескәлектәре билдәләнелә. Был әҫәрҙәрҙә кеше тәбиғәт күренештәренә, рельеф үҙенсәлектәренә аңлатма биреп кенә ҡалмай, уларға эстетик мөнәсәбәт тә белдерә. Шуны ла әйтергә кәрәк, күпселек легендаларҙа боронғо мифологик ҡараштар бик алыҫлашҡан формала,

һуңғы дәүерҙәргә хас булған ситуациялар фонында килеп еткән («Ҡалым»),

Йылғалар «бәхәсе», «ярышы» хаҡындағы легендалар башҡа халыҡтарҙың ауыҙ-тел ижадында ла осрай. Миҫал өсөн Волга менән Көнбайыш Двина, Днепр менән Десна «бәхәсен» иҫкә алырға мөмкин. Айырыуса «Или менән Ҡаратал» исемле ҡаҙаҡ легендаһы (132, 95—96) менән башҡорт легендалары араһында яҡынлыҡ ҙур.

Ҡайһы бер йылға-күлдәрҙең барлыҡҡа килеүен аңлатыу боронғо тотемистик ҡараштар күҙлегенән сығып яҡтыртыла. Изгеләштерелгән мал (ат, үгеҙ һ. б.) тояғы, йә мөгөҙө тейгән урында күл, йылға барлыҡҡа килеү мотивы легендаларҙа йыш осрай. Уларҙың культ, тотем хайуандарының тылсымлы ҡөҙрәтенә бәйле булған ҡайһы берҙәрен үҙ урынында күрһәтеп үткәйнек инде. Үгеҙ һөҙөүенән барлыҡҡа килгән күл, шишмә, ҡотоҡ тураһында Башҡортостандың Бөрйән районында, мәҫәлән, әллә күпме легендалар йөрөй. Үҙҙәренең ҡыҫҡа ғына аңлатыу характерында булыуҙарына ҡарамаҫтан, был легендалар боронғо ҡараштарҙы һаҡлауҙары менән әһәмиәтле.

Үгеҙ мөгөҙө йә тояғы тейгән ерҙән һыу сығыу мотивы Себер халыҡтарының легендаларында ла осрай. Ул айырыуса бүрәт хикәйәләрендә киң урын ала. Тәбиғәт объекттарының барлыҡҡа килеүен изгеләштерелгән хайуандар «эшмәкәрлегенә» ҡайтарыу шул тәбиғәттең, ер-һыуҙың үҙен дә изгеләштер еү булараҡ ҡабул ителә.

## «Эйә»ләр

Легендаларҙан күренеүенсә, башҡорттар тәбиғәтте һәм уның айырым күренештәрен йәнләндереп кенә ҡалмағандар, бәлки һәр күренештең үҙ «хужаһы», үҙ «эйә»һе бар тип уйлағандар. Был шулай уҡ боронғо мифологик ҡараштарҙың бер сағылышы. Ер йөҙөн барлыҡҡа килтереүсе өйрәк-демиургтар («Утрау яһаған ике өйрәк») мотивының артабанғы үҫешен сағылдырған «Йөгәмәш тауы» исемле легендала, мәҫәлән, бер кем дә менеп етә алмаған бер тау һүрәтләнеп, был тауҙың башындағы күлдә инә өйрәк менән

ата өйрәк —күгәл һүрәтендә йөрөгән эйәләре барлығы хаҡында хәбәр ителә. Ризуан исемле бер егеттең өйрәктәрҙе атыу өсөн сәмләнеп, бик ҙур ҡыйынлыҡ менән тауға күтәрелеүе һәм инә әйрәкте атыуы, ата өйрәктең асырғанып, ҡаяташҡа ташланып һәләк булыуы эске бер көсөргәнешлек менән тасуирлана (55, 51).

Легендала эйәләрҙең пассивлығы, зарарһыҙлыҡтары ғына һүрәтләнеп ҡалмай, уларҙың шул ер, тау ҡотон һаҡлап тороусы йән эйәләре икәнлектәре лә белдерелә: эйәләренең һәләкәтенән һуң шунда уҡ күлдең юҡҡа сығыуы, эйәһеҙ тороп ҡалған Иөгәмәш тауының сүккәндән-сүгә барып, ер аҫтына бүҫелеп тешәүе —шул хаҡта һөйләй. Атып алған өйрәгенән егет тә изгелек күрә алмай: «...йолҡоп ҡаҙанға һалһалар, өйрәк бешмәй ҙә ҡуя икән. Өс көн, өс төн буйы ҡайнаталар, ти, һаман бешмәй, ти. Таш булып ҡата ла ҡуя, ти. Ахырҙа был ташты яланға сығарып ырғыталар...»

Тәбиғәттә була торған күлдәр ҡороу, тауҙар убылыу кеүек күренештәр, шулай итеп, боронғо кешеләр аңында «эйә»ләрҙең асыуы рәүешендә күҙ алдына килтерелгән. Шуға ла кешеләр «эйә»ләрҙе асыуландырмаҫҡа, киреһенсә, уларҙың күңелен күрергә тырышҡандар. Тау итәгендә ҡорбан салыуҙар, төрлө хәйер һалыуҙар ошо тау эйәһе рухына арналып эшләнгән. С. И. Руденко XX быуаттың башында Көньяҡ Урал тауҙарының ҡайһы бер урындарында тау эйәләре хөрмәтенә һалынған хәйер-саҙаҡаны (тәңкәләр, материя киҫәктәрен) күпләп үҙ күҙҙәре менән күргәнлеге хаҡында яҙып ҡалдырған (247, 317 — 318).

Тау эйәһенә саҙаҡа килтереү һирәкләп һуңғы ваҡыттарҙа ла осрай, тик был йоланың йөкмәткеһенә ислам дине йоғонтоһо тейгәнлеге күренә: саҙаҡа Мөхәммәт пәйғәмбәр баҫҡан бейек ҡая ташҡа һалына: «...Таштар иреп ятҡан бик эҫе ваҡытта Мөхәммәт пәйғәмбәр бер улы менән тау башынан шунда һикергән. Был ташты хәҙер «изге таш» тип йөрөтәләр. Юлдан үтеп йөрөүсе кешеләр — йәше, ҡарты шул таш эргәһендә туҡталып китәләр. Ҙур аяҡ эҙенә сәскә, еләк, муйыл, бик булмаһа, матурыраҡ таш киҫәге булһа ла һалып китәләр» (203, оп. 73, д. 72, л. 251).

Ғилми әҙәбиәттән күренеүенсә, боронғо төркиҙәр айырыуса бейек тауҙарҙы ҙурлар булғандар. Уларҙың уйлауы бу-

йынса, бейек тауҙар изге Күк тәңрегә яҡыныраҡ тип иҫәпләнгән (230, 35). Башҡорт легендаларында һүрәтләнгән изге тауҙар шулай уҡ бейек: Мүсектау, Йөгәмәш тауы, И. И. Лепехин, С. И. Руденко яҙмаларында изгеләштерелгән тауҙар булараҡ телгә алынған Торатау, Мәсемтау (168, 31 —32; 247, 317).

«Йөгәмәш тауы» легендаһында эйәнең «асыуланыуынан» кеше шәхси бәлә күрмәй, әҫәр нигеҙҙә тәбиғәттең ҡото китеүгә иғтибарҙы йүнәлтә. Әммә элегерәк яҙып алынған башҡорт легендаларында изге Торатауҙа насарлыҡ эшләгән бер кешенең нәҫеле ҡороуы, уның мең бәләгә тарыуы хаҡында һөйләнелә (168, 31 —32). С. И. Руденконың әйтеүенә ҡарағанда, башҡорттар эйәләрҙе, айырым алғанда тау эйәһен, асыуландырмаҫҡа тырышҡан. Эйәләре бар тип иҫәпләнгән тауҙар эргәһендә һүгенеү, хатта һөйләшеү тыйылыр булған (248, 22—23).

Һыу эйәләре хаҡында легендалар һәм хөрәфәти хикәйәләр хәҙергә бик аҙ яҙып алынған. Булған материалға ҡарағанда, һыу эйәһе һыу аҫтында мал-байлыҡ һаҡлаусы хужа итеп күҙ алдына килтерелә. Силәбе әлкәһендә Б. Әлмәтов тарафынан яҙып алынған бер хөрәфәти хикәйәлә һыу эйәһенең ҡиәфәте, ҡылған ҡылыҡтары һәм вазифаһы түбәндәгесә тасуирлана: «һыу эйәһенең малдары күп була. Бейташ күле буйында уның йылҡылары килеп сыҡты. Намаҙымды боһмай (боҙмай. — Ф. Я.) уҡып ултырҙым, тип ҡартатайым әйтә ине.

Ҡартатайым һыу эйәһенең һыйырын да күргән. Ҙур, ти, мал кеүек, ти. һыу эйәһе аттың сәсен, ялын үреп ҡуя. Малдың көтөүсеһе булып йөрөй. Үҙе кешнәп йөрөй, ти. Ҡырҙа малды көтөп йөрөй, төндә ҡарауыллай, ти. Ҙур һыуға төшһәң, һыу эйәһе тарта башлай, тиҙәр бит» (203, оп. 26, д. 10, л. 159).

Һыу эйәһен мал хужаһы итеп күҙаллау «Йылҡысыҡҡанкүл» (55, 92) исемле киң билдәле легендала ла асыҡ күренә. Ябай ғына сюжетлы был легендала ғәҙәти булмаған ваҡиғалар, ғәжәйеп архаик мотивтар урын ала. Әҫәрҙә төп персонаждарҙың береһе булып күл эйәһе тора. Кеше ҡулына килеп эләккән сәйер төҫтәге эт тә, һыу төбөнән сыҡҡан йылҡы өйөрө лә —шул күл эйәһенең милке. Легенда кеше

менән «хужа» араһында ошо милек өсөн барған үҙенсәлекле алышты һүрәтләй. Был алыш, әлбиттә, әкиәт, эпос батыры менән аждаһалар, дейеүҙәр араһында йә йәшәү, йә үлем өсөн барған көсөргәнешле көрәш түгел, ул бында һөйләшеү нигеҙендә бара. Ләкин ирешелгән һөҙөмтәгә ҡарап (күл эйәһенең үҙ этен ҡайтарыу өсөн кешегә йылҡы өйөрө биреүе), был һөйләшеүҙең шаҡтай киҫкен булғанлығы күренә.

Ошо ваҡиғалар аша йәмғиәт, аң үҫешендәге бик мөһим ижтимағи күренештәр сағылғанлығына тикшеренеүселәр иғтибар иткәйнеләр инде. Һунар эте урынына кеше ҡулына йылҡы өйөрөнөң килеп инеүен Кирәй Мәргән «тәүтормош йәмғиәтендәге үҫеште, һунарсылыҡтан мал эйәләштереүгә күсеүҙе сағылдыра торған мотив» тип билдәләгәйне (135, 37 — 38). Артабан был фекер Әхмәт Сөләймәновтың мәҡәләләрендә ҡеүәтләнде (269, 112—115).

Әммә беҙҙе был урында «эйә» мәсьәләһе ҡыҙыҡһындыра. Легенданан аңлашылыуынса, эйә яуыз йән эйәһе түгел, шул уҡ ваҡытта уның кешегә күрһәткән изгелеге (мал биреүе) — сараһыҙҙан эшләнгән эш. «Йылҡысыҡҡанкүл» легендаһында күл эйәһенең сараһыҙҙан башҡарған эше —кешенең тәбиғәт «хужа»ларын еңергә ынтылыу хыялының бер сағылышын символлаштырыусы ғәжәйеп тәрән бер деталь ул. Эйәләрҙе еңеү, уларҙың көсөн үҙ мәнфәғәтенә яраштырыу теләге С. И. Руденко яҙып алған бер башҡорт әкиәтендә лә бик асыҡ сағылған: хәйлә ярҙамында бер ҡарттың улы һыу эйәһенең ике йөк алтынына эйә булыуға ирешә (248, 24-25).

Башҡорт легендалары һәм хөрәфәти хикәйәләрендә һыу инәһе хаҡында ла (203, оп. 26, д. 10, л. 159) аҙмы-күпме мәғлүмәттәр һаҡланып ҡалған, һыу инәһе ҡояш сығыу алдынан, һыу ситенә сығып, алтын тараҡ менән сәсен тараған йә йыуынып ултырған ҡатын-ҡыҙ сүрәтендә күҙаллана. Боронғо ҡараштарҙың үҙгәрә, онотола барыуы сәбәпле халыҡта йыш ҡына образдарҙы бутау күренештәре лә күҙәтелә. Мәҫәлән, Йылайыр районының Ҡашҡар ауылында яҙып алынған бер легенда «Эйәле күл» (55, 50) тип аталһа ла, текста һүҙ һыу инәһе хаҡында бара: был легендала һыу эйәһенең ҡылығына хас булған бер генә һыҙат та юҡ. Әммә

төшөнсәләр, образдар буталыу арҡаһында, хикәйәнең аҙағы «эйә»ләр асыуы яҫылығында хәл ителгән (эйәнең ҡасыуы күлдең ҡороуына килтерә), һыу инәһе менән һыу эйәһенең ике, ләкин бер-бер еһенә яҡын образ булыуы башҡа төрки халыҡтарының (Ҡазан, Себер татарҙары, мишәр, ҡумыҡ, ҡарасәйҙәрҙең) мифологик хикәйәләре (143, 471) миҫалында ла яҡшы аңлашыла.

Һыу инәһе лә, һыу эйәһе лә —кеше аңында тыуған бик боронғо образдар. Уларҙың ҡиәфәте, функцияһы, уларға булған ҡараш һәр жанрҙа ла бер үк төрлө булып бөтмәҫкә мөмкин. Башҡорт легендалары һәм хөрәфәти хикәйәләренән күренеүенсә, бер осраҡта улар ҡотло урын эйәләре, икенсеһендә — шомло, ҡурҡынызлы ерҙең хужалары. Ике осраҡта ла уларҙы «асыуландырыу» яҡшыға алып килмәй. Шуға күрә эйәләрҙең «күңелен күреү», төрлө йолалар атҡарыу фарыз булған. Килендәрҙе һыу башлатҡанда һыуға тәңкә һалыу йолаһы —нәҡ ана шул һыу инәһе менән һыу эйәһенә ҡорбан килтереүҙең ҡалдыҡ бер формаһы ул.

Һыуҙы изгеләштереү, уға табыныу мотивының тарихи ерлеге һыуҙың кеше тормошонда уйнаған ифрат ҙур роле менән аңлатыла. Бер яҡтан —һыуһыҙ йәшәү юҡ, икенсе яҡтан—һыу ваҡыты-ваҡыты менән кешеләргә бәлә-ҡаза килтереүсе стихия (ташҡындар, һыуға батып үлеүселәр һ. б.). Халыҡ мәҡәлендә әйтелгәнсә: «Ут та —бәлә, һыу ҙа —бәлә. Ут менән һыу булмаһа, тағы ла бер бәлә» (57, 416).

Күл эйәләре менән мал төшөнсәһен бәйләү мотивының барлыҡҡа килеүе лә буштан ғына тыуған мотив түгел: ҡағиҙә буларaҡ, һыулы урындарҙа үләндәр ҙә күпереп үҫеүсән, гимәк, легенда персонажына әйләнгән ҡырағай аттар, ғөмүмән, мал шул туҡлыҡлы тупраҡ, эсәр һыу тирәһендә күберәк тупланыр булғандыр.

Әммә бында шуны ла әйтергә кәрәк. Тәрән, мул һыулы йылға-күлдәр, дөйөм алғанда, кешеләрҙең тормош-көнкүрешенә ыңғай шарттар тыуҙырһалар ҙа, ваҡыты-ваҡыты менән (яҙғы ташҡындар, ел-дауыл, ғәрәсәттәр мәлендә) улар әҙәм балаларына бәлә-ҡаза, зыян, һәр төрлө ауырлыҡтар ҙа килтергеләй. Хатта ҡәҙимге саҡтарҙа ла бындай һыуҙар күпмеләр дәрәжәлә кешеләр өсөн хәүефле (һыуға батып үлеү

осраҡтары ғәҙәттә тәрән, ҙур һыу ятыулыҡтарында була). Борондан килгән аңға ярашлы диңгеҙ, йылға-күлдәр, һаҙлыҡтар, урман төпкөлдәре, тау тишектәре әҙәм заттары тарафынан аҫҡы, «теге» донъя булып ҡабул ителгән. Шуға ла уларҙың хужа, эйәләре ер кешеһе өсөн күңелгә шом һалыусы дәһшәтле сит көс булып та иҫәпләнгән. 2002 йылда «Ватандаш» журналының 6-сы һанында баҫылған бер материалдан күренеүенсә (уны Учалы районының Миндәк ҡасабаһынан күбәләк ырыуы башҡорто Ғиззәтуллина Мәрхәбә Сәғит ҡыҙы яҙып ебәргән), тәбиғәт хужалары, эйәләр, йәғни теге донъя вәкилдәре ғаиләләре менән ер кешеләренә зыян килтереү менән мәшғүл, имеш. Шундай ышаныуҙар сағылған һирәк яҙмаларҙың береһе булғанлыҡтан, Мәрхәбә Ғиззәтуллинаның мәғлүмәттәрен тулыһынса килтереү урынлы булыр: «һыу инәһенең, мәскәйҙең ике балаһы бар: Ҡаран һәм һаран. Улар кешегә тик яманлыҡ эштәйҙәр: ярҙы йыуалар, һыуҙы ҡумырыҡтайҙар, кәмәләрҙе тишәләр, күперҙе осоралар. Ҡаран-һаран игеҙәк, береһе —уңға, икенсеһе һыуҙың һул ярына хужа, тик бергә һөжүм итәләр. Үҙҙәре күренмәй: берәүһе һыу бирмәй ҡаңғырта, икенсеһе артыҡ таштыра. Йәшәгән урындары — күлдән сыҡҡан ҡылыу һыуҙары. Ҡарттар әйтә торғайны: Өскүл, Оҙонкүл күлдәрендә, Биҙгенде буйында бар алар, тип. һыу һарғайып китһә — һаран хужа, ҡарайып китһә —Ҡаран хужа ваҡыты, тиҙәр. Аталары аларҙың — Убыр, инәләре —һыу инәһе. Убыр тик бер ер-һыуҙа ятһа, мәскәй ҡойон аша күсеп йөрөй. Төп йорто — Мауыҙҙы күле. Ҡаран һәм һаран —ир бала. Шуға тик йәш ҡыҙҙарҙы урҙай, ҡытыҡтай. Аларҙың ҡурҡҡаны — ҡороҡ арҡаны, ишелгән сыбыртҡы, ҡайыш билбау. Элек батырҙар шуларҙы һалып, Ҡаран-һаранды тотоп, яһаҡ түләткән. Әйткәндәй, Миндәк ҡасабаһы һәм Килмәк араһында ятҡан күл —Миһеле, йәғни Маҙалы. Батҡыл, кәрәкә булғанға шундай атама биргәндәр. Ул күл йыл һайын кешене ҡорбан итә. Шул булмаһын өсөн элек әбейҙәр ялтырауыҡ әйбер күлгә таштаған. «Мә, һиңә бүләк, төбөң булһын түйләк!»— тигәндәр. Әле Ҡаранйылға Миһеле күленә төшә, һаран ҡылыу күлдән сығып Табылғашты йылғаһына ҡоя».

Үрҙә килтерелгән текста телгә алынған Мауыҙҙы күле Башҡортостандың Әбйәлил районында урынлашҡан иң тәрән күлдәрҙең береһе (хәҙер уны Яҡтыгүл тип йөрөтәләр. Банное тигән исеме лә бар). 1981 йылда ҡағыҙға теркәлгән икенсе бер риүәйәт күлдең элекке исеменең килеп сығышын түбәндәгесә аңлата: «...Күлдең эйәһе — ялмауыҙы булған. Был яман мәскәй күлде өйөрөлтөп йөрөткән. Күлгә януар, ҡош-ҡорт килергә ҡурҡҡан, һыу эсергә килгән береһен асыулы сағында йотоп алып торған. Хатта күл өҫләп һауанан осоп барған ҡошто ла тартып алған, тиҙәр. Шуға эйәле был күлде «Мауыҙлы күл» тип атағандар.

Эйәләр хаҡындағы легенда һәм хөрәфәти хикәйәләрҙе һәм уларға бәйле йолаларҙы байҡағанда, түбәндәге бер үҙенсәлек күҙгә ташлана: халыҡ араһында, ғөмүмән, тау эйәһе, ғөмүмән, күл, йылға һ. б. урындар эйәһе юҡ. Легендаларҙа, хөрәфәти хикәйәләрҙә, ғәҙәттә, конкрет бер тауҙың, күлдең <...> эйәһе, уның ҡылыҡтары, ҡиәфәте тураһында ғына һүҙ алып барыла.

Төрки халыҡтарының мифологияһындағы ер эйәһе, ер инәһе тигән төшөнсә лә (хәҙер ул бик һирәк осрай), ғөмүмән, ерҙе аңлатыуға ҡарағанда, конкрет бер урынға бәйле «эйә»не аңлата, булһа кәрәк. Хәҙерге беҙгә билдәле булған башҡорт легендалары һәм хөрәфәти хикәйәләре араһында «ер эйәһе» образын айырым-асыҡ итеп тасуирлаған сюжеттар юҡ. Әммә был төшөнсәнең ҡасандыр башҡорт ата-бабаларының аңында йәшәгән булыуы ҡайһы бер легендаларҙа ярайһы уҡ яҡшы тоҫмаллана. Был легендалар буйынса, ер (урын) эйәһе — дәһшәтле көс, уның изгелеген күреү өсөн кеше үҙе уға изгелек эшләргә тейеш. Был изгелектең «хаҡы» —кеше ҡорбаны, һис юғында уны алмаштырыусы икенсе тере йән (мәҫәлән, эт). Ошондай архаик идеяны йөрөткән уникаль бер легенданы 1982 йылда Башҡортостандың Бөрйән районында Башҡорт дәүләт университеты студенткаһы Р. Уразаева яҙып алған. Ҙур ғилми ҡиммәтен иҫтә тотоп, түбәндә легенданың тексы тулы көйө килтерелә:

«Ирәмәл тауы буйында кешеләр өй һала алмай этләнәләр, ти. Кирбестән матур итеп һалалар, ә тегене ер (ел? — ***Ф. Н.)*** ауҙара ла китә икән.

Шулай бер көн фәрештә килә лә: «һеҙ күпме ыҙаланһағыҙ ҙа, эш сығара алмаçһығыҙ: был өйҙөң нигеҙе әҙәм ҡаны һорай бит,— тигән. — Әгәр берәй кешегеҙҙе үлтереп, шуның ҡаны менән балсығығыҙҙы иҙеп өй һалһағыҙ ғына, өйөгөҙ емерелмәç»,— тип өçтәгән, ти, был.

Уйланып торалар икән. Шунан бер Азамат исемле егет ҡанын бирергә риза булған. Ата-әсәһе, туғандары менән ризалашып, һаубуллашҡандан һуң, өй һалыр өсөн ҡанын биргән. Ул үлгән. Ошо көндән алып, кешеләр «Азамат көйө» сығарғандар. Улар Азаматты һағынып, уны хөрмәтләп иçкә алғандар» (301, 122).

«Азамат көйө» кешене ҡорбан итеү мотивын һаҡлаған берҙән-бер легенда түгел. Был мотив 1964 йылда Башҡортостандың Әлшәй районында яҙып алынған бер легендар риүәйәттә лә осрай. Риүәйәт ер ҡуйыны һаҡлаған бер хазина хаҡында: «Нарыçтауҙа Ҡайынçил тигән урын бар. Шул урында, бер оло таш аçтында бер кәмә көмөш тәңкә булыр. Шунда барып көл иләһәң, теге таш йәнләнә икән. Кәлгә ни аяғы менән баçһа, шуны ҡорбанлыҡҡа салаһың. Тәңкә ҡалҡа. Әҙәм баçа икән, уның да ҡанын сығаралар.

Быны беҙ бәләкәй саҡта бер әбей һөйләгәйне» (203, оп. 47, д. 1, л. 63).

Риүәйәттәге «әҙәм ҡанын сығарыу» тураһындағы мәғлүмәт туранан-тура кеше салыу мәғәнәһен бирмәй, әммә шул бик боронғо йоланың имитацияһы (бер ерҙе киçеп, кәлгә ҡан тамыҙыу) хаҡында һүҙ барғанлығы аңлашыла.

Ҡорбан салыуҙа кешене хайуан менән алмаштырыу — аң үçешендәге һуңғараҡ этап. Башҡорт һәм башҡа бик күп халыҡтарҙың легендаларында ошо этапҡа хас ҡараштарҙы йөрөткән мотивтар ҙа һаҡланып ҡалған. Бының миçалы — башҡорт һәм татар халыҡтарының Ҡазан ҡалаһын төҙөүгә бәйле легендалары (ул легендалар монографияның беренсе бүлегендә ҡаралды).

Тәбиғәткә табыныу, уның «эйә»ләренә ҡорбан килтереү — универсаль күренеш. Уны төрлө ҡитғаларҙа йәшәүсе төрлө халыҡтарҙың ауыҙ-тел ижады материалдарында күрергә мөмкин (175, 15-16; 138, 447; 105, 39-40; 324, 146; 94, 130; 12, 59-60; 261, 51-52).

Төрки халыҡтарының ауыҙ-тел ижадын, йолаларын, яҙма ҡомартҡыларын өйрәнеүселәр (С. Е. Малов, С. Г. Кляшторный, Л. П. Потапов, Н. А. Алексеев һ. б.) боронғо төркиҙәрҙең иң ҙур хоҙайҙары булып Күк-Тәңре, У май (Һомай), Ер-Һыу иҫәпләнгән тигән фекерҙә торалар. Был фекер тотошлайы менән башҡорт фольклоры һәм этнографияһы материалдары менән дә нығытыла. Бына, мәҫәлән, мең йыл элек ҡағыҙға теркәлеп ҡалған Ибн-Фаҙлан яҙмалары: «Уларҙың (башҡорттарҙың. — ***Ф. Н.)*** ҡайһылары ун ике раббыбыҙ бар, тип фекер йөрөтә. Йәғни: ҡыш раббыһы, йәй раббыһы, ямғыр раббыһы, ел раббыһы, ағастар раббыһы, кешеләр раббыһы, хайуандар раббыһы, көн раббыһы, төн раббыһы, тереклек раббыһы, үлем раббыһы, ер раббыһы. Ә инде күктәге рабб — быларҙың иң олоһо...» (139, 131).

Орхон-Енисей руна ҡомартҡыларында теркәлгән Ер-Һыу төшөнсәһе башҡорт легендаларында туранан-тура сағылыш тапмай, ул нигеҙҙә изгеләштерелгән тау-таш, йылға, урын рәүешендә күҙ алдына баҫтырыла. Әммә халыҡ хәтере тәрән генә түгел, күп тармаҡлы ла: изгеләштер елгән Ер-Һыу образы, уға һалынған оло мәғәнә, тәбиғәт культын ата-бабалар рухы менән бәйләнештә аңлау, донъяға монистик ҡараш эпос кеүек монументаль жанрҙа, атап әйткәндә, «Уҙаҡ менән Туҙаҡ — балабәшнәк ярсығы» ҡобайырында, иҫ киткес бер ҙур оҫталыҡ менән әйтеп бирелгән:

Ер-Һыу —йөрәк тибешем,
Ер-Һыу —минең төп ишем,
Атайымдың төҫө ул,
Беләгемдең көсө ул,
Йөрәгемдең хисе ул,
Зиһенемдең көсө ул.
Тик шулай ҙа эҙләгәнем —
Үҙем ише кеше ул.

Ер-Һыу менән әҙәм йәне —
Мин Уҙаҡтың ише ул.
..................
Ер-Һыу тәне —кеше ул,
...................
Ер-Һыу — кешенең ише ул,
Ер-Һыуҙың ише —кеше ул!»
(291, 125).

Килтерелгән миҫалдың һуңғы өс юлы айырып аңлатыуҙы талап итә, сөнки бында «Уҙаҡ менән Туҙаҡ»та һаҡланған мифологик ҡараштарҙың иң боронғо ҡатламын сағылдырыуҫы «Ер-Кеше» мотивы урын ала. Уның асылына төшөнөр өсөн уҡыусының донъя мифологияһындағы космогоник ҡараштар менән хәбәрҙар булыуы кәрәк. Төбәп әйткәндә, тәү

мөхиткә бәйле тыуған төрлө мифтар араһында Ерҙең ғаләмде тултырып торған гигант кеше ҡиәфәтендә күҙалланыуы, йәнәһе, шул ғәләмәт дәү кешенең тән ағзаларынан тәбиғәт объекттарының хасил булыуы (башынан —күк көмбәҙе, күҙҙәренән меңәрләгән йондоҙҙар, сәстәренән — урмандар...) тураһындағы скандинав, вавилон, һинд, ҡытай мифтарын хәтерләтергә тура килә (Имир, Гайомарт, Тиамат, Пуруша, Паньгу образдары).

Әле һүҙ барған эпик ҡомартҡыла төрлө сәбәптәр арҡаһында «Ер-Кеше» мотивын йөрөткән архаик мифтарҙың беҙҙең көндәргә айырым ярсыҡтары ғына килеп еткән. Алтайлылар мифында асыҡ һүрәтләнгән «Ер-Һыу — кешенең ише, игеҙәге» мотивы ла ярсыҡ хәлендә. Ни өсөн тигәндә, эпос йөкмәткеһендә һуңғы дәүерҙәр йоғонтоһонда тыуған фекерләүҙәр, хәҙерге заман кешеһенең тормошто күҙаллауын сағылдырған һыҙаттар ярайһы уҡ ҙур урын алған. Икенсенән, «Уҙаҡ менән Туҙаҡ...» башынан аҙағына тиклем мифологияға ҡоролған әҫәр түгел. Киреһенсә, уның тәғәйенләнеше — фажиғәгә осраған балабәшнәк ырыуының яҙмышын, йәғни тарихи ваҡиғаларҙы һүрәтләү, һәр халыҡтың йәшәүе, көн итеүе уның тыуған төйәгенә, еренә бәйле булғанлыҡтан, эпостағы Ер-Һыу образы изгеләштер елгән тәбиғәтте генә түгел, аңдағы ил-йорт төшөнсәһен дә бирә. Ошо төшөнсәнең мәғәнәһен, бөйөклөгөн аңлатыу һәм данлау өсөн сәсәндәр халыҡтың тарихи хәтеренә мөрәжәғәт итеп, борондан килгән миф-легендаларҙағы, ҡобайырҙарҙағы образдарҙы, ҡалыплашҡан әҙер шиғри юлдарҙы файҙаланған (фольклорҙа был йыш осрай). Тәбиғәт менән кеше берлегенең даими ысынбарлыҡ булыуы, шуның һөҙөмтәһендә тыуған фәлсәфәүи ҡараштарҙың һәр саҡ актуаль ҡалыуы Ер-Һыуға бәйле боронғо фекерләүҙең һуңғараҡ дәүер әҫәрҙәренә тәбиғи рәүештә инеп китеүенә сәбәпсе булған.

Алда әйтелгәндәрҙе ҡыҫҡаса йомғаҡлап, шуны әйтергә мөмкин. Тотемистик, анимистик һ. б. архаик ҡараштарҙы сағылдырған легендалар һәм хөрәфәти хикәйәләрҙең бөтәһе өсөн дә тиерлек «тәбиғәтте кешеләштереп, ә йәмғиәтте тәбиғиләштереп» аңлау хас. Әйберҙәрҙе «йәнле» һәм «йәнһеҙгә» бүлеү — тәүтормош кешеһенең аңы өсөн әле ят күренеш.

Боронғо кешенең бер әйбергә бүтән әйберҙәрҙең сифатын «ҡушып» аңлауы күп һанлы легендалар миҫалында күҙәтелә.

Ғаләм, күк есемдәре, ер-һыу, ундағы тереклектәр — быларҙың бөтәһе лә серле көс, мөғжизә рәүешендә ҡабул ителеп, табыныу объекты булып торған. Дороҫ, бындай боронғо ҡараштарҙың байтағы хәҙер бик тарҡау һәм алыҫлашҡан хәлдә килеп еткән.

Легендаларҙа сағылған донъя берҙәмлеге менән хосуси әйбер йәки зат араһындағы мәғәнәүи мөнәсәбәтте күреү өсөн әллә күпме материалды бер системаға килтереү, тарихи-этнографик сағыштырыуҙар алып барыу талап ителә.

Башҡорт легендалары һәм хөрәфәти хикәйәләрендә урын алған мифологик ҡараштарҙың бөтәһе лә боронғо төркиҙәрҙең һәм башҡа күп кенә халыҡтарҙың мифологик ҡараштары менән ауаздаш. Бер яҡтан был мөһим күренеш башҡорт этногенезының формалашыуында бик боронғо этник элементтарҙың ҡатнашыуы хаҡында һөйләүсе әһәмиәтле дәлилдәрҙең береһе булһа, икенсе яҡтан — тарихи-мәҙәни, типологик бәйләнештәрҙе сағылдырыусы дәлил ул.

Боронғо ырым-ышаныуҙарға нигеҙләнгән легенда һәм хөрәфәти хикәйәләр халыҡтың ижтимағи аң үҫешен, художестволы-эстетик ҡараштарының формалашыуын, уларҙың эволюцияһын кәүҙәләндереү йәһәтенән дә ҡиммәтле сығанаҡ булып тора.

*Өсөнсө бүлек*

# ТАРИХИ, ТОРМОШ-КӨНКҮРЕШ РИҮӘЙӘТТӘРЕ

## Тарихи-генеалогик риүәйәттәр

Башҡорт халыҡ хикәйәләренең иң ҙур һәм мөһим бер төркөмө — тарихи риүәйәттәр. Алдағы бүлектәрҙә күргәнебеҙсә, тарихилыҡ теге йәки был дәрәжәлә риүәйәт һәм легендаларҙың бөтәһендә лә бар. Әммә факт менән уйҙырманың нисбәтенә ҡарап, ваҡиғаның конкрет тарихи ерлеге төрлөсә күҙ алдына килтерелә.

Тарихи риүәйәттәр төркөмөнә, ғәҙәттә, реаль нигеҙе асыҡ билдәле булған халыҡ хикәйәләрен индереп йөрөтәләр. Уларҙың һүрәтләү объекты булып ижтимағи әһәмиәтле ваҡиғалар һәм шул уҡ ваҡиғаларға бәйле булыуы менән танылған шәхестәр тора. Ләкин XX быуаттың икенсе яртыһында «тарихи риүәйәт» тигән төшөнсәгә киңерәк ҡарау тенденцияһы билдәләнә башланы. Этнограф В. И. Васильевтың, мәҫәлән, тарихи риүәйәттәрҙе тарихи-генетик һәм «саф тарихи» төркөмдәргә айырып ҡарағайлығы күренә (77, 114). Танылған фольклорсы В. К. Соколова иһә ырыу-ҡәбилә тарихы хаҡындағы халыҡ хикәйәләрен тарихи риүәйәттәрҙең боронғо ҡатламы итеп ҡарай, сөнки бындай әҫәрҙәр, «саф тарихи» риүәйәттәр һымаҡ, ижтимағи әһәмиәтле мәсьәләләрҙе күтәрә (265, 7).

Башҡорт легенда һәм риүәйәттәрен ентекләп тикшереү ерлегендә лә ошо уҡ фекер раҫлана. Ата-бабаларҙың сығышын, йәшәгән урынын, уларҙың ниндәй ҡәбиләләр менән

аралашыуын сағылдырған риүәйәт, легендалар оло ижтимағи әһәмиәтле мәсьәләләрҙе күтәреүсе тарихи хикәйәләр булып тора. Тик реаль ерлеге асыҡ билдәле булған тарихи риүәйәттәрҙән айырмалы рәүештә, генеалогик риүәйәт-легендаларҙың бер өлөшөндә уйҙырма, фантастик мотивтар ҙур урын ала. Был тәбиғи хәл, әлбиттә, сөнки теге йәки был халыҡтың сығышы сал тарих төпкөлөндәге ваҡиғалар рәтенә инә. Ә инде бик боронғо ваҡиға, күренештәрҙе аңлау һәм аңлатыу кешеләрҙең аң-торошона ҡарап, төрлө заманда төрлө кимәлдә атҡарылған. Тотемистик ышаныуҙар һәм культтар күҙлегенән аңлатылған этногенетик ҡараштар хаҡында үрҙә байтаҡ һүҙ булғанлыҡтан, бында уларҙы ҡабатлап тороуҙың кәрәге юҡ.

Теге йәки был ырыуҙарҙың, нәҫел, араларҙың йәшәгән төйәге, унда ерле халыҡ булыу-булмауы, башҡа ырыуҙар менән мөнәсәбәттәре тураһындағы күп кенә сюжеттар саф тарихи риүәйәттәр төркөмөнә бик яҡын. Уларҙы тарихи риүәйәттәрҙең тематик үҙенсәлекле бер тармағы тип әйтергә мөмкин. А. Г. Бессонов яҙып алған «Башҡорт тарихы», «Башҡорттарҙың килеп сығышы», «Әйләләр менән Табындар» тигән риүәйәттәр — былдай тип әҫәрҙәрҙең асыҡ миҫалы. «Башҡорт тарихы» тигән риүәйәттә, мәҫәлән, Барын менән Табын ырыуҙарының килеп сығышы тураһындағы легендар мәғлүмәттәрҙән һуң һөйләнелгән хәл-ваҡиғалар (башҡорттарҙың 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашыуы, башҡорт-ҡаҙаҡ барымталары, хәрби хеҙмәт рәүеше һ. б.) тарихи дөрөҫлөккә тап килә, улар хаҡында хикәйәләү нәҡ тарихи риүәйәттәр рухында бара.

«Әйләләр менән Табындар» риүәйәтендә һөйләнелгән хәлдәр —Табын ырыуы башҡорттарының аҡ батшаға барып, үҙ ерҙәренә хужа булыуҙарын раҫлаған грамоталар алып ҡайтыуы — хаҡындағы мәғлүмәттәрҙең тарихи ерлеге яҙма документтар нигеҙендә нығытыла (177, 80—81).

Тормошта булған ысын ваҡиғаларҙы һөйләү тарихи-этногенетик риүәйәттәрҙә ҡайһы ваҡыт уйҙырма хикәйәләр менән аралашып китә. «Башҡорттарҙың килеп сығышы» тигән риүәйәттәге Егет батша менән Ҡыҙ батша алышы тураһындағы мотивтың бирелеше, мәҫәлән, шундайҙарҙан. Риүәйәт, нигеҙҙә, Әйле ырыуы башҡорт ата-бабаларының

Әй буйынан Урал аръяғына күсеп килеү рәүешен һәм артабан нисек итеп йәшәп китеүҙәрен һөйләүгә ҡоролған. Егет батша менән Ҡыҙ батшаның алыш мотивы иһә Киҙәгәс күле эргәһендәге (хәҙерге Силәбе әлкәһе Арғаяш районындағы урын) ике уба исеменең килеп сығышын аңлатыу ниәтенән индерелгән. Алыштың сәбәбе —Егет батшаның Ҡыҙ батшаға әйләнергә теләүе, шул айҡанлы ҡыҙҙың шарт ҡуйыуы: «Былай ғына сыға алмайым, тәүҙә батырлығыңды күрһәт. Мин —был түбәнән, һин анау түбәнән тороп уҡ атышып ҡарайыҡ» (55, 66).

Ҡыҙҙың егетте никах алды һынауы аша үткәр еүе — билдәле мотив (был йәһәттән төрки халыҡтарының, шул иҫәптән, башҡорттарҙың «Алпамыша менән Барсынһылыу» эпосын иҫкә алыу ғына ла етә), фәндә ул мотив «матриархат менән патриархат араһындағы көрәштең образлы сағылышы» (135, 201) булараҡ аңлатылды. Бик күп миҫалдар нигеҙендә әйтелгән был фекерҙе артабан дауам итеүҙең кәрәге юҡ, ә бына риүәйәт-легендалағы амазонкалар мотивына ҡыҫҡаса туҡталып үтеү артыҡ булмаҫ. Ни өсөн тигәндә, яу сабыусы, яу башлап йөрөүсе ҡатын-ҡыҙ (амазонкалар) тураһындағы сюжеттар беҙҙең фольклористикала тикшерелмәгән. Ҡайһы бер сюжеттарҙа был мотивтың ярсыҡтары ғына күренеп ҡала («Батмағош туғайы», «Ырғыҙ»), бәғзе риүәйәттәр үҙҙәре бик ҡыҫҡа («Әбейхан-Ата»), А. Г. Бессонов яҙып алған риүәйәт-легенда иһә, күләме яғынан артыҡ ҙур булмаһа ла, амазонкалар мотивын ярайһы уҡ яҡшы һаҡлаған әҫәр булыуы менән ҡыҙыҡлы. Иғтибарға лайыҡ деталдәрҙең береһе шул: туй алдынан егет менән алышыусы ҡыҙҙың батша булыуы (фольклор традицияһында ул күберәген батша ҡыҙы, хан ҡыҙы). Көс һынашыу ҙа ябай майҙанда түгел, ә ғәскәр тупланған түбәләр башында үткәрелә. Был турала Ҡыҙ батшаның ҡуйған шартынан уҡ аңлашыла: «Әгәр ҙә һин тейҙереп, мин иҫән ҡалһам, бөтә ғәскәрем менән һиңә сығырмын, ә инде яҙлыҡһаң, бөтә ғәскәрең менән һин миңә ҡол булырһың». Алыш ҡыҙҙың еңеүе менән тамамлана. Тәүге уҡты атыу нәүбәтен егеткә сығарыу, уны уңышһыҙлыҡҡа юлыҡтырыу — Ҡыҙ батшаның көсөн күрһәтеү маҡсатынан уйланылған алым. Егеттең уғы ҡыҙҙың аяғын ғына сыйып китһә, ҡыҙҙың уғы егеттең йөрәгенә

килеп тейә лә, тегеһе шунда уҡ йән бирә. «Ҡыҙ ҡоло булғансы, алышып үлгәнең артығыраҡ» тип, егет яғы ғәскәрҙәре атыш башлаһалар ҙа, Ҡыҙ батша яғы бирешмәй. «Былайтып ҡырылып бөткәнсе, Ҡыҙ батшаның ҡоло булайыҡ» тип, Ҡыҙ батшаға баш һалалар. Был хәлдән һуң Ҡыҙ батша бик күп ерҙәргә яу сабып, бик күп батшаларҙы үҙенә ҡол итә. Ахыр килеп, ул тағы бер йәш батшаны осрата. Был юлы шартты егет кеше ҡуя: «Һин байтаҡ халыҡты ҡырҙың, әйҙә хәҙер минең менән алышып ҡара». Былар шулай һөйәк башлы балталарын болғап, ҡара-ҡаршы сабышып килгәндә, аттары бер-береһенә бәреләләр ҙә, икеһе ике яҡҡа сәсрәп барып төшәләр. Егет шунда уҡ һикереп тороп, ҡыҙға уҡтала: «Ҡайһыһына ризаһың — йәнеңде бирәһеңме, малыңдымы? Йәнең йәл булһа —минең бисәм бул, йәл булмаһа — хәҙер йәнеңде алам!»— тип, икенең бер ен һайларға ҡуша. Ҡыҙ йәнен йәл күреп, ахырҙа быға кәләш булырға ризалыҡ бирә, ә ғәскәре егет ҡулына күсә. Был хикәйә ирекһеҙҙән боронғо сак-массагет, савромат ҡәбиләләренең йолалары тураһындағы антик авторҙарҙың яҙмаларын хәтергә төшөрә. Савроматтарға ҡағылып, Геродот, мәҫәлән, бына нимә тип яҙып ҡалдырған: «Өйләнешеү буйынса уларҙа түбәндәге ҡағиҙә һаҡлана: дошманды үлтермәй тороп, бер генә ҡыҙ ҙа кейәүгә сыҡмай» (95, 117).

Ә был юлдар Псевдо-Гиппократ трактатынан: «Уларҙың ҡатын-ҡыҙҙары ат менә, уҡ аталар һәм һыбай килеш ҡыҫҡа һөңгө ырғыталар, ҡыҙ саҡтарында дошмандары менән алышалар. Өс дошманды үлтермәй тороп, кейәүгә сыҡмайҙар» (287, 226).

Мал аҫраусы савроматтарҙың (башҡа ҡәбиләләр менән берләшкәс — сарматтарҙың) яңы эраға тиклемге VII—IV быуаттарҙа Волга, Урал буйы далаларында күсеп йөрөгәнлектәрен һәм уларҙың ижтимағи тормошонда ҡатын-ҡыҙҙарҙың дәрәжә юғарылығын (254, 1153) иҫкә алғанда, башҡорт риүәйәт-легендаһының боронғо тамырҙарын антик авторҙарҙың яҙмалары менән сағыштырып өйрәнеү үҙен аҡлайҙыр, тип уйлайбыҙ. Уның нигеҙендә (һөҙөмтәлә) хәҙерге уҡыусы өсөн уйҙырма күренгән фольклор мотивтарының буш ерлектә, ҡоро хыял, фантазия емеше булып ҡына яралмағанлыҡ-

тары асыҡлана, халыҡ хәтеренең ни тиклем тәрән, ни тиклем ҡиммәтле танып белеү сығанағы булыуы раҫлана.

Шуны ла әйтергә кәрәк, матриархат темаһы, яу сабыусы баһадир амазонкалар мотивы башҡа бик күп халыҡтарҙың фольклорында ла урын ала. Әлбиттә, боронғо мотивтар һәр халыҡтың ауыҙ-тел ижадында шул халыҡтың йәшәгән мөхитенә ярашлы рәүештә үҙенсәлекле яңғыраш алған, төрлө сюжет коллизиялары аша яҡтыртылған (Жигули тауҙарындағы кургандарҙа рус баһадиры Бориславаның яуҙарҙан алып ҡайтҡан алтын-көмөштәре, һәр төрлө ҡиммәтле таштары һаҡланыуы тураһындағы легенданы (111, 70—71), төрки халыҡтарынан ҡарағалпаҡтарҙың «Ҡырҡ ҡыҙ» дастанын, А. Утемисов тарафынан яҙып алынған «Гөләйем тураһындағы легенда»ны, «Ҡатын-ҡыҙҙар ханлығы» исемле әкиәтте (287, 111—120) иҫкә алырға мөмкин. Әммә сюжеттар, жанрҙар ни тиклем генә төрлө булмаһын, элекке этнокультур, этнотарихи бәйләнештәрҙең сағылышы булараҡ, мотивтарҙа уртаҡ һыҙаттар барлығы күренмәй ҡалмай (ҡыҙ менән егет алышы, ҡыҙҙың еңеүе һәм аҙаҡ еңелеүе, яу сабыуҙар).

«Башҡорттарҙың килеп сығышы» исемле риүәйәт-легенданың убалар хаҡындағы өлөшө бына шундай фекерҙәр уята. Урал аръяғына Әй буйынан килгән башҡорттарҙың төпләнгән урыны, уның иҫтәлекле убалары тураһында мәғлүмәт биргәс, риүәйәтсе әйләләрҙең нисек итеп был яҡҡа юлланыуҙары хаҡында хикәйә ҡыла.

Яңы ерҙәргә килеп төйәк ҡороу мотивы күпселек риүәйәттәрҙә традицион алымға нигеҙләнә: фәлән-фәлән кешенең уландары (улар, ғәҙәттә, ике, өс, биш ағай-эне алына) юғалған малдарын эҙләп килеп, шул малдары туҡтаған уңдырышлы ерҙә төйәкләнеп, ырыу йәйеп йәшәп алып китә. Тарихи риүәйәттәрҙең боронғо ҡатламын тәшкил иткән мифологик йөкмәткеле этногенетик легендаларҙан айырмалы рәүештә, быларында мөғжизәле януар түгел, ә кешеләрҙең үҙ малдары ҡотло урын табып бирә («Башҡорттарҙың килеп сығышы», «Ямаш менән Йомаш ауылдары» һ. б.). Бер нисә улдан нәҫел таралыу, ауылдарға нигеҙ һалыу —шулай уҡ традицион мотив. Ул күп халыҡтарҙың риүәйәт һәм легендалары өсөн хас күренеш. Был йәһәттән Киевҡа нигеҙ

һалыусы өс туған Кий, Щек, Хорив тураһындағы славян легендаларын иҫкә төшөрөргә мөмкин.

Төйәкләнер өсөн уңайлы урын һайлау — боронғо легендаларҙан килгән һәм башҡа халыҡтарҙың да ижадында осраған традицион алым. «Мәмбәт» исемле риүәйәттән килтерелгән түбәндәге юлдарҙың бүреләр артынан килеп, ҡотло урын тапҡан кешеләр тураһындағы легендалар менән (55, 63) туранан-тура бәйләнеше бар: «Мәмбәт Таналыҡ буйына оҙаҡ ҡына ҡарап тора ла әйтә: «Йылғаһының балығы бар, туғайының йыуаһы бар, еренең ашы бар. Егәрле булған ир-егет йотлоҡта ла йүгәнен тотоп ҡалмаҫ!» (55, 75)

Башҡорт халҡының этник составы, айырым ҡәбилә, ырыуҙарҙың йәшәгән урындары, был ырыуҙарҙың үҙ-ара мөнәсәбәтен сағылдырған күпселек риүәйәттәр тарихи характерҙағы хикәйәләр иҫәбенә инә. «Бөрйәндәр хан замандарында», «Ҡыпсаҡтар» исемле риүәйәттәр, айырыуса һуңғыһы, тарихи факттарҙан ғына туҡылған тиергә мөмкин: «Ҡыпсаҡтар элек бик күп булғандар. Беҙҙҙең яҡта ғына ла байтаҡ Ҡыпсаҡ ырыуы йәшәгән. Уларҙың һәр береһенең исеме булған: ҡарағай ҡыпсағы, сәнкем ҡыпсағы, ҡарый ҡыпсаҡ. Ҡыпсаҡ ауылынан бире ун икеме, егерме һигеҙме ауыл.

Ҡарағай ҡыпсаҡ — беҙҙеке, ә Ҡарый ҡыпсаҡ —Үҙәндеке, икенселәр түбәндәләр: һәүен ҡыпсағы — Нөгөш буйында, Сәңкем ҡыпсағы — Ырымбур яғында. Ҡарағай ҡыпсаҡтарының атаһы был яҡҡа килеп, һөйләшеп, ер алып килеп ултырған ырыу йәйергә. Шулай итеп, ҡыпсаҡтар был тирәгә килеп мәкам тотҡандар. Уларҙың ҡайҙан килеп, ҡасан ғүмер һөрә башлауҙарын асыҡ әйтә алмайым. Был хәл бик борон булған» (55, 72—73). Ҡыпсаҡтарҙың күп һанлы, күп тармаҡлы булыуҙары тураһында ҡаҙаҡ-ҡырғыҙҙарҙан яҙып алынған «Кыпчак туксан еки [ике] баулы» (224, 64) тигән әйтем дә бар. Бау —бында ырыу, нәҫел мәғәнәһендә (Ҡыпсаҡтарға бәйле тарихи-этнографик мәғлүмәттәр Р. Ғ. Кузеев, Р. З. Янғужин хеҙмәттәрендә киң яҡтыртылған) (160; 338).

Төрлө халыҡтарҙың мифологик легендаларындағы уртаҡ мотивтар һәм оҡшашлыҡтарҙы билдәләү нигеҙендә, йәғни ситләтелгән мәғлүмәттәр биргән сығанаҡтарға таянып, башҡорттарҙың башҡа халыҡтар, айырыуса, төрки-монгол телле ҡәбиләләр менән боронғо этнокультур бәйләнештәре хаҡын-

да хеҙмәттең икенсе бүлегендә һүҙ алып барылғайны инде. Әммә башҡорт халҡының легенда һәм риүәйәттәренең араһында ҡайһы бер ырыу араларының, нәҫелдәрҙең башҡа халыҡтар менән туғанлыҡ бәйләнештәрен туранан-тура күрһәткән тарихи-генетик характерҙағы сюжеттар ҙа бар. Был йәһәттән айырыуса башҡорт-ҡаҙаҡ ҡәрҙәшлеге тураһындағы риүәйәттәр иғтибарҙы йәлеп итә. Башҡортостандың Федоровка районының Ишмөхәмәт (Һынташ) ауылында йәшәүсе халыҡтың генеалогик риүәйәтендә, мәҫәлән, ҡасандыр ҡаҙаҡтарҙан айырылып, ошо ерҙә йәшәргә ҡалған һәм башҡорттар менән ныҡлы аралашып киткән Чурбай нәҫелдәре хаҡында һөйләнелә.

«Беҙ үҙебеҙ ҡаҙаҡ нәҫеле — чурбайҙар, — тиелә риүәйәттә. — Беҙҙең ата-бабалар ҡаҙаҡтан айырылып, Уҡлы ҡарағайға килеп ултырғандар. Шунан ошо ергә нигеҙләнгәндәр. Башҡорттар менән аралашып, үҙебеҙ ҙә, телебеҙ ҙә башҡорт булып киткәнбеҙ. Ауылда Юрматы ырыуы башҡорттары күп» («Һынташ» — 55, 131).

Бөрйән ҡәбиләһе Байулы ырыуының ҡаҙаҡтар менән туғанлығы хаҡында риүәйәттәр бар (200, 164—171).

Риүәйәттәр буйынса, Үҫәргән ҡәбиләһенең Мәмбәт ырыуы этник яҡтан ҡаҙаҡтарҙың Арғын ырыуына барып тоташа. Сюжеттың бер ни тиклем шартлы булыуына ҡарамаҫтан (ул кескәй йәштәге ир балаларҙы әсирлеккә алыу кеүек традицион мотивҡа ҡоролған), уның нигеҙе ысынбарлыҡҡа тап килә. Ырыу башы Мәмбәт атаның ҡаҙаҡ нәҫеленән булыуы Ҡәҙим Аралбаев тикшергән Мәмбәт ырыуы шәжәрәһендә лә асыҡтан-асыҡ күрһәтелә (18, 132—142).

«Ҡаҙаҡтар араһы» тигән риүәйәттә барымта һуғыштары заманында ҡаҙаҡтарға әсирлеккә төшкән башҡорт малайының үҫкәс ҡаҙаҡ ҡыҙына өйләнеүе, уларҙан таралған тоҡомдоң Урал ерендә тамыр йәйеүе һүрәтләнә (55, 85—86).

Ҡаҙаҡтарҙың башҡорттар менән этник бәйләнештәре хаҡында ҡаҙаҡ фольклорында ла әһәмиәтле мәғлүмәттәр бар. Мәҫәлән, үткән быуат уртаһында П. И. Небольсин яҙмаларында теркәлгән бер риүәйәт буйынса, ете ырыу башҡорттары—Ҡыпсаҡ ырыуына ҡараған бер нисә ҡырғыҙ (ҡаҙаҡ.— ***Ф. Н.)*** ғаиләһе тоҡомдары. Улар бик борон замандарҙа

Себерҙән Урал аша үткән һәм башҡорттар менән туғанлыҡ бәйләнештәренә ингән (204, 9).

А. П. Чулошниковтың бер хеҙмәтендә ҡаҙаҡтарҙың нуғайҙар менән этник бәйләнештәре тураһында һөйләүсе ҡаҙаҡ риүәйәттәре килтерелә. Уларҙа ҡаҙаҡтарҙың ғына түгел, бәлки башҡорттар менән ҡарағалпаҡтарҙың туғанлыҡ тамырҙары ла нуғайҙарға алып барып тоташтырыла (321, 106). Бындай риүәйәттәрҙә ҡәтғилек һәм бер яҡлылыҡ һиҙелһә лә, дөйөм алғанда этник күренештәрҙе яҡтыртыу яғынан уларҙың нигеҙендә реаль һыҙаттар ятҡанлығын билдәләмәү мөмкин түгел. Башҡорт, ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ этносында нуғай элементтарының булыуы ғилми әҙәбиәттә киң яҡтыртылған, һәм ул бәхәс тыуҙырмай торған мәсьәлә.

Башҡорт ырыуҙары эсендәге ҡалмыҡ нәҫелдәре хаҡындағы риүәйәттәр — шулай уҡ башҡорт-ҡаҙаҡ ҡәрҙәшлеген һүрәтләгән риүәйәттәр тибында: бында ла нәҫел, ырыу таралыу сәбәбе яу ваҡытында әсиргә төшкән бала, шул баланан аҙаҡ ырыу, нәҫел таралыу мотивы аша яҡтыртыла («Мамыт», «Ҡалмыҡ ырыуы» —55, 87).

Тарихи фольклорҙа башҡорт-уғыҙ, башҡорт-ҡырғыҙ этник мөнәсәбәттәрен сағылдырған легендалар бар. Уларҙың ҡайһылары шәжәрәләр эсендә теркәлгән булһа, бәғзеләре үҙ аллы хикәйәләр рәүешендә яҙып алынған.

1913 йылда «Шура» журналының 10-сы һанында баҫылып, аҙаҡ Р. Ғ. Кузеев тәржемәһе аша С. М. Абрамзонға барып ингән ҡырғыҙ ырыуы башҡорттарының шәжәрә-риүәйәте (3, 63) башҡорт этнонимияһында ҡырғыҙ, уғыҙ компоненттарын һаҡлауы менән әһәмиәтле. Был баҫмаға ҡарағанда, Бөгөлмә әйәҙендә йәшәгән ҡырғыҙ ырыуы башҡорттары үҙҙәренең нәҫел ебен Ҡорҡот-атаға («Ҡорҡот-ата китабы» исемле уғыҙ эпосының һәм күп һанлы легендаларҙың геройы) алып барып бәйләйҙәр. Был шәжәрә-риүәйәттән Ҡорҡот-ата һәм уның ырыуҙарының Бохара юлындағы һыр диңгеҙе буйында йәшәгәнлектәре күренә. Бөгөлмә өйәҙендәге Ташлы ауылына 1755 йылда нигеҙ һалған Хөсәйен Ҡорҡот-атанан килгән ун беренсе быуынға тура килә. Р. Ғ. Кузеевтың фекеренсә, VIII—X быуаттарҙа Арал, Сырдаръя буйҙарында уғыҙҙар менән аралашҡан ҡырғыҙ ырыуҙары аҙағыраҡ Ҡыпсаҡтар составында Волганан көнбайышта урынлашҡан

ерҙәргә, Алтын Урҙа дәүерендә Бөгөлмә ҡалҡыулығына үтеп ингәндәр (158, 361—362).

Ҡорҡот-ата — ырыу башлығы мотивы Ғафури районының Яҡтыгүл ауылында яҙып алынған бер риүәйәттә лә (55, 65) урын ала. Бында ул ырыуҙаштарын ҡурсалап, уларҙы үлем-һәләкәттән һаҡлап, Алтай яғынан Ағиҙел буйҙарына алып килеп төпләндергән башлыҡ булараҡ күҙ алдына баҫтырыла.

Табын ырыуы башҡорттарының 1953 йыл Р. Ғ. Кузеев тарафынан ҡағыҙға теркәлгән риүәйәттәрендә шулай уҡ ырыуҙаштарын Алтай яғынан Ағиҙел буйына алып килеүсе башлыҡ телгә алына (158, 254). Исеме аталмаһа ла, текстағы деталдәр аша (башлыҡтың ҡыллы музыка ҡоралында уйнауы, Яҡтыгүлдә яҙылған хикәйәлә — думбыра сиртеп, өләң әйтеүе) ике яҙманың оҡшашлығын күрмәү мөмкин түгел. Әммә Кузеев вариантында риүәйәтсе башҡорттарҙың ҡайҙан күсеп килеп, ҡайҙа урынлашыуын һөйләү менән генә сикләнмәй, ә бәлки табындарҙың боронғо ата-бабаларының уйғырҙар менән мөнәсәбәттә булыуҙары хаҡында ла мәғлүмәт бирә.

Башҡорттарҙың һарттар (үзбәктәр) менән этник бәйләнеше хаҡында тарихи-этнографик материал байтаҡ булһа ла, легенда һәм риүәйәттәр бик һирәк. 1970 йылда Курган әлкәһе Әлмән районының Тәңреғол ауылында Шәкирйән Мөхәмәтйәновтан яҙып алынған «Һарт-Әптерәш ауылы» исемле риүәйәт һәм 1930 йылда Ғафури районының Яҡтыгүл ауылында Вәлиулла Ҡоломбәтов яҙып алған «Һарт-Науруз ауылы» тигән риүәйәттәрҙән башҡа, төҙөк сюжетлы текстар хәҙергә юҡ тиерлек, һарт Әптерәш ауылындағы һарт нәҫелдәре Мондоших исемле үзбәктән таралған тигән фекер үткәрелә риүәйәттә. Мондошихтың Толоших исемле бер иптәше менән башҡорттар араһына килеп сығыуын риүәйәт сәйәси ваҡиғаларға бәйләп аңлата. Был ике егеттең «Бохара динде дөрөҫ алып бармай», тип хан меңән низағлашыуы, ғәскәр туплап, ханға ҡаршы яу асыуы, Бессарабияға ҡасып китергә мәжбүр булған хандың, ғәскәр йыйып ҡайтҡандан һуң, быларҙың яуын баҫтырыуы; тәүҙә ҡаҙаҡ яҡтарына, аҙаҡ Уралға килеп төпләнеүҙәр е, башҡорт ҡыҙына өйләнгән Мондошихтан зат таралыуы тураһында бәйән

итеҙә. Риүәйәт жанрының тәбиғәтенә ярашлы һәр нәмәне конкретлаштырып һүрәтләүе менән «текст» тулы ҡанлы (Мондошихтың Мостафа исемле улынан Мостафа ауылының барлыҡҡа килеүе, ул ауылдың Магнитогорск ҡалаһынан 6 саҡрым ғына ерҙә урынлашыуы, аҙаҡ һарт нәҫелдәренең Әптерәш ауылына килеүҙәр е, ауылдың «Һарт-Әптерәш» булып китеүе[15]) (55, 132).

«Һарт-Науруз ауылы» исемле риүәйәттә ҡәрҙәшлек мотивына ҡарағанда, башҡорт менән һарттарҙың аралашып йәшәү күренеше нығыраҡ сағыла. Риүәйәттең башланған өлөшөндә Бохара яғынан килгән кешеләр түгел, «ҡайтҡан» кешеләр хаҡында һүҙ бара: «Элек Кәлсер исемле бер ҡарт Бохара яғынан ҡайтҡан кешеләргә ошо ерҙәрҙән урын күрһәткән. Был кешеләрҙең ҡарт-ҡоролары үҙ-ара һәр саҡ һарт telендә һөйләшер булғандар. Шуға күрә уларҙы «һарт» тип йөрөткәндәр».

<...> һарттар ауыл ҡорғанда, Науруз тигән бер кеше быларға бик ныҡ ярҙам итеп йөрөгән. Ауылдың Һарт-Нау-

[15] 1931 йылғы ғилми экспедиция материалдарына ҡарағанда, Ялан-Ҡатай районында (хәҙерге Курган әлкәһе) һарт нәҫелле 6 ауыл булғанлығы билдәләп кителә; һарт араларының Өфө, Стәрлетамаҡ, Бәләбәй кантондарына ингән ауылдарҙа осрағанлығы телгә алына (203, ф. 3, оп. 12, д. 314, л. 2).

Р. Ғ. Кузеевтың 1959 йылғы яҙмалары буйынса, Курган әлкәһенең Сафакүл районында һарт нәҫелдәре йәшәгән ауылдар: Оло Солтан (Имәнғол), Баязит, Һарт-Әптерәш, Әбел, Мансур. Ғалимдың һарт нәҫелдәренең аҫабалығы тураһындағы мәғлүмәте иғтибарҙы йәлеп итә. Шуға бәйле риүәйәттән күренеүенсә, һарт волосы старшинаһы Солтанға ер биләүгә аҫабалыҡ хоҡуғы хеҙмәте өсөн батша тарафынан бирелгән. Солтан был ерҙәргә төньяҡ-көнсығыштағы Балсыҡты күленән көньяҡ-көнсығыштағы Буташ күленә тиклемге арауыҡҡа ара-аймаҡтары менән бергә үҙенең биш улын еректергән, бынан тыш, Әйле, Табып һ. б. ырыу кешеләрен саҡырып килтергән. Был хәл 150 йыл элек булған, тиелә риүәйәттә. Информанттың ошо мәғлүмәтенә аңлатма биреп, Р. Ғ. Кузеев: «Был риүәйәт, күрәһең, һарттарҙың электән биләгән ерҙәренә аҫабалыҡ хоҡуғын жалованный грамоталар менән нығытылыуын ғына сағылдыра», — тип яҙа, П. Паллас яҙмаларына таянып, ғалим башҡорт-һарттар Урал аръяғына Уралдан XVIII быуаттың урталарында уҡ күсеп килеп, Һарт волосы төҙөгән тигән фекер әйтә. Тарихсы үҙенең фекерен артабан алда телгә алынған Солтан старшинаның шәжәрәһендәге мәғлүмәт менән нығытып ҡуя (шәжәрәнән күренеүенсә, Солтандың бүләһе (правнугы) Троицк ҡалаһында 1959 йылда 75 йәшендә вафат булған) (159, 199).

руз тип аталыуы ана шул Науруз исеменә бәйле». Риүәйәттең йөкмәткеһенә ҡарағанда, үҙ илдәренә ҡайтҡан башҡорттар үзбәк яҡтарында оҙаҡ ҡына йәшәгән, күрәһең: йылыға күнеккән кешеләрҙең ҡышҡы һалҡындарҙан зарланыуы, ул турала хатта йыр сығарылыуы шундай фекергә юлыҡтыра. Бына ул йыр:

Сәхрәләргә сығып йөрөр инем —
Йөрөп булмай тәрән был ҡарҙа.
Ебәк сапан кейеп йөрөр инем,
Ебәк сапан ҡалған Бохарҙа.

«Был йырҙы бер һарт ҡарты йырлаған, имеш», — тиелә риүәйәттә (55, 131—132). Йырҙа сағылған бошонҡолоҡ мотивының сәбәбе, бәлки, тәрәндәрәктер ҙә. Ситтә йәшәгән ҡайһы бер башҡорттарҙың күнеккән урындарынан ҡуҙғалыуы ниндәйҙер көтөлмәгән уңайһыҙ шарттарға (экстремаль ситуацияға) бәйле булыуы ихтимал (Бохарҙа ҡалған ебәк сапан образы риүәйәткә осраҡлы ғына индерелмәгәндер, моғайын).

Р. Ғ. Кузеев яҙып алған риүәйәттәрҙә һарттарҙың шулай уҡ Бохара, Хиуа яғынан килеп нигеҙләнеүҙәр е телгә алына (159, 199). Ғилми әҙәбиәттә Әйле ырыуы башҡорттарының этнонимия системаһында һарт тармағының булыуы һәм тарихи-генетик риүәйәттәрҙәге мәғлүмәттәр башҡорттар менән Урта Азия һарттары араһындағы этник бәйләнештәрҙең сағылышы итеп иҫәпләнә (159, 200).

Башҡорт ырыуҙары эсендәге ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, ҡалмыҡ аралары тураһындағы риүәйәттәрҙә лә этник бәйләнештәр тарихи-этнографик материалдар менән нығытыла. Ҡаҙаҡ аралары, мәҫәлән, Бөрйән, Түңгәүер, Юрматы, Ҡыпсаҡ, Табын, Ҡатай, Меңле ҡәбиләләре эсендә йыш осрай (158, 48—57).

Күрһәтелгәндәрҙән тыш, риүәйәттәрҙә башҡорттарҙың башҡа халыҡтар менән аралашып йәшәүе хаҡында ла мәғлүмәттәр бар, ләкин улар, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бик һаран. Ләкин шуға ҡарамаҫтан, материалдың булған тиклеме лә этник тарихты өйрәнеүҙә ифрат әһәмиәтле сығанаҡ булып тора. 1964 йылда Башҡортостандың хәҙерге Дәүләкән районы Ҡоръятмаҫ ауылында Сафиуллин Шакир Сафиулла

улынан яҙып алынған «Ҡоръятмаҫ ауылы» исемле риүәйәт, мәҫәлән, боронғо башҡорт-мадъяр (венгр) этник мөнәсәбәттәрен сағылдырыуы менән ҡиммәтле: «...Ҡоръятмаҫта мадъярҙар йәшәгән була. Үҫәргәндәр мадъярҙар менән бергә йәшәйҙәр. Мадъяр тоҡомонан хәҙерге көндә етмеш хужалыҡ бар» (55, 141). Теге йәки был урында борон мадъярҙар йәшәгән тигән мәғлүмәттәр архив материалдары араһында ла осрай (203, оп. 32, д. 33, л. 27).

Риүәйәт һәм легендалар, тарихи яҙмалар башҡорт ата-бабаларының Волга буйы булғарҙары менән ырыуҙаш булыуҙары тураһында ҡиммәтле күрһәтмәләр һаҡлаған (160, 341; 281, 66).

Шулай итеп, килтерелгән миҫалдар буйынса ғына ла этногенетик, этнонимик риүәйәт һәм легендаларҙың тарихи риүәйәттәрҙең үҙенсәлекле бер тармағы булыуы күренә.

## «Саф» тарихи риүәйәттәр

(тарихи ваҡиғалар, шәхестәр хаҡындағы сюжеттар)

Тарихи риүәйәттәрҙең төп тармағын реаль нигеҙе асыҡ билдәле булған ижтимағи әһәмиәтле ваҡиғалар һәм шул ваҡиғаларға бәйле булыуы менән танылған шәхестәр тора. Бындай риүәйәттәрҙең репертуары бай, тематикаһы күп төрлө. Дөйөмләштереберәк ҡарағанда, уларҙың йөкмәткеләрендә ике ҙур йүнәлеш айырым-асыҡ күҙгә ташлана: 1) тыуған ил һәм уны сит ил баҫҡынсыларынан һаҡлау мотивтарын сағылдырыусы риүәйәттәр; 2) социаль тигеҙһеҙлек, синфи һәм милли иҙеүгә ҡаршы, азатлыҡ осон көрәш идеяларын туплаған халыҡ хикәйәләре.

Тәүге төркөмгә башлыса башҡорт халҡының тыуған ерен, изге төйәген һаҡлап, төрлө яу һәм һуғыштарҙа ҡатнашыуын һүрәтләүсе риүәйәттәр инә. Уларҙа сағылған ваҡиғаларҙың хронологик диапазоны шаҡтай киң; тематик даирәһе иһә түбәндәгеләрҙән ғибәрәт: һундар ябырылыуы, монгол яуы, нуғай мырҙалары ҡыҫымы, ҡаҙаҡ, ҡалмыҡ барымталары; 1812 йылғы француз һуғышы, 1941—1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышы.

Икенсе төркөмгә «ил эсенән» сыҡҡан ғәҙелһеҙлектәргә ҡаршы көрәш идеяларын сағылдырған риүәйәттәр ҡарай. Урыҫ самодержавиеһының башҡорт ерҙәрен «һатып алыу» политикаһы, урындағы халыҡтың бөлгөнлөккә төшөүе, милли һәм синфи иҙеүҙең һөҙөмтәһе булараҡ күтәрелгән ихтилалдар һ. б. шуның кеүек ваҡиғалар хаҡында ифрат күп риүәйәт ижад ителгән.

Уралда йәшәгән башҡорт ҡәбиләләре еренә һундарҙың баҫып инеүе хаҡындағы халыҡ хикәйәләре тарихи риүәйәттәр төркөмөндә хронологик яҡтан иң аҫҡы ҡатламды тәшкил итә. Тарихтан билдәле булыуынса, һун ҡәбиләләренең көньяҡ Байкал алды, Монголия ерҙәренән көнбайышҡа, Урал, Волга буйҙарына күсенә башлау осоро яңы эраның II — IV быуаттарына тура килә. Ғәҙәттә, ваҡиғаларҙы, йә булмаһа берәр эпизодты эҙмә-эҙлекле һәм мөмкин тиклем конкретлаштырып яҡтыртыуға ынтылған риүәйәт жанры өсөн, ошо жанрҙың тәбиғәтен белгән риүәйәтселәргә бынан ике мең йылға яҡын элек булған осорҙо һүрәтләү, әлбиттә, еңел түгел. Шуға күрә башҡорт ҡәбиләләре еренә һундарҙың, риүәйәттәр теле менән әйткәндә, «һун төрөктәр е»нең, баҫып инеүе хаҡындағы мәғлүмәттәр бик һаран, дөйөм характерҙа. Улар, нигеҙҙә, ер-һыу атамаларын аңлатыуға ҡоролған риүәйәт-информациялар. Аныҡлыҡ өсән түбәндәге бер нисә текстҡа мөрәжәғәт итәйек. Улар 1965 йылда Әбйәлил районының Аҫҡар ауылында йәшәүсе Мирхәйҙәров Мөғәлләм Шәйхаттар улынан (1900 йылғы) яҙып алынған. Текста телгә алынған топонимик атамалар ошо районға ҡарай: «Бер саҡ ябыҡ сиктән бында һун төрөктәре килеп сыҡҡан. Килеп сыҡҡандар ҙа тауҙа ятҡан башҡорттарҙы баҫҡандар. Бәлә-ҡаза булғанға тауҙы ла «Бәлә-ҡаза тауы» тип алып киткәндәр» (203, оп. 47, д. 3, л. 420).

«Башҡорттар һун төрөктәрен сигендереп ҡыуып алып киткәс, уларҙан ҡалған бейәләр, ҡыш көнө ҡарҙы ҡаҙып, тибенеп ашап сыҡҡандар. Шуға ла был тауға «Бейәҡаҙа» тигәндәр. Ҡасып киткән һун төрөктәренең малдары эйәләшһен өсөн тоҙ ҡойғандар. Шунан ҡалған «Тоҙҡойған тауы»-ның исеме» (203, оп. 47, д. 3, л. 420).

Бында иғтибарҙы түбәндәгеләр йәлеп итә. Һун төрөктәренең Уралда булыуына туранан-тура ишара яһаған мотив

атамаларҙың үҙҙәрендә сағылмаһа ла, халыҡ уларҙың сығышын фәҡәт боронғо ваҡиғаға бәйләп, бик ҡәтғи рәүештә аңлата. Оҙайлы ваҡыттар үтеү менән теге йәки был топонимик исемдең барлыҡҡа килеүенең ысын сәбәбе онотолған хәлдә, шул исемдең мәғәнәһенә яҡынлаштырылған аңлатыуҙар, легенда һәм риүәйәттәр хасил булыуы — ауыҙ-тел ижады тәжрибәһендә була торған типик күренеш. Килтерелгән миҫалдарҙа беҙ бына ошо күренеш менән осрашабыҙ ҙа инде. Фольклор әҫәрҙәрен тикшереү шуны күрһәтә: аң үҫешенең мөһим моменттарына ҡағылған уй-ҡараштарҙы, ижтимағи әһәмиәтле эре ваҡиғалар хаҡындағы иҫтәлектәрҙе быуындан быуынға тапшыра килеү элек-электән ата-бабаларыбыҙҙың изге маҡсаты, гүзәл традицияһы булып торған. Халыҡтар күсенеүе, һундарҙың башҡорт ҡәбиләләре менән ниндәйҙер аралашыуы, бәрелеше кеүек оло ваҡиға ла халыҡ хәтеренән эҙһеҙ юғалмаған. Тарихҡа иғтибарлы ил ҡарттары был ваҡиғаларҙы ысын мәғәнәһе бик үк асыҡ булмаған йәки бөтөнләй онотолған ер-һыу атамаларына еректереп, халыҡтың тарихи хәтер ебен оҙайтыу хәстәрен күргәндәр.

М. Мирхәйҙәров репертуарындағы «Ҡорға(а)шты» («Ҡурғашты») тигән риүәйәт тә ваҡиғаларҙы халыҡтарҙың күсенеү осорона илтеп тоташтыра, һундарҙың төшлөк Уралда йәшәгән мадьярҙарҙы, уйғырҙарҙы килеп баҫыуы, мадьярҙарҙың Карпат яғына сигенеп китеүе, уйғырҙарҙың әсирлеккә төшөүе хаҡында һөйләнелә унда (203, оп. 47, д. 3, л. 420).

Уйғырҙарҙың айырым этнос булараҡ Көньяҡ Урал территорияһында йәшәүҙәр е тураһында тарихи материалдар беҙгә билдәле түгел. Риүәйәттә, бер яҡтан, һун, уйғур, ҡайһы бер башҡорт ҡәбиләләренең Себер, Алтай регионындағы боронғо контакттары (160, 349) сағылып ҡалыуы ихтимал булһа, икенсе яҡтан, күсенеү осоронда ҙур миграция тулҡыны менән уйғырҙарҙың ниндәйҙер бер төркөмө ваҡытлыса көньяҡ Уралда туҡталып, һундар менән бәрелешкә юлығыуы - шул контакттарҙың алыҫтағы бер шаңдауы һаҡланып ҡалыуы ла бик мөмкин. Информанттың һөйләүендә фольклор әҫәрҙәрендә була торған анахронизм күренешенең урын алыуы ихтимал. Табын, ҡатай, меңле, әйле ырыуы башҡорттарының этник компонентында уйғыр заттарының

өлөшө барлығы билдәле (160, 231, 254, 307, 349). Бындай характерҙағы бәйләнештәрҙең ерлеген бер генә дәүер ваҡиғалары менән аңлатып булмайҙыр, моғайын.

Ә инде мадьярҙарҙың (венгрҙарҙың) IX быуатҡа тиклем осорҙа Уралда йәшәүҙәре ғилми әҙәбиәт буйынса билдәле (216, 33—34). Һуңғы йылдарҙа Башҡортостандың Күгәрсен районы Үрге Сорғояз ауылында яҙып алынған «Аҙан ташы» исемле бер риүәйәттә шулай уҡ һун төрөктәре телгә алына, тик бында информант яу менән килгән ҡәбиләнең исемен асыҡ ҡына әйтмәй: «...Борон башҡорттарҙы һун төрөктәреме шул, монголдармы (?) —бик ҙур яу баҫҡан» (55, 102), — ти ул. Тексты ентекләп тикшереү, уны һундар, монголдар осорон сағылдырған башҡа риүәйәттәр менән сағыштырыу һөҙөмтәһендә «Аҙан ташы»нда һөйләнелгән ваҡиғаларҙың ерлеген һун төрөктәре дәүеренә ҡайтарып ҡалдырырға мөмкин.

Мөғәлләм Мирхәйҙәров һөйләгән риүәйәттәрҙә лә, «Аҙан ташы»нда ла иғтибарҙы йәлеп итерлек бер мөһим мәғлүмәт бар. Ул сит яу менән булған һуғыштың сағыштырмаса оҙаҡҡа һуҙылмауы, башҡорттарҙың баҫҡынсыларҙы үҙ ерҙәренән ҡыуып сығарыуы хаҡындағы мәғлүмәт. Монгол яуы тураһындағы риүәйәттәрҙә бындай мотив күҙәтелмәй.

Һун төрөктәре менән бәрелештең башҡорттарҙың еңеүе менән тамамланыуы «Ҡуңыр буға» хикәйәтенең бер вариантында ла ярайһы уҡ асыҡ әйтелгән (49, 274). Ошоларҙы иҫтә тотҡанда, «Аҙан ташы» риүәйәтендәге ваҡиғаның халыҡ тарафынан һун төрөктәренә бәйләп һөйләгәне асыҡлана. Боронғо ваҡиғалар шаңдауына һуңыраҡ дәүер ауаздары (аҙан мотивы) текста тәбиғи яңғыраш алған. Йөкмәткеһе менән генә түгел, формаһы, риүәйәт жанрының бөтә талаптарына яуап бирә алыуы менән дә «Аҙан ташы»—беҙҙең өсөн ҡиммәтле ҡомартҡы.

Боронғо башҡорт — һун мөнәсәбәттәрен күпмелер кимәлдә яҡтыртҡан һәм хәҙергә билдәле фольклор материалдары, нигеҙҙә, ошолар. Риүәйәттәргә һундар менән бәрелеш мотивының килеп инеүе осраҡлы күренеш булмаҫҡа тейеш. Уның эпоста сағылыуы ла ошо хаҡта фекер йөрөтөргә урын ҡалдыра, һундарҙың Көньяҡ Уралда булыуы тарих фәне

мәғлүмәттәре менән дә нығытыла. Улай ғына ла түгел, С. Мирасов, М. Өмөтбаев, Н. Мәжитов, Р. Кузеев яҙмалары буйынса, боронғо башҡорттар менән һундар араһында генетик бәйләнештәр булғанлығы билдәле. Үҙҙәренең тикшеренеүҙәрендә ғалимдар риүәйәттәрҙе лә күҙ уңынан ысҡындырмай (160, 16, 269, 349; 187 б, 98).

Башҡорт ырыуҙарының Алтын Урҙа хандары ҡыҫымы аҫтында йәшәгән осорон һүрәтләүсе тарихи риүәйәттәр һан яғынан артыҡ күп булмаһалар ҙа, шул дәһшәтле замандың шаңдауын реаль һыҙаттарҙа хикәйәләүҙәре менән халыҡ тарихындағы ҙур осорҙо күҙ алдына килтерергә мөмкинлек бирәләр.

Монгол яуы дәүеренә ҡараған башҡорт риүәйәттәре төрлө характерҙа: уларҙың бер тибы туранан-тура яу эпизодтарын, көрәш ваҡиғаларын сағылдырһа, икенсе төрө башҡорт-монгол мөнәсәбәттәрен һүҙ ыңғайында иҫкә алып, бер тарихты икенсеһенә ялғап ебәреү алымына ҡоролған әҫәрҙәр стилендә; өсөнсө тибы баҫып алыусылар хакимлығының ҡаты иҙеүен кисергән башҡорт ҡәбиләләре эсендәге төрлө синыфтарҙың ижтимағи хәлен сағылдыра.

Яу эпизодтарын, көрәш ваҡиғаларын һүрәтләгән риүәйәттәр контраст алымына ҡоролған: монгол һөжүменә тиклемге мул тыныс тормош, тәбиғәт байлыҡтары, халыҡтың иркенлектә йәшәүе һәм аҙаҡ башҡорт ырыуҙарын юлбаҫарҙарҙың рәхимһеҙ талауы, үлтереү һәм язалауҙары риүәйәттәрҙә тетрәткес бер көс менән тасуирланған. Бындай риүәйәттәрҙең башланыу рәүеше төрлө районДарҙа, төрлө кешеләрҙән яҙып алыныуҙарына ҡарамаҫтан, бер типта. Сағыштырығыҙ:

«Сарман ҡарт был урынға килеп ултырғансы, әле беҙҙең яҡтарға Сыңғыҙ, Батый сиреүҙәре килгәнсе, Ағиҙел тамағы, Ыҡ буйҙары, Мәллә менән Минзәлә йылғалары тәрән һыулы, балыҡлы булған, тирәләре ҡуйы урмандар менән ҡапланған. Ул ҡош-ҡорт, йәнлектәрҙең иҫәбе-һаны юҡ. Бына ошо урындарҙа бәйләр, бүләр тигән башҡорт ырыуҙары күсенеп йөрөгәндәр. Улар иркен йәшәгән». («Биксура», Татарстандың Сарман районында яҙып алынған —55, 156).

«...Был ерҙәргә элек башҡорттар хужа булған. Ер-Һыу байлығын һөйләп бөтөрөрлөк түгел икән. Урман тулы йән-

лек: айыу, бүре, төлкө, ҡуян, ҡамсат, шәшке, кеш. Йылға тулы балыҡ. Урманда солоҡ. Халыҡ һунар, солоҡ кәсебе менән шөғөлләнгән; мал, йылҡы аҫраған» («Аҡман-Тоҡман». Яҙып алыныу урыны — Башҡортостандың Белорет районы — 55, 158).

«Тамъян, Ҡыпсаҡ, Ҡатай, Теләү, Бөрйән, Юрматы —бер атанан таралған уландар, бер туғандар. Уларҙың тоҡомдары борон Ыҡ, Яйыҡ, Ағиҙел, Сулман Иҙеле (хәҙер —Кама) буйҙарында йәйелеп, йылҡысылыҡ менән көн күргәндәр. Малының һанының иҫәбе булмаған. Улар меңәрләгән баш көтөү-көтөү булып ерҙе ҡара ябып йөрөр булған. Шуға улар яҡшынан-яҡшы, үләнле йәйләүлектәргә гел күсенеп йөрөгәндәр...» («Бошман-Ҡыпсаҡ батыр», Башҡортостандың Шаран районында яҙып алынған —55, 157).

Ошо рәүешле һүрәтләнгән тыныс тормош картиналары риүәйәттәрҙә көтмәгәндә «Алтай тауы яҡтарынан килеп сыҡҡан бик яман бер ҡара яу» күренештәре менән алышына. Дошман ғәскәрҙәренең ифрат күп һанлы булып икһеҙ-сикһеҙ далаларға таралыуы һәр әҫәрҙә тиерлек һыҙыҡ өҫтөнә алына. Халыҡ хикәйәләре монгол яуын үҙ юлында бөтә нәмәне ҡырып, яндырып килеүсе дәһшәтле яуыз көс итеп һүрәтләй. Баҫып алыусыларҙың ерле халыҡҡа ҡарата рәхимһеҙлеге, вәхшиҙәрсә булған мөнәсәбәте риүәйәттәрҙә бик ентекләп яҡтыртыла. Миҫал өсөн «Биксура» риүәйәтенән түбәндәге юлдарҙы килтерергә мөмкин:

«...Минзәлә менән Ыҡ йылғалары араһында күсеп йөрөп тереклек итеүсе Ҡарағай-Атай ырыуы айырыуса ҙур ҡайғыға дусар була. Сиреү башлығы алдында бил бөкмәгән көмөш һаҡаллы Ҡарағай-Атайҙы бөтә нәҫел-нәсәбе алдында һуҡтыралар. Ат тубығынан ҡалҡыуыраҡ булған барлыҡ ир затының башын ҡырҡалар. Ҡатын-ҡыҙҙарҙы әсир итәләр. Барлыҡ мал-мөлкәт, йылҡы көтөүҙәрен тартып алалар...»

Баймаҡ районының Буранбай (элекке Кинйәғол) ауылында яҙып алынған «Ҡыҙтораташ» исемле риүәйәттә (203, оп. 73, д. 72, л. 166—167) шулай уҡ ифрат аяныслы хәлдәр хаҡында һүҙ бара. Бында ауылдың һуңғы кешеһен —ун һигеҙ йәшлек ҡыҙ баланы эҙәрләп барып, уны үлемгә дусар итеү эпизодында баҫҡынсыларҙың вәхшилеге бигерәк тә асыҡ күренә.

«Ҡанъятҡан баҫыуы» исемле бәләкәй генә риүәйәттә лә башҡорттарҙың монгол иҙеүе аҫтында йәшәгән фажиғәле осоро ғәжәйеп тапҡыр, тәрән мәғәнәле һүҙҙәр менән әйтеп бирелгән: «Ергә ҡояш төшмәгән: уны хан сатыры ышыҡлаған» (55, 101).

Халыҡтың ыҙа сигеүе, күп хәсрәт күреүе һәм шул михнәттәргә сыҙай алмай яуға күтәрелеүе хаҡында һөйләгәндә лә риүәйәт һүҙгә йомарт түгел. Ике яҡ араһында барған алыштың көсөргәнеше тыңлаусыға баҫыу ҡыҙартып ятҡан ҡан образы аша еткерелә. Яу картинаһы был образда шул тиклем асыҡ күҙаллана, ваҡиғаны ентекләп һөйләүҙең кәрәге лә ҡалмай.

Айырым башҡорт ырыуҙарының аяуһыҙ көрәшкә күтәрелеүе, тиңһеҙ алыштар, ҡан ҡойош һ. б. ваҡиғалар риүәйәттәрҙә конкрет географик ерлектә, конкрет шәхестәр исеменә бәйләп яҡтыртыла. Бында һүрәтләнгән персонаждар, батырҙар, дөйөм халыҡ батырҙары булып түгел, ә теге йәки был ырыуҙың, аймаҡтың йәки төбәктең батыры сифатында күҙ алдына баҫтырылалар. Биксура, Сураман, уның батыр ҡатыны, улдары Аҡман, Тоҡман — был исемдәр хаҡында яҙма мәғлүмәттәр юҡ, ләкин улар ырыуҙаштарының хәтеренә яҙылып, риүәйәт аша быуаттан быуатҡа, быуындан быуынға еткерелә килгән.

Монгол баҫҡынсыларына ҡаршы көрәшеп йөрөгән ҡыпсаҡ батыры Бошман (Баңиман, Бачман) хаҡындағы хикәйәттәр иһә боронғо тарихи яҙмаларҙа ла урын ала. Был яҙмаларҙан күренеүенсә, Бошманды Мәнгүхан һәм уның туғаны Бүсектең ғәскәрҙәре уратып ала. «Бачманды тотоп Мәнгүхан янына килтергәс, ул Мәнгүхандан уны үҙ ҡулы менән үлтереүен һораны. Ләкин Мәнгүхан үҙенең туғаны Бүсеккә уны (Бачманды) ике киҫәккә сабып үлтерергә бойорҙо»,— тиелә яҙмаларҙа (240, 37—38).

Риүәйәттең «Бошман-Ҡыпсаҡ батыр» исемендәге башҡорт варианты, нигеҙҙә, боронғо яҙмаларҙа һөйләнелгән сюжет менән тап килә. Күп ваҡыттар үтеү сәбәпле, әҫәрҙә телгә алынған ҡайһы бер шәхестәр (Мәнгүхан, Бүсек, Бошмандың ҡайҙа урынлашыуын күрһәткән хыянатсы ҡарсыҡ образы) риүәйәттә дөйөмләштерелеп, «яуыз хан», «хыянатсы» тип кенә әйтелә.

Монгол яуы заманындағы киҫкен көрәште, шул тиңһеҙ көрәштә башҡорттарҙың ғәйәт ҙур батырлыҡ күрһәтеүҙәр е, хәл-ваҡиғаларҙы билдәле урын йәки шәхестәргә бәйләмәй, дөйөмөрәк формала һөйләгән риүәйәттәр ҙә осрай. 1967 йылда Әбйәлил районының Алсынбай ауылында Вәрисов Хәммәт Вәрис улынан фольклорсы Б. Ғ. Әхмәтшин яҙып алған риүәйәт, мәҫәлән, шундайҙарҙан (28, 70—71).

Башҡорт халҡының Алтын Урҙа дәүерендәге көрәшен сағылдырған халыҡ хикәйәләре араһында иғтибарға лайыҡ йәнә бер әҫәр бар, ул —«Һуңғы һартай» («ҫартай»). Хәтирә рәүешендә төҙөлгән был әҫәр стиле яғынан фольклор менән әҙәбиәт араһында торған үҙенсәлекле ҡомартҡы. Беҙҙең көндәрҙә ул яҙма хәлендә, русса тәржемәлә килеп еткән. 1935 йылда археолог, крайҙы өйрәнеүсе М. И. Касьянов тарафынан рус теленә тәржемә ителгән был яҙма («Последний из Сартаева рода») хәҙерге көндә Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө фәнни үҙәгенең ғилми архивында һаҡлана (203, оп. 12, д. 259, л. 1—9). М. Касьянов әҫәрҙең жанрын «историческое предание» тип билдәләгән. Тарихсылар «Һуңғы һартай»ға ҡарата, ғәҙәттә, «легенда» терминын ҡуллана (Р. Ғ. Кузеев, Н. Ә. Мәжитов, Ә. Н. Солтанова). Билдәле фольклорсы Әхмәт Сөләймәнов әҫәрҙе «эпос» һүҙе менән нарыҡлап, уның нигеҙендә үҙе ҡобайыр яҙҙы. Ныҡ әҙәбиләштер елгән был тексҡа ҡарата ниндәй генә фольклор термины ҡулланылһа ла, ул шартлы буласаҡ. Асылда әҫәрҙә төрлө жанрҙарҙың (эпос, риүәйәт, легенда) һыҙаттары тупланған. Беҙ иһә хикәйәләүҙең беренсе зат исеменән алып барылыуына таяныз, бер ни тиклем шартлы булһа ла (1-се заттан хикәйәләү художество алымы булараҡ ҡулланылған осраҡтар ҙа билдәле), хәтирә терминын ҡулланыуҙы уңайлы тип таптыҡ (хәтирә-риүәйәт тип әйтергә лә булыр ине).

«Һуңғы һартай» хәтирәһенең башҡортса тәржемәһе (тәржемәселәре — М. Сәғитов менән Ә. Бейешев) 1971 йылда «Ағиҙел» журналының 2-се һанында донъя күрҙе. 1980 йылда ошо баҫманан алынып, әҫәр «Башҡорт халыҡ ижады: риүәйәттәр, легендалар» китабында нәшер ителде (55, 364 — 370), төп нөсхәһе иһә 1987 йылда баҫылды (42, 173 — 179).

Йөкмәткеһенән күренеүенсә, «Һуңғы һартай» хәтирәһендә, нигеҙҙә, XIV быуат аҙағындағы ваҡиғалар, атап әйткән-

дә, Аҡһаҡ Тимерҙең Алтын Урҙа ханы Туҡтамыш менән бәрелеш дәүеренә һәм ошо осорҙа һартай ырыуы башҡорттарының күргән яфа һәм юғалтыуҙары һүрәтләнә. Ваҡиғалар шаһит (ул һартай ырыуы союзының атаҡлы бейе Бурнаҡ улы Ялыҡ) исеменән бәйән ҡылынғанлыҡтан, бик тә ентекле һәм психологик күсөргәнешле. Үрҙә ҡаралған риүәйәттәрҙәге шикелле, хәтирәнең башлам өлөшө баҫҡынсылар килгәнгә тиклемге рәхәт тормошто һүрәтләү менән асыла, әммә был тасуирлау хәтирә жанры рамкаһында хәл ителгән: дөйөм халыҡ, теге йәки был ҡәбилә, ырыу тормошо һүрәтләнмәйенсә, Ялыҡ бейҙең үҙе тураһында мәғлүмәттәр, уның мул, иркен көнкүреше алғы планға сығарылған: «...Эйе, мин йәшәй белдем... Минең үҙ ҡошом, үҙ тамғам бар ине. Үҙ хөкөмөм үҙ ҡулымда ине. Аҡһаҡал да, бей ҙә булдым...» (55, 365).

Хәтирәнең башлам өлөшөндә һартай ырыуы башҡорттарының Аҡһаҡ Тимер ғәскәрҙәре менән көрәшенә тиклемге осорғаса (тарихи документтарҙан күренеүенсә, был бәрелеш 1391 йылда булған —216, 52) Алтын Урҙа хандарының береһе —Мәнгү түрә менән булған һуғышы телгә алынып китә. Әҫәрҙән аңлашылыуынса, был бәрелеш дошмандың еңелеүе менән тамамланған, шуға күрә хатта яу килгән ҡара көндәрен дә хикәйәсе үҙенең бәхетле сағы, аҡ, яҡты көндәре итеп хәтергә ала.

Артабан Ялыҡ бей һәм уның ырыуҙаштары тормошондағы фажиғәле мәл —Аҡһаҡ Тимер ғәскәрҙәренең ябырылыуы, тиңһеҙ алышта һартайҙарҙың ҡырылып бөтөүе иҫ киткес тәрән көсөргәнеш менән хикәйәләнә. Трагик ваҡиғаларҙы һүрәтләүҙә «автор», телгә алынған риүәйәттәрҙәге һымаҡ, контраст алымына мөрәжәғәт итә. Һөҙөмтәлә фажиғәле ситуацияның киҫкенлеге айырыуса ҡалҡыу тасуирлана. Хәтирәнең бөтә маҡсаты һартайҙарҙың азатлыҡ өсөн фиҙаҡәр көрәшен күрһәтеүгә, уларҙың батырлыҡтарын данлауға йүнәлдерелгән. Айырыуса Ялыҡ бейҙең үҙенең шәхси батырлығы, улдары Сәрмәсән менән Ҡармасандың ҡаһарманлығы ентекле хикәйәләнә. Дошман ғәскәренең күп һанлы булып, ерле халыҡҡа үлем, ҡоллоҡ алып килеүсе яуыз көс икәнлеге дөйөм рәүештә генә әйтеп кителә. Түбәндәге юлдар шул замандың көсөргәнешле һулышын етерлек дәрә-

жәлә сағылдыра: «...Беҙ оран һалып, суҡмар менән ҡылыс тота алған бөтә ирҙәрҙе йыйҙыҡ. Беҙ алай (полк. — Ф. ***Н.)*** төҙҙөк. Беҙ Аҡһаҡ Тимер барластары һымаҡ куп түгел инек. Тимерҙең баҫҡағы килеп беҙҙең ер-һыуҙы талап иткәс, мин уны кире ебәрмәнем. Юҡ. Уны балға буяп ҡырмыҫҡа иләүенә ултыртырға ҡуштым, һай! Сыйылданы ла инде! Таяҡ менән һуҡкан көсөк кеүек. Ә беҙҙең һуғышҡанды күрһәң!.. Беҙ айбарлы һуғыштыҡ. Беҙ барыбыҙ ҙа ҡаҡшамаҫ, ҡыйыу булдыҡ. Беҙ ысын яу булдыҡ. Беҙҙең хаҡта йыр сығарып йырланылар. Тик беҙ аҙ инек. Беҙ сигендек. Юҡ, юҡ! Беҙ ҡасманыҡ!» (55, 367).

Әйткәнебеҙсә, хәтирә беҙҙең көндәргә яҙма хәлендә килеп еткән. Шунлыҡтан уның стилендә яҙма ҡомартҡыларға хас үҙенсәлек өҫтөнлөк итә. Ләкин бер үк ваҡытта әҫәрҙә ауыҙ-тел ижады традициялары, халыҡ хикәйәләренә хас алымдар ярайһы уҡ күп. «Һуңғы һартай» хәтирәһендә иғтибарҙы йәлеп иткән иң мөһим нәмә —ул хикәйәләүҙең нигеҙендә информатив башланғыстың өҫтөнлөк итеүе. Бында риүәйәттәр һәм легендалар өсөн характерлы һыҙат — хикәйәлә һөйләнелгән хәл-әхүәлдәр һәм ваҡиғаларҙың булғанлығына шик тыуҙырмау теләге менән һәр нәмәне конкретлаштырып һөйләргә ынтылыу күренеше ярылып ята. Урын, ваҡыт төшөнсәһе ошо урында, ошо ваҡытта йәшәгән кешеләр, шәхестәр, уларҙың ҡылған эштәре, һәр төрлө ваҡиғалар — бөтәһе лә бик конкрет, һәм был конкретлыҡтың бирелеше риүәйәттәрҙәгесә тиерлек. Мәҫәлән, «...Минең тирмәм бейек Сейәле түбә эргәһендә ине», «...Был хәл (дошман яуының килеүе. — Ф. ***Н.)*** урмандағы ояһыҙ кәкүктең һаҡауланған сағында булды...» Бынан тыш, хәтирәлә әллә күпме шәхестең исемдәре телгә алына: Ҡара Абыз аҡһаҡал, Тәтегәс бей, Мәнгү түрә, Торғот бей һ. б.

Геройҙарҙы һүрәтләгәндә лә риүәйәттәрҙәге образдар менән уртаҡлыҡ күҙгә ташлана. Мәҫәлән, күп кенә риүәйәт батырҙарының ҡаһарманлыҡ һыҙатын тасуирлағанда йыш ҡына уның оҫта ҡурайсы, тирә-яҡҡа даны таралған йырсы булыуын иҫкәртеү традицион фольклор алымына әйләнгән бер күренеш тиергә мөмкин. Ошо хәл «Һуңғы һартай» хәтирәһендә лә сағылыш таба. Улы Сәрмәсән хаҡында Ялыҡ бей, мәҫәлән, былай ти: «...Ул ҡурайға оҫта ине, йырлап

йөрәгемде ойота ине. Ул йырсы ла, ҡурҡыу белмәç яу ҙа булды...»

Икенсе улы Ҡармасан да эпик батырҙар һымаҡ көслө һәм мәргән: «...Үҙ ғүмерендә уның алты ғына уғы яҙа китте. Ул егет ине» (55, 365—366). Аҙаҡ килеп, Сәрмәсән менән Ҡармасан йылғаларының исеме риүәйәт һәм легендалар традицияһында аңлатыла.

Әçәрҙең «Барығыҙ ҙа тыңлағыҙ!» тип башланып киткән урындары ҡобайырҙарҙағы «Тыңлағыҙ һеҙ, йәмәғәт, /Боронғоларҙан аманат» тибындағы эпос башламын хәтерләтеп ҡуя.

Халыҡ лексикаһына хас булған һүҙбәйләнештәр, мәҡәл һәм әйтемдәр — быларҙың бөтәһе лә «Һуңғы һартай» хәтирәһен халыҡ ижадына яҡынлаштырыусы һыҙаттар. Яҙма әҙәбиәт һәм фольклор традициялары был әçәрҙә бер-бер еһенә бик ныҡ үрелгән.

Яҙма хәлендә һаҡланып ҡалыуы хәтирәне ныҡлы реалистик нигеҙле ҡомартҡы итеп ҡабул итергә мөмкинлек тыуҙыра, һәм танып белеү яғынан уның әһәмиәте әйтеп бөтөргөһөҙ ҙур. Алтын Урҙа хандарының, аҙаҡ Аҡһаҡ Тимерҙең баçып алған ерҙәр ендәге халыҡты аяуһыҙ ҡырыуы тарихи яҙмалар менән раçлана (216, 51—52, 268, 224—225). «Һуңғы һартай» хәтирәһе ошо аяуһыҙ көрәштә һуңғы вәкиленә тиклем ҡырылып бөтөргә дусар булған һартайҙарҙың ҡаһарманлығын һүрәтләүе менән ҡиммәтле.

Шул замандағы хәрби йолаларҙы, һуғышыу ысулдарын хәтирә ысынбарлыҡтағыса тасуирлай. Әçәрҙәге был төп реалиялар шулай уҡ тарихи яҙмаларҙағы мәғлүмәттәр менән тап килә.

Хәтирәлә телгә алынған шәхестәрҙең ҡайһы берҙәре документтарҙа, шәжәрәләрҙә осрай: киң билдәле Аҡһаҡ Тимер, Мәнгү түрә, Торғот бей. Тик был урында, Мәнгү түрә исеменә ҡағылып, бер нәмәне асыҡлап үтергә кәрәк. Тарихтан билдәле булыуынса, Мәнгүҙәр — хакимлыҡ иткән монгол династияһының күренекле вәкилдәре. Яҙма документтар буйынса, уларҙың хакимлыҡ итеү осоро нигеҙҙә XIII быуатҡа ҡайтып ҡала: Сыңғыҙхан нәçеленән булған Мәнгүхан, мәçәлән, 1251—1259 йылдарҙа, Мәнгү-Тимер — 1266—1282, Туҙа-Мәнгү—1282—1287 йылдарҙа хакимлыҡ иткәндәр (41, 190; 284, 702). «Һуңғы һартай» хәтирәһендә һүрәтләнгән

ваҡиғалар, әйтелгәнсә, XIV быуаттың аҙағына, Аҡһаҡ Тимерҙең Уралда булған осорона ҡарай, ә Ялыҡ бейҙең Мәнгү түрә менән бәрелеше XIV быуаттың уртаһынан да алда булыуы мөмкин түгел.

Тимәк, башҡорт хәтирәһендә телгә алынған Мәнгү түрә Мәнгүҙәр династияһының һуңғыраҡ, ихтимал, бик үк күренекле булмаған бер вәкилелер. Хәтирәнең характерына, масштабына, уны яҙған кешенең уҡымышлылығына ҡарағанда, Мәнгү түрә исемен хәтирәгә осраҡлы, йә булмаһа берәр төрлө бутау арҡаһында килеп ингән исем тип уйлауы ауыр.

Өлегә тиклем тикшерелгән монгол яуы хаҡындағы хикәйәләр — булған хәлдәрҙе реаль тонда, реаль һыҙаттарҙа һөйләп биреүсе әҫәрҙәр, йәғни риүәйәттәр. Уларҙың береһе — хатта хәтирә. Быларҙан тыш, башҡорт халыҡ ижадына ошо осорға, атап әйткәндә, Аҡһаҡ Тимер заманына ҡараған бер нисә легендар риүәйәт тә билдәле («Учалы», «Аҡһаҡ Тимер»), Уларҙың йөкмәткеһе уйҙырмаға ҡоролоп, тарихилыҡ мәсьәләһе, һөйләнелгән ваҡиғаларҙың ысынбарлыҡҡа тап килеүе дөйөм планда ғына реаль. Мәҫәлән, Аҡһаҡ Тимерҙең башҡорттарҙан бер ҡыҙ һоратып, уны ҡоҙалап, мәһәр биреп, үҙ иленә бер ҡайтып, бер килеп йөрөүе, башҡорттарҙың үҙ вәғәҙәләрен боҙоп, ҡыҙҙы биреүҙән баш тартыуҙары кеүек мәғлүмәттәрҙең ысынлығына ышаныуы ауыр. Бындай «факттар» «Учалы» һүҙенең атамаһын аңлатырға тырышыу юлында килеп тыуған фантазия — художестволы уйҙырма ғына. Ләкин, билдәле булыуынса, фольклорҙа бер ҡасан да буштан-буш, нигеҙһеҙ уйҙырма булмай. Легендар риүәйәттәр тормошта ысынлап та булған хәл — юлбаҫарҙарҙың буйһондоролған ерҙәрҙәге ҡатын-ҡыҙҙарҙы көслөк менән әсирлеккә алыу күренештәре (ә был күренештәр беҙгә риүәйәттәр буйынса ла, тарихи яҙмаларҙан да мәғлүм) бер ни тиклем идеаллаштырылған формала сағылыш тапҡан. Әйткәндәй, баҫҡынсыларҙың урындағы халыҡҡа, шул иҫәптән, ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарата яуызлыҡ, йыртҡыслыҡ күрһәтеү мотивы риүәйәттең кульминация өлөшөндә етерлек дәрәжәлә аныҡ яҡтыртылған: «...Хан ҡыҙҙы алам тип килһә, башҡорттар баш тартҡандар. Ҡыҙҙы бирмәгәндәр. Хан быға бик асыуланған. Үс алыу өсөн ошо тирәләге бөтә башҡорт

ырыуҙарын туҙҙырып, йәйләүҙәрен яндырып киткән. Халыҡ бөлөп ҡалған» (55, 131). Күренеүенсә, риүәйәттә уйҙырма һәм дөрөҫлөк үҙ-ара һыйышып, бер-бер еһен тултырып йәшәй. Ентекләп өйрәнгәндә, уларҙы бер-бер еһенән айырырға мөмкин.

1947 йылда Ғәли Ибраһимов тарафынан яҙып алынған «Аҡһаҡ Тимер» (203, оп. 32, д. 30, л. 3—4) исемле риүәйәт тә легендар характерҙа. Донъяға яусыллығы менән даны таралған Аҡһаҡ Тимерҙең айырым осраҡтарҙа уңышһыҙлыҡҡа осраған саҡтары ла булғылаған. Бына ошо хәл башҡорт риүәйәтендә лә сағылып, шул уңышһыҙлыҡтан ҡотолоу сәбәбен эҙләгән Аҡһаҡ Тимерҙең ҡылған ҡылыҡтары уйҙырма эпизод аша бирелә. Билдәле булыуынса, теге йәки был серҙең асылын белер өсөн батша йәки хан тарафынан илгә шымсылар ебәреү — әкиәттәргә хас традицион алым. «Аҡһаҡ Тимер» риүәйәтендә нәҡ бына ошо алым ҡулланылған. Әлбиттә, шымсы ебәреү үҙе генә уйҙырма, легендар мотив тыуҙырмай, эш —шул шымсының «серҙе асыу» эпизодында.

Башҡорт-монгол мөнәсәбәттәрен һүҙ ыңғайында иҫкә алып, бер тарихты икенсеһенә ялғап ебәреү, дөрөҫөрәге — башҡорт тарихындағы иҫтәлекле оло ваҡиғаларҙы берләштереп хикәйәләүсе риүәйәттәрҙең типик өлгөһө—1979 йылда Бөрйән районының Иҫке Собханғол ауылында Ғайса Хөсәйенов тарафынан яҙып алынған «Бөрйәндәр хан замандарында» исемле риүәйәт. Бында Сыңғыҙ, Батый яуҙары хаҡындағы мәғлүмәт ике башҡорт ырыуының — бөрйәндәр менән ҡыпсаҡтарҙың — мөнәсәбәтен сағылдырыуға бағышланған хикәйә эсендә йәшәй. Шуныһы, был риүәйәттәге Сыңғыҙханға бәйле мотивтар — легендар характерҙа булып, башҡа төрки, монгол халыҡтарының риүәйәт-легендаларында ла йыш осраған уртаҡ мотивтар. «Бер заман донъяны Сыңғыҙхан яулап алған» тигән раҫлауҙан һуң, Сыңғыҙхандың мөғжизәле тыуыуы, уның ғәҙәттән тыш көскә һәм алдан күрә белеү һәләтенә эйә булыуы хаҡында ярайһы уҡ мауыҡтырғыс хикәйәләүҙән һуң, йәнә уның «күп ерҙәрҙе, күп халыҡтарҙы үҙенә баш һалдырыуы, Урал, Иҙел буйҙарын, Ҡазан тирәһен баҫып алыуы» әйтеп үтелә. Ошо рәүешле легендар мотивтар менән реаль мәғлүмәттәр риүәйәттә башынан

аҙағына тиклем үрелеп бара. Бында Зөлҡәрнәй, Батый, Аҡһаҡ Тимер кеүек тарихи шәхестәрҙең исемдәре телгә алына, шул замандарҙа үткән яу иҫтәлеге булып ҡалған ер-һыу атамалары исемдәре килтерелә. Тыныс һәм талғын ғына хикәйәләү аша ла фажиғәле дәүерҙең фажиғәле ваҡиғалары шаңдауы берсә реаль тонда, берсә легендар формала тыңлаусыла тетрәткес тойғолар уятырлыҡ. Миҫал өсөн түбәндәге өҙөктө генә килтереп үтәйек: «...Ошо Сыңғыҙ, Батый хан замандарында бик ҡаты яуҙар булған. Халыҡ хан ғәскәрен үҙ ерҙәренә, урман-тауҙарға үткәрмәҫкә тырышҡан. Хәҙерге Тимер арҡаһында (хәҙерге Бөрйән районы Тимер ауылы янында) хәтәр бер яу үткән. Шундағы йылға ҡан менән буҙарған. Шунан уға Буҙарған исеме биргәндәр. Бер тауында ун туғыҙ ҡәбер бар. Ошо яуҙа үлгән ун туғыҙ батыр ҡәбере, тиҙәр...» (55, 156).

Яу баҫыу эпизодтарының үҙен һөйләп тормайынса, йә башҡа тарих менән бер рәттән, йә топонимик мәғлүмәттәр биреү ниәтендә һөйләнелгән риүәйәт һәм легендалар (айырыуса һуңғылары) байтаҡ. Был урында тарихи яҙмаларҙа, шәжәрәләрҙә йыш ҡына телгә алынған Сыңғыҙхандың замандашы, юлдашы Майҡы бей хаҡындағы риүәйәттәрҙе билдәләп үтеү маҡсатҡа ярашлы, сөнки бындай риүәйәттәр, хатта уларҙа уйҙырма өҫтөнлөк иткән хәлдә лә, йә бик фрагментар булып, ҡоро атамаһы һаҡланып ҡалған һүрәттә лә, реаль тарихи шәхестәрҙең исемдәрен йөрөтөүҙәре менән әһәмиәтле. Мәҫәлән, Күгәрсен районының Бикбулат ауылы тураһындағы риүәйәттә шул ауылдан алыҫ түгел бер ерҙә «Майҡы яланы» тигән урын барлығы әйтеп кителә (203, оп. 63, д. 56, л. 113). Хәҙерге быуын кешеләре уның ҡайҙан килеп сығыуын күп осраҡта әйтә лә алмайҙар, әммә аҡһаҡалдар был исемдең этимологияһын Сыңғыҙхандың юлдашы Майҡы бей үткән урын тип аңлаталар. Бынан тыш, Ҡаратабын ырыуы башҡорттарының шәжәрәһендә лә (ә был шәжәрә —яҙма формала һаҡланған риүәйәт) Майҡы бей Уралда булған тигән күрһәтмә бар: «...Майҡы би Чынғыз хан дәүерендә Урал тауының Миадәк тигән урында булыб, Мийәс йылғасы буйында мәҡам иткән; ул Чыңғыз ханға бүләк алыб барыб, аның белән юлдаш булыб, Чыңғыз хан

менән бер арбала ултырып йөрөгән; аты Уйшин Майҡы би тигәннәр» (41, 164).

Майҡы бейҙең Сыңғыҙхандың замандашы һәм уның менән бер арбала ултырып йөрөү мотивы бер башҡорт риүәйәттәре осон генә хас күренеш түгел, ул мотив төрки-монгол фольклорында киң билдәле, айырыуса ҡаҙаҡ легендалары менән уртаҡлыҡ көслө. Сыңғыҙхан менән Майҡы бейгә бәйле легендалар шулай уҡ «Сыңғыҙнамә дәфтәре» һ. б. яҙма ҡомартҡылар буйынса мәғлүм (224, 49—52). Яҙма ҡомартҡыларҙа фольклор мотивтарының, легендаларҙың киң урын алыуын уларҙың төрлө варианттарҙа йөрөүенән үк тә күрергә мөмкин. Мәҫәлән, «Сыңғыҙнамә дәфтәре»ндә Сыңғыҙхан менән бер арбаға ултырып йөрөүсе кеше бер осраҡта—Ҡалдар бей, икенсеһендә — Майҡы бей (224, 50—51). Ҡалдар бейҙең кем булыуын хәҙергә әйтеүе ҡыйын, әммә Майҡы бей — XIII быуат баштарында йәшәгән тарихи шәхес, уның исеме, билдәләп үтелгәненсә, шәжәрәләрҙә һәм яҙма ҡомартҡыларҙа (мәҫәлән, Рәшит-әд-диндең «Жәмәиғ әт-тәуарих» китабында) урын ала.

Беҙгә билдәле булған башҡорт риүәйәттәрендә Майҡы бей, Батыйхан йәки Аҡһаҡ Тимер һымаҡ, үҙ юлында бөтә нәмәне ҡырып, яндырып килеүсе яуыз илбаҫар ҡиәфәтендә телгә алынмай. Майҡының йәки уның тоҡомдарының Уралға яу менән килеп, бында оҙаҡ йәшәп, ерле халыҡ менән аралашыуы һөҙөмтәһендә тыуған икенсерәк характерҙағы мөнәсәбәттәрҙе сағылдыра был риүәйәттәр. Майҡы бейҙең ырыу башлаусы шәхес икәнлеген раҫларға тырышыусы шәжәрәләрҙең булыуы (41, 164) үҙе генә лә күп нәмә тураһында һөйләй.

Баҫып алыусылар хакимлығы заманында башҡорт ҡәбиләләренең хәлен, төрлө синыфтарҙың ынтылыштарын сағылдырған риүәйәттәр ҡапма-ҡаршы ике йүнәлештә. Арала ҡайһы бер бейҙәрҙең Алтын Урҙа хандарына баш һалып, уларҙан оран һәм тамға алып ҡайтыуҙары хаҡында һөйләгән сюжеттар бар. Шәжәрәнән алынған «Мөйтән» исемле риүәйәттә, мәҫәлән, Үҫәргән ырыуы Туҡһаба балаһы Мөйтәндең «Ете төйәгә йөк артып» Сыңғыҙханға барыуы һәм «хандың күңелен аулап, маҡсатына ирешеүе», йәғни бейлек дәрәжәһе һәм ер биләүгә хоҡуҡ биргән бетеү (боронғо

төркисә: битич —яҙма, яҙыу) алып ҡайтыуы сәсмә, ярым шиғри формала бәйән ителә. Бетеүҙең йөкмәткеһен риүәйәт түбәндәгесә һүрәтләй: «Мөйтән Туҡсаба балаһына бейлек мансабы бирелде. Үҙе үлгәс, балаларының берәйһе бей булыр. Шул рәүештә баланан балаға бирелеп, Мөйтәндең нәҫеленән башҡаға бирелмәҫ. Шул нәҫелдең береһе һайланмай бей булыр. Йәнә лә Мөйтән бей һораған төрлө сәхрә, урман, ер, төрлө мәғдәнләре бергә аларныҡы улыр...» (55, 161). Яҙманың шиғри өлөшө монгол хандары менән килешеп, үҙенә йөкмәтелгән бурысын үтәп, иленә ҡайтҡан Мөйтән бейҙе данлауға — «тулғау әйтеү»гә бағышланған. Үҫәргәндәрҙең бабаһы Мөйтән / Муйтән бей заманында монголдар ябырылыуы, Яйыҡ буйында башҡорттарҙың ҡаты яу биреүенән дошман ғәскәренең туҡтап ҡалып, Уралға үтмәй, көнбайышҡа китеүе, аҙағыраҡ болғарҙарҙы, рустарҙы еңгәс кенә, кире ҡайтып, башҡорттарҙы үҙҙәренә буйһондороуҙары тураһында хәбәр ҡылына «Үҫәргәндәр» исемле икенсе бер риүәйәттә.

«Монголдар үҫәргәндәргә бик теймәй, — тиелә риүәйәттә.—Уларҙың ҡаты һуғышсы икәнен күреп, үҙ армияһына ылыҡтырырға тырыша. Бейҙәренә, ҙур түрәләренә дәрәжәләр, байлыҡ, үҙ ерҙәренә үҙҙәре хужа булыу хоҡуғы ҡалдырып, үҫәргәндәрҙән ғәскәр йыйҙырталар. Шул ғәскәр менән бергәләп төньяҡҡа табан яуға сығалар...»

Риүәйәт үҫәргәндәрҙең монголдарға буйһонорға мәжбүр булыуҙарын түбәндәгесә аңлата: «Үҫәргәндәр ҙур ырыу булһа ла, үҙҙәре генә еңерлек булмай, баш эйергә мәжбүр булалар» (56, 118). Шәжәрәнән алынған «Мөйтән» риүәйәте лә, «Үҫәргәндәр» ҙә ифрат мөһим мәғлүмәт тупланған тарихи йөкмәткеле ҡомартҡылар. Ҡәбиләһен (ырыуын), ер биләүгә хоҡуғын һаҡлау хаҡына буйһонһа ла, әммә шарт ҡуйырлыҡ көсө булған башҡорт ырыуҙарының (риүәйәт буйынса, Мөйтәнде төрлө ырыу аҡһаҡалдары Сыңғыҙханға вәкил итеп ебәрә) яу ҡуптарған монгол хандары менән килешеү нигеҙендә мөнәсәбәт урынлаштыра алыуы тураһында бәйән ҡыла был риүәйәттәр. Хәҙерге заман тарихсылары был мөнәсәбәтте вассаль мөнәсәбәт тип атап, тарихи тәжрибәнең XVI быуатта, Башҡортостандың Мәскәү дәүләтенә ҡушылыу мәсьәләһе киҫкен торған осорҙа, яңынан атҡарылыуын

билдәләй (17а, 27). Ошо рәүешле Алтын Урҙа хандарының хакимлығына түҙемлек күрһәтеү мотивы башлыса юғары ҡатлам вәкилдәре, уҡымышлы кешеләр ҡулынан үткән яҙма ҡомартҡылар эсендә йәшәгән риүәйәттәрҙә урын ала. Телдән һөйләнелеп йөрөгән риүәйәттәрҙә иһә тарихи факттар, ваҡиғалар, халыҡтың социаль ҡараштары күҙлегенән баһалана: айырым бейҙәрҙең, теге йәки был ырыу вәкилдәренең монгол хандарына баш һалыуын халыҡ яҡламай. Мәҫәлән, Силәбе әлкәһенең Ҡараболаҡ ауылында яҙып алынған бер риүәйәттә Сыңғыҙхандан тамға алған Сырҙы аймағы кешеләренән башҡа аймаҡ кешеләренең көлөүе (203, оп. 26, д. 10, л. 59) —бының асыҡ миҫалы. Алда тикшерелгән «Бошман-Ҡыпсаҡ батыр» риүәйәтендә лә халыҡтың ихтирамы, бүләк, мал-мөлкәткә алданып, хан ғәскәренә ҡушылып киткән ырыу төркөмдәре яғында түгел, ә ғорур, үлем алдында ла теҙ сүкмәгән, азатлығын дәрәжәгә, байлыҡҡа алмаштырмаған батыр Бошман яғында.

Сит ил баҫҡынсыларына ҡаршы көрәш темаһына бағышланған башҡорт халыҡ риүәйәттәре араһында ниндәй яу икәнен асыҡ ҡына әйтмәгән, шул яуҙа ҙур ҡаһарманлыҡ күрһәткән батырҙар хаҡындағы сюжеттар бар («Әүлиә тауы», «Алдар-Шымай менән Зөһрә» һ. б.).

«...Көнтыуыштан Урал аша артылып, бик ҙур яу килгән. Ул яу юлында осраған халыҡтарҙы, ырыуҙарҙы иҙеп-тапап, юҡ итеп, байлығын талап килә икән»; йә: «Был яҡҡа ниндәйҙер ят халыҡ ябырылған» — ошо рәүешле деталдәр (ә улар монгол яуы хаҡындағы риүәйәттәрҙәге мәғлүмәттәр менән бер типта) ул хикәйәләрҙе шулай уҡ башҡорт ырыуҙарының Алтын Урҙа хандарына ҡаршы азатлыҡ көрәшен сағылдырыусы әҫәрҙәр тип фараз ҡылырға мөмкинлек бирә.

Алтын Урҙа емерелгәндән һуң башҡорттарҙың Нуғай, Ҡазан, Себер халыҡтарының ҡыҫымы аҫтында ыҙа сиккән дәүере лә халыҡ ижадында сағылыш тапҡан. Шул замандың һулышын беҙҙең көндәргәсә килтереп еткереүе менән мең ҡәбиләһе башҡорттарынан В. С. Юматов яҙып алған бер риүәйәт айырыуса әһәмиәтле. Унда ҡатмарлы нуғай-башҡорт мөнәсәбәттәре генә түгел, нуғай мырҙаларының үҙ-ара бәрелештәре хаҡында ла тетрәткес юлдар бар: «...Килембәттәр (ике бер туған нуғай мырҙалары. — ***Ф. Н.)***

араһында ҡан ҡойошло һуғыш башланды; бик күп халыҡ ҡырылды. Хатта ер тетрәне, ер иңрәне» (336, 7).

Боланың башҡорт ерендә барғанлығын иҫтә тотһаҡ, ҡырылған халыҡтың башҡорттар икәнлеген аңлауы ауыр түгел. Ҡарымталашыу ваҡытында «ер тетрәне, ер иңрәне», тип бушҡа ғына әйтелмәгән риүәйәттә. Башҡорт өсөн Күк (Күк тәңреһе) беренсе дәрәжәләге илаһ (Ибн-Фаҙланса, раббы — божество) булһа, Ер (йәки Ер-Һыу) — икенсе дәрәжәләге илаһ, дөрөҫөрәге — илаһиә. Бер үк ваҡытта халыҡ аңында Ер — изгеләштерелгән Әсә лә. Башҡорт халҡының нуғай мырҙаларынан күргән яфаһының ни тиклем ауыр булғанлығын бына шулай Илаһиә, Әсә иңрәүе аша, хатта килер быуындарҙы тетрәтерлек итеп, образлаштырылған.

Ике Килембәттең ыҙғышы — тарихи факт (216, 62). Һүҙ барған риүәйәттә ул мифологик мотивтар менән һыйыштырылған. Һуңғыһы тәүгеһенең асылын еткереүгә булышлыҡ иткән.

Был урында шуны ла әйтергә кәрәк. Оҙаҡ ваҡытҡа һуҙылған тарихи-этнокультур мөнәсәбәттәр башҡорттар менән нуғайҙарҙың рухи культураһында ҡайһы бер уртаҡ күренештәрҙең барлыҡҡа килеүенә сәбәпсе булды. «Ҡарасай менән Ҡаҙы батыр», «Ҡырҡ нуғай батыры» (42, 185—188) кеүек тарихи риүәйәттәр нәҡ шул хаҡта һөйләй: башҡорт халҡына билдәле булған был сюжеттар нуғай, ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ халыҡтарының ауыҙ-тел ижадында урын алғанлығы мәғлүм (112, 393—410; 258, 39).

Ғилми әҙәбиәттән күренеүенсә, күрше йәшәүсе ҡан-ҡәрҙәш башҡорт менән ҡаҙаҡ халҡы быуаттар буйына шаҡтай ҡатмарлы булған хужалыҡ, мәҙәни һәм сәйәси бәйләнештә йәшәгән. Тәбиғи, был күренеш тарихи фольклорҙа ла сағылмай ҡалмаған.

Иң элек ике халыҡ араһындағы дуҫтарса бәйләнештәрҙе һүрәтләгән сюжеттар иғтибарҙы йәлеп итә. Ҡаҙаҡтарҙың башҡорт һәм, киреһенсә, башҡорттарҙың ҡаҙаҡ байрамдарында ҡатнашыуын, сәсән һәм аҡындарҙың ярышын, никах мөнәсәбәттәрен сағылдырған сюжеттар байтаҡ. Башҡорт-ҡаҙаҡ дуҫлыҡ мөнәсәбәттәре хаҡында риүәйәттә, мәҫәлән, түбәндәгесә һөйләнелә: «Ҡаҙаҡтар башҡорттар менән бик татыу булғандар. Башҡорт сәсәндәре, ҡаҙаҡ аҡындары һәр

ваҡыт бәйгеләрҙә ярышҡандар. Был ике халыҡ бер-береһенә ҡыҙ бирешеп, улдарына кәләш әйттереп йәшәгәндәр» («Аман» — 55, 234—235).

Хәбәр ҡылыуға ҡоролған быҙдай юлдарҙан тыш, башҡорт һәм ҡаҙаҡ батырҙары көс һынашҡан, ат сабыштары һәм башҡа төрлө уйындар үткәрелгән байрамдарҙы һүрәтләүгә бағышланған сюжеттар бар («Кинйәбай», «Бейеш» риүәйәтенең бер варианты, «Байыҡ-Айҙар сәсән» һ. б.).

Бола, сыуалыштар ваҡытында батша власы һәм карателдәр эҙәрләүенән ҡасып йөрөгән ҡайһы бер баш күтәреүселәр, ихтилал етәкселәренең күрше йәшәгән туғандаш халыҡ ерендә һыйыныу урыны тапҡанлығы мәғлүм. Миҫал өсөн башта ҡаҙаҡ далаларында, аҙаҡ Ҡара Иртышта найман батыры Ҡабанбайҙа төйәк тапҡан 1740 йылғы башҡорт ихтилалы етәксеһе Ҡараһаҡалды иҫкә төшөрөү ҙә етә. Уның тураһында тарихи яҙмалар ҙа, халыҡ риүәйәттәре лә бар.

Риүәйәттәрҙән күренеүенсә, ҡаҙаҡ болаларында ҡатнашып йөрөгән Аман Абазбаев еңелгәндән һуң «...башҡорт араһына ҡасҡан. Башҡорттар уны булғаны менән ҡунаҡ иткәндәр» («55, 234—235»),

Ләкин ике халыҡ араһындағы бәйләнештәр һәр ваҡыт дуҫлыҡ, туғанлыҡ мөнәсәбәттәренә генә ҡайтып ҡалмай. Тарихтан билдәле булыуынса, XVI—XVIII быуаттарҙа башҡорт-ҡаҙаҡ мөнәсәбәттәре ҡатмарлы төҫ ала. Бер яҡтан, ике халыҡтың хеҙмәтсән ҡатламы араһындағы рухи яҡынлыҡ, ҡәрҙәшлек, дуҫлыҡ тойғоларының үҫеүе һәм шул нигеҙҙә уртаҡ ижад өлгөләре барлыҡҡа килеү, икенсе яҡтан, үҙ-ара үсләшеүгә, дошманлашыуға килтергән феодаль сапҡындар, барымта һәм ҡарымта күренештәре урын ала. Ошо хәл фольклорҙа ярайһы уҡ киң сағылыш тапҡан: көньяҡ, көньяҡ-көнсығыш башҡорттарының ауыҙ-тел ижадында ҡаҙаҡ менән башҡорт барымталары хаҡында байтаҡ ҡына риүәйәттәр, риүәйәт-легендалар осрай. Риүәйәттәр һөйләүе буйынса, байлыҡ артынан ҡыуыу маҡсатында үткәрелгән феодаль яу сабыуҙар ярлы-ябағаға бөлгөнлөк, ҡайғы, хәсрәт алып килеүсе яман күренеш булып тора, шуға риүәйәттәрҙә уны булдырмау теләге алға һөрөлә. Аҡһаҡалдар теле менән әйтелгән «Яуҙы ҡан ҡоймай кире борорға тырышығыҙ!»

тигән кәңәш һүҙҙә тәрән мәғәнә һәм кешелеклелек идеялары ята («Ыҫмаил менән Дауыт» —55, 171—173).

Илде, ер-һыуҙы һаҡлауҙың оло тойғо, изге бурыс булыуын һыҙыҡ оҫтөнә алған риүәйәттәр әһәмиәтле. Башҡорт батыры Баяс, үҙенең яуға сығыуын һәм дошманына ҡул күтәреүен аҡлағандай итеп, ҡаҙаҡ батыры Алаҫтаймаға, мәҫәлән, былай ти: «Әй, Алаҫтайма, малды һаҡлау—-бер бурыс, илде һаҡлау —мең бурыс. Ҡабат килеп йөрөмә!» («Баяс батыр» —55, 166—167).

Ерәнсә сәсән һәм уның аҡыллы ҡатыны Бәндәбикә исеме менән бәйле бер риүәйәт тә үҙенең тәрән идеялылығы менән айырылып тора. Бында тыныс тормошҡа ынтылыш, халыҡтың гуманистик ҡараштары тулҡынландырғыс бер оҫталыҡ менән әйтеп бирелгән. Ҡаҙаҡ барымталарына яуап итеп «бер ҡыҙыҡ булһын өсөн» генә барымтаға йыйынған Ерәнсә сәсәнгә Бәндәбикә: «һин үҙ илеңдә батыр исемен яуланың. Батырлыҡ янына аҡыл да кәрәк. «Ил һаҡлаған — ирәйеп йәшәгән, ил баҫҡан — Иҙелгә таянған», тигәндәр... Ил баҫыу беҙҙең ғөрөфкә һыймай. Исем һатмағыҙ. «Теймәҫте Хоҙай һөймәҫ», тигәндәр. Насар уйҙан кире ҡайтығыҙ»,—тип өгөтләгән. (55, 163—165).

Ваҡиғаларҙың трагик сиселеше әҫәрҙең идея көсөргәнешен тағы ла ҡеүәтләберәк ебәрә. Еңелеү хурлығын һәм ҡатынының үлеме тураһындағы хәбәрҙе күтәрә алмайынса, Ерәнсә сәсән үҙен һәләк итә.

Башҡорт-ҡаҙаҡ барымталарын сағылдырған риүәйәттәр исемлеген артабан киңәйтеп тороуҙың кәрәге юҡ, сөнки улар һан яғынан күп булһалар ҙа, нигеҙҙә бер типта, хатта уларҙың сюжет төҙөлөшөндә лә оҡшашлыҡ ҙур. Бындай риүәйәттәрҙә һүрәтләнгән конфликттың сәбәбе —ҡаҙаҡ байҙарының сапҡын ебәреп, теге йәки был ырыу (ауыл, төбәк) башҡорттарының малын ҡыуып, йә булмаһа ҡатындарын урлап алып китеүе. Артабан бәрелештең үҙе һүрәтләнә. Яу урыны —йә башҡорт ере, йә ҡаҙаҡ яғы (һуңғыһы башҡорттарҙың үҙҙәре өйҙә юҡ саҡта, йәки башҡа сәбәптәр арҡаһында ҡыуылған малдарҙың инде ҡаҙаҡ ерендә булыуҙары менән бәйле). Яу ваҡытында ғәҙәттә ике яҡтың батырҙары осрашып, уҡ атышы аша мәргәнлектә һынаша. Был эпизодты һүрәтләгәндә риүәйәттәрҙә башҡорт батырының кө-

сөн, мәргәнлеген идеаллаштырыу тенденцияһы һиҙелә. Башҡорт батырының ҡыйыулығынан, мәргәнлегенән ҡурҡҡан ҡаҙаҡтар йыш ҡына яулашыуҙан бөтөнләй тартынып, кире әйләнеп сабалар һәм башҡа башҡорт еренә килмәҫ булалар («Тәүәш», «Аҡсатүбә» —55, 105, 162).

Үлтереш, ҡан ҡойош, йыртҡыслыҡ күрһәтеү кеүек күренештәр башҡорт-ҡаҙаҡ барымталары хаҡындағы риүәйәттәрҙә ҙур урын алмай. Монгол яуы хаҡындағы риүәйәттәрҙәге һымаҡ күпләп халыҡ ҡырылыу, аяуһыҙ йыртҡыслыҡ күрһәтеү эпизодтарын һүрәтләү бында юҡ һәм уның булыуы мөмкин түгел, сөнки ҡаҙаҡ-башҡорт барымталары — нигеҙҙә теге йәки был төбәктә булып үткән локаль күренештәр. Әммә нисек кенә булмаһын, барымта ваҡиғалары ерле халыҡҡа бөлгөнлөк алып килеп, уның йәшәү шарттарын, иҡтисади хәлен ҡаҡшатҡан; хандар, байҙар өсөн байығыу сығанағы булып торған. Мөлкәттәрен арттырыу ниәтендә юғары синыф вәкилдәре бер ниҙән дә тартынмай, ярлы-ябағаны ла был эшкә ылыҡтырыр булғандар. Барымтаның синфи асылы, ярлы-ябағаның уға кире мөнәсәбәте айырыуса «Әүбәкер» исемле риүәйәттә асыҡ әйтелә: «...Әүбәкер үҙе ярлы булһа ла, бер ырыу кешеһе бит инде, бына ошо һуғыштарҙа ныҡ ҡатнашҡан... Төрмәгә эләккән Әүбәкер: «Төрмәлә ята торған кеше беҙ түгел, баш һалырлыҡ малым юҡ, Исхаҡ малайҙары ятһын, уларҙың малын дауланыҡ»,—тип ауылына ҡайтҡан да киткән...» (45, 68).

Әммә бай ҡатламдар «Барымтанан ҡурҡҡан мал йыймаҫ» (ҡаҙаҡта: «Барымтадан ҡорыҡҡан мал жыймайды») тигән принциптан сығып, үҙҙәренең баҫҡынсылыҡтарын дан, абруй эше итеп күрһәтергә тырышҡандар, барымтаға кешене күберәк ылыҡтырыу сараһы күрелгән. П. Н. Рычковтың яҙмаларынан күренеүенсә, ҡаҙаҡ феодалдары барымталарына хатта ҡарағалпаҡтарҙы, үзбәктәрҙе, Арал буйы халыҡтарын да ылыҡтырғандар (251, 26). Туғандаш халыҡтарҙың үҙ-ара ыҙғышыуы батша самодержавиеһының буйһондороу сәйәсәтенә ярашлы күренеш булғанлыҡтан, был бәрелештәрҙе туҡтатыу сараһы күрелмәгән генә түгел, хатта ҡотҡо биреү, һөсләтеү, ике йөҙлөлөк сәйәсәте үткәрелгән. Был хаҡта тарихи мәғлүмәттәр бик күп, риүәйәттәрҙә лә халыҡ аңындағыса сағылып ҡалған.

Риүәйәттәр репертуарында башҡорт ырыуҙарының ҡалмыҡ, нуғай, татар һөжүмдәрен ҡайтарыуы хаҡында ла сюжеттар бар («Тәкәғашҡа», «Өмбәт батыр»). Уларҙағы идея һәм мотивтар, хатта сюжет типтары ла башҡорт-ҡаҙаҡ барымталары тураһындағы риүәйәттәр менән бер йүнәлештә. Тик бында мал өсөн һуғыш түгел, ә ер өсөн бәрелештәр һүрәтләнә.

Барымта һуғыштарына бәйле риүәйәттәрҙең күпселегендә тағы бер уртаҡ һәм мөһим мотив бар — ул башҡорттарҙың рус дәүләтенә ҡушылыуын хуплау идеяһы («Дауыт батыр», «Тәкәғашҡа» һ. б.). Дөрөҫ, риүәйәттәрҙә хуплау идеяһы туранан-тура раҫлау, йәки «ода йырлау», данлау рәүешендә түгел, бәлки, жанрҙың тәбиғәтенә ярашлы рәүештә, ваҡиғалар хаҡында тыныс ҡына хикәйә ҡылыу аша һөйләүсенең мөнәсәбәте белдерелә. Мәҫәлән: «...Ҡаҙаҡ, ҡалмыҡ яуы Аҡ батшаға баш һалғас ҡына туҡтаған. Ҡаҙаҡ, ҡалмыҡ менән башҡорт араһына Аҡ батша атлы казак ебәргән. Шул сәбәпле, был тирәлә атлы казак ауылдары килеп сыҡҡан. Шунан һуң башҡорттар менән ҡаҙаҡ-ҡалмыҡтар араһында ер өсөн һуғыш булмаған...» «Тәкәғашҡа» тигән риүәйәттән алынған был юлдарҙа Мәскәү дәүләтенә ҡушылыуға ҡарата халыҡтың ҡәнәғәтләнеү тойғоһон һиҙмәү мөмкин түгел. Өҫтәүенә, алда килтерелгән юлдарҙа сик буйына атлы казактар ебәреү, казак ауылдары төҙөлөү кеүек әһәмиәтле, тарихи документҡа бәрәбәр мәғлүмәттәр, факттар бар.

Айырым кешеләрҙең рус батшаһына баш һалырға теләмәй, ҡаҙаҡ далаларына сығып китеп, унда фажиғәле яҙмышҡа тарығыуҙарын һүрәтләгән «Ыҫмаил менән Дауыт» тигән риүәйәттең тел төбөндә лә Рус дәүләтенә ҡушылыуҙы хуплау идеяһы ята.

Һүҙ ыңғайында шуны ла әйтергә кәрәк: Рәсәйгә ҡушылыу кеүек оло тарихи ваҡиғаның фольклорҙа сағылыуы телгә алынған сюжеттар менән генә сикләнмәй, әлбиттә. Риүәйәттәрҙә, бигерәк тә уларҙың шәжәрәләр эсенә инеп киткәндәрендә, был хаҡта махсус рәүештә бәйән ҡылына. Иван Грозныйҙың Ҡаҙанды алыуы, башҡорттарҙың Рус дәүләте ҡарамағына ҡалыуҙы һорап, батшаға вәкилдәр ебәр еүе,

батша ҡарары менән үҙ ерҙәрен үҙҙәре биләмәгә ярлыҡтар яҙҙырып алыуы, яһаҡ түләү рәүеше һәм башҡа әһәмиәтле мәғлүмәттәр һаҡлана бындай риүәйәттәрҙә. Был йәһәттән айырыуса Бөрйән, Ҡыпсаҡ, Үҫәргән һәм Тамъян ырыуҙарының шәжәрәләре факттарға бай. Бына уларҙың ҡайһы берҙәре: «Ҡаюләрдан Үҫәргән руғындан Бикбау кеназ, Бөрйән руғындан Иҫке би кеназ, Ҡыпчак руғындан Мешавле Ҡараҡужаҡ кеназ, Тамъяндан Шагали Шағман кеназ —мәҙкүр дүрт билар [бейҙәр. — Ф. ***Н.*** Ҡазан шәһәренә барыб, Иван Грузныйгә мәғлүм улдылар. Ҡайдыр башҡорд жәмағәтлләрени ихлас хеҙмәт итүләре берлә ҡабул идеб, рәғитлеккә [дәүләт халҡы итеп. — Ф. ***Н.]*** алғандан соң тарханлыҡ дәрәжәләрен кәрәм идуб [хөрмәт итеп. — ***төҙөүсе аңлатмаһы***], үзләренә наград идеб, грамота илан ерларен вә суларын үлчәтеб вирелмакинә [бирмәклеккә. — Ф. ***Н.)*** илтимас илә гәриза ҡылдылар» (41, 71). Артабан башҡорт илселәренең теләгенә ярашлы рәүештә, аҡ батшаның указы, шул указ буйынса ете ырыу башҡорттарының ер сиктәрен билдәләүе, тейешле яһаҡты («атлар вә сусар, вә толко, <...> төлкө таба алмағанда бакырлата»...) бүлешеп түләү шарттары кеүек тарихи мәғлүмәттәр килтерелә был шәжәрәлә.

Баймаҡ районының Иҫән ауылында Йәрмөхәмәтов Зөлҡәрнәй Әнәс улынан яҙып алынған «Ҡоломбәт батыр» исемле легендар риүәйәттә башҡорттарҙың Иван Грозныйға ун ике илсе ебәреүе, аҡ батшаның уларҙы бик яҡшы ҡабул итеүе тураһында хәбәр ителә (55, 173). Тәхет эйәһенең илселәрҙе хөрмәт менән ҡаршы алыуы риүәйәттәрҙә ҡабартыбыраҡ һүрәтләнгән, күрәһең. Мөнәсәбәттәрҙең ябай шарттарҙа бармағанлығы шул шәжәрәләрҙә һаҡланған мәғлүмәттәрҙән үк аңлашыла. Мәҫәлән, Бөрйән, Ҡыпсаҡ, Үҫәргән, Тамъян ырыуы шәжәрәһенең икенсе вариантының аҙағында килтерелгән бер риүәйәттә Сурбан исемле байҙың аманат итеп Ҡазанда ҡалдырылыуы тураһында әйтелгән (41, 78).

Дөйөм алғанда, Рус дәүләте ҡарамағына ҡалыуҙы һорап, башҡорт иленән Иван Грозныйға вәкилдәр ебәрелеү тарихи дөрөҫлөккә тап килә (216, 56—66).

* * *

Хәрби-патриотик тема айырыуса 1812 йылғы француз һуғышы хаҡындағы риүәйәт-легендаларҙа аныҡ һыҙатланыш ала. Уларҙағы патриотик йөкмәтке халыҡ тормошондағы һәм рухи мәҙәниәтендәге оло үҙгәрештәрҙе сағылдыра. Берләшкән башҡорт ырыуҙарының ике быуаттан ашыу ваҡыт Рәсәй дәүләте ҡарамағында йәшәүе, милли һәм ижтимағи аң үҫешенең икенсерәк баҫҡысҡа күтәрелеүе кеүек мөһим факторҙар халыҡ ижады әҫәрҙәренә йоғонтоһоҙ ҡалмаған, әлбиттә. Хәҙер инде риүәйәттең төп геройы булып айырым бер ырыу йәки төбәк батыры түгел, ә илен, Ватанын һаҡларға дәррәү күтәрелгән халыҡ массалары сығыш яһай. 1812 йылғы Ватан һуғышында халыҡ массаларының уйнаған роле, уның патриотик тойғоһо, бигерәк тә «Икенсе әрме»[16] әҫәрендә тәрән асыла. Рус батшаһының саҡырыуына ҡушылып, башҡорттарҙың француз яуына дәррәү күтәрелеүе риүәйәттә ҙур художество оҫталығы менән бирелгән, һуғыш хәбәрен ишеткәс тә «йәшен һуҡҡандай һиҫкәнеп китеп, аяғөҫтө баҫҡан бөтә Урал халҡы», ир-егеттәрҙе оҙатырға йыйылған бисә-сәсә, ҡарт-ҡоро, бала-саға, хушлашыу йәнле картина булып күҙ алдына баҫа.

Оҙатыусыларҙың яугирҙәргә биргән наказдары тәрән мәғәнәле, оло хис-тойғолар менән һуғарылған. Хикәйәләүҙең йолаға бәйле этнографик мәғлүмәттәр менән биҙәлеүе уның әһәмиәтен тағы ла күтәрә төшә. Бына ул мәғлүмәттәр: «...Яуға оҙатҡанда әбей-һәбейҙәр, яуға китеүселәрҙең юлы ҡыҫҡа булһын тип, тегәр еп биргәндәр. Бисә-сәсәләр, күкрәктәрегеҙгә дошман уғы теймәһен тип, яуға барыусыларҙың түштәренә тәңкә теккәндәр, ҡыҙ-ҡырҡындар егеттәргә сер һаҡлаусы булығыҙ, тип, нағышлы янсыҡтар,

[16] Риүәйәт, йыр, ҡобайыр жанрҙарын берләштергән үҙенсәлекле текст. Риүәйәте француз яуы тураһындағы йырҙарҙың килеп сығышына бәйле сығарылған. Әрме йырҙарын М. Буранғолов үҙенсә төркөмләп, «Әрмеләрҙә йөрөп сәс еткерҙем, сәскенәйем етте үрмәгә» тип башланған киң билдәле йырҙы ул —«Беренсе әрме», 1812 йылғы Ватан һуғышы хаҡындағы эскадрон йырҙарын — «Икенсе әрме», башҡорт ғәскәрҙәренең Перовский етәкселегендәге Урта Азия походы тураһындағыларын («һыр», «Аҡ мәсет») — «Өсөнсө әрме» тип атай.

ҡулъяулыҡтар биргәндәр, ти», һәр хәрәкәт поэтиклаштырып, шиғри һүҙ менән оҙатыла барған: «...Йылдарығыҙ айҙай тиҙ үк үтеп, / Исән йөрөп еңеп ҡайтығыҙ» (әбейҙ әрҙең әйткәне); «...Тәңкәләрҙәй төҫлө шылтырашып, / Шат көлөшөп, еңеп ҡайтығыҙ» (бисә-сәсәләрҙең әйткәне); «...Урал армыттарын семәрләгән / Сәскә менән бүләк бирәбеҙ. / Һай, йәнкәйем, еҫкәгәндә аңҡыр илегеҙ, / Ил намыҫын бергә шул бүләктә / Йөрәгегеҙҙә бергә йөрөтөгөҙ» (ҡыҙҙарҙың йырлағаны).

Сәсәндәрҙең һамаҡлап ҡобайыр әйткәне иһә бөтә ил теләген белдергәндәй яңғырай. Уларҙың әйткәнендә Урал батыр, Салауат батырлыҡтары үрнәк итеп ҡуйылып, яуҙың ни тиклем яуаплы эш булыуы һыҙыҡ өҫтөнә алына, яугирҙәргә юғары талаптар (типһә тимер өҙөрҙәй, уйлағанда таш йоторлоҡ, һөйләгәндә ҡылды ҡырҡҡа ярырлыҡ батыр булыу кәрәклеге) билдәләнә. Хикәйәләү егеттәрҙең яуап һүҙе һәм яуға китеүҙәре менән тамамлана (55, 223—226).

«Икенсе әрме» М. Буранғолов тарафынан 1911 йылда Ырымбур әлкәһе Новосергеевка районы Мерәҫ ауылында Шәйех ҡурайсынан яҙып алынған. Билдәле булыуынса, арҙаҡлы ҡурайсылар көйҙөң үҙен генә түгел, уның тарихын да яҡшы белеп, башҡаларға нәфис тел менән еткерә белгәндәр. Шәйех ҡурайсы, күрәһең, шундайҙарҙың береһе булған. Өҫтәүенә, яҙып алыусыһы ла —сәсән телле Буранғол, һөҙөмтәлә, шиғри тел менән һуғарылған бай йөкмәткеле фольклор ҡомартҡыһы беҙҙең көндәргәсә килеп етеп, китаптарға теркәлеп, киләһе быуындарға тапшырыла килә. Риүәйәттең шиғри әһәңе текстҡа йыр һәм ҡобайыр индереүҙән генә килмәй. Уның сәсмә өлөшө лә һәр төрлө һүрәтләү сараларына, айырыуса сағыштырыуҙарға бай. Француз ғәскәрҙәренең Мәскәүгә инеүенән ҡаушап ҡалған батша һәм уның һанаттарына балыҡсы ҡарттың кәңәше бына нисек итеп бирелгән риүәйәттә: «Ай, оло батша! <...> һинең халыҡтарың Мәскәү тирәһендә генә йәшәмәйҙәр бит. Ат өҫтөндә ҡорҙай уйнаған, сабып килһә, елдәй гөжләгән, ҡая таштарҙа аҡ кейектәй һикергән, шыр урманды өс бүкәндәй һанаған, юшанлы сағылдарҙы еҙ йыландай аралаған, бүре, айыуҙы ҡуй бәрәндәрҙәй ҡырған <...> башҡорт тигән халҡың бар бит. Ят ярлыҡамаҫ, үҙеңдеке үлтермәҫ тигәндәй,

улар беҙҙең менән бер ерҙе еҫкәгән, бер һыуҙы эскән халыҡ бит. Шуларҙан ярҙам һора!—тигән». Күренеүенсә, ошо өҙөктә генә лә халыҡ ижадын, уның традицияларын йәшләй ҡандарына һеңдергән ҡурайсы һәм сәсән хәтере, уларҙың тел байлығы аша әллә ни тиклем мәғлүмәт һаҡланған. Башҡорттарҙың Рәсәй дәүләте эсендә тотҡан урыны, халыҡтар берҙәмлегенең киҫкен мәлдәрҙә айырыуса әһәмиәтлелеге, илһөйәрлек тойғоһо кеүек юғары уйланыуҙар рус кешеһе, ябай балыҡсы ауыҙынан әйттер елгән. Фольклор әҫәре өсөн был хәл тәбиғи: балыҡсы образы эпос һәм әкиәттәр геройына юл сатында осрап, уға ҡайһы юл менән китергә кәңәш биргән ҡарт образы юҫығында ижад ителгән. Балыҡсы риүәйәттә халыҡ вәкиле булараҡ күҙ алдына баҫа. Олуғ батшаның, уның кәңәшен тотоп, башҡорттарға мөрәжәғәт итеүе, шуның һөҙөмтәһендә килеп тыуған артабанғы ваҡиғалар шәхес һәм халыҡ берҙәмлеге, дәүләтселек төшөнсәләренең аңда күптән нығынған булыуына ла ишара яһай («бер ерҙе еҫкәгән, бер һыуҙы эскән халыҡ» үҙенең ерһыуын, ватанын бергәләшеп яҡларға тейеш, тигәне).

Әгәр «Икенсе әрме» башҡорт ғәскәрҙәренең «тау шишмәһендәй ғожөлдәп, диңгеҙҙәй рус ғәскәренә барып ҡушылыуы» картинаһын һүрәтләһә, «Ҡаһым түрә» әҫәре халҡыбыҙҙың француз һуғышында күрһәткән батырлыҡтары тураһында бәйән ҡыла. Айырым шәхестең ҡаһарманлығын данлау маҡсатында барлыҡҡа килгән был әҫәр объектив рәүештә заманының тарихи шарттарын сағылдыра: ваҡиғалар ағышына халыҡ массаларының хәл иткес йоғонто яһағанлығын һүрәтләй. Аҡһаҡалдарҙың йыйылышып кәңәш-төңәш итеүҙәре, тирә-яҡҡа йәшен тиҙлегендә таралған оранды ишетеү менән, күҙ асып йомғансы ғәскәр йыйылыуы һ. б. күренештәр шуға миҫал. Яугирҙәрҙе яуға оҙатҡанда телгә килгән Уралтау образы айырыуса тәрән мәғәнәле: уның «һүҙе» ил, халыҡ һүҙе булып ҡабул ителә. Яуға китеүсе егеттәрҙең Урал һүҙенән рухланыуы, уларҙың тыуған ерҙән көс алыуы һыҙыҡ өҫтөнә алына. Австрия еренә инеү, Парижды алыу эпизодтарын һүрәтләгәндә лә халыҡтың батырлығы менән ғорурланыу үҙәк урынға ҡуйыла. Ә Ҡаһым түрә иһә шәхси батырлыҡ күрһәтеүе менән генә түгел, ҡаһарман полководец,

ил теләген бойомға ашырыусы ил батыры, юлбашсы сифатында күҙ алдына баҫа.

Шуны ла әйтергә кәрәк: 1812 йылғы Ватан һуғышы хаҡындағы риүәйәттәр араһында Ҡаһым түрә (Курган, Силәбе яҡтарында «Ҡасим түрә») исеменә бәйле сюжеттар айырыуса популяр. Улар батырҙың тормошо, тыуған яҡтары, нәҫел-нәсәбе тураһында ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр бирә. Был йәһәттән бигерәк тә Башҡортостандың Стәрлебаш районында Ҡаҙаҡбаев Алтынбай Йәнғужа улынан (1879 йылғы) яҙып алынған вариант иғтибарҙы йәлеп итә: «Ҡасандыр Мырҙаш һәм Айыусы ауылдары бергә булған. Бында Мотағай тигән ҡарт йәшәгән. Уның Тувай менән һатлыҡ тигән улдары була. һатлыҡтың балалары булмай. Тувайҙан Ҡаҙаҡбай, Ҡаҙаҡбайҙан Мырҙаш, Мырҙаштан Ҡаһым түрә тыуған.

Ҡаһым түрәне Туйсин тип йөрөткәндәр. Ул дөрөҫ түгел. Туваев булырға тейеш, сөнки Ҡаһым түрәнең олатаһының атаһы Тувай булған. <...> Ҡаһым түрәнән Хәбибулла, Хәбибулланан Йондоҙаҡ, Йондоҙаҡтан Ғәлиулла менән Вәлиулла тыуа. Вәлиулланың балалары булмай. Ғәлиулланан Ғәйнулла менән Хөснулла тыуа. Улар Ҡасимов йөрөйҙәр. Ғәйнуллаһы — уҡытыусы, Хөснулла — ябай колхозсы» (45, 89).

Ватан һуғышының атаҡлы ҡаһарманына бағышланған риүәйәт һәм йыр-риүәйәттәрҙең бөтәһе өсөн уртаҡ мотивтар булып геройҙың абруйлы командир булыуы, уның ҡаһарманлығы, фажиғәле үлеме тора. Ҡаһым түрәнең физик көсө, баһадирлығы бер осраҡта реаль һыҙаттар менән һүрәтләнһә, икенсе осраҡта эпик геройҙарға хас алымда тасуирлана: «...Уны көтөүҙәге бер ат та күтәрмәгән, тик Күксә менән Турысай ғына йөрөткән...» (45, 89).

Ҡаһым түрәнең үлем фажиғәһе күпселек варианттарҙа ағыу эсереү мотивына бәйле («Батшаның бер майоры, көнсөллөккә килеп, Ҡаһым түрәгә ағыу эсереп ебәрә. Шунда уҡ үлеп ҡала» һ. б. — 45, 90).

«һарыласәс» («Гөлбаҙыян») исемле бер риүәйәттә (313, 15—17) «Ҡаһым түрә ил аҡһаҡалдарының ораны, губернаторҙың фарманы буйынса Наполеон ғәскәренә ҡаршы сығыр өсөн майҙанға халыҡты йыйҙырған яугир командир булараҡ күҙ алдына баҫтырыла. Текстан аңлашылыуынса,

Ҡаһым — элек тә яуҙарҙа ҡатнашып, ҡаһарман командир исеме алған шәхес. Ҡаһарманлыҡ һынауын үткәреү аша йөҙ баштарын (сотниктар) һайлау эпизоды ла Ҡаһым түрә хаҡындағы сюжеттарға яңы бер йәм өҫтәүсе эпизод: «...Ҡаһым түрә <...> уң ҡулына ҡылысын, һул ҡулына өс ҡырлы һөңгөһөн алып, өс сажин аралыҡ менән кеше бейеклеге бағаналар башына һары тал сәнсеп ҡуйылған, уң яҡтан иң остағы бағанаға — ҡарасҡы, һул яҡта, тоҡ эсенә бесән тултырып элеп ҡуйылған кеше башы һымаҡ сәптәргә, атын ҡыҙҙырып сабып барған хәлдә, бер уңға, бер һулға әйләнеп, бер сыбыҡты ла ҡалдырмай өҙә сабып, һөңгө менән ҡарасҡыны, ҡылысы менән йомро «башты» сәнсеп алыуы булған, ҡарап тороусылар хайран ҡалып, Ҡаһымды хөрмәт ҡылғандар...» Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, риүәйәт журналға бик ныҡ әҙәбиләштереп баҫылған, әммә уның нигеҙендә халыҡ ижады әҫәре ятҡанлығы шик тыуҙырмай. Был фекерҙе «һарылай сәс» йыр-риүәйәтенең варианттары (263, 15—17) булыуы дәлилләй.

Ниндәй генә вариантта һөйләнелмәһен, «Ҡаһым түрә» хаҡындағы риүәйәттәрҙең ерлеге үҙенең төп мотивтарында ысынбарлыҡҡа тура килә. Ул — тарихи шәхес. Ә. З. Әсфәндиәровтың архивтан табылған материалдары шуны раҫлай. Улар буйынса, Ҡаһымдың Стәрлетамаҡ өйәҙе Айыусы ауылында тыуған Юрматы ырыуы башҡорто булғанлығы күренә. Фамилияһы — Мырҙашев, исеме —Ҡасим. Архив яҙмаларын Алтынбай Ҡаҙаҡбаевтан яҙып алынған риүәйәт менән сағыштырып, тарихсы, улар араһындағы уртаҡ һыҙаттарҙы күрһәтеү менән бер рәттән, ҡайһы бер ҙур булмаған айырмалыҡтарҙы ла билдәләй.

Тарихи документтарҙа Ҡаһым түрәнең атаһы —Мырҙаш Туйсин. Мырҙаштың атаһы, риүәйәттә әйтелгәнсә, Ҡаҙаҡбай түгел, ә Туйсы (Туйсин фамилияһы унан килә), Ҡаһымдың улы — Хәбибулла Ҡасимов, Хәбибулланың улы — Йәноҙаҡ (риүәйәттә — Йондоҙаҡ).

1811 йылда, йәғни француз яуы башланыр алдынан, Ҡасимға утыҙ өс йәш булған. Ватан һуғышына сотник дәрәжәһендә киткән, һәләк булыу ваҡыты — 1813 йыл. Риүәйәттәр менән архив яҙмалары араһында геройҙың хәрби дәрәжәһе тәңгәлендә лә айырма күренә: документтарҙа —

сотник, риүәйәттәрҙә, йырҙарҙа — ҡаһарман командир. Әнүәр Әсфәндиәровтың әйтеүенсә, башҡорт полктарында командирҙар булып, ғәҙәттә, рус хәрбиҙәре торған, башҡа милләт вәкилдәре, шул иҫәптән башҡорттар, командир ярҙамсылары булып хеҙмәт иткән. Улар ҙа ҡайһы ваҡыт тарихи документтарҙа командир булараҡ теркәлгән (Совет Башҡортостаны. 1986, 4 февраль).

Шулай ҙа йыр-риүәйәттәрҙә Ҡаһымдың «ғәскәр башлығы», «командир» тип нарыҡланыуы осраҡлы хәл түгел, булһа кәрәк. Геройҙы күмгәндә биш йөҙ кешенең онһоҙ ҡалып, ҡайғырыштарынан ҡәбер ҡаҙалмай тороуы; башҡорт батыры үлгәндән һуң хәрби уйындарҙы рус майоры уйнатыуы кеүек мәғлүмәттәр ҙә (50, 84—86) Ҡаһым түрәнең күберәк һанлы ғәскәр менән етәкселек иткән башлыҡ булыуына ишара яһай. Баймаҡ ҡалаһында Вәхитов Мәғәүиә Ғибәт улынан яҙып алынған бер риүәйәттә башҡорт яугирҙәренең рус ғәскәрҙәре менән бергәләп Парижға инеүҙәр е, күрһәткән батырлыҡтары өсөн Ҡаһым түрәгә полковник исеме бирелеүе телгә алына (45, 90). Йөҙ башы булып киткән Ҡаһымдың яу дәүерендә икенсе дәрәжә алыуы ла ихтимал. Бәлки, халыҡ хәтере ҡағыҙҙа һаҡланмаған (йә әле табылмаған) информацияны һаҡлайҙыр.

Әгәр ҙә «Ҡаһым түрә» исемендәге сюжеттарҙа халыҡ һәм уны етәкләгән ҡаһарман башлыҡтың батырлығы данланһа, «Абдрахман Аҡъегет», «Йәнһары батыр» риүәйәттәрендә шәхси батырлыҡты данлау, ыңғай геройҙы идеаллаштырыу мотивы өҫтөнлөк итә. Шуға ла һөйләүсе шәхестең эшмәкәрлегенә дөйөм баһа биреү менән генә сикләнмәй, әуның характер һыҙаттарына баҫым яһап, образды күркәмләтеү ниәтендә гиперболик алымдар ҡуллана. Мәҫәлән, француз һуғышы батыры Абдрахман Аҡъегетов — пуля алмаҫ, ҡылыс үтмәҫ герой рәүешендә, Йәнһары батыр ҡеүәтле бәһлеүән, мәргән уҡсы булараҡ һүрәтләнә. Уның «атҡан уғы ике кеше аша үтеп сыға, <...> буйы ике аршын ярымға етеп, яурынға ла ибәтәйһеҙ киң була. Кес яғынан ат ни, ул ни!» (55, 229—230). Ошолай легендар формала, әкиәт геройҙары стилендә тасуирланһалар ҙа, риүәйәттәрҙә телгә алынған күпселек персонаждар — реаль шәхестәр. Уларҙың йәшәгән төбәге, дәрәжәләре, нәҫел ептәре билдәле,

улар хаҡында йырҙар йырлана. Әйтәйек, Абдрахман Аҡъегетовтың элекке Стәрлетамаҡ әйәҙе Үтәгән ауылы (хәҙерге Ҡырмыҫҡалы районы) кешеһе икәнлеге, француз һуғышында есаул дәрәжәһендә булып, күп ҡаһарманлыҡтар күрһәтеүе хаҡында Мехәммәтсәлим Өмөтбаев яҙмалары буйынса билдәле. М. Өмөтбаевтың: «Батырҙың улы Мырҙаҡай 1814 йылдың апрель айында атаһының француз телендә яҙылған өс запискаһын миңә тапшырҙы. Был ҡағыҙҙарҙы Абдрахманға крепость коменданттары биргәндәр (296, 34—35)», тигән мәғлүмәте иғтибарға лайыҡ. Риүәйәттең үҙендә килтерелгән: «Беҙҙең ауылдың хәҙерге Мырҙаҡаевтар ана шул Абдрахман нәҫеленән булалар», тигән юлдар ҙа риүәйәт поэтикаһы талабынан сығып ҡына әйтелгән һүҙҙәр түгел. Ә инде даны бөтә Башҡортостанға таралып, исеме йырҙарҙа мәңгеләштерелгән Ҡаһым түрәнең тарихи шәхес булыуында ла шик юҡ.

1812 йылғы Ватан һуғышында башҡорт халҡы ифрат көслө патриотизм хисен кисерә. Унда хатта башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары ла ҡатнашҡан. «Ирәмәл» йыр-риүәйәтендә йәш ҡатындың яугир иренән ҡалышмай атҡа менеп, ҡорал алып француз яуына китеүен бәйән итһә (50, 73), «Йәнтүрә хикәйәһе» шул һуғышта ҡатнашып, батырлыҡтары өсөн миҙал алған ҡыйыу, сая, аҡыллы башҡорт ҡатынының дөйөмләштерелгән образын һынландыра. «Йәнтүрә хикәйәһе» — шулай уҡ тарихи ерлеге реаль булған сюжет. Ул 1847 йылда рус сәйәхәтсеһе Зефиров тарафынан француз һуғышында ҡатнашҡан Йәнтүрә менән осрашыу һөҙөмтәһендә ҡағыҙға теркәлгән һәм тәү башлап «Оренбургские губернские ведомости» журналында баҫылған (114, 669—671).

Француз һуғышы хаҡындағы риүәйәттәрҙең бөтәһендә лә халыҡ һәм Тыуған ил хаҡына эшләнгән бөйөк ҡаһарманлыҡты данлау идеяһы, илде ҡотҡарыуҙа үҙенең актив ҡатнашлығын тойған халыҡтың ғорурлыҡ хистәре ята. Шуға ла был әҫәрҙәрҙә төшөнкөлөк мотивтарына, илау-һыҡтау ауаздарына бөтөнләй урын юҡ, киреһенсә, уларҙа патриотик пафос, рух күтәренкелеге өҫтөнлөк итә. Үҙенең күңелен тетрәткән оло тарихи ваҡиғаны халыҡ үҙе аңлағанса, үҙ ҡараштары яҡтылығында бирә. Тарихи фактты эҙмә-эҙлекле һүрәтләү, уны туп-тура, нәҡ ысынбарлыҡта булғанса

күсереү халыҡ ижады әҫәрҙәренең бурысына инмәй, һәр осраҡта ла һөйләүсенең теләге, художестволы фантазияһы билдәле кимәлдә әҫәрҙең йөкмәткеһенә йоғонто яһамай ҡалмай. Быны беҙ башҡорттарҙың Наполеон яуында ҡатнашыуы тураһындағы риүәйәттәрҙә асыҡ күрәбеҙ. Улар Ватан һуғышы ваҡиғаларын сағылдырғанда тарихи хәҡиҡәткә тоғро ҡалһалар ҙа, деталдәрҙе, айырым эпизодтарҙы тасуирлағанда ижади уйҙырманы эшкә егәләр. (Башҡорттарҙы күргәс, Наполеондың Мәскәүгә ут төртөп ҡасыуы; күрһәткән ҡаһарманлыҡтары өсөн башҡорттарға рус батшаһының бүләк, мал-мөлкәт, ер тәҡдим итеү эпизодтары шундайҙар иҫәбенә инә.) Күтәрелештең масштабын, ошо ҙур яуҙа башҡорт халҡының индергән өлөшөн иҫкә алғанда, риүәйәттәге уйҙырманың ерлеге тәбиғи яңғырай. Уйҙырманың реаль нигеҙен раҫлаусы ҡайһы бер тарихи материалдарҙы килтереп китеү ҙә был ерҙә урынһыҙ булмаҫ, моғайын.

Билдәле булыуынса, 1812 йылғы Ватан һуғышына һәм 1813—1814 йылғы сит ил походтарына ебәреү өсөн башҡорт атлыларынан 20, мишәрҙәрҙән 2, типтәрҙәрҙән 2 полк төҙөлгән. Быларҙан тыш, 2 башҡорт полкы хөкүмәткә бүләк ителгән 4139 атты оҙатып барған (239а, 173—174). Полктарҙың күбеһе Кутузов етәкселек иткән рус армияһы составында Данциг, Лейпциг, Париж һәм башҡа ҡалалар янындағы һуғыштарҙа ҡатнашҡан. Французлар башҡорт һуғышсыларын мәргәнлектәре өсөн «көнсығыш амурҙары» тип атағандар (296).

Һуғыштың тәүге этабындағы Бородино янындағы һуғышта ла, Мәскәүҙе азат итеүҙәге бәрелештәрҙә лә башҡорт ғәскәрҙәре ҙур активлыҡ күрһәтә. Тылда ҡалған башҡорт халҡының ярҙамы —шулай уҡ заманы өсөн тойолорлоҡ һәм оло маҡтауға лайыҡлы ярҙам. Мәҫәлән, Ырымбурҙың хәрби губернаторы Волконский Александр Беренсегә ебәргән донесениеһында: «Башҡорттар һәм мишәрҙәр «яҡшы теләктән сығып, ата-бабаларының дәүләт именлеге хаҡындағы хәстәрлектәре өлгөһөнә эйәреп, <...> үҙ ризалыҡтары менән улан һәм ялан артиллерия полктары өсөн бер ниндәй түләү алмайынса, үҙҙәренең йылҡы өйөрөнән 3600-ҙән ашыу ат бирергә әҙер төрөүҙарын хәбәр иттеләр», — тип яҙа. Башҡорттарҙың һәм мишәрҙәрҙең аттар менән ярҙам итеүе

артабан да дауам иткән; бик тиҙҙән уларҙың һаны 4139-ға барып етә. Был аттарҙы оҙатып барыу өсөн 1092 башҡорт атлыларынан команда төҙөлә, улар өсөн 1470 строевой һәм 147 артмаҡлы ат бүленә. 1812 йылдың 15 авгусына уҡ инде Башҡортостанда армия файҙаһына 500 мең һум аҡса йыйылған була (298, 58—60).

Башҡорт халҡының 1812 йылғы Ватан һуғышында актив ҡатнашып дан яулауы, әлбиттә, иҫтәлекле һәм ғорурланыу тойғоһо уятырлыҡ ваҡиға. Шуға ла ул быуындар хәтерендә уйылып, беҙҙең көндәргәсә, йыр, риүәйәт һәм легендалар йөҙөндә килеп еткән. Телдән телгә, быуындан быуынға һөйләнә килгән риүәйәттәр француз яуы, шул яуҙа батырҙарса һуғышҡан башҡорт халҡы, уның данлыҡлы улдары хаҡындағы яҙма әҙәбиәткә лә билдәле йоғонто яһаны (Баязит Бикбайҙың «Ҡаһым түрә» драмаһы, Яныбай Хамматовтың «Төньяҡ амурҙары» романы).

Башҡорттарҙың рус дәүләте алып барған походтарҙа һәм һуғыштарҙа ҡатнашыуы 1812 йылға тиклем дә (1557 йылдағы Ливон һуғышы, 1606—1610 йылдарҙағы поляк интервенцияһы, Петр I заманындағы һуғыштар...), унан һуң да (1828—1829 йылдарҙағы рус-төрөк, 1853—1856 йылдарҙағы Ҡырым һуғыштары) дауам иткән. Ләкин был һуғыштар хаҡында риүәйәттәр беҙҙең ҡул аҫтында юҡ тиергә мөмкин. Уның сәбәбен өҙөп кенә әйтеүе ауыр. Ихтимал, күп ваҡыттар үтеү сәбәпле, бындай риүәйәттәр онотолоуға дусар булғандарҙыр, бәлки, яҙып алыусылар уларға юлыҡмағандарҙыр. Әммә башҡорттарҙың төрлө һуғыштарҙа ҡатнашыуы халыҡ хәтеренән бөтөнләй юйылмаған: XVI—XVIII быуаттарҙағы яу сабыуҙары хаҡындағы мәғлүмәттәр шәжәрәләрҙә һ. б. яҙмаларҙа урын алһа (298, 248—249), рус-төрөк, Ҡырым һуғыштары тураһында (XIX б.) бәйеттәр бар (53, 116—130).

Ә бына башҡорт казачий ғәскәрҙәренең рус армияһы составында Урта Азияға уҙғарылған хәрби походтарҙа (1839, 1853) ҡатнашыуы тураһында йыр-риүәйәттәр һаҡланған. Юғары патриотик тойғолар менән һуғарылған 1812 йылғы Ватан һуғышы осоро риүәйәттәренән айырмалы рәүештә, был дәүергә ҡараған йыр-риүәйәттәрҙә халыҡтың

һуғышҡа ҡаршылыҡлы мөнәсәбәте сағыла. Бер осраҡта Аҡмәсетте алыу уңайынан хәрби походтың етәксеһе Ырымбур губернаторы В. А. Перовскийҙы данлап көй сығарылһа (203, оп. 47, д. 5, л. 8), икенсе осраҡта сит ергә яу менән барған командирға нәфрәт белдерелә. Был тойғоноң сәбәбен риүәйәттең түбәндәге юлдарынан аңларға була: «...Ул (Перовский) бик ҡәһәрле булған, тау-таш яуып торһа ла, алға барырға ҡыҫтаған. Яҙлы-көҙлө ырашҡы һыуыҡтарға ҡарамай, атылып аҡкан һыр даръя аша сығырға ынтылған. Үҙҙәре хәлһеҙ, аттары быуынһыҙ булғас, бик күп кеше һырдаръяны сыға алмай һыуға батып һәләк булған, ти...» («һыр» —50, 350).

Риүәйәттә һөйләнелгән фажиғәле хәл-ваҡиғалар һағышмоң тойғолары менән һуғарылып, көй, ҡалыплашҡан камил шиғри һүҙ, йәғни йыр аша фольклор ижадсылары тарафынан халыҡтың тарихи хәтеренә уйҙырылған, «күңел дәфтәренә» теркәтелгән:

...Хәлдәребеҙ етмәй, аслыҡ киҫкән,
Тура килә ултырып иларға.
Сырдарьяҡай буйы, ай, ҡомлоҡтор,
Аттарыбыҙ ерһенеп түҙә алмай.
Перовский майор фарман бирә,
һаман алға тиеп, туҡтамай.
...Дарья һыуҡайҙарын үтә алмай,
Бүленеп тора әрме көстәре.

...Бары беҙҙең генә башҡорттар шул —
Күҙ терәгән әрме көстәре.

һыр йылғаһы аға, ай, тауҙарҙан,
һыуын ала икән ҡарҙарҙан.
Күп иркәйҙәр шунда ятып ҡалды
Ҡайта (а)лмайса ҡаты яуҙарҙан.

һыр йылғаһы буйы һары ҡамыш,
Араһынан килә бер тауыш.
Боролоп-боролоп аҡкан йылға кеүек
Беҙҙең хәсрәт, беҙҙең был һағыш.

Һыр йылғаһы аға, ай, болғанып,
Беҙ йөрөйбөҙ һаман моңланып.
Ҡом бураны уйнай иртәле-кис,
Беҙҙең моңдо күреп, шомланып.

(«Һыр»-50, 141-142)

Килтерелгән миҫалдарҙан күренеүенсә, «Һыр» йыры һәм уға бәйле риүәйәттә Перовский етәкселегендәге уңышһыҙ тамамланған 1839 йылдағы поход ваҡиғалары сағылдырыла (50, 350). Ырымбур губернаһының хәрби губернаторына ҡарата негатив мөнәсәбәт белдерелеү билдәле хәл-ваҡиғалар йоғонтоһонан килә булыр. Дөйөм алғанда, башҡорт халыҡ ижадында В. А. Перовский образы ыңғай образ булараҡ һаҡланған. Әлегә тиклем бейеүселәр «Перовский»ҙы башҡара, ҡурайсылар — көйөн уйнай. Әйткәнебеҙсә, «Перовский» көйөнөң барлыҡҡа килеүе риүәйәттә Аҡмәсетте алыу ваҡиғаларына бәйләп аңлатыла. Риүәйәттә башҡа мәғлүмәттәр (Перовскийҙың үҙе менән 20 ҡурайсы йөрөтөүе, көйҙөң ҡурайсыларҙың иң олоһон Бөрйән ырыуы башҡорто Мәхмүт ҡурайсы тарафынан сығарылыуы, башҡаларҙың уны хуплап ҡабул итеүе) шулай уҡ тәрән мәғәнәле: был деталдәр аша мөнәсәбәттәрҙең ике яҡтан да бер-бер еһенә ҡарата ыңғай, йылы булыуын тоймау мөмкин түгел (50, 350).

Икенсе бер яҙмала «башҡорт ғәскәрҙәре Аҡмәсеткә Перовский маршын уйнап ингәндәр икән» тигән мәғлүмәт килтерелә (50, 350). Рәсәй дәүләте өсөн Аҡмәсетте алыу мөһим стратегик маҡсат булған, күрәһең, шуға ла уны тормошҡа ашырыу буйынса В. А. Перовскийҙың эҙмә-эҙлеклелек күрһәтеүе властар тарафынан юғары баһаланған. Шулай булмаһа, Аҡмәсет ҡалаһының исеме «Перовский» тип үҙгәртелер инеме? (Билдәле булыуынса, ҡала һуңынан Ҡыҙыл орда тип йөрөтөлә.)

Урта Азия походтарында башҡорт хәрбиҙәре араһынан да рус командованиеһының мәнфәғәттәрен тормошҡа ашырыуҙа ныҡ тырышлыҡ күрһәткәндәре булған. Шуларҙың береһе —Йосоп майор Ҡарамышев. Икенсе мең йыллыҡтың 20-се йылдары аҙаҡтарында ҡасандыр Йосоптоң писары булып эшләгән Арыҫлан Бикбовтан яҙып алынған бер хикәйәлә (ул ярым-хәтирә, ярым-риүәйәт стилендә) һәм уны ҡағыҙға теркәүсенең (Ғ. Вилданов — ?) инеш һүҙендә Йосоп

майорҙың тормошо һәм эшмәкәрлеге тураһында күп кенә мәғлүмәттәр бар. Бына улар: Йосоп Ибраһим улы Ҡарамышев Маҡар (хәҙерге Ишембай) районының Маҡар ауылында 1805 йылда тыуған, 1886 йылда үлгән. Ырымбур кадет корпусында белем алғандан һуң, башҡорт армияларында командир булып хеҙмәт итә, генерал-губернатор Перовскийҙың ихтирамын яулай. 1853 йылда Урта Азияға үткәрелгән хәрби походта уның ярҙамсыһы булып, Аҡмәсет ҡалаһын алыуҙа ҙур тырышлыҡ күрһәткәне өсөн майорлыҡ дәрәжәһен алған. Аҙаҡ, ғәскәри хеҙмәттән сыҡҡандан һуң, кантон башлығы булып билдәләнгән.

Риүәйәттә Йосоп майорҙың шәхси һыҙаттары хаҡында ла мәғлүмәттәр килтерелгән. Улар буйынса, Йосоп ҡырыҫ холоҡло, кеше менән артыҡ аралашырға яратмаған «чиновник», дошмандарына ҡаты, дуҫтарына мәрхәмәтле мөнәсәбәт күрһәтеүсе кеше булараҡ күҙ алдына баҫа. Тирә-яҡтағы рус байҙары менән мөнәсәбәтенең киҫкен булыуы, тегеләренең Бүкән (хәҙерге Ғафури районындағы Ташбүкән. -- ***Ф. Н.)*** ауылының бер Бабан (ысын исеме — Баймөхәмәт) тигән башҡортон яллап, кантонды ағыу эсереп үлтереүҙәре, көтмәгәндә булған был ваҡиғаның «халыҡты шаштырыуы», Йосоп майорға арнап йыр сығарылыуы тураһындағы хәбәрләүҙәр (203, оп. 12, д. 275, л. 42—43) Ҡарамышевтың образын тағы ла тулыландыра төшә.

Йырҙарға бәйле мәғлүмәттәр араһында Зәки Вәлидиҙең иҫтәлектәре айырыуса әһәмиәтле: «Халҡыбыҙ Йософ майор исеменә сығарылған йырҙарҙың һүҙҙәрен һөйләр, ошо йырҙарҙы ҡурайҙа көйләп хушланыр ине. Был моңдарҙы көрәштәшем мәрхүм Таған һәм профессор Янски йыйып, Вена Фәндәр академияһы нәшриәтендә баҫтырып сығаралар» («Хәтирәләр». Өфө, 1996. 13-сө б.).

Үҙебеҙҙең Башҡортостан ерлегендә «Ҡарамышев» (Йосоп майор) көйө 1954 йылда донъя күрҙе (61, 294). Башҡорт халыҡ йырҙарын йыйыуға күп көс һалған ҡурайсы Юлай Ғәйнетдиновтың әйтеүенсә, «Айыу майор» исемендәге көй ҙә (61, 278) Йосоп майорға бағышланған.

Йосоп майорға ҡағылышлы йәнә икенсе бер сығанаҡ — Әхмәтгәрәй Ҡарамышевтың шағирә Таңһылыу Ҡарамышевала һаҡланған ҡулъяҙмалары (Әхмәтгәрәй — Йосоп майорҙың

улының улы). Арыҫлан Бнкбовтан яҙып алынған материалдар менән ауаздаш булған был ҡулъяҙмала иғтибарҙы йәлеп итерлек өҫтәмә мәғлүмәттәр ҙә байтаҡ ҡына. Хикәйәләү Йосоптоң нәҫел ебен тағатыуҙан — шәжәрәнән башлана: Ҡарамыш бей —уның улы Аҡбулат, Аҡбулаттың улы —Байыслан, Байысландың улы —Ибраһим, Ибраһимдың улы — Йосоп. Йосоптоң улдары — Солтангәрәй, Батыргәрәй. Шәжәрәнең башҡа тармаҡтарына туҡталып тормаҫтан, шуны ғына билдәләп китәйек. Ҡарамышевтар бай ҡатламдарға ҡараған нәҫелдән, уларҙың араһында дәрәжәле, уҡымышлы кешеләр күп булған. Йосоп — шуларҙың береһе. Аҡмәсетте яулауҙағы хеҙмәте өсөн алтын миҙал менән хәрби дәрәжә генә түгел, «личный дворянин» тигән титул да алған. Башҡорт ауылдарында үҙ иҫәбенә мәҙрәсәләр төҙөтөү, юлдарҙы тәртипкә килтереү кеүек эштәр менән шөғөлләнгән. Хәҙерге Ишембай районының Һайран ауылы эргәһендәге бер юлдың «Майор юлы», Ғүмәр яғындағыһының «Ҡарамышев юлы» тип йөрөтөлөүе Йосоп исеменә бәйле.

Әхмәтгәрәй Ҡарамышевтың яҙмаларынан күренеүенсә, руханиҙар, дини ҡарашлы ҡайһы бер ағай-энеләре, мәҫәлән, ҡустыһы Ғүмәр, Йосоптоң рус армияһы составында хеҙмәт итеүен, донъяуи йүнәлештәге мәктәптәр астырыу эштәрен хупламаған. Аҡмәсет ваҡиғаларына бәйле имеш-мимештәр тарала башлай, һүҙҙәр рус командованиеһына буйһонған Йосоп ғәскәрҙәренең ҡоралланған ҡәлғәгә һөжүм итеүе тәңгәлендә түгел, ә бәлки мосолмандар намаҙ ҡылған мәсеткә ҡул күтәреү юҫығында ҡуйыртылған.

Майорҙың ағыу эсерелеп үлтерелеүе тураһындағы мәғлүмәт Ҡарамышевтың яҙмаларында ла ҡабатлана, тик бында дошман ҡотҡоһо менән яуызлыҡ ҡылыусыларҙың исемдәре икенсе —Ташбүкән ауылынан Ғиззәтулла тигән кеше һәм уның ҡатыны.

Әхмәтгәрәй Ҡарамышевтың яҙмаларында Йосоптоң рухи донъяһына, шәхси тормошона ҡараған юлдар байтаҡ (Ҡолғиҙәр менән Сәғиҙә исемле ҡатындары булыуы, Ҡолғиҙәрҙән тыуған Солтангәрәй атлы улының Ырымбур кадет корпусында уҡыуы; үҙенең йыр-моңға, бейеүгә әүәҫлеге, көйҙәр сығарыу һәләте һ. б.). Ғилми әҙәбиәттә Йосоп майор Ҡарамышев хаҡында мәғлүмәттәрҙең аҙ булыуын иҫкә алғанда,

риүәйәт, хәтирәләрҙә тупланған мотивтарҙың һәр береһе бик тә әһәмиәтле: оҙон һәм ҡатмарлы тормош юлын үткән шәхестең эшмәкәрлеген, йәшәү рәүешен һүрәтләү аша риүәйәтселәр ул йәшәгән замандың ижтимағи хәлен, тарихи ваҡиғаларын, шул ваҡиғаларға төрлө ҡатлам кешеләренең мөнәсәбәтен күрһәтеүсе факттарҙы бөгөнгәсә килтереп еткергән. Һуңғыларын яҡтыртыуҙа ҡайһы бер ҡаршылыҡлы урындар осрауы (фольклор әҫәрҙәрендә була торған күренеш) уларҙың дөйөм баһаһын кәметмәй, әлбиттә.

Йосоп майор тураһында һөйләгәндә, Зәки Вәлидиҙең үрҙә телгә алынған «Хәтирәләр» китабындағы мәғлүмәт биреү яғынан ҡиммәттәре ифрат ҙур булған түбәндәге юлдарҙы ла ситтә ҡалдырып булмай: «Ҡарамышевтар бик уҡымышлы инсандар ине. Улар XVIII—XIX быуаттарҙа башҡорт ғәскәрендә офицер һәм дәүләт эштәрендә кантон рәйесе урынын биләгәндәр, минең өлкән ағайҙарым да <...> Йософ майор етәкселек иткән хәрби тупланмала булғандар. Улар күсмә тормошто күптән ҡалдырғандар, ауылда йәшәү мәҙәниәттәре бик төҙөк. Өйҙәре аҡланған, тирә-яғында баҡса, баҡсаларында емеш ағастары, күберәк алма үҫә ине. Йософ майорҙың Һырдаръя буйындағы ауылдар статистикаһы һәм ҡаҙаҡтарҙың ижтимағи тормошо хаҡында русса әҫәрҙәре баҫылды» («Хәтирәләр», ... 43-сө б.).

Шәрек культураһын, бигерәк тә Сығатай әҙәбиәтен, яҡшы белгән кешеләр араһында ла Ҡарамышевтарҙың исемдәре үҙәк урында: «Бөрйән башҡорттары араһында Сәйет улы Ғабдулла исемле шәхес менән Шәмсетдин Ҡасҡынбаев мәҙәниәттәре камил инсандар ине. Беҙгә күрше Маҡар ауылынан Йософ майор Ҡарамышев һәм Һайран ауылынан Бикбулат мулла кеүек, шул яҡтағы мәҙәниәтте Башҡортостанға килтергән шәхестәр. Уларҙа ғәрәпсә һәм фарсыса ҡулдан яҙылған китаптар ҙа булды» (шунда уҡ, 39-сы б.).

*  **

1941—1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышы халыҡтарға, айырыуса совет халҡына, ифрат ҙур юғалтыуҙар алып килгән дәһшәтле һуғыш булды. Бөтә Ер шарын тетрәткән

ошо һуғыш ваҡиғалары, уға мөнәсәбәт, әлбиттә, фольклорҙа сағылмай ҡалманы, һуғыш хаҡында һалдаттар араһында ла, тылда ла күп һанлы бәйеттәр, йырҙар һ. б. әҫәрҙәр ижад ителә. Риүәйәт жанры иһә үҙенең тәбиғәте менән күптән булып үткән күренеш, хәл-ваҡиғаларҙы тасуирлауға ҡорола, йәғни риүәйәт тыуып, билдәле бер мөхиттә таралып китеү өсөн байтаҡ ҡына ваҡыт үткән булыуы мотлаҡ. Илле-алтмыш йыл риүәйәт өсөн әллә ни күп ваҡыт түгел, шуға күрә Бөйөк Ватан һуғытттына бәйле риүәйәттәр хаҡында иркенләп һөйләрҙәй материал әлегә юҡ. Унның ҡарауы, һуғыш ветерандарының хикәйә-иҫтәлектәр е, хәтирәләре бар. Кирәй Мәргән ҡайһы бер иҫтәлектәрҙе Башҡорт кавалерия дивизияһы һалдаттары ауыҙынан һуғыш йылдарында уҡ яҙып алған. Улар һәм һуңғы йылдарҙа йыйылған әһәмиәтле хәтирәләр, әйтеп үтелгәнсә, «Башҡорт халыҡ ижады» томдарының береһендә баҫылды (58).

Һуғыш хәтирәләренең иғтибар үҙәгендә Ватан алдында үҙенең патриотик бурысын үтәгән совет һалдаттарының образы тора. Оло маҡсат хаҡына үҙен үҙе аямай, үлемесле мәлдәрҙә лә ҙур ихтыяр көсө һаҡлап, еңеүгә ирешкән йә шул юлда ҡорбан булған һалдаттың яҡты һыны кәүҙәләндерелә уларҙа. «Әбделхаҡтың батырлығы», «Танкист хәтирәләре» циклына ҡараған хикәйәләр (58, 123, 125—131) был йәһәттән айырыуса әһәмиәтле. Ишембай районы Тирмән Йылға ауылы егете Әбделхаҡ Ғәйнетдиновтың һуңғы батырлығы яуҙашы рядовой Билалов хәтирәһендә, мәҫәлән, түбәндәгесә тасуирлана: «...Бына Әбделхаҡ дотҡа яҡынлашты. Граната һелтәрлек кенә ара ҡалды. Әбделхаҡ ҡалҡына бирҙе лә бер-бер артлы ике гранатаны амбразураға ырғытты. Бер доттың ике амбразураһы бер юлы тип әйтерлек тонсоҡто. Ләкин икенсеһе атыуын дауам итте. Әбделхаҡ шуныһына табан үрмәләй башланы. Ул биш метр самаһы ҡалғас, теҙләнеп, граната бәйләмен дотҡа ташланы. Ут нөктәһен ҡапланы. Беҙ ҡыуаныстан ҡысҡырышырға ла өлгөрмәнек, дот яңынан ата башланы. Аяғүрә баҫып өлгөргән Ғәйнетдинов сайҡалып китте лә ергә ауҙы...»

Танкист Ҡотлобаевтың «Егерме танк менән алышҡанда» һәм «Бүләк» исемле иҫтәлектәрендә лә көсөргәнешле яу эпизодтары ҙур оҫталыҡ менән һөйләнә. Шуныһы характер-

лы, ниндәй генә ауыр ситуациялар һүрәтләнмәһен, телгә алынған һ. б. хәтирәләрҙә күңел төшөнкөлөгө мотивтары бөтөнләй күҙәтелмәй, киреһенсә, уларҙа яҡты өмөт тойғоһо ярылып ята. Кирәй Мәргән яҙып алған «Мыйыҡ», «Эт иҫәбе» (58, 124—125) кеүек ҡайһы бер мәрәкәле хәлдәрҙе һөйләүгә ҡоролған хәтирәләр юмористик йөкмәткеләре менән иғтибарҙы яулайҙар.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Ватан һуғышы хәтирәләрен йыйыу беҙҙә әле әҙ башҡарылған. Халҡыбыҙ тарихындағы героик һәм фажиғәле осорҙо һүрәтләгән ҡиммәтле хәтирәләрҙе планлы рәүештә, кисектермәҫтән йыйнау фольклорсыларҙың изге бурысы булып ҡала.

* **

Ил **эсендәге ижтимағи тәртиптәр** һәм уларға ҡарата халыҡтың мөнәсәбәтен белдергән әҫәрҙәр, әйтеп үтелгәнсә, тарихи риүәйәттәрҙең икенсе бер ҙур тармағын тәшкил итә. Был төркөмгә ингән халыҡ хикәйәләренең күпселеге беҙҙе Башҡортостандағы XVIII—XIX быуат ваҡиғалары эсенә алып инә һәм халҡыбыҙҙың милли, социаль иҙеүгә ҡаршы алып барған ауыр көрәш юлын сағылдыра.

Билдәле булыуынса, телгә алынған осорҙоң иң киҫкен мәсьәләләренән береһе булып, башҡорттар өсөн ер мәсьәләһе торған. Башҡорт ерендә хәрби ҡәлғәләр төҙөү, тау заводтары һалыу, ул заводтарҙы хеҙмәтләндерергә крепостнойҙар килтереү, түрәләр күбәйеүе урындағы халыҡты еренән ҡыҫырыҡлауҙарға, ҡаты иҙеү һәм йәберләүҙәргә килтергән. Ә инде башҡорт ерҙәрен «ирекле һатыу» тураһында 1736 йылда, бигерәк тә 1869 йылдың 10 февралендә сыҡҡан закондарҙан һуң башҡорттарҙың бөлгөнлөккә төшөүе, аслыҡҡа, хәйерселеккә дусар булыуы айырыуса күсәйә. Халыҡ тормошоноң ошо фажиғәле мәлен сағылдырған риүәйәттәр һәм башҡа төр әҫәрҙәр ауыҙ-тел ижады ерлегендә ифрат күп.

«Байымдың ер һатыуы», «Баярҙың ер алыуы», «Абласкин» («Яуымбай») исемле риүәйәттәрҙә, мәҫәлән, рус баярҙары һәм сауҙагәрҙәренең халыҡты алдау, ҡурҡытыу

һәм хәйлә юлы менән осһоҙ ғына хаҡҡа (аҙ-маҙ аҡса, сәй-шәкәр, буханка икмәк, дағა, суйын һ. б.) әллә ни тиклем ер һәм урмандарҙы тартып алыуҙары тураһында һөйләнелә. «Үтәгән» риүәйәте Ҡазан губернаһының Мамадыш өйәҙенән килгән ике туған Ишекәй менән Ишбирҙенең шулай уҡ хәйлә менән башҡорт ерҙәрен «һатып алып», ерле халыҡты һемәйтеүҙәре, бөлгөнлөккә төшөрөүҙәре тураһында хикәйә итә. Бындай риүәйәттәрҙә ваҡиғалар төрлө урында, төрлө ваҡытта, төрлө кешеләр ҡатнашлығында, төрлө шарттарҙа бара. Әммә уларҙың күптәренең сюжеты бер уртаҡ мотивҡа —«үгеҙ тиреһе тиклем ер» мотивына нигеҙләнә. Әҫәрҙәрҙең башланышы һәм тамамланышы ла, нигеҙҙә, бер төрләрәк: борон башҡорттарҙың ере күп булыуы хаҡында иҫкәртеү, «бер саҡ бер рус баярының» (айырым осраҡта фамилияһы күрһәтелә) килеп, бер үгеҙ тиреһендәй генә ер һорауы, башҡорттарҙың алданып, ризалашыуы, аҙаҡ нәҙек кенә телгеләнгән сей тиренән эшләнгән ҡайыш ептәр менән әллә ни тиклем ерҙе уратып алыуы, ерһеҙ ҡалған халыҡтың фажиғәле яҙмышы һүрәтләнә. Әйтергә кәрәк, һыйыр йәки үгеҙ тиреһе тиклем ер һатып алыу мотивы —бик боронғо мотив, ул төрлө континенттарҙа йәшәгән, телдәре төрлө системаға ҡараған халыҡтарҙың ижадында урын алған. Хәйләкәрлеге менән үгеҙ тиреһе тиклем ер һатып алып, Карфагенға нигеҙ һалыусы Дидона хаҡындағы боронғо грек легендаһы, Азия, һинд, Һинд-Ҡытай, Төньяҡ Америка халыҡтарының риүәйәт-легендалары — боронғо уртаҡ мотивты конкрет милли ерлектә үҙенсәлекле яҡтыртҡан ҡиммәтле ауыҙ-тел ижады ҡомартҡылары ул. Оҡшаш идеяның һәр халыҡта үҙенсәлекле яңғыраш алыуын төрки халыҡтарының риүәйәт һәм легендалары миҫалында күҙәтергә була. Мәҫәлән, XX быуат башында Э. К. Пекарский тарафынан баҫтырып сығарылған бер яҡут риүәйәтенең айышы алда телгә алынған башҡорт риүәйәттәренең асылы менән бер: үгеҙ тиреһе тиклем ер алып, крайҙы колонизациялай башлау, ерле халыҡҡа рәхимһеҙлек күрһәтеү. Ләкин ошо идея һәр халыҡтың риүәйәтендә үҙенсә яҡтыртыла, сюжет төҙөлөшө һәм уның үҫтерелеше яғынан оҡшашлыҡ бик аҙ —уныһы ла әле, нигеҙҙә, мотив уртаҡлығынан килгән күренеш. Башҡорт риүәйәттәренең сюжет һөлдәһе инде беҙгә таныш,

фекерҙе раҫлау өсөн яҡут риүәйәтенең ҡыҫҡаса йөкмәткеһенә иғтибар итәйек.

Хикәйә ниндәйҙер ят, яҡуттарға оҡшамаған сәйер ҡиәфәтле, сәйер кейемле кешеләрҙең яҡут еренә күпләп килеү һәм бәлә килтереү ихтималлығы тураһында шамандың иҫкәртеүе менән башлана. Был хәүефте шаман, имеш, үҙе алдан тойоп, күреп тора. Ошо иҫкәртеүҙән һуң бер нисә йыл үткәс, Тығын тигән бай яҡуттың тирмәһенә таныш булмаған ике кеше килеп инә, уларҙың ҡиәфәте, кейеме шаман әйткәнсә. Артабан был икәүҙең Тығын байҙа ике йыл буйы эш хаҡы алмайынса эш эшләүҙәре, унан һуң ике үгеҙ тиреһе һорап алып, уны телгеләүҙәре, нәҙек кенә ҡайыш ептәрҙе һуҙып, уратып алынған ергә ҡаҙауҙар ҡаҡҡандан һуң, быларҙың юҡ булыуы хәбәр ителә. Ошо ваҡиғанан һуң ос йыл үткәс, үгеҙ тиреһе менән уратып алынған ергә рустар килеп, йорттар һала башлауы, ерле халыҡтың уңышһыҙ ҡаршылығы, уҡ-йәйә менән ҡоралланған яҡуттарҙы мылтыҡтан атып ҡурҡытыу кеүек фажиғәле хәлдәр тураһында һөйләнелә (218, 150—155).

Үгеҙ тиреһе дәүмәлендәге ер һатыу мотивына ҡоролған башҡорт риүәйәттәрен башҡа халыҡтарҙың риүәйәттәре менән артабан сағыштырып тороуҙың был урында кәрәге булмаҫ, сөнки уларҙа ла уртаҡ мотив, үҙ аллы оригиналь сюжет ятҡанлығы күҙгә ташлана, һәр халыҡтың ижадында был боронғо мотив конкрет тарихҡа, билдәле бер осорға бәйләп индерелгән. Тикшеренеүселәрҙең хаҡлы билдәләүенсә, башҡорт риүәйәттәренә ул рус самодержавиеһының Башҡортостанға ҡарата үткәрелгән колониаль политикаһы, «колонизацияның йыртҡыс характеры, рәхимһеҙ үҙенсәлеген биреүсе художестволы деталь булараҡ килеп ингән» (45, 33). Башҡорттарҙы хәйлә менән алдау, бөтөнләй юҡ хаҡҡа уларҙың ерҙәрен тартып алыу легенда һәм риүәйәттәрҙә цифрҙар теле менән түгел, ә сәнғәт алымы, образлы фекерләү аша еткерелгән. Шуныһы: һайланылған символ, образ шул тиклем тос һәм мәғәнәле — уның эргәһендә теләһә ниндәй һан күрһәткесе лә тоноғораҡ тойолған булыр ине, моғайын. Тикшеренеүсе өсөн, әлбиттә, образ ғына түгел, шул образ-символдың реаллеген раҫлаусы һандарҙы белеү ҙә ҡыҙыҡлы. Был йәһәттән XIX быуатҡа ҡараған ҡайһы бер

яҙма материалдар ифрат әһәмиәтле факттар бирә ала. Асыҡлыҡ өсөн Н. В. Ремезовтың «Очерки из жизни дикой Башкирии. Быль в сказочной стране» тигән китабынан ҡайһы бер факттарҙы килтереү генә лә етә. Н. В. Ремезов, В. А. Уткин тигән сауҙагәрҙең Бәрә әйәҙендә йәшәүсе башҡорттарҙың ерҙәрен бөтөнләй бушҡа тиерлек алыуына әсенеп, түбәндәге факттарҙы килтерә: «Уткин, — ти ул, — башҡорттарҙан бер юлы 100000 дисәтинә ерҙе 8 генә мең һумға, йәғни бер дисәтинә майҙанды 8 тингә «һатып» алған. Стәрлетамаҡ әйәҙендә Траппер тигән бер байҙың ҡомһоҙлоғона түҙә алмай, башҡорттарҙың уға ҡул күтәреүҙәре, батша властарының талаусыны яҡлап, ерле халыҡ вәкилдәрен хөкөмгә тарттырыуҙары хаҡында Ремезов китабында шулай уҡ аяныслы мәғлүмәттәр бар. Йәберһетелгән, алданған халыҡтың батша хөкүмәтенә күп мәртәбәләр ялыу итеүе лә ыңғай һөҙөмтә бирмәгән» (241, 59—63, 108—111, 162—187).

Шулай итеп, риүәйәт һәм легендаларҙағы образ һәм символдарҙың реаллеге тарихи материалдар менән раҫлана.

Айырым риүәйәттәр башҡорт ерҙәрен талауҙың социаль һәм синфи асылын аныҡ яҡтыртыуҙары менән әһәмиәтле. Мәҫәлән, «Байҙарҙың заводсыларға ер һатыуҙары» тигән риүәйәттә халыҡ фекере менән иҫәпләшмәй, шәхси ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү менән мәшғүл булған башҡорт байҙарының «эшмәкәрлеге» шелтәләнә, уларға нәфрәт белдерелә: ер һатыуҙың тик улар өсөн генә файҙалы булыуы һыҙыҡ өҫтөнә алына.

Ҡомһоҙлоғо арҡаһында үлеп ҡалған баярҙың яҙмышы хаҡындағы риүәйәттә («Ер һатыу») халыҡтың оптимистик хыялдары сағылып ҡала. Үҙ еренә үҙенең хоҡуғын тойоу һәм уны тартып алырға тырышыуҙың бик анһат булмауын иҫкәртеү мотивы «Айыу тиреһе дәүмәлендәге ер», «Батша генералы Коршин» (26, 126) исемле риүәйәттәрҙә лә бик асыҡ сағыла. Алдау юлы менән алынған ерҙең изгелеген күрә алмағанлыҡтан (башҡорттар генералға Йүрүҙәндән һыу алырға рөхсәт итмәйҙәр, ҡаҙыған ҡойоларҙан да һыу сыҡмай), Коршин кире әйләнеп ҡайтып китергә мәжбүр була.

Ер талаусыларға, батша түрәләренең яуызлыҡтарына ҡаршы башҡорттарҙың ризаһыҙлығы һәм стихиялы рәүештә

көрәшкә күтәр ел еүе хаҡында күп һанлы риүәйәт һәм легендалар ижад ителгән. Был көрәш рус баярҙарының утарҙарын яндырыу («Крепостной Йылайыр»), рус баярҙары һәм улар тарафынан килтерелгән атлы казактар менән бер төркөм башҡорттарҙың йәки айырым кешеләрҙең ҡораллы бәрелеше («Сая Ғәйнетдин», «Мырҙағол») һ. б. шуның кеүек эпизодтар аша һүрәтләнә (55, 136, 178—180).

Халыҡтың тарихи хәтере **ХУШ быуатта булып үткән башҡорт ихтилалдары,** уларҙың етәкселәре хаҡында ифрат әһәмиәтле мәғлүмәттәрҙе бөгөнгәсә һаҡлап йөрөтә. Мәçәлән, Башҡортостандың Шаран районында яҙып алынған «Аҡай батыр» исемендәге бер риүәйәт 1735—1740 йылдарҙағы восстаниеның тәүге етәкселәренең береһе булған старшина Аҡай Күсемов хаҡында. Билдәле булыуынса, 1735—1740 йылдарҙағы ихтилал батша хөкүмәтенең башҡорт ерҙәрендә ҡәлғәләр төҙөү һәм, ғөмүмән, милли феодаль иҙеү сәйәсәтенә ҡаршы йүнәлдерелгән ҙур күтәрелештәрҙән һаналып, өс этапҡа бүленә: беренсеһе —1735—1736 йылдар. Был осорҙа ихтилалға старшиналар Аҡай Күсемов, Килмәк Нурушев һәм батыр Йосоп Арыҡов етәкселек итә. 1737—1739 йылдарҙы эсенә алған икенсе осорҙа ихтилалдың башында старшиналар Бәпәнәй Төрөпбирҙин, Юлдашмулла һөйәрембәтов, батыр Төлкөсура Алдағолов, Мандар Ҡарабаев һәм батыр Көçәп Солтанғоловтар тора. 1740 йыл, йәғни күтәрелештең һуңғы этабында, ихтилал менән Ҡараһаҡал етәкселек итә (216, 173).

«Аҡай батыр» риүәйәтендә Аҡай батырҙың батырлыҡ сифаттары, уның үлеү фажиғәһе кеүек мәғлүмәттәр легендар планда һүрәтләнә. Ваҡыттар үтеү менән ваҡиғаларҙы һүрәтләү өсөн ысынбарлыҡ хәлдәре онотола төшөү сәбәпле, фольклор ижадсылары йыш ҡына геройҙарҙы тасуирлауҙа халыҡ ижадындағы әҙер ҡалыптарға (мәçәлән, батырҙың утта янмаç, һыуҙа батмаç булыуы, дошман менән яңғыҙ алышыуы һ. б.) мөрәжәғәт итеп, героик образ тыуҙырыуға өлгәшәләр. Бер осраҡта ул образдың эпос, икенсе осраҡта әкиәт геройы характерын алыуы мөмкин. «Аҡай батыр» риүәйәте лә, асылда, шул принципҡа ҡоролған: «Аҡай бик батыр булған, ти. Уны уҡ та алмаған, ҡылыс та киçмәгән. Мылтыҡтан атһалар, пуля теймәгән, һыуға төшһә, һыуға

батмаған, тәрән упҡын аша атлап сыға ла китә, ти был. <...> Аҡай аяҡтан йыҡылһа ла, күл уны йотмай. Әкрен генә тирбәткәндәй итеп, тулҡындар уны икенсе ярға алып сыға». Ошо рәүешле «тәбиғәт тә батыр яҡлы» тигән традицион мотивты индереү аша риүәйәттә Аҡайға, уның азатлыҡ көрәшенә ҡарата халыҡтың ыңғай мөнәсәбәте еткерелгән. Аҡай батырҙы атып йығыусы итеп, башҡорт йырҙарында мәңгелеккә ҡарғыш алған татар мырҙаһы Тәфтиләү (христиан диненә күскәс, Алексей Иванович Тевкелев) һүрәтләнгән. Уйҙырма мотивҡа ҡоролған был эпизод, дөйөм алғанда, реаль ерлекле. 1735—1740 йылдарҙағы ихтилал дәүерендә Тәфтиләүҙең баш күтәреүсе башҡорттарға ҡарата вәхшиҙәрсә ҡылған яуызлыҡтары халыҡ хәтерендә генә түгел, тарихи яҙмаларҙа ла сағылған. Күп һанлы факттарға туҡталып тормайынса, Балыҡсин волосындағы һөйәнтүс ауылы фажиғәһен иҫкә төшөрөү ҙә етә (меңгә яҡын кешенең атып, киҫеп-сабып үлтерелеүе, 105 кешенең келәткә керетелеп, терелә́й утта яндырылыуы) (124, 235—236). Башҡорт ерҙәрендә ҡәлғәләр төҙөлөүе, Аҡай Күсемовтың яу башлығы булып, батша ғәскәрҙәренә ҡаршы көрәшеүе, яу урындары («Минзәлә тирәһе», «Өфө яғы», «Иҙел буйы» һ. б.) тураһындағы мәғлүмәттәр шулай уҡ (55, 174—175) тарихи материалдар (8, 40-45) менән бер юҫыҡта.

Телгә алынған риүәйәттә тағы бер әһәмиәтле мәғлүмәт һаҡланған —ул һөйләүсенең иҫкәрмәһе: «Мин бәләкәй саҡта уның [Аҡай.— Ф. Я.] тураһында йыраусылар думбыра сиртеп, гөслә уйнап бирәләр ине. Хәҙер ундай йыраусылар бөткән инде». Атап әйткәндә, был иҫкәрмә яу башлығы старшина Аҡай Күсемов тураһында элегерәк көйләп-һамаҡлап, думбыра сиртеп башҡарылған эпик хикәйәт йәшәгәнлеген аңғарта. Саф ҡобайыр рәүешендә булғанмы ул әҫәр, әллә ҡатнаш формала (йыр + риүәйәт + ҡобайыр жанрҙарының һыҙаттарын туплаған) сюжет булғанмы — хәҙер өҙөп кенә әйтеүе ҡыйын. Нисек кенә булмаһын, Аҡай батырға бағышланған күләмле фольклор әҫәре булғанлығы шик тыуҙырмай. Академик Ғайса Хөсәйенов әҙерләп, «Ватандаш» журналында (2004, 12-се һан) баҫтырып сығарылған «Аҡай яуы. Тарихи хикәйәт» исемле ҡомартҡы — быны асыҡ дәлиле. Беренсе нәүбәттә хикәйәт тетрәндергес факттарҙан

«туҡылған» әҫәр булараҡ иғтибарҙы йәлеп итә. Унда 1735—1736 йылдарҙағы башҡорт ихтилалдарының айырым ваҡиғалары, яу күтәргән башҡорттарға һәм уларҙың туған-тыумасаһына ҡарата ҡылынған вәхшилек (тимер шөштәргә ултыртып, балталар менән баш-ҡулдарын сабып үлтереп, дарҙарға аҫып язалау; ҡарт-ҡороно таш һәм күҫәктәр менән бәргеләп үлтереү, имсәк балаларын сапҡылап ырғытыу...) һүрәтләнә. Сиреү башлығы генерал Румянцевтың мәкерлеге арҡаһында Аҡай батырҙың ҡулға алыныуы; элегерәк башҡорттар араһына килеп һыйынған Ҡазан татарҙары, мишәрҙәр, уржумдар (удмурттар), сирмештәр (мариҙар) араһынан сыҡҡан ҡайһы бер һатлыҡ йәндәрҙең булыуы, башҡорттарҙың үҙ араһындағы ҡаршылыҡтар (ҡыпсаҡтарҙың рус яҡлы булып, тамъяндарға ҡаршы көрәше) һ. б., һ. б. хәл-ваҡиғалар һүрәтләнә хикәйәттә. Ваҡиғалар яуҙарҙы күргән йә улар хаҡында белгән кеше тарафынан хәтирә рәүешендә тасуирлана. Шул яғы менән хикәйәт «Һуңғы һартай»ҙы хәтерләтеп ҡуя. «Аҡай яуы» хикәйәтенең стиленә ҡарата Ғайса Хөсәйенов хаҡлы рәүештә түбәндәгеләрҙе яҙа: «Аҡай яуы» хикәйәте — халыҡ хәтере буйынса яҙылған яҙма әҫәр. Ул үҙ асылы менән 1735—1736 йылдарҙағы яуҙарҙы <...> хикәйәләгән халыҡ хәтере ҡомартҡыһы» (аҫһыҙыҡ беҙҙеке. — ***Ф. Н.).*** Алда ҡарап үтелгән «Аҡай батыр» риүәйәтендә лә хикәйәттә ентекләп һөйләнелгән ҡайһы бер мотивтар сағылып ҡала, әммә улар легендар риүәйәт стилендә.

Ғилми әҙәбиәттән күренеүенсә, башҡорттар үҙҙәренең баш күтәреүенә легаль төҫ бирергә ынтылып, ихтилалдың «законлы» булыуын раҫларға тырышҡан. Бының осон улар Рус дәүләтенә ҡушылғанда үҙҙәренең ата-бабаларына Иван Грозный тарафынан бирелгән грамоталарҙы (жалованные грамоты) файҙаланған. Ырымбур экспедицияһының башҡорт ерҙәрендә крепостар тоҙөүен һ. б. сараларын баш күтәреүселәр батша грамоталары менән ҡаралған хоҡуҡтарҙың боҙолоуы, ә ихтилалды — Башҡортостандың Рус дәүләтенә ҡушылғандағы шарттарҙың үтәлеүен талап итеү тип аңлатҡан. Был идея туранан-тура йә ситләтелгән рәүештә бик күп документтарҙа урын алған. Ул бигерәк тә Себер даруғаһы баш күтәреүселәренең 1736 йылдың 2 августа В. Н. Татищевҡа яҙған хатында асыҡ сағылған. Был хатта башҡорттар үҙҙәренең хоҡуҡтарын тайпылышһыҙ яҡлаясаҡтары,

властар ҡуйылған талаптарҙы үтәү буйынса ташламалар яһағанға тиклем, ҡоралла көрәште туҡтатмаясаҡтары хаҡында хәбәр итә (124, 248).

1735—1740 йылдарҙағы ихтилалдың һуңғы этабында етәкселек иткән Ҡараһаҡалдың исеме лә риүәйәттәр иғтибарынан ситтә ҡалмаған. 1917 йылда Ырымбур әлкәһенең Бәләкәй Этҡол ауылында Хәмит ҡурайсынан Мөхәммәтша Буранғолов яҙып алған «Ҡарас менән Ҡараһаҡал» исемле риүәйәт Ҡараһаҡалдың ил ҡарттарын, уҙамандарҙы, аҡһаҡалдарҙы йыйып, яуға өндәүгә ниәтләнеүен сағылдырған көсөргәнешле эпизодты тасуирлауға ҡоролған. Ҡан ҡойғос яуҙарҙан ғәйрәте сиккән халыҡтың хәүефләнеүен риүәйәт сәсән теле менән кинәйәле һөйләш аша еткерә. Ҡобағош сәсәндең ярсығы Ҡарас сәсәндең Ҡараһаҡалға әйткән серле яуабын, мәҫәлән, бер ил ҡарты бына нисек сисеп бирә: «...Талды ҡырҡһаң, ҡан тама тигәне— Урал урмандары яуҙарҙа аҡҡан халыҡ ҡаны менән һуғарылған тигән һүҙ була. Аттарҙың ҡолағына ин һалынған, боттарына тамға баҫылған тигәне —бөтә еребеҙ билдәле, ҡайҙа барһаҡ та, тоторҙар тигән һүҙ була. Төндә өрөр эттәрҙе үлтергәндәр тигәне —үткән яуҙа ҡатнашҡандарҙы язалап бөткәндәр була. Ағас башына ҡор ҡунмаған тигәне — килгән ҡунаҡ (Ҡараһаҡал) сит кеше, беҙҙең илгә ямаулыҡтай ғына буласаҡ тигән һүҙ була...» (55, 175—176) Килтерелгән өҙөк, бер яҡтан, юғары художестволы формала заманының ғәжәп ҡатмарлы ижтимағи хәлен сағылдырыуы менән әһәмиәтле булһа[17], икенсе яҡтан, тарихи шәхес — Ҡараһаҡалға ҡарата билдәрелгән мөнәсәбәтте яҡтыртыуы менән иғтибарҙы йәлеп итә.

1973 йылда Башҡортостандың Әбйәлил районының Асҡар ауылында Мөғәлләм Мирхәйҙәровтан Ғайса Хөсәйенов тарафынан яҙып алынған «Ҡараһаҡал яуы» исемле риүәйәттә батша ғәскәрҙәре менән башҡорттар араһында ҡаты бәрелеш булыуы, шул бәрелештә йәш Ҡараһаҡал батырҙың

[17]«Ҡарас менән Ҡараһаҡал» исемле риүәйәттә 1735— 1740 йылдарҙағы башҡорт ихтилалының уңышһыҙ тамамланған тәүге ике этабынан һуң булған осор һүрәтләнгәнлеген күреп була. Ихтилалдарҙың ауырлығы тураһындағы мәғлүмәттәр тарихи материалдар менән дә раҫлана. Мәҫәлән, 1736 йылдың июнь аҙағында баш күтәреүселәр 15 меңдән ашыу кешеһен юғалтҡан була (8, 84).

да ҡатнашыуы телгә алына. Яу ҡыйратылғас, Ҡараһаҡалдың үзбәк, ҡарағалпаҡ, ҡаҙаҡ яҡтарына ҡасып китеүе һәм шул сит ерҙәрҙә ун йылдан артығыраҡ йәшәүе хаҡында һөйләнелә. Уҡымышлы, Ҡөрьәнде ятҡа белгән Ҡараһаҡал «һәр ерҙә шул ерле халыҡ телендә һөйләшер булған. Шуға күрә уны бер кем дә боласы башҡорт тип уйлай алмаған, үҙ кеше тип ҡараған», тиелә риүәйәттә. Ҡараһаҡалдың Мәккәгә барып хаж ҡылыуы, хажи булып алғас, данының нығыраҡ таралыуы, шул арҡала ҡаҙаҡтарҙың хатта уны хан итеп таныуы кеүек мәғлүмәттәр килтерелә. Ҡараһаҡал да үҙен «хан нәҫеленәнмен», ти икән.

Артабан Башҡортостанда яңынан яу ҡубыуы, Ҡараһаҡалдың ҡайтып, хан булып, шул яуҙы етәкләп йөрөүе һүрәтләнә. Риүәйәт боланың баҫтырылыуы, батша ғәскәрҙәренең халыҡты аяуһыҙ ҡырыуы, бала-саға, ҡыҙ-ҡырҡынды мәсхәрәләүе кеүек фажиғәле ваҡиғалар менән тамамлана (55, 373).

Килтерелгән ике риүәйәтте сағыштырып ҡараһаң, Ҡараһаҡалға белдерелгән мөнәсәбәттең ҡаршылыҡлы булыуын һиҙмәү мөмкин түгел. Тәүгеһендә ул —сит кеше (был хаҡта башта уҡ иҫкәртелә: «Ҡараһаҡал килеп, башҡорттар араһына ингәс...», аҙаҡта асыҡтан-асыҡ: «беҙҙең илгә ямаулыҡтай ғына буласаҡ»), икенсеһендә — «боласыл башҡорт тип бер кем дә уйламаған» уҡымышлы хажи. Яңыраҡ донъя күргән тарихи материалдар күҙлегенән ҡарағанда, «Ҡарас менән Ҡараһаҡал» риүәйәтендә реаль ерлекле мәғлүмәттәрҙең художестволы сағыл<u>ыш</u> тапҡанлығы асыҡлана, һуңғы ваҡытта матбуғатта баҫылған яҙмалар буйынса, Ҡараһаҡал—Себер ханы Күсем нәҫеленән, элекке Хиуа ханы Хәсәндең улы —Байбулат (331а); 1739—1740 йылғы ихтилалда реакцион роль уйнаған яу башлығы, Башҡортостандан ҡасып киткәндән һуң да үҙен «Жунғар кантойшаһының улы» тип йөрөткән әҙәм (125 а, 145—159).

«Ҡараһаҡал яуы» атамалы риүәйәттә иһә 1740 йылғы ихтилал етәксеһенә ҡарата матбуғатта элегерәк донъя күргән позитив йүнәлешле ҡараштар (252 а; 8) менән ауаздаш. Ҡараһаҡал — юрматы волосы башҡорто Миңлеғол Юлаев, 1735—1740 йылдарҙағы ихтилалдың һуңғы этабындағы яу етәксеһе, юлбашсы тигән мәғлүмәт яҙма сығанаҡтарҙа

әленән-әле күренгеләй торҙо, ихтилалдың аяуһыҙ баҫтырылыуы тураһында ла яҙылманы түгел, яҙылды. Тарихи ваҡиғаларға, халыҡ ижады әҫәрҙәренә битараф булмаған кешеләр өсөн мәғлүмәт өҫтәлә, яңыртыла бара. Шуға ла ҡайһы бер информанттар теге йәки был фольклор әҫәрен һөйләгәндә, уға китап (кино, радио) мәғлүмәтен дә ҡушып ебәргеләй. Ихтилалдар хаҡындағы риүәйәт-легендаларҙа ла бындай күренештәр сағылып ҡала.

Башҡорттарҙың күп юғалтыуҙар кисереп атҡарылған көрәшенең ыңғай һөҙөмтәһе булып уларҙың үҙ ерҙәренә аҫабалыҡ хоҡуҡтарын һаҡлап ҡала алыуы тора. Дөйөм алғанда иһә батшалыҡ үҙенең колониаль сәйәсәтенән тайпылмай: башҡорт ерҙәрендә ҡәлғәләр, заводтар төҙөү дауам итә, иҙеү көсәйгәндән-көсәйә. 50-се йылдар уртаһына Башҡортостан ерендә егерме завод төҙөлә. Уларҙы һалыу һәм хужалыҡтарын урынлаштырыу өсөн башҡорттарҙың 2,5 млн. дисәтинә ере файҙаланыла, һөҙөмтәлә ерле халыҡтың мал аҫрау һ. б. мөмкинселектәре ныҡ тарая, йәшәү шарттары ауырлаша. Заводтарҙың күпселеге Нуғай даруғаһы ерҙәрендә төҙөлгәнлектән, батша хөкүмәтенең сәйәсәтенә ҡарата ризаһыҙлыҡ нәҡ ошо яҡта көсәйеп, 1755 йылдағы ихтилал башланыуға алшарт тыуҙыра (124, 251—252).

Халыҡ ижадында шул замандың һулышы Тау эштәре буйынса эҙләнеүҙәр партияһы начальнигы Брагин тураһындағы риүәйәттәрҙә һаҡланған. Петербургтан ебәрелгән был түрәнең яуызлыҡтары «Сураш» исемле риүәйәттә, мәҫәлән, түбәндәгесә әйтеп бирелгән: «Брагин аҡ таш ҡаҙҙыртҡан. Халыҡты бушлай эшләтеп бик йонсотҡан. Өҫтәүенә, ҡатынҡыҙҙарҙы мыҫҡыл итеп, халыҡтың йәненә тейгән. Кейәүгә сығыр алдынан һәр бер ҡыҙ Брагин менән төн уҙғарырға тейеш булған. Әгәр риза булмаһалар, ҡыҙҙы ла, егетте лә, ата-әсәләрен дә һәләк иткән» (55, 182—183).

Риүәйәттәрҙең һәр береһендә был яуызға ҡарата халыҡтың тәрән нәфрәт тойғоһо белдерелә. Түҙеме сиктән ашҡан ауыл уҙамандары бер саҡ йыйылып, Брагинды юҡ итергә булалар һәм үҙҙәренең уйын тормошҡа ашыралар: Талҡаҫ күленә балыҡ ауларға килгән дошман юҡ ителә. Риүәйәттәрҙең ҡайһыһында Брагиндың башына етеүсе итеп Әмин

батыр («Тимерсе Әмин менән Брагин түрә»), ҡайһыларында Сураш батыр («Сураш») һүрәтләнә. Риүәйәттәр буйынса, улар — бер туған. Брагиндан ҡотолоу юлын да бергәләп башҡарыуҙары ихтимал. Әмин дә, Сураш та —реаль шәхестәр. Академик И. И. Лепехин үҙенең «Продолжение дневных записок путешествия по разным провинциям Российского государства» хеҙмәтендә Башҡортостанда булғанда Брагинды үлтергән Сураш Мәргән менән осрашыуы тураһында яҙа (168, 110). Халыҡ хәтерендә Сураштың нәҫел ебенең иҫтә тотолоуы ла осраҡлы түгел: «Сураш Истамғол улы була. Сураштан Йәрмөхәмәт, Йәрмөхәмәттән Ҡунаҡҡужа тыуа, Ҡунаҡҡужаның Хөсәйен, Йомағужа, Әбдрәхим, Хәмит, Байтүрә тигән биш улы була. Минең атайым Байтүрә була инде (1966 йылда Сибай ҡалаһында Хәмитов Сәйетборхан Байтүрә улының (1891 йылғы) һөйләгәне). Әминдең исеме ер-һыу, ауыл исемдәрендә һаҡланып ҡалған (Әмин ауылы, Әмин ташы). Беҙгә билдәле булған риүәйәттәрҙә Брагиндан төп үс алыусылар булараҡ, әйткәнебеҙсә, Әмин менән Сураш һүрәтләнә. Ғилми әҙәбиәттә Бөрйән волосы кешеләре —Эткол (Джилан Иткул) менән Хоҙайбирҙе күрһәтелә (124, 254). Нисек кенә булмаһын, мәғлүмәттәр асылда бер-береһенә ҡаршы килмәй, ә киңәйтеләләр генә, һәм уларҙың танып белеү әһәмиәте ифрат ҙур.

Брагин 1755 йылдың 15 майында үлтерелә. Был ваҡиғанан һуң күп тә үтмәй, Ырымбурҙан Силәбегә илткән Исет трактына подполковник Исаковтың каратель отряды ебәрелә. Ырымбур губернаторы И. И. Неплюев Исаковҡа ошондай бойороҡ та яҙып ебәрә: «Яуызлыҡ ҡылыусыларҙы аҡылға ултыртыу, ә ҡалған башҡа диндәгеләрҙе ҡурҡытыу өсөн <...> фетнәселәрҙең төйәктәр ендәге нәҫел-ырыуҙарын табып, исемдәре генә тороп ҡалһа ла, йәлләп тормай, тамырҙарын ҡороторға кәрәк. Ә был бурҙар өйөрөнә ҡатнашыуҙа шикле булғандар килеп сыҡҡан хәлдә, уларын ҡулға алып, ҡаты ҡарауыл аҫтында бығаулы килеш бында, Ырымбурға, оҙатығыҙ!» Болаға ҡатнашыусыларҙың бөтә туған-тыумасаларын ҡулға алып оҙатыуҙан башҡа, Неплюев Исаковҡа уларҙың мал-мөлкәтен конфискацияларға ҡуша. Бөрйән вөлөсының үҙәгендә «тыныслыкты нығытыу өсөн»

ашығыс рәүештә Яңы Йылайыр ҡәлғәһен һалдыра башлайҙар (216, 196). Репрессиялар көсәйгәнлектән баш күтәреүҙә әүҙем ҡатнашыусылар үҙҙәренең ғаиләләре менән күрше волостарға, ҡаҙаҡ далаларына күсеп китергә мәжбүр була. Был хәлдәр ҙә риүәйәттәрҙә киң сағылыш тапҡан («Сураш», «Ҡәнифә юлы»).

1755 йылдың май ваҡиғалары стихиялы ихтилалдар характерын ала, ләкин аныҡ программаның булмауы, стихиялылыҡ ыңғай һөҙөмтәләргә алып килмәй.

XVIII быуаттың уртаһында батша хөкүмәте, башҡорт ерҙәрен талау сәйәсәте дауам итеү менән бер рәттән, рус булмаған халыҡтарҙы көсләп христиан диненә күсереү буйынса ла ҙур әүҙемлек күрһәтә. (Анна Иоановнаның 1736 йылдың 11 февралендәге указында ер мәсьәләһенән тыш, сиркәүҙәр селтәрен киңәйтеү, мосолман руханиҙарының һанын кәметеү ҡаралған була («без указов мечетей и школ не строить») (8 а, 22). Халыҡтың намыҫына тейеп, күңеленә яра һалған был эшмәкәрлек тә тарихи фольклорҙа ил ауыҙының ҡәһәр һүҙе булып һаҡланып ҡалған. 1972 йылда Башҡортостандың Ауырғазы районында яҙып алынған «Башҡорттарҙың суҡындырыуҙан баш тартҡаны» исемле бер риүәйәт, мәҫәлән, шундайҙарҙан. Унда башҡорттарҙың христиан диненә күсмәҫ өсөн үҙҙәренең ғүмерҙәрен аямай ҡаршылыҡ күрһәтеүҙәре хаҡында бәйән ҡылына, халыҡты аҫыу-киҫеүҙең күләме йылғаларҙы быуған мәйет картинаһы аша символлаштырыла (203, оп. 65, д. 9, л. 90).

1988 йылда Башҡортостандың Мишкә районы Оло Шаҙы ауылында яҙып алынған «Суҡындырыу» исемле риүәйәт, бәләкәй генә күләмле булыуына ҡарамаҫтан, мәғлүмәткә бай булыуы менән иғтибарҙы йәлеп итә: «Элекке заманда Баҡалы, Бүздәк яҡтарында рустар ауыл һайын мосолмандарҙы суҡындырып йөрөгәндәр. Сана менән үткәндәр, һәр санала өс һалдат, бер поп булған.

Шаҙы кешеләре суҡынмаған. Ошо тирәләге ун бер ауыл халҡы башҡорттары һәнәк, салғы менән ҡоралланып, суҡындырыусыларға ҡаршы сыҡҡан. «Үлһәк үлербеҙ — динебеҙҙе ташламабыҙ», — тигәндәр. Күмәк көскә ни етә? Шаҙыларҙы суҡындыра алмай кире тайған рустар». (56, 201).

«Батырша менән Яныш» риүәйәтендә мосолман динен, мәсетте ҡыҫыу, шуға ҡаршы Батырша етәкселегендә башҡорт һәм мишәрҙәрҙең яуға күтәрелеүе тасуирлана. 1755 йылғы ихтилал идеологы Батыршаның (ысын исеме —Абдулла Ғәли улы Алиев) заманында уҡымышлылығы менән дан алған мөҙәрис булыуы, батша хөкүмәтенең мосолмандарҙы христиан диненә күсереү сәйәсәте тормошҡа аша башлағас (айырыуса татар, мишәрҙәр араһында), уның халыҡҡа өндәмә менән мөрәжәғәт итеүе, баш күтәреүселәрҙең еңелеүе, Батыршаның Петербургка төрмәгә оҙатылыуы кеүек мәғлүмәттәр (216, 195—203) тарихи дөрөҫлөккә тап килә. Батыршаның төрмәнән аҡ батшаға яҙған биш-алты табаҡ күләмендәге ғәйәт ҙур хаты дәүләт архивтарында һаҡланған. Ғ. Б. Хөсәйенов был хатты XVIII быуат уртаһының ҡиммәтле бер ҡомартҡыһы, үткән замандың тарихын, халыҡтың көнкүрешен, уйҙарын һәм теләктәрен йәнле итеп хикәйәләгән ҙур әҙәби-тарихи әҫәр, социаль-философик трактат тип атай (219, 6).

Һуңыраҡ тарихи яҙмаларға, Батыршаның хатына, Башҡортостандың төрлө төбәктәрендәге баш күтәреүселәр хаҡындағы риүәйәттәргә таянып, ғалим-яҙыусы «Батырша» исемле тарихи-биографик китап яҙҙы (Өфө: Китап, 2005).

Әйткәндәй, «Батырша һәм Яныш» риүәйәтендә ентекләп һүрәтләнгән урындағы властарға тоғро старшина Яныш образы ла реаль ерлекле: был исем Батыршаның батшаға яҙған хатында осрай (219, 43—50).

Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө фәнни үҙәгенең ғилми архивында Балтас районының Үрге Ҡарыш ауылында 88 йәшлек Хәсән Мәүлиевтән 1950 йылдарҙа Ғ. Үмәркәев тарафынан яҙып алынған «Батырша батыр яуы» (203, оп. 12, д. 271, л. 40—41) тигән тағы бер риүәйәт һаҡлана. Ҡыҫҡа һәм схематик характерҙа булыуына ҡарамаҫтан, риүәйәт Батырша етәкселегендәге күтәрелешкә халыҡтың мөнәсәбәтен һаҡлауы менән ҡиммәтле. Яуҙа ҡатнашыусы башҡорттарҙы йыртҡыстарса язалауҙар, башҡорт ауылдарын яндырыу хаҡындағы мәғлүмәттәр реаль ерлекле, улар тарихи документтар менән раҫлана. Текстағы Батыршаны аҫып үлтереү тураһындағы мәғлүмәт ысынбарлыҡҡа тура килмәй: билдәле

булыуынса, Батырша 1762 йылдың 24 июлендә Шлиссельбург төрмәһендә бер үҙе баш күтәреп, тиңһеҙ алышта һәләк булған (124, 260).

Башҡорт халҡының милли һәм социаль иҙеүгә ҡаршы булған киҫкен көрәше, азатлыҡҡа ынтылыу идеялары үҙенең юғары нөктәһен **1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы ваҡиғаларын сағылдырған риүәйәттәрҙә**[18] тапҡан. Был риүәйәттәрҙең күпселеге Емельян Пугачевтың тоғро яуҙашы, ихтилалдың данлыҡлы батыры Салауат Юлаев исеменә бәйле.

Төҙөлөштәре яғынан Салауат Юлаев тураһындағы риүәйәттәр күп төрлө. Мәғлүмәт сығанағы булған, күләме буйынса бәләкәй генә хикәйә-хәбәрләмәләр осрай («Салауаттың әсәһе», «Салауат ғаиләһенең һәләкәте», «Салауат төшө», «Салауат күпере»). Риүәйәттәр, риүәйәт-легендалар араһында сюжетлы хикәйәләр — фабулаттар байтаҡ. Улар, тормошсан йөкмәткеләренә бәйле рәүештә, бер күренешле (эпизодлы) («Салауат һәм Ҡараһаҡал», «Салауат фарманы») йәки бер нисә күренешле була алалар («Салауат менән Балтас», «Салауат батыр тураһында легенда»). Сәсмә тексҡа йыр, күпселек осраҡтарҙа Салауаттың үҙенең йырҙары тип иҫәпләнгән текстар индерелгән риүәйәттәр ҙә осрай. Хикәйәләүгә йыр индереп, уны һөйләүселәр батырҙың шиғри талантын, йырсылыҡ һәләтен күрһәтергә теләгәндер, моғайын.

Салауат тураһындағы халыҡ хикәйәләре тәрән социаль йөкмәткеле, демократик йүнәлешле булыуҙары менән айырылып торалар. Был йәһәттән бигерәк тә «Салауат», «Салауат батыр» исемендәге риүәйәттәр әһәмиәтле, һуңғы әҫәрҙә, мәҫәлән, тире һылтауы менән алдап алынған ергә Ҡырмаһаҡал батшаның хужа булыуы, хоҡуҡһыҙлыҡҡа дусар булған халыҡтың Салауатҡа мөрәжәғәт итеп, уға тылсымлы ҡылыс тапшырыуы, йәш батырҙың илгә ташлаған ораны юғары рухта, ҙур психологик көсөргәнешлек менән бирелә. Герой менән халыҡ берҙәмлеге мәсьәләһенең тәрән мәғәнәле мәҡәл теле менән әйтеп бирелеүе — әҫәрҙең идея-художество ҡеүәһен күтәреү тәңгәлендә уңышлы ҡулланыл-

[18] Крәҫтиәндәр һуғышына бәйле риүәйәт һәм легендаларҙың тулы йыйылмаһын ҡарағыҙ: ошо китапҡа бирелгән «Библиография» — 256а.

ған поэтик алым. Бына ул эпизодтың риүәйәттә бирелеү рәүеше: «...Салауат толпарына һикереп менә лә әйтә:

— Ир яҙмышы ил ҡулында, ил яҙмышы ир ҡулында. Ҡайҙа халҡым, шунда яҙмышым! — ти.

Атын уйнатып, ҡылысын йәшендәй балҡытып, ҡынынан һурып ебәрә лә, ҡулына күмер киҫәге тотоп, оран һала:

— Үҙ еребеҙгә үҙебеҙ хужа булайыҡ! Урал урманы беҙгә уҡ менән суҡмар үҫтергән. Урал иле ерен-һыуын яҡлап һуғышырлыҡ дәртле ирҙәр үҫтергән. Илде дошманға бирмәйек!

Салауат батырҙың ҡылды ҡырҡҡа ярыр һүҙен ишетеп, бөтә ир заты атҡа менгән, ҡорал таҡҡан. Салауат батырҙың оранын илгә еткереп, бөтә яҡтарға сапҡындар сапҡан...» (55, 198).

«Салауат батыр» риүәйәтенең мәғәнәүи ҡиммәтен арттырған йәнә бер мөһим күренеш — хеҙмәтсән халыҡтар дуҫлығы һәм берҙәмлеге темаһын һыҙыҡ өҫтөнә алыу. Әҫәрҙә ул Салауат менән Бүгәсәүҙең осрашыу картинаһы аша яҡтыртыла. Милли һәм социаль иҙеүгә ҡаршы көрәштә рус хеҙмәтсән халҡы менән бергә сығынт яһауҙың кәрәклеген аңлай алыуы һәм халыҡҡа таянып эш итә белеүе Салауатты башҡа бик күп ихтилал етәкселәренән өҫтөн иткән һәм юғары шәхес дәрәжәһенә күтәргән.

Халыҡтар берҙәмлеге мәсьәләһе «Бүгәсәүгә ҡушылып, ир-батырға ҡуш булып» ҡобайырының сәсмә варианты булған «Салауат телмәре» исемле риүәйәттә айырыуса асыҡ сағыла.

Салауат, хоҡуҡһыҙлыҡҡа һәм йәбер-золомға ҡаршы көрәштә рус халҡы менән берләшеү зарурлығын аңлап, башҡорт ғәскәрен Емельян Пугачев армияһына ҡушылырға саҡыра һәм маҡсатына ирешә. Берсә сәсмә, берсә ҡобайыр рәүешендә бәйән ителгән мөрәжәғәт, ҡулдарына күмер тотоп ант итеү (ул ихтилалдар ваҡытында яндырылған башҡорт ауылдарының билгеһе) — риүәйәттең иң тулҡынландырғыс юлдары: «...Туйҙа, майҙанда көрәшеп кеше йығыу менән генә кеше бәһлеүән булмай. Илен эйәртеп, ил ирке өсөн дошманын еңеп, ил күрке булыу — бына шул була бәһлеүәнлек.

Батырмын, тип кем әйтмәй,
Яу килгәндә йүне юҡ.
Сәсәнмен, тип кем әйтмәй,
Дау килгәндә өнө юҡ.

Ялп-йолп иткән ябалаҡ
Яҙмышта кемгә юлдаш
булмаған,
Бүтәгәләй үлән, буҙ ялан
Кемгә генә түшәк булмаған?
Яғаһына ҡош оялап,
Ир башҡорттоң башы
Ҡайҙа ятып ҡалмаған?
Хахылдап, ҡан түкөрмәй,
Үлән түшәп, ит еймәй,
Ҡан күпертеп, һурпа эсмәй,
Хәләл ҡаныңды түкмәй,
Башҡортҡа тиң ирек буламы?»

Бында шуны ла әйтергә кәрәк. Салауаттың күмер кисәген тотоп, ат менгән ирҙәргә мөрәжәғәте — яҙма әҙәбиәттә лә киң таралған поэтик алым. Был алымдың халыҡ ижадына әҙәбиәт аша килеп ингәнме, әллә, киреһенсә, фольклорҙан әҙәбиәткәме — хәҙер өҙөп кенә әйтеүе ауыр. Нисек кенә булмаһын, таланған ерҙәр, яндырылған ауылдар фажиғәһен, шул фажиғә фонында бөлгөнлөккә төшкән башҡорттарҙың үҙ ерҙәрен һәм хоҡуҡтарын һаҡлауға булған ҡаҡшамаҫ ынтылышын сағылдырған ғәйәт тәрән мәғәнәле поэтик символ ул.

«Салауаттың Пугачев менән осрашыуы», «Салауат менән Пугачевтың дуҫлашып китеүе» исемле риүәйәттәр ҙә ике халыҡтың дуҫлашыуына мәҙхиә кеүек ҡабул ителәләр, һуңғы риүәйәттә дөйөм маҡсат нигеҙендә килеп тыуған берҙәмлек, дуҫлыҡ мотивы ике шәхестең осрашыуы аша ғына түгел, ә халыҡтарҙың берләшеүе аша сағыла: «...Салауат атлылары Ырымбур эргәһендә батша ғәскәрҙәренә ҡаршы рус казактары менән бергәләп һуғышалар...» (55, 202). «Салауат ғәскәрендә мариҙар», «Юлҡай менән Бәшәрғол» риүәйәттәрендә 1773—1775 йылдарҙағы ихтилалда башҡорт батыры Салауат оранына ҡушылған мари, сыуаш һ. б. халыҡтар хаҡында һөйләнелә.

Салауат Юлаев етәкселегендәге дәһшәтле күтәрелештә халыҡ массаларының уйнаған ролен һүрәтләүсе риүәйәттәр ифрат ҙур әһәмиәткә эйә. Ғ. Н. Үмәркәев тарафынан Башҡортостандың Балтас районында яҙып алынған материалдар араһында халыҡтың Салауат ғәскәренә ярҙамы, теләктәшлеге хаҡында ғәйәт ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр табырға була. Бигерәк тә Нөркә ауылы аҡһаҡалы, яуға үҙенең ике улын

биргән Муса Ҡәҙермәтовтың исеме ҙур йылылыҡ менән телгә алына унда (203, оп. 12, д. 271, л. 73—74). Был исем 1973 йылда Ғ. Б. Хөсәйенов яҙып алған «Балтас менән Салауат» тигән риүәйәттә лә осрай: «...Салауат килеп осрашҡас та, Нөркәгә бер сапҡын ебәргән. Ауыл халҡы Салауат ғәскәрен хөрмәт менән ҡаршы алған. Шул кисте үк оло яуға мал-тыуар һуйып, һый-хөрмәт ойоштороғандар. Быны ауылдың аҡһаҡалы Муса ҡарт башлап йөрөгән...» (55, 204); «...Әй башҡорттары Салауат яуына ҡушылып, азатлыҡ яулағандар. Урындағы халыҡ Салауат ғәскәренә аҙыҡ-түлек менән ярҙам иткән. <...> Ләмәҙтамаҡ ауылында [хәҙерге Мәсетле районына инә] ғәскәргә кәрәк-яраҡ йыйыусы итеп бәһлеүән кәүҙәле көрәшсе Динекәй (Динислам) тәғәйенләнә. <...> Салауат Красноуфимскиға <...> китер саҡта үҙенә ярҙам ҡылған кешеләр менән хушлаша, һәр ҡайһыһына бүләк тапшыра, Динекәйгә биленән көмөш ҡәмәрен сисеп бирә» («Салауаттың Әй буйында булғаны» — 256а, № 79); «Салауат батыр ауылға һис бер зыян-зарар һалмаған. Шуның өсөн уны халыҡ үҙ батыры итеп күргән» («Ҡыйғы ауылы халҡының Салауат яуына ярҙам итеүе»—256а, №85).

«Юлҡай менән Бәшәрғол» риүәйәтендә Табын башҡорттарының яуҙа ҡатнашыуға теләк белдереп, Салауат батырға сапҡын ебәреүҙәр е, аҙаҡ көслө ғәскәр төҙөп, һуғышып йөрөүҙәре һүрәтләнә. Бында шул уҡ халыҡ менән батыр берҙәмлеге идеяһы алға сығарыла. Ихтилалдың аяуһыҙ баҫтырылыуы, яу башлыҡтарын рәхимһеҙ язалау, болала ҡатнашыусыларҙың үҙҙәре кисергән юғалтыуҙар «Юлҡай менән Бәшәрғол» риүәйәтенең йөкмәткеһенә трагик интонациялар индергән. Бындай ауаздар әҫәрҙә шиғри форма — йырҙар аша еткерелә:

...Дошман яуҙарында һәләк булды
Юлҡай менән менгән толпары.
Ай яҡтылары юҡ, ҡараңғы тән,
Ҡалҡмай ҙа шул кисен Өлкәре.

Улын юғалтыуҙан йөрәге әрнегән Бәшәрғолдоң яуҙаштарының күңелен күтәрергә, рухтарын төшөрмәҫкә тырышыуын һүрәтләгән юлдар иһә уның көслө ихтыярлы шәхес

булыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала, һәм был образ беҙҙең күҙ алдыбыҙға үҙенең бөтә тулылығында, күркәмлегендә килеп баҫа:

Кармалинкай яға, ай, күк сәкмән,
Килбәтһеҙ ир кейһә, килешмәҫ.
Әҙер булһа ирҙең уҡ-һаҙағы,
Ҡаршы килгән яуға бирешмәҫ.

Дөйөм алғанда, идеяға тоғролоҡ, ҡылған эшеңдең хаҡлығына ышаныу мотивы «Юлҡай менән Бәшәрғол» хикәйәһенең оптимистик асылын билдәләй. Риүәйәт геройының түрәләргә биргән яуабы аша халыҡтың һынмаҫ ихтыяры сағыла. Түрәләрҙең: «Ҡайтып, ҡылған эшегеҙгә тәүбә ҡылығыҙ, беҙ һеҙгә яза бирмәбеҙ», — тигән һүҙенә Бәшәрғол: «Намыҫлы ирҙәр үҙ намыҫында үлергә тейешле... Ҡайтып баш һалыуға ҡарағанда, намыҫ менән үлеү артығыраҡ», — тигән. Риүәйәт бөтөмөнөң Салауаттың батырлығын данлауға арналған «Салауат батыр ир ине лә, /Салауат батыр ир ине. / Маңлайынан ҡан сыҡҡанда, /Тирем сыға, тир ине» тигән ҡобайыр менән тамамланыуы үҙе лә күп нәмә тураһында һөйләй.

Крәҫтиәндәр һуғышына арналған риүәйәттәр араһында шул замандың синфи мөнәсәбәттәре, төрлө синыф вәкилдәренең граждანлыҡ позицияһын сағылдырған сюжеттар бар. «Салауат менән Балтас», «Салауат приказы», «Салауат байҙарға уҫал булған» исемле риүәйәттәр, мәҫәлән, шундайҙарҙан. Был риүәйәттәр старшина улы Салауаттың халыҡҡа яҡынлығын, уның хәрби һәм рухи етәксеһе булыуын кәүҙәләндереүҙәре менән ҡиммәтле. 1773—1775 йылдарҙағы ихтилал осоронда халыҡтың азатлыҡ өсөн көрәшен, күтәрелеш етәксеһе Салауат Юлаевтың яҙмышы хәл ителгән үтә яуаплы мәлдә аяуһыҙ мәкерлек күрһәткән Ҡолой Балтасовтың образын тыуҙырыуҙа риүәйәтселәр үҙҙәренең оҫталыҡтарын йәлләмәгән. Риүәйәттә ул аҫтыртын, хәйләкәр, яуыз, һатлыҡ старшина булараҡ тасуирлана. Себер юлының Ҡара-Табын волосы старшинаһы Ҡолой Балтасов хаҡындағы тарихи материалдар менән халыҡ риүәйәттәре ауаздаш яңғырай. Ҡолойҙоң Әбей батша ғәскәрҙәре яғында көрәшеүе,

восстаниела ҡатнашыусыларға ҡарата каратель булараҡ сығыш яһауы, Салауат өҫтөнән биргән доностары һәм яла яғыуҙары кеүек риүәйәт мәғлүмәттәре яҙма документтар (93, 40—43) менән раҫлана.

Салауат менән Балтас хаҡында Ғәбделхай Үмәркәев яҙып алған риүәйәттәр (203, оп. 12, д. 271, л. 19—23) матбуғатта сыҡҡан вариант менән бер юҫыҡта: халыҡтың Салауатҡа булған мөхәббәте, Ҡолойға ҡарата нәфрәте уларҙа етерлек дәрәжәлә аныҡ әйтеп бирелә. Салауаттың батырлығына һоҡланыу, уның ҡылған эшенең хаҡлығына инаныу, геройға һөйөү тойғоһо — Крәҫтиәндәр һуғышы тураһындағы риүәйәттәр өсөн ғөмүмән хас һыҙат.

Риүәйәт-легендаларҙан, риүәйәттәрҙән күренеүенсә, Салауаттың тотолоп һөргөнгә ебәрелеүе[19] халыҡтың йөрәгенә уңалмаҫ яра һалып, тәрән поэтик йөкмәткеле әҫәрҙәр ижад итеүгә килтергән: «Салауат батырҙы тотоп, мәңгелек һөргөнгә ебәргәс, бөтә Башҡортостан зар илаған, — тиелә «Ни өсөн тауҙарҙа гәлсәр күп?» тигән бер легендала. — Кешеләр берәмләп тә, бөтә бала-сағалары менән дә, тотош ауылдары менән йәш ҡойған. Күҙ йәштәрен бер-береһенә күрһәтмәҫ өсөн, кешеләр тауҙарға китеп тә ҡайғырышҡандар.

Саф, ҡайнар булған халыҡтың күҙ йәше. Ҡая таштарға тәгәрәп төшөп, хәсрәтле ергә һеңеп, был күҙ йәштәре

[19] Тарихи документтарҙан билдәле булыуынса, Салауат Юлаев 1774 йылдың 25 ноябрендә хәҙерге Салауат районының Ҡаратау урманында подполковник Аршеневский ебәргән поручик Лесковский отряды тарафынан тотолоп, башта Аршеневскийға, аҙаҡ Ҡаҙанға йәшерен комиссия ҡарамағына ебәрелә. Ғилми әҙәбиәттән билдәле булыуынса, Лесковский командаһының авангардын Нуғай даруғаһының мишәр старшинаһы Мөксин Әбделсәләмовтың һыбайлылары тәшкил иткән. Күп йылдар үткәс, 1791 йыл, шунан 1793 йылда Мөксин Әбделсәләмов, офицерлыҡ чинына дәғүә итеп, Екатерина Икенсегә ебәргән прошениеһында: «Төп енәйәтсенең [Пугачевтың] яратҡан яуҙашы башҡорт Салауат Юлаевты тотоп, властарға тапшырҙым», — тип яҙған, ә уның туғаны сотник (йөҙ башы) Йәмғур (Зямгур) шул уҡ ҡәтғилек менән үҙенең башҡорт Салауат Юлаевты тотоуы тураһында хәбәр иткән. Мөксин Әбделсәләмов 1773 — 1775 йй. ихтилалға тиклем дә батша властарының каратель отряды составында баш күтәреүселәрҙе эҙәрлекләүҙә ҡатнаша: атап әйткәндә, 1755 йылғы ихтилал етәксеһе Батыршаны тотоп (үҙенең дуҫы Сөләймән Диваев менән), уны Петербургка килтерә (93, 35).

гәлсәргә әүерелгән. Шуға күрә хәҙер берәй гәлсәр бөртөгөн тапһалар, был урында яңғыҙы ғына бер кеше илаған, тиҙәр. Ә гәлсәр күберәк табылған ерҙә —бөтә өй эсе, ә бик күп булған ерҙә тотош ауыл илаған, имеш» (55, 212). Үҙенең тамырҙары менән тау-завод фольклоры традицияларына барып тоташҡан был легенда уйҙырмаға ҡоролһа ла, халыҡтың Салауатҡа булған һөйөүен, батырҙың фажиғәһе айҡанлы тыуған ауыр ҡайғы-хәсрәт кисерештәрен сағылдырыуы менән дөрөҫ.

Силәбе әлкәһендә яҙып алынған бер легендар риүәйәт халыҡтың оптимистик хыялдарын, өмөтөн үҙенсәлекле һүрәтләүе менән әһәмиәтле: «Байҙар Салауатты каторгаға ебәргәндәр, ул бер ҡасан да әйләнеп ҡайтмаясаҡ, тип уйлағандар. Аҡһаҡалдар иһә Салауаттың күләгәһен айлы төндәрҙә йыш ҡына күрер булғандар. Башына төлкө бүрек кейеп, һуҡмаҡ буйлап йөрөй икән ул. Уны Салауаттың шәүләһе икән, тигәндәр» (203, оп. 63, д. 56, л. 113). Ә икенсе бер риүәйәт буйынса, Салауат изгеләрҙең төшөнә керә, уларҙы берәр нәмә хаҡында киҫәтә, имеш. Риүәйәтсе фекеренсә, Салауатты төштә күреү бәхеткә була («Салауаттың ҡиәфәте» — 256а, № 3).

Изге ниәт менән башланған яуҙың уңышһыҙлыҡҡа осрауы халыҡ күңеленә генә түгел, әлбиттә, Салауаттың үҙ күңеленә лә уңалмаҫ, әрнеткес яра һалған. Риүәйәттәрҙән күренеүенсә, Оло Ҡатау заводы өсөн барған уңышһыҙ көрәш ваҡиғаларын батыр айырыуса ауыр кисергән («Салауат батыр Ҡатау заводында», «Салауат батырҙың Оло Ҡатауҙағы һуғышы». Йырҙан: «Ун ике лә завод мин ала(а)лдым, ала(а)лманым Оло Ҡатауҙы», «Дошман яуҡайҙары араһында һис булманы минең белешем» һ. б.). Риүәйәттәр Салауат Юлаевтың был заводҡа өс мәртәбә һөжүм итеүе тураһында бәйән ҡыла, һәм халыҡ хәтерендә һаҡланған ошо мәғлүмәт ысынбарлыҡҡа тап килә. Документаль сығанаҡтарҙан билдәле булыуынса, Салауат атаһы Юлай Аҙналин 1774 йылдың май айынан бирле ҡамауҙа тотҡан Ҡатау (Катав-Ивановск) заводына сентябрь, октябрь һәм ноябрь айҙарында килә. Сентябрь башында килгәндә, ул атаһы менән бергәләп завод эшселәренә яҙма рәүештә мөрәжәғәт итеп, уларҙы «тыныс йәшәүгә» («жить в мире») саҡыра, үҙҙәренең эшсе-

ләргә ҡарата дуҫтарса, изге ниәттә булыуҙарын белдерә. Әммә ҡаршылыҡтарҙы тыныс юл менән хәл итеү инде ныҡ ауырлашҡан була: завод приказчиктары, дин әһелдәре милләт-ара дошманлыҡ тойғоһон ҡуҙғатып, уны сиктән тыш ҡуйыртып, баш күтәреүселәргә ҡаршы тороу хәстәрлеген күрә.

Салауаттың Оло Ҡатауға октябрь айындағы һөжүме лә уңышһыҙ тамамлана. Уның ошо завод эргәһендәге һуңғы һуғ<u>ышы</u> 1774 йылдың 20 ноябрендә була. Хөкүмәт ғәскәрҙәренең командирҙары, атап әйткәндә, генерал Ф. Ю. Фрейман тарафынан Салауат Юлаевтың был һуңғы хәрби операцияһы көслө, тактик яҡтан уйланылған һуғыш булараҡ баһалана (93, 206—211).

Кеше һәм ер хәтере булараҡ йәшәп килеүсе топонимик риүәйәттәр әһәмиәтле. Уларҙың ҡайһылары Салауат Юлаевтың ғәскәре туҡтаған урындарға бәйле: «Салауат шишмәһе» (Ҡыйғы районы); «Торлағыр тауы», «Лағыр йылғаһы», «Салауат тауы», «Арғы Салауат һыҙаһы», «Бирге Салауат һыҙаһы», «Прием тауы» — ғәскәрҙәр ҡабул иткән тау (Балтас районы); бәғзеләре яу үткәндән һуң барлыҡҡа килгән ер-һыу атамалары: «Кәшмәр тауы», «Шәһиттәр ҡыраһы» (Ҡыйғы), «Шәһиттәр тауы» (Мәсетле); Салауат йөрөгән ерҙәр: «Салауат һуҡмағы», «Салауат дворы», «Салауат инеп-сығып йөрөгән ҡапҡа», «Салауат мәмерйә»ләре (Салауат районы); «Бүгәс — Салауат юлы» (Саҡмағош районы); «Салауат / Азамат кисеүе» (Ырымбур әлкәһенең Ҡыуандыҡ районының Аҡбулат/Буранғол ауылы ерендә) һ. б., һ. б.

Бындай риүәйәттәрҙең күпселеге реаль ерлекле. Уларға, атаманың килеп сығышын аңлатыу менән бер рәттән, йыш ҡына танып белеү әһәмиәте ҙур булған «өҫтәмә» мәғлүмәттәр ҙә индерелә. Мәҫәлән, «Салауат мәмерйәһе» исемле риүәйәттәрҙең береһендә урындың ҡайҙа икәнен аңлатҡандан һуң (ул Йүрүҙәнгә ҡойған һөлөклө йылғаһының ҡаялы ярында), һөйләүсе Усть-Ҡатау заводы эшселәренең Салауат яуына мөнәсәбәтен сағылдырған ҡиммәтле информацияны бирә: «Ҡатау заводына ингәндә, крепостной эшселәр Салауатты икмәк-тоҙ менән ҡаршы алғандар. Бик күптәре Салауатҡа ҡушылып киткән. Шуға күрә, Салауат тотолоп, хөкөм ителгәс, Ырымбур суд палатаһы уны, халыҡ асыуынан ҡур-

ҡып, Ҡатау-Тамаҡ крепосында язалап йөрөтөүҙе лә тыйған була». Риүәйәтте ғилми әҙәбиәт менән сағыштырма өйрәнеү фольклор материалындағы мәғлүмәттең тарихи ерлекле булғанлығын күрһәтә (124, 303).

Халыҡтың Салауат Юлаевҡа ҡарата ыңғай мөнәсәбәте легендар риүәйәттәрҙә осраған «геройға тәбиғәт тә ярҙам итә, тәбиғәт тә уны ҡурсалай» тигән традицион мотив аша ла күрергә мөмкин. Ауырғазы районының Мораҙым ауылы ерендә Өршәккә ҡойған Биллеғылыс исемле бер йылға бар. «...Ул ҡылыс һымаҡ бөгөлөп ята, Өршәккә табан сыҡҡан яғында уның биле бар —Еркүпер тип атала. <...> Имеш, Бүгәс яуы ваҡытында Салауатҡа йылға аша сығырға кәрәк була. Һыу ташҡан саҡ, тау йылғаһы тәгәрәп аға, таштарҙы онтай икән. Салауат ярға килеп етеүе була, йылға ерҙе өңөп инә лә, күпер яһап, икенсе яҡтан килеп сыға. Салауат рәхмәт әйтеп, йылғаны сығып китә. Мотив — уйҙырма, легенданың идея йүнәлеше — реаль.

Әлбиттә, милләтенең символына әйләнгән шәхес —Салауат Юлаев хаҡындағы башҡорт фольклоры әҫәрҙәре яу ваҡиғаларына, ғөмүмән, ихтилалға бәйле мәғлүмәттәрҙе яҡтыртҡан сюжеттарға ғына ҡайтып ҡалмай. Риүәйәттәр буйынса, Салауаттың тыуғандан алып каторгаға ебәрелгән осорона тиклемге ғүмере — поэтик биографияһы күҙаллана. Халыҡтың үҙ батырына мөхәббәте шундай көслө ки, хатта уның донъяға килгән көнөнә, исеменең мәғәнәһенә (салауат—«маҡтау доғаһы» тигәнде аңлата) ҡарата мәғлүмәт биргәндә лә, Салауаттың тыумыштан уҡ ғәҙәти булмаған яҙмышлы шәхес икәнлегенә ишара яһала (улының донъяға килгән мәлен Юлайға һыу ҡыҙы әшкәртә (256а, № 1).

Риүәйәт һәм легендалар буйынса, милли геройыбыҙҙа баһадирлыҡ сифаттарының бик иртә төҫмөрләнеүе күренә. 12 йәшлек Салауаттың айыуҙы үлтер еүе тураһындағы киң билдәле риүәйәттәрҙән тыш, Салауат районының Яңы Ҡаратаулы ауылында Баһауетдинованан яҙып алынған текст ҡыҙыҡлы. Унан күренеүенсә, Салауаттың атаһы Юлай Аҙналин ойошторған һабантуй ваҡытында йәш кенә Салауат тиңдәшһеҙ батыр булараҡ таныла, төрлө бәйгеләрҙә: көрәштә, ат сабыштарында, йүгереүҙә, ҡурай уйнауҙа, бейеүҙә еңеп сығып, «беренсе бәй»ҙе алыуға ирешкән («Салауаттың

майҙанда батыр булып танылғаны» — 203, ф. 3, оп. 2, д. 63, л. 154—169; 256а, № 12). «Батырҙарҙың батыры» тип аталған риүәйәттә баһадирлыкты билгеләүсе ун сифат иҫәбендә батырҙың ғәҙәттән тыш аҡыллы, шиғри һәләте күрһәтелә. Салауаттың төрлө ярыштарҙа еңеп сығып, көсөн һынауы, абруйлы аҡһаҡалдарҙың уға батыр исеме биреүе боронғонан килгән йоланы — егет ҡорона инеү һынауҙарын (инициация йолаһын) хәтерләтеп ҡуя.

Риүәйәттәрҙә һаҡланған мәғлүмәттәрҙән билдәле булыуынса, Салауаттың бала саҡтан килгән баһадирлыҡ сифаттары баш күтәреүселәр хәрәкәте йылдарында бигерәк тә тәрәндән асыла. Риүәйәттәр уның көсө, батырлығы, тапҡырлығы тураһында һөйләү менән генә сикләнмәй, һуғыш стратегияһын һәм тактикаһын яҡтпы белгән, әммә байтаҡ сәбәптәр арҡаһында, беренсе сиратта, көстәр тигеҙ булмау сәбәпле, еңелеүгә дусар ителгән халыҡ армияһының аҡыллы, ҡыйыу йөрәкле полководецы образын тыуҙыра («Салауат штабы», «Салауат разведчигы», «Салауат Юлаевтың Ҡыйғы ауылына илсе ебәргәне», «Салауат Юлаев Имән тауында»).

«Балтас менән Салауат» риүәйәтендә килтерелгән түбәндәге юлдар ифрат ҡиммәтле мәғлүмәт һаҡлаған. «Салауат үҙ ғәскәрҙәре яулап алған ауыл-ҡалаларҙа йорт-ҡураларҙы яндырыуға ҡаршы булған. Мал-мөлкәтте тәләф итмәгән. Пугач батша ҡаҙнаһын байытыу хәстәрен күргән. Пугач үҙе Салауатҡа ҡаҙнаны аҡса, алтын, көмөш, мал менән байытыу тураһында өйрәткән, тиҙәр. Салауат Эҫем заводын яулап алғас (1774 й. 23 май. — ***Ф. Н.),*** завод аҡсаһын, тинен дә әрәм-шәрәм итмәй, исәтләп алып, һаҡ менән Пугачевҡа оҙатҡан (56, 217; 256а, № 98)».

«Мусаға Салауат ниндәй хоҡуҡтар биргән» исемле бәләкәй генә күләмле бер риүәйәт буйынса, батырҙың закондарҙы белгән, ғәҙеллеккә ынтылыусы яу башлығы булғанлығы төҫмөрләнә. Шуныһы, әйтелгәндәрҙең береһе лә риүәйәтселәрҙең буш фантазия емеше түгел: Салауат Юлаевтың яуҙарҙы ойоштороу рәүеше, халыҡ менән ыңғай мөнәсәбәттәр урынлаштыра белеүе тарихи яҙмалар менән нығытыла (Поход канцелярияһы документтары, тарихсыларҙың хеҙмәттәре-124, 302-304, 310).

Башҡорт риүәйәттәре араһында Салауаттың ғаиләһе, яҡындары тураһындағылар ҙа аҙ түгел. Мәҫәлән, «Салауаттың әсәһе», «Салауаттың атаһы», «Салауаттың рус ҡыҙына өйләнеүе», «Салауаттың ҡатындары», «Салауаттың тоҡомдары» һ. б. Барлыҡ ошо әҫәрҙәр тарихи дөрөҫлөгө асыҡланмаған риүәйәттәр төркөмөнә инә. Тәү ҡарауға Салауаттың өйләнеүе тураһындағы риүәйәттәрҙә дөрөҫлөк тә бар кеүек: Красноуфимск ҡалаһында рус ҡыҙына күҙе төшкән, уларҙың улдары тыуған һәм уға Хәсән тип исем ҡушҡандар. Салауат Хәсәнде Ҡыйғы ауылынан Нурҡылыс исемле ҡартҡа тәрбиәгә биргән, Нурҡылыстан һуң уны Ҡолбаҡов Вәлиша тәрбиәләгән. Үҫеп еткәс, Хәсән Ҡолбаҡ ауылында кантон башлығы булып торған. Ул да атаһы кеүек батыр йөрәкле булған. Күренеүенсә, бында ышанмаҫлыҡ бер хәбәр ҙә юҡ һымаҡ. Киреһенсә, һәр нәмә тәғәйен, аныҡ күрһәтелгән. Шулай ҙа беҙ әйтелгәндәргә тулыһынса ышана алмайбыҙ. Ни осон тигәндә, риүәйәт жанры өсөн, ғөмүмән фактографиклыҡҡа ынтылыш хас. Бында аныҡлап, тәғәйенләп һөйләү сәнғәти алым кеүегерәк булып тора. Ошо алым ярҙамында халыҡ үҙенең аңында тыуҙырған ваҡиғаларҙың ысынбарлыҡҡа тура килеүен, һүҙ барған ваҡиғаларҙың ысынлап та тормошта булыуын раҫларға ынтылған. Шул уҡ ваҡытта айырым мотивтарҙың (мәҫәлән, Салауаттың рус ҡыҙына өйләнеүе тураһындағы мотивтың) уйҙырмалылығы, төптән уйлап ҡарағанда, шик тыуҙырмай. Грамоталы (русса белгән, төрки яҙма телендә приказдар һәм өндәмәләр яҙған), дини тәрбиә алған[20] Салауаттың, бигерәк тә ауыр һынау йылдарында, башҡа дин кешеһенә әйләнеү мөмкинлеге булыуын күҙ алдына килтереү ҡыйын. Бәлки, был рәсми властарҙың халыҡтар дуҫлығы темаһын ҡабартыбыраҡ күрһәтергә ынтылыуы һөҙөмтәһендә тыуған идеология шауҡымылыр. Был теманың таралыуы Степан Злобиндың «Салауат Юлаев» романы йоғонтоһо менән бәйле булыуы ла бик мөмкин. Шулай уҡ Салауаттың ҡалмыҡ, сыуаш, татар ҡыҙҙарына өйләнеүе тураһында риүәйәттәр бар. Әлбиттә, былар — уйҙырма сюжеттар. Уларҙың тыуыуы Емельян Пугачев һәм Салауат Юлаев етәкселегендә батша хакимда-

[20]Риүәйәттәрҙән күренеүенсә, Салауатты тәүҙә имам Кәбири, һуңыраҡ әсәһе уҡытҡан, мәҙрәсәлә белем алған.

рының һәм алпауыттарының иҙеүенә ҡаршы берлектәге азатлыҡ хәрәкәтендә ҡатнашҡан халыҡтарҙың башҡорт батырына булған мөхәббәте тураһында һөйләйҙер, моғайын.

Яҙма сығанаҡтарҙан күренеүенсә, Салауат Юлаевтың өс ҡатыны булған. Батырҙы ҡулға алғанға тиклем үк, ҡатыны һәм балалары аманаттар сифатында Өфөгә килтерелгән. Бер ҡатыны улы менән ҡала коменданты полковник С. С. Мясоедов һағы аҫтында торған. Икенсе улын, Салауаттың яҙыуына ҡарағанда, генерал (Ф. Ю. Фрейман) алған... Ә башҡа ҡатындарын һәм балаларын ҙур кешеләр, йәғни урындағы хакимиәт вәкилдәре һәм офицерҙар бүлеп алған (93, 223). Уның ғаилә ағзаларының артабанғы яҙмышы билдәһеҙ. Документтарҙа ҡатындарының, балаларының исемдәре тураһында ла әйтелмәй, ә фольклор материалдары буйынса, Салауаттың ҡатындары Әминә, Зөләйха, Гөлбәзир (Гөлнәзирә), Мәүдиә исемле булған. Әминә һәм Гөлбәзир исемдәре айырыуса йыш иҫкә алына, Мәүдиәһе бер генә ҡабат аталып китә. Гөлбәзир тураһында төрлө мәғлүмәттәр бар. Бер осраҡта, ул Ҡалмаҡ ауылында тыуып үҫкән, Юныс ауылы байы Иштүбәгә кейәүгә бирелгән (Салауат уны тартып алған), икенсе осраҡта, Гөлбәзир — тархан һағынбай ҡыҙы. «Юлай менән Салауат» эпосындағы түбәндәге юлдар шул хаҡта һөйләй:

Заводсылар йыйылып,
Кәңәш-төңәш иткәндәр:
«Кинәт яуға бармайса,
һағынбайҙы димләшеп,
Салауатҡа кәләшкә
Гөлбәзирҙе бирҙереп,
Ҡоҙа-аҙна яһашып,
Ҡулға алайыҡ», — тигәндәр (60, 272, 273).

2003 йылда Балтас районының Иҫке Балтас ауылында Айрат Муллый улы Мәғзүмов һөйләүе буйынса беҙҙең тарафтан яҙып алынған риүәйәттә Гөлбәзир — Ҡолой Балтасов ҡыҙы. М. В. Лоссиевский яҙмаһында Балтасов ҡыҙының исеме—Фариза, Яныбай Хамматовтың романында — Зөләйха.

Салауат Юлаевтың ҡатындары тураһында һүҙ барғанда, дүрт юллыҡ бер йыр ҡыҙыҡһыныу уята. Унда өлкән ағалары вафат булған осраҡта, энекәшен тол еңгәһенә өйләндереү (левират) йолаһы сағылдырылған. «Йәш кенә Салауаттың нисек ос ҡатыны булды икән?» тигән һорауға яуап алып була ул йырҙан:

Салауаттың кейгәне —
Ҡыҙыл да түгел, һары буҙ.
Салауаттың һөйгәне —
Икеһе — еңгә, бер(е)һе —ҡыҙ (203, ф. 3, оп. 2, д. 76, л. 11).

Батырҙың әсәһе хаҡындағы бер риүәйәт ҡыҫҡа ғына хикәйәләү аша әсә һөйөүенең көсөн, уның хәүеф-тойғоларының тәрәнлеген бирә алыуы менән ҡиммәтле: «Яуға киткән Салауатын әсәһе[21] бик ҡыҙғанған, һағышына түҙә алмай, төндәр буйы йоҡламайса ултырған. Уны эҙләтеп тә, эҙләп тә ҡараған. «Батыр улымдың ҡайҙа икәнлеген әйтеүселәргә, уның йырҙарын йырлаусыларға мал бирер инем»,— тип, ауылдан ауылға йөрөгән» (203, ф. 3, оп. 2, д. 63, л. 95).

Икенсе бер риүәйәт эсендәге «Салауаттың атаһының йыры» тип килтерелгән йыр ҙа күңел йылылығы, яҡты хистәр менән һуғарылған:

Бәпкәм дә бәпкәм, бәпкә икән,
Бәпкәм дә батыр ир икән.
Тубыҡайына туп тейһә,
Тубылғы ағас, тир икән (203, ф. 3, оп. 2, д. 63, л. 93—94)[22].

[21] Бында әсәнең исеме аталмай. Ҡайһы бер риүәйәттәрҙән күренеүенсә, ул Аҙнабикә исемле булған, хәҙерге Мәсетле районының Ләмәҙтамаҡ ауылы ҡыҙы. Көнбикә тигән варианты ла бар («Ватандаш», 2004, 6-сы һан).

[22] Архив материалдары araһында Салауаттың атаһы Юлай Аҙналиндың шиғри һәләтлелеге, йырға маһирлығы, улының рухлы, көслө, батыр йөрәкле булып үҫеүендә уның йоғонтоһон күрһәткән риүәйәттәр осрай (203, ф. 3, оп. 2, д. 63, л. 21, 89, 102; «Ағиҙел», 2002, 2-се һан, 132-се б.). Юлайҙың ижтимағи хәле тураһында һүҙ барғанда, риүәйәттәрҙә уның дәрәжәле шәхес булыуы, старшиналыҡ вазифаһы, сәйәси ваҡиғалар хаҡында әйтеп кителә (203, ф. 3, оп. 2, д. 63, л. 21). Был образдың киң һәм тулы яҡтыртылышы «Юлай менән Салауат» эпосында күҙәтелә — 60, 254—288).

Шулай итеп, Салауат Юлаев хаҡындағы риүәйәттәрҙә 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышының мөһим ваҡиғалары, батша тәхетен тетрәткән ошо күтәрелештә башҡорт халҡының, уның милли геройы Салауат Юлаевтың уйнаған роле яҡтыртыла. Был риүәйәттәрҙең күпселеге, һис шикһеҙ, тарихи ваҡиғалар нигеҙендә барлыҡҡа килгән. Әммә художество күренеше булараҡ, улар уйҙырманан да азат түгел, хатта мифологик мотивтар ҙа күренеп ҡала («Салауатты үрмәкес ҡотҡара» — 256а, № 150). Факт һәм ваҡиғаларҙы бутау, төрлө осорға ҡараған күренештәрҙе бер ваҡиғаға бәйләп һөйләү бында шулай уҡ шаҡтай асыҡ һиҙемләнә (әйтәйек, Салауат яуынан ҡалған һуғыш ҡоралдары, ҡәберлектәр тураһындағы хикәйәләр). Уйҙырма мотивтар айырыуса Салауаттың шәхси сифаттарын һүрәтләүгә бағышланған риүәйәттәрҙә асыҡ күренә: батырҙың утта янмаҫ, һыуҙа батмаҫ бәһлеүән булыуы, ун һигеҙ-егерме бот тартҡан ауырлығы, типһә тимер өҙөрлөк көсө һ. б. Был, әлбиттә, аңлашыла торған хәл: егерме-егерме бер йәшендә меңәрләгән кешеләрҙе үҙенең ялҡынлы һүҙе менән оло яуға күтәрә алырлыҡ рух көсө булған батыр һәм шағир образын халыҡ идеаль герой итеп күтәрә, уның батырлығын эпик традициялар ерлегендә һүрәтләй һәм быуындар хәтерендә мәңгеләштерә.

Әлбиттә, риүәйәттәр араһында Салауаттың төҫ-башы, ҡиәфәте тураһында ҡабартылмай һүрәтләнгән текстар ҙа юҡ түгел. Әммә ундай осраҡтарҙа ла, батырҙың көс-ҡеүәтен һүрәтләү тәңгәленә килеп еттеме, һөйләүсе халыҡ ижадындағы тасуирлау традицияларына таяна башлай. Миҫал:

«Салауат кәүҙәгә урта буйлы булған. Төҫкә ҡарараҡ, күҙҙәре ҙур, ҡап-ҡара булған. Ҡаштары ла сөм ҡара булған, нескә генә сикә һаҡалын йөрөткән. 3 4 йәшендә үк туптаяҡ уйнап йөрөгән. Асыуын килтерһәләр, 16—17 йәшлек егеттәрҙе таяғы менән һуҡҡан да йыҡҡан. Уның беләге аяуһыҙ йыуан булған, тиҙәр» (203, ф. 3, оп. 2, д. 63, л. 23). Салауаттың төҫ-башына ҡарата бында бирелгән мәғлүмәт тарихи документтарҙа сағылған мәғлүмәттәр менән ауаздаш. 1775 йылдың 2 октябрендә теркәлгән провинциаль канцелярия яҙмаһында түбәндәге юлдар бар: «Салауат Юлаев, сәсе

һәм күҙҙәре— ҡара, буйы—2 аршын да 4 ярым ҡарыш <...> (147, 336).

Ә инде төп геройҙың бала саҡтан көслө булып, алышта үҙенән өлкән үҫмерҙәрҙе еңеүе —эпик жанрҙарҙа йыш осрай торған билдәле мотив («Алпамыша менән Барсынһылыу» һ. б.). Дөйөм алғанда, ҡабартып күрһәтеү (гиперболизация) алымы геройҙы башҡаларҙан айырып күрһәтеү, ҡәҙимге булмаған баланың киләсәктә ҙур эштәр башҡарасағын иҫкәртеү маҡсатында ҡулланыла.

Салауаттың рухи донъяһы ла (сәсән теллелеге, шиғыр-йырҙары менән ғәскәрен яуға күтәр еүе...) риүәйәттәрҙә юғары баһалана.

Был урында, риүәйәттәрҙән тыш, Салауат батыр тураһында ҡобайыр, йыр, бәйеттәр булғанлығын да иҫтән сығарырға ярамай (189, 68 — 70; 256 а). Ул ғына ла түгел, башҡорт халҡының милли геройы тураһында башҡа халыҡтар (рус, татар һ. б.) ижадында ла риүәйәт һәм легендалар, бәйеттәр йәшәй. Уларҙа шулай уҡ Салауаттың ҡаһарманлығы данлана (36, 131—132; 151, 28; 278, 35—36).

1773—1775 йылдарҙағы ихтилалдың төп етәксеһе — Емельян Пугачев тураһындағы башҡорт риүәйәттәре нигеҙҙә дөйөмөрәк характерҙа: уларҙа Пугачев биографияһына ҡағылған шәхси һыҙаттарҙы, уның мөхитен ентекләп һөйләү күҙәтелмәй, һәм башҡорт риүәйәттәренән ундай деталдәрҙе тасуирлауҙы көтөү ҙә мөмкин түгел. Бүгәсәү — башҡа тупраҡта тыуып үҫеп, башҡа ерҙең һыуын эскән шәхес (ул, билдәле булыуынса, Дон казагы), уның башҡорттар менән аралашыу ваҡыты ла сағыштырмаса ҡыҫҡа.

Бер төркөм риүәйәттәрҙә беҙ Пугачевты Салауатҡа бәйле сюжеттар аша күрһәк (Пугачевтың Салауат менән осрашыуы, уға полковник, бригадир чиндары биреүе, яу хаҡында һөйләшеүҙәре, биргән приказдары кеүек эпизодтар күҙ уңында тотола), икенселәрендә ихтилал етәксеһе Әбей батша (Екатерина II) ғәскәрҙәре менән бәрелеш картиналарында алға баҫа: «Бүгәс яуы», «Ҡыҙҡалатау», «Петр батша менән Әбей батша һуғышы» һ. б. һуңғы риүәйәттәр яу күренешен һүрәтләүҙән тыш, Пугачевҡа ҡағылған ике мөһим мотивты һаҡлап, уларҙы беҙҙең көндәргәсә килтереп еткергән: беренсеһе: Пугачев — Петр батша (мәғлүм булы-

уынса, Е. И. Пугачев үҙен үлемдән ҡотолоп ҡалған батша Петр III тип иғлан итә), икенсеһе: Пугачев — Петр батша түгел: «Петр батша ысынында батша булмаған. Ул үҙе лә шул беҙҙең һымаҡ крәҫтиән булған» (55, 192).

Нигеҙендә ниндәй мотив ятыуына ҡарамаҫтан, башҡорт һәм башҡа халыҡтар тарафынан Бүгәсәү ыңғай ҡабул ителә. Быны сәбәбе риүәйәттәрҙең үҙендә үк әйтеп бирелә: «...Петр батша халыҡҡа ипле булғанға күрә, ул тирәләге халыҡ уның ғәскәренә аҙыҡ-түлек бүлеп бирер булған, атын-арбаһын егеп, үҙҙәре лә ғәскәрлеккә яҙылғандар» (55, 192). Атаҡлы «Салауат телмәре»ндә иһә Пугачевҡа булған ыңғай мөнәсәбәттең сәбәбе бөтөнләй асыҡ һәм конкрет итеп әйтеп бирелгән: «Бүгәс — батшамы, түгелме, уныһында беҙҙең эшебеҙ юҡ. Бүгәс түрәләргә, байҙарға ҡаршы» (55, 201).

Әлбиттә, килтерелгән өҙөктәрҙең ҡиммәте башҡорт халҡының Бүгәсәүгә булған мөнәсәбәтен сағылдырыуҙары менән генә сикләнмәй. Риүәйәт теле менән ябай ғына әйтелгән һүҙҙәр аша халыҡтың ижтимағи аң кимәле, йәғни 1773—1775 йылдарҙағы ихтилалдың ике йүнәлешен — милли һәм социаль азатлыҡ көрәше булыуын яҡшы аңлағанлығы сағыла. Телгә алынған риүәйәттәрҙә интернациональ мотивтарҙың бөрөләнеүе лә иғтибарҙы йәлеп итә: «Петр батшаның ғәскәрендә башҡорттар ҙа, татарҙар ҙа, ҡырғыҙҙар ҙа булған». Күренеүенсә, халыҡтар дуҫлығы һәм берҙәмлеге мәсьәләһенә ыңғай мөнәсәбәт бында данлау, тойғо белдереү аша түгел, ә риүәйәт жанрының тәбиғәтенә ярашлы рәүештә мәғлүмәт биреү күҙлегенән хәл ителгән.

Башҡорт фольклорында Пугачев исемен йөрөткән ерһыу, урындар хаҡында риүәйәттәр байтаҡ. Уларҙың күпселеге, ҡағиҙә булараҡ, бик ҡыҫҡа, төҙөлөштәре яғынан ябай. Шул-шул урында Бүгәс ғәскәре ятҡан, йә булмаһа Бүгәс Салауат менән кәңәш тотҡан һ. б. шуның кеүек мәғлүмәттәр биреүгә ҡоролған («Бүгәс юлы», «Бүгәс түбәсәйе», «Бүгәс тауы»— 55, 194). Юл йәки түбәсәйҙең кәпәс менән ташылған тупраҡтан өйөлгән урын булыуын иҫкәртеү, бер яҡтан, Бүгәсәү ғәскәрҙәренең күплегенә ишара яһаусы символ булһа, икенсе яҡтан —был ҡыҫҡа ғына риүәйәттәрҙең фольклорсан ерлеген дә күрһәтеп тора, сөнки кәпәс менән

ер ташыу —донъя халыҡтарының ауыҙ-тел ижадында киң билдәле боронғо традицион мотив.

1773—1775 йылдарҙағы ихтилалға бәйле урындар хаҡындағы риүәйәттәрҙең реаль булғандары ла, уйҙырмаға ҡоролғандары ла бар. Формалары, тышҡы күренештәренең ниндәйҙер яғы менән иғтибарҙы йәлеп иткән билдәһеҙ убаҡәберлектәрҙе, тау-таш һ. б. объекттарҙы Бүгәс, Салауат яуы ваҡиғаларына бәйләп аңлатыуҙың да үҙенә күрә сәбәптәре бар. Ул, әлбиттә, халыҡтың үҙ тарихында булып үткән ваҡиғалар араһында иң әһәмиәтлеләрен, шәхестәрҙең иң көслөләрен һайлап, уларҙың юғарылығын, изге исемен киләсәк быуындарға еткереү ниәте менән эшләнгән. Тарихи риүәйәттәрҙе ентекләп байҡап сығыу шуны күрһәтә: халыҡ артыҡ әһәмиәте булмаған ваҡиғаларҙы үҙ хәтеренә беркетеп барырға ашыҡмай, күберәген бөйөклөгө йәки түбәнлеге менән күңелен тетрәткән хәл-ваҡиғаларҙы, уларға бәйле шәхестәрҙең исемдәрен генә иҫендә йөрөтөүсән.

1773—1775 йылдарҙағы ихтилалға бағышланған тарихи риүәйәттәр араһында күтәрелештең башҡа күренекле вәкилдәре: Кинйә Арыҫланов, Юлай Аҙналин, Ҡаранай Моратовтың исемдәре лә телгә алына, ләкин ваҡиғаларҙы был шәхестәрҙең эшмәкәрлеге тирәһенә туплап һүрәтләү күҙәтелмәй. Был күренеш, Ҡаранай тураһындағы бер яҙманы иҫкә алмағанда, башлыса Салауат хаҡындағы сюжеттарҙың эсендә бирелә («Пугачев менән Салауат юлы», «Салауат улы», «Салауаттың тотолоуы», «Салауат менән Балтас», «Салауат менән Пугачевтың дуҫлашып китеүе»). Был хәлде күпмелер дәрәжәлә аңлатып була: Нуғай даруғаһының Бошман-Ҡыпсаҡ волосы старшинаһы, Пугачев армияһының баш полковнигы Кинйә Арыҫланов исеменең халыҡ ижадында артыҡ киң билдәле булмауы, күрәһең, Кинйәнең баш күтәргән халыҡ менән туранан-тура бәйләнешкә инмәүендә (тарихи сығанаҡтарҙан билдәле булыуынса, Кинйә Арыҫланов нигеҙҙә Е. Пугачев ставкаһында, штабта ғәйәт ҙур ойоштороу эшмәкәрлеге күрһәткән атаҡлы шәхес—295, 71). Ә Юлай Аҙналының улы Салауат менән берлектә яу башлап йөрөүе тарихи дөрөҫлөккә тап килә, шулай ҙа Пугачев менән бер рәттән, ихтилалдың төп етәксеһе булараҡ, Салауат сығыш яһай, һәм риүәйәттәрҙә был хәл дөрөҫ сағыла.

Стәрлебаш районының Ҡаранай ауылында Ниғмәтйән Байбулдин (1894 йылғы) менән Алламорат Ҡотлобаевтан (1888 йылғы) яҙып алынған «Ҡаранай батыр һәм уның ярандары» исемле риүәйәт ярайһы уҡ бай мәғлүмәттәр туплауы менән иғтибарҙы йәлеп итә. Уларҙың ҡайһы берҙәре, дөйөм алғанда, реаль ваҡиғаларға нигеҙләнһә, икенселәре уйҙырма «факттарға» ҡорола. Ҡаранай Моратовтың Пугачев полковнигы булыуы, уның башлығындағы командаларҙың яу урындары (Стәрлетамаҡ пристаненә һөжүм итеү, Табын яғы, Өфе менән Ырымбур араһындағы ерҙәр); Ҡаранай батыр исеменең халыҡ хәтерендә һаҡланыуы («Ҡаранай батыр тураһында йырҙар була торғайны») [Әле лә йырлана. Башҡортостан радиоһының фондына ингән. — ***Ф. Н.]***.

Тарихи яҙмаларҙан билдәле булыуынса, Нуғай даруғаһы Бөрйән волосы йөҙ башы (сотник), походный старшина Ҡаранай Моратов 1773 йылдың октябрь айында Ырымбур янындағы Берда лагерына килгәс, Е. И. Пугачев уға полковник исеме биреп, ихтилалға көстәр туплау өсөн Башҡортостандың үҙәк волостарына ебәрә. Риүәйәттә телгә алынған урындарҙа Ҡаранай Моратов үҙенең яуҙашы Ҡасҡын Самаров менән хәрби операциялар үткәрә, 4 меңлек отряды менән 24 ноябрҙә Өфө янына килә. Бынан тыш, Ҡаранай Моратовтың атаман В. И. Торнов (Персианинов) менән бергә 1774 йылда Минзәлә йүнәлешендә Кама буйҙарында Пугачев ғәскәрҙәре менән етәкселек иткәнлеге лә билдәле (124; 147, 152, 156). Риүәйәттә билдәләнгән Ҡасай батыр — Ҡасҡын Самаров, Мораҙым батыр Нуғай даруғаһы Меркет Мең волосы старшинаһы Мораҙым Сәйетмәмбәтов булырға тейеш. Ҡаранайҙың бер туғаны Ырысай батыр тураһында документтарҙа мәғлүмәттәр осрамай.

Ҡаранай батырҙың яуҙа үлеүе тарихи хәҡиҡәткә тура килмәй. Тарихтан мәғлүм булыуынса, Ҡаранай Моратов 1774 йылдың ноябрендә И. Л. Тимашев етәкселегендә каратель отряды тарафынан ҡулға алына һәм Ҡаҙанға йәшерен комиссия ҡарамағына оҙатыла. Уны 1775 йылдың ғинуарында Мәскәүҙә Е. И. Пугачевты һәм уның иң яҡын ярандарын язалау тамашаһын ҡарарға алып барғандар. Шунан Ҡаҙанға

кире ҡайтарғандар. Артабан Ҡаранай батырҙың яҙмышы билдәле түгел (147; 103).

Риүәйәттәрҙә Салауат батырҙың иң яҡын һуғышсылары — ҡаһармандарса көрәшеп һәләк булған Бәҙерғол батыр, һаҡмаш, һағындыҡ, Имәнғол, Кәрсән батырҙарҙың исемдәре телгә алына (256а, D 124), әммә уларҙың батырлыҡтарын яҡтыртҡан сюжетлы хикәйәләр беҙгә билдәле материалдар араһында күренмәй. Әйткәнебеҙсә, 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы хаҡындағы башҡорт халыҡ ижады әҫәрҙәренең үҙәк геройы, яу башлығы — Салауат.

Салауаттың юлбашсылыҡ ролен хатта Крәҫтиән хәрәкәтенең дошмандары генерал-майор П. С. Потемкин, генерал-аншеф П. И. Панин һ. б. танырға мәжбүр булған: улар үҙҙәренең хаттарында, донесениеларында Салауатты «данлы Салауат», «иң топ бунтовщик» («главнейший бунтовщик»), «үткән бунттың төп юлбашсыһы» («главный предводитель минувшего бунта») тип баһалайҙар (147, 278, 264—265).

Шулай итеп, милли һәм крепостной иҙеүгә ҡаршы йүнәлдерелгән 1773—1775 йылдарҙағы ихтилал, ошо хәрәкәттә башҡорт халҡының уйнаған ҙур роле тарихи әҙәбиәттә лә, халыҡ ижадында ла киң яҡтыртылған, һәр саҡта тарихи материалдар менән фольклор әҫәрҙәре тап килеп тормаһалар ҙа (халыҡ ижадынан уны көтөүе лә ауыр), ихтилалдың төп йүнәлешен, уның асылын, шул ихтилалда ҡатнашҡан халыҡ һәм шәхестәрҙең ролен һүрәтләүҙә риүәйәттәр менән тарихи документтар ауаздаш яңғырайҙар. Ихтилалға бағышланған халыҡ ижады әҫәрҙәренең, беренсе нәүбәттә, риүәйәттәрҙең әһәмиәте ифрат ҙур: улар аша бөйөк күтәрелештә ҡатнашыусы халыҡтың үҙ тауышы ишетелеп, үҙ мөнәсәбәте белдерелә. Бер ниндәй тыйыуҙар ҙа, бер ниндәй язалауҙар ҙа халыҡ хәтерен ҡаҡшата һәм юя алмаған.

Унан һуң, шундай тарихи ваҡиғалар була: ул ваҡиғалар беҙҙән алыҫлашҡан, халыҡтың үҙаңы үҫкән һайын, уларҙың ҡиммәте, ҡәҙере бермә-бер арта ғына бара. Башҡорттар осон Бүгәс менән Салауат яуы нәҡ шундай ваҡиғалар иҫәбенә инә.

Батша тәхетен тетрәткән дәһшәтле ихтилал үткәнгә бына инде 200 йылдан ашыу ваҡыт үтте, әммә уның хаҡындағы фольклор әҫәрҙәре әле лә популяр: Рәсәй Фәндәр академия-

һы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты һәм Башҡорт дәүләт университетының әҙәбиәт кафедралары ойошторған экспедиция материалдары шуны күрһәтә (203, оп. 73, д. 25; 27, 225; 36, 131—132). А. М. Горький исемендәге Урал университеты (Екатеринбург) профессоры В. П. Кругляшова Урта Уралдағы рус ауылдарында башҡорт халҡының милли геройы Салауат Юлаев тураһындағы риүәйәттәрҙең популяр булыуын конкрет миҫалдарҙа күрһәтә (154, 221—226). Б. Ғ. Әхмәтшин Дон казактарының «Иң шәп аттар» («Самые быстрые кони») исемле риүәйәтендә башҡорт батыры Салауатҡа арналған фольклор әҫәрҙәре мотивтарының яңғырашын таба (27, 225). 1773—1775 йылдарҙағы ихтилал етәкселәре тураһындағы риүәйәттәрҙең Башҡортостанда һәм сиктәш әлкәләрҙә таралғанлығын Л. Г. Бараг материалдары ла асыҡ дәлилләй (34, 231—252; 36, 131—132). Салауат Юлаев тураһындағы риүәйәттәр «Рус фольклоры»ның сәсмә жанрҙарына ҡараған хрестоматияһында (232), «Татар халыҡ ижады» ғилми йыйынтығына (риүәйәттәр, йырҙар, бәйеттәр) индерелгән (279). Салауаттың һуңғы төйәге булған Эстония ерендә иһә батырҙың образы Палдиски ҡалаһындағы һәйкәл, музей һәм урам исеме аша сағылған. «Башҡорт батыры йыш ҡына диңгеҙгә ҡарап йырлар булған. Уның тауышы йыраҡтарға киткән», — тигән риүәйәтте һәйкәл асыу ваҡытында бер эстон ҡатыны ауыҙынан ишетеп, шағирә Голшат Әхмәткужина ҡағыҙға теркәгән («Башҡортостан», 2005, 115-се һан).

Салауат исеменең халыҡтар хәтерендә мәңгеләшеүе уның азатлыҡ көрәшендә айырыуса ҙур роль уйнауы менән бәйле. Тарихи яҙмаларҙан күренеүенсә, бер йылдан саҡ ҡына артығыраҡ ваҡыт эсендә Салауат Юлаев оло егерме һигеҙ яуҙа ҡатнашҡан, шуларҙың ун бер ен үҙ аллы атҡарған (163). Ул үҙенең көрәшен 1774 йылдың июлендә Пугачев ғәскәре Волга буйына киткән хәлдә лә туҡтатмаған, июль — ноябрь айҙарында ихтилалдың топ ваҡиғалары Салауат Юлаев етәкселегендә барған (124).

Башҡорт халҡының 1773—1775 йылдарҙағы ихтилалдағы роле, Салауат Юлаевтың яугирлек эшмәкәрлегенә төрлө заман тарихсылары, яҙыусылары һәм мәҙәниәтселәре тарафынан

юғары баһаланды. Үҙенең «Пугачев тарихы» тигән китабында (ул тәү башлап 1834 йылда «Пугачев бунтының тарихы» исеме менән донъя күрә) бөйөк рус шағиры А. С. Пушкин былай тип яҙҙы: «Башҡорттар тынысланманы, 1741 йылғы язалап үлтереүҙәр ваҡытында ҡасып ҡалған ҡарт фетнәселәре Юлай үҙенең улы Салауат менән килеп сыҡты. Ботә Башҡортостан баш күтәрҙе, һәм афәт тағы ла ҡеүәтлерәк кос менән ҡыҙып китте» (238, 231).

Салауаттың яугирлек абруйын дворян тарихсыһы академик А. Ф. Дубровин (107), тарихсы-краевед П. Л. Юдин (333, 579 — 586.) һ. б. таныны. Ихтилалды идара итеүсе синыфтар күҙлегенән ҡараған был ғалимдарҙың ошо оло яуҙа башҡорт халҡының көрәшенә, Салауатҡа айырым иғтибары һәм баһаһы үҙе генә лә күп нәмә тураһында һөйләй.

Башҡорттарҙың күтәрелештә тотҡан урынына, Салауаттың яу етәксеһе булараҡ эшмәкәрлегенә XX б. тарихсылары: Ю. А. Лимонов, В. В. Мавродин, В. М. Панеях (170, 110), Р. В. Овчинниковтарҙың (213) иғтибары ла осраҡлы түгел.

И. М. Гвоздикова үҙенең «Салауат Юлаев: Документаль сығанаҡтарҙы өйрәнеү» исемле монографияһында (93) 1773—1775 йылдарҙағы ихтилалда Салауат Юлаевтың етәкселек маһирлығына, унын батырлығына, маҡсатына тоғролоғона, ғөмүмән, тарихта тотҡан урынына бик ҙур баһа бирә, Салауатты башҡорт халҡының милли геройы, «ихтилал күтәргән халыҡтың иң күренекле етәкселәренең береһе, социаль иҙеүгә һәм милли тигеҙһеҙлеккә ҡаршы фиҙаҡәр көрәш символы, иҙеүселәргә ҡаршы көрәштә батырлыҡ һәм ғәййәрлек, рус һәм башҡа халыҡтар менән туғанлыҡ символы» (93, 232) тип атай.

Мәскәү ғалимы профессор В. В. Трепавлов Юлаевты шулай уҡ «сағыу тарихи шәхестәрҙең береһе» булараҡ билдәләне, тотош бер осорҙо — ихтилал йылдарын «Салауат дәүере» тип нарыҡланы (288, 24). Яугир шағирҙың азатлыҡ хәрәкәтенә индергән өлөшөнә, етәкселек роленә Ә. Н. Усманов, Ә. З. Әсфәндиәрөв, Н. М. Ҡөлбахтин һ. б. тарихсыларҙың мәҡәләләрендә лә тейешле юғары баһа бирелде.

1773—1775 йылдарҙағы ихтилал темаһының әҙәбиәттә, һынлы сәнғәттә, музыкала, ғилми тикшеренеүҙәрҙә урын

алыуы —шулай уҡ халыҡ хәтере файҙаһына хеҙмәт итеүсе бер ыңғай фактор. С. Юлаевтың үҙ шиғырҙары һәм уның хаҡындағы шиғыр һәм йырҙар; Степан Злобиндың «Салауат Юлаев», Ғәли Ибраһимовтың «Кинйә», Аҫылғужа Баһумановтың «Салауаттың йәше» романдары, Мостай Кәримдең «Салауат» трагедияһы, Мирас Иҙелбаевтың «Юлай улы Салауат» исемле тарихи-документаль китабы; Шәйехзада Бабич, Рәшит Ниғмәти, Зәйнәб Биишева, Рауил Бикбаев, Тамара Ғәниева, Ҡәҙим Аралбай, Рәшит Шәкүр, Хәсән Назар, Ирек Кинйәбулатов, Тимер Йосопов, Факиһа Туғыҙбаева һ. б. бик күп шағирҙарҙың шиғырҙары; Заһир Исмәғилевтең «Салауат Юлаев» операһы, Хөсәйен Әхмәтов менән Нариман Сабитовтың «Тау бөркөтө» балеты, Сосланбәк Тавасиевтың атаҡлы Салауат һәйкәле, Тамара Нечаеваның скульптуралары; Ғабдулла Мостафин, Рәхим Ишбулатов, Алексей Кузнецов һ. б. рәссамдарҙың Салауатҡа һәм, ғөмүмән, ихтилалға бағышланған картиналары; Инга Гвоздикованың монографияһы, Әхнәф Харисов яҙмалары, ғилми йыйынтыҡтар — былар бөтәһе лә халыҡтың милли ғорурлығы һәм гражданлыҡ, илһөйәрлек тойғоларын үҫтереүсе әҫәрҙәр. Уларҙың нигеҙендә тарихи яҙмалар менән бер ҡатарҙан фольклор мотивтары ята. Телебеҙҙә йәшәгән «халыҡ хәтере» тигән оло һәм изге төшөнсә, быуаттарҙы быуаттарға тоташтырып, бер быуындың аманатын икенсеһенә еткереп, хәҙергегә һәм киләсәккә хеҙмәт итә.

Салауат Юлаев Өфө төрмәһенән яҙған бер хатында (1775 йылдың 7 майы) үҙенең яу дуҫтарына һәм туғандарына мөрәжәғәт итеп, былай тигән: «Беҙҙән ҡурҡмағыҙ. Беҙ хәҙер йәшәй торған йортта халыҡ тураһында бер ниндәй ҙә күрһәтеү бирмәнек, уның именлеген ҡайғырттыҡ. Ул халыҡ беҙҙе лә үҙенең изге доғаларынан ҡалдырмаһын ине» (147, 322). Регуляр ғәскәр командаһының ҡулына эләккән был хат заманында тәғәйенләнгән урынына барып етмәй, әммә тотҡондоң ырыуҙаштары, батырҙың азатлыҡ байрағы аҫтында берләшкән халыҡтар, әйтерһең дә, Салауаттың васыятын үҙ ҡолаҡтары менән ишетеп, мәңгелеккә хәтерҙәренә һеңдергән.

Бына өсөнсө быуат инде башҡорттар, Рәсәй халыҡтары «милләтенең символына әйләнгән беренсе башҡорт»

(Мостай Кәрим) Салауат Юлаевтың яҡты образын хәтерҙәренән юймай, күңелдәренән сығармай ҡәҙерләп һаҡлай. Башҡортостан Республикаһының Дәүләт гербының үҙәгендә Салауат һынының тороуы, яугир шағирға бағышлап энциклопедия (259), «Салауат башҡорт фольклорында» тигән ике томдағы фольклор әҫәрҙәренең башҡорт, рус һәм инглиз телдәрендә нәшер ителеүе (256а) шул хаҡта һөйләй, шәхестең масштабын, юғарылығын күрһәтә.

1773—1775 йылдарҙағы ихтилалдың аяуһыҙ баҫтырылыуы, унан һуң көсәйгән феодаль һәм милли иҙеү Башҡортостанда йәшәгән халыҡтарҙың ризаһыҙлығын арттыра, һөҙөмтәлә сыуалыштар, баш күтәреүҙәр әленән-әле булып тора, ә 1835 йылда иһә ихтилал күтәрелә. Пермь губернаһының хөкүмәт крәҫтиәндәре тарафынан башланған күтәрелешкә Ырымбур губернаһының башҡорттары, мишәр һәм типтәрҙәре ҡушыла. Бөрө өйәҙендәге сығыштар хаҡында тәүге хәбәрҙе алыу менән, Ырымбур генерал-губернаторы В. А. Перовский ихтилалды баҫтырыу өсөн бик ҙур хәрби көс менән башҡорт-мишәр ғәскәрҙәренең баш командующийы генерал-майор Т. А. Циалковскийҙы ебәрә (124, 403, 423—424). Ошо сағыштырмаса ҙур булмаған ихтилалдың шаңдауы уҙған быуаттың тәүге яртыһында Балтас районының Нөркә ауылында Ғәбделхай Үмәркәев тарафынан Салауат Юлаевҡа бәйле риүәйәттәр эсендә өҫтәлмә мотив булараҡ һаҡланып ҡалған. «Салауаттың Ҡыйғаҙы һыуында балыҡ аулағаны» исемле риүәйәттә ул «Ҡыйғаҙы буйҙарында һуңынан Чалковский [Циалковский] яуы ла яҡкан» тигән бер генә һөйләм менән билдәләнгән. Ошо мәғлүмәттән һуң информант үҙенең әйткәнен нығытып, яу хаҡында кемдән ишеткәнлеген дә әйтеп бирә: «Был хәлдәрҙе бынан 40 йыл элек самаһы үлгән Ғәйнел Әфидунов һөйләгәйне. Ул бик сәйәси ҡарт ине» (203, ф. 3, оп. 5, д. 170, л. 80—82). Бына шулай оҙайтыла халыҡтың хәтер ебе. Юлайҡан ғына әйтелгән бер һөйләмдә тарихи дөрөҫлөк ята: Нөркә ауылы, Ҡыйғаҙы буйҙары —ул саҡтағы Бөрө өйәҙендәге урындар.

Башҡорттарҙың милли һәм синфи иҙеүгә ҡаршы йүнәлтелгән азатлыҡ көрәше мотивтары ҡаҫҡындар тураһындағы риүәйәттәрҙә лә урын ала. Был төркөмсәгә ингән әҫәрҙәрҙең күпселеге шулай уҡ демократик идеялар менән

һуғарылған. Риүәйәттәрҙә ҡаҫҡындар, үҙ мәнфәғәттәрен яҡлап, юл баҫып, мал-байлыҡ талап йөрөүсе яуыз ҡараҡтар булып түгел, ә ярлы-ябағаны йәберһеткән бай һәм түрәләрҙән үс алып йөрөүсе изгелекле, батыр шәхестәр итеп һүрәтләнәләр. Әлбиттә, уларҙы аңлы рәүештә халыҡты ойоштороп, синфи дошманға ҡаршы көрәш асып йөрөүсе ҡаһармандар тип ҡабул итеп булмай. Тупланған материалдарҙан күренеүенсә, ҡаҫҡындар тураһындағы риүәйәттәр башлыса XIX быуатҡа ҡарай. Шул уҡ ваҡытта айырым текстарҙа күпкә элегерәк, XVI быуаттар тирәһендә, булған хәлдәр ҙә төҫмөрләнә. Башҡа халыҡтарҙың ауыҙ-тел ижадына күҙ һалып, үҙебеҙҙең риүәйәттәрҙе ундағы сюжеттар һәм идеялар менән сағыштырыу материалдың тарихи ерлеген билдәләү яғынан бигерәк тә ҡыҙыҡлы.

В. К. Соколова, Киев йылъяҙмаларына һәм былиналарға таянып, Рәсәйҙә ҡараҡлыҡтың бик күптәнге тарихы бар, тип билдәләй. Шулай ҙа юлбаҫарлыҡ айырыуса киң масштабта XVI—XVIII быуаттарҙа үҫеп китеүен әйтә (265, 143).

Уралдағы соңиаль-утопик характерҙағы риүәйәт һәм легендаларҙың тарихи ерлеген асыҡлау өсөн В. II. Кругляшова ла яҙма сығанаҡтарға мөрәжәғәт итә һәм ҡаҫҡын крәҫтиәндәрҙең («категория — беглых крестьян и гулящих людей») мотивының тыуыу осорон Уралға рустарҙың килеүе, йәғни XV быуаттың һуңғы сирегенә илтеп тоташтыра (153, 98). XVI—XVIII быуаттарҙа тау заводтары төҙөү, ауыр эштәргә крәҫтиәндәрҙе ылыҡтырып, уларҙы аяуһыҙ иҙеү ҡаҫҡынлыҡ күренешен артабан айырыуса көсәйтә (153, 98—99). Тау заводтарындағы иҙеүгә түҙә алмай ҡасыусылар араһында төрлө милләт кешеләре, шул иҫәптән, башҡорттар ҙа булған тип уйларға урын бар. Тимәк, башҡорт фольклорында ҡаҫҡынсылыҡ мотивының ерлеге, бер яҡтан, XV—XVI быуаттарҙағы тау заводтары һалыу, ерҙәрҙе талау, милли иҙеү ваҡиғаларына барып тоташа.

Бынан тыш, XVI быуаттың уртаһынан алып ҡаҙаҡтар Рәсәйгә ҡушылғанға тиклем (1731—1868) башҡорттар Рәсәйҙең көнсығыш сиктәрен һаҡлағандар. XIX быуаттың 20—30-сы йылдарында улар илдең көнбайыш сиген (Бессарабия) һаҡлауҙа кордон хеҙмәтенә ылыҡтырылғандар.

1798 йылда кантон системаһы индерелә башлағас, башҡорттарҙың хәрби хеҙмәте айырыуса көсәйә. Кантонлыҡ осоронда башҡорттар хәрби-казачий сословие хәлендә булып, хәрби-феодаль режимдың ҡаты иҙеүе шарттарында йәшәй (21, 75). «Казачий хеҙмәттең ауырлығы, — тип яҙа тарихсы Ә. З. Әсфәндиәров, — кешеләрҙе массовый рәүештә ҡасырға мәжбүр иткән. Ғәҙәттә ике тапҡыр ҡасып тотолған казак, строй аша үткәрелеп, мәңгелек һалдат хеҙмәтенә ҡалдырылыр булған» (22, 152).

Тимәк, башҡорт халыҡ ижадында ҡаҫҡынлыҡ мотивының барлыҡҡа килеүенең икенсе сәбәбе — хәрби-феодаль иҙеү, әрме хеҙмәтенең сиктән тыш ауыр булыуы.

Әлбиттә, был күренештең башҡа вағыраҡ сәбәптәре лә бар. Мәҫәлән: бай менән ярлы араһындағы ниндәйҙер шәхси конфликт, ат урлау, төрмәнән ҡасыу һ. б. Ләкин, дөйөм алғанда, башҡорт халыҡ ижадында изгелекле ҡаҫҡындар темаһы социаль иҙеүгә ҡаршы стихиялы сығыштар һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән.

Хәҙер инде ҡаҫҡындар тураһындағы риүәйәт һәм риүәйәт-легендаларҙың үҙҙәренә мөрәжәғәт итәйек. Халыҡ хикәйәләре араһында уларҙың һаны байтаҡ: «Бейеш батыр», «Йүркә-Юныс», «Ишмырҙа», «Камал ҡаҫҡын» һ. б. Теге йәки был ҡаҫҡындың исеме ғәҙәттә конкрет бер төбәктә айырыуса билдәле булыусан. Уларҙың ҡасып йөрөүенең сәбәптәре, ҡылған эштәре һәр ҡайһыһының үҙенсә, әммә фольклорҙағы образдары — традицион типологик планда; изгелеклелек сифаттары — байҙарҙан үс алып, уларҙы талап, йәберһетелгән ярлы-ябағаға ярҙам күрһәтеү. Мәҫәлән: «Ишмырҙа баярҙарҙың һимеҙ йылҡыларын ҡыуып алып килеп ярлы-ябағаға бирә, бесән-кәбәндәренә ут һала» (55, 241).

«Камал ярлы-ябағаға, етем-еҫергә тырнаҡ осон да тейҙермәй, тик бай түрәләрҙе, купец-сауҙагәрҙәрҙе генә талап йөрөй икән...» («Камал ҡаҫҡын» — 55, 243).

«Бейеш батыр ҡаҫҡынға әйләнә. Байҙарҙы, түрәләрҙе талап, йорттарын яндырып, үс ала. Алған аҡсаларҙы, затлы әйберҙәрҙе ярлыларға таратып бирә» («Бейеш батыр» -55, 245).

Ярлы-ябаға ауылдаштарының ҡаҫҡынға булған мөнәсәбәте шулай уҡ ыңғай:

«Һаҡсылар ҡулына эләккән Ишмырҙаны «халыҡ һыҡтай-һыҡтай оҙата», уның хаҡында хатта йыр сығара» (55, 242);

«Баястың зарлы йырҙарын ишетеп, ауыл ярлылары, ҡатын-ҡыҙ, бала-саға сыр-сыу килеп илашып ҡала...» (55, 243).

Халыҡтың ҡасҡындарға булған ыңғай мөнәсәбәте образды, портретты һүрәтләгәндә лә бик асыҡ сағыла: ҡасҡындар, ҡағиҙә булараҡ, көслө, батыр, йырсы, ҡурайсы һәм алсаҡ, шаян күңелле кешеләр. Портретты тасуирлауҙа риүәйәтселәр шулай уҡ традицион типологик алымдар менән эш итәләр.

«Һаҡмар буйында мыҡты кәүҙәле, оҫта йырсы, сәсән телле Баязетдин исемле батыр йәшәгән» («Баяс» —55, 243).

«Ҡасҡын булып киткәс, Камал йыш ҡына ауылына ҡайтып йөрөй. Ауылға инер алдынан ул һәр саҡ ҡурайын һыҙҙырып ебәрер була. Уның ҡурайҙа шул тиклем моңло уйнауын ишетеп, йәше-ҡарты бөгәһе уға ҡаршы сығып, аҙыҡ-түлек, кейем-һалым биреп ебәрер булған» (55, 244).

«Ишмырҙа үҙе Иҫәкәй ауылынан булған. Киң күңелле, кеше менән аралашыусан, йор һүҙле ир булған инде ул. Заманына күрә белеме лә еткән» (203, оп. 12, д. 271, л. 241).

Миҫалдарҙы артабан килтереп тороуҙың кәрәге юҡ: халыҡ аңында «изгелекле» ҡараҡ-ҡасҡындарҙың бер типиклашҡан идеаль образы йәшәгәнлеге килтерелгән өҙөктәр буйынса ярайһы уҡ асыҡ күренә. Бының сәбәбе — ҡасҡындарҙың халыҡ ярҙамсыһы булараҡ сығыш яһап, бай-түрәләргә ҡаршы булыуҙарында, йәғни синфи позицияның уртаҡлығында. Бейеш, Баяс, Камал, Ишмырҙа һәм башҡаларҙың ҡасҡын булып китеүе —синфи һәм милли яҡтан йәберһетеүгә, халыҡты ҡыҫыуға, ер-һыуҙарҙы тартып алыуға ҡаршы протест тойғоһонан һ. б. шуның кеүек сәбәптәр арҡаһында килеп тыуған хәл итеп һүрәтләнә риүәйәттәрҙә. Камал ҡасҡын, мәҫәлән, «Бүгәс менән Салауат яуҙарында ҡатнашып йөрөгән», «Баяс батыр бер туған һеңлеһе менән икәүләп иң яҡшы уҡсыларҙы йыйып, ер-һыуын талаусы рус баярҙарына ҡаршы көрәшеп тә йөрөй, тик «мылтыҡ менән ҡоралланған карателдәрҙең ҡыҫымына түҙеп тора алмай, сигенергә мәжбүр була»; «Бейеш батыр <...> заманының түрә-ҡаралары, байҙары менән һыйышмаған» һ. б. «Изгелекле-

лек» мотивы телгә алынмаған сюжеттарҙа ла ҡасҡынға риүәйәтселәрҙең кире мөнәсәбәте күҙәтелмәй, сөнки риүәйәт геройҙары — иҙеүсе синыф вәкилдәр енән йәберһетелгән кешеләр («Йүркә Юныс», «Иҫтем», «Айсыуаҡ мажаралары»).

Ҡасҡындар тураһындағы риүәйәттәрҙә теге йәки был ҡасҡындың ҡайҙа, ниндәйерәк ваҡытта йәшәгәнлеге, ни өсөн ҡасҡын булып киткәнлеге тураһында конкрет мәғлүмәттәр бирелергә тырышылһа ла, факттарҙы бутау, реаль шәхестәргә легендар йәки мажаралы әкиәт геройы һыҙаттары биреү кеүек күренештәр ят түгел. Был бигерәк тә «Бейеш»тең ҡайһы бер варианттарында (баярҙың аҫтындағы кейеҙен урлау, рус байының тешен һурыу эпизодтары), «Ҡыҙырынташ-Ибли йорто», «Айсыуаҡ мажаралары» исемле риүәйәттәрҙә асыҡ күренә, һуңғыһында ҡасҡынлыҡ мотивы, ғөмүмән, бик йомшартып, икенсе планға күсереп бирелгән. Алғы планда Айсыуаҡтың шуҡлыҡтары, уның күҙ быуыу һәләте, «шайтан затынан» булыу ихтималлығы хаҡындағы мәғлүмәттәр тора (55, 255—256). Бейеш батырҙың тыуған ауылы, ҡасып йөрөгән ерҙәре һәм ҡылған эштәре хаҡында ла төрлө варианттар төрлөсә һөйләй. Мәҫәлән, Баймаҡ районының Муллаҡай ауылында Усман Хәкимовтан яҙып алынған бер вариантта Бейеш Ҡабыҡкүл ауылы кешеһе итеп телгә алына. Ҡасҡындың Урал урмандарында йәшеренеп йөрөгән йылдары — 1860 тирәһе (203, оп. 12, д. 241, л. 208).

Башҡортостандың Әбйәлил районы Салауат ауылында Йосоп Аҫылғужиндан (1880 йылғы) яҙып алынған вариантта Бейеш батыр Ҡыҙыл буйындағы Ҡусҡар ауылы егете итеп күрһәтелә.

Башҡортостандың Белорет районы Уҫманғәле ауылында Галин Саҙретдин Ислам улынан (1918 йылғы) Н. Шоңҡаров яҙып алған вариантта, Бейеш Ырымбур губернаһы Тамъян-Ҡатай кантоны Верхне-Урал әйәҙе кешеһе булған, тиелә (203, оп. 70, д. 1, л. 47-48).

Ҡыҫҡаһы, Бейеш тураһындағы риүәйәттәрҙең күпселеге ошондай конкрет мәғлүмәттәргә һәм ҡасҡындың ҡылған эштәрен (улар берсә реаль тонда, берсә, алда әйткәнебеҙсә, легендар, мажаралы әкиәт геройына хас булғанса) тасуир-

лауға ҡоролған. Риүәйәттәрҙе конкрет материалдар менән сағыштырыу уларҙың нигеҙҙә реаль ерлекле булыуҙарын раҫлай. Әнүәр Әсфәндиәров юлыҡҡан архив материалдарынан күренеүенсә, «Бейештең фамилияһы — Ишкинин. Ул Верхне-Урал әйәҙендә урынлашҡан 6-сы башҡорт кантоны Тамъян волосы (Хәҙерге Әбйәлил районы) Ҡусҡар ауылы кешеһе. Ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында Бейеште мәңгегә һалдатҡа биргәндәр, ләкин ул унан ҡасҡан, тыуған яҡтарында 1838—1848 йылдарҙа ҡасҡын хәлендә йәшәгән. 1848 йылда исправник Скорятинов етәкселегендәге карателдәр отряды Бейеште ҡулға ала. Ошо «батырлығы» өсөн Скорятинов 4-се дәрәжәле Изге Владимир ордены менән наградлана (22, 152—153).

Буранбай ҡасҡынға бағышланған йыр-риүәйәттәрҙең дә варианттары байтаҡ. Башҡа сюжеттарҙан айырмалы рәүештә, бында, бер йыр тексын иҫкә алмағанда (50, 109), ҡараҡлыҡ мотивы юҡ тиергә мөмкин, ләкин халыҡҡа изгелеклелек мотивы яҙмаларҙың һәр ҡайһыһында осрай. Мәҫәлән, Баймаҡ районы Буранбай ауылы кешеһе Буранбаев Абдрахман Зөлҡәрнәй улынан (1892 йылғы) яҙып алынған бер вариантта (42, 314—316) түбәндәге юлдар бар. Буранбай «байҙар алдында һис ваҡытта баш эймәҫ, һәр ваҡытта ярлыларҙы яҡлар булған».

Риүәйәттең М. Буранғолов яҙып алған вариантында Йәркәй-Буранбай Ырымбур губернаһының эре алпауыты Тимашевтың (уның Ырымбур әйәҙендә генә лә 156 000 дисәтинә ере булған) башҡорт ерҙәрен межалауына ҡаршы бола күтәргән башҡорттарҙың башлығы итеп һүрәтләнә (55, 236). Риүәйәттәренән айырып баҫылған йыр текстары буйынса ла, Буранбай «Ил файҙаҡайҙарын, ай, күҙәтеп» батша өгөтөн тотмаған шәхес итеп күҙ алдына баҫтырыла (50, 107). Уның Себергә ебәрергә хөкөм ителеүе халыҡ күңеленә яра һалып, был тойғо йыр аша мәңгеләшкән:

...Буранбай ҙа китте, иле ҡалды,
Илкәйенә булды ҙур көйәк (50, 106).

Башҡа риүәйәттәрҙәге шикелле, Буранбай хаҡындағы сюжеттарҙа ла реаль мәғлүмәттәр менән уйҙырма факттар

үрелеп китә. Хатта уның исемен дә, тыуған яҡтарын да риүәйәттәр төрләсә хәбәрләй: бер әҫәрҙә ул Йәркәй, икенсеһендә — Уралбай, өсөнсөһөндә — Ибраһим; бер осраҡта ул Туҡ-Соран буйы егете, икенсе осраҡта — Һаҡмар буйыныҡы (45, 173). Данлыҡлы шәхестәрҙе үҙ төйәгенә бәйләп, үҙ ырыуы кешеһе итеп күрһәтергә тырышыу — фольклорҙа була торған күренеш.

Геройҙың образын һүрәтләү шулай уҡ ҡаҫҡындар циклына хас традицион стилдә: «Буранбай батыр мәргән, тапҡыр һүҙле, оҫта йырсы, сәсән һәм мәшһүр ҡурайсы булып танылған» (42, 314). Ә Мөхәммәтша Буранғолов вариантында Буранбайҙың йырға оҫталығы художестволы буяуҙарҙа бирелгән: «Буранбай йырлағанда кешеләр үҙен онотҡан. Ит тураП ултырған кешеләр ҡулын киҫкән, һыуҙан ҡайтып килгән ҡыҙҙар һыуын түккән, бала имеҙгән ҡатындар балаһын осорған, ауыҙына ҡапҡан ашын төшөргән, һуғышып ятҡан кешеләр, бер-береһен һуғырға ҡулын күтәреп ынтылған килеш, ҡатып ҡалған. Хатта ауырыуҙар ҙа ауырыуын онотоп, ырғып тороп ултырғандар» (203, оп. 12, д. 445, л. 242). Был һүрәтләмә «Ҡисса-и-Йософ» әҫәренең халыҡ телендә йөрөгән варианттарындағы Йософтоң матурлығын тасуирлаған юлдарҙы хәтерләтә. Ә инде Буранбайҙың күҙ быуыу (гипнозлыҡ) һәләте (42, 314)— башҡорт фольклорында ғына түгел, славян халыҡтарының фольклорындағы мотивтар менән ауаздаш.

Сюжеттарҙа факттар бутау, уйҙырма моменттар байтаҡ булһа ла, Буранбай тураһындағы риүәйәттәрҙең нигеҙендә ысынбарлыҡта булған хәл-ваҡиғалар ята. Ысынбарлыҡҡа яҡынлығы менән айырыуса Абдрахман Буранбаев варианты айырылып тора. Был вариант буйынса, Буранбайҙың фамилияһы — Ҡотдосов (дөрөҫө — һөйөндөков, Ҡотос — атаһының исеме. Фамилияға күскәс — Ҡотосов), ул 1800 йылдар тирәһендә йәшәгән (икенсе бер вариантта Буранбай 1812 йылғы француз һуғышында ҡатнашҡан тигән мәғлүмәт бар — 55, 236), сығышы менән элекке Ырымбур губернаһы, Беренсе Бөрйән волосы Кинйәбулат ауылы кешеһе (хәҙерге Баймаҡ районы Буранбай ауылы), атаһы — Зөлҡәрнәй, ҡатыны —Тотөғөш. Нәүширбән исемле улдары булған (хәҙерге ауылдағы Нәүширбәновтар шул Буранбай тоҡомонан икән), влас-

тарҙан ҡасып, үҙенең Ибраһим тигән сәркәтибе менән урманда йәшәй һ. б. шуның кеүек күрһәтмәләр тарихи документтарҙағы факттарға бик яҡын. Хатта Буранбайҙың күҙгә зәғиф булыуы хаҡындағы мәғлүмәт тә ысынбарлыҡҡа тап килә. Тик Зөлҡәрнәй генә — Буранбайҙың атаһы түгел, ә улы (42, 529).

Буранбайҙың Һаҡмар буйын ташлап киткәндә һәнәк, балта менән ҡарағайға йырҙарын яҙыуы, Дим буйына килеп, үҙен «Ялан Йәркәй» тип танытыуы, шунда нигеҙләнеп, 1824 йылдар тирәһендә ҡатын алыуы, 1956 йылда Буранбайҙың ейәне Зәһиҙулланың Буранбай ауылына килеүе кеүек мәғлүмәттәр ҙә Абдрахман Буранбаев һөйләгән вариантҡа иғтибарҙы йәлеп итә.

Буранбай халыҡ хәтеренә көйҙәр ижад итеүсе шәхес булараҡ та һеңеп ҡалған: «Буранбай», «Ялан Йәркәй», «Бөҙрә тал», «Сәлимәкәй» һәм ҡайһы бер башҡа көйҙәрҙең барлыҡҡа килеүен уның исеменә бәйләүселәр бар. Әммә музыка ғилемендә был мәғлүмәтте дәлилле раҫлаған йә кире ҡаҡҡан тикшеренеүҙәр хәҙергә күренмәй.

Йыр-риүәйәттәрҙең бөтәһендә лә Буранбайға ялған яла яғылыу хаҡында һүҙ бара. Был —Буранбай тураһындағы халыҡ ижады әҫәрҙәренең төп мотивы булып, ул ысынбарлыҡҡа тап килә. Әнүәр Әсфәндиәровтың бер мәҡәләһендә (330) яла яғыу мотивына бәйле күп кенә документаль мәғлүмәттәр бар: 1811 йылда кантон башлығы Аҡкол Биктимеров менән Ырымбур помещигы (отставкалағы прапорщик) Соколов әрмегә китергә тейеш кешеләрҙән, «һалдат хеҙмәтегеҙҙе еңеләйтеү осон» тигән булып, дистанция начальнигы Буранбайҙан аҡса йыйҙырталар. Йыйылған аҡсаны үҙҙәре тотоноп, бәләһен Буранбай менән йорт старшинаһы Ибраһим Айсыуаҡовҡа ябалар. 1812 йылғы һуғыш башланыу сәбәпле тикшереү эштәре туҡталып тора, тик 1816 йылда ғына Ырымбур суд палатаһы төп ғәйеплеләр итеп Биктимеров менән Соколовты таный. Буранбай менән Ибраһимды иһә законһыҙ һалым йыйыуға ризалыҡ биреүҙә ғәйепләп, 1820 йылда һөргөнгә ебәрәләр. Шул уҡ йылдың 24 июлендә улар һөргөндән ҡаса. Байтаҡ ҡына Башҡортостанда, ҡаҙаҡ далаларында йәшеренеп йөрөһә лә, 1822 йылда

Буранбай йәнә ҡулға алына. Артабанғы яҙмышы билдәле түгел.

Ҡаҫҡындар тураһындағы риүәйәттәрҙе тикшергәндә йәнә бер нәмә күҙгә ташлана: ниндәй генә көслө рухлы, ҡыйыу һәм батыр шәхес булмаһындар, ҡаҫҡындарҙың яҙмышы фәҡәт фажиғә менән тамамлана: уларҙы йә тотоп һөргөнгә ебәрәләр, йә баструкка ябалар, йә туҡмап үлтерәләр. Ҡаҫҡынлыҡ тормошо ҡаҫҡындарҙың үҙҙәре өсөн дә ауыр, үкенесле. төшөнкө тойғолар йыр-риүәйәттәрҙең йыр өлөшө аша айырыуса бер нескәлек менән әйтеп бирелә:

һауаларҙа уйнай, ай, ыласын ҡош,
Тояҡҡайҙары ҡыҙыл буяулы.
Үҙ илкәйҙәренән, ай, һөрөлгәс,
Кем балаһы кемгә аяулы?
Ат ҡушаҡлап йөрөп бында килдем,
Ҡалдырҙым мин тыуған ерҙәрҙе,
Уғры ла тиеп хурламағыҙ
Ирәндеккә ҡаҫҡан ирҙәрҙе.
Ирәндеккәй тауҙа йөрөгәнемдә
Уң ҡанатҡайҙарым ат булды.
Ғәзиз генә башым әсир булғас,
Дуç-иштәрем минең ят булды. («Баяс»--203, оп. 92, д. 1.)

Яҙ булыуҡайҙарын, ай, белерһең:
Ҡарайып-ҡарайып күренә үңерҙәр,
Сәғәттәре айҙай, айы йылдай
Төрмәләрҙә үткән ғүмерҙәр («Бейеш» —50, 112.)

Буранбайҙың яҙған хатын уҡып,
Зар илайҙар ауыл ҡарттары... («Буранбай» — 50, 106.)

Ҡаҫҡындар хаҡындағы һәр риүәйәттә тиерлек сағылған һағыш, геройҙың фажиғәһе, әлбиттә, осраҡлы хәл түгел: ҡаҫҡындар нисек кенә ихтыярлы шәхестәр булмаһын, уларҙың иҙеүселәргә ҡаршы яңғыҙ көрәшеүҙәренең перспективаһыҙ булыуы сағыла бында.

Алда әйтә биреп ҡуйылғанса, ҡаҫҡындар, «изгелекле» ҡараҡтар темаһы бер башҡорт фольклорына ғына хас тема түгел. Ул рус, украин, белорус, словак, хорват, поляк һ. б.

халыҡтарҙың ауыҙ-тел ижадында киң билдәле (265, 143—187). Байҙарҙы талап, таланған байлыҡты ярлыларға өләшеү, ярлы-ябағаның ҡаҫҡындарға ярҙам күрһәтеүе, «изгелекле» ҡараҡтың шәхси һыҙаттарындағы оҡшашлыҡ (физик көс, батырлыҡ, шуҡлыҡ һ! б.), фажиғәле финал — былар барлыҡ халыҡтарҙың ҡаҫҡындар тураһындағы риүәйәттәре осон дә уртаҡ мотивтар булып тора. Башҡорт һәм славян халыҡтарындағы был уртаҡлыҡ — нигеҙҙә типологик уртаҡлыҡ.

Ҡаҫҡындар, «изгелекле юлбаҫарҙар» хаҡындағы риүәйәттәр бөтә халыҡтарҙа ла ябай ҡатламдарҙың синфи һәм милли иҙеүгә ҡаршы протесын, азатлыҡҡа ынтылыуын һүрәтләүсе әҫәрҙәр булыуы менән ҡиммәт.

Шул уҡ ваҡытта улар аша халыҡ аңындағы сикләнгәнлек тә ярайһы уҡ асыҡ күренә.

**1917 йылғы Октябрь революцияһынан һуң** совет власы төҙөү һәм уның ҡаҙаныштарын нығытыу бөтә Рәсәй халҡы өсөн ифрат киҫкен шарттарҙа барҙы. Хосуси милекте емереп, уның урынына ижтимағи милек урынлаштырыу, киң ҡатлам массаларҙы быуаттар буйына һуҙылған синфи иҙеүҙән ҡотҡарыу кеүек оло ижтимағи-сәйәси мәсьәләләрҙе хәл итеү еңел генә бирелмәне.

Революцияға ҡаршы көстәрҙең эшмәкәрлеге, совет иленә илбаҫар интервенттарҙың ябырылыуы, Граждандар һуғышы, ирек яулауҙа, социаль ғәҙеллекте яҡлау юлында хеҙмәтсәндәрҙең күрһәткән ҡаһарманлығы — быларҙың бөтәһе лә халыҡтың хәтеренә уйылырлыҡ һәм тарих итеп һөйләр лек эре ижтимағи ваҡиғалар ине. Был осорҙағы халыҡ хикәйәләренең үҙәгендә күпселектә революцион ваҡиғаларҙың шаһиты булған хикәйәләүсе образы тора. Дәүерҙең ҡатмарлы һәм көсөргәнешле хәл-ваҡиғаларын тасуирлау ошо шаһиттың хәтере, аңлау һәм һөйләп биреү ҡеүәһенә бәйләнгән. «Каширинсылар килгәндә» тигән хәтирәлә, мәҫәлән, шаһит ваҡиғаларҙы көсөргәнешле рәүештә тасуирлай:

«Миңә ете йәштәр бар ине. Яңылышмаһам, 1918 йылдың ғинуары ине. Иҫке Монасип ауылы ҡырмыҫҡа иләүе кеүек мыжғып тора.

—Мораҡ яғынан Тимергә ҡыҙылдар килгән.

— Шуларҙы ҡаршылау өсөн, бер-ике кеше ебәреү кәрәк икән...

Иртә булыуына ҡарамай, сход йыйылды. Өлкәндәр кәңәш-төңәш иттеләр ҙә, ҡыҙылдарҙы ҡаршы барып алып килеү өсөн, Юлдашев Садиҡ менән Буранов Хәйбулланы вәкил итеп һайланылар. Ат егеп алдылар ҙа, улар шунда уҡ Тимер яғына тороп саптылар». Артабан ауылға килеп ингән ҡыҙылдарҙың аҡтар менән бәрелеше бик йәнле һүрәтләнә:

«...Аҡтар килеп ингәйне, бына бер мәлде уларға пулеметтан яуҙыра башланылар. Беҙ инде, ҡайҙа ҡарап тороу, баҙға төшөп ултырҙыҡ. <...> Аръяҡҡа сыҡҡас та, ҡыҙылдар кәмә сығышындағы ҡая башына пулемет ултыртып өлгөргән булғандар икән. Ҡалғандары мылтыҡ менән тау ҡырлап ятҡандар ҙа аҡтарҙы тетәләр генә. Был яҡтағы аҡтар ҙа яуапһыҙ ҡалманы. <...> Атыш сәғәткә яҡын барҙы. Шунан аҡтарҙы өтөп алып киттеләр. Шул китеүҙән бешә һуғып Яңы Монасипты үтеп киткәндәр» (58, 90 — 91).

Халыҡ хикәйәләре еңеү ваҡиғаларын ғына түгел, ауырлыҡтарҙы ла тасуирлай. 1977 йылда ошо юлдарҙың авторына Салауат районының Арҡауыл ауылында йәшәүсе Байтуллин Шәйех Байтулла улы «Ҡыҙылдарҙы язалау» тигән тетрәткес бер риүәйәт һөйләгәйне: «Арҡауылда Мырҙалар волосы булған. Аҡтар көсәйеп китеп, үҙ ҡулдарына власть ваҡытлыса күсеп торғанда, ҡыҙылдарҙы саҡыртып алып, яман ныҡ язалағандар. Зәбих Богдасаров тигән земотдел начальнигы бар ине —шуны, тағы Арҡауылда Ҡыҙыл Армия начальнигы Яруллин Хәйрулланы волость үҙәгендә язалағандар.

Арҡауылдан бер саҡрым алыҫлыҡта, көнсығыш яҡлап, бер Мүклек тигән урын бар. Шунда бик күп ҡыҙылдарҙы үлер-үлмәҫтән тереләй күмгәндәр. Ызғырыу тауыштары әлләни тиклем ишетелеп торған» (203, оп. 73, д. 25, л. 74).

Ошо уҡ Салауат районында ревком председателе Әбделхалиҡ Мөхәмәтшинден, комсомолка Жиянгалинаның аҡтар тарафынан вәхшиҙәрсә үлтерелеүе хаҡындағы хикәйәләрҙең халыҡ хәтерендә һаҡланғанлығы асыҡланды. (203, оп. 73, д. 25, л. 72 —73).

Граждандар һуғышы, колхозлашыу осорондағы кулактар менән көрәш ваҡиғалары тураһындағы хәтирә, риүәйәттәр һәр төбәктә, һәр ауылда бар. Был хикәйәләрҙең геройҙары ла ғәҙәттә шул бер төбәккә билдәле булған кешеләр, билдәле бер ауылдың, төбәктең халҡы. Айырым төбәктәрҙә йәшәгән хәтирә, риүәйәттәрҙе бергә туплап, бер системаға килтереп өйрәнеү XX быуаттың 20—30 йылдарында Башҡортостанда, башҡорт халҡының тормошонда булған революцион ваҡиғаларҙың дөйөм һүрәтләнешен күҙ алдына баҫтырырға мөмкинлек тыуҙыра. Халҡыбыҙҙың ирек, яңы тормош өсөн дөйөм көрәшкә индергән өлөшө, ҡаһарманлығы совет осоро хикәйәләрендә үҙенсәлекле һүрәтләнешен алды. Ул күпмелер дәрәжәлә —бер яҡлы һүрәтләнеш. Сәйәси һиҫкәнгәнлек тойғоһо арҡаһында ҡыҙылдар тарафынан да ҡылынған ҡырын эштәр хаҡында ил ҡарттары бик үк һөйләп барманылар. Заман, ысынында, бик ауыр һәм ҡатмарлы ине. Бер үк йорттан ике улдың береһе аҡтар яғында йөрөһә, икенсеһе ҡыҙылдар яғында булды. Ул хаҡта халыҡ ижадында айырым мәғлүмәттәр һаҡланған (мәҫәлән, Башҡортостандың Учалы районында билдәле «Туғанай» йыр-риүәйәте).

Йыйып әйткәндә, тарихи риүәйәттәрҙе, хәҙерге хәтирәләрҙе байҡау, уларҙы яҙма сығанаҡтар менән сағыштырыу халыҡ хикәйәләренең ғәжәп әһәмиәтле ҡомартҡы икәнлектәрен раҫлай. Был ҡомартҡыларҙа башҡорт халҡының социаль-ижтимағи тормошондағы иң характерлы, эре һәм иҫтәлекле хәл-ваҡиғалар художестволы сағылыш тапҡан.

## Тормош-көнкүреш риүәйәттәре

Халыҡ хикәйәләренең ҙур бер өлөшөн тормош-көнкүреш риүәйәттәре тәшкил итә. Уларҙың нигеҙендә кеше тормошондағы көндәлек күренештәрҙе, хәл-әхүәлдәрҙе тасуирлау, донъя, ғүмер тураһында уйланыу һәм кисерештәр ята; башҡорт ырыу-ҡәбиләләренең хужалыҡ итеү формалары, феодаль-патриархаль ғаилә мөнәсәбәттәре яҡтыртыла. Тәбиғи, тормош-көнкүреш хикәйәләренә башҡа төр (мифологик, тарихи) риүәйәттәргә хас булған һыҙаттар ҙа

килеп инә, ләкин улар әҫәргә фон биреүсе, икенсе пландағы ваҡиғалар рәүешендә күҙаллана, ә алғы планға иһә халыҡтың көнкүреше һәм шуға бәйле булған коллизиялар сығарыла.

Көнкүреш риүәйәттәренең иң ҙур күпселеге ғаилә мөнәсәбәттәре, ҡыҙ алыу, ҡыҙ биреү, ҡатын-ҡыҙ яҙмышы хаҡында. Айырым шәхестәрҙең тормошо арҡыры йәмғиәттең социаль нигеҙҙәрен тасуирлау — был төр риүәйәттәрҙең бөтәһе өсөн дә хас күренеш, һүрәтләү объекты булып, ҡағиҙә рәүешендә, феодаль-патриархаль мөнәсәбәт һәм йолалар һөҙөмтәһендә килеп тыуған трагик ваҡиғалар, хәл һәм күренештәр алына. Ҡыҙҙы һөйгәненән айырып, үҙе яратмаған кешегә көсләп биреү, ә егеткә үҙе теләмәгән ҡыҙҙы йәрәшеү, ҡалым түләү, күп ҡатын алыу кеүек иҫке ғөрөф-ғәҙәттәр риүәйәттәрҙә көсөргәнешле драматик ситуациялар аша яҡтыртыла.

«Таштуғай» (55, 273—277) — бындай типтағы әҫәрҙәрҙең классик өлгөһө. Ижтимағи-социаль никах йолаларының ҡорбаны булып, алыҫ һәм ят ерҙә йәне һөймәгән ир менән көн иткән бәхетһеҙ Көнһылыу образы риүәйәттең иғтибар үҙәгенә ҡуйылған. Героиняның, милли йола һәм ҡанундарҙы атлап, ата йортона килгәндә һөйгән Байғүбәге менән осрашыуы, һуңғы һулышына тиклем мөхәббәтенә тоғро ҡалыуы һәм фажиғәле үлеме — объектив рәүештә йәмғиәттәге тәртиптәргә ҡаршы йүнәлдерелгән киҫкен протест булараҡ ҡабул ителә.

«Көнһылыу», «Аҡ ҡарсыға (Яйыҡ)», «Ҡарайғыр» һ. б. бик күп риүәйәттәрҙең нигеҙендә шулай уҡ фажиғә мотивы үҙәк урында тора. «Көнһылыу» риүәйәтендә (55, 291—293), мәҫәлән, бай атаның малға һәм дәрәжәгә ҡыҙығып, үҙенең берҙән-бер ҡыҙын һөйгәненән айырып, ҡарт муллаға биреүе, һуңғыһының мәкерлеге, вәхшилеге һәм шуға бәйле килеп тыуған трагик хәлдәр теҙмәһе ғәжәп бер образлылыҡ менән әйтеп бирелгән: бысраҡ ҡылыҡтарҙан ерәнеп, фажиғәне күтәрә алмай хатта Өйташ, урынынан ҡубып, осоп китергә мәжбүр. Ләкин ваҡиғалар нисек кенә фажиғәле булмаһын (риүәйәттә телгә алынған геройҙарҙың бөтәһе лә һәләк була), әҫәр бөтөнләй өмөтһөҙлөк тойғоһо менән тамамланмай. Арыҫлан менән Көнһылыуҙың һөйәктәре ятҡан урын-

да, булған ваҡиғаларҙан һуң туғыҙ ай самаһы үткәс, тау ярылып китеп, унан ике аҡҡош осоп сығыуы, Әй буйына оя ҡорған ошо аҡҡоштарҙан тоҡом таралыуы ябай этиологик мотив ҡына түгел, ерҙә йәшәүҙең дауам итеүен, мөхәббәттең үлемһеҙлеген раҫлаусы поэтик һүрәтләмә лә ул. Ошо уҡ күренеш «Аҫылкүл» исемле риүәйәттә лә кәүҙәләнә: «...Иртән кешеләр йоҡонан торһалар, ни күҙҙәре менән күрһендәр, ҡан күләүеге боҫрап ятҡан ҡая аҫтында зәп-зәңгәр ҙур бер күл барлыҡҡа килгән була. Күлде, Аҫыл һымаҡ матур булғанға күрә, Аҫылкүл тип атайҙар...» (55, 304).

«Ҡалды» йыр-риүәйәтенең геройы Мөхтәр һөйгән ҡыҙы менән ҡауышыу өсөн араларына кергән Ғәббәс байҙы юҡ итеү юлына баҫа. Билдәһеҙ яҡҡа ҡасып китеп, йән һөйгәне менән бик татыу йәшәп китһә лә, ул «кешегә ҡул һуҙыуынан выждан ғазабы кисергән. Тыуған яҡҡа ҡайта алмау — бигерәк тә ҙур яза булған уға» (55, 301).

Ҡыҙ менән егеттең ҡасыу мотивы «Аҡ ҡарсыға (Яйыҡ)» риүәйәтендә лә урын ала. һеңлеһен бер сауҙагәргә кәрткә отторған бай малайының рәхимһеҙлеген, әхлаҡһыҙлығын, уның йөҙөндә бай ҡатламдарҙың йәшәү рәүешен фашлаған был сюжетта күсеп китеп барған ҡыҙҙың яратмаған кейәүенән ҡотолоуына йөрөгән егетенең һунар ҡошо аҡ ҡарсыға сәбәпсе була. Был хәл риүәйәттә түбәндәгесә һүрәтләнә: «...Бүләк булһа ла биреп оҙатайым, — тип, егет бауҙа ултырған аҡ ҡарсығаһын ҡулына алып, атына атланған да, арбаны ҡыуа киткән.

Тегеләрҙе күреп алыу менән, һөйгәне бүләк иткән яулыҡтың осона көмөш балдаҡ төйнәй ҙә, ҡарсығаһының аяғына бәйләп, осороп ебәрә. Ҡыҙ ҡарсығаны күреп, башындағы аҡ яулығын алған да болғай башлаған, ти. Яулыҡ килеп йәш купецтың башына уралған. Ҡорос тырнаҡлы ҡарсыға купец башына килеп ҡуйыуы булған —теге тәгәрмәс аҫтына ҡолап төшкән. Ошонан файҙаланып, ҡыҙ һөйгән егете менән ҡасып киткән» (55, 295—296).

Ҡарсығаның ҡылғаны ҡурғаусы изге ҡоштар образын хәтергә төшөрһә лә (ҡарсыға — бөркөт затынан, ә бөркөт — ошо эштең икенсе бүлегендә әйтелгәнсә, башҡорттарҙың табыныу ҡошо), риүәйәттең тамамланышы һуңғы заман кешеләренең ҡарашы нигеҙендә хәл ителгән — ваҡиғалар фажиғә

менән барып бөтә: бер нисә көндән егет менән ҡыҙ, сауҙагәрҙе үлтереүҙә ғәйепләнеп, ҡулға алына. Хөкөм иткәндән һуң, егеттең ғүмере Себер һөргөнөндә өҙөлә, ҡыҙҙыҡы — Яйыҡ һыуында. Хатта ҡарсыға ла, ҡанаттары ҡайырылып, аяҡ аҫтына ырғытыла.

Ҡатын-ҡыҙҙың яҙмышы тураһындағы риүәйәттәр араһында тормоштағы берәй фажиғәне тасуирлаусы әҫәрҙәр байтаҡ. «Ғилмияза», «Ғәйшә» шикелле риүәйәттәрҙә, мәҫәлән, ҡаҙаҡтар тарафынан урланып, сит ерҙә тыуған ерен, ата-әсәһен, нәҫел-нәсәбен һағынып көн иткән башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының әсе яҙмышы һүрәтләнә. Ил-йорт, изге төйәк тойғоһо, йәки гражданлыҡ мотивтарының үҙәккә ҡуйылыуы, был әҫәрҙәрҙең идея, мәғәнәүи әһәмиәтен күтәреүсе һәм тыңлаусыға тәьҫир итеү ҡеүәһен арттырыусы мөһим күренеш булып тора. «Ғилмияза» йыр-риүәйәтенең шиғри юлдарында был айырыуса асыҡ сағыла:

Һаҡмар һыуы аға ҡибла табан,
Урал тауы буйлап, көн битләп.
Үҙ илкәйемә ҡайтыр ҙа инем,
Аяҡтарым талһа ла имгәкләп.
Был илкәйҙәрҙең дә, ай, аттары
Ҡырлас яллы, көм(ө)рөләй билле икән;
Төньяғынан иҫкән епшек елдәр
Урал буйҡайынан да килә икән.
Йәштән генә менгән туратымдай
Ялбыр яллы аттар ҙа юҡ икән;
Ҡайғыларым тарҡап һөйләшерҙәй
Телем аңлар берәү ҙә юҡ икән (55, 271).

Күп йылдар буйы ғаилә тормошонда йәшәп, бала-саға үҫтереп, инде ғүмере үтеп барған ҡатындың, сит ерҙе ерһенмәй, бөтә нәмәһен ташлап, үҙ иленә ҡасыу эпизодын тулҡынланмайынса уҡып йәки тыңлап булмай. «Ситтә сыҙай алманым, ҡайтырға илем тартты»,— ти риүәйәт героиняһы («Ғәйшә» —55, 269).

Ҡатын-ҡыҙ яҙмышы темаһына ҡараған сюжеттар араһында «Йәнифә» риүәйәте етемлек фажиғәһен яҡтыртыуы менән иғтибарҙы йәлеп итә. Унда йәшләй етем ҡалған

ҡыҙ баланың өйҙән өйгә йөрөп тамаҡ туйҙырыуы, һәр төрлө ауыр эштәр башҡарыуы, ағаһы менән еңгәһенең рәхимһеҙлектәре арҡаһында сауҙагәр һарттарға (үзбәктәргә) һатып ебәр ел еүе кеүек күңелһеҙ хәлдәр хаҡында һүҙ бара. Йәнифәнең үҙен оҙата килгән әбейҙәр, иптәш ҡыҙҙары менән моңланып, һыҡтап хушлашыуы, оҙатыусыларҙың яуап тойғоһо — илашыуҙары туй йолаларындағы ҡыҙ оҙатыу күренешен хәтерләтә. «Йыр» тип бирелгән текстар асылда йырҙар менән сеңләү һамаҡтарының ҡушылмаһынан тора, тыңлаусыға йәки уҡыусыға драматик ситуацияның көсөргәнешен еткереүҙә уларҙың роле ифрат ҙур:

Бәләкәс еңгә түр башынан
Ҡыҙғанды бит бер таҡта.
Бер таҡтаһын ҡыҙғанып,
Һатып ебәрҙе һартҡа.

Аҡыҡ ҡына һалдым батһын тип,
Мәрйен генә һалдым батһын тип.
Хаҡ Тәғәлә шулай ҡуштымы икән,
Мал урынҡайына һатһын тип? (45,118.)

Һарттар илендә яҡшы мөғәмәлә тапһа ла, тыуған ерен һағыныу хисе Йәнифәне бәхетле итә алмай. Ун биш-ун алты йәшкә еткәс, өлкән йәштәге кешегә кейәүгә бирелеүе уның ауыр кисерештәрен тағы ла тәрәнәйтә төшә. Был кисерештәр шулай уҡ риүәйәттең йыр өлөшөндә сағылыш тапҡан:

Баҡсалағы алмағасҡа
Элеп ҡуйҙым шәлемде.
Сит илдәрҙә яңғыҙ башым,
Берәү белмәй хәлемде.

Илдәрем йыраҡ булғас,
Һөйләшәмен хат менән.
Минең ғүмерем үтер микән
Ошо һары ҡарт менән?

Риүәйәттә Йәнифә бай тәбиғәтле, ижадҡа һәләтле шәхес итеп һүрәтләнә. «Йәнифә бигерәк йырсы булған шул», «Аулаҡта гел генә йыр сығарып йырлаған» ише раҫлауҙар хикәйәлә ҡоро һүҙ булып ҡына ҡалдырылмай, ә йыр текстарындағы үҙенсәлектәр менән нығытыла. Был алдағы миҫалдарҙан да яҡшы күренде, әммә түбәндәге юлдарҙа, ҡатындың ире үлгәндән һуң сығарған йырҙарында, айырата күҙгә ташлана:

Илдәремә ҡайтыр инем,
Уға егер ат та юҡ.
Инде өйрәндем тигән саҡта,
Ғүмер итер һарт та юҡ.

Риүәйәттең аҙаҡҡы өлөшө иһә бер аҙ көтөлмәгәнсәрәк тамамлана: тыуған ерен ҡайтып күреү бәхетенә ирешкән Йәнифә (унда ул кесе йәштәге ҡыҙы Рәхимай менән ҡайтҡан була) бер ай самаһы ҡунаҡ булғандан һуң, һарттар иленә кире китә («Үҙемдең ғүмерем ҡайғырып үтте, инде баламды, иленән айырып, ҡайғыға ҡалдырмайым»). Оло ихтыяр көсөнә эйә булған ҡатындың ябай ғына рәүештә әйтеп бирелгән тормош фәлсәфәһе ысын мәғәнәһендә һоҡланыу тойғоһо уята.

Социаль мөнәсәбәттәр һәм синфи конфликт нигеҙендә барлыҡҡа килгән шәхес фажиғәһе «һуңғы йыр» («Байрамбикә»), «Аҫылкүл» әҫәрҙәрендә асыҡ сағыла. Батша чиновнигы Мавриндың һылыуҙарҙың-һылыуы Байрамбикәне мәсхәрәләүе, һәм шута бәйле ваҡиғалар тәрән драматик көсөргәнеш менән һуғарылған. Аллаяр мулланың мәкерлеген, ике йөҙлөлөгөн фашлау аша риүәйәттә дин әһелдәренә булған социаль мөнәсәбәт яҡтыртыла. Халыҡ өсөн уның илен-ерен талаған батша вәкиле килмешәк тә, үҙ мәнфәғәтен ҡайғыртып, намыҫын һатҡан мулла-монтағайҙар ҙа берҙәй үк дошман. Әҫәрҙең финалы беҙгә шул турала һөйләй. Асыуҙан ярһыған массаның Маврин менән Аллаяр мулланы һөңгө осона алып, ҡая аҫтына ырғытыуы стихиялы синфи протест рәүешендә ҡабул ителә. Ғәҙел булмаған ижтимағи тәртиптәргә, йола, ғөрөф-ғәҙәттәргә ризаһыҙлыҡ белдереү — тормош-көнкүреш риүәйәттәре өсөн ғөмүмән хас

һыҙат. Бер-береһен һөйгән ике йәш йөрәктең, айырылып, мәсхәрәләнеп йәшәүҙән үлемде өҫтөн күреү мотивы һәр әҫәрҙә тиерлек күҙгә ташлана.

Тормош-көнкүреш риүәйәттәрендә иғтибарҙы йәлеп иткән тағы бер нәмә бар: ул —ҡатын-ҡыҙ образын идеаллаштырыу. Риүәйәт героинялары, ҡағиҙә булараҡ, саф күңелле, мөхәббәтенә тоғро, көслө рухлы образдар. Уларға эске матурлыҡ та, тышҡы матурлыҡ та хас. Ҡатын-ҡыҙҙың күркәмлеген, аҡыллылығын һәм сәсәнлеген, таҫыллығын һүрәтләүҙә риүәйәтселәр иң сағыу, иң гүзәл поэтик биҙәктәргә мөрәжәғәт итәләр. Бына, мәҫәлән, «Аҫылкүл» риүәйәтендәге Аҫыл образы: «Аҫыл —ер йөҙөндәге һылыуҙарҙың һылыуы. Ҡоралай һымаҡ һомғол, талсыбыҡтай зифа. Ә күҙҙәре көҙгө төндәй сөм ҡара. Аҫыл мәғҙән төҫлө балҡып тора. Етмәһә, ҡыйылып киткән ҡыйғас ҡаштар ҡаймалап алған үҙҙәрен. Иренгенәләре тулышып бешкән сейә төҫлө. Йөҙө иртән яуған ҡарҙай аҡ. Бит алмаларына ал таң шәфәғе яғылғандай... Көмөш беләҙектәр менән биҙәлгән беләктәре аҡҡош ҡанатындай. Бармаҡ тәлгәшкәйҙәренең остарына ҡына гөлдәре тамып торған төҫлө. Атлап йөрөүҙәре аҡҡош йөҙөп килгәндәй. Әгәр ҙә ауыҙ асып һүҙ әйтә башлаһа, наҙланып, шишмә шылтырап аҡҡан кеүек була... Ә инде йыр йырлаһа, кешеләр баҫҡан ерҙәренән ҡуҙғала алмай ҡатып ҡалалар» (55, 301—302).

«Ғилмияза» риүәйәтенең геройы «матур, асыҡ йөҙлө, алсаҡ күңелле» ҡыҙ ғына түгел, йырсы, сәсәндәр менән бер рәттән йыйындарҙа ҡатнашып, үҙ (Бөрйән) ырыуының абруйын, данын яҡлаусы шәхес. Риүәйәттән күренеүенсә, Ғилмияза «түрәләр, байҙар тарафынан насар ҡарала торған йырсылар иҫәбенә индерелгән» (55, 270—271).

Атаҡлы «Ашҡаҙар» көйөнөң сығарылыу тарихын (55, 306—307) риүәйәтселәр шулай уҡ ҡатын-ҡыҙ — Йомағолон юғалтҡан Таңһылыу— исеменә бәйләп һөйләйҙәр.

«Уҙаман апай», «Әүәҙбикә», «Мәхүбә» исемле риүәйәттәрҙә лә бәхеттәре өсөн көрәшеүсе батыр, тәүәккәл һәм зирәк ҡатын-ҡыҙ образдары һынландырыла.

«Уҙаман апай» риүәйәтенең героиняһы, мәҫәлән, — кеше тормошоноң киҫкен бер мәлдәрендә лә, ҡәҙимге осраҡтарҙа ла батырлыҡ, аҡыллылыҡ күрһәтә алыусы шәхес. Персонаж

тәбиғәтендәге ошо һыҙаттар риүәйәттә нигеҙҙә ике эпизодты тасуирлау аша яҡтыртыла. Беренсеһе — Ирәндек буйына Уҙаман апайҙы алыр өсөн килгән яу күренеше, шул яуҙа ҡыҙҙың күрһәткән батырлығын, саялығын һүрәтләү: «...Уҙаман апай Ирәндектең иң бейек түбәһенә менә лә яуға ҡаршы ата башлай. Атҡан бер генә уғы ла бушҡа китмәгән: ҡаршы килгәндәрҙе тиҫтәләп ҡырып ҡына торған, ти, ул...» (55, 262.)

Риүәйәттән аңлашылыуынса, ҡыҙҙың батырлығы айырым бер осраҡта килеп тыуған хәлгә генә бәйләнмәгән. Бындай фекергә хикәйәлә телгә алынған түбәндәге деталдәр юлыҡтыра: 1) Уҙаман апайҙың, уҡ-һаҙағын алып, көн һайын Ирәндектең иң бейек түбәһенә менеп, тирә-яҡты күҙәтеүе. Был —уның яугир булыуын, ил, ырыуҙаштары именлеген ҡайғыртыусы батыр икәнлеген аңғартыусы деталь; 2) ҡамауҙан ҡайтарылған еңгәләренең Уҙаман апайға, рәхмәт әйтеп: «Ағайҙарыңды ла ҡотҡара күр инде»,— тип ялыныуы, һәм батыр, аҡыллы ҡыҙҙың ниндәйҙер хәйлә менән ағаларын ҡамауҙан сығарыуы; 3) атыш барған һуңғы алышта ла «дилбегәнең» ҡыҙ ҡулында булыуы: «...Ағалары уҡ әҙерләп бирә торған. Уҙаман апай ата торған»...

Герой тормошондағы икенсе бер эпизодты һүрәтләгәндә лә риүәйәтсе Уҙаман апайҙың мәргәнлеген данлай. Ҡыҙға яусы килеүе, уның ризалыҡ биреп, кейәү йортона китеп барған сағында ағас башында һуйыр күреүҙәре, ҡайныһының[23] һуйырға туҡтауһыҙ яҙа атыуы бәйән ҡылына. Бер төбәүҙә ҡошто атып төшөргән килененән ҡурҡып, ҡайны кешенең Уҙаман апайҙы юлда ҡалдырып китеүе иһә төп персонаж образын ҡабарынҡыраҡ күрһәтеү ниәтенән килә. Ғөмүмән, был персонаждың ҡылыҡ-хәрәкәттәрендә баһадир ир-егеттәр менән алышҡан яу етәкләүсе баһадир ҡыҙҙар образынан килгән һыҙаттар сағыла биреп ҡала (үткән бүлектә тикшерелгән Ҡыҙ батша менән Егет батша көрәше тураһындағы сюжетты хәтергә төшөрәйек). Тематик йөкмәткеһе

[23] Ҡыҙҙы алырға ҡайны килеү мотивы туй йолаларындағы боронғораҡ берәй күренеш булыуы ихтимал. Уҙаман апайҙы алырға икенсе тапҡыр килеү хаҡында хәбәр иткәндә лә кейәүҙең исеме телгә алынмай. Хикәйәсе: «Киленде ҡабат килеп алып ҡайталар», — тигән дөйөм һөйләм менән генә сикләнә.

яғынан «Уҙаман апай» тарихи риүәйәт-легендалар менән тормош-көнкүреш риүәйәттәре араһында торған сюжет.

«Әүәҙбикә» менән «Мәхүбә» риүәйәттәрендәге ҡатын-ҡыҙ образдарының күркәмлеге шулай уҡ тормошта килеп тыуған ҡатмарлы хәлдәрҙе һүрәтләгәндә асыла. Ҡыйын мәлдә юғалып ҡалмай, аҡыллылыҡ, тәүәккәллек һәм саялыҡ күрһәтеп, кәрәк икән, хәйлә ҡулланып, теләгәндәренә ирешә алырлыҡ көслө рухлы кешеләр. Әүәҙбикәһе, ҡаҙаҡ әсиренә эләккән һөйгән егетен көтөп, икенсе ырыу башҡорттары араһында йәшәй. Ир-аттан һаҡланыу өсөн ирҙәр кейемендә йөрөп, үҙен Әүәҙғол тип таныта. Мәхүбәһе, ғәйбәт ҡорбаны булырға теләмәй, дөрөҫлөктө асыҡлау өсөн әрмеләге егете янына китә. «Ир-атҡа ҡыҙ булып күренмәҫ өсөн» ул да егеттәр кейемен кейеп, сәс толомдарын бүрек аҫтына йәшерә. Шул ҡиәфәттә Ырымбурға килеп, һөйгәнен эҙләп таба (55, 298).

Ә инде тоғролоҡһоҙ, хыянатсыл ҡатындар халыҡ тарафынан бик түбән баһалана: «Яман ҡатындан яҡшы эт артыҡ» («Әлебай менән ҡатыны» —55, 264—267). Дөрөҫ, былдай йүнәлештәге әҫәрҙәр йәнле репертуарҙа күп түгел.

Риүәйәттәрҙә башҡорттарҙың хужалыҡ тормошон, төрлө йола һәм байрамдарын сағылдырған мәғлүмәттәр ҙә киң урын ала. Уларҙы тормош-көнкүреш риүәйәттәре эсендә лә, башҡа тематик төркөмдәргә ҡараған риүәйәттәр, легендалар араһында ла осратырға мөмкин.

Уралдың иҫ киткес бай тәбиғәте: бейек-бейек тауҙары, йәнлектәре күп урмандары, мул һыулы, балыҡлы йылғалары, киң далалары — хужалыҡтың төрлө тармаҡтарын булдырып һәм үҫтереп йәшәр өсөн элек-электән уңайлы алшарт булып торған. Хужалыҡ итеүҙең тәбиғәт шарттарына бәйле булыуы, шуға ҡарап ата-бабаларҙың ниндәй һәнәр менән көн күреүе тураһында риүәйәт һәм легендаларҙың үҙҙәрендә бик аныҡ әйтеп бирелгән: «...Ер-Һыу байлығын һөйләп бөтөрөрлөк түгел икән. Урман тулы йәнлек: айыу, бүре, төлкө, ҡуян, һыуһар, ҡамсат, шәшке, кеш. Йылға-күл тулы балыҡ. Урманда — солоҡ. Халыҡ һунар, солоҡ кәсебе менән шөғөлләнгән; мал, йылҡы аҫраған» (55, 158).

Хужалыҡ тармаҡтары хаҡында йыйнап, дөйөмләштереп бирелгән мәғлүмәттәрҙән тыш, риүәйәттәрҙә теге йәки был

персонаждың йәшәү рәүешенә бәйләп, кәсептең айырым төрҙәрен ентекләберәк һүрәтләү ҙә күҙәтелә, һунарсылыҡ һәнәре хаҡында һөйләгәндә, мәҫәлән, һунарсының ҡорамалдары, нисек итеп һунарға сығыуы, ниндәй йәнлек аулауы һ. б. шуның кеүек деталдәр килтерелә: «Элек-элек заманда, Һаҡмар буйында, Бөрйән ырыуының Арыҫланғәле тигән ҡарты йәшәгән. Арыҫланғәле үҙенең бөтә ғүмерен айыу, бүре аулап, йәнлек ҡыуып үткәргән. Үҙе ҡартая башлағас, һәнәрен улдары Ямаш менән Йомашҡа өйрәтеп, суҡмар менән һыҙмаһын тоҙаҡ менән ҡапҡанға алмаштырып, ҡуян менән ҡама шикелле вағыраҡ йәнлектәргә генә йөрөй башлаған.

Ямаш менән Йомаш һунарға икешәр ат менән йөрөр булғандар. Ике атын менеп китәләр, икәүһе эйәрле көйө арттарынан эйәреп бара...»

Торлаҡты йыһазландырыу, аш-һыу, эсемлектәр әҙерләү кеүек мәғлүмәттәр ҙә һунар итеү, мал аҫрау хеҙмәтенә бәйле: «...Ыжғыр бурандарҙа былар (һунарсы ҡарт һәм уның улдары. — Ф. ***Н.)*** тирмә эсендә, аяҡтарына болан тиреһе түшәп, өҫтәренә айыу тиреһе ябынып көн күргәндәр» (55, 58); «Бабай менән әбей ҡымыҙ эсеп, ҡорт аҫрап, һунарға йөрөп йәшәп ятҡандар. Оҙаҡламай уларҙың бер улы тыуа. Ҡарттар малайҙы айыу тиреһенә төрөп, балыҡ майы имеҙеп, бик шәп итеп тәрбиәләгәндәр» (55, 64).

Ә бына тарихи риүәйәт туҡымаһында бирелгән түбәндәге өҙөк халыҡ көнкүрешен оҫта сағылдырған рәссам һүрәтен хәтерләтә: «Урманда уҡ юнып, аласыҡта һаҙаҡ һуғып, тана-торпо, тәкә һуйып, ит ҡаҡлап, эркет ҡайнатып, ҡорот йәйеп, тире ыҫлап, турһыҡ, һаба, мәс тегеп, ҡаймаҡ яҙып, май таҫҡып, тон-көн ағытмай бейә һауып, турһыҡ, һаба тултырып ҡымыҙ йыйып, аҙыҡ-түлек, ат-тун, кейем-һалым таярлап, халыҡ яуға әҙерләнгән, ти» (55, 224).

Ата-бабаларҙың балыҡсылыҡ, игенселек хеҙмәте менән шөғөлләнеүен күрһәткән риүәйәттәр бар (55, 126, 142—-145, 264).

Шулай ҙа риүәйәттәр буйынса, башҡорт халҡының тормошонда малсылыҡтың айырыуса ҙур урын алып торғанлығы күренә. Иҫәпһеҙ-һанһыҙ, көтөү-көтөү мал аҫрау мотивын йыш осратырға була. Был мотив бигерәк тә юғары синыфтар көнкүрешен һүрәтләгән сюжеттар өсөн хас: «Түбәнге

Ғәбдрәшит ауылында... бынан бик күп йылдар элек Ғәлиәкбәр исемле бай йәшәгән. Уның байлығы шул ҡәҙәре булған: йылҡылары һыу эсергә төшһә, бер башы Ҡыҙыл йылғаһында, икенсеһе Сыуаш тауы битендә утлап йөрөгән. Ә инде һарыҡ-кәзәһе тау араһында ҡырмыҫҡа иләүендәй мыжғып йөрөгән» (55, 294).

Хәҙерге заман кешеһе өсөн бындай һүрәтләмәнең артыҡ ҡабартылған хәбәр һымаҡ ҡабул ителеүе лә ихтимал, әммә тарихи әҙәбиәткә мөрәжәғәт итеү риүәйәттең уйҙырманы түгел, ә ысынбарлыҡтағы факттарҙы фольклор жанрҙарына хас булған тасуирлау рәүеше менән яҡтыртҡанын күрһәтә. Аныҡлыҡ өсөн С. И. Руденконың «Башҡорттар» исемле китабында килтерелгән ҡайһы бер һандарҙы (ғалим уларҙы И. Г. Георги һәм П. И. Рычков яҙмаларынан алған) атап китеү ҙә етә: XVIII быуаттың урталарынан башлап башҡорттарҙың һәр ихтилалында унарлаған мең баш малдарын юғалтыуҙарына ҡарамаҫтан, XVIII быуаттың аҙағында хатта ябай ҡатлам кешеһенең дә 30—50 баш йылҡы малы, күптәренең —500 баш, ә байҙарының иһә —1000, 2000... һәм унан да күберәк йылҡыһы булған, һарыҡтарының һаны ла шуға еткән, хатта артып та киткән. XIX быуат уртаһында, игенселек хеҙмәтенең үҫешкән заманында, яҡынса ғына иҫәпләгәндә лә, башҡорттар ярты миллиондан ашыу ат, шул саҡлы һарыҡ, 300 башҡа яҡын эре мөгөҙлө мал аҫраған.
XIX быуаттың аҙаҡтарында ла әле Урал аръяғы башҡорттарының көтөүҙәрендә йөҙәрләгән баш мал йөрөгән (247, 104).

Уралда заводтар төҙөлөү, приискылар асылыу (XVIII б. башы) ерле халыҡтың тормош-көнкүрешенә ҙур йоғонто яһай. Башҡорттар завод эштәрендә, руда сығарыу, алтын йыйыу, юлдар һалыу һ. б. шуның кеүек хеҙмәт тармаҡтарында эшләп, хужалыҡ итеүҙең яңы ысулдарын үҙләштерә. Был темаға ҡараған риүәйәттәр араһында иғтибарҙы йәлеп иткән үҙәк бер йүнәлеш бар —ул завод, приискы хужаларының ябай эшселәр иҫәбенә байығыуы, ситтән килгән заводсыларҙың ерле халыҡты алдарға тырышыуы. «Ҡорто күп тә, балы юҡ» исемле риүәйәттә, мәҫәлән, ғүмер буйы солоҡсолоҡ менән шөғөлләнгән Ибраһимдың, Яков тигән түрәнең өгөтләүенә күнеп, Иҙелбаш заводына эшкә күсеүе

тураһында бәйән ҡылына. Тимер эшенең үтә ауыр булыуына ҡарамаҫтан, Ибраһим, түҙемлелек күрһәтеп, бирелеп эшләй. Әммә бер көн килеп, хеҙмәт хаҡына хужаһының быға ни бары бер ус баҡыр аҡса тоттороуы уны сығырынан-сығара: «Ҡортоғоҙ күп булһа ла, балығыҙ юҡ икән»,— тип, баҡырҙарҙы Яковтың аяҡ аҫтына ырғыта ла, ҡайтып китә. Эш ауырлығына түҙмәгәндән түгел, ә ғәҙелһеҙлекте, алдауҙы күтәрә алмағандан ошо ҡарарға килә Ибраһим. Фекерен асыҡларға теләгәндәй, һөйләүсе уның элекке һөнәренең еңел булмауы тураһында ла иҫкәртә: «Ул (Ибраһим) көнө буйы урмандан ҡайтмай. Ҡырағай бал ҡорттарына тубал оялар яһап, солоҡсолоҡ менән көн күрә икән. Һәр саҡ быны ҡорт саға. Бите-ҡулы аяуһыҙ шешенеп йөрөй. Шулай ҙа ул ауырһынмай. Түҙә. Кирәм менән ағас баштарына аҫ һымаҡ үрмәләп менеп китә лә балды ботлап-ботлап ҡайырып алып төшә»... (55, 332).

Завод, приискы хеҙмәтенә бәйле риүәйәттәр ер һатыу тураһындағы сюжеттарға яҡын. Приискылар төҙөүгә, завод эштәренә ҡарата фольклорҙа кире мөнәсәбәт мотивтары күренә икән —уның сәбәбе ерле халыҡтың әлдән-әле алдана килеүенән, промышленниктарҙың хәрәмләшеүе арҡаһында ыҙа сигеүенән («...ер таланыуҙан биҙрәп бөткән иң оло аҡһаҡалдар алтынға ҡағылыуға ҡаршы булғандар» — 55, 328).

Күп кенә риүәйәттәр һәр төрлө йола, ғөрөф-ғәҙәттәр тураһында мәғлүмәт һаҡлауҙары менән әһәмиәтле. Айырыуса туй йолаларына, ғаилә тормошона бәйле ғөрөф-ғәҙәттәр ҡыҙыҡлы. Риүәйәттәр буйынса, элек башҡорттарҙа экзогам никах формаһының өҫтөнлөк иткәне күренә: егеттең икенсе ырыуҙан ҡыҙ әйттереүе йә бик алыҫ ерҙән кәләш алыуы тураһындағы мәғлүмәттәр халыҡ хикәйәләрендә йыш телгә алына («Үткән ғүмер», «Ынйыҡай менән Юлдыҡай», «Ҡуңыр буға»... — 55, 259—260, 305—306, 320).

Ҡайһы бер риүәйәттәр «Бишек туйы», «Һырға туйы» кеүек боронғо йоланың башҡарылыу рәүешен һаҡлауҙары, атап әйткәндә, ваҡыт төшөнсәләрен биреүҙәре менән әһәмиәтле («Зөлхизә» — 55, 287—288). Ҡолаҡ тешләтеү, һырға туйы уҙғарыу ғәҙәттә бер ваҡытта (бер көндө) тыуған ир бала менән ҡыҙ балаға ҡарата атҡарылған. Хәҙер бындай йолалар юҡ, шуға күрә улар хаҡындағы фольклор әҫәр-

ҙәренең һәр мәғлүмәте үтә лә ҡәҙерле. «Зөлхизә» исемле риүәйәт менән тулыһынса танышыуҙы уҡыусының үҙенә ҡалдырып, был урында бер генә өҙөк килтереү менән сикләнәбеҙ:

«...Ишәй менән Ҡушай [Ишмөхәмәт менән Ҡушмөхәмәт] бисәләренең ҡырҡы тулғас [сабыйҙары ҡырҡ көнлөк бул-ғас], «бишек туйы» йыйып, Ҡушай ҡыҙына Зөлхизә, Ишәй улына Вәли тип исем ҡушҡандар.

Ишәй менән Ҡушай һаман, боронғоса дуҫ булып, һунарға йөрөй. Вәли менән Зөлхизә, ай-йыл һанап, һаман үҫә. Вәли атҡа менерлек була. Зөлхизә көйәнтә күтәрерлек булып китә. Ике ҡоҙа «һырға туйы» уҙғарып ташлаған. Балаларҙың береһен килен, икенсеһен кейәү тип йөрөтә башлағандар».

Яусылар ебәреү, мәһәр әйтеү, ҡалымдың күләмен билдәләү — быларҙың бөтәһе хаҡында ла тормош-көнкүреш риүәйәттәрендә ифрат сағыу тасуирлауҙар бар. Бына, мәҫәлән, туй хөрмәтенә йыйналған майҙан картинаһын һүрәтләүсе бер өҙөк:

«...Ҙур туй әҙерләнгән. Ике ырыуҙан да бик күп халыҡ йыйылған. Майҙан ҡороп ат саптырғандар. Батырҙар көрәштергәндәр. Йырсылар, сәсәндәр әйтешкән.

Ҡотан ауылы эргәһендә Көрәй менән Туйбаға исемендәге ике тау бар. Көрәй тауында көрәгә күтәргәндәр, шуға ла Көрәй (Көрәгә) аталған. Ә Туйбаға тауында туй баҡҡандар. Шуның өсөн Туйбаға аталып ҡалған.

Ошо туй ваҡытында «Ынйыҡай менән Юлдыҡай» тигән йыр сыҡҡан. Туйбаға менән Көрәй тауҙарына аҙаҡ та кешеләр сығып байрам итер булғандар» (55, 306).

«Уралбай», «Мәхүбә», «Сабира» («Еҙ үксә») риүәйәт һәм йыр-риүәйәттәрендәге мәғлүмәттәр ҙә алда һүрәтләнгән күренеште тулыландырыуҙары һәм, ғөмүмән, туйға бәйле йолаларҙы иҫкә алыуҙары менән бик ҡиммәтле: «Кем көрәштә еңә, ҡыҙ шуға була»; «Йола буйынса ҡыҙҙы индермәй тоталар. Тәңкә һорайҙар, бейергә ҡушалар» (55, 290 — 291); «...Вәғәҙә —иман тотҡаһы. Вәғәҙә билдәһе итеп, билбауымды бирәм. Кейәү булып килгәнеңдә билеңдә булһын» (55, 297); «Әгәр бирмәһәләр, ҡыҙҙы урлап алам» (55, 314).

Ә бына Күгәрсен районының Һәргәй ауылында яҙып алынған бер риүәйәттәге мәғлүмәт беҙгә билдәле булған сығанаҡтарҙа бөтөнләй осрағаны булманы: «Элек ҡыҙҙы алырға килгәндә, егет бер нисә иптәше (кейәү егеттәре) менән Һыбай килә торған булған. Кейәү килеүгә, ҡыҙ ҙа иптәштәре менән атҡа атланып тора. Егеттәр яҡынлашыу менән, ҡыҙ атына Һуғып, саптырып китә. Иптәш ҡыҙҙары ла унан ҡалышмай. Егет ҡыҙҙы ҡыуып етеп, йәренең (кәләшенең) башына таҫтар урарға тейеш була. Һәргәйҙән әҫтә, Ҡурғашлы менән Көмбәләкле тауы араҺындағы йылға тамағында уҙғарылған был йола» (55, 122).

Баймаҡ районының Таулыҡай ауылында ҡағыҙға теркәлгән бер риүәйәт шулай уҡ туй йолаҺының бер эпизодын Һаҡлауы менән әҺәмиәтле. «Башҡорт халҡында элек ҡот алып ҡасыу тигән йола булған, — тиелә унда. — Туй мәлендә егеттең туғандары ҡыҙ йортона барғанда, ҡыҙ яғынан булған ҡоҙалар ҡот алыу өсөн сабышалар. ҠайҺы ҡоҙа алдан барып етә, бүләк шуға була» (55, 122).

Бер төркөм халыҡ хикәйәләрендә («Тоҡан батыр», «Кинйәбай», «Аласабыр» — 55, 315—319) башҡорттарҙың байрам-йыйындары, ундағы ат сабыштырыу, көрәш картиналары тасуирлана. ШуныҺы, туй йолалары, байрам-йыйындар хаҡындағы риүәйәттәрҙең ҡайҺылары («Мәхүбә», «Уралбай», «Аласабыр») ваҡиғаларҙы киҫкен социаль, синфи мөнәсәбәттәр фонында яҡтырта. Бындай риүәйәттәрҙә ғәҙелҺеҙлек, байҙар, түрәләрҙең әшәке ҡылыҡтары, ярлыларҙың ауыр хәле Һ. б. шуның кеүек ижтимағи-көнкүреш проблемалары күтәрелә.

Тормош-көнкүреш риүәйәттәрен өйрәнгәндә, йәнә бер үҙенсәлек күҙгә ташлана —ул халыҡтың рухи донъяҺының киңлеге, киләсәккә яҡты өмөт бағлауы. Риүәйәттәрҙең ыңғай геройҙары — көслө рухлы кешеләр, улар күп осраҡта ҡурайсы ла, йырсы ла, сәсән дә («Ғилмияза», «Ҡарасәс», «Ашҡаҙар» Һ. б.). Риүәйәттәр буйынса, ҡурайҙың, ҡурайсының баҺаҺы шул тиклем юғары, хатта «Питербур батшалары» башҡорт ҡурайын таң ҡалып тыңлай, ҡурайсыға чин Һәм бүләктәр биреп, үҙ иленә хөрмәтләп ҡайтарып ебәрә («Йәйәүле Мәхмүт» — 55, 323—327). Бындай осраҡтарҙа йыр-моң Һәләтенә эйә булған талантлы шәхестәрҙе идеал-

лаштырыу менән бергә халыҡтың «яҡты батша» тураһындағы утопик хыялдары ла сағылып ҡала.

Ҡайһы бер хикәйәләрҙә хеҙмәт процестарына бәйле тыуған поэтик ижад үрнәктәре килтерелә, һирәгерәк осраған йыр, һамаҡ, бейеү өлгөләрен (ҡыуғынсылар йыры, тәритләү, диңгелдәү һамаҡтары) үҙендә туплауы менән айырыуса «Ҡарасәс» риүәйәте (55, 308—311) әһәмиәткә эйә. Мәҫәлән, батҡаҡҡа батып ҡалған бүрәнәләрҙе, туҡтап-туҡтап багор менән һөйрәп, һыуға төшөргәндә, һал ағыҙыусылар түбәндәге һүҙҙәр менән эштәрен ҡеүәтләгән, дәртләндереп ебәргән:

Айһайлүк, трайләйлүк тә, һоп.
Ҡарағай баралмай ҙа, һоп,
Баралмай тип ҡалдырмайыҡ, һоп,
һәйҙишеү, һәйҙишеү...
Ҡарағай баралмай ҙа, һо-о-о-п...
Баралмай тип ҡалдырмайҙар, һо-о-о-п!
Ҡарағай кандауай ҙа, һо-о-о-п!
Ҡарағас —ауыр ағас, һо-о-о-п!
Тартабыҙ шул баралмағас, һо-о-о-п!
Ҡарағас — сайырлы ағас, һо-о-о-п!

Эштән арып, ял иткәндә ҡыуғынсыларҙың күңел асыу рәүеше риүәйәттә тәритләү, диңгелдәү һамаҡтары, шаян һүҙ, уйын-көлкө үрнәктәре аша еткерелгән (55, 308—311).

Халыҡтың рухи донъяһын, эстетик ҡараштарын сағылдырыу йәһәтенән «Тархан ҡыҙы менән Йософ китабы» исемле риүәйәт тә ҙур иғтибарға лайыҡ. «Бөтә илде ҡыҙырып ырыуҙан ырыуға, ауылдан ауылға, йәйләүҙән йәйләүгә «Йософ менән Зөләйха» китабын яттан һөйләп йөрөгән Ырыҫбай мулланың «халыҡ араһында иң ҡәҙерле, иң һөйөклө ҡунаҡ булып дан алыуы» (55, 261—262) хаҡындағы мәғлүмәт үҙе генә лә бик күп нәмә тураһында һөйләй.

Шулай итеп, башҡорт риүәйәт һәм легендалары халыҡтың тарихын, тормош-көнкүрешен, эстетик ҡараштарын төрлө яҡлап һәм төрлө кимәлдә яҡтырталар. Тарихи-этнографик һәм художестволы сығанаҡ булараҡ, уларҙың ҡиммәте баһалап бөтөргөһөҙ.

## ЙОМҒАҠЛАУ

Конкрет материалды жанр теорияһы күҙлегенән байҡап сығыу телдә йөрөгән күп һанлы башҡорт халыҡ хикәйәләрен нигеҙҙә дүрт жанрға бүлеп өйрәнергә мөмкинлек бирҙе. Ул жанрҙар: риүәйәт, легенда, хөрәфәти хикәйә һәм хәтирә. Бынан тыш, жанр-ара бәйләнештәр нигеҙендә ялалған төрҙәр бар: йыр-легенда, йыр-риүәйәт һ. б.

Легенда һәм хөрәфәти хикәйәләрҙе, риүәйәт, хәтирәләрҙе, көләмәс һәм әкиәттәрҙән айырып, үҙ-ара яҡын жанрҙар төркөмөнә берләштереүсе төп сәбәп — функциялар берҙәмлеге. Тарих һөйләү, тормошта булған, айырым осраҡтарҙа хатта булмаған хәл-ваҡиғаларҙы ла булған хәл итеп һүрәтләргә ынтылыу —был жанрҙарҙың һәр ҡайһыһы өсөн дә хас күренеш. Тарихилыҡ төрлө әҫәрҙәрҙә төрлөсә. Халыҡ прозаһының әкиәт һәм көләмәстәр тибына ҡарамаған жанрҙары бер-береһенән асылда шул тарихилыҡтың «миҡдары», шулай уҡ хикәйәләү объектына һәм ысулдарына, йәғни һүрәтләүҙә фантастика менән реаллектең нисбәтенә ҡарап айырыла.

Бында тикшерелгән жанрҙарҙың бөтәһе өсөн дә төп доминант функция булып мәғлүмәт биреү функцияһы ҡала. Шул уҡ ваҡытта башҡорт легенда һәм риүәйәттәре эстетик вазифаны ла кинәнеп атҡара. Был һыҙат айырыуса йыр-риүәйәттәр һәм риүәйәт-легендалар өсөн хас.

Фольклор прозаһының жанрҙары — быуаттар төпкөлөндә үк формалаша башлап, төрлө тарихи шарттар эсендә үҫешкән үҙ аллы ижад йүнәлеше ул. Риүәйәт һәм легендаларҙың

барлыҡҡа килеүе кешелек йәмғиәтендә донъяны танып белеү ихтыяжының тыуыуы менән бәйләнгән. Теге йәки был күренештең, хәл-ваҡиғаның асылын, килеп сығыу сәбәбен аңларға һәм аңлатырға тырышыу, йәғни этиологик мотив,— халыҡ хикәйәләренең нигеҙ ташы. Хөрәфәти хикәйәләр иһә тәбиғи булмаған күренештәрҙе «нигеҙләү»гә, һәр төрлө ҡара ышаныуҙарҙы нығытыуға ҡорола.

Фольклорҙың ысынбарлыҡҡа булған мөнәсәбәте дәүер һәм жанрҙың үҙенсәлеге менән билдәләнә. Легенда, риүәйәт һ. б. хикәйәләрҙең тарихи ерлеген ике ҙур йүнәлештә — аң һәм ижтимағи тормош үҫеше күҙлегенән өйрәнеү ҡуйылған проблеманы системалы ҡараш рәүешендә яҡтыртыу мөмкинселеген аса.

Төрлө ышаныу, хөрәфәттәр нигеҙендә тыуған ауыҙ-тел ижады әҫәрҙәре — ифрат ҡатмарлы күренеш, уларҙағы ҡайһы бер образдар, идеялар бөгөнгө көнгә бик борондан, быуаттар төпкөлөнән килеп еткән. Башҡорт легендалары, риүәйәттәрендә һәм хөрәфәти хикәйәләрҙә мәжүсилек осорона ҡараған ышаныуҙар ҙа, ислам дине йоғонтоһонда тыуған ҡараштар ҙа сағылған, йыш ҡына бер үк әҫәрҙә уларҙың үҙ-ара һыйышып йәшәүен күҙәтергә мөмкин. Материалды тарихи-этнографик планда өйрәнеү, башҡа халыҡтарҙың ауыҙ-тел ижады һәм йолалары менән сағыштырыу боронғо ышаныуҙарға ҡоролған халыҡ хикәйәләренең нигеҙендә мифологик ҡараштар ятҡанлығын күрһәтә. Легенда һәм хөрәфәти хикәйәләрҙә сағылған мифологик ҡараштар үҙҙәре бер нисә тармаҡҡа айырыла: тотемизм, анимизм, демонология (һуңғыһы анимизмдың үҙенсәлекле бер йүнәлеше). Легенда һәм легендар риүәйәттәрҙә шулай уҡ тәбиғәт культына бәйле ҡараштар киң яҡтыртыла.

Легендаларҙа донъя халыҡтарының ижадына хас булған архаик ҡараштарҙың киң сағылыуы ата-бабаларыбыҙҙың рухи мәҙәниәте, тарихы дөйөм кешелек мәҙәниәте һәм тарихы ерлегендә барлыҡҡа килгән һәм формалашҡан тигән һығымтаға килтерә. Фольклор прозаһы әҫәрҙәрендә кеше аңының үҫә барыуы, шул айҡанлы боронғо ҡараштарҙың үҙгәреүе кеүек күренештәр ҙә тоҫмаллана. Бер үк ваҡытта фольклор-

ҙа тотороҡлолоҡ тенденцияһының көслөлөгөн дә билдәләргә кәрәк. Уныһы инде халыҡ ижады әҫәрҙәренең тормошта киң ҡулланылышлы булыуҙарынан (многофункциональность) килә.

Тарихи риүәйәттәр төркөмөн тарихи-генетик һәм «саф» тарихи характерҙағы әҫәрҙәр тәшкил итә.

Башҡорт ырыуҙары һәм ҡәбиләләренең тарихы, уларҙың башҡа халыҡтар менән этнокультур бәйләнештәре хаҡындағы сюжеттар үҙҙәренең ижтимағи әһәмиәтле эре мәсьәләләр күтәреүҙәре менән тарихи риүәйәттәргә бик яҡын торалар. Уларҙа һүрәтләнгән хәл-ваҡиғалар нигеҙҙә ысынбарлыҡта булғанса сағылдырыла, персонаждарҙы тасуирлауҙа ла мөғжизә мотивтары күҙәтелмәй. Әгәр мифологик легендаларҙа ырыу башлаусылар булып әүерелеү сифатына йә ғәҙәттән тыш ҡиәфәткә, көскә эйә булған образдар (бүре, аҡҡош, Алпамыша) сығыш яһаһа, тарихи-генеалогик риүәйәттәрҙә исемдәре халыҡ хәтерендә һаҡланған реаль шәхестәр (Мәмбәт, Сурабай һ. б.) күрһәтелә. Шуға ла быңдай типтағы этногенетик һәм этнонимик риүәйәттәрҙе тарихи риүәйәттәрҙең үҙенсәлекле боронғо бер ҡатламы тип иҫәпләргә була.

Саф тарихи риүәйәттәр (собственно исторические предания) төркөмөнә реаль нигеҙе асыҡ булған халыҡ хикәйәләре индерелә. Уларҙың һүрәтләү объекты булып тарихи ваҡиғалар һәм шул ваҡиғаларға бәйле булыуы менән танылған шәхестәр тора.

Башҡорт легендалары, хөрәфәти хикәйә һәм риүәйәттәре башҡа күп халыҡтарҙың, айырыуса төрки, монголдарҙың хикәйәләр ендәге мотив һәм сюжеттар менән ныҡ ауаздаш. Быңдай уртаҡлыҡтың сәбәптәре нигеҙҙә генетик һәм тарихи-типологик уртаҡлыҡ шарттарына ҡайтып ҡала, шул уҡ ваҡытта аралашыу һөҙөмтәһендә бер халыҡтан икенсе халыҡҡа күскән сюжет һәм мотивтар ҙа осрай.

Ҡыҫҡаһы, башҡорт халыҡ прозаһының тәбиғәттәре буйынса әкиәт һәм көләмәстәр тармағына инмәгән жанрҙарын система буларак өйрәнеү күп һанлы һәм шаҡтай ҡатмарлы материалға дөйөм байҡау яһауҙы талап итә. Тәбиғи, был бурысты үтәгәндә, беренсе нәүбәттә яҡтыртыла торған мәсь-

әләләр үҙәккә ҡуйылып, төп иғтибар шуларҙы асыҡлауға йүнәлтелә.

Яҡын киләсәктә ошо хеҙмәт нигеҙендә атҡарылырға тейеш эштәр, беҙҙең уйлауыбыҙса, түбәндәгеләр: хөрәфәти хикәйәләр буйынса үҙ аллы монография әҙерләү, уларҙың сюжет һәм мотивтары күрһәткесен төҙөү; дини легендаларҙы йыйыу һәм өйрәнеү эшен яйға һалыу; тормош-көнкүреш риүәйәттәрен киңерәк планда тикшереү.

Был бурыстарҙы тормошҡа ашырыу, һис шикһеҙ, халыҡтың хәтерен һаҡлау юлында йәнә бер әһәмиәтле аҙым булырға тейеш.

## РЕЗЮМЕ

Предания (риваяты), легенды, былинки (хурафати-хикая), а также устные рассказы о недалеком прошлом и современности (хатира) представляют целостную систему, в которой организующим эстетическим началом является исконная установка на достоверность и доминантная информативная функция.

Исследования показали, что изучаемые жанры очень близки друг другу и между ними нет строгой границы. Это обусловлено, в основном, двумя причинами: во-первых, долгим сохранением архаического жанрового синкретизма, и, во-вторых, тесным взаимодействием жанров в процессе исторического развития. Этими же причинами объясняется взаимодействие преданий, легенд и быличек с другими жанрами фольклора и образование межжанровых форм — сказок-легенд, песен-преданий, песен-легенд.

Произведения башкирской народной несказочной прозы представляют интерес как в познавательном, так и в эстетическом отношениях. Их связь с действительностью проявляется в историзме и мировоззренческой направленности. Мировоззренческий пласт произведений башкирской несказочной прозы представлен сюжетами мифологического характера, в которых нашли отражение отголоски тотемических, анимистических и демонологических представлений древних людей.

Впервые накопленный материал исследовался в сравнительном плане с иноязычным фольклором, вследствие чего были выявлены не только специфические, но и мотивы международной общности в содержании устной несказочной прозы и национального своеобразия в формах художествен-

ного выражения. Использование сравнительно-исторического метода изучения, довольно успешно апробированного в мировой фольклористике, сделало возможным расшифровку ряда архаических мотивов, которые в башкирских сюжетах оставались во многом загадочными, а порою — вовсе не тронутыми. Возникшие в глубокой древности как объяснительные повествования, предания и легенды прошли длительный путь развития, в процессе которого архаичные мотивы «обрастали» поздними напластованиями и потому очень важно было выявить в каждом отдельном произведении соотношение устойчивых и изменчивых элементов, чтобы определить историческую основу мотива, а затем выстроить однотипные явления в один ряд, иногда в виде мозаики, изучить их в системе. Наличие универсальных архаических мотивов и образов свидетельствует о том, что духовная культура предков башкир зародилась в глубокой древности и развивалась в русле общечеловеческой культуры.

Исторические предания, предания-легенды, отражающие события общественного значения в народном осмыслении, исследовались с учетом особенностей фольклорного историзма. Не лишенные творческого вымысла, они художественно отражают типические явления реальной жизни, и в силу этого степень достоверности в них особенная, обобщенная.

В составе исторических преданий выделяются историко-генеалогические (ранний тип) и собственно исторические предания. От собственно исторических историко-генеалогические предания отличаются характером вымысла, в ряде случаев наличием элементов фантастики. Отдельные мотивы их в известной степени перекликаются с мотивами мифологических легенд.

Собственно исторические предания (в том числе предания-легенды, песни-предания) тематически разделяются на две основные группы: предания о борьбе с внешними врагами и предания о борьбе за социальную свободу.

Многочисленны предания, в которых повествуется о событиях, связанных со старинным бытовым укладом и обычаями башкир. Характеры героев проявляются здесь в драматических обстоятельствах, обусловленных феодально-патриархальными отношениями.

Собранные воедино и приведенные в определенную систему, произведения башкирской народной несказочной прозы представляют как бы единое, крупноплановое полисемантическое произведение, при изучении которого проливается свет на самые глубинные корни истории народа.

Многие сведения, в том числе о широких этноисторических, этнокультурных связях башкир, сохранившихся в народных повествованиях, являются бесценными.

## SUMMARY

Traditions, legends, tales, as well as oral stories of the recent past and the present constitute an integral system, the organizing aesthe-tic guideline of which is the initial tenet of reli ability and the dominant informativity function.

The research has proved that the genres under investigation are very close to each other and there is no strict boundary between them. This is mainly due to two reasons: firstly, the long tradition of the archaic genre of syncretism, and, secondly, the close relationship of genres in the process of historical development. These same reasons explain the interaction of the traditions, legends and tales with other genres of folklore and emergence of inter-genre forms — tales-legends, tales-songs, tales-stories, songs-traditions, songs-legends.

Compositions of Bashlcort folk non-fabulous prose are of interest in their cognitive and aesthetic aspects. Their links with reality are manifested in historicism and ideological orientation. The ideological layer of the Bashkir non-fabulous prose works is presented by plots of mythological character, which reflect the echoes of totemic, animist and demonological beliefs of ancient people.

For the first time, a comparative method was applied to the accumulated material which was investigated in comparison with folklore of other languages; as a result there have been identified not only specific motifs but also the motifs of the international community in the contents of oral non-fabulous prose and national specificity in the forms of artistic expression. Using a comparative-historical method of analysis, rather successfully tested in the world folkloristics, has made possible the deciphering of a number of

archaic motifs, which in the Bashkort plots remained largely mysterious, and sometimes — by no means touched.

Having arisen in ancient times as explanatory narratives, tales and legends passed a long path of development, during which the archaic motifs «accumulated» later strata, and that's why it was very important to identify the ratio of stable and changeable elements in each particular composition to determine the historical basis of the motif, and then arrange the similar types of phenomena in a linear order, sometimes in the form of mosaics to study them as a system. The presence of universal archaic motifs and imagery indicates that the spiritual culture of the ancestors of the Bashkorts originated in antiquity and developed in the mainstream of human culture.

Historical tales, traditions-legends, reflecting the events of public importance in people's understanding, have been investigated taking into account peculiarities of folklore historicism. Not lacking in creative fiction, they artistically reflect typical real-life phenomena, and because of this the rate of confidence in them is specific and generalized.

Among the historical traditions are distinguished historical-genealogical (early type) and historical traditions proper. Historical-genealogical traditions differ from historical traditions proper in the nature of fiction, in some cases the presence of elements of fantasy. Individual motifs to some extent overlap with motifs of mythological legends.

Historical traditions proper (including tales-legends, songs-traditions) thematically fall into two main groups: traditions which tell about fighting against the foreign enemies and traditions which bring about the struggle for social freedom.

Numerous are legends in which it is narrated of the events connected with the old domestic lifestyle, customs and traditions of the Bashkorts. The protagonists of these legends display their character and individuality in dramatic circumstances of life as called forth by the existing feudal and patriarchal relationships.

Compositions of non-fabulous Bashkort folk prose, brought together and arranged in a definite system, present a single whole — a large-scale polysemantic entity, the study of which sheds light on the deepest roots of the history of the nation.

Much information, including that of broad ethno-historical, ethnic and cultural ties of the Bashkorts preserved in folk narratives, is invaluable.

## БИБЛИОГРАФИЯ

1. Абаев В. И. Скифо-европейские изоглоссы: На стыке Востока и Запада. М.: Наука, 1965. 168 с.

2. Абрамзон С. М. Фольклорные мотивы в киргизских преданиях генеалогического цикла // Фольклор и этнография: Связи фольклора с древними представлениями. Л.: Наука, 1977. С. 154—163.

3. Абрамзон С. М. Киргизы и их этногенетические и историко-культурные связи. JL: Наука, 1971.402 с.

4. Аверинцев С. С. Вода//Мифы народов мира. 2-е изд. М., 1991. Т. 1. С. 240.

5. Авижанская С. А., Бикбулатов Н. В., Кузеев Р. Г. Декоративно-прикладное искусство башкир. Уфа, 1964. 259 с.

6. Азбелев С. Н. Отношение предания, легенды и сказки к действительности (с точки зрения разграничения жанров)// Славянский фольклор и действительность. М., 1965. С. 5—25.

7. Азбелев С. Н. Проблемы международной систематизации преданий и легенд//Русский фольклор: Специфика фольклорных жанров. М., Л, 1966. Т. 10. С. 176-195.

8. Акманов И. Г. Башкирские восстания 1735—1736 гг. Уфа, 1977. 84 с.

9. Акцорин В. А. Исторические легенды и предания о контакте марийцев с предками коми//Вопросы марийского фольклора и искусства. Йошкар-Ола, 1980. Вып. 2. С. 16—22.

10. Акцорин В. А. О некоторых проблемах изучения поэтики легенд и преданий//Вопросы марийского фольклора и искусства. Йошкар-Ола, 1982. Вып. 3. С. 3—9.

11. Акцорин В. А. Марийские легенды и предания в свете исторической взаимосвязи народов Поволжья // Вопросы марийского

фольклора и искусства: Межнациональные связи марийского фольклора, литературы и искусства. Йошкар-Ола, 1984. Вып. 4. С. 5—13.

12. Алексеев Н. А. Традиционные религиозные верования якутов в XIX вв. Новосибирск, 1975. 199 с.

13. Алексеев Н. А. Ранние формы религии тюркоязычных народов Сибири. Новосибирск: Наука, Сиб. отд.-ние, 1980. 318 с.

14. Алимгулов А. Башкирские мифологические рассказы // Вестн. Оренбургского учебного округа. 1915. № 5. С. 210—213.

15. Аникин В. П. Возникновение жанров в фольклоре (к определению понятия жанра и его признаков)//Русский фольклор. М.; JL: Наука, 1966. Т. 10. С. 28—42.

16. Аникин В. П. Художественное творчество в жанрах несказочной прозы (к общей постановке проблемы)//Русский фольклор: Русская народная проза. JL: Наука, 1972. Т. 13. С. 6—19.

17. Анисимов А. Ф. Космологические представления народов Севера. М., Л., 1959. 106 с.

17 а. Антонов И.В. Исторический опыт башкир накануне добровольного вхождения в состав России // Россия и Башкортостан: история отношений, состояние и перспективы. Материалы межд. науч.-практ. конф., посвященной 450-летию добровольного вхождения Башкирии в состав России. Уфа: Гилем, 2007. С. 27—28.

18. Аралбаев К. А. Фольклорные мотивы в шежере Мамбетова рода//Фольклористика в Советской Башкирии. Уфа, 1974. С. 132—142.

19. Архаический ритуал в фольклорных и раннелитературных памятниках. М.: Наука, 1988. 331 с.

20. Архив Русского географического общества. Разряд 53.

21. Асфандияров А. 3. Участие башкир в войнах и походах России в период кантонного управления (1798—1865 гг.)//Из истории феодализма в Башкирии. Уфа, 1971. С. 75 —95.

22. Асфандияров А. 3. Прототипы образов трех башкирских исторических песен // Фольклор народов РСФСР. Уфа, 1981. С. 151—156.

23. Ахметшин Б. Г. Предания о башкирском восстании 1755 года//Народ и революция в литературе и устном творчестве. Уфа, 1967. С. 253-268.

24. Ахметшин Б. Г. Горняцкие легенды Башкирии//Эпические жанры устного народного творчества. Уфа, 1969. С. 19 —54.

25. Ахметшин Б. Г. Предания, легенды и устные рассказы горнозаводской Башкирии: автореф. дис. ... канд. филол. наук. Уфа, 1968. 25 с.

26. Ахметшин Б. Г. Легенды и предания о природе и давнем прошлом Башкирии//Материалы и исследования по фольклору Башкирии и Урала. Уфа, 1974. Вып. 1. С. 116—130.

27. Ахметшин Б. Г. Предания о Салавате Юлаеве // Материалы и исследования по фольклору Башкирии и Урала. Уфа. 1974. Вып. 1. С. 144-171.

28. Ахметшин Б. Г. Об этногенетических башкирских преданиях // Фольклор народов РСФСР. Уфа, 1976. С. 65 —72.

29. Ахметьянов Р. Г. Общая лексика духовной культуры народов Среднего Поволжья. М.: Наука, 1981. 144 с.

30. Baykara Tuncer. Bir turk kultur genjegi: Kizkulesi. VIII. Turk Tarih Kongresi II. Ankara. 1981. S. 962-968.

31. Баймырадов А. Туркмен фольклор прозасының тарихи эволюциясы. Ашгабат: Ылым, 1982. 163 с.

32. Балдаев С. П. Родословные предания и легенды бурят: Булагаты и эхириты. Улан-Удэ, .1970. Ч. 1.363 с.

